# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

## ХРЕСТОМАТИЯ

9

# БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ

## ХРЕСТОМАТИЯ

## 9

**Уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмалары өсөн**

КИТАП
ӨФӨ • 2017

УДК 373.167.1:82
ББК 83.3 (2Рос=Баш)я7
Б28

Автор-төҙөүселәр:
Ғ. С. Ҡунафин, Ғ. Б. Хөсәйенов

Б28 **Башҡорт әҙәбиәте. Хрестоматия :** уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн / [авт.-төҙ. : Ғ. С. Ҡунафин, Ғ. Б. Хөсәйенов]. – Өфө : Китап, 2017. — 260 бит.

ISBN 978-5-295-06756-3

**УДК 373.167.1:82**
**ББК 83.3 (2Рос=Баш)я7**

**ТП – 087/17**

**ISBN 978-5-295-06756-3**

© Ҡунафин Ғ. С., Хөсәйенов Ғ. Б., 2017
© Василов А. Э., дизайн, 2017
© БР-ҙың Зәйнәб Биишева ис. Башҡортостан «Китап» нәшриәте ДУП-ы, биҙәлеш, 2017

# Халыҡ ижады

## УРАЛ БАТЫР*

**Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ булғаны; өлкән улдары Шүлгәндең ата һүҙен тотмағаны, әсә һүҙе йоҡмағаны; Самрау ҡыҙы Һомайҙың аҡҡош булып тотолғаны, йәнә ҡотолғаны**

Борон-борон борондан
Кеше-маҙар килмәгән,
Килеп аяҡ баҫмаған,
(Ул тирәлә ҡоро ер
Барлығын һис кем белмәгән),
Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан
Булған, ти, бер урын.
Унда булған, ти, борон
Йәнбирҙе тигән ҡарт менән
Йәнбикә тигән бер ҡарсыҡ...
...Икәүҙән-икәү шул ерҙә
Башлап ғүмер иткән, ти,
Тора-бара ул икәү
Ике уллы булып киткән, ти, —
Шүлгән булған олоһо,
Урал булған кесеһе;
Бүтән кеше күрмәйенсә,
Ситкә китеп йөрөмәйенсә,
Тик йәшәгән дүртеһе;
Донъя-маҙар йыймаған,
Ҡашығаяҡ тотмаған,
Ҡаҙан аҫып, ут яғып,
Улар донъя көтмәгән.
Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,
Үлем барын белмәгән,
Барлыҡ нәмәгә үлем —
Үҙебеҙ, тип һанаған.
Һунарҙа ат менмәгән,
Ҡулға һаҙаҡ тотмаған;
Менәренә — арыҫланды,
Балығына — суртанды,
Ҡошҡа сөйгән шоңҡарҙы,
Ҡан һурырға һөлөктө
Үҙ иштәре яһаған.
Бик борондан булғанмы,
Йәнбирҙе үҙе ҡылғанмы,
Бара-тора шул ерҙә
Йола булып киткәнме,

* Ҡыҫҡартып алынды.

Йыртҡыс йәнлек тоттониһә,
Йәнлек иркәк[1] булдыниһә,
Ирле-бисәле икәүһе
Башын сәйнәп ашаған,
Шүлгән менән Уралға,
Эте менән арыҫланға,
Шоңҡар менән суртанға
Бүтән һанын ташлаған;
Йыртҡыс йәнлекте тотһа,
Йәнлек орғасы булһа,
Ирле-бисәле икәүһе
Йөрәгене һайлаған.
Үлән емшәр йән тотһа,
Ҡара һөлөк ҡаҙаған,
Һөлөгөнән һурҙырып,
Ҡанды һыуһын яһаған.
Бала үҫеп еткәнсе,
Үҙе йәнлек тотҡансы,
Баш-йөрәкте ашауҙан,
Һыуһынға ҡан эсеүҙән
Уландарын тыйғандар,
Һис ярамай, тигәндәр.

Ай үҫәһен көн үҫеп,
Балалары иҫ белеп,
Шүлгәненә ун ике,
Уралына ун тулып,
Берейе, арыҫлан менәм, тип,
Берейе, шоңҡар сөйәм, тип
Маҙаһына тейгәнгә,
Ике улына Йәнбирҙе
Төшөндөрөп биргән, ти.

Йәнбирҙе:

«Икегеҙ ҙә — балаһығыҙ,
Күҙебеҙҙең ҡараһығыҙ,
Тешәр сағығыҙ[2] үтмәгән,
Быуынығыҙ ҡатмаған;
Ҡулға суҡмар тоторға,
Ҡошҡа шоңҡар сөйөргә,
Әле арыҫлан менергә
Миҙгелегеҙ етмәгән, —
Бала сағығыҙ үтмәгән,
Мин ни бирһәм, ашағыҙ,
Мин ҡушҡанды эшләгеҙ;
Күнегергә һыбайға —
Ана, болан менегеҙ,
Сыйырсыҡтың тубына
Яғылбайҙы сөйөгөҙ;
Һыуһаһағыҙ уйында,
Ана, аҡ һыу эсегеҙ,
Ҡабырсаҡҡа тултырған
Ҡандан ауыҙ тартығыҙ».

Йәнбирҙе ҡарт улдарына
Йола өйрәтеп ҡуйған, ти.
Ҡан эсеүҙән балаларын
Тағы бер ҡат тыйған, ти.

Берҙән-бер көн ҡарт менән ҡарсыҡ ау ауларға киткәс, Шүлгән Уралға ҡабырсаҡты асып, берәр тамсы ҡан эсеп, тәмен белергә тәҡдим итә; Урал ҡаршы төшкәс, уны ҡурҡаҡлыҡта ғәйепләй. Ә үҙе ҡустыһынан «ерҙә үлем сәсеүсе» атам-әсәм һәм беҙ булабыҙ түгелме, шуға ла «яуыз үлем — кеше» икәнде белгән, унан ҡырылған бөтә тереклек

«Бергә килеп уҡталып,
Беҙҙең өҫкә ташланһа, —
Атайым беҙгә һөйләгән,
Беҙ әле һис күрмәгән
Үлем шунда беҙҙең дә
Күҙ алдына баҫмаҫмы?» —
Тигән һүҙҙе ишеткәс,

[1] *Иркәк йәнлек* — ата йәнлек.
[2] *Тешәр саҡ* — балаларҙың теше алмашынған ваҡыт.

ҡаушап ҡала. Шулай ҙа мин-минлегенә барып, ҡабырсаҡтан ҡанды һемереп эсә, Уралдан был хаҡта ата-әсәләренә әйтмәҫкә һүҙ ала. Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ һунарҙан ҡайтып, алып ҡайтҡан йәнлекте ботарлап ашарға ултырғас, уйға ҡалған Урал былай ти:

«Атай, бына был йәнде —
Ҡасып һинән, боҫһа ла,
Йән аямай ҡасһа ла,
Һис ҡотҡармай, тотҡанһың,
Муйынына бысаҡ һалғанһың.
Беҙҙе шулай берәй йән
Килеп эҙләп тапмаҫмы?
Беҙгә лә бысаҡ һалмаҫмы?»

Йәнбирҙе:

«Көнө бөтөр һәр йәнгә
Беҙ үлеме булабыҙ;
Ҡайҙа ғына ҡасһа ла,
Ҡая, шырға боҫһа ла,
Беҙ уларҙы табабыҙ,
Боғаҙына бысаҡ һалабыҙ.
Кешене тотоп ашарлыҡ,
Уға бысаҡ һалырлыҡ
Бында бер йән тыумаған,
Беҙҙе тотоп һуйырлыҡ
Үлем бында булмаған.
Борон беҙ тыуған ерҙә,
Атайҙар торған ерҙә
Үлем була торғайны.
Бик күбеһе йәштән үк
Ятып үлә торғайны.
Унда дейеү килгән һуң,
Күп кешене үлтереп,
Дейеү ашап киткән һуң;
Ерҙең өҫтөн һыу ҡаплап,
Ҡоро ере бөткән һуң;
Ҡасҡан-боҫҡан кешеләр
Ул тирәнән киткән һуң,
Үлемгә иш ҡалманы,
Эшләргә эш булманы.
Ҡасҡан кеше барҙыр, тип,
Күрәһең, уйлап торманы;
Эсәң менән беҙ ҡасып
Киткәнде ул күрмәне.
Бында кеше булмаған,
Берәү аяҡ баҫмаған,
Шуға үлем был ерҙе
Килеп эҙләп тапмаған.
Беҙ килгәндә, бында әле
Йәнлектәр ҙә аҙ ине,
Ере лә йүнле кипмәгән,
Ваҡ-ваҡ күллек, һаҙ ине».

Урал:

«Атай, үлемде эҙләһәң,
Уны табып буламы?
Тап килтереп тотҡан һуң,
Башына етеп буламы?»

Йәнбирҙе:

«Үлем тигән яуыз ул
Күҙгә һис тә күренмәй,
Килгәне һис беленмәй
Йәшәй торған януар ул.
Уға тик бер сара бар:
Дейеү батша ерендә
Әйтәләр бер шишмә бар,
Шунан һыу эсһә кеше
Һис тә үлмәй йәшәй, ти,
Үлемгә бирешмәй, ти», —

тип үлем тураһында һөйләгән дә, ашап бөткәс, ҡабырсаҡтарҙы килтереп, ҡан эсергә булған. Йәнбирҙе ҡарт, ҡабырсаҡтарҙың бүҫкәргәнен күреп, уландарынан ҡанды кем эскәнен ҡыҫып һорай башлаған. Шүлгән, берәү ҙә эсмәне, тип алдаған. Йәнбирҙе ҡарт, һуйыл таяҡ алып, балаларын алмаш-тилмәш сыптырырға тотонған. Урал шунда ла, ағаһын ҡыҙғанып, әйтмәй серәшһә лә, Шүлгән түҙмәгән, үҙ ғәйебен һөйләп биргән. Йәнбирҙе ҡарт тағы ла өҫтәп һуҡҡылай башлағас, Урал атаһының ҡулынан барып тотҡан да былай тигән, ти:

«Атаҡайым, уйласы,
Ҡулыңдағы һуйылға
Күҙ йүгертеп ҡарасы:
Был һуйыл да йәш булған,
Ҡабығынан әрселгән,
Осо-башы йәнселгән,
Бөкһәң, шартлап һынырҙай
Ҡыу таяҡҡа әүерелгән.
Һин киҫмәҫтән боронда,
Үҫкәнендә урманда,
Еләҫ елдә ялбырлап,
Япраҡтары елберләп
Торған ағас булғандыр;
Бал ҡорттары, ҡоштары
Алмаш-тилмәш ҡунғандыр;
Ҡоштар ҡунып һайраған,
Оя ҡороп йәшәгән —
Ботаҡтарын һайлаған
Аҫыл ағас булғандыр;
Имсәк имгән балалай,
Тамырҙарын тарбайтып,
Ер дымыны имгәндер.
Тамырынан аҡтарғас,
Ботағыны ботағас, —
Балғаң[1] булған ташыңдай,
Ҡошҡа сөйөр шоңҡарҙай,
Балыҡ тотор суртандай,
Ҡан һурыусы һөлөктәй,
Йәнлек аулар көсөктәй, —
Һуҡҡың булған түгелме?
Маңлай тиреһ һыпырып,
Күп йыл ғүмер уҙҙырып,
Ер өҫтөндә тапмаған,
Төҫөн күреп белмәгән,
Йөрәгең һис татымаған
Үлем тигән яуыздың, —
Тағы һуҡһаң баланды
Үҙ торлағың эсендә,
Балаларың өҫтөндә, —
Көсһөҙҙәргә көслөнән,
Балаларға атанан
Килгәнене күрергә
Әҙерләндең түгелме?
Бөгөн ағамды үлтерһәң,
Иртән мине үлтерһәң,
Яңғыҙ тороп ҡалған һуң,
Ҡартлыҡ баҫып алған һуң,
Бөк(ө)рәйеп, татарғап[2],
Арыҫланыңа менә алмай,
Һунарыңа сыға алмай,
Шоңҡарыңды сөйә алмай,
Уларға ем бирә алмай;
Арыҫланың да, көсөк тә,
Шоңҡарың да, һөлөк тә —
Барыһы асҡа тилмереп,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Ас зарыҡҡан арыҫланың

---

[1] *Балға* — боронғо таш сүкеш.
[2] *Татарғау* — ҡатып киберлек дәрәжәлә ҡартайыу.

Бәйҙә тороп ужарып[1],
Асыуынан уҡталып,
Билең бөгөп, үҙеңде
Ботоң-ботса ботарлап
Бырағытһа бер саҡта,
Үлем тигән яуызды
Ҡаршыларға торлаҡта,
Атай, тура килмәҫме?» —

тигән һүҙен ишеткәс, Йәнбирҙе ҡарт Шүлгәнде туҡмауҙан туҡтаған. «Үлемдең күҙгә күренмәй килеүе лә бар; шул үлем килгәндер, мине шул ҡоторталыр; шулай ҙа үлемде берәйһе күрмәй булмаҫ, йәнлек, ҡош-ҡортто йыйҙырып һорашырға кәрәк», — тип уйлаған да шуларҙы саҡырған, ти. Урал, йыйылған йәнлеккә, ҡош-ҡортҡа ҡарап, былай тигән, ти:

«Үлем тигән яуыздың
Төрөн һанап беләйек,
«Көслө көсһөҙҙө ейгән[2]»
Йоланы беҙ өҙәйек.
Арабыҙҙан, һанаһаҡ,
Һәр нөгәрҙе[3] ҡараһаҡ:
Ҡан да эсмәй, ит еймәй,
Берәүҙең йәшен ҡоймай, —
Ҡайһыһы тамыр ашап,
Ҡайһыһы үлән емшәп,
Һаман ғүмер иткәнен,
Йыртҡыстарға ем өсөн
Балаһын үрсеткәнен
Барығыҙ ҙа беләләр.
Уларға үлем ят түгел,
Ҡан һурған, ит ейгән —
Береһе лә дуҫ түгел.
Йыртҡыслыҡты бөтөрәйек,
Яңғыҙ ҡалған үлемде
Бергә эҙләп үлтерәйек», —
Тигән һүҙгә йыртҡыстар,
Уларға ҡушылып Шүлгән дә —
Барыһы ҡаршы килгән, ти,
Төрлө һүҙҙәр булған, ти.

Ҡоҙғон:

«Мин үлемде табыуҙан
Бер ҙә ҡурҡып тормайым,
Әммә тотоп биреүгә
Һис ҡасан да күнмәйем.
Ҡарт булһам да, был эштән
Мин бер үҙем баш тартам,
Тағы өҫтәп шуны әйтәм:
Көсө еткән көсһөҙгә
Һис һунарлыҡ ҡылмаһа;
Әсәнән тыуған берәү ҙә
Был донъяла үлмәһә;
Ер уттары[4], ағастар
Заңына буйһонмаһа;
Үҙ миҙгеле еткәндә,
Көҙгө ҡырау төшкәндә,
Йәшеллек һис бөтмәһә, —
Унан беҙгә ни файҙа?
Ҡуян һымаҡ, һәр йәнлек
Йылға ике-өс түлләһә;
Төндә йөрөп, йәшелдең
Барыһын да утлаһа;
Бүтән йәндәр ҡаңғырып,
Ашарына тапмаһа;
Өйөр-өйөр туп булып,
Ҡаҙ, өйрәге, аҡҡошо,
Шыбыр-шыбыр ҡойоноп,
Һыу өҫтәрен ҡаплаһа;

[1] *Ужарыу* — ажарланыу.
[2] *Ейеү* — ашау.
[3] *Нөгәр* — төбәк, урын.
[4] *Уттар* — үҫемлектәр.

Ғүмерем бушҡа уҙа, тип,
Ярым бушҡа туҙа, тип,
Һис бер йылға аҡмаһа;
Ерҙә шундай йола, тип,
Ҡойоноргар, эсерҙәр —
Беҙгә тынғы бирмәҫтәр,
Тип шишмәләр ҙә сыҡмаһа,
Ерҙәге һыу тонсоһа, —
Шул саҡта беҙ нишләрбеҙ?
Емде ҡайҙан эҙләрбеҙ?
Һыуҙы ҡайҙан эсербеҙ?
Башым һалып, яу асып,
Күп сағында талпынып,
Аслыҡ, тарлыҡ күрһәм дә,
Күп зарығып йөрөһәм дә,
Мин ҡан эсмәй, ит еймәй,
Үләкһәнең күҙ майын
Өс көндә бер соҡомай,
Һис донъяла тора алмам, —
Үлемде эҙләп табырға
Мин һүҙемде бирә алмам».

Һайыҫҡан:

«Үлемдән ҡурҡыр йән булһа,
Ҡотолорға юл эҙләр,
Түл йәйергә уйлаһа,
Илде гиҙеп яй[1] эҙләр».

Һайыҫҡан әйткән һүҙҙәрҙе
Юлбарыҫ та, ҡаплан да,
Бүре, бурһыҡ, арыҫлан да,
Типкес-өҙгөс ҡоштар ҙа,
Ҡарпыр балыҡ — суртан да —
Бөтә йыртҡыс хуп күргән.
Үлән емшәр хайуандар,
Торна, өйрәк, ҡыр ҡаҙҙар,
Туғаҙаҡ менән сел, ҡорҙар,
Бала сығарып, түл йәйеп,
Балалары ҡош булып,
Үҙ алдына осҡансы,
Йәй миҙгеле уҙғансы,
Шыр урманлыҡ эҙләргә,
Байманлыҡта[2] түлләргә,
Тип барыһын уйлаған.

Ҡоралайы, боланы,
Ҡыҙыл сикә ҡуяны,
Аяғына маһайып,
Бер ауыҙ һүҙ әйтмәгән.
Турғай, майсыл, сыйырсыҡ,
Сәүкә, ҡарға, буҙ сәпсек,
Мыр-маҙарҙы[3] ашағас,
Һүҙ әйтергә оялған.
Кәкүк тағы: «Оям юҡ,
Балам тигән ҡайғым юҡ;
Бала — бауырым, тигәндәр,
Бала өсөн көйгәндәр
Ни теләһә, — миңә шул», —
Тип уртаға һалған, ти.
Барыһы төрлөсә һөйләп,
Төрлөһө төрлө уйлап,
Һис берлеккә килмәйенсә,
Ҡырҡа бер уй әйтмәйенсә,
Тарҡалышта ҡалған, ти...

Ҡарт бынан һуң һиҫкәнгән;
Яңғыҙ ауға сығырға
Бынан ары шикләнгән...
...Берҙән-бер көн дүртәүләп
Былар ауға киткән, ти,
Күп ерҙәрҙе үткән, ти;
Күп йән алып, шатланып,
Ауҙан былар ҡайтҡан, ти.

---

[1] *Яй* — уңайлы, уйпат ер.
[2] *Байманлыҡ* — иркенлек, муллыҡ, байлыҡ.
[3] *Мыр-маҙар* — үлән ҡорто.

Аулап алған ҡоштарҙың
Араһында бер аҡҡош,
Аяҡтарын бәйләгәс,
Башын ҡырҡып ташларға
Бабай бысаҡ ҡайрағас,
Ҡанлы йәшен түккән, ти,
Үҙ зарыны әйткән, ти:

«Ил күрергә сыҡтым мин.
Ер ҡошонан түгелмен, —
Йәшәй торған илем бар,
Илһеҙ етем түгелмен.
Ерҙә һис кем тыумаҫтан,
Берәү аяҡ баҫмаҫтан,
Ҡуш булырға йәр эҙләп,
Ерҙә һис кем тапмағас,
Бүтән йәндән һайларға
Берәүһен тиң күрмәгәс, —
Күккә осоп йәр эҙләп,
Айҙы, Ҡояшты күҙләп,
Үҙенә йәр һайлаған,
Икеһен дә арбаған,
Бар ҡоштарға баш булған
Самрау атлы атам бар.
Ике балаһы булған,
Балаһы ла, үҙе лә
Һис ауырыу күрмәгән,
Әле лә батша атайым.
Ебәрегеҙ һеҙ мине,
Үҙ илемә ҡайтайым.
Мине бүлеп ашап та,
Сәйнәп-сәйнәп йотоп та,
Барыбер аш булмамын,
Һис аш булып һеңмәмен.
Йәншишмәнән һыу алып,
Әсәм тәнем йыуҙырған.
(Үҙ нурына һуғарған
Барығыҙға билдәле
Ҡояш тигән әсәм бар.)
Ебәрегеҙ һеҙ мине,
Атам барыбер табыр ул,
Килеп яулап алыр ул.
Самрау тигән батшаның
Һомай тигән ҡыҙымын;
Алтын сәсем тараһам,
Нурға илде күмәмен:
Көндөҙ ергә нур һибәм,
Кисен айға нур бирәм.
Ебәрегеҙ һеҙ мине,
Илемә мин ҡайтайым,
Йәншишмәнең һыу юлын
Һеҙгә әйтеп китәйем», —

тигән һүҙҙе ишеткәс, Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ улдарына кәңәш иткәндәр. Шүлгән Һомай ҡошто ашау яғында, Урал ҡотҡарыу яғында булып, ыҙғыш киткән. Урал ҡошто Шүлгәнгә бирмәй тартып алған да ситкәрәк илтеп ҡуйған. «Ҡайғырма, хәҙер тамаҡланам да үҙеңде ата-әсәңә илтеп тапшырам!» — тип, аталары янына килеп ултырған. Былар ашарға ултырғас, ҡош һау ҡанатын һелккән, — өс ҡауырһыны төшкән; шуларҙы һынған ҡанатынан сыҡҡан ҡанға буяп, ергә ташлаған икән — өс аҡҡош килеп, ҡыҙҙы күтәреп алып киткән. Йәнбирҙе ҡарттар Йәншишмәнең юлын һораша алмай ҡалыуҙарына үкенгән.

Ҡарт шунда уҡ Шүлгән менән Уралға ҡоштар ҡарап осҡан яҡҡа табан күҙ яҙмай китергә, арттарынан күҙәтеп барып, Йәншишмәнең урынын табырға, әгәр юлда

үлем осраһа, башын ҡырҡып алып ҡайтырға ҡушҡан. Ике улын ике арыҫланға мендереп оҙатҡан, ти.

**Уралдың Ҡатил батшаны ҡыйратып дан алғаны, халыҡты ирекккә сығарғаны**

Урал, Шүлгән икәүләп,
Көн-төнөн, ай-йыл һанап,
Тау артылып, һыу кисеп,
Ҡара урмандар үтеп,
Һаман алға киткән, ти;
Бара торғас, бер заман
Бер йылғаның ситендә,
Бер ҙур ағас төбөндә,
Ҙур таяғы ҡулында
Аҡ һаҡаллы бер ҡартҡа
Былар барып еткән, ти,
Барып сәләм биргән, ти,
Ҡарт та ҡаршы алған, ти,
Юл башыны быларҙың
Ҡарт һорашып белгән, ти.
Үҙ уйҙарын былар ҙа
Ҡартҡа һөйләп биргән, ти.
Ҡарт уйланып торған да,
Һаҡалыны һыпырып,
Быларға күҙ йөрөтөп,
Ике юлды күрһәтеп,
Былай тиеп әйткән, ти:
«Бына һеҙгә ике юл:
Һулға китһәң, юл буйы —
Уйын-көлкө төн буйы,
Ҡайғы-этлек күрмәйенсә,
Барлығын да белмәйенсә,
Рәхәт йәшәй байманда:
Бүре-һарыҡ яланда,
Төлкө-тауыҡ урманда
Бергә йәшәп, дуҫ булып,
Самрау ҡошҡа баш эйеп,
Ҡан да эсмәй, ит еймәй,
Һис үлемгә юл ҡуймай
Йәшәп килгән бер ил бар;
Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ
Ҡыла торған йола бар.

Уңға китһәң, юл буйы —
Илау-һыҡтау йыл буйы:
Яуызлыҡта дан алған,
Батшаһынан, башҡаһынан
Ҡайғы, этлек күреүсе,
Ҡанлы йәшен түгеүсе
Ҡатил батша иле бар;
Тау-тау кеше һөйәге,
Ҡанға батҡан ере бар».

Ҡарттан быны ишеткәс,
Юлдар серене белешкәс,
Урал, Шүлгән икәүһе
Шунан шыбаға тотошҡан,
Юл бүлергә уйлашҡан,
Үҙ араһы һөйләшкән:
Һулға китеү — Уралға,
Уңға китеү — Шүлгәнгә
Шыбағалы юл булған.
Шүлгән быға күнмәгән,
Мин уҙаман әле, тип,
Мин барамын һулға, тип,
Үҙенә һулды һайлаған,
Үҙ тигәнсә даулаған;
Урал күнгән уң яҡҡа,
Шүлгән киткән һул яҡҡа.
Урал уңға киткән һуң,
Оҙон юлға төшкән һуң,
Күп һыуҙарҙы кискән, ти,
Күп тауҙарҙы ашҡан, ти;
Бара торғас, бер тауҙың
Итәгенә еткән, ти.

Бүре талап, өҙгөләп,
Һырҙай ҡанға туҙғандай —
Телгеләнгән арҡаһы,
Айырылған елкәһе;
Сүплек типкән тауыҡтай,
Ҡул-аяғы ярылған;
Тамыр ашап, ер ҡаҙып,
Ауыҙ-бите ҡарайған;
Ҡырау һуҡҡан үләндәй,
Йөҙө-төҫө һарғайған;
Һупалап юнған ағастай,
Балтыр ите һулыған;
Бире уңалған[1] ағастай,
Елек башы сурайған
Бер ҡарсыҡҡа һырышҡан;
Көнгә янған тәндәрен,
Шырт ҡаплаған сәстәрен,
Һупалап юнған ағастай,
Балтыр ите, беләген,
Ауҙа туйған ҡыйғырҙай,
Кәпәйеп торған күкрәген,
Күрән аша йымылдап
Торған күлдәй күҙҙәрен.
Бал ҡортондай ыҡтымат[2]
Нескә һылыу билдәрен, —
Оялыпмы, ҡурҡыпмы,
Ҡарсыҡҡа һырышып
маташҡан
Бер һылыу ҡыҙыҡайға
Урал барып тап булған.
Урал яҡын барған, ти,
Ҡурҡмағыҙ, тип әйткән, ти:
«Мин киләмен йыраҡтан,
Үҙем тыуған торлаҡтан,
Бала инем киткәндә,
Күп илдәрҙе үткәндә;
Мин кешегә теймәймен,
Уның ҡанын ҡоймаймын;
Үлем тигән яуызды
Үлтерергә уйлаймын;
Әйҙә, яҡын килегеҙ,
Ил хәлдәрен һөйләгеҙ», —
Тигәс, былар йылмайған,
Урынынан ҡуҙғалған.

Туҙған сәстәрен әбей
Ҡолағына ҡыҫтырып,
Урынынан ҡуҙғалып,
Бер аҙ күҙен ҙурайтып,
Аҙыраҡ буйын турайтып,
Былай тиеп әйткән, ти:
«Йыраҡ илдән икәнһең,
Изге уйҙа килгәнһең;
Ай, егетем, белһәң һин,
Беҙҙең илдә булһаң һин,
Ҡатил батша эшләгән
Эштәрене күрһәң һин;
Ауырыу-һыҙлау күрмәйенсә,
Үлем башҡа килмәйенсә,
Ҡатын-ҡыҙҙы, ир-атты,
Айырмаҫтан йәш-картты,
Ҡул-аяғын бәйләтеп,
Арыуҙарын һайлатып,
Йыл да бер ҡат йыйҙыра,
Һарайына алдыра.
Ҡыҙы һайлай егетен,
Үҙе һайлай ҡыҙ-ҡыркын,
Ҡалғандарын тағы ла
Ярандары ҡарайҙар,
Үҙҙәренә һайлайҙар;
Бүтәндәрен аямай,
Ҡанлы йәшкә ҡарамай,
Тереләтә, һау көйгә
Ҡыҙын күлгә һалдыра,
Ирен утҡа яндыра;

[1] *Бире уңалған* — һынған (биртенгән) ере уңалған.
[2] *Ыҡтымат* — ыҡсым.

Атаһы өсөн, үҙе өсөн,
Ярандары даны өсөн,
Үҙе тыуған көнө өсөн,
Йыл да бер ҡат Тәңре өсөн
Ҡанлы ҡорбан уҙҙыра.
Бына мин дә ун бала
Күргән әсә донъяла.
Дүртеһен һайлап алдылар,
Бишеһен һыуға һалдылар,
Ҡартым, йөрәге һыҙлағас,
Туғыҙ бала юғалғас,
Ҡарап тороп түҙмәне,
Нишләрене һиҙмәне:
Йән асыуҙан уҡталып,
Балаларын ҡыҙғанып,
Бер яранға ынтылды, —
Бахырҡайым шул көндө,
Күҙ алдында үкһетеп,
Тереләй ергә күмелде.

Кинйә балам ҡалғайны,
Бер яраны килгәйне,
Алам үҙен, тигәйне;
Бала бауыр булғанға,
Алып ҡастым урманға.
Миндәй балалы әсә,
Ир-егеттәр күп бында,
Барыһы ла ҡан илап
Йөрөй, ҡасып урманда.
Егет, изге икәнһең,
Яҡшы уйҙа килгәнһең,
Ары барма, ҡайт кире,
Ҡанлы ергә килгәнһең,
Яуыз илгә килгәнһең».

Урал:

«Һыуҙар кисеп, тау ашып,
Күп йыл буйы килгәнмен,
Күп юлдарҙы уҙғанмын;
Күҙ йәшергән үлемде
Эҙләп бында тапмаһам,
Башын сабып өҙмәһәм,
Әйткәнемә етмәһәм,
Уны ерҙән йыймаһам,
Урал булып йөрөмәмен!» —
Тигән һүҙен әйткән дә,
Һау булығыҙ, тигән дә,
Арыҫланына менгән дә,
Ҡатил батша йортона
Урал ҡарап киткән, ти.
Бер нисә көн үткән, ти,
Шундай ергә еткән, ти:
Бер әсәнән тыуғандай,
Барыһы ла шәп-шәрә
Төркөм халыҡ йыйылған,
Аллы-артлы теҙелгән,
Ирҙәр, ҡыҙҙар, айырылып,
Урам-урам ҡуйылған.
Ярандары төрткөләп,
Тигеҙһеҙен тигеҙләп,
Ҡамсылап та һуҡҡылап
Йөрөһә лә, һүҙ әйтмәй,
Тел дә ҡыбырлата алмай
Торған халыҡҡа барған,
Майҙанға был күҙ һалған.
Был төркөмдән ситтәрәк,
Ун биш аҙым ҡырҙараҡ,
Күҙен-башын шәмәртеп,
Йөрәктәрен һыҡтатып,
Балалары ҡурҡышып,
Ымлап ҡына һөйләшеп,
Ҡайғырышып, илашып
Торған ата-әсәләр
Янына барып туҡтаған,
Хәл-әхүәлен һораған,
Үҙ телəген һөйләгән.
Урал һүҙен барыһы
Йотлоғошоп тыңлаған,
Араһынан бер ҡарты
Ошолай тип һөйләгән:

«Егет, һинең төҫ-башың,
Аптырашлы ҡарашың,
Арыҫлан менеп килешең
Сит булырҙай күренә.
Беҙҙең илдә батша бар,
Яранынан түрә бар;
Бына был халыҡ эсендә
Төрлө ырыуҙан кеше бар.
Һәр йыл батша тыуған көн
Ата-әсәһе хаҡы өсөн,
Батша тыуғас, һыу алып,
Йыуған ҡойоһо өсөн
Ҡорбан бирер йола бар.
Батшаның тыу биҙәге[1] —
Ҡара ҡоҙғон ҡошо бар,
Шул ҡоштарҙы йыл һайын
Һыйлай торған көнө бар.
Ана, егет, күрәмһең,
Ул ҡоштарҙы беләмһең,
Килеп тауға ҡунғандар,
Ем булырын белгәндәр.
Ҡойоға ҡыҙҙар һалған һуң,
Ҡыҙҙар шунда үлгән һуң,
Барыһын алып ҡойонан,
Ҡоҙғондарға ташлайҙар,
Улар шунда ашайҙар.
Бынау бәйле егеттәр
Һәр ырыуҙан килгәндәр, —
Батша ҡыҙы йыл һайын
Тәүҙә һайлай берәүһен;
Унан ҡала батша үҙе
Ҡолдар һайлай һарайға;
Унан тороп ҡалғаны —
Тәңре өсөн ҡорбанға», —
Тип һөйләп тә бөтмәгән,

батша ҡыҙы, дүрт ҡоло күтәргән алтын тәхеттә ултырған килеш майҙанға килеп, унда торған егеттәр араһынан үҙенә һөйәркә ҡол һайлай башлаған. Уралға күҙ һалып, ярандарына уны һарайға алып барырға ҡушҡан. Урал иһә ярандар һүҙен тыңламаған, батша кейәүе булырға күнмәгән. Шул сағында:

Дүрт батырын эйәртеп,
Ҡолдан тәхет күтәртеп;
Бураланған дөйәләй,
Ҡанһыраған айыуҙай,
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Күҙ ҡабағын тойҙороп,
Ужар сәсеп, мат ҡурып[2];
Ҡабан сусҡа елкәле,
Филдәй йыуан балтырлы,
Ҡымыҙ тулған һабалай,
Имәнес йыуан ҡорһаҡлы,
Ужарынан халыҡтың
Башын ергә эйҙереп,
Ҡатил батша килгән, ти,
Барыһын да аралап,
Ир-ҡол һайлап үткән, ти.
Быныһы һарайға барыр, тип,
Быныһы ҡорбанға булыр, тип,
Ҡол һайлауын бөткән, ти,
Ҡыҙ һайлауға күскән, ти.
Ҡыҙҙар һайлап йөрөгәндә,
Бер һылыуға еткәндә,
Бер яранын саҡыртып:
«Тешен ҡара», — тигән, ти.
Алһыу йөҙөн ҡаплаған
Ҡулын ҡыҙҙың алған, ти;
Һарайға был ярар, тип,
Бүтәнен үҙегеҙ ҡараң, тип,

[1] *Тыу биҙәге* — «герб» мәғәнәһендә.
[2] *Мат ҡурыу* — үлем ҡурҡынысы һалыу.

Арыуҙарын һайлағыҙ,
Кәрәгенсә алығыҙ,
Тиеп батша әйткән, ти,
Ярандарға ҡушҡан, ти.
Ҡалғандары әсәмдең,
Мине йыуған ҡойомдоң
Ҡорбанына ҡалыр, тип
Һуңғы һүҙен әйткән, ти.
Асыуланып, шул саҡта
Ҡыҙы килеп еткән, ти,
Урал янына үткән, ти,
Үпкә һүҙен әйткән, ти:
«Егет, һине һайланым,
Һарайыма барманың,
Алма биреп ымланым,
Мине тиңгә алманың;
Кире ҡаҡтың һүҙемде,
Бөтә ҡолдар алдында
Ҡара иттең йөҙөмдө,
Кәм-хур иттең үҙемде», —
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Батша төшкән тәхеттән:
«Ҡайһы ырыу егеттән
Минең ҡыҙым хурланған?» —
Тип Уралға киткән, ти.
Төкөрөк сәсеп ауыҙҙан
Һүҙен һөйләп киткән, ти:
«Әй, егет, һин затымды,
Ҡатил батша атымды
Кеше түгел, был илдә —
Мин биләгән һәр ерҙә —
Ҡошо-ҡорто, йәнлеге
Ишетеп тә, күреп тә,
Гүрендәге үлек тә
Аңлағанын беләһең!
Ҡыҙым әйткәс, бармайынса,
Нимә уйлап тораһың?
Ниңә йолам боҙаһың,
Бармай ваҡыт һуҙаһың?»

Урал:

«Батша тигән бәндәне,
Кеше һуйыр йоланы
Ишетеп тә, күреп тә,
Нисә йылдар йөрөп тә,
Һис бер ерҙә күрмәнем,
Барлығын да белмәнем.
Мин ят йола һөймәйем,
Үлем тигән яуызды
Үлтерергә эҙләйем.
Йоланан да ҡурҡмайым,
Үлемдән дә өркмәйем,
Кеше түгел, ҡошто ла,
Үлем килә ҡалдыниһә,
Килеп ҡулын һалдыниһә,
Уны биреп үлемгә,
Ҡул ҡаушырып тормамын!
Бына ҡарап торайым,
Бар йолаңды күрәйем,
Аҙаҡ сиктә үҙ уйым
Һиңә әйтеп бирәйем», —
Тигән һүҙен ишеткәс,
Уралдың төптө сит кеше
Икәнлегене беленгәс,
Ярандар ҙа батырҙар,
Батша яҡлы ҡарт-ҡоролар
Батша ҡыҙын Уралдан,
Уға ҡыҙҙы биреүҙән,
Уны кейәү ҡылыуҙан
Барыһы ла көнләшкән.
Батша быға шашҡан, ти:
«Быңдай тинтәк һайлама,
Күҙең юҡҡа талдырып,
Юҡ кешегә ҡарама,
Ҡайтсы, ҡыҙым, ҡайт, әйҙә,
Һарайыңа ҡайт әйҙә, —
Тип ҡыҙына әйткән, ти. —
Ҡорбандарҙы тотмағыҙ,
Ҡыҙын һыуға һалығыҙ,
Ирен утҡа атығыҙ.

Был егетте, бығаулап,
Минең янға оҙатығыҙ», — тип
Дүрт батырға ҡушҡан, ти.
Үҙе, тәхеткә ултырып,
Башҡаларҙы көткән, ти.
Ярандары ҡыҙҙарҙы,
Ҡулы бәйле ирҙәрҙе, —
Ҡыҙын һыуға ташларға,
Ирен утҡа ташларға
Ҡуҙғалыша башлағас,
Халыҡ сыр-сыу илашҡас,
Урал ырғып сыҡҡан, ти,
Ошо һүҙҙе әйткән, ти:
«Мин күренмәҫ үлемде
Юҡ итергә сыҡҡанмын;
Ҡан ҡойоусы батшанан,
Кеше ашар дейеүҙән
Бар кешене ҡотҡарыу,
Йәншишмәнән һыу алып,
Үлгәндәрҙе терелтеү
Өсөн тыуған батырмын.
Халыҡ илап торғанын
Күҙ алдында күргәндә,
Йәнде алыр яуыз үлем
Кешегә ҡулын һалғанда,
Ирмен тигән ир-батыр
Шып-шым ҡарап торормо?
Яуыздарға юл ҡуйып,
Батыр ҡурҡып ҡалырмы?
Кит, ярандар, артабан,
Төш, ҙур батша, арбанан,
Ҡолдар ҡулын сисегеҙ,
Ҡыҙҙар ҡулын сисегеҙ!»
Батша, быны ишеткәс,
Тәне йөнтәҫ айыуҙай,
Үҙҙәре ҙур дейеүҙәй

дүрт батырына, һарайын күтәргән үгеҙен килтереп, Уралға «үлемде күрһәтергә», уны юҡ итергә ҡуша. Был хәлдән халыҡ ҡурҡып, баҙап ҡала, хатта батшаның тәкәббер ҡыҙы ла унан кейәү итеп һайланған егетен «юҡҡа әрәм итмәүен» ялбарып һорай башлай. Әммә яуыз батша «ҡанлы йәшен түкһә лә, ҡыҙы һүҙен алмаған». Шунан һуң инде:

Ерҙе тырнап, үкереп,
Шылағайҙарын ағыҙып,
Тауҙай үгеҙ килгән, ти.
Урал алдына килеп,
Баҫып ҡарап торған да,
Муйынын аҙыраҡ борған да:
«Егет, ергә атмамын,
Һине юғалтып ятмамын:
Сереп, туҙан булғансы,
Елгә осоп туҙғансы,
Мөгөҙөмдә ҡаҡлармын,
Һине шулай һаҡлармын!» —
Тип Уралға әйткән, ти.
«Мин дә әрәм итергә,
Үгеҙ, һине тырышмам,
Яфаланып, көс түгеп,
Һинең менән сайҡашмам.
Донъяла һин кешенән
Көслө юғын танырһың, —
Үҙең түгел, тоҡомоң менән
Кешегә ҡол булырһың!» —
Тигән һүҙгә был үгеҙ
Асыуланып ынтылған,
Мөгөҙөнә алырға
Уралға ул уҡталған.
Урал батыр үгеҙҙе
Мөгөҙөнән алған, ти.
Тырышҡан, ти, үгеҙ ҙә,
Ышанһа ла мөгөҙгә,
Ысҡыналмай Уралдан,
Тубығынан батҡан, ти:

Көсөргәнеп тырышҡас,
Ауыҙынан үгеҙҙең
Ҡап-ҡара ҡан аҡҡан, ти:
Өҫкө теше төшкән, ти,
Үгеҙ хәлһеҙләнгән, ти,
Сәсәп, әлһерәгән, ти.
Быны күреп Ҡатил да,
Тоғро ярандары ла
Аптырауға төшкән, ти.
Урал һүҙенән китмәгән —
Үгеҙҙе әрәм итмәгән:
Шаҡарып ике мөгөҙҙө,
Батҡан ерҙән үгеҙҙе
Күтәреп алып ҡуйған, ти.
Үгеҙҙең дүрт тояғы,
Урталайға ярылып,
Араһына ҡом тулып,
Һырҙай ҡанға туҙған, ти.

Урал:

«Ҡулым тейгән мөгөҙөң
Кәкрәйгән көйөнсә,
Тешең төшкән ауыҙың
Өҫкө тешең үҫмәйсә,
Айырылған тояғың
Һис тә берекмәйенсә,
Үҙең түгел, балаң да
Мәңге ҡалыр шул көйсә,
Кеше көсөн күрҙең һин,
Хәлһеҙлегең белдең һин,
Кешегә мөгөҙ сайҡама,
Еңермен тип, айҡанма!»

Ҡатил:

«Бер табандан уҡтал!» — тип
Дүрт батырға ымлаған.

Батырҙары килгән, ти.
«Йәнең сыҡһа ҡулымда,
Тәнең ҡайҙа ташлайым?
Сойорғотҡансы үлмәһәң,
Ҡайһы илгә сөйәйем?» —
Тип бер батыр Уралға
Алып[1] һүҙен әйткән, ти.
Урал бынан ҡурҡмаған,
Дүрт батырға ҡаршы тороп,
Алға табан атлаған.

Урал:

«Дүртегеҙ ҙә килегеҙ,
Үлем эҙләп йөрөгән
Батыр көсөн белегеҙ;
Ҡулығыҙҙа йән бирһәм,
Арыҫланыма бирегеҙ;
Көсөгөҙ етһә ташларға,
Йәншишмәгә сөйөгөҙ.
Инде һеҙ ҙә әйтегеҙ:
Минең ҡулға төшһәгеҙ,
Күбәләктәй осһағыҙ,
Ҡайҙа ҡарап сөйәйем?
Дейеүҙәрҙе ҡыйратып,
Йәншишмәнән һыу алып,
Кире һеҙгә килгәндә,
Һеҙҙе эҙләп йөрөгәндә,
Он-талҡандай итегеҙҙе,
Күбәләктәй йөнегеҙҙе
Ҡайһы ерҙән эҙләйем?» —
Тигәс, батыр көлгән, ти:
«Көсөң етһә атырға,
Һыртты ергә һалырға,
Батша менән ярандарҙың
Алдына ҡарай ташларһың», —
Тип мыҫҡыллап ҡуйған, ти.
Дүрте берҙән, уҡталып,
Йәбешкән, ти, батырға.

[1] *Алып* — батыр.

Урал, тотоп береһен,
Олаҡтырған батшаға,
Ҡалған өсөһөн бер юлы —
Ярандары алдына.
Ер һелкенгәндәй булған,
Ярандар ҙа, батша ла,
Олаҡтырған батыр ҙа
Он-талҡанға ҡалған, ти,
Күҙҙән ғәйеп булған, ти.
Ҡан илаған әсәләр,
Һыҡтап торған аталар,
Ҡулы бәйле балалар —
Барыһы ла күргән, ти,
Ябырылып Уралдың
Барыһы янына килгән, ти.
«Тәңре бирмәҫ ярҙамды
Беҙгә, егет, атҡарҙың,
Ил ҡаплаған яуыздың
Утлы яуын аҡтарҙың,
Инде, егет, нишләйек,
Ниндәй бүләк бирәйек?
Ни тип әйтеп ҙурлайыҡ?»

«Һис бер ҙурлыҡ кәрәкмәй;
Ил батыры шул булыр —
Кеше һөйөр ир булыр.
Һеҙҙең шатлыҡ — минеке.
Минең шатлыҡ — һеҙҙеке.
Илдең барын йыяйыҡ,
Күмәкләп туй ҡылайыҡ,
Арағыҙҙан берәүҙе
Башлыҡ итеп ҡуяйыҡ...»

**Уралдың Һомайға әйткәне, Самрау батшаның ҡыҙы Һомайҙы, Аҡбуҙатын, булат ҡылысын Уралға бирергә риза булғаны; Уралдың Шүлгән менән осрашҡаны, ағаһының яуыз уйлы кеше булып сыҡҡаны; Һомай йыйған майҙанда Шүлгәндең хур булғаны, Уралдың халыҡты хайран ҡылғаны**

Урал:

«Мин әле бик йәш саҡта,
Атам һине атҡанда,
Барыбыҙ ҙа, һунар тип,
Һине һырып алғанда,
Муйыныңа ырмау һалғанда, —
Йәнең алҡымыңа килгәндә,
Ысынлап та белепме,
Йән асыуҙан ҡурҡыпмы
Һин телеңә килгәйнең,
Ҡотолорға үлемдән
Йәншишмә бар, тигәйнең,
Һинән шуны ишеткәс,
Үлемде тапһаҡ, тоторға,
Илдән башын юйырға,
Шишмәнән һыу алырға,
Мәңге йәшәһен донъя, тип,
Кеше кинәнһен көн дә, тип,
Илгә һыуын бирергә,
Тигән уйҙа киткәйнек,
Икәү юлға сыҡҡайныҡ,
Күп ер китеп, сер белгәс,
Юлды икәү бүлгәйнек,
Юл буйында ни барын
Һорашып та белгәйнек.
Ағам китте һул яҡҡа,
Мин тайпылып уң яҡҡа,
Айырылып киткәйнек.
Күп йыл йөрөнөм, ил күрҙем,
Әйткән һүҙең онотмай,
Һеҙҙең илгә боролдом, —
Илең аша уҙманым,
Бармайым, тип торманым,
Һарайығыҙ алдына
Арыҫланымды бәйләнем,
Һарайыңа ингәндә,
Уйым һөйләп үткәндә,
Арала һүҙ киткәндә,

Үҙ бауырың[1] эҙләргә
Миңә йомош ҡушҡанда,
Һин бер бүләк әйткәйнең.
Мин эҙләгән үлемдән,
Һин әйткәйнең телеңдән,
Ҡотолорға юл табып
Мин бирермен, тигәйнең,
Аҙаҡ һүҙең әйт, һылыу,
Ни әйтерһең, — көтәйем,
Мин ишетеп китәйем», —
Тигән һүҙен ишеткәс,
Атаһына барған, ти,
Йәшермәйенсә бер ниҙе,
Теҙеп әйтеп һалған, ти.
«Һөйһәң, ҡыҙым, барырһың,
Аҡбуҙатың бирерһең;
Якты донъя йөҙөндә
Рәхәт торорһоң, балам,
Уралдай уҡ батырға
Эсә булырһың, балам.
Урал батыр хаҡына
Шүлгәнде лә уйла һин,
Бөтә илде саҡырып, —
Һис берәү ҙә ҡалмаһын —
Барын йыйып һыйла һин», —
Тигән һүҙен тыңлаған,
Атаһы уйын аңлаған.
Шүлгәнде лә саҡырған,
Бөтә илде йыйнаған,
Алҡындырып һыйлаған.
Шүлгән, Урал икәүһе,
Берен-бере табышҡас,
Көтмәгәндә осрашҡас,
Ике туған шатланған,
Юлда күргән барыһын
Урал теҙеп һөйләгән.
Шүлгән тыңлап ултырған,
Барын уйлап уҙҙырған:
«Урал былай дан алһа,
Атама данлы ҡайтһа,
Батыр булып маҡталыр,
Бар эштә лә өҫ булыр,
Минең һүҙҙәр аҫ ҡалыр», —
Тип эсенән көнләшкән.
Шуға күрә Уралға
Бар серене сисмәгән
(Әзрәҡәлә булғанын,
Бында ниңә килгәнен, —
Береһен дә әйтмәгән).
Ул, Уралды үлтереп,
Үҙе данлы ир булып,
Һомайҙы ла үҙе алып,
Аҡбуҙатҡа атланып,
Булат ҡылыс ҡулланып,
Дан алыуҙы уйлаған.
Шүлгән асыулы булғанын,
Һәр саҡ һалҡын йөрөгәнен,
Уның шомо барлығын
Урал ҙурға ҡуймаған:
«Тик ябыулы ятҡанға,
Уңайһыҙға ҡалғанға», —
Тиеп кенә уйлаған.
Бер саҡ Урал Шүлгәндең
Ҡомһарылып, ҡаш төйөп
Ултырғанын күргән дә:
«Батыр ирҙәр арыҫта[2],
Икәү бергә менгәшеп,
Бер-берене күҙләшеп,
Күләгәләй йөрөрҙәр,
Баҫмалатып килерҙәр,
Алмашлап тап булырҙар.
Батыр булған ир-егет
Еңмәҫ нәмә булырмы?
Батырмын тигән ир-егет
Яуызға юл ҡуйырмы?

---

[1] *Үҙ бауырың* — үҙ яҡының.
[2] *Арыҫта* — арыҫланда.

Утҡа ҡаршы һыу булыр ул,
Яуға ҡаршы тау булыр;
Үҙенә түгел, барына
Ауырлыкта юл булыр;
Батырҙан ил тарыҡмаҫ,
Батыр һис тә зарыҡмаҫ,
Яҡшылыҡтан ялыҡмаҫ,
Яуҙан да һис талыҡмаҫ.
Күккә менер баҫҡысһыҙ,
Ерҙе асыр асҡысһыҙ,
Яҡшынан эскәне — һыу булыр,
Ямандан эскәне — ыу булыр», —
Тиеп Урал йыуатҡан.
Һомай һаман ышанмай,
Ысын сергә төшөнмәй,
Ағай-эне икәүҙең
Ҡыланышын күҙәткән.
Алмаш-тилмәш улар менән
Һомай гелән һөйләшкән,
Бар йолаһын уларҙың
Һомай төпсөп һорашҡан.
Уралды Һомай күргәс тә,
Батырлығын белгәс тә,
Яҡшылығын һиҙгәс тә,
Уға күңел бәйләгән,
Ул Уралды һайлаған.
Шүлгән ҡомһоу йөрәгенгә,
Һаман шиге булғанға,
Ике туған һөйләшеп,
Икәү-ара серләшеп
Ултырғанда, Шүлгәндең
Һытыҡ йөҙөн күргәнгә,
Һомай унан шикләнгән.
Урал ятһа йоҡларға,
Биш көн тоташ йоҡлағас,
Шүлгәндән ҡыҙ шикләнгәс,
Ҡыҙҙар ҡуйған һаҡларға.
Шүлгән ятҡан бер яҡта,
Айырымланған торлаҡта;
Шүлгән уйы сыҡмаған:
Һомай һис юл ҡуймаған.

Шүлгән:

«Һин күп ерҙә булғанһың,
Бик күп нәмә күргәнһең,
Батыр булып, дан алып,
Инде бында килгәнһең,
Самрауҙың иленә
Килеп аяҡ баҫҡанһың,
Инде нимә уйлайһың?
Беҙҙең теләк ошонда
Икәнен асыҡ белмәйһең.
Самрауға яу асайыҡ,
Аҡбуҙатын алайыҡ,
Беребеҙ таяҡ тотайыҡ,
Беребеҙ Аҡбуҙ менәйек;
Бөтә илдә баш булып,
Барыһыны мат ҡурып,
Көслө батша булайыҡ.
Һин таяғың бир миңә, —
Ошо илде емерәйем,
Самрау ҡоштоң ҡыҙыны
Үҙемә тартып алайым,
Аҡбуҙатын менәйем;
Мин бит туған ағайың,
Мин дә данлы булайым!»

Урал:

«Былар һис тә кешегә
Бер яуызлыҡ итмәгән,
Үлтереп, ҡан ҡоймаған,
Кешегә дошман булмаған.
Беҙ икәүләп барайыҡ,
Дейеү илен алайыҡ,
Унда тотҡон булғандың
Барына юл асайыҡ.

Ҡыҙ алырға уйлаһаң,
Аҡбуҙатын һайлаһаң,
Ҡыҙы һөйһә, ҡыҙын ал,
Бүләк итһә, — Буҙын ал.
Ҡыҙ алам тип, яу асып,
Үлемгә беҙ юл ҡуйып,
Бер ҙә юҡҡа ҡан ҡойоп,
Яуыз исем таҡмайыҡ;
Ҡан ҡойоусы даны алып,
Илгә яман ҡайтмайыҡ.
Әзрәҡәне еңәйек,
Шишмәнән һыу алайыҡ,
Үлгәнгә йән бирәйек,
Кешеләрҙе донъяла
Үлмәҫ йәндәр ҡылайыҡ», —
Тигәс, Шүлгән уйланған,
Төрлө юлдар һайлаған.

Берҙән-бер көн аулаҡта,
Һомай булған торлаҡта,
Шүлгән барған янына,
Ҡулын һалған яурынына.
Шунда һүҙен асҡан, ти,
Һөйөү уйын әйткән, ти.

Шүлгән:

«Донъялағы — донъяла
Ҡайтты, тинең һин үҙең;
Арабыҙҙа яман уй,
Ҡанға батыр яман туй
Бер ҡасан да булмаҫ ул,
Тип уйлайым мин үҙем,
Һиңә әйтәм был һүҙем.
Дуҫлыҡҡа күңел береккән,
Айырылмаҫтай ереккән,
Беҙ ҙә илдә ҙур батыр,
Йөрәгебеҙ сыныҡҡан.
Һин тыңлаһаң, әйтәйем,
Бер серем бар, һөйләйем,
Тел өҫтөнә тел ҡуймай.
Яуабыңды көтәйем,
Инде һүҙем алмаһаң,
Асыҡ яуап бирмәһәң,
Үҙ ярағым[1] күрәйем,
Үҙ юлымда булайым,
Һарайыңа килгәс тә,
Күҙ алдымда күргәс тә,
Күңелемде арбаның,
Күҙең миңә һалманың,
Мине әллә таныпмы,
Ужарымды иҫкә алып,
Шуға минән ҡурҡыпмы,
Әллә мине һынапмы, —
Ҡараңғыға бикләнең,
Мине ҡәҙер итмәнең,
Һөйләшкән һуң, һөйөпмө,
Әллә Урал килепме,
Ҡараңғынан сығарҙың,
Һарайыңа саҡырҙың,
Асыҡ йөҙөң күргәс тә,
Барын хәҙер оноттом;
Һиндәй һылыу булмаҫ, тип,
Эҙләп һис кем тапмаҫ, тип;
Теләһәң, бергә булайым,
Һөйһәң, һине алайым,
Ҡарыуланһаң, тағы ла
Үҙ уйымды ҡылайым».

Һомай:

«Егет, һүҙең тыңланым,
Эс сереңде аңланым,
Шулайҙыр тип уйланым;
Мин бер батша ҡыҙымын,
Ҡыҙҙарының ҙурымын.
Егет, уйың уй булһын,
Бер ҙур майҙан ҡорайым,
Батырлығың һынайым,
Шунда даның күрәйем.

[1] *Үҙ ярағым* — «үҙ сарамды» мәғәнәһендә.

Буҙ атым бар йыраҡта,
Әсәм биргән бүләккә,
Майҙаныма шул килер,
Батыр булһаң, ул белер.
Майҙанымда Буҙ атты
Ҡулыңа алып меналһаң,
Эйәренең ҡашынан
Булат ҡылысын алалһаң,
Шундай батыр булалһаң, —
Буҙым бүләк ҡылайым;
Атама әйтеп туй яһап,
Үҙеңә йәр булайым», —
Тип яуап биргән, ти,
Шүлгән быға күнгән, ти.
Һомай майҙан йыйған, ти,
Аҡбуҙын саҡырған, ти.
Күк күкрәп, шау килеп,
Ерҙә дауыл ҡуптарып,
Тау-таш, ҡая аҡтарып,
Бөтә йәнгә шом һалып;
Йондоҙ һымаҡ атылып,
Аҡбуҙ толпар, атлығып,
Күктән килеп төшкән, ти,
Һомай һылыу алдына
Килеп башын эйгән, ти.
Аҡбуҙ шунда туҡтаған;
Бөтә майҙан һоҡланған:
Һыртына эйәр һалынған, ти,
Эйәренең башына
Алмас ҡылыс таҡылған;
Эйәренең ҡашы алтын,
Йүгәненең башы алтын;
Ҡолағын беҙҙәй ҡаҙаған,
Ялын ҡыҙҙай тараған;
Баш күнәктәй танаулы,
Һарымһаҡтай аҫаулы;
Ҡарсыға түш, тар бөйөр,
Еңел, текә тояҡлы;
Ҡуян күҙле, баҡыр күҙ,
Ҡыҫыр йылан тамаҡлы;
Урайы ҡуш, яңағы ас,
Муйындары бер ҡолас,
Ҡыйғыр бөркөт ҡабаҡлы;
Текә баҫып, баш ташлап,
Йылғыр атлап бышҡырыр;
Ҡолаҡтарын ҡайсылап,
Алан-йолан ҡаранып;
Алғыр бүре күҙендәй,
Күҙ бәбәген сылатыр;
Ауыҙлыҡ сәйнәп, ярһыуҙан
Ауыҙҙарын күпсетер;
Елһә, ҡоштай елпенеп,
Артында саң уйнатыр;
Осраған бер кешене
Хайран итер, уйлатыр, —
Бына ошондай Аҡбуҙ ул,
Күҙ күрмәгән ят Буҙ ул.

Һомай һөйөп Аҡбуҙын
Ошо һүҙен әйткән, ти:
«Күктә торҙоң йондоҙҙай,
Батыр көтөп, зарығып.
Кеше ҡаны булмаған
Батырҙарҙы ырғытып;
Мин һайлаған батырҙың
Береһен һанға алманың,
Үҙең һайлап батырың,
Миңә табып бирмәнең.
Бына килде батырҙар,
Һине көтөп ятырҙар.
Батырлығын һайлапмы,
Матурлығын һайлапмы,
Береһен үҙең алаһың, —
Үҙеңә юлдаш ҡылаһың, —
Һиңә иптәш ир булыр,
Миңә һөйгән йәр булыр».

Аҡбуҙат:

«Матур миңә дан булмаҫ,
Өҫтөмдә йөрөр йән булмаҫ.
Шаулап болот ҡалҡҡанда,
Ҡойон-дауыл сыҡҡанда,
Күктә ҡош та оса алыр,
Ҡамғаҡ осһа, яр табып,
Уҙа елдән баҫа алыр.
Мин сапҡанда — ер ҡубыр,
Таш та ятып түҙалмаҫ,
Һыу тулҡыныр-ҡайнашыр,
Һыуҙа балыҡ йөҙалмаҫ.
Ҡаф тауына типһәм мин,
Он-талҡандай, ыуалыр,
Тирә-яҡта йән булһа,
Береһе ҡалмай ҡыйралыр.
Эйәремдең ҡашында
Булат алмас ҡылысым
(Күп йыл уны һуғарған
Үҙ янында Ҡояшым).
Бөтә донъя ирерлек
Утҡа һалһаң, — иремәҫ,
Донъялағы бер илгә
Йөҙө тейеп тупармаҫ,
Етмеш батман ауырлыҡ
Күтәреп күккә сөймәгән,
Өс бармағы осонда
Төшөрмәйсә тотмаған
Кеше — батыр ир булмаҫ,
Ҡылыс һелтәп сабалмаҫ.
Шундай батыр булмаһа,
Миңә юлдаш булалмаҫ,
Мин сапҡанда, ул батыр
Миндә ултырып түҙалмаҫ.
Батыр булам тигән ир,
Мине алам тигән ир
Көсөн шулай һынаһын,
Унан мине менергә
Баҙнат итеп ҡараһын», —
Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Бары эште аңлағас,
Тау битенә барғандар,
Етмеш батман ауырлыҡ
Бер ҙур ташты тапҡандар,
Бөтә ҡоштар килгәндәр,
Ҡуптарырға булғандар.
Ай тартҡандар, ти, былар,
Йыл тартҡандар, ти, былар,
Таш урынынан ҡупмаған:
Көс-хәлдәре етмәгән.
Һомай, Шүлгәнгә ҡарап:
«Алып ташла», — тигән, ти;
Шүлгән барып уҡталған,
Тирә-яҡлап һәрмәнгән,
Ҡуптарырға серәнгән[1],
Көсөргәнеп маташҡан,
Көсөн һалып айҡашҡан,
Баҫҡан ерҙә тубыҡтан
Шүлгән ергә батҡан, ти.
Ай айҡашҡан, ти, Шүлгән,
Йыл айҡашҡан, ти, Шүлгән, —
Ташы һис ҡуҙғалмаған.
Шүлгән, сәсәп алйыған,
Күтәралмай ташлаған.
Һомай, Уралға ҡарап:
«Күтәреп ҡара!» — тигән, ти.
Урал ташҡа барған, ти,
Ағаһы хурға ҡалғанға
Урал асыуланған, ти,
Йоҙроҡлап һуҡҡан, ти, —
Таш тәгәрәп киткән, ти.
Шунан алған ҡулына,
Ташты атҡан һауаға, —
Таш киткән, ти, атылып,
Күрер күҙҙән юғалып.

[1] *Серәнеү* — көсәнеү.

Барыһы күккә баҡҡан, ти,
Таш төшөрөн көткән, ти.
Иртә ине, төш булған,
Төш тә ауып, кис булған, —
Күктә тауыш шаулаған,
Таш килгәнде күргәнгә,
Төшһә вайран булғанға[1]
Бөтә ҡош-ҡорт илаған.
«Зинһар, ергә төшмәһен, — тип, —
Илде харап итмәһен», —
Тиеп бары Уралдан
Ялбарышып һораған.
Һыңар ҡулын һуҙған, ти, —
Урал ташты тотҡан, ти;
«Ҡайһы яҡта Әзрәҡә?» —
Тип һорашып алған, ти,
Әзрәҡәнең иленә
Урал ташты атҡан, ти.
Бөтәһе лә ҡарашҡан,
Аптырашып уйлашҡан.
Ҡайҙа барып төшөр, тип
Үҙ-араһы һөйләшкән.
Буҙ ат килеп, шунан һуң
Уралға баш эйгән, ти,
Мин һинеке, батыр, тип,
Уға буйын биргән, ти.
Самрау батша шул саҡта
Үҙе килеп сыҡҡан, ти,
Уралға ҡул биргән, ти,
Кейәүем бул, тигән, ти.
Бөтә илде йыйғандар,
Былар ҙур туй ҡорғандар,
Ил батыры бул һин, тип,
Уралға дан биргәндәр.
Шүлгән быны күргән һуң,
Урал ҙур дан алған һуң,
Шүлгән быға түҙмәгән,
Эсенән генә һыҙланған.
Урал уны ҡыҙғанған,
Айһылыуҙы димләргә,
Шүлгәнгә уны бирергә
Һомай, Урал уйлашҡан,
Самрауға аңлатып,
Өсәү-ара һөйләшкән.
Айһылыуҙы ҡайтартып,
Тағы илде саҡыртып,
Айһылыуҙы бирергә,
Шүлгәнгә туй яһарға
Самрау ҙа күнгән, ти;
Башҡарайыҡ был туйҙы,
Аман булыр, тигән, ти.

Һомай туйы барғанда,
Уйын-көлкө булғанда,
Ер-һыу тетрәп киткән, ти,
Бары аптырап киткән, ти.
Төрлө уйға сумғандар,
Был ни булыр тигәндәр, —
Ҡараһалар: күк йөҙөн
Ҡып-ҡыҙыл ут алған, ти;
Барыһы ла, күккә ҡарап,
Аптырауға ҡалған, ти.
Һис кем быны аңламай,
Ни тип әйтергә белмәй,
Шулай алйып торғанда,
Дейеү микән был, тиеп,
Барыһы шомға ҡалғанда,
Күктән, сыр-сыу илаулап,
Ниҙер төшөп килә, ти,
Бары ҡарап тора, ти.
Ҡара көйгән ялҡынды,
Күктәге ут-тулҡынды
Тотоп алған, ти, Урал.
Ҡарағандар, ти, былар:
Айһылыу ҡыҙ булған, ти,

---

[1] *Вайран булыу* — ҡыйралыу, тар-мар булыу.

Ҡайтып килгән сағында,
Ялҡын сырмап алған, ти,
Ут эсендә ҡалған, ти.

Айhылыу:

«Һауаға таш атҡанын
Ҡарап торҙом күктән мин,
Ташты буйға атҡанын
Йәнә күрҙем күктән мин.
Ул таш диңгеҙ ашаға,
Сорғоп китте йыраҡҡа,
Әзрәҡәнең иленә
Барып төштө бер саҡта.
Ерҙе ярҙы уртаға,
Ялҡын сыҡты hауаға;
Ялҡын мине ялманы,
Һис тәҡәтем ҡалманы, —
Һушым китеп йығылдым.
Саҡ-саҡ йыйып hушымды,
Былай табан боролдом», —
Тигән hүҙен ишеткәс,
Барыhы быға таң ҡалған;
Әзрәҡәгә шау hалды,
Тип Самрау шатланған.
Шүлгән быны белгән, ти,
Серенә төшөнгән, ти:
Әзрәҡәнең Шүлгәнгә,
Ҡыҙым ул, тип кәләшкә
Биргән ҡыҙы Айhылыу
Икәнене hиҙгән hуң,
Дейеү, ҡыҙым, тигәне,
Үҙ ҡыҙым, тип биргәне
Барыhы ла буш икән, —
Бына ниндәй ҡош икән!
Дейеү мине япты, тип,
Мин дә унан ҡастым, тип
Шүлгән барын алдаған,
Айhылыу быға ышанған.
Һомай күргәс Шүлгәнде
Йылан менән килгәнде,
Үҙен йылан, алам тип,
Һәр саҡ hорап йөрөгәнде
Һомай белгәс, hиҫкәнгән,
Һомай бынан шикләнгән.
Ике батыр кейәүем
Ил өҫтөндә терәүем
Булыр, тиеп Самрау
Үҙ эсенән шатланған.

**Серле таяҡ ярҙамы менән туфан күтәртеп, Шүлгәндең халыҡты ҡырырға маташҡаны; Зәрҡум менән икәүләп дейеү батшаhы Әзрәҡәгә ҡасҡаны; Уралдың Әзрәҡәне, башҡа дейеүҙәрҙе тураҡлағаны, шулар емтегенән тауҙар яhағаны**

Һарайға Һомай ҡайтҡас,
Зәрҡум янына төшкәс,
Шүлгән бынан шомланған:
Зәрҡум серҙе асыр, тип,
Миңә бәлә тағыр, тип;
Нисек булhа, юл табып,
Урал таяғын алып,
Барыhын hыуҙан баҫтырып,
Ҡыран-яран итергә;
Аҡбуҙатҡа менергә,
Һомайҙы ла алырға,
Әзрәҡәгә китергә,
Тиеп Шүлгән уйлаған.
Шул урында Уралға
Былай тип ул hөйләгән:
«Мин дә бер дан табайым,
Әзрәҡәгә барайым,
Илен баҫып алайым», —
Тип таяғын hораған.
«Икәү бергә барайыҡ,
Бергә йөрөп ҡарайыҡ», —
Тиеп Урал ҡараған.

Шүлгән быға күнмәгән,
Урал таяҡты биргән.
Һомай ямдан сыҡҡансы,
Зәрҡум менән һөйләшеп,
Бөтә серҙе белгәнсе,
Шүлгән таяҡ алғас та,
Һомайҙы ла көтмәйсә,
Айһылыуҙы күрмәйсә,
Самрауға әйтмәйсә,
Бер яҡ ҡырға сыҡҡан да,
Таяҡты бер һуҡҡан да,
Барыһын һыуҙан баҫтырған,
Бөтәһен дә шул саҡта
Аптырауға ҡалдырған.
Зәрҡум, быны күргәс тә,
Ҙур бер балыҡ булған да
Янына барған Һомайҙы
Шул урында ҡарпыған.

Зәрҡум ҡыҙын ҡарпығас,
Күктә ҡояш тотолған,
Быны Аҡбуҙ белдергән,
Аҡбуҙ даръяға сумған,
Даръя гөрләп ҡайнаған.
Һомайҙың да юҡлығын
Барыһы ла аңлаған.
Аҡбуҙ даръяны быуғас,
Зәрҡумға юл булмағас,
Һомайҙы ул ебәргән,
Зәрҡум, үҙе тотолмай,
Ҡаса һалып өлгөргән.
Һомай кире ҡайтҡан һуң,
Бөтә серҙе әйткән һуң,
Урал эште аңлаған,
Дошман булды ағам, тип
Үҙ эсенән уйлаған.

Бөрккән һыуы ҡороғас,
Зәрҡум барып ҡушылғас,
Аҡбуҙатҡа ҡаршы
Таяҡ көсө етмәгәс,
Зәрҡум, Шүлгән киткән, ти,
Әзрәҡәгә еткән, ти,
Бөтә серҙе әйткән, ти.
Әзрәҡә бик ҡайғырған,
Дейеүҙәрен йыйҙырған,
Һарайға һаҡ ҡуйҙырған.
Ҡәһҡәһә менән Шүлгәнде,
Зәрҡум, дүрт-биш дейеүҙе
Ғәскәренә баш ҡылған.
Күктә ҡоштар осмаҫлыҡ,
Ерҙә кеше йөрөмәҫлек,
Ерҙе һыу менән ҡапларға,
Күкте ут менән ялмарға
Бар дейеүгә бойорған.

Берҙән-бер көн бар ерҙә
Күк-күмгәк һыу эркелгән,
Күк йөҙөндә ҡып-ҡыҙыл
Ялҡынлы ут бөркөлгән.
Күктә ҡош-ҡорт осалмай,
Ерҙә бер йән торалмай,
Йонсоп бөткән, алйыған;
Ҡош-ҡорто, йәнлеге
Йылан батша ерендә
Бары бергә йыйылған.
Уралға килеп ялбарған.
Урал ҡаушап ҡалмаған,
Ерҙе баҫҡан һыуҙан да,
Күк ҡаплаған уттан да
Бер ҙә ҡурҡып тормаған, —
Менеп алған Буҙ атын,
Ҡулына тотҡан булатын,
Дейеүҙәргә ҡаршы ул
Ҡанлы һуғыш, яу асҡан.
Ай һуғышҡан, ти, Урал,
Йыл һуғышҡан, ти, Урал,
Утҡа өтөргә бирмәгән,

Ҡайыҡ яһап, бар кеше
Һыуға батып үлмәгән.
Урал, аяуһыҙ һуғышып,
Дейеүҙәрҙе ҡырған, ти;
Шул саҡлы улар үлгән, ти,
Киң диңгеҙҙең өҫтөндә
Тау барлыҡҡа килгән, ти.
Аҡбуҙ һыуҙы йырған, ти,
Юлы ҡалҡып ҡалған, ти;
Урал ярған юлдарҙан
Халыҡ эйәреп барған, ти.
Көн һуғышҡан, ти, Урал,
Төн һуғышҡан, ти, Урал.
Ҡаты яуы барғанда,
Дейеүҙәрҙе ҡырғанда,
Әзрәҡәгә тап булып,
Икәүһе ҡаршы тороп,
Ҡылысҡа ҡылыс килеп,
Һуғышҡандар, ти, былар,
Алышҡандар, ти, былар.
Әзрәҡә сабып ҡараған,
Ут та бөркөп ҡараған;
Уралды ул сапҡанда,
Күк күкрәп торған, ти;
Уралға ут бөркკәндә,
Һыуҙар ҡайнап торған, ти,
Ерҙәр тетрәп торған, ти.
Урал ҡаушап ҡалмаған,
Һушынан да таймаған:
Булатыны алған да,
Әзрәҡәне өҙә сапҡан да, —
Ҡылысы диңгеҙгә сумған,
Ер һелкенгәндәй булған:
Әзрәҡә шулай үлгән,
Имәнес ҙур кәүҙәһе
Һыуҙы урталай бүлгән;
Халыҡҡа менеп торорға,
Йәйрәп хәл йыйырға
Ҙур бер яман тау булған.
Урал алға сапҡан, ти,
Аты диңгеҙ ярған, ти;
Аҡбуҙ барған урында
Һыу алмаҫлыҡ юл булып,
Ҙур тау ҡалҡа барған, ти;
Һыу эсенән бар халыҡ
Шунда сыға барған, ти.

**Үлем күрә алмай ҡаңғырған ҡарттың әйткәне; Уралдың Йәншишмәне уртлағаны, тамсыһын да йотмағаны, тирә-яҡҡа һипкәне — ер йәнләнеп киткәне**

Шүлгәнде шулай оҙатҡас,
Урал халыҡты йыйҙыртҡан да:
«Күҙгә күренер үлемде
Илдән ҡыуып юҡ иттек,
Ҡан эсеүсе дейеүҙең
Барын ҡырып тау иттек.
Йәншишмәнең бар һыуын
Һоҫоп алып киләйек,
Бар кешегә бирәйек.
Күҙгә күренмәҫ үлемдән,
Килер ауырыу-сырхауҙан,
Ауыртыныу-һыҙлауҙан
Кешеләрҙе ҡотҡарып,
Барыһыны шат ҡылып,
Мәңге үлмәҫ ҡылайыҡ», —
Тип Урал һүҙ асҡанда,
Аһ-ваһ итеп зарланып,
Үлем саҡырып-ялбарып,
Бар һөйәге ҡаҡшаған,
Тәнендә ит ҡалмаған,
Ата-әсә, берен дә
Кем булғанын белмәгән
Бер ҡарт килеп еткән, ти,
Ошо һүҙен әйткән, ти:
«Бик күп быуын күрҙем мин,
Бик күп ерҙә булдым мин,

Һис нәмәне тоймаған,
Бер нәмәнән ҡурҡмаған,
Бала атаһын белмәгән,
Ата, балам, тимәгән
Дәүерҙе лә күрҙем мин;
Кешеләр бергә тупланып,
Үҙ-араһы йопланып[1],
Көслө ырыуҙар көсһеҙҙө
Талауын да күрҙем мин;
Йылан, дейеү, батшалар,
Кеше затын әҙәрләп,
Тапҡан ерҙә берәмләп
Ашап башын үҫтереп,
Ҡайһыһын ҡол иттереп,
Ил өҫтөндә түш киреп,
Кешеләрҙе буҫығытып,
Ҡан илатҡан осорҙа
Егет тә булып үҫтем мин.
Үлемде лә белмәнем,
Етемде лә күрмәнем,
Дейеү илде ҡаплағас,
Йылан күкте ялмағас, —
Үлем күҙгә сағылғас,
Миңә лә көн килер, тип;
Минең ҡулдан килмәһә,
Илгә бер ир тыуыр, тип;
Дейеүҙәр менән йыланға
Бер көн ҡыран һалыр, тип,
Кешеләрҙең шул көндө
Шатлыҡ туйы булыр, тип,
Һыҡтап йөрәге һыҙған,
Ҡан илап күҙе тонған
Рәхәт һулыш алыр, тип,
Ерҙә байман ҡорор, тип, —
Шуны өҙөлөп көттөм мин.

Үлемгә йән бирмәҫкә,
Туйҙан тороп ҡалмаҫҡа.
Йәншишмәнән һыу эстем.
Үлем күп саҡ осраны,
Өҫкә ҡандар сәсрәне,
Үҙәсемдән күп алды,
Боғаҙға бысаҡ күп һалды,
Ҡандарымды һарҡытты,
Һөйәгемде ҡыйратты, —
Шунда ла буй бирмәнем,
Йәнемде ал, тимәнем;
Йәнем бирмәй серәштем,
Үлем менән көрәштем.

Инде туйҙы күрҙем мин,
Шуға бында килдем мин,
Һеҙгә сәләм бирҙем мин;
Кешеләрҙең көләс йөҙөн
Күҙ алдымда күрҙем мин;
Кеше — кеше тигәндең
Батырлығын һиҙҙем мин.
Инде үлһәм дә, ҡайғым юҡ;
Ҡалҡып ятҡан ҙур юлың
Кешегә төйәк булырлыҡ;
Дейеүҙән өйгән тауҙарың
Кейеккә торлаҡ булырлыҡ;
Һәр ҡайһыңы йәйрәп,
Йопланып түл йәйерлек…
Егетем, батыр икәнһең,
Күҙ ҡарамдай һаналған
Илгә ҡашҡа икәнһең;
Быуын-быуын буйына
Маҡталырлыҡ икәнһең.
Ил ырыҫын табырға
Атаң һиңә ҡот биргән,
Әсәң һиңә һөт биргән;
Дошманға таш йөрәкле,
Дуҫыңа аш йөрәкле
Батыр итеп үҫтергән,
Тәү арыҫлан мендергән.

[1] *Йопланып* — парлашып.

Яҡшылыҡҡа ынтылған,
Йөҙө көндәй һылыуға,
Һыны тиңһеҙ һылыуға —
Һомайға тап булғанһың.

Утҡа ҡаршы ут булыр,
Һыуға ҡаршы һыу булыр,
Елгә ҡаршы тау булыр,
Яуға ҡаршы яу булыр
Аҡбуҙатка атланып,
Дейеүҙәргә яу асҡан;
Ерҙән диңгеҙ киптергән,
Ергә ырыҫ сәстергән,
Илгә байман килтергән
Һине ҡашҡа тип белдем,
Һинең алдыңа килдем.
Күбәләктәй йәнем бар,
Бер йотомдай ҡаным бар,
Әлберәгән тәнем бар;
Һөйәк-һаяҡ ҡыйралған,
Тик тарҡалмаҫ һыным бар,
Йәнем тәндә — тыным бар.
Хәҙер уйым тарҡалды,
Йәшәр хәлем ҡалманы;
Үлем саҡырып ҡараным,
Буй бирергә уйланым.
«Йәншишмәнән һыу эстең —
Миңә ҡаршы көс иттең,
Мәңге йәнең алалмам,
Һине үлек италмам;
Көсөң бөтөр — ҡалырһың,
Үлә алмай ҡаңғырырһың;
Тәнең сереп, ҡорт ашар,
Шунда ла һин үлмәҫһең,
Һис донъянан китмәҫһең,
Мине бушҡа көтөрһөң,
Алйып-ҡаңғып бөтөрһөң», —
Тип йәнемде алманы,
Үлем баҙнат ҡылманы.
Егет, һиңә килдем мин,
Килеп хәлем әйттем мин.
Ҡолаҡ һалһаң һүҙемә,
Әйтә торған һүҙем бар:
Илгә йола булырҙай,
Һынап белгән заңым бар,
Донъяла мәңге ҡалам, тип,
Донъялай ғүмер һөрәм, тип
Үлемгә буй бирмәҫкә,
Уны бер заң итмәҫкә
Йәншишмәнән эсмәгеҙ,
Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.
Донъя ул бер баҒ[1] икән;
Йән эйәһе шул баҒта
Донъя быуынын һанаған,
Ҡайһы быуын аҡлаған,
Ҡайһы уны таплаған,
Төрлө төҫкә биҙәгән, —
Бары үҫемлек, гөл икән.
Беҙ үлем тип һанаған,
Яуыз ул тип ҡараған —
БаҒтың тыуҙған үҫмерен
Йәки көнө тулғанын
Сүпләп, баҒты бушатҡан,
Унан донъя ташлатҡан,
Бөтмәй торған йола икән.
Мәңге ҡалам тимәгеҙ,
Йәншишмәнән эсмәгеҙ:
Донъяла мәңге ҡалыр эш —
Донъяны матур төҙөгән,
БаҒты мәңге биҙәгән —
Ул да булһа яҡшылыҡ.
Күккә лә осор — яҡшылыҡ,
Һыуға ла батмаҫ — яҡшылыҡ,
Утҡа ла янмаҫ — яҡшылыҡ,
Телдән дә төшмәҫ — яҡшылыҡ.

[1] *БаҒ* — баҡса.

Бары эшкә баш булыр,
Үҙеңә лә, кешегә лә
Мәңге йәшәр аш булыр», —
Тигән һүҙен ишеткәс,
Бөтә серҙе аңлағас,
Бар халыҡты эйәртеп,
Урал юлға сыҡҡан, ти,
Йәншишмәгә барған, ти,
Һыуын уртлап алған, ти.
Үҙе сапҡан юлына,
Дейеүҙән өйгән тауына
Һыуҙы шунда бөркҡән, ти.
«Тау-урмандар йәшәрһен,
Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,
Ҡошо һайрап маҡтаһын,
Халҡы йырлап хуплаһын,
Ерҙән ҡасҡан дошмандар
Бары күреп һоҡланһын,
Ир һөйөргә ил булып,
Ер һөйөргә бағ булып,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып
Балҡып торор ер булһын!» —
Тигән һүҙен әйткән, ти.
Һыу күп һипкән еренән
Ҡарағай, шыршы үҫкән, ти,
Тирә-йүнде йәмләндереп,
Үле ерҙе йәнләндереп,
Ағас, гөлдәр үҫкән, ти.
Һыуыҡҡа төҫ ҡоймаҫлыҡ,
Эҫегә лә кипмәҫлек,
Ҡорт, мыр-маҙар төшмәҫлек,
Япрағы төрөлөп,
Беҙәнәктәй булған, ти,
Мәңге йәшел ҡалған, ти.

?

**1.** «Урал батыр» ҡобайырын тасуири уҡығыҙ, ҡыҫҡаса йөкмәткеһен һөйләгеҙ. **2.** Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡ йәшәгән дәүерҙе билдәләгеҙ, уларҙың нисек ғүмер итеүҙәрен, ниндәй йола буйынса йәшәүҙәрен күҙ алдына килтерегеҙ. **3.** Йәнбирҙе ҡарттың үлем тураһындағы фәлсәфәһен асыҡлағыҙ. Был хаҡта йәнлектәрҙең, ҡош-ҡорттарҙың фекере нисек булыуын әйтегеҙ. **4.** Уралдың үлем менән йәшәү тураһындағы уй-фекерен һөйләп бирегеҙ. **5.** Йәнбирҙе ҡарт улдары Урал менән Шүлгәнде ҡайҙа һәм ни өсөн оҙатыуын аңлатығыҙ. **6.** Самрау илендәге йола, Ҡатил батша ерендәге хәлдәр тураһында һөйләгеҙ. **7.** Шүлгәндең ни өсөн яуыз затҡа әүерелеүен билдәләгеҙ. **8.** Урал батырҙың ҡылған эштәрен һүрәтләгеҙ, уның кем мәнфәғәтен күҙәтеүен асыҡлағыҙ. **9.** Боронғо ата-бабаларыбыҙ аңындағы батырлыҡ төшөнсәһен сағылдырған урындарҙы текстан табып уҡығыҙ. Батырлыҡ тураһындағы халыҡ мәҡәлдәрен иҫкә төшөрөгөҙ. **10.** Донъяла мәңге ҡалыр эш нимә булыуын асыҡлағыҙ. Ҡобайырҙан шул өҙөктө табығыҙ, уның мәғәнәһен нисек аңлауығыҙҙы әйтегеҙ. **11.** Урал батырҙың тәбиғәттең мәңгелеге, халыҡтың үлемһеҙлеге тураһындағы фекерҙәрен сағылдырған һуңғы телмәрен тасуири уҡығыҙ. **12.** Ҡобайырҙың күркәм тел сараларына күҙәтеү яһағыҙ: сағыштырыу, эпитет, метафора, йәнләндереү, гипербола, тапҡыр һүҙҙәр, әйтемдәр, мәҡәлдәр. **13.** Халҡыбыҙҙың иң боронғо рухи ҡомартҡыһы һаналған «Урал батыр» әҫәренән үҙегеҙгә оҡшаған өҙөктө яттан тасуири һөйләгеҙ. **14.** Мәшһүр эпостың һеҙҙә ниндәй тойғолар уятыуын әйтегеҙ.

## ИҘЕҮКӘЙ МЕНӘН МОРАҘЫМ*

### I. Алтын Урҙа башында Туҡтамыш хан ултырғаны, башҡорттарҙың баш эймәй тартышҡаны

Алтын Урҙа башында
Туҡтамыш тигән хан булған,
Ҡул аҫтында күп илде
Ҡолдай итеп биләгән:
Яһаҡ алған малынан,
Ҡолдар алған халҡынан,
Үҙ тигәнсә эш итеп,
Бер Хоҙайҙай йәшәгән;
Уралға ла ҡул һуҙып,
Унда халыҡты ҡуҙғаған.
Уралдағы батырҙар:
Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Тамъян —
Уралтауы яғында,
Юрматы, Табын тағы ла —
Иҙел, Нөгөш буйында;
Был батырҙарға эйәреп,
Ете ырыуҙан бишеһе
Туҡтамышҡа буйһонмай,
Уға яһаҡ түләмәй,
Халыҡтан ҡолдар алдырмай,
Хандың яуы килгәндә,
Ҡаяларға һарышып,
Ҡара-ҡаршы һуғышып,
Ауыл-ауыл һәр яуҙа,
Йорто-ере үртәлеп,
Ҡатын-ҡыҙы хурланып,
Урал бите, ҡаяһы
Ҡыҙыл ҡанға дымланып,
Батырҙары сергенән
Ҡыҙыл ҡанға йөҙһә лә;
Уралтауҙы уратып,
Хандың яуы ут һалып,
Урал буйын ҡып-ҡыҙыл
Тамуғылай ҡылһа ла;
Күп яуҙағы ҡырғында
Илдең халҡы миктәлеп[1],
Ата-әсәһеҙ ҡалышып,
Етем-еҫер тулһа ла;
Аты бөтөп, яу аты
Тай-тулаҡҡа ҡалһа ла;
Биш ырыуҙан биш батыр,
Яраланып ун тапҡыр,
Аттан ҡолап төшһә лә, —
Ян керешен бушатмай,
Ҡулдан булат ташлатмай,
Һаман ҡаршы һуғышҡан.

### II. Шәғәленең хан фарманын килтергәне, Һабрау ҡарттың ил тарихын һөйләгәне; ике һунарсы, биш батырҙың Урҙаға киткәне

Урҙа ханға баш эйгән,
Үҙенә ҙур бейлек алған,
Ирәндек буйы яланды
Үҙенә йәйләү һанаған,
Урап аҡҡан Яйыҡты
Ырыуы ман[2] һыулаған,
Бар ырыуға баш булған,
Биш ырыуҙан үс алған,
Ялан ерҙең ҙур бейе —
Шәғәле тигән аҡһаҡал
Биш ырыуға килгән, ти,
Хандан илсе булған, ти;
Биш ырыуҙың батырын
Барын бергә йыйған, ти;
Хандың фарманын һөйләп,
Илгә алап[3] һалған, ти:

---

* Ҡыҫҡартып алынды.
[1] *Миктәлеп* — йонсоп.
[2] *Ман* — менән.
[3] *Алап* — оран.

— Биш ырыуҙан биш батыр,
Һарайға килеп, янымда
Кәңәш итер бей булһын;
Ике данлы һунарсы,
Һарайға килеп ҡош һайлап,
Һунарымда ҡош сөйһөн;
Бөтә Урал — Алтайҙа
Данлы йырсы, ҡарт сәсән —
Һабрау тигән уҙаман,
Фарманыма буйһоноп,
Урҙам маҡтап йырлаһын,
Тигән һүҙен ҙур хандың
Һеҙгә һөйләп бирергә
Илсе булып килдем мин, —
Тиеп һүҙен бөткән һуң,
Был биш ырыу һөйләшкән,
Уртаға һалып уйлашҡан.
«Күп яу менән миктәлдек,
Килешһәк тә ярай шул», —
Тигән уйҙы белдергән
Батырҙары ла булған.

Биш ырыуҙың иң ҡарты,
Һабрау тигән дан йырсы
Тарҡалышты күргән һуң,
Таянып имән таяҡҡа,
Биленә ҡуйып бер ҡулын,
Оран һалып барына,
Бал ҡорто инәһендәй,
Уртаға килеп сыҡҡан, ти.
Башын баҫып, уйланып,
Батырҙарҙың йөҙөнә
Күҙ йүгертеп ҡаранып,
Кәңәш биргәндәй итеп,
Ошо һүҙен әйткән, ти.

Һабрау:

— Йөҙҙән ашҡан бер ҡарттың
Аяҡ баҫҡанын күргәс,
Бер һүҙ әйтер был ҡарт, тип,
Шәмдәй булып тыңлағас,
Булмаһа, бер һүҙ әйтәйем:
Миңә ҡорҙаш булырҙай
Арағыҙҙа уҙаман
Юғын барың беләһеҙ.
Мин күргәнде күрмәгән,
Ишетеп тә белмәгән,
Минең йөрөгән юлымда
Берегеҙ аяҡ баҫмаған.
Борон, борон, борондан,
Мин тыумаҫтан электән,
Олатайға, әсәйгә
Төйәк булған Уралтау!
Аҡһаҡалы, бейҙәре,
Уға эйәреп ырыуы,
Һырҙай ҡанға туҙышып,
Маңлайынан туп үтеп,
Күкрәгенән уҡ үтеп,
Яулап алған Уралтау!
Ай, Уралтау, Уралтау,
Ҡошо-ҡорто, йәнлектән,
Буйындағы иленән
Һылыу ҡыҙҙай маҡталып,
Ата-әсәләй һөйөлгән
Иң данлыҡлы Уралтау!
Ай, Уралтау, Уралтау,
Ҡуйынын асҡан әсәләй,
Ҡаяһында батырын
Йәшереп һаҡлар тау ине;
Һаба-һауыт тултырып,
Аҙаматтар йыйылып,
Ҡыҙ-ҡырҡындар ҡотороп
Башында уйнар тау ине;
Биш ырыуҙың бейҙәре
Үҙенә туплап ырыуын,

Батырҙары яу сабып,
Күп һаҡланған[1] тау ине;
Үҙен һаҡлап яу асҡан,
Сергеһенән ҡан кискән
Батырҙарың һөйәген
Күкрәгендә йыйған тау ине;
Батырын атта уйнатып,
Уяһында үҫкән ҡурайын
Егетенән уйнатып,
Ҡырғын күргән иленең
Моңон-зарын һыҡтатып,
Һылыуынан йырлатып,
Төйәк булған тау ине!

Бына шуның барыһын
Күреп уҙған ҡартыңмын.
Инде һеҙгә ни тием,
Ялтыраған ҡылысын
Батырҙары ҡынына
Тығыр көнөн күргән һуң?
Яусыл булған ҙур илем,
Ҡул ҡаушырып, буй биреп,
Баш эйергә торған һуң?
Инде маҡтап нишләйем,
Батыры аттан төшкән һуң?
Биш ырыуҙан биш батыр
Ханға китәм тигән һуң?
Ҡәбергә баҫҡан аяғым,
Шалтырап торған һөйәгем,
Бәбәге кибеп сек(е)рәйгән,
Тонйораған күҙҙәрем,
Әсәйемдән ҡуш тыуған
Һис ҡартаймаҫ йөрәгем,
Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай,
Яуҙа һөңгө булырҙай,
Һабрау тиеп дан алып,
Йөҙ йыл буйы шаулаған,
Тау-таш ярған йырҙарым
Илем әйткән теләккә
Буйын бирмәй нишләһен?!

Атылған ҡоштай һиҫкәнгән,
Күптән килгән уйым бар.
Шул уйымдың эсендә
Һеҙгә сисер төйөн бар:
Ханға ҡулың биргән һуң,
Ханға түшәк йәйерһең;
Батыр аттан төшкән һуң,
Ханға башың эйерһең;
Ҡылысың ҡынға тыҡҡан һуң,
Хандың ҡоло булырһың.

Батырҙары киткән һуң,
Инәһе үлгән бал ҡорттай,
Илең ҡалыр сыр-сыуға;
Бөтә тапҡан табышың
Һоро ҡорттай талаусы
Бирәүҙе бей таныңһың.
Ата-әсәңде һүктерер ул,
Башҡа хандан һуҡтырыр,
Ирегеңдән ирекһеҙ
Ҡол булырға эш ҡалыр, —
Шунан бүтән ни тием?

Яйыҡ китһә, юл китер;
Биш ырыуҙы һуғарған
Иҙел китһә, ил китер.
Йәйәү-ялпылы килеп,
Уралыңа ҡул һалыр,
Илдең затһыҙ берәүһен
Ил өҫтөнә бей ҡылыр.
Яман, затһыҙ бей булып,
Бөтә юлға саң һалыр;
Ханға менәр ат кәрәк, тип
Һайлап, яҡшы ат алыр;
Ҡоҙа-аҙна[2] булам, тип,
Ун бармағы ҡамыштай,

[1] *Күп һаҡланған* — халыҡ һаҡланған, йәғни дошман яуынан ышыҡланған, һаҡланып ҡалған.
[2] *Ҡоҙа-аҙна* — ҡоҙа-ҡоҙағый.

Утыҙ теше көмөштәй,
Бер бите айҙай балҡыған,
Бер бите көндәй яҡтырған
Һылыуың һайлап тағы алыр.

Сырҡырашып түлләгән
Йылҡыһы күп Уралтау;
Мөңөр-мөңөр мөңрәгән
Һыйыры күп Уралтау;
Кәкре ҡойроҡ, йылтын күҙ
Бүреһе күп Уралтау;
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау;
Майлап ҡуйған ҡайыштай
Йыланы күп Уралтау;
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Уралтау;
Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Уралтау;
Ояларға урыны мул
Ҡоштары күп Уралтау;
Балығы ялтлап уйнаған
Иҙеле бар Уралтау;
Сәс бауҙары сылтырап,
Ҡарсығалай кәпәйеп,
Һыуға барған һылыуға
Шишмәһе күп Уралтау;
Билге типкән батырға
Ат уйнатып сабырға
Типһәне күп Уралтау, —
Бары ханға ҡол булыр!

Һабрау һүҙен ишеткәс, халыҡта тарҡалыш тыуған. Шулай ҙа биш батыр үҙ-араһы һөйләшкән. Хан ҡолдар алмаҫҡа булғас, «Ике һунарсы, бер йырсы, ырыу башы биш батыр миңә килеп бей булһын!» тигән фарманын ҡулай күреп, бишеһе ханға барырға булған.

Биш батыры бей булып,
Ҡотло, Иҫән һунарсы —
Бары бергә ҡушылып,
Етәүһе киткән Урҙаға.
Ҡотло улы Иҙеүкәй
Атаһына эйәрмәй,
Ҡылысын ҡынға тыҡмай,
Менгән атынан төшмәй,
Хан ебәргән фарманға
Яңғыҙ батыр баш эймәй,
Яуҙан ҡулын һелтәмәй,
Тороп ҡалған Уралда.

## VI. Туҡтамыш хандың Иҙеүкәйҙе һарайға баш бей итеп ҡуйғаны

Туҡтамыш хан Урҙала
Был хәлдәрҙе ишеткәс,
Юрматы, Ҡыпсаҡ, Ҡатайҙы,
Тамъян, Табын батырҙы
Кәңәшсе иткән һарайҙа;
Ҡотло менән Иҫәнде
Ҡош сөйөүгә далала
Ҡошсо иткән тағы ла
Үҙе йөрөгән һунарҙа.
Һабрауҙы саҡыртып,
Менәренә ат биреп,
Йөрөрөнә яй ҡуйып,
Ҙур туй булһа Урҙала,
Килеүен уның шарт ҡылып, —
Уралдан ҡол алмаҫҡа
Бары алдында һүҙ ҡуйған.
Урҙала хан янында,
Ҙур бей итеп ҡуйырға,
Һабрауҙы ебәреп,
Иҙеүкәйҙе саҡыртҡан.
Иҙеүкәй, хан саҡыртҡас,
Һабрау ман уйлашып,
Урҙа ханға барған, ти;

Атаһы ман Иҫәнде,
Уралдан киткән батырҙың —
Барыһын да күргән, ти;
Һарайҙағы серҙәрҙе,
Туплап ятҡан уйҙарҙы,
Батырҙарҙың күбеһе
Хан ҡушҡанса эшләүсе,
Илде йөрөп талаусы
Икәнлеген барының
Һорашып, күреп белгән, ти...

...Ил аралап йөрөгән һуң,
Илдә күп сер белгән һуң,
Урҙаға кире ҡайтҡан һуң,
Унда бер аҙ торған һуң,
Ат өйрәтеп менеүҙә,
Һунарҙа ҡош сөйөүҙә,
Һүҙгә сәсән булыуҙа
Ханға егет оҡшаҒас,
Хан саҡыртып алған, ти.

Туҡтамыш:

— Ай, егетем, саҡырғас,
Урҙама төбәп килгәнһең,
Һарайҙа һин ҡалырһың,
Яурындары уҡалы,
Алтын һабаҡ төймәле
Ҡама тундар кейенеп,
Көмөш ҡәмәр быуырһың!
Тәкәүеренә бәйләнгән
Бауы тора һум алтын,
Аҡ шоңҡар ҡош бирермен;
Эйәр ҡашына ултыртып,
Йәйен килеп түлләгән
Ҡош күсенә сөйөрһөң!
Ҡуян ботло ҡаратҡа
Аҡыҡ ҡашлы, ҡумлы эйәр
Һалып тағы менерһең!

Ил өҫтөнә яу килһә,
Яуыма ҡор башы булып,
Яуға ҡаршы сығырһың!

Хан һүҙене ишеткәс,
Ҡара диңгеҙ буйында
Илен талап, ҡан эсеп,
Үҙ иленә һыймайса,
Туҡтамыш ханға килеп,
Баш бей булып Урҙала,
Хан ҡыҙыны алам тип,
Өмөтләнеп йөрөүсе
Сәләхи быға тарһынған...

...Ханды, нисек булһа ла,
Кире ҡағып ҡарарға,
Иҙеүкәйҙе һарайға
Ҡорбаш итеп алмаҫҡа,
Ханға ҡарап Сәләхи
Былай тиеп һүҙ асҡан:

— Ай, оло хан, оло хан,
Үҙең белмәҫ нимә бар
Уҙа килгән быуында.
Алтын тигән ҙур Урҙа
Аҡ Урҙаға ҡалғанын
Беләһең бит, оло хан!
Аҡ Урҙанды тирәләй
Яуҙар ҡубып торғанын
Һиҙәһең бит, оло хан!
Ҡандар кисеп сыҡмайсы,
Бейҙән бейгә барырға
Юл табалмай ҡайтыусы
Илселәрең барлығын
Беләһең бит, оло хан!
Уралдан ирҙәр алһаң да,
Һарайҙа бей ҡылһаң да,
Атҡа менгән халыҡтың
Аттан төшмәй йөрөүен,

Һиңә тоҫҡар ҡылысын
Һаман ҡынға тыҡмауын
Ишетеп тә, һиҙеп тә
Тораһың бит, оло хан!

Шундай саҡта һарайҙа
Ханы менән бейҙәрҙең
Илде бергә тупларҙай,
Яуға ҡаршы торорҙай,
Илде ҡулда тоторҙай
Аҡылы кәрәк, оло хан!
Илеңә килгән Иҙеүкәй
Һыналмаған, үҙе йәш.
Урҙа һынлы һарайҙа
Буҙ баланы бей ҡылыу,
Бөтә яуға баш ҡылыу
Ҡулай булмаҫ, оло хан!

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Сәләхи уны кәмһеткәс,
Аяҡҡа баҫҡан Иҙеүкәй,
Һүҙ башлаған Иҙеүкәй:

— Ай, оло хан, һүҙ булһын,
Илем, көнөм һау булһын:
Шәрә тыуҙым әсәнән,
Уралым кейем кейҙерҙе;
Үҙ ҡуйынында үҫтереп,
Ыласындарын сөйҙөрҙө;
Йәш булһам да, ат мендем,
Ҡулыма һаҙаҡ тотторҙо.
Уралымды йәмләгән,
Үткән көнөн йырлаған,
Шайҡандарын һайраған,
Һандуғасы — ҡошона
Ирек бирмәй яҫҡыған
Бөтә йыртҡыс ҡыйғырға,
Малын ҡырған бүрегә,
Алпан-толпан йәйәүләп,
Умарта ватҡан айыуға
Тоҫҡап һаҙаҡ аттырҙы.

Ат уйнатып үҫкән һуң,
Ил аралап йөрөгән һуң,
Уралымды атам тип,
Дүрт йылғаһын әсәм тип,
Шишмәләрен тыуасам[1] тип,
Нимәрәләй[2] күреп урманын,
Ейәнсәләй — ҡоштарын,
Ете яттай[3] — йәнлеген, —
Барын танып белгән һуң,
Һаҙаҡ атмай туҡтаным.
Уралымда үҫкәнде
Бауырым тип белгән һуң,
Булат алып ҡулыма,
Атым менеп, яу сабып,
Уралыма ҡул һуҙған —
Барын дошман тип белеп,
Шуға ҡарай уҡ аттым.

Ай, оло хан, оло хан,
Илемдә ҡаҡһыр түгелмен;
Бөйҙә[4] тотҡан ҡулына
Юлбаҫар ир түгелмен;
Урын тапмай йөрөргә
Тыума бала түгелмен!

Ҡолаҡсындай сүл бүреһен,
Ала ҡанат ҡыр ҡаҙын,
Ҡояш төҫөн ашаған
Аҡһыл саптар төлкөһөн,

[1] *Тыуаса (тыуасар)* — бүлә йәки бүләсәрҙең улы.
[2] *Нимәрә* — ейән-ейәнсәрҙең балаһы, бүлә, бүләсәр; дүртенсе быуын балалар бер-береһенә ҡарата *нимәрәләр* була.
[3] *Ете ят* — алыҫ (ете быуын аша) туған.
[4] *Бөйҙә* — ҙур бысаҡ.

Боҫор урын тапмаған,
Еҥ осона етмәгән
Ҡыҙыл сикә ҡуянын,
Тал-ҡыуаҡтан зарыҡҡан
Анда-һанда ҡош-ҡортон,
Тик һыуыры, саҥҡылдап,
Типһәненә шаҥ биргән,
Ҡыҙарып ятҡан ҡом-ерен —
Береһен ерһеп килмәнем!

Шыр урманда маһайып,
Алпанлаған айыуы;
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнгән
Ҡара бауыр төлкөһө;
Кем уҙарҙан һайраған
Ағас һайын ҡош-ҡорто;
Һарайҙағы хан һымаҡ,
Ҡаяһында бөркөтө;
Алдынан ҡош уҙғармаҫ
Күк ҡарсыға, ҡыйғыры;
Мөлдөрәп торған күлендә
Ҡарасайы, өйрәге;
Йырсыһына ҡушылып,
Һылыу ҡыҙ ман ярышып,
Моҥон бөрккән ҡурайы;
Тулы ҡойроҡ, ялбыр ял,
Өйөр һаҡлар айғыры, —
Бары бергә маҡтаған
Байман табыр илем бар!
Армыт-армыт япраҡлы
Урал тигән тауым бар.
Уны ташлап нишләйем?!
Арыҫландай беләкле,
Ҡарсығалай йөрәкле
Батыр үҫтергән ете ырыу —
Алмаштырмаҫ илем бар!
Уны ташлап нишләйем?!
Оло башыҥ кесе итеп,
Һин саҡырғас, килдем мин;
Ат тирләтеп, ил ҡунып,
Урҙаҥ йөрөп күрҙем мин;
Кем ҡорһағы күпсегән,
Кем йөрәге күмһегән,
Кем һөйәге билсәйгән, —
Үҙем йөрөп күрҙем мин;
Алтын Урҙа, Аҡ Урҙа,
Аҡ Урҙа ла — ҡалғышып,
Тороп ҡалған бер урҙа;
Урҙала ла серкәшлек
Ни икәнен белдем мин.
Инде ҡунаҡ булдым мин,
Әйтер һүҙем бөттөм мин,
Ат эйәрләп ҡуйҙым мин,
Аман-иҫән, һау булыҥ,
Үҙ юлыма киттем мин, —

тип, һүҙен ҡырт киҫеп, сығып китә башлағас, хан Иҙеүкәйҙе туҡтатҡан да уны баш бей итеп ҡуйырға тигән фарманын биргән, ти.

?

**1.** Әҫәрҙә ниндәй осор тарихи ваҡиғалары сағыла? Туҡтамыш хан был ҡобайырҙа нисегерәк тасуирлана? Шул урындарын уҡып ишеттерегеҙ. **2.** Һабрау йырауҙы нисегерәк күҙ алдына килтерәһегеҙ? Ул үҙе тураһында ниҙәр һөйләй? **3.** Һабрау ни өсөн Уралды маҡтай? Уның Урал тауы хаҡында әйткәндәре менән элек һеҙ танышҡан «Ай, Уралым, Уралым» һәм Уралтау тураһындағы ҡобайырҙар араһындағы уртаҡ яҡтарҙы табып, әйтеп бирегеҙ. **4.** Туҡтамыш хан ни өсөн Иҙеүкәй батырҙы үҙенә яҡынайтырға теләй? Быға ҡаршы Сәләхи ниндәй хәйләләр ҡора? **5.** Туҡтамыш хан тәкдименә ҡарата Иҙеүкәй нисегерәк яуап бирә? Уның мөһимерәк өҙөктәрен уҡып ишеттерегеҙ. **6.** «Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосын тулыһынса уҡып сығығыҙ, ундағы ваҡиғалар, төп ҡаһармандар хаҡында һөйләгеҙ.

# Ауыҙ-тел әҙәбиәте

## ЙЫРАУҘАР ИЖАДЫ

### ҺАБРАУ

**Һабрауҙың Уралға төбәп әйткәне**

— Ай, Уралтау, Уралтау,
Кемгә ҡуныш булманы?
Даны киткән һылыуҙай,
Кемдән яусы килмәне?
Иҙеленән һыу эскән,
Ут уйнатып буйында,
Һылыу ҡыҙыны ҡосҡан
Ниндәй батыр булманы? —
Барын күргән Уралтау!
Ай, Уралтау, Уралтау,
Балаларын һайратып,
Ҡошо ла һөйгән Уралтау,
Көсөктәрен сеңләтеп,
Йәнлеге һөйгән Уралтау;
Тәңкәләй япраҡ үҫтереп,
Ағасы һөйгән Уралтау!..
...Барына төйәк булған тау,
Барына әсә булған тау,
Барына ата булған тау!

Уралда тыуған баланың
Теле сыға башлағас,
«Әсә» тигән һүҙҙән һуң,
Икенсеһе — «Уралтау!»...
...Ата-әсәһе үлгәндә
Иман теләп Алланан
Ҡанлы йәшен ҡоймаған
Һабрау ҡарт та тыуған тау,
Һабрау ҡарт та һөйгән тау!..
...Урҙа ханы ҡул һалғас,
Урал өсөн Һабрау ҡарт
Йөрәген баҫып илаған тау.

Ай, Уралтау, Уралтау,
Урал тигән данлы тау,
Күп ырыуҙы ыҙғытып,
Яу астырған шанлы тау!
Йылына ике түлләгән
Аҡҡоштай һылыу аҡ булып,
Йөнөнән өй көпләгән,
Тиреһенән тун теккән,
Табын-табын туйында,
Ҡунағындың һыйында,

Тәкәләрен ит иткән
Һарығы күп Уралтау!..
...Сәскә үбеп, бал йыйған
Бал ҡорто күп Уралтау!
Артынан һуҡмаҡ һыҙҙырмаҫ,
Алдынан кейек уҙҙырмаҫ,
Ҡырпау тояҡ ҡоралайға...
Төйәк булған Уралтау!
Яҙҙың һөйөнөс ораны —
Ҡар һыуынан туйынған
Һары күҙәнәк, күк ҡырпау,
Умырзая сәскәһе,
Ҡыҙарып сыҡҡан ҡояштың
Йылыһына ҡотайған
Япрағы күп Уралтау!
Түл йыйырға талпынып
Осоп килгән ҡоштарға,
Тирә-яғы тәңкәләй
Ҡырсын менән биҙәлгән...
...Мөлдөрәп торған алдырҙай,
Күлдәре күп Уралтау!..

...Аҡбуҙ толпарын менеп,
Диңгеҙ йөҙөп, яу асып,
Данлы Урал батырҙың
Буйлап килгән һуҡмағы —
Беҙҙең данлы Уралтау!

Ете ырыуҙың атаһы
Барын ырыу йәйҙереп,
Үҙен маҡтап һөйҙөрөп,
Барына ата булған тау!

Иҙел, Нөгөш, Яйыҡты,
Үҙән, Эйек, Ҡаҫмартты,
Алты имсәкле елендәй, —
Барын берҙәй ағыҙып,
Балаһын күреп эйгәндәй,
Әсәләй һуғарып ил иткән,
Барына әсә булған тау!
Урал — илгә ата ул,
Урал — илгә әсә ул,
Уралға тел тейҙергән —
Ата-әсәһен көйҙөргән...

...Атаһын ата тимәгән
Илгә батыр булырмы?
Әсәһен әсә тимәгән
Илгә дана булырмы?
Ата ҡәҙерен белмәгән
Илдең ҡонон белерме?
Әсә ҡәҙерен белмәгән
Батырға ата булырмы?
Илен ҡан-яу баҫҡанда,
Атаһыҙ үҫкән уҡ юнмаҫ,
Иле яуға киткәндә,
Әсәһеҙ үҫкән йөй текмәҫ...

**Һабрауҙың ир-егеттәргә әйткәне**

Айҙың моңло булғаны —
Битен монар алғаны;
Көндөң моңло булғаны —
Битен болот алғаны;
Бейек тауҙың үлгәне —
Башын томан алғаны;
Ай менән ҡояштың үлгәне —
Тонйорап барып батҡаны;
Ағыр һыуҙың үлгәне —
Өҫтөн күк боҙ алғаны;
Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны;
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны;

Ата-әсәнең үлгәне —
Баланан хурлыҡ күргәне.
Илдең нурлы булғаны —
Батырының тыуғаны;
Илде монар алғаны —
Батырһыҙ тороп ҡалғаны.
Быуын-быуын үткәндә,
Илемдән ҡалыр нимә бар?
Малдай ҡаза күрмәгән,
Кешегә бирһәң, бөтмәгән,
Үлмәй торған — яҡшылыҡ;
Илен һөйөп ат менгән…
Батыр ирҙең исеме бар…

Быуын килгән киң илдә
Урман, үлән үҫкәндә,
Тауҙың буйы йәмләнә;
Быуын килгән киң илдә
Батырҙан батыр тыуғанда,
Батыр юлынан сапҡанда,
Атанан күреп уҡ юнһа,
Илдең йөҙө йәнләнә…

## АСАН ҠАЙҒЫ

Таҙа, миңһеҙ[1] аҫыл таш
Һыу төбөндә ятаһыр.
Таҙа, миңһеҙ аҫыл һүҙ
Уй төбөндә ятаһыр.

Һыу төбөндә ятҡан таш,
Ел туҙғытһа, сыҙаны.
Уй төбөндә ятҡан һүҙ,
Шер[2] туҙғытһа, сыҙаны.

* * *

Ғәҙеллектең билгеһе —
Белә тора бормаһа.
Аҡыллының билгеһе —
Үткән эште ҡыумаһа.
Ямандарҙың билгеһе —
Яуға ҡаршы тормаһа.
Наҙандарҙың билгеһе —
Белгәндең телен алмаһа…

* * *

Күлдә йөрөгән аҡ өйрәк
Ҡыр ҡәҙерен белмәҫ,
Ҡырҙа йөрөгән дуғаҙаҡ
Һыу ҡәҙерен белмәҫ.
Тинтәк аҡыл — ямандыр,
Ил ҡәҙерен белмәҫ,
Күсеп-ҡунып йөрөмәгән
Ер ҡәҙерен белмәҫ.
Күсһә, ҡуна белмәгән,
Ҡунһа, күсә белмәгән
Йорт ҡәҙерен белмәҫ.

## ҠАҘТУҒАН

Ялан да ялан, ялан йорт,
Аҡыл урҙам ҡунған йорт,
Атам беҙҙең Һөйөнөс
Кейәү булып барған йорт,
Әсәйебеҙ Буҙтуған
Килен булып төшкән йорт,
Кескәй генә Ҡаҙтуған
Батыр булып тыуған йорт.
Кендегемде киҫкән йорт,
Кер-тәнемде йыуған йорт,
Йәнгә һаҡлау булған йорт,

[1] *Миң* — тап, миң.
[2] *Шер* — арыҫлан.

Ябағалы йәш тайлаҡ[1]
Ярҙай аҙау[2] булған ер,
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йәйелеп мең ҡуй булған ер…

Балығы тайҙай тулаған,
Баҡаһы ҡуйҙай аулаған…
Һөйгән минең Иҙелем,
Һөйгән минең Иҙелем.

## ШАЛҒЫЙЫЗ

Шекәрә болот йәй башлар,
Мөңрәгән ҡуй юл башлар,
Атыр егет ҡул башлар,
Сәсән кеше һүҙ башлар.
Ҡошто сөйһәң, бөркөт сөй,
Ҡыш туныңды төлкө итер;
Яман менән дуҫ булһаң,
Ил алдында көлкө итер;
Яҡшы менән дуҫ булһаң,
Аҙмаҫ-туҙмаҫ милекле итер.

* * *

Ялп-йолп иткән яңғыҙ ябалаҡ
Яҙмышта кемгә юлдаш булмаған?
Бүтәгәле аулаҡ буҙ ялан[3]
Кемгә генә түшәк булмаған?
Арғымаҡ менгән ҡанһыҙ хан
Кемде генә йәйәү ҡылмаған?
Яңағына ҡош оялап,
Мыйығына себен-серәкәй балалап,
Ир башҡорттоң башы
Ҡайҙа ятып ҡалмаған?

**?** **1.** Һабрау йырау Уралтауҙы ни өсөн мәҙехләй? «…Кемдән яусы килмәне? …Барын күргән Уралтау!» тип әйткәндә, Һабрау нимәләрҙе күҙ уңында тотто икән? **2.** Ни өсөн Һабрау Уралды «Ете ырыуҙың атаһы…», «Барына әсә булған тау, Барына ата булған тау» тип нарыҡлай? **3.** «Һабрауҙың Уралға төбәп әйткәне»нән ил именлегенең күп йәһәттән ғаиләнең ниндәй булыуына бәйле икәнлеген сағылдырған юлдарҙы табып уҡығыҙ. **4.** «Һабрауҙың ир-егеттәргә әйткәне» ҡобайырын уҡығыҙ, уның йөкмәткеһе хаҡында фекер алышығыҙ. Кеше халҡы күңелендә, иле тарихында иң элек ниндәй сифаттары менән ҡала? **5.** Асан Ҡайғы йырауҙың ижад емештәре ысынбарлыҡта ниндәй ҡараш менән һуғарылған? Уларҙы уҡып, үҙ фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. **6.** Ҡаҙтуған йырау ижадында тыуған ерҙе һөйөү (патриотизм), уны данлау мотивтарының нисегерәк сағылыш табыуы хаҡында фекер алышығыҙ. **7.** Шалғыйыз йырауҙың ижад емештәренә ниндәйерәк мотивтар хас? Уның менән башҡа йырауҙар ижадындағы уртаҡ һәм айырмалы яҡтарҙы асыҡлау маҡсатында әңгәмә ойоштороғоҙ.

---

[1] *Тайлаҡ* — бер йәшлек тай (дөйә, айыу балаһы).

[2] *Аҙау (аҫау)* — егелмәгән, ҡырағай (ярһып торған, уҫал). *Ярҙай аҙау булған* — мөһабәт (ҙур, көслө) аҫау айғырға (дөйәгә) әүерелгән.

[2] *Бүтәгәле аулаҡ буҙ ялан* — ваҡ ҡына япраҡлы өйкөм-өйкөм булып түшәлеп үҫкән үләнле аулаҡ, буш ятҡан (кеше биләмәгән) ялан.

# СӘСӘНДӘР ИЖАДЫ

## ҠОБАҒОШ

### АҠМЫРҘА СӘСӘН МЕНӘН ҠОБАҒОШ СӘСӘНДЕҢ ӘЙТЕШКӘНЕ*

Борон Дим буйында мең башы булып танылған Ҡобағош сәсәндең был яҡтарҙы баҫып алған Ҡарағөлөмбәт ханға баш һалмай яулашҡаны, еңелгәс, Ҡатай яғына ҡасҡаны; улдары Айбағыш менән Көнбағыштың үҙҙәренә тынғылыҡ бирмәгән Үҫәргән ырыуын ҡыйрата башлағаны; ырыу башлығы Бикбау бейҙең, илсе ебәреп, килешеү һорағаны; Ҡобағоштоң сәсәндәр әйтешендә отолғанды үлемгә хөкөм итеү шарты менән риза булғаны; Бикбау бейҙең Аҡмырҙа сәсәнен, йомаҡ ҡойҙортоп, әйтешкә әҙерләгәне, ике сәсәндең һүҙгә керешкәне

А ҡ м ы р ҙ а:

— Яманға ҡаршы тулҡынған,
Яҡшыға ҡарап урғылған,
Диңгеҙҙән дә ятыулы,
Уралдан да артыулы
Нимә булыр? — Әйт шуны,
Сәсән булһаң, тап шуны.

Булаттай үткер, яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай, яу һуйыр,
«Мин-мин» тигән, «мин» тигән,
Бауыры бөтөн Хоҙайҙай,
«Мин үҙем, мин — хан, — тигән, —
Бар фарманым — дан», — тигән
Хандан ҡурҡмаҫ бар микән, ау,
Бейҙән өркмәҫ бар микән?
Ағыр һыуҙы аҡтырмаҫ,
Юлына туҙан яткырмаҫ,
Төнлөгөн ҡурҡып яптырмаҫ,
Атанан күреп уҡ юнған,
Иркә үҫеп ир булған,
Толпар менеп ил күргән
Хандан ғәййәр[1] кем булыр, ау,
Бейҙән тайяр[2] кем булыр?

Ҡ о б а ғ о ш:

— Донъяла иң тулҡынлы,
Ҡайнап торған упҡынлы,
Уралдан да артыулы,
Диңгеҙҙән дә ятыулы —
Туңмай ятҡан ил зары, ау,
Тынмай аҡҡан ил зары.

Булаттан үткер, яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай яу һуйыр,
Ил сигендә дан алған,
Ил тышында һан алған,
Ханға ҡаршы уҡ булған,
Бейгә ҡаршы ут булған —
Сәсән булмай, кем булһын,
Сәсәнгә тиң кем булһын:
Яманлыҡты яҡламаҫ,
Дошман хәтерен һаҡламаҫ,
Яҡшылыҡты һөйөр ул,
Илдең зарын һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул,
Дауға саҡырып өндәр ул.

---

* Ҡыҫҡартып алынды.
[1] *Ғәййәр* — батыр.
[2] *Тайяр* — әҙер.

Атанан күреп уҡ юнған
Яуҙа үҫкән ир булыр,
Таянғаны ил булыр,
Ханға ҡаршы яу булыр, ау,
Ханға унан ҡан булыр.

Тау ярған да халыҡ булыр,
Таш ярған да халыҡ булыр,
Мәңге юлы ерекмәҫ[1],
Өҫтөнә туҙан яҡтырмаҫ
Батыр сапҡан юл булыр, ау,
Данды таҡҡан шул булыр.
Һыуҙар ҡайнап аҡмаҫтай,
Тулҡынын да ҡаҡмаҫтай
Тынған сағы бер булыр, ау,
Ул сағы ла шул булыр:
Илен яҡлап яу сапҡан,
Ерен һаҡлап дан тапҡан,
Ҡанһыраған батырҙың
Ҡанын йыуған саҡ булыр, ау,
Ҡанын йыуған саҡ булыр.

Ҡобағош яуап биргән һуң, Бикбау бей ҙә, Аҡмырҙа сәсән дә һүҙһеҙ ҡатып ҡалған, ти... Бикбау бей һүҙ биреп, үлемдән ҡалһа ла, аҙаҡ һүҙен боҙған. Хандан көс алып, ул да етмәгәс, ҡаҙаҡ бейҙәренә мал биреп, яу саҡырып, күп йыл буйы һуғышҡан.

Бара-бара халыҡ, Бикбау менән ханды берәм-берәм ташлап, Ҡобағошҡа ыҡлаған. Хан түҙмәгән, ҡасҡан. Бикбау ҡалған, Ҡобағошҡа буй биргән.

Ҡарағөлөмбәт бүтән хандарҙан көс алып, ил өҫтөнә килерҙе ишеткәс. Ҡобағош, ат саптырып, ил йыйған. «Был хандан ҡотолоп булмаҫ, аҡ батшанан ярҙам һорайыҡ, беҙгә ярҙам бирһен. Арала ыҙғыш бөтһөн, ырыу-ырыуға ерҙе бүлеп бирһен», — тип, Үҫәргәндән Бикбау бейҙең үҙен, Бөрйәндән Иҫке бейҙе, Ҡыпсаҡтан Ҡарағужаҡты, Тамъяндан Шаҡманды аҡ батшаға ебәргән, ти.

## ҠАРАС

### ҠАРАС МЕНӘН АҠША

Ҡобағош сәсәндең бүләһе, Көнбағыштың ейәне, Тамъян-Ҡатай йорт-ерендә йәшәгән (хәҙерге Науруз ауылы урынында) Ҡушкилде батырҙың улы Ҡарас сәсәндең атаһы һымаҡ уҡтан атыр мәргән батыр булғаны; башҡорт яуҙарында, ҡаҙаҡ барымталарына ҡаршы көрәштә ҡатнашҡаны, сәсәнлеге менән халыҡ араһында дан алғаны; Ҡарас сәсәндең бер ваҡыт, буҙ ҡашҡаһын менеп, утыҙлап һыбайлыһын эйәртеп, ҡаҙаҡ барымтасыларын ҡыуып еткәне, уларҙың башлығы Аҡша алдына сығып, ҡобайыр менән ошоларҙы әйткәне.

[1] *Ерекмәҫ* — бер ерҙә (урында) туҡтап (ныгынып) ҡалмаҫ мәғәнәһендә.

— Балаһы Ҡушкилденең,
Ҡарасымын,
Яу килһә, алға сапҡан барасымын,
Атҡыстар йыйылышып
майҙан тотһа,
Һәр ваҡыт беренсегә талашсымын.
Йөрөмәгән ҡырҙан ҡырға
атҡан уғым,
Ҡалъяным ике яҡта әле лә туғын,
Һырт биреп, ҡурҡаҡтарса
ҡаса бирмә,
Ҡотолмаç ҡасҡан менән
ни бар тубың,
Ҡарасҡа ҡул күтәргән
ниндәй ирһең?
Атаң кем, ырыуың кем,
ҡайһы ерһең?
Ҡараһам тал буйыңа, батырҙарса,
Күргәс үк, ялт әйләнеп,
туҡтай бирҙең.
Атыңды әйт, был донъянан
юйырмын мин,
Уғымды ҡыҙыл ҡанға
буярмын мин.
Илеңдә аша тыуған батыр булһаң,
Хур итмәй, тәрбиәләп
ҡуйырмын мин.
Менгәнем аçтымдағы
ҡашҡа, тимен,
Ҡан түкмәй, илеңде
һин күрер булһаң,
Күк, ала — күп
йылҡыны ташла, тимен.
Ҡаҙағым, батыр булһаң,
бирсе киҙәк,
Уғымды мин атырмын һиңә төҙәп;
Теләгән урыныңды һайла, батыр,
Ҡыуғыға — боронғонан
әүәл киҙәк.

Йылҡыларҙы ҡыуып алып китеп барыусы барымтасылар башлығы ла, Ҡарасҡа яуап итеп, һис ҡурҡыуһыҙ-ниһеҙ, шулай тип әйткән, ти:

— Күп йөрәктәр жыулаған
Аҡша тигән атымдан;
Шәжәрә килгән затымдан.
Ай-һай һалып йырланың,
Киләһалып яҡындан,
Батырмын, тип маҡтандың,
Һынашмай тороп ҡапылдан.
Аҡша батыр тигәндә,
Күп батыры ҡалмыҡтың
Яҙа ине аҡылдан;
Саяндай сağа һөйләнең,
Һиçкәнмәйсә, таҡылдап;
Аҡша һынлы батырҙан
Ҡулдағы малды ҡайтарып
Алһаң, — алға сығырһың
Аҡ яулыҡлы ҡатындан.
Алты аластың эсендә
«Аҡша батыр...» тигәндә,
Аблай хандың батыры
Йығыла ине атынан.
Үҙең бер йәш балаһың,
Уттай геүләп янаһың;
Килә һала айҡаштың,
Байҡамай батыр самаһын.
Киҙәгеңде ал, балам,
Бер киҙәктән юйылһаң,
Һерәйеп ҡатып ҡалаһың.
Күгәреп ятҡан күк арҡа, —
Торған ерҙән күрһәтәм
Атышыр ерҙең самаһын.
Ҡан түкмәй, балам, тарта бир
Ҡыҙыулап килгән юлыңдан,
Татымай үлем язаһын.

Батырға кергән күп малды
Һаҙаҡлы йөҙ ҡаҙаҡтан
Яңғыҙың ҡалай алаһың?

Ҡарас быны ишетеү менән, Аҡша самалап күрһәткән арҡаға сабып барып етә һалып, атышыуға яһана башлай. Ат өҫтөндә көйө янын ҡороп, ҡулына һаҙағын алып, уйға ҡала. «Тәүҙә мин уның ҡалъянындағы һаҙаҡтарын ҡыра атайым: мәргәнлегемде күреп, бәлки, ҡан түкмәйенсә, малды именлек менән генә ҡалдырып китерҙәр», — тип уйлай. Ҡулындағы һаҙағын ҡалъянына кире һалып, ҡуҙы яурын тигән икенсе бер һаҙағын ала. Шунан, атырға уҡталып, ҡуҙы яурын менән ҡороулы янына ҡарап, былай тип әйтемсәген әйтә:

— Йылан башлы киң яным,
тартҡан саҡта,
Шытырлап һынып китһәң —
һиңә хурлыҡ.
Ҡуҙы яурын ҡорос
башаҡ, бәлдәгәндә,
Тайшайып, ҡырын китһәң —
һиңә хурлыҡ.
Туғыҙ толом, аҡ ебәк, туғыҙ үрем,
Сиралып, серкеп китһәң —
һиңә хурлыҡ.
Серәнеп тартып та мин алалмаһам,
Билдәле, ул ваҡытта —
миңә хурлыҡ,
Ҡуҙы яурын ҡорос башаҡ,
тейгән саҡта,
Ҡаҡлығып, өҙалмаһаң —
һиңә хурлыҡ.
Ҡалъянды өҙгәнсе аталмаһам,
Билдәле, ул ваҡытта — миңә хурлыҡ.

Ҡарас шулай ти ҙә, өҙәңгегә баҫыңҡырап бәлдәй биреп, янын тартып ебәрә. Аҡшаның уң яҡлап аҫылған ҡалъянындағы һаҙаҡтары пара-пара туҙып, сыра-сыра юнылып, ян-яҡҡа осоп барып төшәләр. Аҡша быға ғәжәпһенеп: «Күрҙегеҙме был баланы, атышыуына ҡарағанда, бик яман күренә. Ҡалмыҡтың Ванишлихай батыры менән осрашҡанда ҡыймылдамаған йөрәгем һулҡ-һулҡ итеп ҡалды ғуй», — ти. Шунан һуң, үҙенең киҙәге буйынса, Ҡарасҡа атырға йыйына. Аҡша батыр атыр алдынан яны менән һаҙағына былай ти:

— Ҡуҙы яурын ҡыу йәйә,
Тарта алмаһам — миңә хурлыҡ;
Тартҡан саҡта, сатнаһаң,
Ул ваҡытта — һиңә хурлыҡ;
Тоҫҡаған ергә тейгеҙмәй,
Яҙа тартһам — миңә хурлыҡ.
Ашыу-ашыу бил икән,
Аша бер һуҡҡан ел икән;
Ҡашҡайып торған убала
Һынаша торған ир икән.
Ҡаҡ эйәрҙең ҡашы, тип,
Ҡаҡ йөрәктең төҫө, тип,
Үлер ереӊ ошо, тип,
Тоҫҡаны батыр һаҙағын.

Аҡша батыр бәлдәп атып ебәргән. Һаҙаҡ Ҡарастың өҫтөндәге (тимер) һауытын үтеп ҡаҙалырға өлгөрмәй ҡалған, Ҡарас уны йәһәт кенә тотоп алып, ҡалъянына һалып ҡуйған, ти.

Хәҙер киҙәк Ҡараста. Ул әҙ генә уйланып торғандан һуң, һаҙағының башағын бәке менән монап һындырып ала, сөнки башаҡ һаҙаҡҡа тимер һауыттың дүңгәләге аша үтеп инергә ҡамасаулай. Шунан Ҡарас башаҡһыҙ һаҙағының осон бишкә телә лә, Аҡшаға тоҫҡап ата, һаҙаҡ һауыттың биш дүңгәләгенән биш нәҙек уҡ булып үтеп, Аҡшаның күкрәген селтәр һымаҡ итеп үтәләй тишеп сыға. Аҡша батыр, уй-бай, тип, атынан ҡолап төшә. Аҡшаның юлдаштары Ҡарасҡа ташланырға өлгөрә алмайҙар: шуны ғына көтөп торған ҡыуғынсылар уларға ата башлайҙар.

Аҙаҡ килеп, үҙҙәренең башлыҡтарын һәм бер нисә кешеһен юғалтҡан барымтасылар йылҡы көтөүен ҡалдырып, ҡайтып китергә мәжбүр булалар.

Аҡшаны, йығылған урынында ҡәбер ҡаҙып, күмеп ҡуялар. Ҡәбере өҫтөнә таштан ҡурған өйәләр. Батырҙың баш осона билдә итеп бер һаҙаҡ ҡаҙап ҡуйғандан һуң, Ҡарас шулай тигән, ти:

— Заманында күп тартыш
күргәнһең һин,
Донъянан күп батырҙы
һөргәнһең һин;
Башҡорттоң атҡыстарын
тиңгә алмай,
Тарпандан алты аласта
йөрөгәнһең һин.
Һауытты йырта атыр
ир икәнһең,
Батырҙың ашып тыуған
бере икәнһең;
Ил һүтеп, үҙеңә тиң таба алмай,
Сыҙамай йөрәгеңә йөрөгәнһең.
Ҡашҡайып киҙәк бирҙең,
ҡаршы тороп,
Көрәштең батырҙарса,
түште киреп;
Һауытты серегән боҙҙай
итә яҙҙың,
Китмәне әҙ-әҙ генә өҫтән туҙып,
Бынан һуң һинән батыр
күрмәҫ күҙем,
Урынлы, маҡтанһаң да,
әйткән һүҙең;
Ут йөрәк арыҫландай
Аҡша батыр,
Ҡуйайым тәрбиәләп мин дә үҙем.
Таш менән ҡурған итеп
ҡаҙҙым гүрең,
Аталыр исемең менән
ятҡан урын;
Бер һаҙаҡ баш осоңа
ҡаҙап ҡуйҙым,
Әйтһендәр: «Батыр үткән
беҙҙән борон».

? **1.** Ҡобағош сәсән Аҡмырҙа сәсән менән ни өсөн әйтештә ҡатнаша һәм ниндәй шарт менән? **2.** Аҡмырҙа ҡуйған шиғри йомаҡты уҡығыҙ, эстәлеген һөйләп бирегеҙ. Уны сискән яуабында Ҡобағош сәсән нимәне Уралдан да бейегерәк, диңгеҙ һыуынан да мулыраҡ тип иҫәпләй? **3.** Ҡобағош сәсән сәсәндәрҙең ил-көр тормошонда уйнаған ролен

нисегерәк баһалай? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: Ҡобағош сәсәндең яуабынан һуң, ни өсөн Аҡмырҙа сәсән дә, Бикбау бей ҙә баҙап ҡалған? **4.** Ҡарас сәсәндең ҡаҙаҡ батыры Аҡшаға мөрәжәғәтенән беҙ уның ниндәй сифаттарға, таһыллыҡҡа эйә сәсән икәнлеген күрәбеҙ? **5.** Аҡша аҡындың яуабына ниндәй стиль хас, унда уның ниндәйерәк холоҡ-фиғелле кеше булғанлығы тойола? **6.** Ҡарас сәсәндең Аҡшаны ерләгәндән һуң әйткәнен уҡығыҙ, үҙегеҙгә ҡайһы уй-фекерҙәр, кешенең ниндәй сифаттары оҡшаны?

# БАЙЫҠ

## БАЙЫҠ СӘСӘНДЕҢ ҠАҘАҠ АҠЫНЫ БОХАР МЕНӘН ӘЙТЕШКӘНЕ

Байыҡ Салауаттың атаһы Юлай, уның атаһы Аҙналы менән Әй буйын биләгән Байназар тархандың улы булған. Байназар тархандың биш улы: өлкәне Байыҡ, икенсеһе Танып, өсөнсөһө Тайып, дүртенсеһе Ҡайып, бишенсеһе Танһыҡ булған.

Үҙе сәсән булып, Байыҡ атаһынан йәшләй айырылған, ил гиҙгән. Үҙ алдына көн иткән Тайыбы Аҙналы тархандың ҡыҙын урлаған да был диярҙа[1] тормаған, ҡаҙаҡ араһына тайған. Танып менән Ҡайыбы бер яуҙа ғәйеп булған. Байназар төпсөк улы Танһыҡ менән көн күргән.

Танып менән Ҡайып ғәйеп булған яуҙа Байыҡ та, Юлай ҙа булған. Яуҙан һуң, улай итеп, былай итеп, атаһы Юлайҙы аҡлатҡан. Байыҡ, морон төртөр ер тапмай, ҡаҙаҡ араһына ыҡлаған[2].

Шунда йөрөгәндә Байыҡтан ҡаҙаҡ аҡындары көлөп, мыҫҡыл итергә уйлап, былай тигән:

Истәк булдың, бар булдың,
Киң далала зар булдың.
Үҙеңә йомаҡ әйтәйем,
Тапһаң, улым итәйем;
Тапмаһаң, ҡолом итәйем:
Көндөҙ ҡуйым көтөрһөң,
Кисен йөнөн тетерһең,
Йоҡом ҡалды тимәҫһең,
Көндөҙ сырым итерһең.
Киң далала ҡуш ағас,
Ҡуш ағастың ҡуш башы —
Бер ҡаҙанға һыймаҫтай
Ҡуш ҡусҡарҙың ҡуш башы
Бар икән ил ҡашҡаһы[3].
Ат башындай ҡаҡ ерҙән
Яра төшкән аҡ түгел,
Ай менән көндәй икәүһе,
Яңғыҙланған таҡ түгел.

---

[1] *Дияр* — урын, ер, ил.
[2] *Ыҡлаған* — киткән, ыңғайлаған.
[3] *Ҡашҡа* — батыр.

Байыҡ:

Киң далам тип әйткәнең —
Иленән ҡасҡан был истәк
Маҡтаһын тип көткәнең —
Мин дә күргән ер икән,
Һин дә белгән ер икән.

Ағас-таштан ҡыу булғас[1],
Өҫтөн япҡан нар ҡылған[2],
Сағыл тауҙан ҡыу булғас,
Шараҡ[3] ҡыҙҙай һын булғас,
Ҡомдан сөйәлдәй тау ҡылған;
Һум[4] елендән һөт аҡмаҫ,
Һыуһаған йотом һыу тапмаҫ —
Дала тигәнең шул икән.
Турһыҡтай[5] бурһыҡ үҫтергән,
Ҡарһаҡтан[6] барын буҫтырған[7],
Бутаһын юйған нары ман[8]
Ишәктән моңло ҡысҡырған,
Бүтән моңо булмаған,
Һип-һил торған сүл икән.

Ҡаяла талпынған бөркөтөн,
Толпарҙа елпенгән егетен
Алмаштырған бер бөтөн, —
Дөйә өҫтөндә ялпанлап,
Ҡолаҡсыны һәлпәнләп,
Ҡаҙаҡ тигән ир икән.
Ҡуш ағасым тигәнең —
Киң далала ҡуш ылаш[9];
Ҡаҙағыңды киптергән
Киң далала Ҡуш Алаш[10].
Ҡуш ағастың ҡуш башы,
Тап Алаштың ҡашҡаһы —
Бер ҡаҙанға ҡуш антын
Һалып бергә ҡайнатҡан,
Туҡалдай[11] кейәү һайлатҡан
Абылай солтан хан икән.

Шунан һуң ҡаҙаҡ бейҙәре Байыҡты тоторға эҙләй башлаған. «Илгә айҙар[12], йөрәккә хәнйәр булырға итә икән», — тип, юҡ итергә уйлағандар. Байыҡ ҡасҡан, кире Уралға ҡайтҡан.

## БАЙЫҠ СӘСӘНДЕҢ САЛАУАТ БАТЫРҒА ӘЙТКӘНЕ

Күп һыуҙар аҡҡан, күп йылдар үткән. Байыҡ сәсән — айҙар булып, Аҙналы улы Юлай старшина булып дан тотҡан. Берҙән-бер көн Байыҡ мәмерйәнән сығып, Ҡылыстауҙың башына менеп уйланып ултырған да, Юлайға бармаҡ булып, юлға сыҡҡан. Китеп барғанда һунарға сыҡҡан Салауатҡа тап булған. Исәнлек-һаулыҡ һорашҡан. Салауат үҙен танытып, Байыҡтың кемлеген һорағас, Байыҡ былай тигән, ти:

— Һөйләһәм, һүҙ оҙайыр,
Тыңлаһаң, һинең тағы ла

[1] *Ағас-таштан ҡыу булғас* — ағас-таш булмағас.
[2] *Нар ҡылған* — дөйә ҡылғаны (үлән).
[3] *Шараҡ* — сибек.
[4] *Һум* — тулы.
[5] *Турһыҡ* — күн һауыт.
[6] *Ҡарһаҡ* — ялан төлкөһө.
[7] *Буҫтырған* — өркөткән.
[8] *Бутаһын юйған нары ман* — балаһын юғалтҡан дөйә менән.
[9] *Ылаш* — ҡорот киптерә торған таҡта.
[10] *Ҡуш Алаш* — Ҡуш Урҙа.
[11] *Туҡал* — тол ҡатын.
[12] *Айҙар* — данлыҡлы, атаҡлы.

Ҡолағың шәмдәй төҙәйер;
Кем булһа ла булайым,
Шуны әйтеп уҙайым:
Ил тигәндең кеме юҡ —
Бейе лә бар был илдең,
Ире лә бар был илдең,
Ике арала йөрөүсе
Теле лә бар был илдең.
Ҡыҙы ла бар был илдең,
Наҙы ла бар был илдең,
Ҡыҙ алам, тип туҡмалған
Таҙы ла бар был илдең.
Күсе[1] лә бар был илдең,
Көсө лә бар илдең;
Күсен ситтәр талағас,
Үсе лә бар был илдең.
Илдең ире тиһеңме,
Таланған күстән айырылған —
Шуларҙың бере тиһеңме?
Туҡмалып та таҙ ҡалған,
Ҡаны ағып һаҙ булған,
Яуызды күрһә, ҡарйыған[2],
Йөрәгенән матҡыған[3],
Асыуҙа ҡайнап сыныҡҡан,
Уралда аунап ереккән[4],
Ҡанһыраған арыҫландай
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартымын!
Аты юҡҡа — атымын,
Яуызға һаман ятымын.
Торор йорто юйылған,
Балалары һуйылған,
Батырҙары ҡыуылған
Ил сәсәне, ҡартымын.
Атҡа менеп сабырҙай
Юлдаш эҙләп юлыма,
Ҡаяла башаҡ ҡайрашыр
Ҡорҙаш эҙләп ҡонома,
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартымын.
Айҙар тигән атым бар.
Ҡулымдан ҡорал һалмаҫҡа
Илгә биргән антым бар!
Салауат тигән исемең
Ишетеп беләм ҡолаҡтан,
Исемеңде ишетеү —
Белеү түгел йөрәктән.
Юлыма тап килгән һуң,
Әйтә торған һүҙем бар!
Уралда үҫкән күп батыр,
Батыр юлын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Ҡаяла башаҡ ҡайраған,
Егет булып бары ла
Һылыу ҡыҙын һайлаған, —
Бары ла үткән, ҡалмаған.
Батырын тапҡан ил ҡалған,
Батырҙар сапҡан юл ҡалған.

Батырҙар сапҡан — ил тигән;
Хандар сапҡан — ҡол тигән,
Йөҙ егерме ауылды
Ҡыуҙай үртәп көйҙөргән,
Ил өҫтөнә яу ҡылған,
Ил таларға дау һалған,
Илде ҡанға йөҙҙөргән,
Тәфтиләү ҙә сапҡан, дан тигән.
Ат йөҙҙөрөп күҙ йәшкә,
Ошаҡ тейәп тиктәҫкә,
Олатайың Шәғәле,
Уның улы Аҙналы, —
Улар ҙа сапҡан, мал тигән.

Ҡол теләгән ҡол алған,
Мал теләгән мал алған,
Яу теләгән яу һалған, —
Бары ла үткән, ҡалмаған.

---

[1] *Күс* — ырыу, халыҡ.
[2] *Ҡарйыған* — нәфрәтләнгән.
[3] *Матҡыған* — ҡыҫып тотҡан.
[4] *Ереккән* — ныҡынған.

Хан башын да ер йотҡан,
Тәфтиләүҙе лә ер упҡан,
Шәғәлене лә ҡуймаған,
Уның башына ил еткән,
Аҙналыны ла аҙаҡтан
Янаралы эт иткән, —
Бары бөткән, ҡалмаған.
Ҡаяға тамған ҡан ҡалған,
Батырҙар сапҡан юл ҡалған,
Дошманға бысаҡ ҡайраған
Бөтмәй торған ил ҡалған.

Аҙналының балаһы
Инде Юлай ни көтә?
Яумы көтә, дан көтә?
Атаһы юлын эҙләйме?
Батырҙар юлын күҙләйме?
Өйөнә төбәп барайым,
Йөҙөнә күҙ һалайым,
Йөрәге нисек һуҡҡанын
Тел төбөнән беләйем.
«Батырҙар юлы ерекҡән,
Саң баҫҡан, эҙләп тапманым,
Ҡылысым үтмәҫ, тутыҡҡан,
Ҡаяла ҡайраҡ тапманым», —
Тиһә: «Бына — мин! — тирем, —
Батыр юлын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Алдыңа килгән ҡарт, —
тирем, —
Ат өҫтөндә сапҡанда,
Алдыма дошман баҫҡанда,
Елем менән дошманды
Ҡолата килгән ҡарт!» — тирем.

Байыҡтың һүҙен ишеткәс, Салауат та аңлаған. Байыҡ ҡартты үҙе менән бергә алып ҡайтып киткән.

Юлай менән өсәүһе һөйләшеп, һүҙ үткәндәрен саҡырып, бергә кәңәш төйнәшеп, яу башларға булғандар.

Һуғышта былар еңелгән. Башлыҡтары Пугачёв та, Салауат менән Юлай ҙа — барыһы ла ҡулға алынған. Әлеге Байыҡ ҡарт меҫкенгә тағы ла ҡасҡы булып йөрөргә генә ҡалған. Артынан эҙәрләү төшкәс, кемгә генә барһа ла, барыһы ла ҡурҡҡас ҡурсыуҙан, Байыҡ бөтөнләй күҙ йырған[1]. Берәү күрмәгән, белмәгән — ғәйеп булып юғалған.

## БАЙЫҠ СӘСӘНДЕҢ ҠАЙТАНАН КИЛЕП СЫҠҠАНЫ, ХАЛЫҠҠА ТУҒАНЛЫҠТЫ АҢЛАТҠАНЫ

Күп йылдар үткән, һыуҙар аҡҡан. Яуҙа ғәйепләнгәндәрҙең аҫылдары аҫылған. Һөргөнгә ебәрелгәндәрҙең ҡайһылары ҡайтышып, тыныс торам тигәндә, тағы ла бер ғауға ҡупҡан. «Французлар яу асҡан, Мәскәүҙе килеп баҫҡан. Батша ҡасҡан», тигән хәбәр таралған. Ил ҡарттары йыйылып, түрәһәрә һөйләшеп, ат-хат еткән ерҙән саҡырып, илде йыйғандар. Батша фарманын уҡып, кәңәш-төңәш

[1] *Күҙ йырған* — күҙҙән юғалған.

иткән саҡта, ҡәбер төбөнән сыҡҡан кешеләй, башын-күҙен йөн баҫҡан, аҡ һаҡалы биленән ашҡан Байыҡ та йыйынға килгән. Танығандар булғандыр. Берәү бер һүҙ әйтмәгәс, барыһы ла аптырап, Байыҡҡа ҡапланып ҡарағас, Байыҡ былай тигән, ти:

Алыҫтан ҡарайып күренгән
Тулҡын да тулҡын тигәнем —
Көтөүселәр өйөргән
Йылҡы микән тигәнем —
Тулҡын түгел, ил икән,
Ил йыйылған ер икән.
Ат саптырып йыйҙырған
Туй тигәне — шул микән?
Сәләм бирһәм, алмаҫтай,
Һүҙемә ҡолаҡ һалмаҫтай
Күҙгә сағылған күбегеҙ
Ябай түгел, бей һымаҡ;
Араға һалған һүҙегеҙ
Балалай түгел, ир һымаҡ[1].
Ниңәлер һүлпән туйығыҙ —
Үлек сығыр өй һымаҡ!

Мин дә әйтһәм берәй һүҙ,
Туйға килгән ир һымаҡ,
Һүҙем ҡырын ҡаҡмаҫһыҙ,
Ҡағырҙай ир юҡ һымаҡ.
Арағыҙҙа кем булһын:
Тарханмы, кәрәк бей булһын,
Миңә тимәһә, тау ярыр
Ҡылыс тотҡан ир булһын, —
«Мин уҙаман» тиерҙәй,
Һунарым алып, ҡарт булып,
Ҡанъяғаһын[2] төйөрҙәй,
Түргә ултырып, баш тотоп,
Баш ҡойҡаһын ейерҙәй
Барыбер берәү табылмаҫ!
Булһа ла, күҙемә сағылмаҫ,
Азамат булып танылмаҫ!

Күп йәшәгән ни белгән,
Күпте күргән шул белгән!
Шулай ҙа йөҙгә еткәндә
Белгәнем әйтеп үтмәһәм,
Хатам күҙгә төрткәнде
Тағы ла әйтеп үтмәһәм,
Үле тәнем, йыуылып,
Һыу менән генә аҡланмаҫ!
Яманаттан бүтәнем[3] —
Ил телендә һаҡланмаҫ!
Ҡәберем күргән уба тир,
Иҫкә лә алмаҫ, һоҡланмаҫ!

Йөҙ йыл буйы уйлаған,
Халыҡҡа шулай һөйләгән,
Ҡанға аунап эҙләгән
Бер уйым бар тапмаған,
Һыуға ла төшөп аҡмаған,
Һаҙға ла төшөп батмаған,
Мин генә түгел эҙләгән,
Күптәр сапҡан, тапмаған.
Ул уйымдың эсендә —
Көнләшеү түгел тарлыҡтан,
Зарлыҡ та түгел
ҡартлыҡтан, —
Өнө сыҡмай ҡапланған
Ил теләге, ҡарлыҡҡан;

---

[1] *Балалай түгел, ир һымаҡ* — йәғни ир-егеттәр хәл итерлек ҙур мәсьәлә.
[2] *Ҡанъяға* — эйәр бауы.
[3] *Яманаттан бүтәнем* — йәғни яҡшы даным, изгелектәрем.

Өҫтө ҡанға тапланған
Ил теләге тарлыҡтан.

«Хан, хан, — тигән күп
ирҙәр, —
Алып килә дан, — тигән, —
Ҡаны башҡаға ҡан, — тигән, —
Беҙ алырбыҙ дан», — тигән.
Сыңғыҙ килгән: «Мин! — тигән, —
Мин ҡунаҡмын, тимәгән.
Ил өҫтөнә ҡул йәйгән,
Мин китәмен, тимәгән.
Улын, бейен үҫтергән,
Ҡара ҡошон тотторған,
Барынан ант иттергән, —
Илдең ҡанын эс, — тигән, —
Сергенән[1] ҡанда кис, — тигән, —
Ҡанын, динен һорама,
Бары беҙгә ҡол, — тигән, —
Эт һанындай хан үҫһен,
Яуыҙлыҡта дан үҫһен,
Беҙгә терәк шул», — тигән.

Быуын-быуын үткәндә,
Хандар килеп киткәндә,
Хандан илгә ни ҡалды?
Эркелеп ҡандан һаҙ ҡалды,
Ил таланып таҙ ҡалды,
Өҫтөндә бөтмәҫ зар ҡалды.
Олатайҙар дихайға[2]
Мәскәүгә баш эймәгән,
Яҡла, тип, Аҡ батшаға
Юҡҡа тик ант бирмәгән!
Ай, ант, тигән, ант, тигән,
Антың йотма, тот, тигән,
Ярлыҡамаҫ ят, тигән,
Ятҡа анттан ҡайт, тигән.
Туғанға биргән аҡ антты
Менер аттай көт, тигән.

Ай, ят, тигән, ят, тигән,
Ят тигәнде бел, тигән,
Ул ят тигән — кем, тигән?

Һыйлашҡанда дуҫ яҡшы,
Һөйөшкәндә ҡыҙ яҡшы,
Китапҡа оҙон һүҙ яҡшы,
Яуға менһәң, буҙ яҡшы;
Башыңа бәлә килгәндә,
Яман булһа ла күргәндә, —
Үҙ туғаның шул яҡшы:
Ике туған талашыр,
Атҡа менһә, ярашыр!
Туған, туған, тигәс тә,
«Ул туған кем?» — тигәс тә,
«Ата, әсә бер булған
Ҡарындашмы?» — тигәс тә,
Берәүҙең яңғыҙ балаһы
Кемде ҡарындаш тир икән?
Әсә лә һөттәш булмаһа,
Кеме һыулаш — шуны әйтер;
Йылғала һыулаш булмаһа,
Кеме ерҙәш — шуны әйтер.
Бер әсәнән түлләгән
Ҡыҙҙан бажа булмаһа,
Бер тупраҡты еҫкәгән
Ҡыҙҙан бажа — шуны әйтер.
Бер йылғанан һыулаған,
Бер тупраҡта аунаған,
Әсәләй күреп шул ерҙе,
Ырыҫын шуға төйнәгән[3],
Төйәкләнеп, туҡланып,
Йәндәй күреп, һоҡланып,

[1] *Серге* — эйәр аҫтына һалынған кейеҙ.
[2] *Дихайға* — бушҡа.
[3] *Ырыҫын шуға төйнәгән* — бәхетен шуға бәйләгән.

Йыр йырлаған, көйләгән,
Моңон-зарын үҙ-ара
Бер-беренә һөйләгән, —
Ирме булһын, ҡыҙ булһын,
Батшамы ул, кем булһын,
Шул тупраҡта түлләһен,
Илде ҡурсып үрләһен, —
Бер туғаның шул булыр.

Мәскәүҙә ҡупҡан шау, тиҙәр,
Килеп баҫҡан яу, тиҙәр.
Француз булһын,
кем булһын, —
Ситтән килгән ят булыр.
Унан илгә ҡот булмаҫ,
Баҫҡан ере ут булыр,
Үҙе Сыңғыҙҙай эт булыр.
Ил сигенә ят баҫҡан,
Ҡунаҡ түгел, яу асҡан.
Мәскәү бит оран һалған:
«Аҡ батшаға ант биргән
Ирҙәр менһен ат!» — тигән.
Батша бит һөрән һалған:
«Илде баҫты ят!» — тигән.
Минең дә һүҙем шул булыр:
Ант боҙғанға ни булыр? —
Таяныр терәге юҡ булыр,
Ҡаңғырып йөрөр Байыҡтай,
Тынлыҡ тапмай хур булыр.

Байыҡты танып, һүҙен дә ишеткәс, бөтә халыҡ умарта ҡортондай гөжләшеп күтәрелеп киткән... Кантон башлыҡтары ат-хат еткән ергә сабарҙар[1] саптырып, сер алышып, Иҙел терһәге Көнгәккә[2] йыйылырға булып һүҙ ҡуйышҡандар, ти. Һәр ерҙә йәштәр ат һайлап, нуҡта һуғылмаған аҫауҙарҙы[3] тотоп өйрәткән. Урманда уҡ юнып, аласыҡта ҡыҙаштар[4] һаҙаҡ һуғып, тана-турпы һуйып, ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып, ҡорот йәйеп, ҡаймаҡ яҙып, май тасҡап, тире ыҫлап, турһыҡ тегеп, көнтөн ағытмай бейә һауып, ҡымыҙ йыйып, кейем-һалым тайярлап, яуға әҙерләнгәндәр. Байыҡ та, үҙенең атын эйәрләп, ҡулына ҡылысын тотторол, улы Әхмәтте яуға кейендергән.

Бөтә ҡарт-ҡоро, бисә-сәсә, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын, бишектән төшкән, түшенән шыуған, аяҡҡа баҫҡан бала-сағаның береһе ҡалмай, оҙатырға килгәндәр.

Әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегәр еп биргәндәр. Бисә-сәсәләр, күкрәктәренә уҡ-һөңгө теймәһен тип, ирҙәренең түштәренә тәңкә теккәндәр. Ҡыҙ-ҡырҡындар, сер һаҡлаусы булығыҙ, тип, егеттәргә нағышлы янсыҡтар биргәндәр...

Наполеонды еңеп, һуғыш бөткәс, уландары ҡайтҡанда, Байыҡ йөҙ ҙә ике йәштә булған, ҡурайҙа «Байыҡ» көйөн уйнап, батырҙарҙы ҡаршы алған.

---

[1]*Сабар* — хәбәр илтеүсе һыбайлы.
[2]*Көнгәк* — тау исеме.
[3]*Нуҡта һуғылмаған аҫауҙар* — ҡулға өйрәтелмәгән аттар.
[4]*Ҡыҙаштар* — ут ҡулланмайынса тимерҙән сүкеп төрлө нәмә эшләү оҫтаһы.

?

**1.** «Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохар менән әйтешкәне» ни өсөн әйтеш тип атала? Был әйтештә кем еңеп сыға? **2.** Байыҡ сәсән Салауатҡа ниндәй өгөт, өндәмәләр әйтә? **3.** Ни өсөн Байыҡ сәсән халыҡҡа мөрәжәғәт итә? **4.** Был ҡобайырҙарҙың үҙегеҙгә оҡшаған урындарын ҡабатлап уҡып ҡарағыҙ. Ни өсөн оҡшағанын әйтеп бирегеҙ.

# Салауат Юлаев

(1754 – 1800)

## ЯУ

Заманалар булған элгәре,
Булған илдең батыр улдары.
Баш етмәҫлек эштәр эшләгәндәр,
Бөтә ғаләм белгән уларҙы.
Ғүмер буйы йөрөп яуҙарҙа,
Йыйған улар һанһыҙ дуҫтарҙы,
Еңгән улар бик күп батырҙарҙы,
Ҡырған улар һанһыҙ дошманды.
Ҡурҡмағандар сихырсынан,
Аждаһалай уҫал яуыздан,
Ен-пәрейҙең мәкер-хәйләһенән,
Йылан сәсә торған ағыуҙан.
Рухым күтәрелде минең дә,
Эйәрләнем мин дә атымды.

Дошман сафын тар-мар итергә
Изге яуға уҡтай атылдым.
Мин ҡыйраттым дошман
сафтарын.
Өс йөҙ дошман һөжүм иттеләр.
Бик күптәре аяҡ аҫтында
Кәүҙәләрен тупраҡ иттеләр.
Яуыз дошман яуы эсенән
Атым алып сыҡтым аҡланға.
Аҡландағы йылға ситендә
Ултырып, тәсбих әйтеп Аллаға,
Изге яуға тағы барам мин,
Азатлыҡ һәм шөһрәт табам мин.

## УҠ

Һауаларға уҡ сойорғоттом,
Ҡарлуғасҡа тейҙе уҡҡынам,
Аяҡҡайым янына ҡолап төшкәс,
Меҫкен ҡошто йәлләп юҡһынам.

Һауаға атҡан уҡҡайым
Тау, урмандар аша уҙһасы.
Ҡарлуғасҡай ҡошто үлтергәнсе,
Бер дошмандың йәнен өҙһәсе.

## ЕГЕТКӘ

Бейектә оса ҡоҙғон ҡош,
Унан бейек осор ыласын бар.
Ыласындан да бейек оса торған
Ҡош батшаһы — ҡыйғыр
бөркөт бар.

Шул бөркөттәй, егет, батыр бул.
Тайғаныңда таян дуҫтарға.
Яуҙа арыҫландай ажғырып,
Йән аямай ташлан дошманға.

## ҺАНДУҒАС

Төнгө тынлыҡ. Ағаслыҡта
Һандуғас моңо.
Күктеме, ерҙеме данлай?
Кем белә уны.
Йырлаймы күктә балҡыған
Ҡояштың нурын?
Әллә айға арнағанмы
Һандуғас йырын?
Әллә арналғанмы ул йыр
Яҡты йондоҙға,
Йәйрәп ятҡан яландарға,
Хәтфә болонға? —
Мин белмәйем.

## ТИРМӘМДӘ

Тирмәм тора көмөш кеүек
Йылға ярында.
Хуш еҫле сәскәләр үҫә
Тирә-яғында.
Көтөүҙәр йөрөй. Мин үҙем
Ятам тирмәмдә.
Туғандарым, яҡындарым
Минең эргәмдә.
Шул саҡта тирмәм ишеген
Асырға ҡуштым.
Төн буйы тыңланым моңон
Һандуғас ҡоштоң.
Ниндәй яҡшы, ниндәй татлы
Булды бөгөн төн.
Керпек тә ҡаҡмай үткәрҙем
Ошо төндө мин.

## ЗӨЛӘЙХА

Зөләйха, һин ергә ингән хур ҡыҙы,
Күҙҙәреңдә балҡый Зөһрә йондоҙо.
Күҙҙәрең, гүйә, төндәге күк йөҙө,
Яҡтыра шул күҙҙәреңдә ай үҙе.

Ер хуры һин йәки ожмах шәүләһе,
Һындарың, гүйә, фәрештә кәүҙәһе.
Мин, бахыр, һине,
Зөләйха, ныҡ һөйәм.

Әйтә алмайса һүҙҙәремде,
баш эйәм.
Һиңә дан йырлар өсөн телем зәғиф,
Һөйөүемде әйтергә һүҙем зәғиф.
Зөләйха, һин ерҙә йөрөгән
хур ҡыҙы,
Күҙҙәреңдә яна күктең йондоҙо.

## БҮГӘСӘҮГӘ ҠУШЫЛЫП, ИР-БАТЫРҒА ҠУШ БУЛЫП...*

Алыҫ та алыҫ ерҙәрҙә,
Беҙ күрмәгән илдәрҙә
Дон тигән йылға бар икән.
Йылғала йөҙгән балыҡҡа,
Эшләп көн күргән халыҡҡа,
Тирҙәрен түккән улдарға,
Ай кеүек һылыу ҡыҙҙарға
Донда ла тормош тар икән,
Унда ла тормош тар икән.

Дон буйынан ҡуҙғалып,
Яҡ-яғына күҙ һалып,
Бүгәсәү тигән бер батыр,
Йәмәлкә тигән ир-батыр,
Сал бөркөттәй саңҡылдап,
Янған үрттәй ялҡынлап,
Халыҡҡа оран ташлаған,
Ялпыға хитап[1] ташлаған.

Тауҙарҙы үткән был хитап.
Һыуҙарҙы кискән был хитап.
Бүгәсәү батыр янына
Ғәскәр килгән бихисап.
Эйәрләп, атҡа менгән дә,
Биленә ҡылыс элгән дә,
Бүгәсәү тигән шул батыр,
Йәмәлкә тигән ҙур батыр,
Арыҫландай ажғырып,
Юлында ҡойон яндырып,
Түрәһе менән батшаның,
Баяры менән батшаның,
Байҙары менән батшаның,
Һанаты менән батшаның
Алыш та атыш башлаған.

Дуҫтарын йыйған Бүгәсәү,
Дошманын ҡырған Бүгәсәү,
Һуғышта алған дан менән
Яйыҡҡа еткән Бүгәсәү.
Аңлағыҙ ошо телмәрҙән:
Ул миңә хәбәр ебәргән,
Бығаулының ҡулынан
Бығауын йолҡам, тигән ул;
Тышаулының аяғынан
Тышауын йолҡам, тигән ул;
Ерһеҙ ҡалған башҡортҡа
Ерен бирәм, тигән ул;
Һыуһыҙ ҡалған башҡортҡа
Һыуын бирәм, тигән ул;
Ҡол булып килгән башҡортҡа
Иркен бирәм, тигән ул.
Башҡорттар үҙ ерендә,
Тыуған-үҫкән илендә,
Ҡош булып, күккә менһендәр,
Балыҡтай һыуҙа йөҙһөндәр,
Боландай ерҙә елһендәр, —
Ана шулай тигән ул.
Хәбәрем бар күп ерҙәрҙән
Батыр ҙа батыр ирҙәрҙән:
Тамъянынан, Бөрйәндән,
Юрматы, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән,
Түңгәүерҙән, Ҡатайҙан,
Йәшенән, ҡарт атайҙан, —
Бары ла әҙер торалар.
Бары ла уҡ-ян ҡоралар.
Ауыҙ эсендә тел йөрөй,
Тел осонда һүҙ йөрөй:
Аҫыл алтын сапанлы
Батша, тиҙәр, Бүгәсәү;
Аҫыл көмөш эйәрле
Атта, тиҙәр, Бүгәсәү,

---

* Халыҡта был ҡобайыр «Салауат телмәре» тип йөрөтөлә.

[1] *Хитап* — мөрәжәғәт, манифест. Әҙәбиәттә шиғри жанр.

Аҫыл алтын сапанлы
Батша булһа ла Бүгәсәү,
Аҫыл көмөш эйәрле
Атта булһа ла Бүгәсәү,
Баяр башын ҡыя икән,
Һанат башын ҡыя икән,
Ирек алып килә икән,
Ер, урман, һыу бирә икән,
Башҡортҡа ана шул еткән.

Йыл артынан йыл үтте,
Ҡыш булды ла, боҙ китте.
Нисәмә йылдар буйына,
Ҡамыт кейгәндәй муйынға,
Бөркөттәй саңлар заманда
Тыныс тороп ҡараныҡ;
Бай, түрәләр ни ҡушһа,
Шуны эшләп ҡараныҡ;
Ни һораһа бай, түрә,
Шуны биреп ҡараныҡ.
Билде лә бөктөк хеҙмәттә,
Тирҙе лә түктек хеҙмәттә;
Алтын да биреп ҡараныҡ,
Атын да биреп ҡараныҡ.
Түрәнең тамағы туйманы,
Йәбер-золомон ҡуйманы:
Меңәрләп малды ҡыуҙылар,
Йөҙәрләп йәнде ҡыйҙылар;
Ил ағаһы ирҙәрҙең
Күҙенә ҡурғаш ҡойҙолар;
Аҫыл да аҫыл ҡыҙҙарҙы
Ҡол итеп ситкә ҡыуҙылар.
Ҡан һауҙы инде күҙебеҙ,
Бөттө инде түҙемебеҙ!
Бүгәсәүгә ҡушылып,
Ир-батырға ҡуш булып,
Казактарға иш булып,
Яуға сығыр көн етте,
Ирек яулар көн етте!

Туй барғанда, түш киреп,
Көрәшкә сыҡҡан — батырмы?
Икәүҙән-икәү алышып,
Ҡорҙашын йыҡҡан — батырмы?
Халҡына йәне ҡушылған,
Дошмандан илен ҡурсыған,
Эйәрләп атҡа атланған,
Ажғырып яуға ташланған, —
Илдең батыры шул булыр,
Илдең күрке шул булыр.

Атҡа менегеҙ, ирҙәр, ағалар,
Асылһын әйҙә иҫке яралар!
Яраларҙы ирек уңалтыр,
Яуыз дошман башын юғалтыр!
Ҡурҡмаҫ булһа ирҙәр яранан,
Уҡ та үтмәҫ беҙҙең аранан!
Батырмын, тип кем әйтмәй, —
Яу килгәндә йүне юҡ;
Сәсәнмен, тип кем әйтмәй, —
Яу килгәндә өнө юҡ.
Һайлап алған һылыуындан
Ҡанлы йәшен түктермәй,
Һөтөн имгән әсәйеңдең
Ҡайғынан билен бөктөрмәй,
Тотҡон ҡоштай башҡортҡа
Әҙер ирек бармы ни?

Ялт-йолт иткән ябалаҡ
Яҙмышта кемгә юлдаш булмаған?
Бутәгә үлән, буҙ ялан
Кемгә түшәк булмаған?
Яғаһына ҡош оялап,
Яңағына себен-серәкәй балалап,
Ир-егеттең башы ҡайҙа ятып
ҡалмаған?
Йөк күтәреп бил бөктөрмәй,
Хахылдап ҡан түкөрмәй,
Иҙел кисмәй, ут үтмәй,
Хәләл ҡаныңды түкмәй, —
Башҡортҡа тиң ирек бармы ни?

Күк ыласындың балаһы
Бауҙа үлә талпынып,
Яҡшы атаның балаһы
Шәһит үлә яу йөрөп.
Ҡарсыға үтмәҫ урмандан
Ыласын үтә таң менән.
Михнәт менән көн күргәнсе,
Яуҙа үләйек дан менән!
Ҡулыма алған был күмер —
Йортобоҙҙан ҡалған күмер ул;
Утҡа ташланған сабый балалай,
Һулҡылдап янған күмер ул.
Ҡулымды көйҙөргән шул күмер
Эшебеҙгә геуаһ[1] булһынсы.
Күмергә әйләнгән күк үлән
Юлыбыҙҙа түшәк булһынсы, —
Бөркөттәй күктә осорға,
Балыҡтай һыуҙа йөҙөргә,
Боландай ҡырҙа елергә —
Теләгебеҙ шул булһынсы!

Бүгәсәүгә ҡушылып,
Ир-батырға ҡуш булып,
Казактарға иш булып,
Шул теләкте яулайыҡ,
Шул иректе яулайыҡ!

**?** **1.** «Яу», «Уҡ», «Егеткә» шиғырҙарын яттан тасуири һөйләгеҙ, уларҙың идея-эстетик әһәмиәтен асығыҙ. **2.** «Һандуғас», «Тирмәмдә» шиғырҙарында шағирҙың тәбиғәт гүзәллегенән тыуған тойғоларын билдәләгеҙ. **3.** «Зөләйха» шиғырын юғары хис менән уҡығыҙ. **4.** «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып...» ҡобайырын тасуири уҡығыҙ. Пугачёв ихтилалының ҡайҙа һәм нилектән башланып китеүен билдәләгеҙ. **5.** Ҡобайырҙа Бүгәс батшаның нисек тасуирланыуын күрһәтегеҙ. Уның телмәрен ҡысҡырып уҡығыҙ. **6.** Ҡобайырҙа ил батыры тураһында әйтелгән фекерҙе күрһәтегеҙ. **7.** Ҡобайырҙың ер өсөн, ирек өсөн яуға саҡырған өндәмәһен уҡып ишеттерегеҙ. **8.** «Бүгәсәүгә ҡушылып...» фоноязмаһын тыңлағыҙ. Башҡорттарҙың Бүгәсәүгә ҡушылыу сәбәптәрен аңлатығыҙ. **9.** «Бүгәсәү», «Салауат» тигән халыҡ йырҙарының яҙмаһын тыңлағыҙ. **10.** Салауат әҫәрҙәренең күркәм тел байлығына күҙәтеүҙәр үткәрегеҙ. **11.** Пугачёв менән Салауат тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡыуығыҙ, «Салауат Юлаев» энциклопедияһынан ниндәй мәғлүмәттәр белеүегеҙ хаҡында фекер алышығыҙ.

[1] *Геуаһ* — шаһит.

# Боронъо һәм урта быуаттарҙағы ҡульъяҙма әҙәбиәт

## ҠОЛ ҒӘЛИ

### ЙОСОФ ВӘ ЗӨЛӘЙХА*

Беренсе фасыл

**Йософтоң төшө**

Ғәзиз Йософ тамам
ун бер йәштә ине,
Яҡуп илсе[1] итәгендә йоҡлар ине,
Йоҡлағанда ғәжәп бер төш
күрҙе Йософ —
Мәғәнәһен атаһынан һорап инде:
«Нурлы ҡояш, тулған ай,
ун бер йондоҙ
Төшөмдә сәждә ҡылды[2] миңә төп-төҙ,
Был төшөмдә шулай күрҙем,
һис бер шикһеҙ,
Йә, атай, шул төшөмдө юра инде...»
Яҡуп шунда юрап бирҙе
уның төшөн:
«Булыр, — тине, — бәхетле һәм
ҡотло эшең...»

Яҡуп улына: «Ун бер аға-энең һиңә баш эйер, бер саҡ үҙең батша булырһың, тик был төшөңдө бер кемгә лә һөйләй күрмә», — ти. Ләкин Яҡуп менән улы Йософтоң ошо һөйләшеүен бер үгәй ҡыҙ тыңлап тора ла туғандарына барып әйтә. Ағалары атаһынан Йософто үҙҙәре менән ауға барып ҡайтырға тип һорап, яланға сығалар һәм уны бер ҡойоға ташлап һәләк итмәк булалар. Ҡом сүлендә бер ҡойо табып, ағалары Йософто шул ҡойоға ташлайҙар. Өйгә ҡайтҡас, атаһына, Йософто бер бүре ашаны, тип ялғанлайҙар. Бына ҡанлы күлдәге генә ҡалды, тиҙәр.

* Дастан-поэманан өҙөктәр. Иҫке төрки яҙма теленән әҙәби телгә күсереп бирелде.

[1] *Илсе* — бында «атаһы» мәғәнәһендә.

[2] *Сәждә ҡылды* — баш эйҙе.

Сүл буйлап китеп барыусы бер каруан, ҡойо янына туҡталып, һыу алырға булһалар, төшөргән силәктәренә йәбешеп Йософ килеп сыға. Быны ситтән күҙәтеп торған ағалары, «беҙҙең ҡолобоҙ ҡасҡайны, ул ҡол беҙҙеке» тип, Йософто каруансыларға ҡоллоҡҡа һатып ебәрәләр.

Каруансылар баҙарҙа Йософто Мысыр иленең вәзиренә һаталар. Йософ бик сибәр егет була. Вәзирҙең Зөләйха исемле ҡатыны Йософҡа ғашиҡ була.

## Алтынсы фасыл

Ҡолаҡ һалып тыңлағыҙ
ошо һүҙҙе:
Ул Зөләйха — батша
балаһы Таймус ҡыҙы,
Тулған ай тик[1]
балҡыр ине уның йөҙө,
Ожмахтағы хур ҡыҙына
оҡшар инде.
Зөләйха бер көн ойоп
йоҡлар ине,
Шунда Йософ һынын
ул төштә күрҙе,
Күреү менән шундуҡ уға
ғашиҡ булды, —
Илай-илай уянып та китер инде.

Зөләйха Йософто икенсе тапҡыр ҙа төшөндә күрә һәм уның Мысыр илендә икәнен белә. Атаһы уны Мысыр иленә кейәүгә бирә. Ләкин сыҡҡан егете Йософ булмағанын белгәс, бик ныҡ үкенә.

Бер саҡ Мысыр баҙарында, Йософто һатҡанда, уны маҡтап былай тиҙәр:

Өндәүселәр ҡысҡырып иғлан итәләр:
«Был уғылды кем һатып ала?» —
тинеләр,
«Уның ун төрлө һөнәре бар», —
тинеләр,
Һөнәрҙәрен улар шунда
һанар инде:
Беренсенән — буйы зифа,
һылыу үҙе,
Икенсенән — күрекле
һәм нурлы йөҙө,
Өсөнсөнән — теле бик саф,
тоғро һүҙе, —
Етмеш ике телде тамам белер инде.
Дүртенсенән — кешелекле
һәм шәфҡәтле,
Бишенсенән — Алып
батырҙай йөрәкле,
Алтынсынан — бик күптәрҙән
ул ҡеүәтле, —
Көс-ҡеүәте ҡыр(ы)ҡ ирҙән
артыҡ инде...

Мысыр батшаһы һатып алғас, Йософ батша һарайында йәшәй башлай. Йософто һарайҙа күреп, Зөләйха тамам һуштан яҙа — үлеп ғашиҡ була.

## Һигеҙенсе фасыл

### Зөләйханың Мысыр ҡатын-ҡыҙҙарына әйткәне

Мысыр илендәге бөтә ҡатындар,
Быны ишетеп, үҙ-ара һөйләштеләр,
Ул ҡатындар
Зөләйханан көлөштөләр, —

[1] *Тик* — кеүек.

Һәр береһе бер төрлө һүҙ
һөйләр инде:
«Зөләйха үҙ ҡолона ғашиҡ булған,
Ҡоло буйһонмаған,
ҡыҙ рисуай[1] булған.
Эштең ниҙә икәнен ире белгән,
Ҡоло артынан йөрөгәнен
күргән инде».
Зөләйха был һүҙҙәрҙе
ишетеп белде,
Бик ҙур табын әҙерләргә
ҡарар ҡылды,
Ҡунаҡ булып дүрт йөҙ
ҡатын-ҡыҙ килде,
Барыһы ла түргә уҙып
ултыра инде.
Зөләйха Йософто матур кейендерҙе,
Үҙ ҡулдары менән сәсен үрҙе,
Ҡулына ҙур ҡыҙыл алтын
табаҡ бирҙе, —
Йософ уны табынға илтер инде.
Ул ҡатындар
теҙелешеп ултырҙылар,
Берәр бысаҡ
һәм әфлисун килтерҙеләр,
«Әфлисунды турағыҙ!» —
тип бойорҙолар, —
Тап шул ваҡыт Йософ килеп
инер инде.
Йософ ингәс, боролоп ҡаранылар,
Матурлығын күреп уның
таң ҡалдылар,
Һәммәһе күҙен алмай ҡарап уға
Әфлисун тип бармаҡтарын
киҫә инде.
Шулай итеп хайран
ҡалып ҡаранылар,
Үҙҙәренең
бармаҡтарын туранылар,
Турауҙарын һис тә генә
тоймаңылар, —
Һәммәһе лә шул ҡәҙәре
хайран инде.
Зөләйха әйтте: «Инде
үҙегеҙ күрҙегеҙме,
Йөҙөм ниңә һулығанын белдегеҙме,
Бер күреүҙә ҡулығыҙҙы
киҫтегеҙме —
Һушһыҙ булып
төштөгөҙмө? — тине инде.—
Мин Йософто күргәнемә
ете йылдыр,
Уға булған ғишҡым
көн дә арта торор,
Мин, бисара, һаман әле түҙә инем,
Сабырлығым һеҙҙекенән
артыҡ икән.
Күрҙегеҙме — минең
ауырыу асылы ниҙән,
Был уғландың йөҙө нурлы
тыуған көндән,
Буйы зифа, теле татлы тағы унан,
Йөҙөн күргән йәнен фиҙа
ҡылыр инде!»

Өҙөлөп яратыуына иғтибар итмәгән өсөн Зөләйха бик ҡаты асыуы килеп, Йософто хаҡһыҙ ғәйепләп, төрмәгә яптыра. Йософ төрмәлә бик оҙаҡ ултырып, Мысыр батшаһының бер төшөн юрап, был бәләнән ҡотола. Батшаның төшөндә ете һимеҙ, ете арыҡ һыйыр күреп, һимеҙҙәренең ябыҡтарын ашап бөтөүен Йософ илгә ете йыл

[1] *Рисуай* — оятлы.

туҡлыҡтан һуң ете йыл аслыҡ килерен юрай. Батша Йософто вәзир итеп ҡуйғас, Йософ ете йыл иген уңған йылдарҙы бик күпләп иген запасы әҙерләтеп, алда килгән аслыҡ йылдарында илде асығыуҙан һаҡлап ҡала. Аслыҡтан интеккән ағалары иген эҙләп Мысырға килеп сығалар һәм күп итеп иген һатып алалар. Йософ ағаларын таный, әммә ағалары уны танымай. Икенсе тапҡыр иген алырға килгәндә генә Йософ үҙен таныта. Ләкин ул ағаларынан үс алмай, төрмәгә лә яптырып ҡуймай. Күп итеп иген биреп ебәрә, күлдәген атаһына бирергә ҡуша. Шул күлдәкте күҙенә ҡаплау менән, улына ҡайғырып һуҡырайған атаһы Яҡуп күҙле булып китә. Аҙаҡ Йософ Зөләйхаға өйләнә. Матур итеп донъя көтәләр.

### Хәтимә[1]

Был ҡиссаны уҡыр аҡылы
булған кеше,
Тыңлаусының күңеле
ирер, ағыр йәше...
Быны яҙған бәндәнең
исеме Ғәли,
Егерме дүрт ижек менән
төҙөнө уны...
Тарих йылының алты
йөҙ туғыҙында
Был бәндә кеше был
китапты яҙҙы инде.

?

**1.** Йософтоң төш күреүе һәм уны атаһының нисек юрауы тураһында һөйләгеҙ. Ағаларының Йософҡа ни өсөн яуызлыҡ ҡылыуҙарын аңлатығыҙ. **2.** Йософтоң нисек Мысыр иленә барып юлығыуын, унда ниҙәр күреүен һөйләгеҙ. Йософтоң батша вәзире булып китеүенә нимә ярҙам итеүен аңлатығыҙ. **3.** Төп герой Йософҡа ҡылыҡһырлама бирегеҙ. Уның зирәклеге, таҫыллығы, кешелеклелек сифаттары тураһында һөйләгеҙ. **4.** «Йософ вә Зөләйха» дастанынан Йософтоң күркәм сифаттары һүрәтләнгән өҙөктө уҡып күрһәтегеҙ. Ата менән ул, бер туғандар, батша, вәзир һәм халыҡ мөнәсәбәттәренең поэмала нисек сағылыуын билдәләгеҙ. **5.** Әҫәрҙә яҡшылыҡ менән яманлыҡ көрәшенең, төрлө әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләренең, мөхәббәт хистәренең нисегерәк тасуирланыуын яҡтыртығыҙ. **6.** Зөләйха образына ҡылыҡһырлама бирегеҙ. Уның Йософҡа нисек ғашиҡ булыуын һөйләгеҙ. Зөләйха тасуирланған өҙөктө поэманан уҡып күрһәтегеҙ. **7.** Зөләйханың көслө мөхәббәте Йософҡа нисек тәьҫир итеүен күрһәтегеҙ. **8.** Кешеләрҙең бәхет, яҡшылыҡ, изгелек өсөн ынтылышы, төрлө золом, яуызлыҡтарҙы кире ҡағыуы, мөхәббәт хистәре, сабырлыҡтары һеҙҙә ниндәй тойғолар тыуҙырыуын әйтегеҙ. **9.** Әҫәрҙең тулы вариантын уҡығыҙ, идея-эстетик асылы, художестволы кимәле хаҡында фекер алышығыҙ.

[1] *Хәтимә* — йомғаҡ.

## ЮРМАТЫ ЫРЫУЫ ШӘЖӘРӘҺЕ*

Бер заман йылдар ҡытлыҡ булды. Ҡыш бик оҙаҡ булды, өс йылғаса йылҡы, ҡуй бөттө, игендәр һис уңманы, күп халайыҡтар дарманһыҙ булдылар, вә күп халайыҡ ас-яланғас ҡалдылар. Нуғайҙар йыйылып кәңәш ҡылдылар. Боронғо аталарыбыҙ Кубандән килеп, ер-һыу тип, һалҡын ер, һалҡын һыу эҙләп килгәндәр, әммә ҡыш һыуығы көн эҫелегенән яман, имеш... Беҙгә был ер лайыҡ булмаҫ, тип, һанһыҙ нуғайҙар боҫар[1] булдылар. Әммә ярлы-ябыҡ Бурнаҡ бейгә әйттеләр: «Яҡшы ваҡытта бергә торҙоҡ, инде заман булғас, беҙҙе ҡайҙа ҡуйып китәһегеҙ, беҙ ҡайҙа барайыҡ?» — тип бик ялбарҙылар иһә, Бурнаҡ бей күсмәҫ булды. Әнеһе Йәдкәр мырҙа баш булып, һанһыҙ нуғайҙар менән Кубангә күстеләр. Әммә туғыҙ йөҙ ҙә илле өстә ине, Ағиҙелдең бында үрге осо Нөгөш, түбәнге осо Күгеш, шуларҙан сыҡҡан таралма һыуҙары, яландары менән билəп торалар ине. Өс йөҙ нуғай, ырыуҙары менән Йәдкәрҙән ҡалғас, улар тағы ла Кубангә киттеләр. Бурнаҡ бей менән ҡалғандар иштәк аталдылар[2]. Ошбу нуғайҙан ҡалған буш ерҙәрҙә ғүмер һөрҙөләр. Иҙел буйҙарында һәм урмандарҙа бал ҡорто менән, һыуҙа ҡондоҙ менән, яланда һыуһар, төлкө менән хәрәкәт итеп ғәни[3] булдылар.

Йәнә тарих туғыҙ йөҙ ҙә илле дүрт ине, барса иштәк Бурнаҡ бейҙең әмере менән торҙолар. Бурнаҡ бей вафат булғас, бейлекте Тәтегәскә тапшырҙылар. Тәтегәс бей булған һуң, тарих туғыҙ йөҙ илле туғыҙҙа, сысҡан йылында, Ҡазан шәһәр урыҫ алды. Шунан һуң Аҡ бей батша булды... Өс түбә халҡынан өс кеше алып, әүәл Аҙнай баба, икенсе Илсекәй Тимер баба, өсөнсө Ҡармыш баба менән дүртебеҙ бер аҙ яр-юлдаштар алып, Ҡазан шәһәренә барып, Аҡ бей батшаға баш һалдыҡ. Ярлыҡаш[4] яҙыуҙар алдыҡ.

**?** **1.** Юрматы ырыуының боронғо ата-бабалары кемдәр булған, улар ҡайҙан килгән? Йәдкәр мырҙа ҡасан һәм ни өсөн Кубангә күсеп китә? **2.** Бурнаҡ бей кемдәрҙе тыңлай, уларҙы кемдәр тип атайҙар? **3.** Башҡортостандың физик картаһынан Юрматы ырыуы биләгән ерҙәрҙе күрһәтегеҙ. Ырыу кешеләренең көнкүреше тураһында һөйләгеҙ. **4.** Бурнаҡ бейҙән һуң кем ырыу башлығы булып тора? **5.** Аҡ бей Ҡазанды ҡасан һәм ни өсөн баҫып ала? **6.** Башҡорттарҙың үҙ иректәре менән Рус дәүләтенә ҡушылыуҙарын, ярлыҡаш ҡағыҙы алыуҙарын һөйләгеҙ. **7.** «Башҡорт шәжәрәләре» тигән китап менән танышып сығығыҙ. Ырыу тарихын билдәләүҙә шәжәрәнең әһәмиәтен күрһәтегеҙ.

---

* Шәжәрәнән бер өҙөк.

[1] *Боҫар* — ҡасып китер, йәшенер.

[2] *Иштәк аталдылар* — башҡорт тип исемләнделәр.

[3] *Ғәни* — бай.

[4] *Ярлыҡаш* — ярлыҡ ҡағыҙы, договор.

# ҮҪӘРГӘН ЫРЫУЫ ШӘЖӘРӘҺЕ*

Башҡорт халҡы бабаһы,
Бей Туҡ-һаба уғланы,
Мөйтән тимәккә уны,
Хаҡ яратмыш дан уны.
Мәшһүр итәйем уны:
Күреклек ҡылмыш ес(е)мене,
Булмыш ирҙең арыҫланы,
Йөҙөн күрмеш әҙме
Ғиззәт[1] итерме уны…
Алып йөрәкле һиммәте,
Халыҡ эсендә ғиззәтле,
Булмыш уның дәүләте.
Арғымаҡтан ат алды,
Сын аҫылдан зат алды,
Биш пар дөйә йөк артты[2],
Хан Сыңғыҙға ул барҙы.
Ғиззәтләне уны хан,
Урын бирҙе янынан,
Мәдех[3] алмыш һәм хандан,
Вәзир ҡылмыш дәртенән.
Батшаны дауам көҙәткән,
Мәжлестәрен төҙәткән,

Ғиззәт — хөрмәт күп иткән,
Көйлә тиһә, көйләгән,
Һөйлә тиһә, һөйләгән,
Һәр маҡсатын ул алған.

Унан ҡайтып бей Мөйтән
Үҙ илендә биләгән.
Инде Мөйтәндең балалары…
Уның балалары
Һәр ырыуға айырылған.
Мөйтән уғлы Үҫәргән,
Нәҫеле булған үҫәрмән[4],
Был заманда дүрт волосы
Үҫәргән исемен күтәргән.
Үҫәргән уғлы Шәғәле,
Ат ябыуы соғалы[5]
Ҡылып киткән нәҫеленә
Ул да изге доғаны.
Уның уғлы Беҙек бей,
Мәжлестәре төҙөк бей,
Күп мәжлестәр төҙәтеп,
Хандан алған йөҙөк бей.
Уның уғлы Йөрөк бей,
Сапҡан аты йөрөк бей,
Рәғейәтте[6] бирмәгән
Дошманына ирек бей.
Уның уғлы Урал бей,
Бабаһының исеменә
Ул да алған оран бей.
Уның уғлы Толобай,
Сөләймән менән Йософтай
Ул да булған олуғ бей.

**?** **1.** Үҫәргән ырыуы башҡорттарының ата-бабаһы кем булған? **2.** Үҫәргәндең улы Мөйтән нисек йәшәгән, Сыңғыҙ ханға ни өсөн барған, һуңынан үҙ илен нисек биләгән? **3.** Шәжәрә нигеҙендә Үҫәргән ырыуының быуындар күсәгилешлеген күрһәткән схемаһын төҙөгөҙ.

---

* Шәжәрәнән бер өҙөк.
[1] *Ғиззәт* — хөрмәт.
[2] *Йөк артты* — йөк тейәне (алды).
[3] *Мәдех* — маҡтау.
[4] *Үҫәрмән* — үҫеүсән, үрсеүсән.
[5] *Соғалы* — юғары сифатлы.
[6] *Рәғейәт* — алдынғылыҡ.

## БАТЫРШАНЫҢ БАТШАҒА ЯҘҒАН ХАТЫ*

Ҡыш көнөндә Өфө ҡәлғәһенән[1] указ ҡеүәте берлә теләп мине вә һәм Ирәкте иләүенән[2] Шәриф старшинаны Уран Урта ауыл тигән ауылға алдырҙылар, Султыҡ старшинаның теркә малын китаб хөкөмө берлә мираҫ эйәләре араһында өләшер өсөн. Йортобоҙҙан өс көнлөк ер булыр. Ул Уран иләүендә алты көн торҙом, теркә малды тикшереп вә һәм мәжлестәрҙә йөрөп. Унда йомошло вә һәм йомошһоҙ күп кешеләр йыйылдылар, ғалимдар мәжлесен күреп нәсихәттәр вә ғибрәттәр алыр өсөн... Шунда һүҙҙәр һөйләнеләр вә әйттеләр: «Беҙҙең урман тарафлы халайыҡтарыбыҙ, башҡорттарыбыҙ вә һәм ғәйреләребеҙ[3] ғәйәт бәһлеүәндәрҙер вә һәм уҡ атырға ғәйәт мәргәндәрҙер. Ҡырҡар-иллешәр тинлек санай йәйәләребеҙ ялан башҡорттарының унар-егермешәр һумлыҡ әҙернә йәйәләренән артыҡтыр. Уның өсөн ни ҡәҙәр эҫе һаүа көн булһа ла, атышҡан һайын ҡеүәтләнәлер, атҡан уҡтарыбыҙ һәр гиз[4] кейеккә туҡтамайҙыр. Вә һәм саңғы берлә йөрөргә шул ҡәҙәр оҫталар, урман эсендә ҡасҡан кейек ҡотолмайҙыр. Алдында арҡыры ятҡан ат бейеклек ағастарҙы аша һикереп сығалар, юлдан елгән саңғылы кешеләребеҙгә етмәйҙер. Вә һәм йөрәклелектә шул ҡәҙәрләрҙер, уҙған йылдар мәғрәкәһендә[5] Ғәйнә иләүенең уртаһына меңәрләгән кеше полкы килеп, арбанан ҡәлғә һуғып яттылар, Ғәйнәне сабыр өсөн. Шул ваҡытта беҙҙең ғәйнәләр дүрт йөҙ ҡәҙәре кеше уҡ-һөңгө берлә дошмандың өҫтөнә сабып, ҡәлғәһен алып, тамам ҡырҙылар вә туптарҙы ҡулға төшөрҙөләр. Ярашыу булғандан һуң туптарын килеп алдылар. Имде был хәлдә дошман яфалары хәлдән кисте. Киләһе йәйҙә шәйәт[6] мәғрәкәләр булырҙар, тип һөйләнеләр. Унан һуң өйөмә ҡайттым. Йәнә бер ай миҡдарынан һуң Гәрәй иләүенә мине алдылар. Юғарыла йәд ҡылынған[7] рәүештә теркә малы өләшер өсөн унда һәм алты-ете көн торҙом. Унда һәм Уран иләүендә һөйләгән һүҙҙәргә оҡшашынса һөйләнеләр...

Унан һуң шул уҡ ҡыш көнөндә хәмәл йондоҙонда[8] бер башҡорт килде. Бер яҙыу бирҙе. Һораным: «Кем һин, ни ерҙән һин?» Әйтте: «Нуғай юлы Кәлсер иләүенән Исмәғил тигән кеше буламын». Әйттем: «Ҡайҙа бараһың?» Әйтте: «Әй буйына барамын».

---

* Әҫәрҙән бер өҙөк.
[1] *Ҡәлғә* — крепость.
[2] *Иләү* — волость.
[3] *Ғәйре* — башҡалар.
[4] *Һәр гиз* — һәр ваҡыт.
[5] *Мәғрәкә* — ваҡиға; һуғыш, яу.
[6] *Шәйәт* — бәлки.
[7] *Йәд ҡылынған* — хәтергә алынған.
[8] *Хәмәл йондоҙо* — ғәрәпсә ҡышҡы ай исеме.

Әйттем: «Был яҙыу кемдән?» Әйтте: «Уҡыһаң, мәғлүм булмаҫмы?» — тине. Ғорфиә аҡса[1] илә баҫылған пичатты боҙоп уҡыным...

Мин әйттем: «Әй, Исмәғил, был яҙыуҙан мәғлүм түгелдер, һис кешенең исеме юҡ, — тинем. — Һиңә кем бирҙе?» — тинем. Ул әйтте: «Мин яҙыуҙы танымайым. Муллабыҙ илә писарыбыҙ Ырымбур тарафына барып йөрөнөләр. Бер-ике тапҡыр йөрөп килгәс, был яҙыуҙы миңә бирҙеләр, һиңә тапшырыр өсөн. Улар был яҙыу кемдән икәнлеген әйтмәнеләр. Вә ләкин әйттеләр: «Уҡымаҡ илә тиҙ фәһем итер был яҙыу кемдән икәнлеген», — тинеләр», — тине.

Унан һуң, йәғни был ҡәҙәр хәлдәрҙе аңлағандан һуң, ҡарар ҡылдым, тәдҡир вә тәхризнамә[2] яҙмаға. Йәғни өгөтләмәк вә ҡыҙҙырмаҡ яҙыуҙы яҙмаға ҡарар иттем.

?

**1.** Батыршаның Уран иләүендә күргәндәрен һәм ишеткәндәрен һүрәтләп бирегеҙ. **2.** Урман халҡының бәһлеүәнлеге, мәргәнлеге, саңғыла оҫта йөрөүе, йөрәкле булыуы тураһында һөйләгеҙ. Уларҙың кемдәр тип йөрөтөлөүен әйтегеҙ. **3.** Батырша Гәрәй иләүендә ниҙәр күрә? **4.** Батыршаға ниндәй хат килә, ул нимә яҙырға ҡарар итә? **5.** Ғ. Хөсәйеновтың «Ҡанлы илле биш» тигән романын уҡып сығығыҙ һәм фекер алышығыҙ.

---

[1] *Ғорфиә аҡса* — баҡыр аҡса.

[2] *Тәдҡир вә тәхризнамә* — яуға күтәрелергә саҡырыу өндәмәһе.

# XIX быуат башҡорт әҙәбиәте

## ҠУҘЫЙКҮРПӘС МЕНӘН МАЯНҺЫЛЫУ*

Борон, Иртыш йылғаһы башланып киткән ерҙә, бер башҡорт ырыуында Ҡарабай тигән бик абруйлы кеше ғүмер иткән. Уның яңғыҙ көн иткәнен күреп, башҡа башҡорттар ҙа тирмә ҡороп, шул тирәгә килеп ултырғандар.

Ҡарабайҙың мал-тыуары ишле булған, ырыуҙаштарын да ул мал аҫрауға һәүәҫләндергән. Уның өс бисәһе булған, иллә-мәгәр береһенән дә бала булмаған. Бының өсөн ул бик бошонған. Ҡарабай йәйләү кешеләре менән бергәләп ҡаҙаҡ далаларына һунарға йөрөр булған. Уңышлы юл йөрөү, табышлы һунарҙар Ҡарабайҙы бик сәмсел һунарсыға әйләндереп ебәргән.

Берҙән-бер көндө һунарҙа йөрөгәндә, улар өҫтөнә бер арыҫлан килеп сыға. Әлек бер ҙә күренмәгән был йыртҡыс януар һунарсыларҙы сигенергә мәжбүр иткән. Тик бер Ҡарабай ғына урынынан ҡуҙғалмай тора бирә. Ул, ғәйрәтләнеп, ҡырма башлы уғын йәйәһенә ҡуя ла керешен тарта. Арыҫлан, ҡот осҡос ялын тырпайтып, ҡойроғо менән янбаштарына һуға-һуға, батырға табан аҡрын ғына килә башлай; яҡынлашҡас, бер һикереүҙә уның өҫтөнә ҡапланып, өҙгөләп ташламаҡсы була. Ә Ҡарабай ҡаушап ҡалмай, уғын атып ебәрә. Уҡ, арыҫландың алҡымын үтә сығып, йыртҡысты үлтерә йыға.

Ошо көндән уны Ҡарабай батыр тип йөрөтә башлағандар.

---

*Тимофей Беляев тарафынан руссаға тәржемә ителеп, 1812 йылда Ҡазанда баҫтырып сығарылған «башҡорт повесы»ның нигеҙендә ятҡан башҡортса текст һаҡланмаған. Ҡисса Б. Бикбай менән Н. Иҙелбай тарафынан башҡортсаға ҡайтарылған.

Ҡарабайҙың яман арыҫланды үлтереүе тураһындағы хәбәр шунда уҡ башҡорт һәм ҡаҙаҡ ырыуҙарына таралып та өлгөрә, тирә-яҡтағы иң яҡшы батырҙарҙың инде Ҡарабай менән танышыу теләге арта. Бөтәһенән бигерәк ҡаҙаҡ батырҙарынан Сарыбай тигәне уның менән көрәшергә һәм дуҫлашырға теләй. Тиҙҙән ул теләгенә ирешә лә. Берҙән-бер көндө, юлдаштарынан айырылып, Ҡаҙкүл тигән күл буйында һунарсылап йөрөгәндән һуң ял итеп ятҡан Ҡарабайҙы тап итә. Сарыбай, башҡортто үҙ ерендә күргәс, был беҙҙең яҡҡа барымтаға килгәндер, тип уйлай. Ҡырыҫ тәбиғәтле Сарыбай, Ҡарабайға айбарланып, ҡырҡа тауыш менән:

— Йә хәҙер үк миңә биреләһең, йә минең ҡулымдан һәләк булаһың! — тип ҡысҡыра, керешен тартып, уғын тоҫҡай. Унан ҡалышмаҫ Ҡарабай урынынан тора һалып, бер ҡулына йәйәһен, икенсеһенә бер юлы дүрт уғын алып, дошманына яуап ҡайтарырға була. Үҙенә ҡаршы торорға әҙерләнгән башҡортто күреп, Сарыбай:

— Атып йыҡмаҫ борон, исемеңде әйтеп ҡал! — тип ҡысҡыра.

— Мин Ҡарабай булам! — ти батыр ғорур тауыш менән.

Ҡаҙаҡ, был яуапты ишеткәс, Ҡарабайҙы тубығынан ҡосаҡлап, дуҫлашыр өсөн мин ҡайҙарҙа ғына булманым, тип, күрешеү теләген белдерә.

...Иртәгәһенә улар төркөмдәргә бүленеп, һунарға сығалар. Был көндө уларҙың һунары уңышлы була, ә көтмәгән бер хәл ике батырҙың дуҫлығын тағы ла нығыта.

Сарыбай яңғыҙы ҡуйы ҡамышлыҡ буйлап китеп барһа, уға иҫкәрмәҫтән ғәләмәт ҙур бер юлбарыҫ тап була. Йыртҡыс уның өҫтөнә ташлана. Батыр тайшанмайынса уға һөңгөһөн ҡаҙай, шулай ҙа боғаҙына тейҙерә алмай, ҡалаҡ һөйәктәрен генә үтә тишә. Яраланған юлбарыҫ, ҡотороноп, табаны менән батырҙың һөңгөһөнә һуға, һөңгөнөң ағас һабы селпәрәмә килә. Ҡоралһыҙ ҡалған Сарыбай атынан һикереп төшә. Ярһыған йыртҡыс аҡты-ҡараны күрмәй, Сарыбайҙың атын ботарлап ташлай. Ошо мәлдән файҙаланып, батыр үткер ҡылысын һурып алып, көс менән йыртҡыстың биленә саба. Тәрән яраланып, ауыҙынан ҡанлы күбек урғылған януар тағы ла нығыраҡ ҡотороноп, инде өҙгөләнгән атты ҡалдырып, эйәһенә ташлана. Сарыбай ҡылысы менән уның асыҡ ауыҙына саба, ә өлгөр йыртҡыс, ҡылыстың йөҙө тейеү менән, уны тешләп ваҡ киҫәктәргә һындырғылай, батырҙың ҡулында ҡылыстың һынығы ғына тороп ҡала. Шул ерҙә юлбарыҫ күҙ асып йомғансы Сарыбайға ташланып, теше-тырнағы менән уны өҙгөләмәксе була, ләкин, батыр тимер күлдәкле булғанлыҡтан, уны бик ныҡ йәрәхәтләй алмай. Аяғына саҡ

баҫып торған Сарыбай бөтә ҡалған көсөн йыйып, ҡулындағы ҡылыс һынығы менән йыртҡысҡа ҡаршы көрәшә. Уның һуғыуы, инде көсһөҙ булғанлыҡтан, юлбарыҫҡа зарар килтерә алмай. Әгәр ҙә шул ваҡыт иптәштәренән айырылған дуҫы Ҡарабай килеп сыҡмаһа, был айҡашыу, һис шикһеҙ, ҡаҙаҡ батырының һәләкәте менән бөтәр ине... Йыртҡыстың баш һөйәге нисек кенә ҡаты булмаһын, Ҡарабайҙың көслө ҡулындағы үткер ҡылысы уны ҡап урталай ярған.

Сарыбай, шатлығынан ни тип әйтергә лә белмәй, ҡатып ҡала. Уның урынында бүтән берәү булһа, күптән инде хәлдән тайып йығылыр ине, ул ҡулдарын һауаға күтәреп доға ҡыла. Шунан үлән өҫтөнә ултыра. Ҡарабай йыртҡыс менән эште бөтөрөп, дуҫын муйынынан ҡосаҡлап:

— Ваҡытында килеп өлгөрөп, йыртҡысты үлтерешергә ярҙам итеүем менән мин сикһеҙ бәхетлемен, дуҫҡайым! — ти.

— Ярҙам итеп кенә ҡалманың, — ти дуҫы, — хәлдән тайған ерҙә мине ботарлап ташларға әҙер торған йыртҡыстың тырнағынан тартып алдың. Юлбарыҫты үлтереү даны һинең бер үҙеңә ҡарай. Атым ботарланып ташланғайны, үҙем ҡоралһыҙ тороп ҡалғайным. Мине бәләнән ҡотҡарыр өсөн Алла ебәргән һине.

...Ҡарабай етәктәге аттарҙың береһенә Сарыбайҙы атландыра. Шулай итеп, улар төйәктәренә ҡайтып китәләр.

Төйәккә ҡайтып төшкәс, өшәнгән аттарынан эйәрҙәрен алып, аттарына хәл керетер өсөн берәр туҫтаҡ ҡымыҙ бирәләр, шунан уларҙы кешәнләп, Ҡаҙкүл буйындағы йомшаҡ үләнгә ебәрәләр. Сарыбайҙың улдары менән дуҫының юлдаштары үҙҙәре аулап алған йәнлек, ҡош иттәренән майлап-ҡоротлап аш бешерергә тотоналар, ә ике батыр Сарыбайҙың аҡ тирмәһенә инә. Шунда улар, ҡымыҙ эсә-эсә һөйләшеп, иртәгеһенә нисек һунарсыларға тип, кәңәш ҡороп ултыралар. Шул арала бешеп сыҡҡан тәмле ит еҫе уларҙы тышҡа, ҡаҙан янына тарта. Тирмәнән сығыуға, алыҫтан йән-фарман сабып килгән бер һыбайлы күренә. Тиҙҙән был ят һыбайлы уҡ атымы ергә яҡынайғас, Ҡарабай бының үҙ көтөүсеһе Ҡараман икәнен таный ҙа:

— Ниндәй хәбәр алып килдең? — тип ҡысҡырып һорай.

— Һөйөнсө! — ти көтөүсе. — Йәш бисәң Алтыша һиңә ул тапты.

Был хәбәрҙе ишетеүгә бик ҡыуанған Ҡарабай дуҫы менән юлдаштарын ҡосаҡлап ала, шатлыҡлы хәбәр өсөн көтөүсеһенә рәхмәт әйтеп, уға үҙенең яҡшы атын бүләк итә.

Ул арала йәшел үләнгә йәйелгән келәмдәр өҫтөнә табаҡтар ҡуйылып, бешкән иттәр бүленеп һалынған була.

Ҡарабайҙың юлдаштары ит турарға бысаҡ ҡайрайҙар. Бешкән ҡуй баштарын, хөрмәт билдәһе

итеп, ике батырға тотторалар. Ҡарабайҙың яҡшы хәбәр алып килгән көтөүсеһен дә аш янына ултырталар. Ит ашап, ҡымыҙ эсеп һыуһын ҡанғас, башҡорт батыры ҡаҙаҡ батырына ҡарап һүҙ башлай:

— Ҡәҙерле дуҫым! Һинең менән һунарға йөрөүе бик күңелле булһа ла, улымды ҡайтып күрергә йөрәгем ашҡына. Һин, үҙең дә ата кеше булғанлыҡтан, минең хәлемде аңлап, юлға сығыуыма ҡаршы килмәҫһеңдер тип уйлайым, — ти.

Был һүҙҙәрҙе ишетеүгә ете бала атаһы Сарыбай, арыҫлан үлтереүсе батыр дуҫы менән айырылышҡыһы килмәһә лә, уның бик ҡайтҡыһы килеүен күргәс, ирекһеҙҙән риза була.

Һунарсыларҙың ике төркөмөндә лә аттар эйәрләнә, һауыт-һабалар ат өҫтөнә артылған була. Шул саҡ Сарыбайҙың бер көтөүсеһе сабып килеүен күреп ҡалалар. Көтөүсе, килеп еткәс тә, хужаһына:

— Һинең һөйөклө ҡатындарыңдың береһе һылыу ҡыҙ тапты, — тип хәбәр итә.

Сарыбай, шатлығынан дуҫының муйынына һарылып:

— Мине үлемдән ҡотҡарған хөрмәтле дуҫым! Ҡыҙымды үҙ улыңа кәләш итеп бирәм! — ти.

Ошо һүҙҙән һуң ике дуҫ ҡосаҡлаша ла бөтәһененең күҙ алдында ҡулға-ҡул һуғыша. Шунан һуң улар йәнә хушлашып, оҙаҡламай ҡайтанан күрешергә һүҙ бирешеп, үҙ юлдарына китәләр.

Улын тиҙерәк күрергә ашҡынған Ҡарабай, бөтә юлдаштарын артта ҡалдырып, атына ял да бирмәй, алты көнлөк юлды ике тәүлектә үтеп, йәйләүенә ҡайтып төшә. Ҡыйынлыҡ килгәндә ҡыйыу, тыныс тормошта ирәүән булған Ҡарабай үҙен бала өсөн йәне өҙөлгән кеше икәнлеген күрһәтә. Ошондай һәйбәт тойғо менән ҡайтып инеүгә, ҡатыны ҡулындағы сабыйҙы күреп:

— Сәләм! — тип ҡысҡырып, баҫҡан урынында туҡтап ҡала, шатлығынан йөрәге күкрәгенә һыймай дөп-дөп тибә. Ҡатын-ҡыҙға бер ваҡытта ла сәләм бирелмәүен белгән ҡатыны иренән:

— Һин был сәләмде кемгә бирҙең? — тип һорай. Ҡарабай:

— Донъяға яңы килгән батырға, минең ҡәҙерле улыма бирҙем, — ти ҙә ҡатынын ҡосаҡлап, улын иркәләгәс, икеһен дә һөйкөмлө исемдәр менән атап, яғымлы һүҙҙәр әйтә. Шунан һуң мулла саҡыртып, улына Ҡуҙыйкүрпәс тип исем ҡуштыра.

Ошо арала икенсе яҡта яңы тыуған ҡыҙын күрер өсөн Сарыбай үҙ йәйләүенә ашыға. Ул, улдарынан алға сығып, бишенсе көн тигәндә ҡайтып төшә, бала килтергән бисәһен имен-һау, ҡыҙын бик һәйбәт хәлдә күрә. Шунда уҡ кисектермәй мулла саҡыртып, ҡорбан салдыра һәм балаға Маянһылыу тип исем ҡуштыра.

Ошо ваҡыттан алып ике дуҫ һунарға гел бергә йөрөр, бер-береһенең ауылына килеп хәл белешер, ҡайтҡас, үҙ ғаиләләренә Ҡуҙыйкүрпәстең таҫыллығы, сослоғо хаҡында, Маянһылыуҙың иҫ киткес һылыулығы, тегеү-сигеү һөнәренә оҫталығы тураһында һөйләр булған.

...Бер заман һунарҙа йөрөгәндә, улынан, үҙ юлдаштарынан айырылып киткән Ҡарабай бер ҡоралайға осрай. Бына ҡоралай ҡая ташлы, үркәсле тау битләүенә тәрән йырындар аша күҙ эйәрмәҫлек тиҙлек менән һикереп ҡасып китә. Ризығы бөтөп, әжәле яҡынлашыуын һиҙмәгән Ҡарабай, ҡурҡыныс урындарға ҡарап тормаҫтан, ҡоралай артынан күҙ яҙлыҡтырмай саба ла саба. Шул мәлдә үлтерелгән Дейеү пәрейенең Ҡарабайҙы һәләк итеп, үс алырға уйлап ҡына йөрөгән ҡустыһы, уның ошондай ҡурҡыныс урындарҙан сабып килеүен күреп, бик уңай тура килде бит әле, тип, үҙенең мәкерле уйын бойомға ашырмаҡсы булған. Көс менән батырға күрәләтә ташланырға баҙнат итмәгән был пәрей ана шулай мәкер менән эш итергә булып, бөркөткә әүерелә лә, кереше тартылған йәйәһе менән ҡоралайҙы ҡыуып, текә тауҙан түбәнгә сабып барған Ҡарабайҙың башы тапҡырына юғарыға күтәрелә, шунан ҡанаттарын йыйып, тырнаҡтарын тарбайтып, йәшен тиҙлеге менән шыйылдап түбәнгә шыҡыя һәм был хәйләне алдан һиҙмәгән Ҡарабайҙы аты менән бергә тау итәгендәге упҡынға тибеп төшөрә. Бына батыр бөтөнләй иҫһеҙ ята. Ҡолаҡтарынан, ауыҙынан, танауынан ҡан китә. Аты, башы менән ташҡа һуғылып, тын да алмай йән биргән. Яуыз сихырсы, ҡурҡаҡ ҡуянға ташланған ҡыйғыр кеүек, батырға ташланып, уның иҫһеҙ кәүҙәһен үткер тырнаҡтары, ослo суҡышы менән өҙгөләргә керешә, ә үҙе былай тип һөйләнә: «Ер йөҙөндә иң көслөләрҙән булған ағайымды үлтергәнең өсөн ҡаты язам һиңә ошо булыр. Улыңды ла үҙең кеүек үк йәки унан да ҡатыраҡ интектереп дөмөктөрәсәкмен, ҡәһәрле ғаиләңде лә ҡырасаҡмын. Һинең таянысың Мөхәммәт ҡайҙа хәҙер? Бында килһен дә, шәп булғас, һине минең тырнаҡтарымдан ҡотҡарып ҡараһын!» Бөркөт һынлы пәрейҙең суҡышы менән тырнаҡтары, өҙгөләй торғас, Ҡарабайҙы иҫенә килтерә, ул бөркөт әйткән һүҙҙәрҙе ишетә, уның үлтерелгән Дейеү пәрейенең ҡустыһы икәнен аңлай. Бына Ҡарабай, аҡтыҡҡы көсө менән ҡыйыулығын туплап, бөркөттөң ике аяғын бер юлы эләктереп ала һәм шул килеш киҙәнеп, уны йән көскә ташҡа бәрә. Бынан сихырсының һөйәктәре шытырлап китә. Ошоно күреп күңеле күтәрелгән батыр, сихырсының аяҡтарын ҡулынан ысҡындырмайынса, аяғы менән муйынына баҫып, бөтә көсө менән башын өҙә тартып ала.

Ә үҙе һуштан яҙып, ергә ауа һәм шунда уҡ йән бирә...

...Ҡуҙыйкүрпәс атаһының йәнһеҙ кәүҙәһен таба. Атаһын ҡосаҡлап үкһеп-үкһеп илай, унан айырылып ҡалғаны, уны һаҡлай алмағаны өсөн үҙен ҡәһәрләй.

Ҡуҙыйкүрпәсте алыҫтан күреп ҡалған юлдаштары ла уның артынса йән-фарман сабып килеп етәләр. Ҡарабайҙың үле кәүҙәһен ҡосаҡлап, ул беҙҙең атабыҙ ине, ә беҙ уның етем ҡалған балалары, тип илашалар. Бөркөт һынлы пәрейгә ләғнәт уҡыйҙар, хәшәрәттең емтеген утта яндырып, көлөн елгә осоралар. Ҡарабайҙың мәйетен йыуып, иңбаштарына күтәреп алып, бейек тау башына мендерәләр һәм, әүлиәнең васыяты буйынса, шунда ҡәҙерләп ерләйҙәр, йола буйынса ҡоралдарын да үҙе менән бергә күмәләр. Батырҙың иҫтәлегенә бейек уба өйәләр. (Шул замандан алып был убаны Ҡаратау тип йөрөтәләр.) Шунан һуң ырыуҙаштары, Ҡарабай менән хушлашып, бергә һунарҙа йөрөгән саҡтарын иҫкә алып, уба түңәрәкләп сабышалар ҙа шунан ҡәберенә баш эйеп, бойоҡ ҡына ҡайтып китәләр.

...Ҡуҙыйкүрпәс әсәһе менән генә ҡалғас, мин һине ихлас күңелемдән хөрмәт итеп, һүҙеңде һәр саҡ тыңлармын, миңә ышан, тип әсәһен йыуатырға тырыша. Шулай итеп, әсәһенең ҡайғыһын бер ни тиклем еңеләйткәс, атаһының етеһен уҙғарырға әҙерләнергә кәңәш бирә. Алтыша, Сарыбай йәйләүенә алдан илсе ебәреп, Ҡарабайҙың вафатын хәбәр иттерергә, әйттерелгән ҡыҙы хаҡында ла иҫенә төшөрөп, дуҫының етеһен уҙғарыу өсөн уны үҙҙәренә саҡырыу кәрәклеген иҫкәртә. Ҡуҙыйкүрпәс, атаһын юғалтыуға нисек кенә ҡайғырмаһын, әсәһенең был һүҙҙәрен ишеткәс, күңеле күтәрелеп китә. Атаһы буласаҡ кәләшенең һылыулығын, тегеү-сигеү һөнәренә оҫталығын һәр саҡ маҡтап, Сарыбай йортонан йыш ҡына Маянһылыу эшләгән сигеүле таҡыя, нағышлы серге, биҙәкле артмаҡ кеүек бүләктәр алып ҡайтҡанлыҡтан, ҡыҙҙы бөтөнләй күргәне булмаһа ла, уны күптән ярата ине. Ҡуҙыйкүрпәс был бүләктәрҙе, бохар нағыштарынан өҫтөн күреп, үҙ тирмәһендәге зиннәттең иң аҫылы тип иҫәпләй ине. Әсәһенән бойороҡ бирелгәс тә, ул атаһының элекке иптәштәренә китә, уларҙың Сарыбайға илсе булып барыуҙарын үтенә. Тегеләр быға риза булып, юл кәрәк-яраҡтарын әҙерләйҙәр ҙә иртәгеһенә үк сәфәргә сығалар. Ҡуҙыйкүрпәс иһә, буласаҡ ҡайным Сарыбайҙы алып ҡайтырҙар, тип ышанып ҡала, инде үҙем хужа булып, уға көн элгәре һый-хөрмәт күрһәтермен, шунда унан фатиха алып, оҙаҡламай туй ҙа уҙғарырмын, тип уйлай.

Шул арала Сарыбай йәйләүендә бының бөтөнләй киреһе эшләнеп ята икән.

Сарыбай, Ҡаҙкүл янында юлбарыҫты үлтергән батыр мин инем ул, тип шапырынған. Бына шунан уның даны бөтә ҡаҙаҡ урҙаларына таралған. Ошо ялған дан уны атаҡлы хан һәм иң яҡшы батырҙар менән аралашыуға килтергән. Маянһылыуҙың гүзәллеген, өҫтәүенә, атаһының уңышлы барымтанан һуң байығыуын да күреп, бик күптәр Сарыбай менән ҡоҙа булышырға тырышҡан. Сарыбай, үҙенең ошо өҫтөнлөгө менән маһайып, батырҙарҙың был теләктәрен ҡырҡа кире ҡаға килгән, ахырҙа, бер йыраҡ ырыуҙың ханы менән һүҙ ҡуйышып, ҡыҙы Маянһылыуҙы шуның улы Айҡара солтанға бирмәк булған. Шул арала хан тарафынан мәһәр менән илселәр ҙә килеп төшкән. Илселәр, хан һүҙен ҡабатлап, Сарыбайҙың үҙ йәйләүен Ҡараһыу йылғаһы буйына күсереүен һорағандар. Ана шул йылға буйында ике яҡтың да туған-ырыуҙары алдында егет менән ҡыҙ осрашҡандан һуң, туй уҙғарырға тейеш булғандар.

Тап ошо ваҡытта Ҡуҙыйкүрпәстән Сарыбай йәйләүенә килеп төшкән илселәр Маянһылыуҙың инде Айҡараға әйттерелеүен ишетеп, бик ғәжәпкә ҡалалар. Шулай ҙа батырҙарҙың элекке дуҫлығын, үҙ балаларын мотлаҡ ҡауыштырыу ниәтен белгән илселәрҙең, үҙҙәре лә саф күңелле булғанлыҡтан, быға ышанғылары килмәй тора. Сарыбайға үҙе биргән вәғәҙәһен иҫенә төшөрөп, уны үҙ яҡтарына ауҙармаҡсы булалар. Әммә был теләктәре барып сыҡмай. Бер нисә тапҡыр үтенеп һорағандан һуң ғына тәкәббер Сарыбай уларҙы үҙ тирмәһенә индерә. Келәм өҫтөндә хан улдары менән уларға барасаҡ илселәре араһында ултырған Сарыбай, килеүселәргә эре генә ҡараш ташлап:

— Истәктәрҙең[1] миндә ниндәй йомошо булыуы бар? — тип һорай. Уның был һорауына илселәр:

— Беҙ ҡасандыр һине үлемдән ҡотҡарған дуҫың Ҡарабай батырҙың донъянан китеүен хәбәр итергә уның тол ҡатыны Алтыша менән улы Ҡуҙыйкүрпәс тарафынан ебәрелгәнбеҙ. Ҡарабайҙың ҡайғылы ҡатыны менән һинең кейәүең буласаҡ улы һинең, үҙ бала-сағаң менән килеп, етемдәрҙең хәл-әхүәлен белешеүеңде, үҙ дуҫыңдың етеһен үткәреүҙә ҡатнашыуыңды, шуның менән бергә ҡыҙың Маянһылыуҙы дуҫыңдың улы Ҡуҙыйкүрпәскә бирергә ҡуйышҡан һүҙеңде дөрөҫләүҙе һоранылар. Әгәр ҙә инде быға бер төрлө

[1]Элек ҡайһы бер урҙа ҡаҙаҡтары башҡорттарҙы «истәк» тип йөрөткәндәр. «Ҡуҙыйкүрпәс»тең русса тәржемәһендә лә «башҡорт» тигән һүҙ ҡаҙаҡ ауыҙынан әйтелгәндә «истәк» тип алынған. Хикәйәтте башҡорт теленә ҡайтарғанда, «истәк» һүҙе «башҡорт» һүҙенә күсерелде.

лә ҡаршылыҡ юҡ икән, дуҫыңдың етеһенән һуң туй ҙа яһарға теләктәрен белдерҙеләр, — тиҙәр.

Илселәр тынып ҡала, тиҫкәре холоҡло Сарыбай, уларға бик тәкәббер ҡарап:

— Хәҙер үк минең йәйләүемдән китегеҙ һәм һеҙҙе бында ебәреүселәргә, Сарыбай батыр килеү түгел, уларҙы белергә лә теләмәй, һеҙҙең менән туғанлашыуҙы бөтөнләй кәрәкле тапмай, тип әйтегеҙ, — ти. — Айҡара солтанға әйттерелгән ҡыҙын Сарыбай батыр башҡортҡа бирер тигән уй нисек уларҙың башына килде икән, тип әйтегеҙ, — ти.

Башта илселәрҙең был һүҙҙәргә ышанғылары килмәй тора. Ни өсөн тиһәң, улар Ҡарабайҙың бер нисә тапҡыр Сарыбайҙы үлемдән ҡотҡарып, мөлкәтен, мал-тыуарын һаҡлап алып ҡалыуын, уның менән ныҡ дуҫ булыуын яҡшы беләләр ине. Дуҫлыҡты онотоп, үҙе биргән һүҙҙән баш тартыуҙы, изгелеккә яуызлыҡ менән яуап ҡайтарыуҙы улар баштарына ла һыйҙыра алмайҙар. Әммә шашынған Сарыбай Ҡуҙыйкүрпәс илселәрен һис кисекмәҫтән үҙ йәйләүенән ҡыуып ебәрергә бойора. Бер нисә көндән һуң инде Сарыбай хан менән һүҙ ҡуйышҡан урынға — Арал диңгеҙенә ҡойған Ҡараһыу буйына, Амударъя тамағы тирәһенә күсеп китә.

Ҡуҙыйкүрпәстең илселәре яҡшылыҡҡа яманлыҡ менән яуап ҡайтарған Сарыбайға асыу тотоп ҡайтып төшәләр, булған хәл-әхүәлде бәйнә-бәйнә һөйләп бирәләр. Алтыша улына ҡара эсле Сарыбайҙы ла, уның ҡыҙын да онотторға кәңәш бирә, бүтән ырыуҙан бер тигән кәләш әйттерергә вәғәҙә итә. Иллә-мәгәр йәш күңеле елкенгән Ҡуҙыйкүрпәс бөтөнләй киреһен уйлай. Бәләкәй саҡтан уҡ Маянһылыуҙың гүзәллеген маҡтауҙы гел ишетеп килгәнгә, уны үҙ кәләшем тип йөрөгәнгә, Сарыбайҙың был кире ҡағыуын әсәһе кеүек тыныс ҡына кисерә алмай. Әсәһенең ҡайғыһын арттырырға теләмәгәнлектән генә, уға буйһоноп, кәңәше менән тыштан килешкән була. Ә үҙе, бер нәмәгә ҡарамай, Сарыбай йәйләүенә барып, Маянһылыу риза булһа, уны алып ҡасырға уйлай…

Ҡуҙыйкүрпәс Алдар дуҫы менән һунарға барырға тип рөхсәт һорай, ә Алдар иһә уның был уйын әле белмәй. Шулай уҡ быны һиҙмәгән әсәһе лә юлға ни теләһә, шуның бөтәһен дә биреп, улын һунарға оҙата. Ҡуҙыйкүрпәс йылҡы өйөрөнән иң яҡшы, иң сыҙамлы ат һайлап ала, уға Йондоҙ ҡашҡа тип исем ҡуша, шунан әсәһе менән хушлашып, ҡасандыр атаһы менән Сарыбайҙың төйәге булған Ҡаҙкүлгә ҡарап, Алдар менән юл тота. Ошонда ат ашатырға туҡтағас, Ҡуҙыйкүрпәс дуҫына ысынын һөйләп бирә… Дуҫтар, күҙҙәренән йәш ағыҙып, хушлашалар ҙа айырылышалар.

Алдар, үҙ дуҫының йомошон нисек үтәргә икән, әсәһен ҡапыл ҡайғыға ҡалдырмаһам ярар ине, тип уйланып ҡайта. Шулай оҙаҡ баш ватһа ла, бер төрлө лә төплө фекергә килә алмай тора. Тыуыштан борғолап һөйләргә яратмаған башҡорт егете, дөрөҫлөктө йәшереп, юҡты бар тип һөйләргә баҙнат итмәй. Йәйләүгә ҡайтып төшкәс, ул Алтыша янына инә һәм, улы ни ҡушһа, шуның бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. Әсәһе был хәбәрҙе тыныс ҡына тыңлай, шунан Алдарҙан улы урынына ҡалып, хужалыҡ эштәрен алып барыуын һорай. Әммә оҙаҡламай уның күңеле бошона башлай. Бәлки, ул үҙ улынан бөтөнләйгә айырылып ҡалғандыр, шуға күрә әсә үкһеп илай-илай ошоларҙы һамаҡлай:

Йәйрәп ятҡан йәйләүем,
Ҡалдың ҡола далаға,
Эс серемде аңлатырға,
Һүҙҙәремде тыңлатырға
Инде кемгә барырмын?
Ҡарабайым ҡәберенә
Түтә һуҡмаҡ һалырмын,
Башҡа төшкән ҡайғымды
Уға һөйләп барырмын.
Һай, дуҫым, йән юлдашым!
Һин үлгәстен, көн бөттө,
Миңә ҡара төн етте,
Миңә ҡара төн етте.
Бар ҡыуаныс юғалды,
Арымаҫ ҡайғы ҡалды.
Янып һөйгән улың да
Йыуаныс түгел әсәгә:
Минән фатиха һорамай,
Киткән алыҫ ырыуға,
Үҙе һөйгән һылыуға,
Ғүмерлек дуҫ булырға,
Кәләш итеп ҡылырға.
Һай, онотолмаҫ йән дуҫым,
Ишетмәйһең зарымды,
Хур ҡыҙҙары ҡосағында
Онотҡанһың ҡайғымды!
Бар ҡоштарҙан ҡайғылы —
Оя баҫмаҫ кәкүктер.
Ул оя ла яһамай,
Балалар ҙа сығармай;
Шуға йәйҙең яртыһын
Күкләп йөрөй, ҡаңғырып;
Тиң-тоштарым араһында
Иң бәхетһеҙ тол ҡатын,
Шулай көн-төн ҡайғырып,
Дала гиҙәм ҡаңғырып.
Юҡтыр батыр ирем дә,
Һөйгән улым сит ерҙә,
Күргәнем юҡ килен дә...
Ҡуҙыйкүрпәс булмағас,
Ябығып ҡалды йылҡылар,
Көтөү-көтөү һыйырҙар
Бер төптән һыуалдылар,
Имсәктәре ҡатҡанға,
Һауып булмай уларҙы;
Ғүмере кәртә белмәгән
Оҙон йөнлө һарыҡтарҙың
Аҡ бөҙрәһе юғалды.
Ошо ҡаты ҡайғымдан,
Һөйгән улым ҡайтҡансы,
Усағыма ут алмам.
Ҡаҙанымды тут баҫһын:
Бешерергә ит һалмам;
Бысаҡтарым тупайһын,
Һалмаға ҡалъя тураһам;
Һыйырҙарымды һаумам,

Бешмәмен ҡаймаҡ та,
Кәрәк түгел ҡорот та.
Май яҙырға һауыт юҡ:
Ҡорғаҡһыған һабалар,
Бешкәктәрем һындылар;
Йыйған ҡаймаҡтарыма
Саң-туҙандар ҡундылар.
Ағыҙытамын бейәләрҙе,
Миңә ҡымыҙ ниңә ул?
Ҡымыҙ эсер эшем юҡ.
Күңел китек, яңғыҙ саҡта
Уны бирер кешем юҡ.

Ҡайғыға ҡалған Алтыша ошондай ауыр уйҙарға сумып йөрөй башлай, ә был ваҡыт улы Ҡуҙыйкүрпәс ҡаҙаҡ далалары буйлап Сарыбай ауылына табан юл тотоуында була. Оҙаҡламай уның йәйләгән еренә барып етә, тик унда Сарыбай менән ғаиләһен генә түгел, уларҙың ҡайһы яҡҡа күсеп китеүҙәрен һорашырлыҡ та кеше таба алмай аптырап ҡала. Ул Сарыбайҙан ҡалған йәйләү урынын тирәләп ике тәүлек буйы туҡтауһыҙ йөрөп сыға, ләкин бынан бер файҙа ла булмай. Өсөнсө көндө лә эҙләүен башларға ғына тип торғанда, ҡапыл теге әүлиә ҡарт килеп сыға. Ҡуҙыйкүрпәсте туҡтатып, ул ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Ҡарабай улы! Бында Сарыбайҙы табырға өмөтләнеп, юҡҡа ғына ваҡытыңды әрәм итәһең. Ул хәҙер Амударъя тамағында йәйләй. Унан, хан менән һүҙ ҡуйышыу буйынса, туй уҙғарыу өсөн оҙаҡламай Ҡараһыуға күсәсәк. Инде һиңә шунда тиҙерәк барып, әйттерелгән Маянһылыуыңды күрергә кәрәк. Был бик алыҫ юл, етмәһә, уны үтеүе лә бик ҡыйын: теге ваҡытта һеҙ үлтергән Дейеү пәрейенең тыумасалары һине һәләк итергә, үҙ уйҙарын һис кисектермәй бойомға ашырырға ант иткәндәр, иләмәгәр һин, улым, ҡаушап ҡалма, ныҡ бул. Миңә иһә инде ризығым бөтөп, әжәлем килеп еткән, һиңә артабан ярҙам итә алмам. Һиңә ярҙам күрһәтһен өсөн тик шәфҡәтле Мәскәй әбейгә нисек барырға юл өйрәтеп кенә ебәрә алам. Ул бынан ун биш көнлөк юлда, ҡибла яғында тора. Шул әбей һиңә, Сарыбайҙы нисек эҙләп табырға кәңәш итеп, фатиха бирер...

Ун бишенсе көндә ул әҙәм менә алмаҫ тауҙар янына килеп етә. Дүрткел мөйөшкә оҡшаған был тауҙарҙың һәр яғы биш-алты уҡ атымы оҙонлоҡта була. Егет, һоҡландырғыс был тауҙар теҙмәһенә ғәжәпһенеп ҡарап торғандан һуң, уны урап үтмәксе булып, уңға борола. Уның төньяҡ, көнбайыш һәм көньяҡ ҡабырғаһынан урап сыҡһа ла, тауҙар араһынан үтерлек бер генә ыҙан да таба алмай.

...Күңеле ниҙер һиҙенеп, көнсығыш яғынан да урап үткеһе килә. Шул яҡҡа табан боролғас, ул тауҙар араһындағы еккә ағып ингән бер йылға күреп ҡала.

Йылғаның ярҙарына, ҡыл тартҡандай теҙелеп, ике рәт булып ағастар үҫкән. Ҡуҙыйкүрпәс, былар

әҙәм балаларының оҫта ҡулдары менән ултыртылғандыр инде, тип уйлай. Шул ерҙә ул йомшаҡ үләнлектә утлап йөрөгән йылҡы өйөрө менән һыйыр, һарыҡ көтөүҙәрен күрә, үҙенең аты ла өҙлөкһөҙ шул үләнгә үрелә башлай. Йылға тамағына яҡын килгәс, үтеп сығырлыҡ бер генә һуҡмаҡ та таба алмай, сөнки йылға кәштәләнеп торған ике ҡая араһынан шау-гөр килеп ҡаты ағып ята икән. Ҡыйыу егет, бынан нисек үтергә икән, тип оҙаҡ уйлап та тормай, эйәренең айылын бушатып, йылға ағышына табан төшөп тә китә. Көслө ҡул менән ташланған таш алыҫлығы араны йөҙөп үткәс инде, бер киң аҡланды, шунда ҙур түңәрәк күл булып йәйелеп ятҡан йылғаны, уның өҫтөндә йөҙөп йөрөгән төрлө ҡоштарҙы күрә. Аты менән шул йылғаны саҡ йөҙөп сығыуға, ул күргән ҡоштар ҡолаҡ тондорғос тауыш менән ҡысҡырышырға керешәләр, бынан аты өркөп үрәпсей башлай. Егет, атын үҙе артынан етәкләп аҡлан буйлап бара торғас, алыҫта ҡар кеүек аҡ кейеҙ менән көпләп ҡоролған бер тирмә күрә. Ауыҙын ыржайтып, күҙҙәренә ҡан тулған ҡот осҡос ҙур бер эт уға ҡаршы туп-тура сабып килә башлай. Ҡуҙыйкүрпәс, ҡындан ҡылысын һурып алып, эттең муйынын өҙә сабырға әҙерләнгәндә генә, эт уға биш аҙым ер етмәҫ борон туҡтап ҡала. Шул ерҙә ул, батырҙың күҙенә ҡарап, үҙ эйәһенә ялағайланған кеүек, ҡойроғон болғай ҙа, күҙ асып йомғансы боролоп, тирмәгә табан кире сабып китә. Егет, теге әүлиә өҙөп кенә әйтмәһә лә, Мәскәй әбейҙең тап ошонда торғанлығын һиҙенә. Ул тирмә ишеге төбөндә үҙенә ялағайланып торған этте ҡабат күрә. Бының яҡшылыҡҡа икәнен төшөнөп алған батыр:

— Рөхсәтме? — тип тауыш бирә һәм ҡыйыуланып тирмә эсенә инә. Инһә, ергә түшәлгән бохар келәм өҫтөнә һалынған сәхтиән мендәр өҫтөндә Мәскәй ултыра. Уның ҡиәфәте уҫал түгел, төҫкә ҡарт күренһә лә, әле бәлйерәмәгән... Өҫтөндәге күлдәге ап-аҡ, ҡулындағы тиҫбе төймәләрен тарта-тарта, ауыҙ эсенән генә шыбырлап ултыра. Ҡуҙыйкүрпәс килеп ингәс тә унан иҫәнлек-һаулыҡ һораша. Мәскәй, уға баштан-аяҡ күҙ йүгертеп сыҡҡас:

— Минең һил торлағыма Ҡарабай улын килтергәне өсөн бөйөк пәйғәмбәребеҙгә рәхмәт. Ултыр, улым, тыныс бул! — ти.

Шунан ул үҙенең Солтоҡҡан исемле баяғы этен саҡырып алып: «Һелкен, этем, һелкен!» — тип өс серле һүҙ әйтә. Эт тирмә уртаһына сығып, келәм өҫтөнә баҫа ла, йөндәрен көҙрәйтеп, һелкенергә тотона, шул ваҡыт уның йөндәре араһынан ап-аҡ бойҙай ҡойола башлай. Мәскәй урынынан тороп, уны йыйып алып, ҡаҙанға һала, өҫтөнә таҙа һыу ҡойоп, шунан уға май, ҡорот өҫтәп ҡурмаҡ бешерә.

Ҡунағы алдына ҡаймаҡтың сей һөттән дә, бешкән һөттән дә айырылғанын ҡуя, шулай уҡ әсе ҡатыҡ килтереп, айран яһай, шул айран менән ҡымыҙҙы дәү-дәү туҫтаҡтарға һалып, ҡунағының ашау-эсеүен һорай, ә үҙе бүтән яҡшыраҡ һый ҡуя алмағаны өсөн ғәфү үтенә. Миңә ит ашарға ярамай, шуға ит-маҙарым юҡ, ти. Шунан һуң ул Ҡуҙыйкүрпәстең мәрхүм атаһы хаҡында һораша башлап, ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Үҙ ырыуҙаштарымдан атайың хаҡында күп маҡтау һүҙҙәре ишеткәнем бар, уны белмәгән саҡта ла үҙен бик ҡәҙер итә инем...

Бындай кешене мин биш йөҙ йыллыҡ ғүмеремдә үҙ ырыуҙаштарым араһында күргәнем булманы, хатта ундай әҙәмдәр тураһында ишеткәнем дә юҡ. Күптәрҙе батыр тип йөрөтәләр, иллә-мәгәр уларҙың береһе лә был исемгә лайыҡ түгел: ундай батырҙарҙың барлыҡ даны алдашыуҙан, маһайыуҙан, ҡомһоҙлоҡтан, барымтаға йөрөүҙән тора. Тап бына ошондай холоҡло Сарыбай батыр һине яратмаған, маһайыуынан яҡшылыҡты онотоп, ҡыҙын һиңә биреүҙән баш тартҡан, үҙ файҙаһын ғына күҙәтеп, уны хан улына бирергә булған. Һин иһә, улым, атайыңдың юлынан барып, уның менән бер тиң дан ҡаҙанырға тейешһең, шулай ҙа яҡшылыҡта унан уҙҙыра алмаҫһың. Килер быуын, һеҙҙең икегеҙҙе лә уҙаманға һанап, данығыҙҙы оҙаҡ йылдарға һаҡлар. Ҡурайсылар һеҙҙең маҡтаулы эшегеҙҙе йырлап-көйләп ырыуҙан ырыуға еткерерҙәр, халыҡ уларҙы ярыштыра-ярыштыра шатланып тыңлар. Аҡһаҡалдарҙың һеҙҙең хаҡта һоҡланып һөйләгән һүҙҙәре һис ваҡытта тынмаҫ. Бер генә әсә лә балаһын, Ҡарабай батырҙай бул, тип иркәләмәй тороп имеҙмәҫ; бер генә ата ла улын атҡа мендергән саҡта, Ҡарабай батыр атын ошолай йөрөтөр ине, тип әйтмәй ҡалмаҫ...

Нәҫелдән нәҫелгә ҡалырлыҡ яҡшылыҡ менән уҙғарылған ғүмер бына ошолай була ла ул, улым! Ә быларҙың бөтәһен дә һин асығыраҡ күрһен өсөн, бөйөк пәйғәмбәребеҙ миңә бөтә киләсәкте тылсым көсө менән күрһәтеп бирергә ҡушты.

Мәскәй батыр егетте тауҙағы өс ҡорос йоҙаҡ менән бикләнгән баҡыр ишекле мәмерйә янына алып бара. Ул шыбырлап өс һүҙ әйтеүгә, йоҙаҡтар төшөп, ишек яман шығырлап шар асылып китә. Мәмерйәнең алғы өлөшөнә ингәс, Мәскәй батырҙы шунда ҡалдыра ла, үҙе икенсе ишекте асып, ары үтә, ә уның артынса ишек шарт ябылып ҡала. Оҙаҡ та тормай, өҫтөндәге аҡ күлдәген алмаштырып, оҙон ҡара күлдәк кейгән, ҡара бөркәнсек ябынған, бер ҡулына тиҫбе, икенсеһенә тәмле еҫтәр сығарып төтәп торған һауыт тотҡан әбей кире килеп сыға. Ишек тирәһендә

Ҡуҙыйкүрпәсте лә биш тапҡыр төтәҫләп алғас, егеттең күҙҙәрен бәйләй, шунан ҡулынан етәкләп мәмерйә эсенә индерә. Унда егеттән аңлайышһыҙ бер нисә һүҙ әйттереп, күҙҙәрен аса…

Ҡаршы стенала тирәсе ынйы һәм аҫыл таштар менән йөрөтөлгән дүрт мөйөшлө шыма таҡта тора. Уның һәр яғы өсәр аҙымдан ашыуыраҡ. Таҡта шул ҡәҙәр шыма булғанлыҡтан, нур һибеп ялтырап тора. Бөтәһенән элек батырҙы ғәжәпләндергән нәмә шул була: янып торған ҡәндилдәр, шулай уҡ мәмерйә эсендәге барлыҡ нәмә ошо таҡтала сағылып күренә башлай, ул унда Мәскәй әбей менән үҙен дә күрә…

Мәскәй, йылмая биреп, Ҡуҙыйкүрпәсте йөҙө менән таҡтаға ҡарата баҫтырып ҡуя, шунан уның алдына баҡыр табаҡҡа таҙа һыу тултырып ултырта, үҙе өс тапҡыр тирәләй әйләнә һәм, ҡулдарын юғары күтәреп, ниндәйҙер аңлайышһыҙ һүҙҙәр әйтә. Шул ваҡыт ҡапыл күк күкрәп, тау ҙа, мәмерйә лә тетрәй, табаҡтағы серле һыу сайпыла башлай, ә аяҡ өҫтө баҫып тора алмаған егет тубыҡлана төшә. Оҙаҡламай бөтәһе лә һил булып ҡалғас, Мәскәй әбей Ҡуҙыйкүрпәс эргәһенә килеп, ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Улым, тыныслан да бына ошо серле таҡтаға текләберәк ҡара. Унда күргәндәреңдең бөтәһен дә мин аңлатып барырмын, берүк артыңа боролоп ҡарайһы булма! Һин боролоп ҡарау менән, ер ярылып китер ҙә, шунда төшөп мәңгегә һәләк булырһың!

Мәскәй артҡа, иң ҡараңғы мөйөшкә сигенгәс, егет серле таҡтала уға ҡарап торған ғәжәп һөйкөмлө бик һылыу бер ҡыҙҙы күрә. Быны күреүгә, батырҙың йөрәге дөпдөп тибә башлай, йәне күкрәгенән сығып, шул ҡыҙға күсер төҫлө тойола, ә бының нилектән икәнен ул үҙе лә белмәй. Ул, үҙе лә төшөнмәгән ошондай тойғо менән елкенеп, байтаҡ ваҡыт баҫып торғандан һуң, сыҙамлығын юғалтып, алға ташлана һәм ҡыҙҙы ҡосаҡлап алмаҡсы була. Әммә тылсымлы таҡта уны ебәрмәй, егет онотолоп, был күренеш хаҡында һорашмаҡсы булып, Мәскәй әбейгә табан саҡ боролмай ҡала. Шул ваҡыт әбей уның был уйын һиҙеп алып, ҡысҡырып ебәрә:

— Туҡта, дыуамал! Артыңа ҡарама, хәҙер үк үҙеңде упҡын убып алыр. Һин күҙеңә күренгән ҡыҙ хаҡында һорамаҡсы булаһың. Был — һиңә әйттерелгән Маянһылыу. Уның күңеле лә, үҙең күргән йөҙө кеүек үк, бик яҡшы.

Был серле таҡтаның көсө ни саҡлы ғына булмаһын, унда күренгән һылыу Ҡуҙыйкүрпәстең тойғоһон унан да көслөрәк сихырлай, ул ни ҡәҙәр күберәк ҡараһа, шул хәтле йөрәге нығыраҡ тибә башлай. Әммә ҡаты бәғерле Мәскәй уға туйғансы ҡарарға ирек бирмәй, бер һүҙ әйтеүгә, күҙгә күренгән ҡыҙ юҡҡа сыға. Уның урынына Ҡуҙыйкүрпәс ат өҫтөндә баштан-

аяҡ ҡоралланған үҙе батыр, йөҙө матур бер егетте күрә.

— Был — һинең буласаҡ ҡатының Маянһылыуҙан тыуасаҡ Барлыбай батыр! — тип аңлата Мәскәй. — Ул, атаһы менән олатаһына оҡшап, шундай уҡ олпатлы ир буласаҡ. Уның артында баҫып торған тимер күлдәкле ете улыңа ҡара: улар Бөрйән, Үҫәргән, Тамъян, Ҡыпсаҡ, Бошмаҫ, Ҡара-Ҡыпсаҡ, Түңгәүер тип аталырҙар. Уларҙан башҡорттарҙың ете ырыуы барлыҡҡа килер; ул ырыуҙарҙың һәр ҡайһыһы үҙҙәренең ана шул башлыҡтары исеме менән йөрөтөлөр. Ҡара ана, уларҙың ырыуҙары ҡайһылай ишәйгән.

Ҡуҙыйкүрпәс бөтә был күренештәрҙе ошо ырыуҙарҙың атаһы булып, ысын күңелдән ҡәнәғәтләнеү менән ҡарай. Ахырҙа ул, ниндәйҙер аңлайышһыҙ сыуалыш күреп:

— Ҡоралланған шул тиклем күп халыҡ ниңә былай мыжғыша икән? Ҡайҙа ҡарама, шунда ҡурҡыныс күрәм. Миңә улар йыртҡыс арыҫландарҙан, ҡанға һыуһаған юлбарыҫтарҙан һаҡланырға әҙерләнгән һунарсылар һымаҡ күренә, — ти.

— Улым! — тип яуап бирә Мәскәй. — Һинең нәҫелдәрең һуғышҡа әҙерләнә.

— Һуғышҡа! — тип ҡысҡырып ебәрә батыр. — Аһ! Минең ундай ҡот осҡос нәмәне күргәнем юҡ әле. Был саҡлы халыҡ йыйылғас, ул нәмәкәй бөтә арыҫлан менән юлбарыҫтарҙан да уҫалыраҡтыр инде.

Мәскәй йәш батырҙың аңһыҙлығына йылмайып ҡуя ла артабан һөйләп алып китә:

— Изгелекле Ҡарабай улы! Һуғыштың нимә икәнен һәм уның ни сәбәптән килеп сығыуын төшөнөү кәрәк һиңә. Хаҡ яҙмышы буйынса, һинең ишәйә барған нәҫелдәреңә донъялағы иң көслө аҡ хандың[1] хакимлығы аҫтында йәшәргә яҙған... Күп халыҡты үҙенә буйһондорған был бөйөк хан, үҙ еренең сиген көньяҡҡа табан Аҡ диңгеҙгә[2] ҡойған Раа[3] йылғаһына тиклем киңәйтеп, көнсығыштағы һинең ырыуҙарың йәшәгән Иртыш менән Яйыҡ[4] йылғаһына саҡлы барып етер...

— Минең тоҡомом аҡ хандың хакимлығы аҫтында имен йәшәрме һуң? — тип һорай Ҡуҙыйкүрпәс.

— Бөйөк пәйғәмбәребеҙ шулай ҡушҡан, — тип яуап бирә Мәскәй. — Әммә ете ырыу халҡы был имен тормошто тиҙ генә татый алмаҫ. Яуыз сихырсылар, үҙ теләктәренә бик үк ирешә алмаһалар ҙа, уларҙы ҡырып бөтөрөргә биш тапҡыр ынтылып ҡарарҙар, йәки, һис булмағанда, уларға яуызлыҡ эшләргә тырышырҙар...

Шунан инде башҡорттар, ҡотороноп, аҡ ханға ҡаршы ҡорал

[1] *Аҡ хан, аҡ батша* — Иван Грозный (1530— 1584).
[2] *Аҡ диңгеҙ* — Каспий диңгеҙе.
[3] *Раа йылғаһы* — Волга.
[4] *Яйыҡ* — Урал йылғаһы.

күтәрмәксе булырҙар. Бына ошо һуғыш була ла инде...

Инде шул балаларҙы башлап ебәреүсе дүрт батырға ҡара. Улар дүртеһе лә ат өҫтөндә. Аҡылдары, батырлыҡтары менән айырылып торған был батырҙар бер-береһенән бик күп йылдарҙан һуң килеп сығырҙар. Һин күреп торған беренсеһе, тимер күлдәк кейеп, уйнаҡлап торған атҡа атланғаны, Ҡараһаҡал[1] батыр булыр. Ул үҙенең ырыуҙаштарын рустарҙың аҡ ханына ҡаршы ҡотортор. Уларҙың күбеһе аҡ һуғышсыларға ҡаршы һөжүм итер, шул яуҙа ырыуҙаштарыңдың байтағы ҡырылыр...

Уның эргәһендә ултырған икенсеһе — ҡурҡыу белмәҫ Аҡай[2] батыр булыр. Был бик баҙыҡ һәм көслө етәксе. Ул батыр рустарҙың беренсе бөйөк батшаһына ҡаршы ҡорал күтәрер. Был иҫ киткес батыр барымта ваҡытында ҡаҙаҡ батыры Сарыголдан тартып алған ҡылысын ялмап яуға сығыр...

Өсөнсөһө — ажарлы Килмәк[3]. Ул атланған юлбарыҫтан көслө, елдән етеҙ аҡбуҙат һинең Йондоҙ ҡашҡаң менән тау бейәһе тоҡомонан сығыр. Уға атланыусы үҙенең батырлыҡ өлгөһө менән ырыуҙаштарын рустарҙың тол ҡатын батша һуғышсыларына ҡаршы яуға күтәрер, әммә кемдәр генә Алла менән аҡ батшаға ҡаршы тора алһын инде?..

Баштан-аяҡ ҡоралланып, алма сыбар арғымаҡ өҫтөндә ултырған дүртенсеһе — ҡыйыу һәм ғәйрәтле Батырша[4]. Был батыр Бөрйәндән башланып киткән бер ырыуы менән рустарҙың ҡыҙ батшаһына ҡаршы баш күтәрер: Бөрйән башҡорттары иһә, күп уңышһыҙлыҡтарға осрағандан һуң, еңелерҙәр...

Инде, улым, бөйөк әбей батша хакимлыҡ иткән заманда баш күтәргән башҡорттарҙың бишенсе һәм һуңғы балаларын күр[5]...

Инде беҙҙең батырҙарға ҡаршы йыйылған аҡ һуғышсыларға ҡара...

Ҡарабай улы быға саҡ үҙе һис күрмәгән икһеҙ-сикһеҙ күп халыҡты күреп, тертләп китә. Бөтәһенең дә бер иш кейемдәре, бер төрлө ҡоралдары, атлылар менән йәйәүлеләрҙең ыҡсым сафтары уны ғәжәпкә ҡалдыра. Рустар сафындағы бөтә нәмәгә ентекләп оҙаҡ ҡарап торғандан һуң, ул ике тәгәрмәс өҫтөндә алып барылған йомро баҡыр бағаналарҙың нимә икәнен һорай. Мәскәй, көрһөнөп:

---

[1] *Ҡараһаҡал* — 1740 йылғы башҡорт ихтилалының етәксеһе.

[2] *Аҡай* — Аҡай Күсемов — 1735—1736 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе.

[3] *Килмәк* — Килмәк Нурышев — 1735— 1736 йылдарҙағы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе.

[4] *Батырша* — Абдулла Әлиев — 1755 йылғы башҡорт ихтилалының етәксеһе (1710—1762).

[5] *Бында* 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында башҡорттарҙың Салауат Юлаев етәкселегендә ҡатнашыуҙары күҙ уңында тотолған.

— Аһ, минең улым! Был — ут бөркә торған һәләк иткес мөрйәләр ауыҙы! Уға ҡара саң онтағы менән бер нисә суйын шар һалалар. Шул саңға саҡ ҡына ут тейҙеме — баҡыр бағана йәшен атҡан кеүек дөрһөлдәй ҙә, эсенән ҙур йәҙрә атып сығара, был иһә йөҙләп йәки унан да күберәк батырҙы бер юлы ҡырып һала. Донъяла был һәләк иткес көскә ҡаршы торорлоҡ бер ни ҙә юҡ.

Батыр ауыр көрһөнөп ҡуя, уның бите буйлап йәш бөрсөктәре тәгәрәп китә. Шунан ул:

— Ул зарарлы ҡара саңды кем уйлап сығарған? — тип һорай.

— Һеҙ үлтергән Дейеү пәрейҙәренең яуыз балалары. Улар Ҡарабай ырыуын ҡырып бөтөрөргә ант иткәндәр. Ошо анттарын үҙҙәренең бөтә мәкерле нәҫел-нәсәбенә еткергәндәр...

— Изгелекле Мәскәй! — тип ҡапыл ҡысҡырып ебәрә батыр. — Тоҡомдарымдың ауылдарын, йәйләүҙәрен аралап, уларға бүләктәр таратып йөрөүсе ни саҡлы яҡшы күңелле кешеләрҙе күрәм мин. Уларҙың изгелекле ҡиәфәттәре мосолман икәнлектәрен күрһәтеп тора. Улар баштарына сәлләә урап, әленән-әле тәһәрәт алып, Ҡөрьән уҡый-уҡый, минең тоҡомдарыма Мөхәммәттең васыяттарын өйрәтә.

— Юҡ, ҡәҙерле Ҡуҙыйкүрпәсем! — ти Мәскәй. — Һин уларҙы ырыуҙаштарыңдың дуҫтары тип уйлауың менән бик хаталанаһың. Был кешеләр һинең ырыуҙарыңды сағып, уларҙың мейеһенә төҙәлмәҫ ағыуҙарын ҡалдырырға ҡырыңдан килеүсе йылан һымаҡтар.

— Аһ, инәй! Ғәфү ит мине, — тип ҡаршы төшә батыр. — Һинең был һүҙҙәреңә ышанғым килмәй минең. Алла менән уның пәйғәмбәренә иман килтергән мосолмандарға былай булырға яраймы һуң? Мин, уларҙы күреүгә, әүлиә тип белдем.

— Ғәжәп түгел, улым, — ти Мәскәй. — Улар үҙ ҡиәфәттәре менән һинең тоҡомдарыңа ла шулай булып күренерҙәр. Уларҙың Аллаһы — табыш, дине — алдау, закондары тышҡы ғөрөфтәрендә генә, ә выжданында түгел...

Ҡуҙыйкүрпәс тылсымлы таҡтала буласаҡ тоҡомдарының киләсәк көндәренән бик күп күренештәр күрә. Ул аңламағандарҙы Мәскәй төшөндөрөп бара. Ниһайәт, ҡапыл күк күкрәп, тау һәм мәмерйә тетрәп китә, тылсымлы һыу тултырылған табаҡ түңкәрелә, серле таҡта иҙәнгә төшөп селпәрәмә килә. Мәскәй иҫһеҙ булып йығыла, батыр егет тә аяғына баҫып тора алмай.

Бер аҙ ваҡыт үтеүгә, бөтәһе лә тынысланғас, Мәскәй иҫенә килә һәм шунда уҡ мәмерйәһенән сығып, Ҡуҙыйкүрпәскә ошо һуңғы һүҙҙәрен әйтә:

— Улым, бөтәһе лә үтәлде, мин һиңә тоҡомоңдоң киләсәген күрһәтеүемә шатмын. Ошоноң менән минең ғилемемдең бөтөүен, серле

таҡтаның ватылыуын Алла алдан билдәләп ҡуйған. Ошо ваҡыттан алып яуыз сихырсылар тоҡомоңдоң мағаһын боҙорға тәүәккәллек итмәҫ. Инде һиңә Сарыбай йәйләүенә ашығырға ваҡыт, һаҡ бул, пәрейҙәрҙең мәкерлегенә ҡаршы ныҡ тор. Мөхәммәттең ярҙамына таян. Намыҫлы бул, дөрөҫ уйла, ғәҙел эшлә, шул ваҡытта ғына бөтә ҡаршылыҡтарҙы еңеп, үҙеңә әйттерелгән Маянһылыуыңды алырһың. Ғәҙеллек һәр ваҡыт яуызлыҡты еңә.

Мәскәйҙең ошо нәсихәтен алып, үҙе менән хушлашып, батыр килгән юлы менән китә, әммә элеккенән күберәк ҡыйынлыҡ күрә. Ул йылға ағышына ҡаршы йөҙөргә тейеш була. Юлдың ҡыйынлығы шунда икән. Шулай ҙа үҙенә хас ҡыйыулыҡ, йылғырлыҡ менән тауҙар араһынан йөҙөп сығып, көньяҡ менән көнбайыш араһындағы Мәскәй ере буйлап артабан китә.

Ҡуҙыйкүрпәс мәмерйәлә булған саҡта яуыз пәрейҙәр уға бер ни ҙә эшләй алмаған, сөнки изгелекле Мәскәйҙең тылсым көсө уларҙың көсөн кире ҡағып торған. Хәҙер пәрейҙәр, уның бынан сығыуына ҡыуанып, үҙҙәренең туғандарын үлтереүсенең башына анһат ҡына етмәк булалар. Ошондай яуыз уй менән улар өсөнсө көн инде батырға һөжүм итәләр. Егет, Мәскәйҙә күргән серле күренештәрҙе, үҙ йөрәгендә урынлашҡан һоҡландырғыс Маянһылыуҙы уйлай-уйлай, үҙ юлы менән бара торғас, ҡапыл аты тулай, үрәпсеп ҡуршылай башлай, аяҡтары менән сапсынырға тотона. Ҡуҙыйкүрпәс, тирә-йүндә бер нәмә лә күренмәгәс, атының былай ҡотороуына ғәжәпләнеп, уға бер-ике тапҡыр ҡамсы төшөрөп, үҙ юлына бора, ә аты уны тыңламай, ауыҙлығын сәйнәй биреп, бөтөнләй икенсе яҡҡа тарта. Шул ваҡыт ергә ҡуйы томан төшә, тауҙарҙы, бөтә тирә-яҡты ҡаплап ала. Алдындағы юлды күрмәгән ярһыу Йондоҙ ҡашҡаһын тыя алмаған батыр туҡтап, эйәренән төшөргә мәжбүр була. Шул ерҙә ул, атының һум иттәренең бүре талағандай йолҡоноп бөтөүен күреп, аптырап ҡала...

Бының Мәскәй әбей иҫкәрткән уҫал сихырсыларҙың мәкерле эше икәнен аңлай... Сихыр көсө менән ҡуйы томан ебәреп, атын өҙгөләү ҙә шуларҙың яуызлығы булған... Әммә һиҙгер Йондоҙ ҡашҡа, үҙен пәрейҙәрҙән талатырға ирек биреп булһа ла, эйәһен үлемдән алып ҡалған.

Ҡуҙыйкүрпәс шифалы үләндәр йыйып, шунда үҙе атып алған ҡоралайҙың таҙартылған ҡарыны эсенә һала ла уға һыу тултырып бөрөп бәйләй. Шунан һуң бәләкәй соҡор ҡаҙа, уның эсенә шул ҡарынды һалып, тупраҡ менән бер ая ҡалынлығында күмә лә өҫтөнә ут яға. Шулай итеп, ут аҫтында төшкә тиклем ятҡан үләндәр яҡшылап быҡҡас, уларҙы атының яраларына

яба. Шул көндө кискә үк аттың хәле яҡшыра төшөп, яралары уңала башлай, ә иртәгеһенә инде ул хужаһына хеҙмәт итергә әҙер була…

Атаһы Ҡарабай тәрбиәһендә үҫкән Ҡуҙыйкүрпәс Алланы таныуҙан, яҡындарыңды яратыуҙан, дошмандарҙан батырлыҡ һәм ҡорал менән үс алыуҙан башҡа һабаҡты өйрәнмәгән. Атаһынан ғүмере ишетмәгән быңдай хәйләле алыш хаҡында уйлағанда, уның бөтә тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Шунан һуң ул, Дейеү пәрейҙәренең яуыз уйҙарынан һаҡланыуға ҡарағанда, йыртҡыс арыҫландар менән алышыу анһатыраҡ икән, тигән уйға килә.

Артабан ул ҡалған алты көндө бәлә-ҡазаға осрамай тотҡарһыҙ үтә. Етенсе көндө, ҡояш кискә ауышҡан саҡта, ул бер ҡара урманға етеп, шунда ял итеп китмәк була. Шул саҡ тырнаҡтары менән дәү-дәү таштарматҡып тотҡан бөркөттәрҙең ҡапыл һауаға күтәрелеүен күрә. Бер үк ваҡытта урмандан үкерә-үкерә, олой-олой сығып, уның өҫтөнә бер өйөр йыртҡыс януарҙар ябырыла. Бергә йыйылған шул саҡлы күп дошмандарын күргәс, ул аптырап ҡала, шулай ҙа ҡойолоп төшмәй, уларға ҡаршы торорға әҙерләнә. Уның бәхетенә, урман ҡырында ғына тарбағай ботаҡлы өс йыуан имән үҫеп ултыра икән. Батыр егет атынан һикереп төшөп, шул имәндәр аҫтына туҡтай, ҡулына йәйә алып, уғын төҙәй ҙә дошманын көтә башлай. Иң алдан иҫ киткес айыуы килә. Батыр, йәйәһенең керешен тартып, уғын шул хәтле көс менән мәргән атып ебәрә, уҡ айыуҙың асыҡ ауыҙына инеп, үтә сығып китә, шулай ҙа айыу йығылмай, бары тик зыр өйрөлә лә бер нисә аҙым артҡа сигенә. Шунда уҡ бүтән йыртҡыстар айыуҙы һырып алып, яраһын ялай башлайҙар. Батыр, януарҙар араһында быңдай сәйер ярҙамлашыуҙы күреп, уғымды йомшаҡ атҡанмын икән, тип үкенә, сөнки атылған айыуҙа бер тамсы ла ҡан күренмәй.

Шул ваҡытта уның баш осонда осоп йөрөгән бөркөттәр батырҙың үҙен дә, атын да һәләк итмәксе булып, ҡот осҡос саңҡылдап, тырнаҡтарындағы таштарын ырғытырға керешәләр. Ағастың ҡуйы ботаҡтары аҫтына ышыҡланып тормаһа, һауалағы был дошмандарҙан ҡотола алмаҫ ине. Шулай ҙа юғарынан ҙур көс менән төшкән таштар, ағастың ботаҡтарын һындырғылап, уларҙы бик һирәгәйтә. Шул арала яраланған айыуҙы алыҫыраҡ алып киткән януарҙар шул хәтле көслө ырылдап олой башлайҙар, бынан батыр ҡаушай төшә. Шул ерҙә аты менән булған бәхетһеҙлек уны тағы ла ныҡыраҡ бошондора: Йондоҙ ҡашҡа, яуыз сихырсыларҙың ҡот осҡос тауыштарына сыҙай алмай, ағас аҫтынан ситкә ташлана. Тап шул ваҡыт ҡанаттарын йәйеп ат өҫтөнә төшкән

ике бөркөт үткер тырнаҡтары менән атты эләктереп алып һауаға күтәрә лә урман араһына инеп юғала, ә батыр бер ни ҙә эшләй алмай тороп ҡала. Бына шунан һуң инде Ҡуҙыйкүрпәс, йоҡоһонан уянғандай, ерҙән һәм күктән килгән януарҙарҙан бөтөнләй ҡурҡмаҫ була, ҡылысын ҡулына тотоп ҡот осҡос олоп торған януарҙарҙың туп-тура өҫтөнә ташлана…

Аҡтыҡ сиккә етеп ярһыған Ҡуҙыйкүрпәс, ҡылысын ҡулына тотоп, уларҙы эҙәрләүҙән туҡтамай, урман буйлап унда ла, бында ла ташлана бирә. Иллә-мәгәр береһен дә таба алмай: яуыз сихырсылар тырым-тырағай ҡасып бөткәндәр икән. Яуызлыҡ менән мәкерлектәре баштарынан ашҡан йыртҡыстар, ғәҙәттә, ҡурҡаҡ йөрәкле булалар.

Ахырҙа шул тиклем арыған батыр абынып йығыла һәм, шунда ағасҡа һөйәлеп, сабып килгән ат һыуынырлыҡ ваҡыт ятып тора. Яҡында ғына әллә ҡасандан бирле ҡарға ҡарҡылдай, батыр шуның сәбәбен белмәксе була: ҡарға тауышы килгән урынға барып ҡараһа, ни күҙҙәре менән күрһен: уның тоғро аты ботарлап ташланған да ҡарғаларға емгә бирелгән. Атын ҡыҙғаныуҙан батырҙың ҡайнар күҙ йәш бөрсөктәре сикәһен яндыра. Быға бик оҙаҡ ҡайғыра, әммә бер ни ҙә эшләй алмай. Ахырҙа тәрән соҡор ҡаҙа ла атының төрлө яҡҡа ботарлап ташланған һөйәк-һаяҡтарын йыйып, эйәре менән бергә шунда күмеп ҡуя. Шунан ҡылысын ҡынына һалып: «Һин бер үҙең минең яҡын дуҫым, юлдашым булып ҡалғайның, — тип илап ала, шунан күмелгән атына ҡарап: — Кисер инде, тоғро атым! Мин һине бер ҡасан да онотмам!» — тип, артабан йәйәүләп үҙ юлына китә.

Ҡуҙыйкүрпәс, өс-дүрт көн буйы ял белмәй, көнө-төнө бара, бишенсе тәүлеккә сыҡҡанда, ярҙарына оҙон-оҙон ҡамыш үҫкән, ҡаты ағышлы бер бәләкәй йылғаға килеп етә. Был Сарыбай батыр йәйләгән Ҡараһыу йылғаһы булырға тейеш, тип ҡыуана, сөнки ул Мәскәй әбей һөйләгән ергә оҡшаған була. Биш көнлөк юлда бик арыған батыр, ошо йылға буйында ял иткеһе килеп, һыу алып эсә лә ҡыуанысынан: «Мин инде Ҡараһыу йылғаһын тапҡанмын икән, Сарыбайҙы ла табырмын, ә һыуын эскәнмен икән — Маянһылыу ҙа минеке булыр», — ти. Шуға шатлана-шатлана, серле мәмерйәлә күргән Маянһылыуын күҙ алдына килтерә, шунан инде арыуын да онотоп, оҙаҡ йоҡонан уянғандай булып, урынынан һикереп тора ла йылға ағышы буйлап йүгерә-атлай китә. Әммә оҙаҡламай аяҡтары талып туҡтай, артабан яй атлап бара. Йөрөшөн алыштырыуға, уйҙары ла алышына. Ауыр көрһөнөп: «Аһ, дуҫым, яҡшы атым Йондоҙ ҡашҡа! — тип ҡысҡырып

ебәрә. — Һин мине иң кәрәк саҡта яңғыҙ ҡалдырҙың: һине терелтер өсөн мин йылҡы өйөрҙәремдең, көтөүҙәремдең бөтәһен дә аямай бирер инем; икәүләп, һис шикһеҙ, Маянһылыуымды табыр инек; йәне һөйгән йәре менән тоғро аты башҡортҡа бөтә нәмәнән дә ҡәҙерлерәк бит. Йәйәүләп мин Сарыбайҙың йәйләүен тиҙ генә таба алырмынмы икән? — тип уйлай. — Ә тапҡан хәлдә, йыртыҡ сәкмән менән, ялан аяҡ, атһыҙ, ҡоралһыҙ көйө ҡарун һәм тәкәббер Сарыбайға нисек күренермен икән? Икенсе яҡтан, бәлки, хан улы Айҡара солтан батырҙар менән көрәштә, уҫал арыҫландар һәм юлбарыҫтар аулағанда йәки атта йөрөүҙә, мәргәнлектә ҡыҙға үҙен көслө һәм оҫта егет итеп күрһәткәндер. Маянһылыуҙың ошондай батырҙан мине өҫтөн һанауын мин ҡайҙан беләйем? Ә мин, Маянһылыу менән атаһына таныш булмаған бер һөйкөмһөҙ башҡорт, ихлас күңелдән яратам, тип әйтеүҙән һәм алып ҡасыуҙан башҡа ҡыҙға бер ни ҙә вәғәҙә итә алмайым».

Сихырсылар ҡорған хәйләләрҙе дан менән йырып үткән, ә үҙҙәрен ҡыйрата барған һәм уҫал йыртҡыстар менән ҡаһармандарса алышҡан айбарлы батыр хәҙер янып торған күҙҙәренән һәм алһыу биттәренән башҡа ҡоралы ла, көсө лә булмаған кәрһеҙ бер ҡыҙҙан еңелә, уның алдында ҡойолоп төшә.

Шатлыҡлы уйҙарынан һағышлы уйҙарға күскән Ҡуҙыйкүрпәс аҡрын ғына атлап, йылға ағышы буйлап үҙ юлы менән бара бирә. Оҙаҡламай ул ҡамышлыҡ аръяғынан ниндәйҙер шау-шыу ишетә, уға яҡынайған һайын, таныш көсәйә бара. Юлсы егет шунда табан ашығып йүгереп барһа, ҡамышлыҡ аръяғындағы тигеҙ яланда бик ҙур арыҫландың, бер ҡаҙаҡ батырына ташланып, уны бөтөнләй хәлдән тайҙырғанын күрә. Ҡаҙаҡ, ҡулында ҡылысы булһа ла, хәлһеҙлектән киҙәнеп һелтәй алмай, ә йыртҡыс уның һайын көсөн арттыра ғына бара. Ул инде батырҙың атын ботарлап ташлаған, эйәһен дә шулай итмәксе була. Хәҙер бөтә ышаныс үҙҙәренең отҡорлоғо менән арыҫланды эйәһенә яҡын ебәрмәй ҡаршы торған ике тоғро этте генә. Әммә йыртҡыс уларҙы ла икеһен бер юлы урталай өҙә һуҡҡан, шунан саҡ аяғына баҫып торған батырға ташланған. Уны ергә йығып, үткер тырнаҡтары менән тимер күлдәген йыртҡылай башлаған. Быны күргән башҡорт батыры, таныш булмаған егеткә ярҙам күрһәтмәксе булып, йылдамыраҡ йүгереп килә, ҡылысын бар көсө менән киҙәнеп, арыҫландың үткер тешле, ҡалын иренле томшоғон өҙә саба. Йыртҡыс башын сайҡап, моронон ергә ышҡый, шунан яман ярһып батырға ташлана. Ҡуҙыйкүрпәс, икенсе тапҡыр киҙәнеп һелтәүе менән, инде уның

алғы аяҡтарын өҙә саба, ә өсөнсө тапҡыр һелтәнгәндә, арыҫлан ергә һуҙылып йән бирә.

Ул инде януарҙы ҡалдырып, һуштан яҙып, саҡ тын алып ятҡан ят батырға ярҙамға ташлана. Тәнен ҡарап сыҡҡас, уның яраланмауын, ә тотош иҙгеләнеүен күрә. Ул шунда уҡ йылғанан таҡыяһы менән һыу килтереп бөркә. Оҙаҡламай ҡаҙаҡ күҙҙәрен аса ла йәнә йома. Ҡуҙыйкүрпәс тәүҙә, Сарыбай йәйләүен күрһәтер кешене таптым, тип ҡыуанһа, хәҙер уның үлеп барыуын күреп, өмөтөн өҙә, бигерәк тә уға ярҙам күрһәтә алмауы өсөн борсола. Яраны уңалта торған шифалы үләндәрҙе белһә лә, был хәлдә уларҙың да файҙаһыҙ икәнен күрә. Оҙаҡ ҡына уйлап торғандан һуң, егетте йылғала ҡойондормаҡсы булып, иңбашына күтәреп, яр ситенә алып бара. Яҡшы ниәт менән уйлап табылған был хәтәр дауалау юлы имгәнеүсенең хәлен яҡшырта төшә, дауалаусыны ҡыуандыра, сөнки күңеле яҡшы кеше икенсе берәүҙең яҡшылығын күреп шатлана бит. Башҡорт батыры ҡаҙаҡты яр башына һалып сисендерә башлаған саҡта, уның күҙҙәрен асып, ҡулдарын ҡыймылдатыуын күрә. Бынан ул ауырыуҙың ике сәбәптән: һыу бөркөүҙән һәм күтәреп килтереүҙән иҫенә килеүен аңлап ала. Шунлыҡтан ул һыу һоҫоп алып, уға ҡабат бөркә лә шунан йәнә иңбаштарына күтәреп, үлтерелгән арыҫлан янына кире илтә. Шул ваҡытта инде ҡаҙаҡ егетенең тороп ултырып, түбәндәге һүҙҙәрҙе әйтеүен ишеткәс, сикһеҙ ҡыуана:

— Изгелекле батыр! — ти ул. — Һин, арыҫландың үткер тырнағынан тартып алып, мине үлемдән ҡотҡарҙың, инде мине үҙем ҡәҙер иткән ата-әсәмә, мине бүтән ағай-энеһенә ҡарағанда нығыраҡ яратҡан апайыма ҡайтарһаңсы. Әгәр ҙә шул апайым минең ҡарамағымда булһа, мин уны һиңә кәләш итеп бирер инем, өҫтәүенә, яҡшы атымды ла ҡушыр инем. Әммә, һин ҡыҙрас башҡорт булғанлыҡтан, атайым һинең ише батырҙарҙы бик ҡәҙер итһә лә, быға ризалыҡ бирер тип ышана алмайым.

— Атайың кем һуң һинең? Үҙең кем дә, апайың кем, ниндәй ырыуҙан булаһың? — тип һораша Ҡуҙыйкүрпәс.

— Минең атайым — Сарыбай батыр, — тип яуап бирә ҡаҙаҡ, — үҙемдең исемем — Барлыбай, апайымдыҡы — Маянһылыу, ә ырыуыбыҙ иң яҡшы ҡаҙаҡ ырыуҙарының береһе була.

Шул ваҡыт Ҡуҙыйкүрпәс:

— Һин Маянһылыу ҡустыһымы ни! — тип ҡысҡырып ебәрә лә, Маянһылыуҙың исемен әйтеп, серем асылды, буғай, тип уйлап, телен тешләй. Ғашиҡ булған кеше эс серен бүтәндәрҙән түгел, хатта, мөмкин булһа, үҙенән дә йәшерер ине. Шунлыҡтан Ҡуҙыйкүрпәс, үҙе асыҡтан-асыҡ һөйләүсән кеше булһа ла, ят кешегә йөрәк серҙәрен

асҡыһы килмәй. — Хәҙер һинең атайың Сарыбай ҡайҙа? — тип кенә һорай.

— Бынан ике көнлөк юлда, — тип яуап бирә ҡаҙаҡ егете. — Мин һинең кем икәнеңде, ҡайҙан, ҡайҙа барыуыңды белмәйем. Тик, хуш күңелле батыр, һинән шуны үтенеп һорайым: зинһар, мине, хәлдән тайған бер кешене, бында ҡалдыра күрмә, бер йыртҡыстан ҡотҡарып, икенсеһенә бирмәсе, — тип үтенә.

Башҡорт батыры уны Сарыбай йәйләүенә илтергә ризалығын бирә. Быны ул, үҙенең хуш күңеллелегенән бигерәк, Маянһылыуҙы өҙөлөп яратыуынан шулай эшләргә була. Шул ерҙә ул эйәрҙең айылын сисеп ала ла шуның менән Барлыбайҙы арҡаһына йөкмәп алып китә. Ҡуҙыйкүрпәс үҙ йөгөнән екһенмәй, киреһенсә, шатлана ғына, сөнки Барлыбайға ярҙам ҡулын һуҙып, атаһы менән апаһының уға рәхмәт әйтеүҙәренә һәм ошо уңай менән уларға яҡынайырға өмөт итә. Барлыбай иһә үҙ тарафынан уға бөтмәҫ рәхмәт әйтә, мал, кейем-һалым бирергә вәғәҙә итә һәм үҙе менән бергә йәшәргә атаһын ризалаштырырға һүҙ бирә. Үҙен Йылҡыбай тип таныштырған башҡорт батыры был вәғәҙәгә бик ҡәнәғәтләнеп, шәфҡәтле ҡаҙаҡты табыуына шатлана, артабан был егет үҙемә дуҫ, бәлки, эшемдә ярҙамсы ла булыр әле, тип ҡыуана. Шулай ҙа ул әле һыналмаған дуҫының хыянат итеп ҡуйыуынан ҡурҡа, үҙенең бында ни өсөн килеүен дә, ҡайһы ырыуҙан икәнен дә, ысын исемен дә әйтмәй. Шулай итеп, Йылҡыбай (Ҡуҙыйкүрпәсте мин артабан шул исем менән йөрөтәм) ҡаҙаҡтың бөтә вәғәҙәләренә башҡортса: «Ярар, Барлыбай! Бының бөтәһен дә алда күҙ күрер!» — тип кенә яуап ҡайтара һәм уны йөкмәгән килеш атлай бирә.

Өсөнсө көн тигәндә, улар Сарыбай йәйләүенә килеп етәләр, бында Сарыбайҙың үҙе менән ҡыҙынан башҡа бер кем дә булмай, сөнки бөтәһе лә бер генә көнгә һунарға китеп тә, биш тәүлек буйы ҡайтмаған Барлыбайҙы эҙләргә ебәрелгән икән. Атаһы иң яратҡан улын, апаһы һөйөклө ҡустыһын күреүгә ҡыуанып бөтә алмайҙар. Уны үлемдән ҡотҡарып, йөкмәп алып килгән Йылҡыбай икеһенең дә ихлас күңелдән әйткән рәхмәт һүҙҙәрен ишетә.

Маянһылыуҙың теге тылсымлы таҡтала кәүҙәләнгән шәүләһе генә лә Ҡуҙыйкүрпәсте хайран ҡалдырғайны, инде күҙ алдында ҡыҙҙың үҙен күргәс, егеттең ниндәй хәлдә булыуын үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ. Маянһылыу нескә билле, зифа буйлы, ап-аҡ түңәрәк йөҙлө булып, ике бите алһыуланып, күҙҙәре янып, күкрәге ҡалҡып тора, тауышы ла йөрәкте елкендергес булып яңғырай. Ҡустыһын үлемдән ҡотҡарғаны өсөн рәхмәт әйткән саҡта, батыр ошо тауыштан телһеҙ ҡала. Аһ! Был ваҡытта ниндәй көлкө булып

күрендең һин, Ҡуҙыйкүрпәс бахыр! Һиңә, минең кәңәшемде тыңлап, һоҡландырғыс йәшлек бөркәнсеген һирпеп, уны ҡарт итеп күҙ алдына килтерергә ине, әммә һин мине аңламаның йәки миңә ышанырға теләмәнең. Үҙең күргәндәргә ҡарағанда, күңелеңдән йөҙ тапҡыр мауыҡтырғысыраҡ матурлыҡты астың, шунлыҡтан ҡойолоп төштөң дә, ҡуҙғалыу түгел, бер һүҙ ҙә өндәшә алмай, ҡатып ҡалдың. Ошо хәлде күргән Сарыбай менән Маянһылыу һине яртаҡыл тип уйланы.

Әммә инде Барлыбай башҡорт егетенең көсө һәм ҡаһарманлығы хаҡында һөйләп биргәс, улар был уйҙарынан дүнеп, уны ҡәҙер итәләр һәм икенсе тапҡыр уға рәхмәт әйтәләр. Ә шул арала, ярһыған йөрәген аҙ булһа ла тынысландырып, Маянһылыуға иҫе китмәйерәк ҡарарға тырышҡан Йылҡыбай уларҙың рәхмәт әйтеүенә: «Мин Барлыбайға осраҡлы ғына ярҙам күрһәттем, әгәр кәрәк булһа, бындай ярҙамды Сарыбай ғаиләһенә үҙем теләп күрһәтеүҙән дә баш тартмаç инем», — тип ихлас күңелдән ҡыçҡа ғына яуап ҡайтара.

Ҡустыларын эҙләгән ерҙән инде ҡайтып төшкән улдарына Сарыбай Йылҡыбай менән Барлыбай хөрмәтенә йыйын яһарға ҡуша. Был йыйынға уның бик күп ағай-энеләре саҡырыла. Туйғансы ит ашап, һыуһын ҡанғансы ҡымыҙ эскәндән һуң, үҙҙәренең егетлектәре, ҡыйыулыҡтары менән маҡтанырға тотоналар... Был әңгәмәләрҙе оҙаҡ тыңлап ултырған Сарыбай, ахырҙа, һөйләнгән хәлдәрҙең ваҡлығынан эре генә көлөп ҡуя ла ҡасандыр үлтерелгән юлбарыç тиреһен күрһәтеп маҡтана башлай... Ә ысын еңеүсе Ҡарабайҙы иçкә лә алмай. Маҡтана-маҡтана ла, тауышын күтәрә төшөп:

— Барлыбай улым, беҙгә үҙең үлтергән арыçлан тиреһен килтерсе, — тип өндәшә, — беҙ уны юлбарыç тиреһе менән үлсәп ҡарайыҡ, уларҙың ҙурлығына ҡарап, ҡайһыбыҙ батырыраҡ, көслөрәк икәнен күрербеҙ, — ти.

Атаһының был һүҙҙәренән ҡыҙарынған Барлыбай:

— Арыçланды мин түгел, Йылҡыбай үлтерҙе, хөрмәтте уға күрһәтергә кәрәк, — тип яуап ҡайтара.

— Һин туҙға яҙмаған көлкө һүҙ һөйләйһең, — тип екерә атаһы. — Арыçланға иң элек ташланып, уның менән алыша башлаусы һин бит! Шулай булғас, еңеүсе лә һин, хөрмәт тә һиңә булырға тейеш. Йылҡыбай уны үлтерешеүҙә һиңә бер аҙ ярҙам ғына күрһәткән!

Атаһының ҡыҙыу холҡон белгән Барлыбай, уның менән артабан һүҙ көрәштерергә баҙнат итмәй, арыçлан тиреһен килтереп бирә. Тиреләрҙе сағыштырып ҡарағас, арыçлан тиреһе юлбарыçтыҡынан бер терһәк буйы оҙон булып сыға. Улы үлтергән йыртҡыстың тиреһе юлбарыçтыҡынан ҙур булғас, Бар-

лыбайҙы күберәк маҡтайҙар. Сарыбайҙың быға ғәрлеге килә. Йылҡыбай иһә Сарыбай уны арыҫлан үлтереүсе түгел тип әйтеүенә артыҡ үпкәләмәй. Юлбарыҫты ла Сарыбай түгел, ә атаһы Ҡарабай үлтергәнлеге уға билдәле. Йылҡыбай, үҙе теләмәһә лә, Сарыбайҙың, мин үлтерҙем, тип шапырыныуы өсөн инде бик хурлана. Шулай ҙа ул, хужаһының йөҙөн йыртҡыһы килмәгәнлектән, был юлы ла өндәшмәй ҡала.

Иртәгеһенә Барлыбай, алдан вәғәҙә итеүе буйынса, үҙен үлемдән ҡотҡарыусыға мал-тыуар менән кейем-һалым бүләк итергә атаһынан рөхсәт һорай. Сарыбай быға ризалығын бирә, бындай ҡыйыу егет барымтаға барғанда йәки йәйләүҙе һаҡлағанда кәрәкле кеше булыр, тип уйлап, уға үҙендә торорға рөхсәт итә. Барлыбай, һүҙен тыңлағаны өсөн атаһына рәхмәт әйтеп, Йылҡыбайға биргән вәғәҙәһен үтәргә ашыға.

Әммә ул, Йылҡыбайҙың эйәрле ат менән сәкмәндән башҡа бер ни ҙә алырға теләмәүен белгәс, бик ғәжәпләнә. Ҡаҙаҡтар араһында һирәк осрай торған бындай малға ҡыҙыҡмаусанлыҡ холҡон күреп, Барлыбай дуҫын йәнә нығыраҡ ярата башлай.

— Әйтсе, дуҫҡайым, — тип һорай ул, — үҙ тыуған ереңдән шул тиклем алыҫ яҡтарға ниндәй йомош менән килеп сыҡтың?

Ошондай һорауҙың бирелеүен гел көтөп йөрөгән Йылҡыбай күптән уйлап ҡуйған әкиәтен һөйләп бирә:

— Атайым үҙенең ҡәрҙәш-ырыуҙары менән Яйыҡҡа ҡойған Һаҡмар йылғаһы буйында йәйләй ине. Көндәрҙән бер көндө беҙ, һунарҙан арып ҡайтып, бик ҡаты йоҡоға талдыҡ. Шул ваҡытта бер төркөм ҡаҙаҡтар ҡапыл килеп йәйләүҙе баҫалар ҙа йылҡы өйөрҙәребеҙ менән бүтән малдарыбыҙҙы әйҙәп китәләр. Беҙ барымтасылар артынан ташландыҡ, ҡыуып етеп, һуғыша башланыҡ, әммә улар беҙҙең һәр беребеҙгә ун кеше тура килгәнлектән, бөтәбеҙҙе лә ҡыра һуғып, яраланған ағайым менән мине, ҡуҙҙәребеҙҙе бәйләп, үҙҙәре менән алып киттеләр. Беҙҙе ни эшләтмәксе булғандарын мин белмәйем. Ун көнлөк юл үткәндән һуң, туй ҡороп ятҡан бер ауылға килеп туҡтанылар. Беҙҙе урлаусылар бында иҫергәнсе ҡымыҙ эстеләр ҙә ҡаты йоҡоға сумдылар. Шул ваҡытта мин, күҙемдең бәйен сисеп, иң яҡшы ат һайлап менеп, ҡылыс алдым да, ҡайҙа барғанымды ла белмәй, баш һуҡҡан яҡҡа сабып киттем. Шулай итеп, ун биш тәүлек буйы юлда булдым. Ошонан алыҫ түгел ерҙә мин атымдан айырылдым. Ул төндә туғайҙа үлән утлап йөрөй ине. Ҡапыл ҡамышлыҡ араһынан юлбарыҫ килеп сыҡҡан да, атымды йыртҡылап, ҡамышлыҡҡа алып инеп кит-

кән. Мин уның хатта эйәрен дә таба алманым. Шунан һуң йәйәүләп өс көнлөк юл үткәс, арыҫлан менән алышҡан һине осраттым һәм үҙеңә ярҙам ҡулы һуҙыу бәхетенә ирештем.

Быны ишеткән Барлыбай ғүмерлек дуҫ булырға вәғәҙә биреп, Йылҡыбайҙы ҡосаҡлап ала.

Уйламағанда Сарыбай ғаиләһе менән бергә йәшәү бәхетенә ирешкән Йылҡыбай Маянһылыуҙы көн дә күреп һөйләшә башлай. Ҡайһы саҡта уның йомошон да үтәй. Ҡыҙ еңгәләре менән бейә һауырға йөрөгән саҡта, егет уға бейәләрен тотоп бирергә ярҙамлаша, ә Маянһылыу һиҙҙермәй генә уға күҙ төшөргөләп ҡуя. Егеттең оҙон буйлы, киң күкрәкле батырҙарса һыны ҡыҙға бик оҡшай. Бөтәһе лә яҡшы бара, әммә йомшаҡ күңелле, оялсан Йылҡыбай, кире ҡағып ҡуймағайы тип, Маянһылыуға үҙ уйын әйтергә баҙнат итмәй. Ул әле уның кейәүе Айҡараны яратыу-яратмауын да белмәй. Быны ул дуҫы Барлыбайҙан һорашып белергә тырыша. Яратҡан ҡустыһы Барлыбай иһә, апаһының бөтә серҙәрен белгәнлектән, Маянһылыуҙың Айҡара солтанды яратмауын һөйләп бирә. Хан улы үҙе ҡарһаҡ, үҙе аҡһаҡ һәм көмрө, етмәһә, бик уҫал холоҡло бер әҙәм икән. Бай һәм хан улы булғанлығы өсөн генә абруйлы икән.

— Атайым шуға ҡыҙығып, хан менән туғанлашмаҡ була, Маянһылыуҙы уның улына көсләп бирә. Беҙ инде көн дә Айҡараның туй яһарға килеүен көтәбеҙ. Миңә апайым бик йәл...

Ошо һүҙҙәрен әйткәс, Барлыбай йылмайып ҡуя.

— Был ни тигән һүҙ? — тип һорай Йылҡыбай.

— Дуҫым! — ти Барлыбай, бер аҙ уйлап алғас. — Беҙҙең ғаиләлә атайым бер кемгә лә һөйләмәҫкә ҡушҡан бер сер бар. Бәлки, бының һиңә һис кәрәге лә юҡтыр, шулай ҙа дуҫтар араһында йәшерен нәмә булырға тейеш түгел. Апайым Маянһылыу бала саҡтан уҡ атайымдың элекке дуҫы башҡорт батыры Ҡарабай улына әйттерелгән булған. Апайымдың йәше етеп, буйға үҫкән һайын, һылыулығы ла арта барып, даны бөтә илебеҙгә таралды. Иң яҡшы ырыуҙарҙың күп кенә батырҙары уны яусылатып, бай ҡалым вәғәҙә иттеләр. Шунлыҡтан атайым, бик маһайып китеп, бөтәһенең дә, шул иҫәптән атаһынан йәшләй етем ҡалған Ҡарабай улының да һорауын кире ҡаҡты. Ә артабан, бүтән батырҙарҙың һәм Ҡарабай улының йөҙәтеүенән ҡотолор өсөн, апайымды Айҡараға биреп, уның атаһы менән ошонда, уның иленә, күсеп килергә һүҙ ҡуйышты. Шул көндән алып Маянһылыу Айҡараны яратмай башланы. Ҡарабай улын, бер ваҡытта ла беҙҙең йәйләүгә килмәгәнлектән, күргәне булмаһа ла, уның егетлеге һәм сослоғо

хаҡында бик күп маҡтау һүҙҙәре ишеткән апайымдың уға барғыһы килә. Мин бая шунлыҡтан апайымдың әле булһа ғәрипкә түгел, батыр егеткә барғыһы килеүен уйлап көлдөм дә инде.

Барлыбайҙың был һүҙҙәрен ишеткән Йылҡыбай Маянһылыуҙың Ҡарабай улын яратыуын белеп шатлана, ә үҙе был хаҡта уға ҡасан, ҡайҙа күреп әйтергә белмәй. Оҙаҡ баш ватҡандан һуң, бының әмәлен таба. Үҙе бергә йәшәгән дуҫы Барлыбайҙың тирмәһе Маянһылыу торған тирмәнән алыҫ булмай. Ҡатын-ҡыҙҙар бейә һауырға йәки ҡымыҙ әсетергә китеп бөткән саҡта, Маянһылыу үҙ тирмәһендә берәй нәмә сигеп ултырыусан. Һәр ваҡыт үҙ тирмәһендә яңғыҙ ҡалған Йылҡыбай тап ошо хәлдән файҙаланырға була. Ул, бер кемдең дә исемен телгә алмай, үҙенең ил ҡыҙырып йөрөүен, башынан уҙған хәлдәрҙе, уй-кисерештәрен белдергән кинәйәле йыр уйлап сығара. Маянһылыуҙың да үҙ тирмәһендә яңғыҙ ултырыуын белеп, ул үҙенең яғымлы тауышы менән һәр ваҡыт ошо йырын йырлай...

Маянһылыу уны иғтибар менән тыңлай, үҙе лә ҡабатлап йырлай башлай. Йылҡыбай быны яҡшы белә.

Ошонан һуң оҙаҡ та үтмәй, Сарыбай йәйләүенә хандан өс илсе килеп төшә. Илселәр, улы һәм ағай-энеләре менән хан юлға сыҡты, ярты юлда туҡтап, һине бөтә улдарың һәм ағай-энеләрең менән шунда әҙерләнгән йыйынға саҡыра, тип хәбәр итәләр. Быны көтөп йөрөгән Сарыбай әллә ҡасан әҙерләнеп торған була. Ул иртәгеһенә ҡәрҙәш-ырыуҙарын саҡырып ала, ә өсөнсө көндө инде, йәйләүендә тик ҡатын-ҡыҙҙарҙы, өс көтөүсеһен һәм ошо мәлдә сирлегә һалышҡан Йылҡыбайҙы ҡалдырып, хан йыйынына китеп тә бара.

Сарыбайҙар киткән көндө үк, ҡатын-ҡыҙҙар бейә һауырға таралышҡас та, түҙемһеҙ Маянһылыу, ҙур йомош тапҡан булып, Барлыбай тирмәһенә килеп инә, ә Барлыбай ҙа, уның ҡатыны ла бында булмай. Эштең асылын аңлап алған Йылҡыбай, ул килеп ингәс тә, һүҙ башлай:

— Һылыуҙарҙың-һылыуы Маянһылыу! Минең хәлемде белешергә килеүең өсөн ҙур рәхмәт һиңә! Мин инде һауыҡҡас, һинән бейәләреңде тоттормай, гел генә үҙем тотоп, еҙелеккә килтерермен.

— Һинең ауырып ятыуыңа борсолам мин, Йылҡыбай, инде һинең йырың да ишетелмәй башланы, — ти ҡыҙ.

— Ул йыр һиңә оҡшаймы һуң?

— Йырың һәйбәт тә, тик аҙағы юҡ, һин, бер батырҙың тыуғанүҫкән илен ҡалдырып, алыҫҡа барып сығыуы һәм унда бер ҡыҙҙы ата-әсәһенән ҡасырып алып китергә күндереүе хаҡында йырлайһың да йырыңды ошо ерҙә бөтөрәһең.

— Ә ҡыҙ уның менән ҡасып китергә ризамы һуң?

— Мин уныһын белмәйем.

— Әгәр шул ҡыҙ урынында һин булһаң һәм шул батырҙы яратһаң, уның менән китергә риза булыр инеңме?

— Юҡ! Мин ул саҡта атайымды асыуландырған булыр инем, һәм ул мине бөтә ғүмере буйы яратмаҫ ине.

— Әгәр батыр үҙеңде яратмай башлаһа, ни эшләрһең?

— Быныһы унан да яманыраҡ; ул ваҡытта мин ни эшләргә лә белмәҫ инем.

— Ә мин һиңә нимә эшләргә кәрәклекте беләм.

— Нимә эшләргә һуң?

— Һис ҡурҡып тормай, минең менән ҡасып китергә, сөнки мин Ҡуҙыйкүрпәстең үҙе, Ҡарабай улы булам, бәләкәй сағыңда һин уға кәләш булырға вәғәҙә ителгәнһең; һин уны яратаһың, ул да һине ярата.

— Ысынмы һуң был?

— Бына атайым артынан миңә үҙ ҡулдарың менән сигеп ебәргән бүләктәрең.

Ошо һүҙҙәрҙән һуң батыр үҙ башынан кисергәндәрҙе һәм Мәскәй әбей мәмерйәһендә күргәндәрен бөтәһен дә һөйләп бирә. Был Маянһылыуға шул тиклем тәьҫир итә, ул шатлығынан илап ебәрә һәм, батырҙы үбеп, уны мәңге яратырға ант итә. Әммә ҡыҙ иң элек батырҙың Сарыбай янына барып, уға үҙенең ысын исемен белдереүен һәм ҡасандыр атаһына биргән һүҙен үтәүҙе һорауын теләй, быны Барлыбай менән бергәләп эшләргә кәрәк булыр, ти. Атайым рәнйер тип, егеттең бергә ҡасайыҡ тигән теләгенә риза булғыһы килмәй. Ҡуҙыйкүрпәс уны оҙаҡ өгөтләп ҡарай, әммә ул быға күнмәгәс, ахырҙа:

— Ярар, Маянһылыу, — ти. — Мин һинең был теләгеңде үтәйем, тик һиңә шуны иҫкәртеп ҡуям: атайың Сарыбай, һүҙемде кире ҡағып, үҙемде йәйләүенән ҡыуаса҄ҡ, ул ваҡытта һин мине ҡабат күрә алмаясаҡһың.

— Аһ! Юҡ, һөйөклөм, Ҡуҙыйкүрпәс! Зинһар, улай тимә, һинән айырылып ҡалыу миңә бөтәһенән ауырыраҡ! — тип ҡысҡырып ебәрә лә Маянһылыу батырҙы ҡосаҡлап ала. — Ошо бер һүҙеңдән генә йөрәгемдең нисек ярһып тибеүен күрһәңсе!

— Ҡасыуҙан башҡа сара юҡ, — ти һөйгән егете. — Мин китермен дә, һин ҡалырһың, унан ғүмерҙә күрешмәбеҙ. Һин үҙе ҡарһаҡ, үҙе аҡһаҡ, көмрө һәм тиҫкәре Айҡараның бисәһе булырһың, ә мин үҙемә бүтән кәләш эҙләрмен.

— Юҡ, юҡ! Был һүҙҙәреңде ҡабат әйтмә! — ти Маянһылыу. — Ҡурҡыуымдан тотош ҡалтыранып, саҡ тын алыуымды күрһәңсе. Тыңла! Атайым һүҙеңде кире ҡағып, үҙеңде йәйләүҙән ҡыуа икән, ул саҡ үҙең йыртҡыс

арыҫланды үлтергән ергә туп-тура бар ҙа шунда ҡамышлыҡ араһына йәшенеп, мине көт. Бәлки, һиңә беҙҙең халыҡтың ошо йолаһы билдәлелер: әйттерелгән ҡыҙ менән егеттең ағай-энеләре бер-береһенән ике-өс уҡ атым ер алыҫлыҡта бүленеп торалар ҙа ҡыҙ менән егетте, баштан-аяҡ ҡоралландырып, атта ярышырға ебәрәләр. Кейәү, йән-фарман сабып, кәләше артынан ҡыуып китә, ул шулай сабып барышлай ҡыҙын ҡосаҡлап алып, үҙенең егетлеген күрһәтергә тейеш. Кәләше иһә, уны еткермәҫ өсөн ҡамсыһы менән һелтәнә-һелтәнә, ары сабып китергә тырыша. Мин, ул ғәрип Айҡаранан анһат ҡотолоп, шулай баштан-аяҡ ҡоралланған көйө, үҙ иркем менән атта сабып йөрөүемә ышанам. Ошо килеш, ҡәҙерле батырым, һинең яныңа сабып барырмын да мәңге һинеке булырмын. Ул ваҡытта инде беҙҙе бер кем дә айыра алмаҫ! Ә артыбыҙҙан ҡыуалар икән, һин мине бушҡа ғына бирмәҫһең тип ышанам.

Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуҙың был уйына бик ҡәнәғәт була, уны ҡосаҡлап алып күкрәгенә ҡыҫа. Шунан атына менеп:

— Хуш, ҡәҙерлем Маянһылыу! — ти.

— Хуш бул, — ти Маянһылыу, — тик мин һинең менән тиҙҙән күрешермен, артабан ғүмергә айырылышмабыҙ.

Егет, ҡуҙғалып киткәс, артына ҡарай-ҡарай бара. Маянһылыу, ул күҙҙән юғалғансы, урынынан ҡуҙғалмай ҡарап ҡала.

Шул арала хан йыйыны дауам итә. Унда ҡымыҙҙы ла, итте лә йәлләмәйҙәр. Ҡунаҡтар менән хужаларҙың бөтәһе лә, алдарына иттең иң тосо ҡуйылған хан менән Сарыбайҙан башҡа, ҙур табын яһап ултырғандар. Шул ваҡытта улар янына Йылҡыбай килеп төшә. Табындан беренсе булып күтәрелгән дуҫы Барлыбай уның сәләмен ала, үҙен хан менән Сарыбай янына килтереп иҫәнлек-һаулыҡ һораштыра. Хан Сарыбайҙан егеттең хәл-әхүәлен, ҡайһы ырыуҙан икәнен һораша. Сарыбай иһә, был ҡаҙаҡ баҫҡынсыларының әсирлегенән ҡотолған бер ярлы башҡорт, һунарҙа улыма ярҙам күрһәткән өсөн уны үҙ йәйләүемдә ҡалдырҙым, тип яуап ҡайтара. Хан Сарыбайҙың киң күңеллелеген, башҡорттоң изгелеклеген маҡтай, үҙе ит ашап, ҡымыҙ эсеүендә була. Йылҡыбайҙы ла табынға ултыртып һыйларға ҡуша.

Табындағы табаҡ-табаҡ ит ашалып, һабаларҙағы ҡымыҙ эселеп бөткәс, хан көрәш башларға әмер бирә. Бында ике яҡтан батырҙар ҙа, атта оҫта йөрөүселәр ҙә күп була. Уларҙың күбеһе көрәштә үҙ көстәрен, таҫыллыҡтарын күрһәтәләр. Сират Йылҡыбайға килеп еткәс инде, уның егетлегенә бер кем дә тиңләшә алмай: үҙе менән кем

генә алышмаһын, ул уны йығып ҡына ҡалмай, туп кеүек сөйөп ташлай. Сарыбай һәм башҡалар уның көсөнә, оҫталығына хайран ҡалып, алышҡан һайын маҡтап ултыралар. Шулай ҙа хандың быға эсе боша, сөнки Йылҡыбай Сарыбай яғынан булғанға, көрәштә хандың ағай-энеһе хурлыҡҡа ҡала. Шул ваҡыт хан Сарыбайға үҙ ағай-энеһенән Йылҡыбайға ҡаршы өс көрәшсе сығарып, еңеүсегә бүләккә илле һарыҡҡа торорлоҡ кәрмәзин сәкмән, егерме һарыҡлыҡ ҡама ҡырпыулы хәтфә таҡыя ҡуйырға ҡуша. Сарыбай быға кинәнеп риза була, сөнки уның үҙе менән көрәшергә бер кем баҙнат итмәгән бик көслө бер ҡустыһы була. Бына шул батыр башҡортто еңеп, үҙ ырыуын хан ырыуы алдында, һис шикһеҙ, өҫтөн итеп күрһәтер тип ышана. Уға үҙенең ике улын — Бөркөтбай менән Барлыбайҙы ҡуша. Элек-электән көрәшкә һәүәҫ булғанлыҡтан, үҙе лә башҡорт менән көрәшергә баш тартмаҫ ине лә, ҡоҙалары алдында абруйын төшөрөүҙән генә ҡурҡа.

Көрәшселәр уртаға сығып, билдәренән алышалар. Киң яурынлы ҡаҙаҡ, үҙ көсөнә таянып, Йылҡыбайҙы, арҡанлаған уҫал үгеҙ шикелле итеп, төрлө яҡҡа ҡайырғыларға тотона. Йылҡыбай уға тәүҙә ирек бирә, әммә ҡаҙаҡ аҙ ғына албырғай төшкәс, бөтә таҫыллығы менән көсөн һалып, уны баш осона күтәрә, шул килеш алты тапҡыр өйрөлдөрөп, ҡарап ултырыусыларға ҡанаттарын һалындырып, аяҡтарын һуҙып һауала йөҙгән бөркөт төҫлө итеп күтәрә лә ергә ырғыта. Тамаша ҡылыусыларҙың бөтәһе лә быға таң ҡалып, шатлыҡтан һикерешеп аяҡ үрә торалар һәм еңеүсене маҡтап һөрән һалалар. Сарыбайҙыҡылар ҙа, үҙ ырыуҙаштары кеүек үк, берҙәй хурлыҡҡа ҡалыуын күреп торған хан да ҡыуана-ҡыуана Йылҡыбайҙы хуплай. Шунан хан: «Был батыр Сарыбайҙың өлкән улы Бөркөтбай менән көрәшһен», — ти. Йылҡыбай уны ла анһат ҡына еңә. Шунан һуң өсөнсө алышта Барлыбай ҙа үҙ дуҫының көсөн һынап ҡарамаҡсы була. Йылҡыбай иһә, уны яратҡанлыҡтан, дуҫынан өҫтөнлөк алғыһы килмәй, көстөң тиң булыуы арҡаһында көрәштең ҡырҡыулаша барыуын ул ҡарап тороусыларға ҙур оҫталыҡ менән күрһәтә. Быны менән ул бер уларҙы ғына түгел, Барлыбайҙың үҙен дә алдай. Ҡайһы саҡта үҙен янбашына алырға йәки юғары күтәрергә ирек бирә, ләкин тиҙҙән уның албырғауынан файҙаланған булып, йәнә аяғына баҫырға өлгөрә, шунан үҙе уны күтәреп ала башлай, бында ла юрамал таҫылһыҙлыҡ күрһәтә, шулай итеп, дуҫына хәл йыйырға ваҡыт бирә. Ошолай алыша торғас, улар, өс батыр, һимеҙ һарыҡ ите ашап бөтөп, берәй турһыҡ ҡымыҙ эсерлек ваҡыт уҙғаралар. Инде

батырҙарҙың көстәре тиң булыуын күргән хан да, йыйылған халыҡ та көрәште туҡтатырға ҡушалар. Башҡортҡа кәрмәзин сәкмәнде бүләк итеп, арҡаһынан һөйә. Бары тик Сарыбай ғына урынынан тормай, бер һүҙ ҙә өндәшмәй, табышҡа өмөт итеп тә, яҡшы көтөүсе тарафынан көтөүҙән ҡыуып ебәрелгән бүре һымаҡ, ҡырын күҙ менән генә ҡарап ултыра бирә. Ҡустыһы менән улын башҡорттоң көрәштә хурлыҡҡа ҡалдырыуына Сарыбайҙың асыуы ҡабара. Шулай булһа ла, хандың һәм үҙ ағай-энеләренең уны ҡәҙер итеп ҡосаҡлауҙарын күргәс, үҙенең асыуын белдермәҫкә тырыша. Шул ваҡытта Сарыбай улы Барлыбай янына килеп, уға бирелгән таҡыяны башына кейҙереп, ҡосаҡлай ҙа:

— Һин, улым, төптө үҙемә тартҡанһың, бынан ары һин үҙ ағай-энең өҫтөнән уҙаман булырһың, — ти.

Көрәш бөтөүгә, хандың әмере буйынса, бүтән уйындар башланып китә.

Уҡ атып, мәргәнлектә ярышыу өсөн сәп ҡуялар. Сәп ярты уҡ оҙонлоғондағы ағас көпшәнән тора, шуның ат күҙе ҙурлығындағы тишегенең теге яғына бушаҡ ҡына итеп ағас бөкө тығыла. Уҡсылар сәпкә ҡаршы йөҙ аҙым ерҙә теҙелеп, берәм-берәм шул тишеккә тоҫҡап ата башлайҙар. Уғы көпшә тишеге аша үтеп, бөкөнө ырғытһа, шул иң мәргән атыусы була. Тәүҙә бер тапҡыр атҡан уҡсыларҙың уҡтары яҙа үтеп китә. Улар артында өндәшмәй ҡарап торған Йылҡыбай, үҙ киҙеүе килеп еткәс, алға сығып, иңендәге баяғы хан сәкмәнен уң иңенән артҡа ташлай биреп, уғын йәйәһенә киҙәп, шундай көслө һәм мәргән атып ебәрә, уҡ көпшәне ҡуҙғатмай-нитмәй тишегенән үтә сыға һәм бөкөнө үҙе менән йәнә йөҙ аҙымға ары алып китә. Ошондай оҫта һәм мәргән атыусыны күреп, бөтәһенең дә иҫе китә. Ярышта ҡатнашыусыларҙың барыһы ла Йылҡыбайҙы быҒаса ҡаҙаҡ ерендә булмаған иң мәргән уҡсы тип атайҙар.

Ошо ваҡыт эсендә Йылҡыбайҙы яратып өлгөргән хан уның йәнә бер егетлеген — ат саптырыуҙа сослоғон күргеһе килеп, дүрт иле ҡалынлығындағы таҡта ҡуйырға ҡуша. Атта йән-фарман сабып килешләй, шул таҡтаны үтә атҡан уҡсыға бүләк итеп көмөш уҡа менән ҡайылған, хаҡы ун биш һарыҡлыҡ ҡалта бирелергә тейеш. Әммә был батырлыкты Йылҡыбайҙан бүтән кем эшләй алһын? Таҡтаға атыусылар күп була, әммә уға ҡайһы берәүҙәре генә тейҙерә, атылған уҡтарҙың бер нисәһе генә таҡтаның яртыһына ҡәҙәр үтә ала.

Был ирмәк шуның менән генә бөтмәй әле. Хан, аттан тартышыу ярышында ла оҫталыҡты күргеһе килеп, Йылҡыбайҙан, шул егетлекте лә күрһәтеп, шуның менән уйынды бөтөрөүен һорай. Батыр ханға

хөрмәт йөҙөнән уның был теләген дә үтәргә әҙер, ләкин үҙен кеселекле күрһәтеп, ат өҫтөндә ныҡ ултыра белмәүен, шунлыктан уның маҡтауына лайыҡ була алмаясағын әйтә. Шуға ҡарамаҫтан, бирелгән әмер буйынса, батырҙарҙың бөтәһе лә йәһәт кенә әҙерләнеп ала. Сарыбай үҙе һайлап өйрәткән иң яҡшы батырҙарҙан торған төркөмө менән башҡортто, ҡапыл эйәренән тартып төшөрөп, хур итергә һүҙ беркетә. Был уҫал уйҙы әле һиҙмәгән Йылҡыбай Барлыбай артынан сабып китә лә уның ҡулынан йығылып, дуҫына хөрмәт күрһәтмәксе була, ләкин алдан һүҙ беркеткән һыбайлылар төркөмө, бер юлы ҡапыл ташланып, уның үҙен эйәренән тарта башлайҙар. Был хәйләне күреп бик асыуы ҡабарған Йылҡыбай теҙгенен ташлай ҙа ике ҡулы менән ике батырҙың яғаларынан тотоп, эйәрҙәренән айырып ала һәм, ярһыу атын тибенгеләп, тырнаҡтары менән өйрәкте матҡыған ыласын шикелле, сабып китә. Ике ҡулы ла буш булмағанлыҡтан, ул йән-фарман сабып барған атын ҡапыл ғына туҡтата алмай. Ахырҙа батырҙарҙың икеһен дә көс-хәлгә һул ҡулына күсереп, уң ҡулын бушата ла атын туҡтата, имгәнмәһә лә, бик шөрләгән батырҙарҙы ергә баҫтыра.

Сабып барышлай аттан тартып төшөрөү уйыны шуның менән бөтә. Тартышта ярышыусылар аттарын утлыҡсаға бәйләп, хан тирмәһе алдына йыйылалар. Шул ваҡыт хан бохар билбауы сығарып, Йылҡыбайҙың биленә быуа һәм, йыйындағы халыҡҡа ҡарап, ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Йылҡыбай батыр! Һинең бер көн эсендә күрһәткән егетлегеңде бүтән берәүҙең үҙ ғүмере буйына ла күрһәтә алғанын күргәнем юҡ ине әле. Һиңә был бүләк кенә аҙ. Тағы нимә кәрәк булһа, шуның бөтәһен дә һора минән, кинәнеп бирәсәкмен. Инде кәләш алырға теләйһең икән, минең кейәүем бул әйҙә; биш ҡыҙымдың береһен һайлап ал.

Йылҡыбай:

— Минең атайым әйттергән кәләшем бар, әммә бында хандың ярҙамы кәрәк буласаҡ, — тип яуап ҡайтара.

— Һинең атайың кем дә, әйттергән кәләшең кем була һуң? — тип һорай хан.

— Минең атайым — Ҡарабай батыр, ә кәләшем — Маянһылыу, атайымдың элекке дуҫы Сарыбай үҙ ҡыҙын миңә бирергә вәғәҙә иткән, — ти егет.

Шул ваҡыт Сарыбай батыр, ҡоторған кеше кеүек, урынынан һикереп тора ла әллә ниндәй ҡырағай тауыш менән ҡысҡыра башлай:

— Ах һин, ен һуҡҡан истәк, ҡасҡын! Нисек һин үҙеңде Ҡарабай улымын тип атарға, етмәһә, ҡыҙымды солтанға биргән саҡта, ханды алдарға баҙнат итәһең? Мин, ҡыҙымды уға биреүҙән

баш тартып, әллә һиңә бирер тип уйлайһыңмы, ҡыҙрас?

— Һин быны эшләргә тейешһең, — ти Ҡарабай улы, тыныс ҡына итеп. — Ни өсөн тиһәң, атайыма дуҫтарса һүҙ биргәс, уны, һис шикһеҙ, үтәргә бурыслыһың. Ә минең ысынлап та Ҡарабай улы икәнемде атайыма биргән бүләктәрең танытып торалар. Бына улар, күр!

Ошо һүҙҙәрҙән һуң Ҡуҙыйкүрпәс бүләктәрен ҡуйынынан берәмберәм сығарып күрһәтә башлай.

— Күрәм, һин ысынлап та ҡасандыр мин белгән Ҡарабай улы икәнһең, әммә унда минең ни эшем бар? — ти Сарыбай. — Мин ҡыҙҙың атаһы, шуға уны теләгән кешемә бирергә хаҡым бар. Атайың үҙ ваҡытында минән күп шәфҡәт күрҙе, шул да еткән!

— Хаҡ һөйләмәйһең, — тип ҡаршы төшә Ҡуҙыйкүрпәс, — бөтә байлығы үҙ ҡулында булған кешегә шәфҡәт кәрәкмәй. Атайым Ҡарабай бер ваҡытта ла һинән изгелек күргәне булманы, ә киреһенсә, ул үҙеңде ике тапҡыр үлемдән ҡотҡарып, һиңә күп яҡшылыҡ күрһәтте. Беренсе тапҡыр һине өҙгөләп ташларға йыйынған уҫал юлбарыҫ тырнағынан тартып алды, ә икенсе юлы ырыуҙаштарыңды баҫҡынсыларҙан ҡотҡарҙы. Баҫҡынсылар ҡатының менән ике улыңды үлтереп, мал-тыуарыңды әйҙәп киткәйнеләр, шул ваҡыт атайым һине аралап ҡалмаһа, үҙеңде лә иҫән ҡалдырмаҫтар ине. Атайым баҫҡынсыларҙы ҡыуып ебәреп, малыңды кире ҡайтарған, киҫкеләнеп, хәл эсендә ятҡан үҙеңде дауалап аяҡҡа баҫтырған. Быны өсөн ул һинән бүләк һорамай ғына түгел, ҡыҙың Маянһылыуҙы миңә бирәм тигән вәғәҙәңде үтәүҙән башҡа, рәхмәт әйтеүеңде лә теләмәгән.

Шунан Сарыбай:

— Асыуымды ҡабартып торма күҙ алдымда! — тип екеренә. — Хәҙер үк йәйләүемдән генә түгел, ҡаҙаҡ еренән юғал, ҡабат күҙемә күренәһе булма! Үҙеңде тураҡлап ташлармын!

Шулай екеренгәс, атына менә лә, Ҡарабай улының Маянһылыуҙы алып ҡасыуынан ҡурҡып, улдары менән ағай-энеләрен эйәртеп, йәйләүенә ҡарай саба, ә хандан иртәгә үк туй уҙғарырға килеүен һорай. Барлыбайҙың үҙ дуҫы менән хушлашҡыһы килә, әммә уҫал атаһы быға юл ҡуймай. Барлыбай:

— Кисер инде мине, ҡотҡарыусы дуҫым! — тип әйтергә генә өлгөрә, үҙе илай-илай атаһы артынан сабып китә.

Сарыбай киткәндән һуң, хан Ҡарабай улына күп бүләктәр бирергә, ваҡыт үтеүгә, уны Сарыбай менән татыулаштырырға вәғәҙә итә, уны үҙендә тороп ҡалырға бөтә көсө менән күндерергә тырыша. Әммә Ҡуҙыйкүрпәс, быны өсөн ханға рәхмәт әйтеп, миңә ҡыҙын биреүҙән баш тартҡас, Сарыбай менән дуҫлашыуҙың да, ыҙғышыуҙың

да кәрәге юҡ, тип яуап ҡайтара. Ханда ла тороп ҡала алмауын белдерә, сөнки уға Тыуған иле бөтә донъянан да ҡәҙерлерәк: унда уның әсәһе, мал-тыуары, дуҫтары ҡалған. Илемә ҡайтып, ҡартлыҡ көнөндә әсәйемде йыуатырға бурыслымын, мал-тыуарымды ҡарарға тейешлемен, дуҫтарымдан да айырыла алмайым, ти.

Хан, егеттең шул тиклем ғәҙел һүҙҙәрен тыңлағандан һуң:

— Һинең менән йәшәгән әсәйең дә, дуҫтарың да бәхетле! Минең һиңә оҡшаған балаларым булманы инде, әммә шундай ейәндәремдең булыуын теләр инем. Хуш, яҡшы күңелле Ҡуҙыйкүрпәс. Һине ихлас күңелдән яратам, мине онотма! — ти.

Хушлашҡан саҡта, хан уға бөтә эйәр-өпсөнө, ҡоралдары менән иң яҡшы атын бүләк итеп бирә. Ҡуҙыйкүрпәс, ханға рәхмәт әйтеп, уның бөтә туғандары менән хушлашып, ҡушаҡлы атта Маянһылыу менән һүҙ ҡуйышҡан урынға табан юл тота.

Юлда барғанда, ул, хуш күңелле һәм дуҫтарса мөғәмәлә итеүсе хан менән тәкәббер һәм рәхимһеҙ Сарыбай тураһында баш ватып, шул саҡлы ҙур ҡапма-ҡаршылыҡ нилектән була икән, тип уйлай: аҡһөйәк хандан килбәтһеҙ һәм яман холоҡло Айҡара тыуған, һәм, киреһенсә, ябай холоҡло, саф күңелле гүзәл Маянһылыу шул тиклем ҡараһөйәк Сарыбайҙан тыуған. Шулай уйланып бара торғас: «Их, бәғерем Маянһылыу! — тип ҡысҡырып ебәрә ул. — Һин яҡшы күңелле хандың ҡыҙы булһаң ине, минең ҡатыным булыр инең дә, беҙ бик бәхетле йәшәр инек! Ә хәҙер... Мин белмәйем, бәлки, һине мин көткән урынға ебәрмәҫтәр, шунан һин Ҡуҙыйкүрпәсеңдән ирекһеҙҙән айырылып, һөйкөмһөҙ Айҡара менән китергә мәжбүр булырһың. Ә, бәлки, мине алдан ымһындырып та, үҙең үк минең менән беҙҙең яҡтарға китергә теләмәҫһең. Юҡ! Был һүҙем өсөн мине кисер, Маянһылыуым! Быны мин йөрәгемдән түгел, ҡайғымдан ғына ысҡындырҙым. Телең берҙе һөйләп, йөрәгең икенсене тойоуын башыма ла килтерә алмайым мин. Ер йөҙөндәге бөтә ғилемде белеп бөтөргән сит ил халыҡтары ғына шулай итә ала. Быны миңә Мәскәй һөйләне. Ахырҙа, һинең менән күрешеү өсөн бөтә юлдарым киҫелә икән, Сарыбайҙың ауылын барып баҫырға ла батырсылыҡ итәсәкмен. Йә шунда үлермен, йә һин минеке булырһың!»

Шулай уйлана-уйлана бара торғас, батыр өсөнсө көн тигәндә кис менән һүҙ ҡуйышҡан урынға килеп етә. Шул ерҙә аттарын кешәнләп, үлән утларға ебәрә лә, үҙе тамаҡ ялғап тормайынса, ҡамыш өҫтөнә ятып йоҡлай.

Шул арала Сарыбай йәйләүендә һис уйламағанда аяныс бер хәл килеп сыҡҡан. Унда инде ут өҫтөнә

асылған ҡаҙандар ҡайнап сыҡҡан була; һимеҙ иттәр алынып, дәү-дәү табаҡтарға һалынған һәм келәмдәр өҫтөнә йәйелгән ашъяулыҡтарға ҡуйылған була. Аштан сыҡҡан боҫ ер өҫтөнә тарала һәм, юлда килә ятҡан ханға ҡаршы борҡолоп, танауҙы ҡытыҡлаған тәмле еҫе менән уны туй мәжлесенә саҡыра. Бына күтәренке күңелле ҡунаҡтар хужа йортона ашығалар. Тап шул ваҡыт Аҡтау артынан ярау аттарға атланған ике ҙур төркөм баҫҡынсылар килеп сыҡмаһынмы! Былар тәкәббер Сарыбайҙың «ҡыҙымды һиңә бирмәйем» тип кире ҡағыуы менән кәмһетелгән егеттәр икән, шул егеттәр үҙ-ара һүҙ ҡуйышып йыйылғандар ҙа, ике ҙур төркөмгә бүленеп, хан менән Сарыбайға ябырылғандар, бөтәһен дә ҡырып бөтөрмәксе булғандар. Бындай һөжүмде көтмәгән хан, ҡаршы тора алмайынса, үҙенең бер ни тиклем ярандары менән Сарыбай йәйләүенә ҡарай сапҡан. Ә ҡалғандары, шул иҫәптән Айҡара солтан да, ҡырылып бөткән. Баҫҡынсыларҙың икенсе төркөмө иһә Сарыбай йәйләүенә ташланған. Сарыбай ағай-энеһе менән, ҡоралланып, сапҡынға ҡаршы торған булған. Баҫҡынсылар быларҙы ла тар-мар иткәндәр, үҙҙәренең дә байтаҡ һыбайлылары ҡырылған. Сарыбай, һайланма батырҙары менән ике тирмә араһында тороп, батырҙарса һуғышҡан, әммә уларға ҡарағанда күберәк булған баҫҡынсылар уларҙы ҡыҫырыҡлай башлаған.

Атаһының, ағай-энеләренең һәм бөтә ҡәрҙәштәренең ҡурҡыныс аҫтында ҡалыуын күргән Маянһылыу Айҡара менән ярышҡа әҙерләнгән ярау атын бәйҙән сисеп алған да, атаһына ярҙам итһен өсөн, үҙ батырын эҙләп, уҡ кеүек атылған. Ҡамыш өҫтөндә йоҡлап ятҡан Ҡуҙыйкүрпәс янына сабып килеп, уны уятҡан.

Һөйгәнен күреүгә бик ҡыуанған батыр урынынан һикереп тороп, уны ҡосаҡлап алмаҡсы була, әммә Маянһылыу, егетте үҙенә яҡын ебәрмәйенсә, ашығып:

— Сабыр итсе, тәүҙә һүҙемде тыңла! Мине яратһаң, хәҙер үк атыңа атлан да ҡурҡыныс аҫтында ҡалған атайымды ҡотҡарырға ашыҡ! Ул, һиңә дошман булһа ла, миңә атай, — ти.

— Йән киҫәгем Маянһылыу! Һин минеке булғанда, атайың миңә дошман түгел.

— Мин мәңгегә һинеке!

— Һин ни тиһәң, мин шуны эшләрмен!

Ошо һүҙе менән батыр атына һикереп менә лә ҡош кеүек осоп та китә. Маянһылыу уның артынса сапһа ла, оҙаҡламай егетте күҙҙән юғалта. Сарыбай йәйләүенә сабып килеп еткән Ҡуҙыйкүрпәс ике яҡтан да бик күп ҡырылған батырҙарҙы күрә. Ул Сарыбайҙы бер-ике дуҫы менән баяғы ике тирмә

араһында яраланып бөткән, ҡылыстары менән баҫҡынсыларға саҡ ҡаршы торған хәлдә таба. Һуғышсылар араһында йәрәхәтләнеп хәлдән тайған яҡшы күңелле ханды күреүгә тағы ла нығыраҡ бошона:

— Эй, ҡоторған бәндәләр! — тип ҡысҡыра ул, асыуланып. — Ниңә һеҙ изгелекле ханды харап итәһегеҙ?! Аҡһаҡалды хатта йыртҡыс януар ҙа аяй!

Ошо һүҙе менән ул ханға уҡ атырға йыйынған һыбайлыға табан һөңгөһөн һуҙып, бер юлы өсәүһен эйәрҙәренән алып ырғытҡан, һөңгөһөнөң һабы һынғас, ул, ҡылысын ҡынынан һурып алып, дошмандарҙы уңлы-һуллы турарға тотона.

Ҡуҙыйкүрпәс Сарыбайҙың бөтә мал-тыуарын дошман ҡулынан тартып алып, йәйләүгә кире ҡыуып килтерә. Иҫтән яҙып, ярҙамһыҙ ятҡан ханды күргәс, йөрәгенә ҡан һауып, күҙҙәренә ҡайнар йәш эркелгән батыр атынан төшә һалып, уның йөҙөнә һыу алып килеп бөркә. Оҙаҡламай хан иҫенә килә башлай, ә батыр уның яраһына, ҡатҡан ҡанды йыуып, шифалы үлән яба, әммә яраны бәйләр нәмә тапмай, сөнки үҙ янында Маянһылыу йәшереп бүләк иткән ҡулъяулыҡтан башҡа бер ни ҙә булмай. Әммә яратҡан кеше өсөн ҡәҙерле нәмә лә йәл түгел. Батыр оҙаҡ уйлап тормай, Маянһылыуҙың ошо ҡулъяулығы менән кешелекле хандың яраһын бәйләй, сөнки Маянһылыу ҙа, хан да, икеһе ике яҡтан, уның йөрәген ҡаратҡан.

Бер ни тиклем ваҡыт үтеүгә, бөтөнләй иҫенә килгән хан батырҙың ҡулын алып, күкрәгенә ҡыҫа ла ошо һүҙҙәрен әйтә:

— Әжәлдән ҡотҡарыусы улым, ҡосаҡла мине! Һинең был батырлығың, яҡшы күңеллелегең өсөн минең рәхмәтем дә, һәр төрлө бүләгем дә аҙ булыр ине. Бер Алла менән бөйөк пәйғәмбәребеҙ генә һиңә тейешен бирә алыр. Һинән шул ҡәҙәр оло ярҙам булырын йөрәгем алдан һиҙенгәйне һәм күңелемдең һинең менән гел бергә булғыһы килгәйне. Мин һине тәү күргәс тә яраттым, батырлығыңды күреп, хайран ҡалдым. Әсәйең менән дуҫтарыңды ихлас күңелдән ҡайғыртыуыңды ишеткәс, уларҙан көнләштем, ә һинең менән хушлашҡан саҡта бик ҡайғырып ҡалдым. Минең һиңә әйтәһе рәхмәтемде ошо тойғоларымдан аңла, улым.

Аҡһаҡал хандың, күҙҙәренән йәш ағыҙып, ихлас күңелдән әйткән был һүҙҙәрен ишетеүгә, Ҡуҙыйкүрпәс тә, йәш йөрәге түҙмәй, илап ебәрә.

— Миңә рәхмәт белдерәм тип, артыҡ борсолма, оло кеше, — ти батыр, — был хеҙмәт алыуҙан бигерәк, минең бурысым ине. — Ошо һүҙҙәренән һуң батыр хандың тубығын ҡосаҡлай, ә хан уны маңлайынан үбә.

Шунан һуң хан, Сарыбайҙы күрмәксе булып, Ҡуҙыйкүрпәстән унын янына алып барыуҙы һорай. Был ваҡытта үлтерелгән һәм яраланған ағай-энеләре араһында Маянһылыуҙың атаһы үҙ яраһын йыуып ултыра икән. Ул, яҡынлап килгән батырҙы күргәс:

— Беҙҙе бәлә-ҡазанан ҡотҡарыусы ҡыйыу батыр! Мин һинең яҡшылығыңа тиң түгел, — ти.

— Мин быны беләм, — тип яуап бирә батыр, — әммә һин — Маянһылыуҙың атаһы.

— Һин, үс алыу урынына, мине, балаларымды, ағай-энемде үлемдән ҡотҡарҙың, мөлкәтемде кире ҡайтарып бирҙең.

— Сарыбай! Ҡасандыр һин атайыма ла шулай тигәнһең.

— Унын алдында мин яманатлы булып ҡалдым: дуҫыма биргән һүҙемде үтәмәүҙә мин бик ғәйепле, әммә беҙҙең йола буйынса, батырҙарыбыҙҙың башҡорттарҙы күрә алмауы мине аҡлай алыр, тип ышандым, шунлыҡтан, һиңә ҡыҙымды бирһәм, ырыуҙаштарым мине битәрләрҙәр, тип уйланым.

— Әгәр ҙә һеҙҙең йолағыҙ, — ти Ҡуҙыйкүрпәс, — һине яҡшылыҡ ҡәҙерен белмәҫ алдаҡсы итһә һәм мине ек күрергә, нәфрәт менән ҡарарға мәжбүр итһә, беҙҙең йолабыҙ миңә һинең кенә тотоуыңды һәм ек күреүеңде онотоорға ҡуша, башыңа бәлә-ҡаза килә ҡалһа, һине унан ҡотҡарырға өйрәтә.

— Ҡотҡарыусым минең! Хуш күңелле батыр! Һинең яҡшылығың өсөн ниндәй генә бүләк бирәйем икән?

— Уҫал уйҙарыңдан ҡотол да Маянһылыуҙы миңә бир, мәңге туған булышайыҡ!

Шул ерҙә ҡаҙаҡ батыры:

— Маянһылыу һинеке! — тип ҡысҡырып ебәрә. — Бөтә мал-тыуарымды ла һиңә бирәм. Һин — минең кейәүем, мин — һинең ҡайның! Быға бөйөк пәйғәмбәребеҙ үҙе шаһит булһын!..

Ошо һүҙҙәрҙән һуң батырҙар мәңге дуҫлашып киткәндәр...

? **1.** «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәрен иғтибар менән уҡып, йөкмәткеһе буйынса план төҙөгөҙ, эстәлеген ҡыҫҡаса һөйләгеҙ. **2.** Ҡиссала һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар барған урындарҙы Башҡортостандың физик картаһында билдәләр менән күрһәтә барығыҙ. **3.** «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙа башҡорт йәмғиәте үҫешенең ниндәй дәүере сағылыуын аңлатығыҙ. **4.** Әҫәрҙә һүрәтләнгән образдарға характеристика бирегеҙ: Ҡарабай батыр, Ҡуҙыйкүрпәс, Мәскәй ҡарсыҡ, Маянһылыу, Сарыбай, уның улы Барлыбай, изгелекле хан, Йондоҙ ҡашҡа. Һеҙгә уларҙың ҡайһылары ниндәй яҡтары менән оҡшаны? Һеҙ үҙегеҙҙә ниндәй сифаттар булдырырға теләр инегеҙ? **5.** Боронғо кешеләрҙең донъяны нисек аңлауын, уларҙың ғәҙеллек һәм батырлыҡ тураһындағы уйҙарын, изгелек менән яуызлыҡҡа ҡараш-

тарын, ижтимағи-эстетик идеалын асығыҙ. **6.** Халыҡтың батырлыҡ, намыҫлылыҡ, ысын мөхәббәт хаҡындағы юғары хистәре һүрәтләнгән урындарҙы уҡып күрһәтегеҙ. **7.** Ҡиссала Ҡуҙыйкүрпәс батырҙың тоҡомдары тураһында ни әйтелә? Башҡорт батырҙарынан кемдәр исемләнә? **8.** Әҫәрҙә һуғыш һәм тыныслыҡ темаһы нисек яҡтыртылыуын аңлатығыҙ. **9.** Яҡшылыҡ менән уҙғарылған ғүмер тураһында хикәйәт ни әйтә? **10.** Ҡуҙыйкүрпәстең Тыуған иленә, әсәһенә, халҡына, дуҫтарына ҡарата булған тойғоларын һөйләп бирегеҙ. Тексттан шул урынды уҡып күрһәтегеҙ. **11.** Ҡаҙаҡ ырыуы йолаһынан башҡорт ырыуы йолаһы нисек айырылған? Әҫәрҙә ырыуҙарҙың берләшеүе идеяһының нисек хәл ителеүен һөйләгеҙ. Ысын дуҫлыҡ, туғанлыҡ идеяһының бөйөклөгөн аңлатығыҙ. **12.** «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» әҫәренең беҙҙең заманда ла тормошсан булыуы тураһында ниҙәр әйтер инегеҙ?

## ЗӨҺРӘ МЕНӘН АЛДАР*

### Беренсе кис

Бала-саға атаны ата тип белер, йәш-елкенсәк ҡарттарҙы ҡәҙер итер ине. Аҡһаҡалдар йыйындарҙа һүҙ һөйләр, кәңәш бирер булһа, йәштәр, һис кенә лә бүлдермәй, ауыҙҙарын асып йотлоғоп тыңлар, ата-бабалар һүҙен күңеленә һеңдереп кенә ултырыр ине. Ни өсөн тиһәң, күп йылдар буйы йыйыла килгән тәжрибә ғилем урынын алып торор ине борон.

Ил ағаһы булыр ирҙәрҙе илгә баш итеп һайлар булһалар, был бер ҙә ыҙғыш, янъял тикшереп йөрөр өсөн эшләнмәй ине. Һайлап ҡуйған баштар ҙа яманатын сығармаҫ, үҙен түрҙә ултырған түрәгә һанамаҫ, бары тик килгән афәттән илде ҡурсалар: яу килгәндә яу ҡайтарышыр, мал-тыуарға ҡош-ҡорт баҫышһа, януар менән алышыр, ен-пәрейҙәр йөҙәтһә, улары менән дә көс һынашыр батыр булырҙар ине.

Үҙебеҙҙең боронғо ете ырыу йолаларын, ата-бабаларҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен, барын-юғын артыҡ тәфсирләп, ялҡытып ташлайым һеҙҙе тағы. Булмаһа, үҙебеҙҙең ата-бабанан ишетеп ҡалған боронғоно ғына бәйән ҡылайым.

Ҡартайған көнөндә шулай баласағаһыҙ ҡалыу, нәҫел-ырыуың ҡороу бик аяныс икәнен үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ инде. Бына шулай, оло йәшкә етеп, япа-яңғыҙ тороп ҡалған үҙебеҙҙең ырыу башҡорто Аллабирҙе атлы арҙаҡлы бер батырҙың күргәндәрен һөйләйем әле һеҙгә.

Был шулай, ир уртаһы етеп, мал-тыуарынан бихисап түл йәйҙереп, бәҫле генә улъя туплап донъя

* Ҡыҫҡартып алынды.

көтөп ятҡанда, уйламағандан-көтмәгәндән башына бының ҙур ҡайғы төшә: күңеле ятҡан бисәһенән дә, етеп килгән өс улынан да яҙып, берҙән-бер көн япа-яңғыҙ тороп ҡала был. Ҡайғы-хәсрәттәренән һарыға һабышып, донъяһына ла ҡул һелтәп ҡуя. Мал-тыуарына күҙ-ҡолаҡ булмағас, улары төрлө ҡош-ҡортҡа юлығып, бар йыйған улъяһы туҙа, бар тапҡан байлығы, әрәм-шәрәм килеп, кәмей башлай бының.

Күрше-күлән, дуҫ-иштәре быны тиҙерәк башлы-күҙле итергә уйлашып, бисәлеккә ҡыҙ-ҡырҡын димләй башлайҙар. Күпме генә өгөтләп-димләп ҡараһалар ҙа, был ылғый ытырғанып, серәшеп килә. Бер ҙә ыҡҡа килмәгәс, ахырҙа үҙе лә миктәп, бирешеп китә. Әгәр ҙә мәгәр шул мәлде изге пәйғәмбәребеҙ ярҙамға килергә ашыҡмаһа, ул шулай ҡайғы эсендә донъя ҡуйған булыр ине.

Көндәрҙән бер көндө шулай, иртәнге намаҙын бик тә ихлас уҡып алғас, бының күңеле иләҫләнеп, башы һуҡҡан яҡҡа ҡырға сығып киткеһе килә. Башына ҡылт итеп шул уй төшөү була, тота ла атын эйәрләй һалып, сыға ла китә был. Атын үҙ яйына ғына ҡуйып, ашыҡтырмай ғына бара бирә. Хайуаның, үҙ иркенә ҡуйғас, башын эйеп кенә, ара-тирә үлән ялмаштырып атлай-атлай, хужаһын йәйләүҙән әллә ни алыҫ та алып китмәй китеүен.

Көн төшлөккә етеп, был шулай уйҙарынан айный алмай килгәндә, ҡолағына, сала-сарпы ғына булһа ла, ниндәйҙер ят бер тауыш салынып ҡала. Баш ҡалҡытып ҡараһа, бының күҙ алдында баштан-аяҡ ҡоралланған һыбайлы бер батыр пәйҙә була. Өҫтөнә кейгән тимер күлдәге, шау көмөштән ҡойолғандай, күҙҙең яуын алып тора; башындағы торҡаһы ла саф ҡоростан ғына икән; биленә көмөш ҡынлы кәкре ҡылыс таҡҡан; яурынына киреүле әҙернә-йәйә, уҡ тулы ҡалъянын артҡан; ә уң ҡулына оҙон һөңгө тотоп алған, имеш. Атланған арғымағы ла торғаны бер мал тарпаны, эйәр-өпсөнө лә йылҡылдап торған фирүзә ҡашлы шау көмөштән генә нағышланған икән. Ҡартҡа был батыр сәләм биреп:

— Ҡайҙа юл тоттоң былай, Аллабирҙе? — тигән икән, ҡарт был ете ят кешенең үҙ исемен әйтеп һүҙ ҡушыуына аптырап киткән. Шулай ҙа, тегенең сәләмен алып:

— Минең исемемде ҡайҙан беләһең? — тип һорай ҡуйған.

— Белмәгән ҡайҙа, — тигән теге ҡоралло батыр, — исем-атыңды ғына түгел, мин һинең ҡайғы-хәсрәтең ниҙән икәнен дә шәйләйем. Бына һин минең буй-ҡиәфәтемә абайлап ҡына баҡ та иңемдәге бөтә ҡорал-ҡорамалдарымды иҫеңә алып ҡуй, ҡасан да булһа бер күрерһең әле уларҙы. Ә хәҙергә яҡындағы берәй йәйләүгә атыңды бор ҙа үҙеңде күҙ-ҡаш менән көтөп торған ырыуҙаштарыңды күр; улар һиңә

бер кәңәш бирерҙәр, шул кәңәште һин берүк, аяҡ аҫтына һалмай, ҡабул ҡыл. Был әйткән һүҙ һиңә хаҡ мосолмандар атаһының ҡушҡаны булыр, — тигән дә, атын ҡайыра һалып, атҡан уҡтай күҙҙән дә юғалған был юлаусы.

Аллабирҙе, ят кешенең был һүҙҙәрен ишетеп, шаҡ ҡатып ҡалған...

«Мөхәммәт ғәләйһиссәләм үҙе еткергән Хаҡ Тәғәләнең яҙғаны шулдыр, күрәһең», — тип, теге батыр ҡиәфәтендәге юлаусының серле һүҙҙәрен ысынға уҡ юрап ҡуйған. Шунда уҡ, атынан төшә һалып, доғаһын ҡылған да теге әҙәм әйткән йәйләүгә ыңғайлаған был. Йәйләүгә етер-етмәҫтән, ҡарға тубындай күп халыҡ йыйылып торғанын күргәс, былар, моғайын, берәй туйға-фәләнгә йыйынғандыр, тип ҡуйған эсенән.

— Был ниндәй оло байрам тағы? — тип һораған. — Ҡаҙан-ҡаҙан иттәрегеҙ ҙә бешкән, турһыҡ-турһыҡ ҡымыҙығыҙ ҙа етешкән. Йәш-елкенсәк тә көрәшкә сәмләнеп, бәйгегә елкенеп йөрөй түгелме? Көллөгөҙҙөң дә йөҙө яҡты, һүҙе татлы, тигәндәй, был ҡандайын ҡыуанысҡа булыр, ағай-эне, төшөндөрөп бирегеҙсе! Донъялыҡта үҙ ҡыуанысым ҡалмаһа ла, ил ҡыуанысы иргә уртаҡ! — тигәс, йыйындың иң оло ҡарттары Аллабирҙене ҡорға алып, йөгөнөклəп ултырышҡан. Аллабирҙенең ҡаршыһында ултырған ҡарт былай тип һүҙ башлаған.

## Икенсе кис

— Хуш күңелле ырыу башыбыҙ! Һинең инде тол ҡалып, бала-сағаһыҙ көн итеүеңә лә байтаҡ ғүмер үтеп китте, күпме һыуҙар аҡты ла күпме елдәр иҫте. Шулай ҙа һинең ҡайғынан баш ҡалҡытҡаныңды күргән көнөбөҙ юҡ. Һин беҙҙең менән һөйләшеүҙән ҡасаһың, табындарыбыҙҙы күрмәйһең, һый-туйҙарыбыҙға ла саҡырып килтереп булмай. Йәнлеккә йөрөмәйһең, беҙҙең менән һунарға ла сыҡмайһың. Әҙернәңдең кереше лә тартылмай, ҡулдан уғың да һыҙғырып осмай. Ҡалъяныңда ҡырҡма башлы уғың да ҡылтырамағас, тутығып ятып, һөңгөң дә йылтырамағас, елдәй атың да дала иңләп елмәй, бер бурҙайың Муйнаҡ та эйәһен белмәй. Бейәләрең дә, мәлендә һауылмай, һыуалып бөттө; үҙең дә ҡайғынан арына алмайһың. Былай һин үҙ әжәлеңде үҙең генә ашыҡтыраһың, ә илһүлде ҡурсауһыҙ ҡалдырыуың бар. Беҙ бөгөн көллөбөҙ, беҙҙе елеккесә үҙ күреүең хаҡына, бөтә ҡайғы-хәсрәттәреңде онотоп, ил менән бергәләп донъя көтөргә теләһә ҡайһыбыҙҙың ҡыҙын һайлап алыуыңды хуш күрәбеҙ. Уларҙың матурлығы ла, батырлығы ла үҙеңә мәғлүм: сапһа, ат атланып сабырҙай, атһа, кирелеп уҡ атырҙай ҡыҙҙарыбыҙ бар. Һыу һөлөгөндәй шул һылыуҙар араһынан, исмаһам, берәүһенә күңелең ятмаҫлыҡмы?

Аллабирҙе:

— Дуҫ-иштәрем, ҡәрҙәштәрем! Әйткән һүҙҙәрегеҙ, биргән кәңәштәрегеҙ өсөн рәхмәт. Был уйығыҙҙы бер бөгөн генә лә әйтмәйһегеҙ инде. Кәңәштәрегеҙҙең файҙалы икәнен беләм. Тик, ил һүҙен аяҡ аҫтына йыға тип уйламағыҙ, мин инде олоғайғанмын, сырхауланғанмын. Тулған ай кеүек йәш ҡыҙҙар көҫәр сағым үткән инде, — тип ҡырт киҫкән.

— Улай булғас, — тигән уның эргәһендә ултырған бер аҡһаҡал, — мин һиңә ҡулай булырҙай берәүҙе беләм. Бала-сағағыҙ булмаған тәҡдирҙә лә, ул йәше менән дә, эше менән дә һиңә иш булырҙай бик тә намыҫлы, бик тә күркәм холоҡло, уттай уңған тол ҡатын. Үҙе беҙҙең ауылдарҙан ҡырҙа — Ирәндек буйҙарында — көн итә. Зөһрәнең — уның исеме шулай — мал-тыуары ишле; үҙе япа-яңғыҙ булһа ла, көтөүҙәрен бер януар ҙа баҫа алмай.

Аҡһаҡал уның исемен ҡабатлауы була, бөтә йыйын бер булып, күктән һөрәнләгәндәй, геү итеп ҡала:

— Раҫ һүҙ һөйләйһең, аҡһаҡал, раҫ!

— Уны беҙҙең дә күбебеҙ белә, күрмәгәндәребеҙ ишетеп белә. Ул беҙҙең Аллабирҙе башҡа иш булырлыҡ бисә! — тип геү килешәләр.

Ҡарттар Аллабирҙене йәнә ҡыҫмаҡлабыраҡ алып, Зөһрәне үҙенә иш итеүен йәнә ныҡышыбыраҡ һорай башлағас, ул, бахыр, ҡолаҡтарын баҫып, ни тип әйтергә лә белмәй, аптырап тора-тора ла, ахыр килеп, теге далала осратҡан ят батырҙың әйткәнен иҫләп, бының раҫҡа сығыуын уйлап ҡуя. Шунан, бик серәшеп булһа ла, Зөһрәне бисәлеккә алырға ризалығын бирә.

Аҡһаҡалдар, булған халайыҡ, Аллабирҙенең ризалығына, ялан халҡына хас уйын-көлкө, бәйге-көрәш башлап ебәрергә булалар.

Ҡарттар менән урта йәштәге ират ҙур түңәрәк яһап ултырышҡас, йәш-елкенсәк көрәш башлап ебәрә. Батырға сыҡҡандарға бүләктәр өләшәләр. Артабан уҡтан мәрәйгә атышып, мәргәнлектә һынашалар, ахырҙа туйҙы аттан тартыш уйыны менән ослап ҡуялар. Бына, көрәшеүселәрҙең дә, мәргән уҡсыларҙың да, атта яҫҡышыусыларҙың да ҡомары баҫылып, ҡарап ултырғандарҙың да танһыҡтары ҡанып, майҙан һил булып ҡалғас, хәл йыйып, тамаҡ ялғап алыр мәл дә етә. Табаҡ-туҫтаҡтарҙа ашһыу өләшелеп, йәштәр ҡарттарға алдыр-алдыр ҡымыҙ яһап тарата башлайҙар. Аллабирҙегә, иң ҡәҙерле ҡунаҡ күреп, тәкә башы килтереп тотторалар, түш итенән ҡурҙаҡ та ҡуялар. Уның артынса табынға бишбармаҡ та өлгөртөп, бер-береһенә ит һоғондорошоп, ҡоротлап һурпа эсеп һыйланғандан һуң, эңер төшкәс кенә, тирмәләргә таралышалар…

Зөһрәне маҡтап телгә алған әлеге арҙаҡлы ҡарт Йылҡыбай доға

ҡылып, йоҡларға ятҡас та, һаман Зөһрәне маҡтап һайрай-һайрай, ахыр сиктә үҙен барып күрергә тип, быны иртәгә үк бергәләп юлға сығырға күндерә...

## Бишенсе кис

...Әүлиә ҡарт һүҙен былай тип башлаған:

— Юлығыҙ бик алыҫ булмаһа ла, бик хәтәр юл булыр: көн һайын һеҙҙе йыртҡыс ҡоштар баҫып йөҙәтер, үткер тырнаҡтары менән үҙегеҙҙе яҫҡып алырға тырышырҙар; йәнә айыу, бүре, юлбарыҫ ҡиәфәтендәге януарҙар ҙа ташланыр һеҙгә, үҙегеҙҙе лә, аттарығыҙҙы ла ҡырҡҡа өҙгөләп ташларға итерҙәр. Бөтә был һеҙ күрер бәлә-ҡазалар бер туған ике пәрейҙең сихыры булыр. Уларҙың береһе Зөһрә йәйләүенең бирьяғында, икенсеһе Ирәндек аръяғында төйәкләнгән. Икеһе лә Зөһрәне үҙ ҡулына төшөрөргә йөрөй, тик ул быларға алданмайынса, бөтә хәйлә-мәкерҙәрен көн һайын иренмәй ҡылған биш ваҡыт намаҙы менән кире ҡыуып тора. Һеҙ ҙә, батырлыҡҡа ғына таянмай, хаҡ мосолмандар үтәгән изге йолаларҙы һаҡларға тырышығыҙ, һеҙгә был көс-ҡеүәт бирер, шуның менән бөтә ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырһығыҙ, — ти. Шунан әүлиә ҡарт быларға:

— Ҡайҙа, миңә уҡ-ҡылыстарығыҙҙы килтерегеҙ әле, — тигән дә, былар ҡорал-ҡорамалдарын килтереп һалғас, яҡты мәғәрәнән сығып торорға ҡушып: — Мин саҡырмайынса бында инмәгеҙ, — тип киҫәтеп ҡуйған. Унан, ишеген бикләп, мәғәрәлә үҙе генә ҡалған. Былар күп тә көтмәгән, әүлиә ҡарт үҙенә саҡырып алған да, ҡорал-ҡорамалдарын күрһәтеп: — Уҡ-ҡылыстарығыҙҙың хәҙер нисек үҙгәргәнен күрәһегеҙме? — тип һораған.

— Күрәбеҙ, — тигән юламандар. — Уҡ башаҡтарыбыҙ алтын һымаҡ ялтырай, ҡылыстарыбыҙ ҙа сәс бәкеһе төҫлө үткерләнеп киткән.

— Ҡоралдарығыҙҙың тылсым көсө бер ялтырап тороуҙа ғына түгел, уларҙың асылында: тоҫҡап атҡан уғығыҙ, сәпкә теймәй, яҙа китмәҫ, тейгән бере януарҙы ғына түгел, ен-пәрейҙең үҙен дә юҡ итер, — ти. Шунан әҙерәк уйланып торғас: — Үҙегеҙҙе лә яра-йәрәхәттән һаҡлар тылсымым бар: мин һеҙгә бирәр күлдәк менән бүрек бирәм, тәнегеҙгә тейгән һәр харам көс шунан юҡҡа сығып торор, — тигән дә мендәр аҫтынан ике кәрмәзин күлдәк менән ике ҡара төлкө бүрек сығарып биргән. — Бына шуларҙы кейеп алығыҙ ҙа, аттарығыҙҙы әйәрләп, уҡ-ҡылыстарығыҙҙы тағып алып, мәғәрә ауыҙы алдында мине көтөп торорғоҙ, — тигән.

Ике юламан, ҡарт ҡушҡанса, күлдәк, бүректәрен кейә һалып, ҡорал-ҡорамалдарын тағып, аттарына атланалар ҙа, йәнә тау ҡыуышы алдына килеп, көтә ҡалалар. Килеп туҡтауҙары була, ике ҡулына ике туҫтаҡ тотоп сыҡҡан теге

ҡартты күрәләр. Ҡарт, икеһенә ике туҫтағын һоноп, эсә алған тиклем эсергә ҡуша. Батырҙар күпме генә тырышып ҡарамаһын, туҫтаҡтарҙы, эсеп бөтөрә алмай, кире ҡайтаралар. Әүлиә ҡарт:

— Ниңә эсеп бөтөрмәнегеҙ? — ти.

— Башҡаса булдырып булмай, — тип яуаплай былар.

— Улай булғас, ризыҡты тәләф итмәй, аттарығыҙға эсереп бөтөрөгөҙ, уларға ла көс-ҡеүәт кәрәгер, — ти ҡарт.

Аттар бик яратып эсеп, туҫтаҡтарҙы бушатҡан, ти.

— Хәҙер инде юл башлаһағыҙ ҙа ярай, — тип, ҡарт хәйерле юл теләп ҡалған.

Батырҙар, әүлиәгә рәхмәттәр уҡып, тылсымлы кейемдәренә, ҡорал-ҡорамалдарына ҡыуанышып, хушлашалар ҙа йәнә юлға сығып китәләр.

Бер нисә көн рәттән былар бер нигә тарымай бара. Тик ашарҙарына ҡош атып алалар ҙа, тамаҡ ялғап алғас, йәнә ары китәләр. Күҙҙәренә инде алыҫтан күгәреп ятҡан Ирәндек итәктәре лә күренә башлай. Тик әүлиә ҡарт юраған ҡыйынлыҡтарға юлыҡмағас, ул әйткән һүҙҙәргә шөбһәләнеп тә ҡуя былар. Ҡапыл шул саҡ аяҙ күктә ҡара болот ҡабарып сыға. Теклә-берәк баҡһалар, был ҡара болот та түгел, ә донъя ҡаплап килгән ҡоштар тубы икән. Ябырылып килгән ҡош күсенең шомло тауыштарын шәйләп алғас ҡына, былар әүлиә ҡарттың һүҙҙәре раҫҡа сығыуына ышаналар. Ҡалъяндарынан әҙерләнән, һаҙаҡтарынан уҡтарын ҡармап алып, был ҡош яуын ҡайтарырға әҙерләнеп тә бөтмәйҙәр, төлкө-ҡуян яҫҡыған бөркөт ише, быларға ҡош яуы ябырыла ла башлай. Ни булыры алдан иҫкәртелгән батырҙар, ҡаушап ҡалмай, уҡтарын сойорғотоп та ебәрәләр. Атылған бер уҡ яҙа китмәй, сәпкә тейеп, ҡошо менән бергә ҡолап төшә. Ҡош күсе, быларға ҡуныпҡунып алһа ла, тылсымлы кейемдәргә ҡағылыу менән үк, тырнаҡтары тупарылып, батырҙарҙың аттарына ғына баҫыша башлай. Ә аттарға тылсым ҡөҙрәте ҡағылмағас, тәндәре әрнеүҙән үрәпсеп китеп, тыпырсынып туларға тотоналар. Батырҙар, ҡындарынан ҡылыстарын һурып алып, һыбай килеш аттарының баш-ҡойроғон һаҡларға тырышалар. Был ҡаты алыш шулай төш ауғансы бара. Әгәр ҙә мәгәр ярҙамға әлеге тәғәмризыҡ биргән аҡ ҡош килеп етмәһә, алыштың ни менән барып бөтөрөн күреү ҙә бик икеле булыр ине. Теге аҡ ҡоштоң баш осонда күренеүе була, был ҡара ҡош яуын пыран-заран килтереп, һәр ҡош төрлөһө төрлө яҡҡа осоп китеп бөтә...

Йылҡыбай менән Аллабирҙе, был хәлде Алла ярлыҡауына юрап, аттарынан төшөп, доға ҡылалар ҙа, саҡ ҡына хәл йыйып алғас, ары юлланалар. Ә ҡош һаман, быларҙың арттарынан ҡалмай, баш осонан осоп килә икән.

Былар, ҡошто һыйламаҡсы булып, берәй йәнлек-фәлән юҡмы икән тип, тирә-яҡҡа ҡаранғылап килә торғас, елеп барған бер мышыны күреп ҡалалар ҙа, артынан төшөп, ҡыуа китәләр. Йылҡыбай, алғараҡ сығып, уғын атып ебәрһә, уҡ мышының нәҡ боғаҙына барып тейә. Януар тәкмәсләп барып төшкәс, тиҙ генә уны сала һалып, тиреһен яртылаш ҡына тунайҙар ҙа, ҡошто саҡырып алып, ризығын биргәс, ары китәләр...

## Етенсе кис

Батырҙарҙың юлға сығыуына икенсе көн китһә лә, бер ни ҙә осрамай быларға, ә иртәгеһенә ярты көнлөк самаһы ғына юл ҡала. Шулай итеп, ҡоҙа менән кейәү, Зөһрә алдында күркәмерәк күренергә тырышып, иртәнге намаҙҙан һуң, кейемдәрендә ҡалған ҡан таптарын таҙартып, аттарының эйәр-өпсөндәрен дә рәткә килтереп, эйәрҙәрен юлбарыҫ тиреләре менән ябалар. Зөһрәгә бүләккә тигән пәрей атын, үрҙә әйтелгәнсә, эйәренә уҡһаҙағын, ҡылысын элеп, юлдарын дауам итәләр. Уларға юл күрһәтеп, кәрәк саҡта ҡурсалашып та килгән юлдаш аҡ ҡош, инде хәүеф-хәтәр ҡалмағанын белдереп, быларҙан айырылып китә. Ахыр сиктә былар көмөштәй күле ялтырап ятҡан киң туғайлыҡҡа барып сығалар, ә күлдең аръяғында ҡарағай, ҡарағастар менән ҡапланған Ирәндек тауҙары күгәреп күренә. Тау ҡаяларындағы ҙур-ҙур йәшмә таштар, көнгә сағылып, күл өҫтөн күҙ ҡамашырҙай нурҙар менән семәрләп ята икән. Ошо күлдең буйында ғына Зөһрәнең кейеҙ тирмәһе ағарып ултыра, ә туғайындағы иркен сәхрәлә көтөү-көтөү малдары эркелешеп йөрөй. Батырҙарҙы алыҫтан уҡ күреп ҡалған өйөр айғырҙары, өйөрҙән айырылып, быларға ҡаршы сабышып килгәндәр ҙә, сәләм биргәндәй кешнәшеп, үрә ҡарғып торғас, кире өйөрҙәренә сабышып ҡайтҡандар. Батырҙар аттарын атлатып ҡына тирмә янына килеп еткәс, аттан төшөргә рөхсәт һорауҙары була, тирмәнән Зөһрә үҙе лә килеп сыға. Өҫтөнә йәшел буҫтауҙан елән кейгән, башындағы ҡашмауы мәрйен, алтын-көмөш көмбәҙҙәр менән биҙәлгән икән. Зөһрә, ҡунаҡтарҙы асыҡ йөҙ менән ҡаршылап:

— Хуш килдегеҙ, мосолмандарым! Әйҙәгеҙ, аттарығыҙҙан төшөп, тирмәмдең түренә уҙығыҙ, — тигән икән, ҡаршы сыҡҡан Зөһрәнең һылыулығына иҫе китеп, йөрәге урынынан ҡупҡан Аллабирҙе торған ерендә шаҡ ҡатып ҡалған. Оло йәштәрҙәге тол бисәнең шулай әле лә һаман төҫ ташламауы быны хайран иткән. Зөһрә үҙе хаҡында һөйләгән һүҙҙәргә ҡарағанда, байтаҡҡа йәшерәк тә, күркәмерәк тә булып күренгән уға. Йылҡыбай инде бында элек бер аҙ ҡунаҡ булып та киткәс, үҙен иркенерәк тотоп, Зөһрәгә исеме менән өндәшеп, иҫәнлек-һаулыҡ һорашып,

бисә кеше булһа ла, ололоҡлап сәләм биргән. Зөһрә, үҙенең исән-һау булыуын әйтеп, икенсе мәртәбә ҡунаҡтарҙың тирмәгә үтеүҙәрен үтенгән. Йылҡыбай ҡоҙа кейәү кешенең һаман аттан төшмәй ултырыуын күреп, уның ҡыйыуыраҡ булыуын күргеһе килеп, хужабикәгә былай тип һайрай башлаған:

— Ҡәҙерле ҡәрендәшебеҙ, һин беҙҙең былай яңғыҙ бисә янына килеп сығырға тәүәккәллек итеүебеҙгә аптырама, — тигән ул. — Һинең яҡшы күңелле булыуың менән инсафлы ғүмер итеүең хаҡындағы данлы хәбәр бөтә ырыу халыҡтарының теленән төшмәй, ул беҙ йәйләгән бейек Урал тауҙарына ла барып олғашты. Иҫәндәлер, бынан бер нисә йылдар элек мин һиндә ҡунаҡ булып киткәйнем. Ул саҡ һинең тол ҡалыуыңа йыл да тулмағайны әле. Үҙебеҙҙең йәйләүгә әйләнеп ҡайтҡас, мин һинең инсафлы ғүмер итеүең, япа-яңғыҙ йәшәп тә, һинең бер ниҙән дә ҡурҡмай, мал-тыуарыңды уҫал януарҙарҙан да үҙең ҡурсалап тороуыңды, ә үҙеңдең ер йөҙөндәге бер ҡойоп ҡуйған хур ҡыҙындай булыуыңды — бөтәһен дә түкмәй-сәсмәй бәйнә-бәйнә һөйләп биргәйнем. Минең байтаҡ ағай-энеләрем һинең ошолай ғүмер итеүеңә таң ҡалып, үҙеңде бер барып күрергә, һинең төҫлө инсафлы донъя көтә белергә тип, һинән һабаҡ алырға бик дәртләнеп ҡуйһалар ҙа, йыртҡыс януарҙарҙың, бигерәк тә енпәрейҙәрҙең хәүеф-хәтәренән ҡурҡып тыйылып килделәр. Беҙҙең тик берҙән-бер башыбыҙ, бына, атта ултырған Аллабирҙе генә, йөрәге етеп, бер ниҙән дә ҡурҡмай, минең менән бында килеп етте. Ул һиңә бүләккә тип үҙе үлтергән ике юлбарыҫ тиреһе менән һине йөҙәткән дейеү пәрейенең аты менән ҡоралын да алып килде. Дейеү менән хәтәр алышта ул, өҫтөн сығып, уның башын сабып өҙҙө. Мин ул мәлғүн пәрейҙең кәүҙәһен үҙем яндырыштым, көлө күккә осҡанын үҙ күҙҙәрем менән күреп торҙом. Хәҙер инде һиңә бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр ҡалмағандыр.

Әгәр ҙә Зөһрә шул саҡ үҙен ҡотҡарыусы батырҙың аттан төшөүен үтенеп, уны тирмәгә саҡырып, Йылҡыбайҙың һүҙен бүлдермәһә, ул тағы әллә күпме татылдар ине, моғайын. Шул саҡ Аллабирҙе лә, аттан төшөп, пәрей атын ҡоралдары менән бергә хужабикә янына етәкләп килтергән дә:

— Үҙеңде интектергән пәрейҙең атын да, ҡоралдарын да һиңә бирәм, ҡәҙерле ҡәрендәш, ҡабул итеп ала күр, — тигән.

— Абау! Был атты беләм бит мин! Ҡоралдары ла тап үҙенеке. Ошо атҡа атланып, ул сихырсы минең көтөүҙәремә килеп, бик йыш ҡурҡытып китә торғайны. Тик мин Алла ярҙамы менән генә ҡотола килдем, мал-тыуарым да бәлә-ҡазаға юлыҡмай ҡалды, — тип хужабикә пәрей атының теҙгененән алып, ҡунаҡ аттарын да

үҙе етәкләп, тирмә ҡаршыһындағы ҡарағайға бәйләп ҡуя ла батырҙарҙы тирмәһенә алып инә. Уларға затлы балаҫтар түшәлгән, мендәрҙәр яҫтыҡ өйөп ҡуйылған урындыҡтан урын күрһәтә. Йылҡыбай тирмә эсендәге ыҡсымлыҡҡа, йыһаздарға иҫе китеп ултыра. Тирмәнең бөтә тағараҡтарына ла затлы ҡоралдар эленгән. Бөтә уҡ-йәйәләр, ҡылыс-хәнйәрҙәр алтын да көмөш ҡалъян-һаҙаҡтарҙа, ҡындарында ғына ҡәҙерләп тотола. Кемдең күҙе нигә төшә бит, Аллабирҙенең күңеле бөтөнләй икенселә: ул тирмә эсендәге хужабикәнән башҡа бер ниҙе лә күрмәй, бары уны ғына күҙәтеп ултыра, уны бөтә башҡорт халҡының күрке итеп күрә.

## Һигеҙенсе кис

Батырҙар шулай һәр береһе үҙенең күҙ төшкәнен күҙәтеп ултырғансы, хужабикә быларға берәр туҫтаҡ ҡымыҙын да ҡойоп килтерә. Тәүге туҫтағын Аллабирҙе башҡа, икенсеһен уның юлдашына һона. Аллабирҙе ҡымыҙҙы ҡабул ҡылып, йола буйынса, башта үҙең ауыҙ ит, тип, хужабикәгә кире биргәс, уныһы ла, йола ҡушҡанса, ауыҙ итеп биргән була. Икеһенең дә (батырҙарҙың. — *Ғ. Ҡ.*) ҡымыҙ тәмен татымағандарына байтаҡ көндәр үтеп киткәнлектән, ауыҙ һыуҙары ҡороп, һемереп эсергә тамшанып ултырһалар ҙа, әҙәп һаҡлап, ҡымыҙҙы яйлап ҡына һемереп эскән булалар. Шул арала хужабикә турһыҡ тултырып ҡымыҙ ҡоя ла алдарына ҡуйып:

— Ғәйеп итмәгеҙ инде, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, төшкөлөккә мин һеҙгә көтөүҙән иң һимеҙ һарыҡты тотоп килтерәйем, — тип сығып китә. Ул сығып китеп, ҡунаҡтар туҫтаҡтарын бушатҡас, Аллабирҙе иптәшенә ҡарап һүҙ башлай:

— Йылҡыбай дуҫ, һин миңә хужабикәнең яҡшылыҡтарын, һәйбәт сифаттарын күп һөйләһәң дә, уның һылыулығы хаҡында бер һүҙ ҙә әйтмәнең. Һинең һөйләүеңә ҡарап, мин уны ҡарттыр тип уйлағайным. Баҡһаң, уның әле шәп сағы икән дәһә. Төҫ-башына ҡарағанда, бер ҙә утыҙҙан артыҡ бирep булмай, — тигәс, Йылҡыбай уны бүлдереп:

— Мин тәү күргәндә булһа, булғандыр уға утыҙ йәш, унан бирле хәҙер ун биш йыллап ғүмер үтте инде, — тине, — ысынын әйткәндә, ул һис кенә лә үҙгәрмәгән. Бына нисек итә бит ул тотанаҡлы, тәртипле тормош! Мин әле, теге әүлиә ҡарт беҙҙең кейемдәрҙе сихырлағандай, был һылыу ҙа һинең күңелеңде арбап ҡуймanымы икән, тип ултырам, — тип көлә.

— Йәшерен-батырыны юҡ, дуҫҡай, — тигән шунда Аллабирҙе, — мин уны үлеп ярата башланым, хатта беҙ ниәтләгән эштәр барып сығырмы икән тип икеләнеп тә ҡуям әле мин...

Шул мәл тышта һарыҡ баҡырған тауыш ишетелгән. Уның артынса хужабикә лә килеп ингән. Ул, Йылҡыбайға ҡарап:

— Боронғо дуҫым, бынау һарыҡты салып ҡына бирер инең, ә мин ут яғып, ҡаҙан аҫа торор инем, — тигән. Үҙе, Йылҡыбайға ҡуҙғалырға ла ирек ҡуймай, быларға йәнә берәр туҫтаҡ ҡымыҙ ҡойоп тотторған да һарыҡты күрһәтер өсөн сығып та киткән. Аллабирҙе баш та, Йылҡыбай сыҡҡас, бер үҙе турһыҡ янында ҡалғыһы килмәй, дуҫына булышырға, шул ыңғайҙан Зөһрәнең ут яҡҡанын да күрергә сыҡҡан. Сыҡһа, Йылҡыбай һарыҡты салып та өлгөргән, инде тиреһен тунап ята икән. Ә хужабикә ҡул сайырға һыу килтереп, ит алып, ҡунаҡтарына аш әҙерләргә китә. Үҙе уларҙың тирмәгә инеп ҡымыҙ эсә тороуҙарын һорай. Улар, ике ҡабат әйткәнде көтөп тормай, турһыҡты бушатырға инеп тә китәләр... Былар шулай хәбәрләшә-хәбәрләшә ҡымыҙҙы төпләп тә ҡуялар. Шул ике арала хужабикә былар алдына йәйелгән бөхтә ашъяулыҡҡа ҙур табаҡ менән туралған ит килтереп ултырта ла:

— Ашағыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар, ашағыҙ, туғанҡайҙарым. Оҙон юл йөрөп, асығып та бөткәнһегеҙҙер инде, — ти.

Ҡунаҡтар, рәхмәт әйтеп, уның үҙенең дә бергә ултырыуын һорайҙар, тик хужабикә, минең әле эштәрем күп, шул саҡлым алыҫ ерҙән килеп, иң яуыз дошманымдан ҡотҡарғас, һеҙҙе ҡәҙер итәһем бар, тигән булып, табындаш ултырыуҙан баш тарта, шул һүҙҙәрен әйткәндә, үҙенең бит алмалары ҡыҙарып киткән була. Ә бер ниҙеләкүрмәй ҡалдырмаҫ үткер күҙ Йылҡыбай уның «ҡотҡарғас» тигән һүҙҙе әйткәндә Аллабирҙегә бик мөләйем күҙ һирпеп ҡуйыуын эләктереп ала ла эсенән генә, былай булғас, эштәр уң булырға оҡшай, тип ҡуя. Табаҡ ҙур ғына булһа ла, былар уны тиҙ бушаталар. Шунан Йылҡыбай Аллабирҙенән:

— Әүлиә һыйы менән был һый араһындағы айырманы күрҙеңме инде? — тип һорай. Баш, бер аҙ өндәшмәй ултырғандан һуң:

— Ул һый бит Аллаһы Тәғәлә ризығы ине, уны кем әҙерләгәне лә билдәһеҙ, ә бында беҙ үҙебеҙҙең ҡәҙерле туғаныбыҙҙа һыйланабыҙ, һыйы ла беҙгә хас, таныш, — тигән.

Зөһрә, әүлиә тураһында ишеткәс тә, йөҙҙәре яҡтырып китеп:

— Һеҙ әллә ул изгелекле ҡартта ла булып киттегеҙме? — ти.

— Булыу ғына түгел, — ти Аллабирҙе, — юлда осраған хәүеф-хәтәрҙән ҡайһылай һаҡланырға уның өгөт-нәсихәтен, кәңәшен алдыҡ. Ул беҙгә ғәләмәт ҡыҙыҡ мөғжизәләр күрһәтеп, үҙенең изге доғаларын ҡылып, фатихаһын биреп ҡалды.

— Уның тураһында минең дә һеҙгә һөйләйәсәк хикәйәтемдә һүҙ булыр әле, — тип ҡуя Зөһрә. — Тик башта һеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, ниндәй йомош менән юлланыуығыҙҙы дөрөҫ кенә әйтеп бирегеҙ. Ә хәҙер ҡулдарығыҙҙы йыуып алығыҙ, — тип, уларға йылы һыу

менән таҫтамал килтереп бирә. Аллабирҙенең был һүҙҙәрҙән һуң йөрәге күкрәгенән сығырҙай булып тибә башлай, ә Йылҡыбай, башҡорттоң бөтә сәсәнлеген егеп, үҙҙәренең ни өсөн килеүҙәрен һөйләп бирергә әҙерләнә.

### Туғыҙынсы кис

— Ҡәҙерле ҡәрендәшкәйебеҙ, — тип һүҙ башлай Йылҡыбай, — һин былай яңғыҙ ғына ғүмер иткәс, бынан бер нисә йылдар элек беҙҙең йәйләүҙәргә таралған яңы йоланы белеп тә етмәйһеңдер әле.

Боронораҡ бала-сағаһына атай булған кеше үҙ ғаиләһендә үҙе баш, үҙе түш булыр ине. Бына хәҙер, беҙҙең иҫәп буйынса, ике мөсәл ғүмер үтеп китте, шул ике мөсәл ғүмер эсендә беҙҙең ете ырыу башҡорттары бер нисә ауылға бер баш һайлап ҡуя торған булып киттеләр. Ул баш тигәнебеҙ, илдәге бүтән аҡһаҡалдар менән бергәләп, үҙ-ара килеп сыҡҡан төрлө ил низағтарын тикшереп, хәл итеп килә, ә ҙурыраҡтарын Аллаһы Тәғәләбеҙ үҙе хәл ҡыла. Бик тә көслө, тура һүҙле, кәрәк саҡта аҡыллы кәңәш бирерҙәй ил ағаһы булған тәүге башыбыҙ Шәүәли үлеп киткәс, уның урынына беҙ бына үҙең күреп торған Аллабирҙене баш итеп ҡуйҙыҡ. Уны беҙ юлбарыҫ йылында һайлағайныҡ. Быға инде хәҙер теүәл егерме йыл үтеп китте. Шул ғүмер эсендә ул беҙҙең мал-тыуарҙы януар баҫыуҙан да ҡурсалап килде. Үҙең күреп тораһың, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ул беҙҙең йәш батырҙарҙан һәр саҡ үҙенең ҡыйыулығы менән айырылып торҙо. Уның уғынан ҡырылған ҡош-ҡорттоң иҫәп-хисабына ла сығырлыҡ түгел, уларҙың тире-ярыларын да ул үҙенә алмай, йә ағай-энеләренә, йә аҡһаҡалдарға бүләк итер ине. Уның бындай эскерһеҙлеге барыбыҙҙың да күңелен үҙенә тартты. Кәңәш-төңәш биреүҙә соғолло, низағ-бәхәстәребеҙҙе сисеүҙә үтә ғәҙел булыр ине. Ырыҫ, ҡыуаныс менән ғүмер итеп, шулай һигеҙ йыл буйы рәхәттә йылан йылына саҡлы йәшәнек. Шул гонаһ шомлоғо йылан йылында уның Һылыубикә атлы бисәһе көтмәгәндә-нитмәгәндә генә донъя ҡуйҙы. Уның вафатынан һуң ҡайғы-хәсрәте ҙур булһа ла, йыуанысҡа өс улы тороп ҡалды. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк: уландары дан егеттәр, типһә тимер өҙөр батыр егеттәр ине. Уҡ атышыуҙа ла мәргән булырҙар ине, мал тарпаны ҡырағай аттарҙы ла тотоп менерҙәр ине. Көрәштәрҙә бил бирмәҫ, бәйгеләрҙә ал бирмәҫ, батырлыҡ күрһәтергә генә тыуған егеттәр ине бына. Тик бәлә-ҡаза ағас башынан түгел, әҙәм башынан йөрөй шул, әжәл тигәнең ҡартын да, йәшен дә айырып тормай, батырын да, матурын да аямай: әсәләре үлгәндең икенсе йылында уҡ улдарын да алып китте...

Һүҙе шул урынға еткәндә, Йылҡыбай ике ҡулы менән башын

баҫып, күҙ йәштәрен тотоп тыя алмай ултырған дуҫына ҡарап ала ла, һөйләүҙән туҡтап:

— Ғәйеп миндә, дуҫ. Ҡайғыңды яңыртып, яман иттем бит әле, ни хәл ҡылмаҡ кәрәк, яҙмыштан уҙмыш юҡтыр инде, күрәһең. Уның ҡарауы, олуғ пәйғәмбәребеҙ, әле булмаһа, алдағы ғүмереңдә бер мәрхәмәтен күрһәтер әле: өлөштән буш ҡалдырмаҫ, — тип дуҫын йыуатып ҡуя; унығының күңеле бер аҙ урынына ултырғас, башлаған һүҙен дауам итә: — Шулай итеп, беҙ көллөбөҙ ҙә уның ҡайғыға тарып, бик бирешеп китеүен үҙ күҙебеҙ менән күреп торҙоҡ. Ул беҙҙең әңгәмәләребеҙҙең уртаһынан да ситтә була башланы; йыйынға ла йөрөмәҫ булып китте; һунарын да ташланы; мал-тыуарҙы ҡурсалашыуға ла ҡул һелтәп ҡуйҙы; үҙ ҡайғыһы менән ҡаңғырып, аҡылдан яҙған кешеләй тик йөрөнө. Шул хәлдә йөрөүгә ике йыл тулды тигәндә генә, көтмәгәндә беҙҙең йәйләүгә килеп сыҡты, дөрөҫөрәге — аты алып килде…

— Улай бик арттырып та ебәрмә инде, — тип ҡуя Аллабирҙе шунда. — Уйламаған-көтөлмәгән бер хәлдән һуң мин үҙем килеп сыҡтым бит һеҙгә, — тип, әле Йылҡыбай ҙа ишетеп белмәгән теге ят батыр менән осрашҡан хәлде һөйләп бирә. Быны тәүләп ишеткән Йылҡыбай, иҫе китеп:

— Бына ҡалайыраҡ бит һин! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрә. — Ауыҙыңдан һүҙеңде тартып алып та булмай бит һинең! Йыйында шуны һөйләп бирһәң ни була? Ауыҙ асып бер һүҙ әйтһәңсе, исмаһам, шунда.

— Мин бит был хәлдән һуң, йыйындағылар ни әйтер икән, тип, һеҙҙең кәңәшегеҙҙе тыңларға булдым, — тип ҡуйған Аллабирҙе.

— Бына үҙең күреп тораһың, Зөһрәкәйебеҙ, бөтәһе лә тәҡдир ҡушҡанса эшләнгән, — тип Йылҡыбай йәнә һүҙгә керешә: — Был шулай беҙҙең йәйләүгә килеү менән, ҡайғы-хәсрәттәрен онотоп, икенсе кәләш алыуын һораныҡ, күңелеңә яткан teләһә ниндәй ҡыҙыбыҙҙы һайлап ал, тинек. Ә ул, йәше оло булыуға һылтанып, бөтәһенән дә баш тартҡас, мин шунда ҡылт итеп һине иҫкә төшөрҙөм, Зөһрәкәй. Шунда бөтә йыйынға һинең яңғыҙ ғүмер итеүеңде, һинең бөтә яҡшы яҡтарыңды һөйләп бирҙем. Әгәр ҙә ул беҙҙең Аллабирҙегә иргә сығырға риза булһа, шунан да данлыраҡ кәләште эҙләп йөрөйһө лә юҡ, тинем. Шунда бөтәһе лә минең һүҙемде, раҫ һөйләйһең дә раҫ һөйләйһең, тип күтәреп алдылар, Аллабирҙенән һине барып күреүен һоранылар. Үҙе бер ни ҙә өндәшмәгәс, беҙ уны риза булғанға иҫәпләнек, шунан мин уны үҙ тирмәмә алып ҡайттым да, шул көндөң иртәгеһенә үк юлға сығып киттек. Беҙ юлда күргән әкәмәттәрҙең байтағын инде һин үҙең дә беләһең хәҙер. Тик әүлиә ҡартта булып киткәнебеҙҙе генә һөйләйһем ҡалған икән! Ул беҙҙе ҡаршы алғас, үҙенең мәмерйәһенә алып ҡайтты… Зөһрә иргә сығырға риза

булыр, тип, икебеҙгә лә бер ниндәй ҙә ҡорал ала алмаҫ тылсымлы күлдәк менән бүрек бүләк итте. Уҡылыстарыбыҙҙы ла теләһә кемгә ҡаршы торорлоҡ, хатта дейеү пәрейҙәренең дә башына етерлек итеп сихырлап бирҙе. Быныһын инде беҙ үҙ күҙебеҙ менән күреп белдек. Тик хәҙер шуны ғына беләһебеҙ ҡалды: һине иргә сығырға риза булыр тип ул әүлиә дөрөҫ әйткәнме, әллә юҡмы?

Шул урында таҫма тел Йылҡыбай, үҙенең һүҙен ослап, юлдашына ла, Зөһрәгә лә күҙе менән үтә тишерҙәй итеп ҡарап ҡуя. Ә Аллабирҙе иһә һылыу бисәнең йә «юҡ», йә «эйе» тигән ике һүҙенең берен көтөп, унан күҙен дә алмай ҡарап ултырған була, ә уныһы бер ергә күҙен текәп, көрһөнөп ҡуйған була ла, бер аҙ тын ҡалып ултырғас, бер-ике бөртөк күҙ йәшен дә һығып:

— Быларҙың бөтәһе лә тәҡдир таҡтаһына утлы ҡәләм менән яҙылғанса булыр инде, — тип ҡуя.— Яҙмыштан уҙмыш юҡ юғын, шулай ҙа ризалығымды бирерҙән алда мин дә һеҙгә үҙем күргән-белгәнде һөйләп бирермен. Һөйләр һүҙем һеҙ йомошлап килгән йомошҡа барып тоташҡас, уны бөгөн генә һөйләп бөтөп булмаҫ. Көн дә кискә һарҡып бара, һеҙ ҙә алыҫ юлдан арып-йонсоп килгәнһегеҙ. Шулай булғас, һүҙҙе иртәнгә ҡалдырып торайыҡ та, хәҙер һеҙ тамаҡ ялғап, серем итеп алырһығыҙ, — тип, үҙе быларға киске тамаҡ әҙерләргә сығып китә...

## Унынсы кис

— ...Бик шәп йоҡланыҡ, — тип, хужабикә эш-көшөн бөтөргәнсе, тәһәрәт яңыртып, иртәнге намаҙ уҡырға күл буйына төшәләр. Һуңынан Зөһрәнең йылҡы өйөрҙәрен ҡарап йөрөйҙәр. Йылҡылары торғаны бер мал ҡото — шау толпар ғына икән. Бынан сығып, Зөһрәнең мәрхүм ире ҡашҡа батыр булған икән тигән уйға киләләр. Байтаҡ ҡарап йөрөгәс, тирмәгә ҡайтһалар, хужабикәнең урын-һарынды йыйыштырып, һаумал менән һыйларға өлтөрәп йөрөгәнен күрәләр. Унан:

— Ултырышығыҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар, берәй туҫтаҡ ҡымыҙ эсегеҙ, — ти.

Аҙыраҡ ҡыйыулана төшкән баш Зөһрәгә:

— Һин мине улай ҡунаҡ тип әйтмәһәң дә ярар ине, — тип һала. Ә йор һүҙле Йылҡыбай:

— Ай-һай, ашыҡмай тор, башта хикәйәтен һөйләһен әле, һөйләп бөткәс, бәлки, ҡунаҡ та тимәҫ, — тип төрттөрөп ҡуя. Ҡоҙаның мәрәкәләүенә ҡаршы хужабикә лә аптырап ҡалмай:

— Эйе шул, хикәйәтемде һөйләп, һеҙ мин ҡушыр бер йомошто үтәгәс, Аллабирҙене ҡунаҡ тип тә атамам, — тип көлөмһөрәп ҡуя. Йомош тигән һүҙгә ҡолаҡтары ҡарпая төшөп, кейәү менән ҡоҙа, уйға ҡалғандай, баштарын эйеп ултырғанда, хужабикә быларға

берәр туҫтаҡ ҡымыҙ килтереп тоттора ла, ҡаршыларына ултыра һалып, хикәйәтен былай тип башлап ебәрә:

— Һеҙгә, ир-арыҫландар, әүәл шул мәғлүм булһын: минең атайым Ҡыҙрас атлы булып, уның йәйләү ерҙәре бынан, яҡшы атта барғанда, бер утыҙ көнлөк юл ашаһында ята. Беҙҙең ырыуҙың йәйләүлектәре үтә күп ерҙе биләп, Ағиҙелгә ҡойған Өфө йылғаһы тамағынан алып түбәндә Сулманиҙелгә ҡойған Ағиҙел тамағынаса йәйелеп киткән. Йәйләү ерҙәребеҙ Ағиҙел буйлап ҡына түгел, ике яҡ ярҙан ҡара-ҡаршы биш көнлөк юл киткәндә лә осона барып сыҡҡыһыҙ. Ҡышҡылығын беҙ дөм ҡара урманда ҡышлайбыҙ ҙа, яҙын ҡар асылыу менән, әле әйткән Ағиҙел менән Сулманиҙел буйҙарындағы иркен далаларға йәйләүгә сығабыҙ. Ә был йылғаларҙың киңлеген күрһәгеҙ, иҫегеҙ китер ине: бер яҡ ярынан икенсе яҡ ярына иң көслө батыр атҡан уҡ та саҡ барып төшә, ә ташҡан мәлдә улар диңгеҙҙәй йәйрәп яталар. Һеҙҙең ағын һыулы Яйыҡығыҙ менән Һаҡмарығыҙ улар янында шишмә төҫлө генә. Атайым минең Ҡармасан менән Сәрмәсән буйҙарында йәйләй торғайны. Йәйләүгә сығып, йәй уртаһында ғына Ҡандра күленә барып етер ине. Ул күлде һыбай урап сығыуға ла үҙенә бер көн кәрәк. Үҙе шундай тәрән, биш оҙон арҡан ялғап буйлатһаң да төбөнә саҡ етә, ә һыуы шундай тоноҡ, саф: өҙөп ырғытҡан ҡашмау тәңкәһе лә төбөндә ялтырап ятыр ине. Тирә-яҡ ярҙарын һырғый ағастар уратып алғанлыҡтан, ел-дауыл был күл өҫтөндә бик һирәк кенә тулҡын ҡуптарыр ине. Төрлө-төрлө һыу ҡоштарының күплегенә хайран ҡалырлыҡ: ҡош тауыштарынан ҡолаҡ тоноп бөтә, ә балығын ҡул менән генә лә тоторлоҡ.

Атайымдың беҙ ике ҡыҙы булып, апайым Һылыубикә исемле ине. Мин һеҙгә инде бала саҡты һөйләп тә тормайым. Үҫеп, буйға етә башлағас, беҙ ҡулға йәйә алып, уҡ атырға ла өйрәндек. Уҡ атышыуҙа оҫтарағы мин булһам, апайым ҡул эштәренә һәүәҫерәк ине. Ә һыбай йөрөүҙе инде беҙ һанға ла һуҡмай торғайныҡ, шулай ҙа мин башҡаларға ҡарағанда ат өҫтөндә сосораҡ булдым. Ҡыҙ-ҡырҡын бәйгеләрендә мин үҙ тиңдәрем араһында ҡыйыураҡ та, таҫыллыраҡ та булыр, берәүгә лә ал бирмәҫ инем. Апайыма ун һигеҙ, миңә ун ете йәш тулғас, күрше-тирә ауылдарҙан беҙҙе кәләш итеп йәрәшергә кейәүҙәр ҙә ҡоҙалай башланы. Апайым шулай итеп күҙле-башлы ла булып ҡуйҙы, ә мин, нилектәндер, кейәүгә сығыу тигәндәренә ытырғанып ҡарай инем. Үҙемде көслө лә, сос та күргәс, үҙемә тиң булырҙай кейәү табырыма ышанмай, атайыма, уҡ атышта, көрәштә, аттан тартышта мине еңгән егет кенә ирем булыр, тип ҡырт киҫтем. Ҡыйыу егеттәрҙең байтағы минең менән көс

һынашып, уҡ атышып ҡараһа ла, килгән бере хур булып китте. Мин шулай, ир-егеттәр ҡыланғанды ғына ҡыланып, ҡыҙ-ҡырҡын эшенә ҡул һелтәп кенә ҡуйыр булдым...

Таң һарыһынан тора һалып, билемә ҡылыс, иңемә уҡ-һаҙаҡ аҫып, яҡшы атҡа атланыр ҙа далаға сабыр, атайымдың көтөүҙәрен урап сығып, уларҙы төрлө ҡош-ҡорттан ҡурсалар йә һунарға ғына йөрөр инем. Әсәйем йыш ҡына мине ир-ат эшенә тығылаһың тип орошһа ла, атайыма был, киреһенсә, оҡшай торғайны. Ул, ир балалары булмағас, мине үҙенең батыры һанап, һәр саҡ минең ыңғайға ғына торор ине. Өйөрҙән иң шәп ат һайлап менергә ҡушыр, иң яҡшы ҡоралдарын миңә ышанып бирер ине. Бына әле лә уларҙы мин атайым төҫө итеп һаҡлайым, ҡарағыҙ әле, — тип, Зөһрә шул мәл ултырған еренән тора һалып, көмөш менән семәрләнгән ҡалъянын, һабы фирүзә таштар менән биҙәлгән ҡылысын килтереп күрһәтә. Әҙернә йәйәһе керешһеҙ торғас, уға көсәнмәй генә кереш тартып, йәйәне башта Йылҡыбайға тоттора ла:

— Һынап ҡарасы, кереше яҡшы тартылғанмы? — тип һорай. Йылҡыбай, йәйәне ҡулына алып, һынап ҡарамаҡсы була, керештең сиреген дә йәйәһенән ҡайыра алмағас, оятынан ни эшләргә лә белмәй:

— Юҡ, минең ҡулдан ғына килерлек түгел был, — тип йәйәне кире бирә. Быны күреп торған Аллабирҙе баш Зөһрәнән уғын һорап ала ла йәйәнең ҡатылығын һынап ҡарамаҡсы була. Бөтә көсөн һалып, уҡты яртыһына саҡлы ғына тартып ҡарай ҙа, оялып, кире бирә. Зөһрә, уларҙың хурланғанын күреп, үҙенсә йыуатырға тырышып:

— Бер ҙә хурланырға урын юҡ, ҡотҡарыусыларым, — тигән була. — Был йәйәнең керешенә сиктән тыш көс кәрәк, мин уны йәш сағымда башағынаса тарта торғайным да, хәҙер юҡтыр инде. Шулай ҙа һынап ҡарайым әле, — тип, башҡа һаҙаҡтан оҙон бер уҡты һайлап алып, йәйәһенә һала ла, һис көсәнмәй-нитмәй, уҡты башағына саҡлы ғына тартып ҡалмай, йәйәнең икенсе яғына уҡ сығарып ҡуя. Батырҙар, был хәлгә хайран ҡалып:

— Һай, мәрҙәс[1]! — тип ҡысҡырып уҡ ебәрәләр. Хужабикә шунда йәйәне ҡалъянына кире һалып ҡуя ла йәнә һөйләүен дауам итә.

## Ун беренсе кис

— Минең бындай батырлыҡтарым атайыма бик үк оҡшағанлығын һеҙгә әйткәйнем инде. Ә үҙем шат инем, хатта ҡыҙ-ҡырҡын кейемен дә киймәй башланым. Оҙон сәс толомомдо башыма

[1] *Мәрҙәс* — хуплағанды, ҡеүәтләгәнде белдерә.

урап, ирҙәр бүрке менән ирҙәр кейеме генә кейеп йөрөр инем. Йыйындарҙа ла ҡыҙ-ҡырҡынға ҡатышмай, уларҙың көсһеҙлөгөн, кеше ярҙамына мохтажлығын күрә алмай, һәр саҡ ир-егеттәр менән батырҙар араһында ғына ҡатышып йөрөр булдым. Улар минең көс менән таҫыллығымды күреп, минән аҙыраҡ ҡурҡа ла, ололоҡлай ҙа торғайнылар. Һунарға сыҡһаҡ, иң башта мин йөрөр, ҡайҙа ҡурҡыныс януар бар, иң алдан шунда мин сабыр инем. Беҙҙең дөм ҡара урмандарҙа ибәтәйһеҙ ҙур айыуҙар күп була торғайны, улар менән мин иптәштәрем күҙ алдында алышыр инем, алышта һәр саҡ еңеп сығыр инем. Ә һеҙгә һөйләйәсәк бер хәлдән һуң минең дан оторо таралып китте.

Берҙән-бер кисте шулай атайымдар менән тирмә алдында ултыра инек, беҙҙең ике көтөүсе, йән-фарман сабып килеп, бик күп айыу көтөүҙе баҫып, малдарҙы ҡыуып алып киткәнен, араларында быҒаса күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән ҙур бер аҡ айыу булғанын хәбәр иттеләр. Мин шунда һикереп торҙом да, ҡоралдарымды ала һалып, атҡа һикереп менәйем генә тигәйнем, атайым ҡаршы төштө.

— Һөйөклө ҡыҙым минең! Һинең батырлығыңа ышанһам да, бынауындай ҡараңғы төшөп килгәндә, әллә ниндәй бәләгә тарыуың бар, иртәнгәсә сабыр ит, — тигәс, мин үҙемде тыйып ҡалдым. Шулай ҙа атымдың эйәрен дә һалдырып тормай, сабырға еңел булһын тип, ашатмай, төнө буйы бәйҙә тоттом. Атайым менән һөйләшеп торған арала беҙҙең тирмә эргәһенә бергә һунарға йөрөгән иптәштәр ҙә йыйылып килгәйнеләр. Улар ҙа, һинһеҙ эш уңмаҫ, тип, иртән бергә сығыуымды һорағас, мин бергә барасағымды әйтеп, аттарын әҙерләп ҡуйырға ҡуштым.

Ҡояш сығып килгәндә, бөтәбеҙ ҙә эйәр өҫтөндә инек инде. Мин башҡаларҙан кейгән кейемем, менгән атым менән дә, эйәр-өпсөнөм, ҡоралым менән дә айырылып тора инем. Әле һеҙгә күрһәткән уҡ-һаҙағымды аҫып, уң ҡулыма һөңгө тотоп алғайным. Атайыма мал-тыуарҙы айыуҙар әйҙәп алып киткәнен әйткән теге көтөүселәр беҙгә юл күрһәтеп барҙылар. Беҙ көн буйы тиерлек барһаҡ та, бер айыуҙы ла осратманыҡ, тик Бөрө буйындағы ҡара урманға етәрәк кенә ҡапыл урман эсенән сырҡырашып килеп сыҡҡан бейәләр өйөрөн күреп ҡалдыҡ, ә өйөр айғырҙары ҡойроҡтарын сәнсеп, ялдарын сайҡап, ҡолаҡтарын шымайтып, арттарына ҡарана-ҡарана, үҙ өйөрҙәрен ҡурсалап, арттан төшөп алғайнылар. Беҙ шунда уҡ эштең ниҙә икәнен һиҙеп ҡалдыҡ та уларға ҡаршы саптыҡ. Беҙҙең ярҙамға килгәнде күргәс, улар ҙа һөйөнөстәренән кешнәй-кешнәй, беҙҙең ыңғайға ҡайырылып киттеләр. Шунда беҙ йүгерешеп килгән

айыу көтөүен дә күреп ҡалдыҡ. Мин иптәштәремә (улар егермеләп егет ине), уҡтарығыҙҙы атмай тороғоҙ, януарҙарҙы башта һөңгөгә алығыҙ, тип ҡысҡырғас, бөтәһе лә һөңгөләренә йәбеште. Иң тәүге булып Баййегет бер айыуҙы, бик йәтеш һөңгөгә алып, үлтерә сәнсте. Башҡалар ҙа, шулай айҡаша-айҡаша, айыуҙарҙы ҡырып һалдылар, шулай ҙа януарҙар кәмемәне. Күбебеҙҙең һөңгөләре һынғанын күреп, мин, инде уҡтарығыҙға тотоноғоҙ, тип ҡысҡырҙым да әҙернәмде алдым. Минең дә, өсөнсө айыуҙы әйләндереп һалғанда, һөңгөм һынып киткәйне. Уҡ-һаҙаҡтарыбыҙ яртылаш бушап ҡалғанда, айыуҙар инде ҡурҡыштарынан урман эсенә һыҙа ғына башлағайны, ҡапыл урман эсенән ажарын сәсеп килеп сыҡҡан аҡ айыу күренде. Уның артынса ҡаралары ла яу булып килеп сыҡты. Былары ла дәү булыуға ҡарамаҫтан, аҡ айыуҙың ҡорһаҡ аҫтынан ғына инеләр. Аҡ айыу эйәрткән был ҡара яуҙан дуҫ-иштәремдең ҡото осто, мин дә шөрләй төштөм. Тик айыуҙарҙың алпан-толпан яйлап килеүенән генә йән кергәндәй булды. Шул саҡ мин бер иптәшемдең ҡулынан берҙән-бер һынмай ҡалған һөңгөнө тартып алдым да:

— Дуҫтарым! Һеҙ мине үҙегеҙ етәксе итеп ҡуйғас, тыңлағыҙ: алышты тәүҙә мин башлайым, мин берәй нәмә эшләмәй тороп, берегеҙ ҙә ашыҡмай тороғоҙ, — тип ҡысҡырҙым. Үҙем шунда аҡ айыуға сабып барып еттем дә үрә ҡалҡып тороп миңә ташланырға әҙерләнгән януарҙың нәҡ күкрәгенә һөңгөмдө ҡаҙап өлгөрҙөм. Һөңгөм һабы төбөнән үк шартлап һынды. Айыу, һөңгө ҡаҙалғанын да һиҙмәй, ажарланып туп-тура үҙемә ташланды ла, атымдың муйынынан эләктереп, башын да өҙөп ырғытты. Мин, атымдан саҡ һикереп ҡалып, уғымды атып ебәрҙем. Уҡ януарҙың ҡабырғаһына бөлдөргөһөнәсә инеп китте. Айыу, яраһына түҙмәй, бөлдөргөнө теше менән эләктереп, уҡты һурып алмаҡ булды. Шул арала мин, тәүгеһенән дә нығыраҡ асырғанып, икенсе уҡты ла атып ебәрҙем. Януар, сығырынан сығып, үҙемде иҙеп ташлайым тигәндә генә, һурып өлгөргән ҡылысым менән йән асыуыма быны моронона тондорҙом. Шулай ҙа ул бер аяғы менән янбашымдан ҡармап алып, ергә йығам ғына тигәндә, билдән хәнйәремде һурып, һабынаса быны йөрәгенә килтереп сәнстем. Януар, яман үкереп, сайҡалды ла, өҫтөмә ауа башлағанда ғына, ярай әле, нисектер янтайып өлгөрҙөм. Унан ерҙә ятҡан ҡылысымды эләктереп алып, йәнә ике ҡабат башын яра сапҡас ҡына, ҡот осҡос үкереп, йән бирҙе. Ҡалған айыуҙар, башлыҡтарынан яҙғас, яман үкерешеп, урманға ҡастылар. Иптәштәрем минең иҫән-һау ҡотолоуымды күргәс, ҡыуанышып йүгереп килделәр ҙә мине ҡотларға

тотондолар, бөтәһе лә мине: «Батыр ҡыҙ!» — тип күтәреп үк алдылар. Аҙаҡ мине иргә сыҡҡансы шулай «батыр ҡыҙ» тип йөрөтөр булдылар. Мин иптәштәремә ошо айыу йыҡҡан ерҙә ҡуналҡаға туҡтарға ҡуштым да, өйҙәгеләр көйөнмәһендәр тип, беҙҙе килтергән ике көтөүсене атайымдарға ҡайтарып ебәрҙем, алмашҡа ат алып килергә лә ҡуштым. Шул арала берәүҙәр күҙгә төндә өшөмәҫкә ут яғып ебәрҙе, ә икенселәр айыуҙарҙың тиреләрен һыҙырырға кереште...

Януарҙарҙың тиреһен тунап бөткәс, аттарҙы кешәнләп ебәрҙек тә, усаҡ янына хәл алырға ятып, таң атҡансы үлек йоҡоһо менән йоҡланыҡ.

## Ун икенсе кис

Ҡуйы Бөрө урмандары аръяғынан ҡояш ҡалҡып, төшлөккә етә яҙғанда, атайыма ҡайтарып ебәргән теге көтөүселәр миңә ат та килтереп еткерҙеләр. Юл сығырға әҙерләнеп бөткән иптәштәрем менән минең атты эйәрләй һалдыҡ та, айыу тиреләрен артмаҡлап, аттарҙы йәлләп тормай, йәйләүгә ашыҡтыҡ. Аҡ айыу тиреһен, ай-вайыма ҡуймай, минең атҡа япҡайнылар. Беҙ ҡайтып етеүгә, атайым менән бөтә йәйләү халҡы беҙҙе ҡаршы алырға сыҡҡайны. Атымдан һикереп төшөп, мин туп-тура атайыма ташландым, ә ул мине ҡосағына алып, батыр ҡыҙым, тип иркәләп арҡамдан һөйҙө. Һәр беребеҙ, әсәйҙәрҙе лә һөйөндөрәйек тип, үҙ тирмәләребеҙгә ашыҡтыҡ. Мин дә атайым менән бергә ҡайтып ингәндә, әсәйем, ҡосағына алып, шатлығынан ни эшләргә лә белмәне. Мин уларҙың икеһенә лә нисек итеп януарҙар менән алышҡанды, нисек итеп аҡ айыуҙы еңеп сыҡҡанды һөйләп бирмәксе булдым. Айыу тиреһен алып инделәр, табанлап үлсәп сыҡтылар ҙа, ун алты табанлыҡ, тинеләр. Иртәгәһенә ауылда йыйын үткәрергә булдылар.

Атайым, бөтәһенән дә байыраҡ булғас, туй-һыйға алты бейәһен тотоп килтерергә ҡушты, ә атайымдың ҡорҙаштары икешәр бейә килтерҙе. Байрам булаһын миңә ат килтергән теге көтөүселәр аша яҡын-тирә ауылдарға ла еткереп ҡуйғанға, халыҡ эркелешеп килде. Бейәләрҙе һуйырға йыйынып йөрөгәндә, мин атайымдың йылҡы өйөрөнән иң яҡшы аҡбуҙ бейәһен тотоп алып, аҡһаҡалдар алдына килтереп баҫтырҙым да аҡ айыуҙы еңеү хаҡына уларҙы иң яҡшы бейә менән һыйлаясағымды әйттем.

— Һай, батыр ҡыҙ, батыр ҡыҙ! Һин бит ҡыйыулығың менән дә, көс-ҡеүәтең менән дә бөтә егеттәребеҙҙән дә өҫтөнһөң! — тип геүләп килделәр аҡһаҡалдар...

— Мин һеҙгә, ҡәҙерле ҡунаҡтарым, өс көн буйы барған был йыйында ниҙәр генә булғанын тәфсирләп һөйләп тормайым инде.

Өс көн, өс төн буйы ҡаҙан аҫтарынан ут һүнмәне, һабаларҙан ҡымыҙ өҙөлмәне. Ул бәйге тиһеңме, ул көрәш тиһеңме, уҡ атыш тиһеңме — бөтәһе лә үҙебеҙҙең йола буйынса барҙы. Бөтә шул байрам үткәнсе мине маҡтауҙарынан ҡолағым тоноп бөттө.

Йыйын үтеп киткәс тә әле мине үҙ күҙҙәре менән күрергә, минең был батырлыҡ хаҡындағы хәбәрҙе үҙ ҡолаҡтары менән ишетергә тип әллә ҡайҙарҙағы ауылдарҙан килеп бөттөләр.

Шулай итеп, көн артынан көндәр, ай артынан айҙар үтә торҙо, мин һаман да үҙ ҡылығымды ҡуймай, элек нисек йөрөһәм, шулай йөрөй бирҙем. Ахырҙа, минең менән көс һынашыуҙан ҡурҡып, егеттәр ҙә яусыламаҫ булдылар. Һеҙҙән инде йәшерәһе юҡ, тора-бара былай көн итеү ялҡыта башланы, быны ахыры ни менән барып бөтөр, тигән уй ҙа күңелде шомландырып ҡуйғылай торғайны. Әле йәш саҡта кейек аулау менән булайым, ә ҡартайғас, әбейҙәр араһында булырмын тип уйлай инем. Ҡартлыҡ тигәндә, ҡотом оса торғайны. Ҡайһы саҡта атайымдың кейәүгә тотоп биреүен теләһәм дә, үҙемә тиң булмаҫтайға сығыуға намыҫым ҡушмай ине. Шулай уйлап йөрөй торғас, егермегә лә аяҡ баҫтым. Үҙемә үҙем йәм тапмай башланым. Һунарға ла һирәк-һаяҡ ҡына, онотҡанда бер сығып әйләнәм. Мине йәндәй күргән атайым да һиҙенгәндер инде: нисәмә рәт төпсөп-төпсөп ҡараһа ла, йүнле бер һүҙ ҙә ишетә алмағас, ахыр сиктә ул да ҡул һелтәп ҡуйҙы. Бына шул мәл ҡапыл, ниндәйҙер бер сихыр эйәһе хаҡындағы имеш-мимеш хәбәр таралғас, миндә яңынан дәрт тыуҙы, был дәрт мине оло бер хәтәр эш эшләргә мәжбүр итте.

Көндәрҙән бер көн шулай, атайыма йыйылып килгән аҡһаҡалдар менән һөйләшеп ултырғанда, ошо хаҡта һүҙ сығып китте. Һәр кем теге сихырсымы, күрәҙәсеме хаҡында үҙенең ишеткән-белгәнен һөйләп бирҙе. Берәүҙәре уны әүлиә, икенселәре пәрей икән, тине. Бәғзе берәүҙәре уны мәскәй, бәғзеләре күрәҙәсе, имеш, тип һөйләне. Тик берәү ҙә уның ҡайҙа көн иткәнен өҙөп кенә әйтә алманы. Берәүҙәре уны Урал һыртында, Ирәмәл типһәнендә, ҡайһылары Ағиҙел тамағында көн итә, имеш, тип һөйләне. Шулай ҙа өҙөп кенә берәү ҙә раҫ һүҙ әйтә алманы. Быны һайын минең ҡыҙығыуым арта төштө. Үҙебеҙҙең йылҡы өйөрҙәрен барлап ҡайтырға сыҡҡан һайын, мин ошо әүлиәне күрмәмме тип, үҙебеҙҙең үрештән әллә ни саҡлы ер ары китеп урар булдым. Бер көн шулай тауға артылғас, үҙемә ҡаршы ыңғайлаған бер һыбайлыны күреп ҡалдым. Был ят әҙәмдең кем икәнен, ҡайҙан килә ятыуын белергә тип, атымды ҡыҙыулата төштөм. Ә ул минең сабып килеүемде күргәс, туҡтап

ҡалды. Мин килеп етер-етмәҫтән иҫәнләшкәс, ул да яуапһыҙ ҡалманы. Өҫтөндәге кейем-килбәтенә ҡарағанда, беҙҙең ырыу-ара затына тартмаһа ла, уның хаҡ мосолман икәнен белгәс, мин уның кем булыуын, ҡайҙа юл тотоуын һорашып алып киттем.

— Мин олуғ Болғар батшалығынан булам, бына төрлө халыҡтарҙы күрәйем тип, уларҙың ғөрөф-ғәҙәттәрен беләйем тип, бөтә илдәр буйлап сәфәр ҡылып йөрөйөм, ә ҡайтҡас, бөтә күргән-белгәндәремде Болғар батшаһына бәйән ҡылырға тейешмен; мин үҙем уның яҡындарының береһе булам, — тине был яуабында. Мин унан йәнә:

— Күптән сығып киттеңме унан, ниндәй юлдар менән килдең? — тип һорағас, ул:

— Мин, — тине, — Сулманиҙел буйынан Ағиҙел тамағынаса килеп, ҙур-ҙур урмандар, тауҙар аша үтеп сыҡтым.

— Улай булғас, байтаҡ ҡыйынлыҡтарға, хәүеф-хәтәр нәмәләргә осрап бөткәнһеңдер инде? — тинем.

— Юҡ, — ти был, — ундай хәүеф-хәтәргә юлығыуын юлыҡманым, шулай ҙа бына ят януарҙар үкерешеүе, Ағиҙел тамағындағы тау араларынан үткәндә, ағастар шартлауы менән тағы ниндәйҙер тауыш ишетелеүе генә ҡотомдо алды, — ти.

— Ни булды икән ул? Үҙең нигә юрайһың быны? — тип һораным бынан.

— Был хаҡта мин тик шул яҡ кешеләренең әйткәнен генә әйтә алам, — ти был. Ошо урындан ике көнлөк юлда ғына йәшәй икән ул. — Күптән түгел унда бер әүлиә килеп сыҡҡан икән. Үҙе хаҡында ни ҙә булһа белергә теләгән бер кешегә уның бөтә үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген әйтеп бирә икән ул.

— Ә һиңә уны барып күрергә, күрәҙәлек иткәнен тыңлап ҡарарға булмай инеме һуң? — тигәс, ул көлөп кенә ҡуйҙы:

— Юҡ, ҡайҙа инде ул миңә әүлиә тиклем әүлиә менән ҡул биреп танышырға баҙнатсылыҡ итергә, — ти.

— Ә уны күргән берәйһен белмәйһеңме? — тигәс, бер йәш егетте күргәнен, уның әүлиә торған тау ҡыуышында булғанын да, әүлиәнең уға ни юрағанын да һөйләп бирҙе.

— Ул тау ҡыуышы бынан алыҫмы? — тип һораным мин.

— Мин уның янында булманым булыуын, шулай ҙа ул тауыш ишетелгән ерҙән инде бына, үҙең күреп тораһың, яҡшы атта ун биш көн киләм, — ти был.

— Унда юл тотҡанда, ҡайһылайыраҡ барырға һуң?

— Ағиҙел тамағының ҡаялы ярына хәтле барһаң, ул тауышты ишетергә була, — тигәс, мин дә:

— Ярай, юл кешеһенең юлда булғаны яҡшы, юлыңды бүлмәйем инде, иҫән бул, — тигән булдым. Шунан болғар ҙа, миңә хәйерле юл теләп, ары китте.

Мин, бер аҙ барғас, аптырап туҡтап ҡалдым. Әүлиәне хәҙер үк эҙләп сығып китергәме, әллә атайыма ҡайтып кәңәш һорарғамы, тип оҙаҡ икеләнеп торҙом. Кире ҡайтһам, мине күҙ өҫтөндәге ҡаш кеүек күргән атайым да, әсәйем дә был сәфәргә ризалыҡтарын бирмәҫтәр, минең был ниәтемде иҫәүәнлеккә генә һанарҙар, тигән уйға килдем. Шулай ҙа, уйлай-уйлай торғас, ҡайтып, иң шәп, иң сыҙам ат һайлап менергә лә, иң яҡшы уҡ-һаҙаҡ менән берәй аҙналыҡ аҙыҡ-маҙар алып, атайыма һиҙҙермәй генә юлға сығырға булдым. Минең ҡыуанып ҡайтып инеүемә атайымдың да күңеле асылып китте. Мин уны тағы ла нығыраҡ ҡыуандырайым тип, юлаусыларҙың бынан бер көнлөк юлда әле был яҡтарҙа күренмәгән ап-аҡ болан көтөүенә тап булғандарын һөйләнем, мине бер ике-өс көнгә шунда ебәреүен һораным. «Ярай, Аллаһы Тәғәлә ярҙамынан мәхрүм итмәһен, — тине атайым. — Тик ышаныслыраҡ ат һайлап мен, күберәк ҡорот алып сыҡ», — тине. Ниәтемде атайымдың белмәгәнлегенә шатланып, тиҙерәк китергә ашыҡтым.

## Ун өсөнсө кис

Икенсе көнөнә бөтә кәрәк-яраҡ әҙер ине. Атайым-әсәйем менән хушлаштым да Ағиҙелгә ҡарай юлға сыҡтым... Икенсе көн тигәндә инде мин Ағиҙел буйына барып та еттем... Уҡ-һаҙаҡтарымды арҡама артмаҡлап алдым да йөҙөп өйрәнгән атым менән еңел генә аръяҡ ярға барып та сыҡтым. Өҫ-башымды киптереп алғас, ҡаршылағы таулыҡҡа күтәрелергә юл эҙләй башланым. Ахырҙа, тар булһа ла, һуҡмағы ла табылды, һуҡмаҡ текә яр һымаҡ ҡалҡыулыҡҡа алып менде, шунан тау үҙәгенә илтеп сығарҙы. Ҡискә саҡлы үҙәк буйлап тау башына менгәс, һуҡмаҡ та киңәйә төшкәндәй булды. Үҙем дә белмәйем, нилектәндер, был нәҡ теге болғар үткән һуҡмаҡтыр, тип ҡуйҙым эсемдән. Барған һайын үҙемдең дөрөҫ юл менән киткәнемә ышана барҙым, ни өсөн тигәндә, бейек тауҙарға күтәрелгән һайын һул ҡулдан Ағиҙелде күрә килдем. Шулай, бер ниндәй бәлә-ҡазаға ла тарымай ғына килә торғас, унынсы көн тигәндә, юл аҙығым бөттө. Шулай ҙа ҡош-маҙар атып алып, тамағымды туйҙырҙым, ә көтөүҙә йөрөп өйрәнгән атымдың аҙығы аяҡ аҫтында ине. Болғар мосафирының әйткәненсә, тағы биш көнлөк кенә юл үтәһем ҡалғас, шулай тыныс ҡына килә ятҡанда, ҡапыл көтмәгән-нитмәгән ерҙән өҫтөнә ылбырап бөткән күлдәк кейгән бер әҙәмде күрҙем. Буйға ул ҡәҙимге кешенән саҡ ҡына оҙонораҡ, үҙе ҡуңыр йөҙлө. Башына керләнеп бөткән сәллә уралып, ялан аяҡтары ҡайыш менән сырмалып бөткән, һул ҡулына оҙон таяҡ, уңына осо армыт ҡамсы тотоп алған. Үҙе миңә:

— Һаумы, батыр мөслимә, — тип һүҙ ҡушты. Бындай көтөлмәгән осрашыуҙан аптырап, бигерәк тә уның ҡыҙ-кырҡын затынан икәнлегемде белеүен ғәжәп итеп, иҫәнләшә лә алмай торҙом, ахырҙа:

— Минең ир-ат булмауымды ҡайҙан беләһең? — тип һораным.

— Ә мин һине бик яҡшы беләм, батыр ҡыҙ, ниндәй йомош менән ҡайҙа китеп барыуың да мәғлүм миңә. Шулай ҙа һиңә бына ошо ҡамсыны бирмәһәм, барыр ереңә барып етмәүең дә, хатта һәләк булып ҡуйыуың да бар, — тине был.

— Нимәгә ул ҡамсы миңә? Уның менән мин ни эшләйем? — тип һорауыма:

— Юлыңда осраған ҡот осҡос йән эйәләрен еңеп сығырға кәрәк булыр был, — тип яуап ҡайтарҙы.

— Быға минең үҙ ҡоралым да бар, күрә торғанһыңдыр бит, — тигәс:

— Һай, һинең был ҡоралың ташҡа ҡаршы ҡамыш ҡына шул. Һинең, ҡыҙым, башың йәш шул әле, был ҡамсының хикмәтен белеп тә еткермәйһең, бына хәҙер үк мин уның серен асып күрһәтәйем үҙеңә, — тине лә арыраҡ китә биреп: — Бына хәҙер миңә таба сабып килеп һөңгөң менән күкрәгемә йәлләп-нитеп тормай сәнс, — тине.

Мин, уның әйткәндәренә аптырап, был берәй иҫәүәндер, тип уйланым.

— Йә, ниңә шаҡ ҡаттың? — тип ҡысҡырҙы ул миңә. — Әллә мине үҙең анһат ҡына еңеп сыҡҡан аҡ айыуға һанайһыңмы? Тиҙерәк бул, юҡһа, ҡамсыһыҙ ҡалып, сихыр эйәһенә барып та етә алмаҫһың.

Был һүҙҙән һуң атыма һикереп мендем дә, һөңгөмдө туп-тура быңың күкрәгенә тоҫҡап, сабып килеп етеүем булды, ул ҡамсыһын күтәрҙе. Үҙ көсөмә ышанып, ҡартты үтәнән-үтә сәнсермен тип уйлағайным, тик, ҡамсының тейгәнен дә һиҙмәй, атым менән бергә ҡапыл ергә ауҙым. Быны күреп торған ҡарт:

— Йә, батыр ҡыҙ, һөңгөң менән батырлығың, атыңдың көсө ҡайҙа булды? — тип көлдө.

Бер ниндәй ауыртыныу, имгәнеү тоймай, атым менән бергә һикереп торҙом да, хурлығымдан ни эшләргә лә белмәй, тауыштынһыҙ ҡалдым.

— Ниңә бер һүҙ ҙә өндәшмәйһең? — тигәс был.

— Ни тип әйтәйем инде, берәй ҡөҙрәт йыҡҡандыр мине, — тинем.

— Баштан уҡ минең һүҙҙәремә ышанған булһаң, былай булмаҫ ине. Мин, ҡамсымды биреп, үҙ ниәтеңә ирешеү серен дә асыр инем, — тигәс, мин үҙемдең намыҫһыныуымды ситкә ҡуйып, уның миңә ярҙам итеүен үтендем.

— Ярай, улай булғас, тыңла, мөслимә, мин һиңә үҙемдең ҡайҙан, кем булыуымды әйтеп тормайым, тик был ҡамсының нисек итеп, ҡайһы ваҡытта игелеген күрергә ярағанын ғына бел. Был ҡамсы менән бөтә сихыр көсөн ҡайтарырға була, бер ниндәй

мәкерле сихыр ҙа, хатта ен-пәрейҙәр ҡорған хәйләләр ҙә уға ҡаршы тора алмай. Һәр төрлө ен-шайтан яуына ул утлы ҡылыс булып күренер, уның менән бер һелтәүҙә бөтә мәхшәр юҡҡа сығыр, — тип һөйләне лә, ҡамсыһын миңә бирәп: — Был ҡамсыны һин сихырсы мәғәрәһенә барған юлыңда осраған бер ғифриткә ҡаршы һелтәрһең. Тик, ҡыҙым, үҙеңдең ҡәҙимге фани ҡоралың менән эш итеүҙән генә һаҡ бул, күҙгә күренмәҫ ул ғифриттәр һинең ҡоралыңды бар тип тә белмәҫтәр, үҙеңдең һәләк булыуың бар. Мин биргән ҡамсыны һелтәһәң генә улар юҡҡа сығыр. Тау ҡыуышына барып еткәс тә уны ҡуйыныңа йәшереп ҡуй, күрәҙәсе уның осон ғына күреп ҡалһа ла юҡ булыр ҙа, һин үҙ теләгеңә ирешә алмай ҡалырһың. Уның менән һөйләшкәндә ҡыйыу бул, үҙең ни теләһәң, шуны һораш, ул һиңә бөтәһен дә әйтеп бирер. Ә ҡайтҡан сағыңда ошо һуҡмаҡ буйлап ҡына ҡайт, мине ошо урында осратып, был ҡамсыны кире биреп китерһең, — тине.

Шунан мин был арҙаҡлы ирҙән, күрәҙәсенең тау ҡыуышы бынан алыҫмы, тип һорағас, ул:

— Был урындан киткәс, өсөнсө көнөнә барып етерһең, — тине.

## Ун дүртенсе кис

Һуңғы һүҙҙәрен әйтеүе булды, үҙе күҙ асып йомғансы урман шырлығына инеп тә юғалды, ә мин, килгән юлымдан ситтәрәк ятҡан икенсе юлға төшөп, ары киттем. Юлда барған ыңғайға ҡамсыны алып ҡараһам, уның бер ҙә иҫ китер ерен күрмәнем. Бер ниндәй тирәс менән биҙәлмәгән дә, бер быуынының осонан тармаҡланып киткән ун ике армытынан башҡа әллә нәмәһе лә юҡ. Әгәр ҙә уның ҡөҙрәтен үҙ күҙҙәрем менән күрмәгән булһам, бала-сағаны һыптырып алырға ғына үрелгәндер был, тип ҡуйыр инем. Уны шулай ҡуйыныма ҡыҫтырып ҡуйҙым да, ул көндө лә, икенсе көндө лә төшкә тиклем бер нигә лә осрамай барҙым. Барған һайын урмандар ҡуйыра төштө, һуҡмағым үткән тау араларындағы ҡаялар ҙа текәрәк була башланы, шунда ҡолағыма алыҫтан ишетелгән ят тауыш салынды. Башта быны миңә генә шулай ишетеләләр тип уйлағайным. Ни өсөн тиһәң, бөтә уйлаған уйым гел шул алда күрәсәк мөғжизәләр тирәһендә генә урала ине. Ҡапыл шул саҡ тар ғына һуҡмаҡ алдымда ятҡан киң юлға әйләнеп китте лә, юл буйлап мин үҙем белгән бер көтөү януарҙарҙың олоп-үкереп килгәне күренде. Алдан бүреләр олоп, улар артынса айыуҙар үкереп килә. Мин теге ярым-яланғас ҡарттың өгөт-нәсихәтен саҡ онотоп ҡуймай, уҡ-янымды алырға ғына тип торғанда, ҡапыл теге ҡамсы барлығын иҫләп, уны ҡуйынымдан һурып алып, уңлы-һуллы һелтәп ебәргәйнем, үҙ күҙемә үҙем дә

ышанмай торҙом: януарҙар шунда уҡ юҡ булды, киң юл тигәнем элеккесә тар һуҡмаҡҡа әйләнде.

— Эй, изге ҡарт! Һин раҫты һөйләгәнһең, ә мин тәүҙә һиңә ышанмауым менән ғәйепле булғанмын икән! — тип ҡысҡырып ебәргәнемде үҙем дә һиҙмәй ҡалдым.

Януарҙар юҡ булып, ҡамсының тылсымлы көсөн күреп, иркен һулап ҡуйһам да, олоған тауыш тағы ла асығыраҡ ишетелде. Ҡараһам, ни күҙем менән күрәйем: һуҡмағым мине киң бер туғайға алып сыҡты. Мин унда бығаса күҙ күрмәгән, тик әҫе яҡта йәшәгәнлектәрен ишетеп кенә белгән ят януарҙарҙың килә ятҡанын шәйләп ҡалдым. Уларҙың ҡайһы бере ала-ҡола, бәғзеләре буй-буй һыҙатлы, бәғзе беренең ал һаны яллы булһа ла, арт һандары яп-яланғас януарҙар ине.

Бығаса күҙ күрмәгән ят януарҙы осратыу ҡурҡытмай булмайҙыр ул, ҡәҙерле ҡунаҡтар. Дөрөҫөн әйткәндә, башта ҡаушаным, тик әлеге ҡамсы иҫкә төшкәс кенә, уның менән ике ҡабат һелтәп ебәргәйнем, барса януар юҡ булды, киң туғай йәнә һуҡмаҡҡа әйләнде. Был көн хикмәтле мәғәрәгә барып етер һуңғы көн булғанғамылыр, уның мине ҡурҡытыр сихыр ғәләмәте аҙым һайын тиерлек осрап торҙо. Өҙлөкһөҙ сыйнап торған тауыштан башҡа, януарҙар үкерешеүен ишеттем. Урман аша үткәндә минең өҫкә бына-бына ауам тип торған эре-эре ҡарағайҙар араһынан тылсымлы ҡамсым менән һелтәнә-һелтәнә, юл ярып барам. Сихыр эйәһенең миңә ҡаршы ерҙәге яуыз йән эйәһен аяҡландырыуы ғына етмәгән, күктәге ғәрәсәттәре менән дә ҡотомдо алырға иткән, ахырыһы. Күк йөҙөн ҡапыл ҡара болот ҡаплап алды, көн күҙгә төртһәң дә күрмәҫтәй төнгә әйләнде, хатта мин юлды ла шәйләй алмай башланым. Ни эшләргә лә белмәй, алйып-аптырап ҡалдым. Сихырсының ерҙәге ише күктә лә быңдай ғәрәсәт ҡуптарырын мин башыма ла килтермәгәйнем. Ер тетрәтеп ҡаты күк күкрәй, бөтә күк йөҙөн яҡтыртып йәшен ялтлай, йәшен таштары ҡот осҡос ҡеүәт менән сатыр-сотор килеп минең эргәмә генә төшөп ярылалар ҙа, бөтә урманды ялҡын ялмап ала, мин үҙем дә тотош ут-ялҡын эсендә тороп ҡалғандай булам.

Шул саҡ:

— Кире борол, кире, хәсрәт мөслимә, юҡҡа һәләк булаһың! — тип йән асыуы менән ҡысҡырған бер тауыш ишетеп ҡалдым. Ҡотом осоп, ҡамсыны һелтәргә лә, һелтәмәҫкә лә ҡыймай, шаҡ ҡатып торам. Дөрләп янған ағастар миңә ауа, осҡондары өҫтөмә яуа башланы. Уларҙан янтайып ҡына ҡотолам. Шул саҡ, һуңғы ҡабат ҡамсымды һынап ҡарамаҡ булып, күҙемде йомоп алдым да тирә-яғыма һелтәнә башланым, теге изге ҡарттың әйткәненән дә күберәк һелтәнеп ташлағанмындыр, күрәһең: күк күкрәүе баҫылып, шау-шыу

һил булып ҡалғас, күҙем асып ҡараһам, йәнә теге һуҡмаҡҡа барып төшкәнмен икән; урман да оторо йәшәреп киткәндәй төҫлө ине, тик сыйнап торған тауыш ҡына тынмағайны. Бараһы юл инде күп ҡалмағас, күңелем урынына ултырып, ары киттем. Һуҡмағым мине тәрән бер ярлауға килтереп сығарҙы, уның төшөр яры үтә текә ине. Мин шулай, тирә-яҡҡа ҡаранғылап, һөҙәгерәк урын һайлап торған арала, ҡапыл ярлау аҫтынан бер имәнес ҡанатлы ғифрит атылып сыҡмаһынмы! Уның баш яғы януарҙыҡына оҡшап, үҙе ике алғы тәпәйҙәренә баҫып тора, ә артҡы һаны йылан һымаҡ һуҙылып төшкәйне, бөтә тәне тәңкә менән ҡапланған. Ул, һауаға ҡалҡынып, йән асыуы менән миңә ташланырға иткән мәлдә генә, мин тылсымлы ҡамсымды һелтәп ебәргәйнем, баш осомда ғына ҡыуыҡ һымаҡ шартлап, юҡ та булды. Бәхеткә күрә, был минең өҫкә сихырсы ебәргән һуңғы ҡурҡыныс булғандыр, күрәһең, шунда уҡ алдымдағы ярлау ҙа юҡҡа сыҡты, уның урынына үлән ҡаплаған туғай, туғай уртаһынан сылтырап аҡҡан шишмә генә ялтырап ята ине. Был хайран иткес хозур урын, әйтерһең, миңә ял итергә генә әҙерләнеп ҡуйылған. Мин, инде ҡамсымдың тылсым көсөнә тамам ышанғас, атымдан төшөп, ашарға ебәрҙем дә үҙем тынысҡына йоҡларға яттым.

## Ун бишенсе кис

Иртән иртүк торһам, атым эргәмдә генә утлап йөрөй ине. Шишмә һыуы менән йыуынып алғас, иртәнге намаҙҙан һуң, сихыр эйәһе торған тау ҡыуышына йүнәлдем. Тауыштың торған һайын сағыуыраҡ ишетелә барыуына ҡарағанда, тау ҡыуышы яҡында булырға тейеш ине. Мин инде урман араһынан сығып, текә тау егенә барып төкәлгән, сәскә менән сыбарланған туғай буйлап киттем. Тау типһененә яҡынайған һайын, ҡая аҫтынан ҡуйы төтөн күтәрелгәнен, ара-тирә ялҡыны ла бөркөлгәнен күрә барҙым. Ҡаяға табан илткән башҡа юлды күрмәгәс, был ут-төтөндө сихыр әмәленә һанап, ул-был була ҡалһа тип, ҡамсымды һелтәргә әҙер генә киләм. Яҡынлашҡан һайын, ялҡын да ҙурая барып, бөтә ҡаяны ялмап алғандай ине. Ялҡын теймәҫтәй аралыҡта туҡтап, килгән һуҡмағымдың ҡайҙа табан илткәнен байҡаһам, уның туп-тура ялҡын эсенә инеп киткәнен күрҙем; шулай итеп, шунда минең юлым да бөттө.

— Эй! — тип ҡысҡырып ебәрҙем мин бар көсөмә. — Күрәһең, һин мине һуңғы сихырың менән һыйламаҡсыһыңдыр? — тип, ҡамсымды һелтәп тә ебәрҙем. Ялҡын шундуҡ юҡ булды. Мин үҙем менән ҡая араһында ат һикереп сығырҙай ғына тәрән соҡор ҡалғанлығын күрҙем. Әгәр ҙә мәгәр арьяҡ ярҙа

тигеҙ урын булһа, был ғына араны атым һикереп тә сыға алыр ине, тик соҡор ҡаяның нәҡ аҫтынан булып, иҫенә-буйына әллә ни саҡлы ергә һуҙылып киткәс, һис кенәлә үтеп сығырҙай түгел ине. Ҡая менән соҡор тотош бер таштан торған һымаҡ, тимгел-тимгел ҡан төҫлө юлаҡтар йүгергән ҡара төҫтә булып, бер ниндәй ҙә тишек-еге күренмәй ине. Мин ҡайҙан, нисек итеп сығырға тип аптырап торғанда, ҡылт итеп башҡа, бынынһы ла минең юлымды кәртәләргә тырышҡан сихырсы хәйләһе түгелме икән, тигән уй килеп төштө. Шул мәлдә ҡолағыма:

— Туҡта! — тигән тауыш салынып ҡалды. Шунан йәнә: — Һиңә минән ни кәрәк? — тип ҡабатланы был тауыш.

— Хикмәт эйәһен күреп, һөйләшергә иткәйнем, — тинем мин.

— Ә һин тылсымлы ҡамсың менән уға ҡаршы һелтәнмәҫһеңме һуң? — тип төпсөнгәс:

— Юҡ, — тинем мин уға. Ә ул:

— Ант ит, — тигәс, минең:

— Ант итәм, — тиеүем булды, шунда уҡ таш диуар һелкенеп ҡуйҙы ла, күҙ алдымда ҙур бер ер тишеге пәйҙә булды. Унан тәүҙә ҡуйы төтөн, аҙаҡ ялҡын бөркөлөп сыҡты, тик был әллә ни оҙаҡҡа барманы. Быньң артынса уҡ үтә ныҡ ҡартайған бер әҙәмдең башы менән иңбаштары күренде. Уның йөҙ-сырайы ҡаҡ һөйәккә ҡалып, эйәк осонда бер-ике бөртөк ап-аҡ һаҡалы ғына тырпайып тора ине. Башына ул осло кәпәс кейеп, кәпәсен сәллә урынына ыҫылдашып торған йыландар уратып алған. Уның был ҡот осҡос ҡиәфәтенән минең бөтә тәнем эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ул мине күргәс тә:

— Минән һиңә ни кәрәк, сая мөслимә? Бер ниндәй хәүеф-хәтәрҙән дә ҡурҡмайынса, минең төйәгемә нисек килеп еттең былай? — тип һорай һалды.

— Изге ниәт менән йөрөгәндәр ҡурҡыуҙы белмәй ул, — тип яуап бирҙем мин.

— Ниндәй ниәт менән йөрөгәнең миңә мәғлүм, уныһына иҫем китмәй, тик бына юлыңда осраған минең эҙәрләүсем һиңә бик хәтәр ҡамсы биргән икән, — тине ул.

— Ул ҡамсыны мин бушҡа һелтәмәйем, ҡасан ҡулланырға беләм, — тинем уға ҡаршы. — Әгәр ҙә мәгәр һин минең һорауҙарыма яуап бирмәһәң, минән изгелек көтмә!

— Ә яуап бирһәм, ни ҡылырһың? Әйҙә, һорап ҡара, — тигәс, мин атымдан төштөм дә, уны иркенә ебәреп, соҡор ситенә килеп бер аҙ ултырғас та тегенән:

— Кем һин? Ҡайҙан булаһың? Был яҡтарға нишләп килеп сыҡтың? — тип һораша башланым. Ә ул миңә:

— Мин ҡасандыр үҙ ғилемдәре менән бөтә донъяны ҡаплап алған хикмәт эйәләренең береһе булам, —

тип һөйләп алып китте. — Тик мин был сихырсылыҡ оҫталығым менән бөтәһенән дә өҫтөн булып сыҡтым. Шуға күрә лә үҙ ғүмеремде ошо көнгәсә һуҙып киләм. Мин был ғүмер эсендә ҡояш сығып, байыуын ике мең мәртәбә күрҙем. Был һүҙҙәргә төшөнәһеңме, мөслимә? Һеҙҙең бәхетле урман халҡы, үҙенә эле һәләкәтле ғилем яҡтылығы килеп етмәгәнлектән, боҙоҡлоҡҡа бирелмәй, ябайлыҡта, ғәйеп-гонаһһыҙ көн күрә. Ғәфү ит, әйтһәм әйтәйем инде үҙеңә: мин, һеҙҙеңсә иҫәпләгәндә, йөҙ ҙә алтмыш ете мөсәл ғүмер йәшәнем. Бөтә был ваҡыт эсендә мин сихырсылыҡ серҙәренә өйрәнеп, ер менән дә, күк менән дә, ундағы бөтә йән эйәһе менән дә ни теләһәм, шуны эшләй алырлыҡ хәлгә еттем, быны һин үҙ күҙҙәрең менән күрҙең. Әммә ахыры һәләкәт менән барып бөтөр был теләк, донъяға һеҙҙе яратҡан Хоҙай, ҡөҙрәтенә тиң булғанлыҡтан, мине бөтә ғүмерем буйы ыҙалай, бөтә ғүмерем ахырына саҡлы иге-сиге күренмәҫ ғазап әҙерләй. Үҙемдең тылсым ҡөҙрәтем менән мин халыҡтарҙы йә күтәрҙем, йә төшөрҙөм; әллә күпме ҡалалар төҙөп, уларҙың кешеләрен, байлығын арттырып, һуңынан фәҡирлеккә дусар иттем. Әммә мин дә ҡаршы тора алмаҫтай, минән дә өҫтөн сығыр бер көс бар донъяла.

Был һалҡын илдәргә мин сасҡау-һалҡындарҙың ни икәнен дә белмәгән иң әҫе яҡ ерҙәрҙән — Һиндостандан килеп сыҡтым. Үҙем мин бик ҙур бер ҡалала йәшәнем. Минең ғилемемде белергә тип күп шәкерттәр йыйылды, әммә мин уларҙың береһенә лә үҙем белгән ғилемдең бөтә серҙәрен асып бирергә теләмәгәнлектән, улар минән йә ярты ғилем эйәһе, йә, дөрөҫөрәге, — томана булып киттеләр. Ахырҙа мин торған төйәгемде алмаштырып ҡарамаҡсы булдым. Үҙемә буйһонған рухтар ярҙамында күккә күтәрелеп, үҙемде төньяҡҡа ҡарай илтергә ҡуштым. Бейектән Ер йөҙөн күҙәтеп, был яҡтарҙа мин ҙур-ҙур йылғаларҙы күрҙем, шуларҙың өсөһөнән иң уңайлыһы тип Иҙел буйын һайланым. Уның буйында үтеп сыҡҡыһыҙ урмандар, иңләп бөткөһөҙ далалар йәйелеп ята ине. Шуның өҫтөнә, халҡы ла аҙ булып, уныһы ла ҡырағай хәлдә тип әйтерлек булғас, мин үҙемә ошо Иҙел ярынан урын һайланым. Үҙемдең тылсым ҡөҙрәтем менән алыҫ ерҙәрҙән халыҡтарҙы йыйып килтергәс, олуғ бер ҡала һалдырып, уны үҙ исемем менән Брахим тип атаным. Халыҡ өҫтөнән унда бер хаким ҡуйып, һеҙҙеңсә батыр тип йөрөтөлгән яугир ирҙәрҙе һайлап алдым. Һеҙҙең батырҙар мал-тыуарығыҙға баҫышҡан йыртҡыстарға ғына ҡаршы сыға, ә минең яугирҙарым үҙем төҙөткән ҡаланы емерергә теләгән яугирҙарҙы юҡ итергә өйрәнгәйнеләр. Берәүҙәрен сауҙагәр булырға ҡушып, ҡоро ер юлдары менән дә, һыу юлдары менән дә сит

ерҙәргә барып, үҙ ерҙәренә уларҙан төрлө-төрлө затлы туҡымалар, ҡорал-ҡорамалдар алып ҡайтырға мәжбүр иттем. Быңдай яман кәсепте һеҙҙең хуш күңелле урман халҡы белмәй ҙә эле. Өҫтөгөҙгә кейгән ябай кейемегеҙ ҙә үҙегеҙгә яраған, беҙҙең затлы кейемдәрҙе күрмәгәс, бөтә донъя һеҙгә бер төрлө кейенгән шикелле. Әммә ләкин килер бер заман, һеҙҙең дә нәфсегеҙ аҙып, шул уҡ аҙғынлыҡҡа бирелерһегеҙ. Быны мин көндәй асыҡ күреп торам, әгәр быйың нилектән шулай булырын белгең килһә, һуңынан аңлатып бирермен. Ә хәҙергә мин һинең, бында ни өсөн килдең, тигән һорауыңа ғына яуап биреп китәйем. Ҡыҙыҡ күрһәң, тыңла хикәйәтемде.

Минең ҡалам шулай бөтә нәмәгә лә бик бай ине. Уның тирәһендә йәшәгән халыҡтар уға яһаҡ түләр булып киттеләр. Ә яһаҡ түләргә теләмәгәндәренә минең тарафтан ҡуйылған хаким, һеҙҙеңсә инде ул баш тип атала, күп кешеләре менән барып, ҡаршылашҡандарын туҡмап-яҙалап булһа ла түләтер, ҡалғандарын үҙенә буйһондорор ине. Шулай итеп, уға ҡаршы торор кеше лә булманы, сөнки минең сихыр көсөм һәр саҡ уға таяныс булды. Шулай байтаҡ замандар минең ҡалам аман ғына йәшәй бирҙе, әммә, бәхетһеҙлеккә ҡаршы, бер көн килеп уның ҡолатылырын мин алдан уҡ белеп тора инем. Үҙ ғилемем менән ни ҡыла алам, шуның бөтәһен дә файҙаланып, ҡулдан килгән тиклем үҙ сихырым менән мин был аяныс хәлгә ҡаршы төшөп килдем. Алыҫ төньяҡ илдәренән килеп сыҡҡан аҡ бей ҡулы аҫтындағы аҡ яугирҙар болото, төрлө сихыр көстәрен еңеп сығыр бер һүрәт төшөрөлгән тыу күтәреп, минең ҡалама ла, илемә лә баҫып инергә әҙер тора ине инде. Шул мәл мин быларға ҡаршы үҙемдең тылсым көсөм менән һаҡланған ғәскәрҙәремде ебәреп, ерҙә лә, күктә лә, һыуҙа ла ғәрәсәт ҡуптарып, бөтә ғифриттәрҙе йәһәннәмдәренән ҡуҙғытып сығарҙым да дошмандарыма ҡаршы яуға ташланғайным, тыуға төшөрөлгән теге һүрәтте күреү менән былар, пыран-заран килеп, юҡҡа сыҡты. Ай, ҡыҙым, был һүрәт хаҡында һорашаһы булып ауыҙыңды ла аса күрмә, юҡһа икебеҙ ҙә харап булырбыҙ.

Мин, был һүҙҙәрҙән шомланып, уның ары һөйләүен үтендем.

— Беҙҙең ғәскәрҙәр шулай кире ҡасып килеп етһәләр ҙә, әле әйтеп киткәнемсә, минең инде тылсым көсөм бөткәйне. Халыҡты эйәртеп, хаким үҙе килеп минән ярҙам һорағас, мин уға, ярҙам итеремә ышандырып, ҡалала ныҡынырға ҡуштым. Яугирҙарға көнөн дә, төнөн дә һаҡта торорға кәңәш итеп, дошманды еңеп сығасаҡһығыҙ, тип ышандырҙым. Ә үҙем, көсһөҙлөгөмдө халыҡ белеп ҡала күрмәһен тип, ҡаланан һиҙҙермәй генә сығып китеү яйын ҡараным. Икенсе төндө

үк шулай иттем дә: әруахтарыма үҙемде алыҫыраҡ берәй бейек ергә илтеп ҡуйырға ҡуштым. Үҙемдең яратҡан ҡаламдың бәхетһеҙ ахырғы мәлен күреп торайым, ҡулымдан килгән тиклем, тылсым көсөм менән ярҙам итәйем, тигән уй менән эшләнем быны.

## Ун алтынсы кис

Был хәсрәтле көндөң таңында уҡ мин яҡынлашып килгән аҡ ғәскәр яуын, уның ҡала эргәһенә теҙелешеп килеп торғанын да, ҡала эсендә ҡурҡыуҙан ығы-зығы килеп йүгерешеп йөрөгәндәрен дә күреп торҙом. Шулай ҙа үҙем һайлап ҡуйған хаким Орҡан (уның исемен әле генә телгә алам), бер ниндәй ҡурҡыу белмәй, ҡала диуарҙары буйында торған һаҡсыларын икеләтә арттырып, иң яҡшы йәйәүле яугирҙарын да, атлыларын да һайлап алды ла, ҡапҡаларҙы асырға ҡушып, дошмандарының яуын кире ҡайтарырға үҙе ҡаршы сыҡты. Мин уның һәләк булырын белһәм дә, үлһә лә үс алып үлер тип, уға көс-ғәйрәт биреп торҙом. Ул шулай йәйәүле ғәскәрҙәрен сығарып, оҙон һөңгөләр, киң ҡалҡандар менән ҡоралланған көйө, уларҙы уртаға теҙҙе, ә һыбайлыларын ике яҡ ҡанатҡа ҡуйҙы. Үҙе атылыр һөңгө лә ҡылыс менән ҡоралланған һайланмыш һыбайлыларын алғасҡыға алып сыҡты. Аҡ яугирҙар уларҙы кире ҡағырға әҙер тора ине инде. Ҡояш төҫлө ялтыраған ҡалҡандарын күреп кенә лә минең ҡотом осто. Ҡылыстарын ҡалҡандарына һуҡҡанда, күк күкрәгән төҫлө тауыш сыға ине, ә ғәскәр уртаһында күренгән тыуҙары, минең Орҡанға ярҙамға тип ебәргән бөтә сихырымды кире ҡағып, унда тик үҙ батырлығы менән үҙ көсөн генә торғоҙоп ҡалдырҙы. Ике яҡ та уҡ атышыр араға килеп еткәс, ике яҡтан да уҡтар ямғыр кеүек яуырға кереште, шулай ҙа сая Орҡан, алыҫтан алышырға теләмәй, үҙ тирәһендәге яугирҙары менән аҡ яугирҙарҙың алғасҡы рәтенә бәреп инде. Тәүге осраған яугирҙы һеңдерә һуҡты ла ярһыу менән ғәскәр уртаһына уҡ инеп китте. Үҙенә ҡаршы килгәндең бөтәһен дә ҡырып бара. Уның батырлығынан ғәйрәт алып, ҡалған һуғышсылары ла аҡ яугирҙарға арыҫлан һымаҡ ташланды, былар хатта тегеләрҙе ҡыйратып ташлар һымаҡ ине лә, тегеләр ҙә таш диуарҙай ҡаршы торҙолар, ҡалҡандарына ышыҡланып, ҡылыстары менән торарға тотондолар. Орҡан йән асыуы менән алғасҡы ғәскәрҙәрҙе ҡыҫмаҡлап, һаман эскә инә бара, уларҙы турап һала, яугирҙары ла батырлыҡта ҡалышмай һуғыша ине. Аҡ яугирҙарҙың һул ҡанаты был ҡыҫымға түҙә алмай, сигенеү генә түгел, Орҡандың алдынан янтайып ҡаса ла башлағайны, тик көмөш кейем менән алтын торҡа кейгән яугир етәкселегендәге уң ҡанат беҙҙең һул ҡанатҡа шундай

ҡаты итеп килтереп һуҡты, тәүге һелтәүҙә үк ҡыра һалып, сафтарҙы боҙҙо ла беҙҙекеләрҙе, ҡуй-һарыҡтай әйҙәп, ҡалаға ҡыҫмаҡлап алып китте. Көмөш кейем кейгән һыбайлының ҡылысынан беҙҙең яугирҙарҙың сәсрәп осҡан баштарын күреп, минең сәстәрем үрә торҙо, ҡайһыларын ул уртаға сабып өҙә, ҡайһыларын аты-ние менән ҡолата һуға ине. Бер һүҙ менән генә әйткәндә, ҡаланан сыҡҡан ярты ғәскәрҙе ул бер үҙе ҡырып кире илтеп тыҡты.

Күҙенә аҡ-ҡара күренмәгән Орҡан ярты ғәскәренең юҡлығын да күрмәй, ҡасып барғандар артынан ҡыуа китеп, ҡала ҡурҡыныс хәлдә икәнлеген сапҡын килеп әйткәс кенә иҫенә төшөрҙө лә, тештәрен шыҡырлатып ҡыҫып, күҙенә салынған үҙ яугирҙарын да, дошмандарын да аямай аты менән тапатып, кире сапты. Ҡалаға яҡынайғас, диуарҙарға үрмәләгән аҡ яугирҙарҙы күреп, үҙенекеләрҙең юҡлығына асырғанып, бер үҙе бер яуға ҡаршы ташланды. Шул саҡ был теге мин һиңә әйткән аҡ кенәздең сабып килгәнен күреп ҡалды. Былар бер-береһенә һөңгөләре менән килеп бәрелгәндә, шундай ҡаты сәкәшеүҙән икеһенең дә һөңгөләре һынып төштө, шулай ҙа ике һыбайлы ла аттарында, төп һымаҡ, ҡымшанмай ҙа ултыра ине. Шул саҡ уларҙың ҡулдарында сың да сың килеп ҡылыстары ғына ялтырай башланы. Орҡан, ҡоторған юлбарыҫ һымаҡ, үҙ-үҙен аямай, ярһыуҙан тегеһенең үлтерә сабыр ерен генә эҙләй, ә аҡ кенәз һуғыуҙан бигерәк, һаҡланырға тырышып, дошманын хәлдән тайҙырырға мәкер ҡора ине булһа кәрәк. Быны һиҙеп ҡалған Орҡан ҡалҡанын алып быраҡтырҙы ла, ҡылысын ике ҡулы менән услап, бар көсөнә аҡ бейҙең торҡаһына тондорҙо. Тик тегенеһе ҡалҡаны менән ҡапланып өлгөрҙө; ҡалҡан Орҡандың шул тиклем ғәйрәтләнеп сабыуынан селпәрәмә килеп ергә ҡойолдо, торҡаһына һуғылған ҡылыстың һәлмәклегенән аҡ бей сайҡалып китте. Ул үҙенең ҡалҡанынан яҙып ҡалғас, ярһыуынан, Орҡанды аяп-нитеп тормай, асыҡтан-асыҡ һөжүмгә күсте. Шул мәл, ике аралағы алышҡа иҫтәре китеп, еңеүселәр ҙә, еңелеүселәр ҙә, һуғышыуҙарын онотоп, ҡарап шаҡ ҡатҡайнылар. Аҡ кенәздең көмөш кейеме ныҡ булһа, Орҡандың кейеме лә уныҡынан ҡалышмай, саф ҡоростан ғына ҡойолған, ә башындағы торҡаһы ҡанатлы йылан рәүешендә ине. Был кейемде, тылсым көсө ҡушып, мин үҙем эшләгәйнем, шулай ҙа аҡ кенәздең ҡылысы уны күп урындан телгеләп бөткәйне инде. Орҡандың ҡылысы ла дошманының көмөш кейемен аҙ телгеләмәгән, көмөш кейем өҫтөнә ҡан һарҡып сыҡҡаны ла күренеп тора ине. Ҡанын күреп, аҡ батыр сығырынан сығып, шундай ғәйрәт менән Орҡандың торҡаһына килтереп сапты. Тылсымлы торҡа ҡап уртаға ярылып, Орҡан

иҫен юғалтып, атынан ҡолағас, аҡ ғәскәр яғында шатланып ҡысҡырған тауыштар яңғыраны, ә ҡала яғындағыларҙың, ҡобараһы осоп, йөҙҙәре ағарып китте. Аҡ яугирҙар шунда уҡ ерҙә ятҡан Орҡанды һырып алғайнылар, аҡ кенәз атынан төшә һалды ла, ҡылысы менән уларҙан батырҙы аралап алып, эргәһенә килде, сағыу тауышы менән:

— Һин еңелдең, Орҡан батыр, һинең ҡалаң инде минең хөкөмөмдә, шулай ҙа мин һинең батырлығыңды ололап, дуҫ булыуыңды, минең яҡлы булыуыңды теләйем, минең динемде ҡабул ит! — тигәс, һуңғы һүҙҙәрҙе ишетеп, Орҡан ҡотороноп килеп торҙо ла, ҡулында ҡылысы юҡлыҡтан, биленән хәнйәрен һурып алып, йән асыуы менән:

— Мә, һин ҡабул ит минекен! — тип, тегенең кейем ярыҡтары араһына килтереп тә ҡаҙаны. Ниндәйҙер күҙгә күренмәгән көс кенә был һәләкәтле ҡаҙауҙы йомшарта төштө. Шулай ҙа кенәз, йәрәхәтен тойоп, бер аҙ артҡа тайшанып, бер һелтәүҙә Орҡандың яланғас башын өҙә сапты. Орҡан ергә ауыу менән, минең дә бөтә өмөтөм селпәрәмә килде. Аҡ ғәскәрҙең башлыҡтары, үҙ кенәздәрен һырып алып, күп урындан йәрәхәтләнгәнен күргәс, уға ярҙам итергә итһәләр ҙә, кенәз ҡылысы менән ҡалаға күрһәтеп:

— Иң элек ҡаланы алығыҙ, ә минең яраларым хәүефле түгел, — тип әмер бирҙе, һуңынан аҡһаҡалдарынан береһен саҡырып алып, уға: — Ҡаршылашҡандарын юҡ итегеҙ, ә бисәләре менән бала-сағаларына теймәгеҙ, — тине.

Шунан һуң ғәскәрҙәр ҡабаланып ҡалаға ҡарай йүнәлделәр. Ҡаланың ҡапҡалары ҡурҡыштарынан ҡасып килгән яугирҙарға асып ҡуйылғанлыҡтан, еңеүселәр ҙә еңелгәндәр менән бергә килеп инделәр. Шунда мин һуңғы үсемде алмаҡ булып, ҡала халҡына асыу өрөп, ирҙәргә генә түгел, ҡыҙҡырҡынға ла ныҡ ҡаршы торорға ҡуштым. Улар шулай иттеләр ҙә. Ҡала халҡын аяп маташҡан күп еңеүселәр үҙҙәре үк һәләк булдылар. Ҡала тышынан был хәлде күреп торған кенәз яугирҙарына ҡаланы талау, ҡырыу менән генә тороп ҡалмай, уны бөтөнләй яндырырға ирек ҡуйҙы...

**?** **1.** «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» һәм «Зөһрә менән Алдар» әҫәрҙәре араһында ниндәй уртаҡ яҡтар бар? **2.** «Зөһрә менән Алдар»-ҙың төҙөлөшө, сюжеты хаҡында ниҙәр әйтә алаһығыҙ? **3.** Аллабирҙе батыр ни өсөн ил ҡыҙырып сәйәхәткә сығып китә? Уның Зөһрә менән осрашыуы ни рәүешлерәк була? **4.** Зөһрә ниндәйерәк ҡыҙ була? Үҙе хаҡында һөйләгәндәренән сығып, уға характеристика бирегеҙ. **5.** Әҫәрҙәге дини мотивтар хаҡында һөйләгеҙ. Әүлиә ниндәй образ ул? **6.** Был ҡиссала экиәт ҡаһармандары менән ниндәй уртаҡ яҡтар һәм айырмалар бар? Ундағы халыҡсан тел, хикәйәләү стиле хаҡында үҙегеҙ белгәнсә аңлатығыҙ.

## БАҺАУИ

## БУҘЙЕГЕТ

*(өҙөктәр )*

Ҡарасәс һылыу бер шаһзадәнең ҡыҙы ине. Бик матур ине. Ун биш йәшендә Буҙйегетте төшөндә күрҙе, ғашиҡ булды, көндән-көнгә йөҙө һулыны. Икенсе йыл тағы Буҙйегетте төшөндә күрҙе. Ҡыҙ егетте итәгенән тотоп яуап һораны:

— Төндә илап, көндөҙ зар,
Мин йөҙөңә интизар;
Ни сәбәптән булдың йәр,
Мине былдай ҡылып зар?
Аслың әйтһәң кәрәкте.
Бер йыл булды, янармын,
Үткән көндө һанармын...
Атың әйтһәң кәрәкте.

Буҙйегет:

— Сабыр ҡылмай эш бөтмәҫ,
Миҙгелһеҙ арызың[1] етмәҫ,
Зарлау мән[2] ҡайғың китмәҫ.
Сабыр ҡылһаң кәрәкте...
Ағарып йөр йөҙөктәй,
Зөләйха мән Йософтай
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.
Булды ғишыҡ ҡайғылай,
Күркең йортҡа йәйелде.
Ләйлә берлә Мәжнүндәй
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.

Ҡыҙ:

— Беҙ — даръяның гәүһәре,
Беҙ булырбыҙ йәүһәре.
Алтын-көмөш ҡулға алып,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың.
Беҙ — алтындан тирәкбеҙ,
Эҙләгәнгә кәрәкбеҙ.
Юлдаштарың янға алып,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың...

Буҙйегет үҙе лә төштә
ҡыҙҙы күрҙе...
Төшөндә был ҡыҙ йырлап
ғәйеп булды,
Егеттең күкрәгенә ҡайғы тулды.
Бар ине бер дуҫы йәндән артыҡ,
Таң иртән барып уға ғарыз[3] ҡылды:

— Бер хуп һүрәт күрҙем мин,
Хайран булып йөрөнөм мин,
Мәслихәтле йән дуҫым,
Ғаҡыл тапмай йөрөнөм мин!
Ҡайғы төштө башыма,
Ғаҡыл тапмай булдым зар,
Мәғҡул[4] күрһәң, йән дуҫым,
Уны эҙләр уйым бар...

Буҙйегет шулай дуҫ егете менән бергәләп төштә күргән ҡыҙҙы эҙләп сығып китәләр. Бик күп ерҙәр үтәләр, даръялар кисәләр. Бер мәймүн ҡалаһында уларҙы мәймүндәр тотоп зинданға ябалар. Зинданда өс йыл яткас, нисектер бер хәйләһен, яйын табып, ҡасып китәләр. Алда

---

[1] *Арыз* — теләк.
[2] *Мән* — менән.
[3] *Ғарыз* — белдереү.
[4] *Мәғҡул* — лайыҡлы.

тағы бер ҡалаға етәләр. Был эҙләгән ҡыҙҙары йәшәгән ҡала икән. Эҙләгәндәре хан ҡыҙы, ти. Ҡыҙҙы барып табалар, күрешәләр. Шул саҡ Буҙйегет ҡыҙға әйтә:

— Дүрт йыл булды юлымда,
Хайран булып йөрөп мин,
Даръя кисеп, тау үтеп,
Күрмәгәнде күрҙем мин.
Табандарым уйылып,
Ҡулым тирем һуйылып,
Дәүләт бағым юйылып,
Зар сәргәрдан[1] булдым мин.
Атамды мин күрмәнем,
Әсәмде мин күрмәнем,
Өйҙә ғүмер һөрмәнем,
Бер һин өсөн йөр(ө)нөм мин.
Һине эҙләп йөр(ө)гәнмен,
Буйың төштә күргәнмен,
Йәнем ҡорбан ҡылғанмын,
Рәхим итһәң кәрәкте...
Атым минең — Буҙйегет,
Ҡашымда бар дуҫ егет,
Бер ҡайғылы ҡуш егет,
Рәхмәт әйтһәң кәрәкте.
Сын хәҡиҡәт йәр булһаң,
Өйгә инһәм кәрәкте.
Йәнем һөйгән яныйым,
Йөҙөң күрһәм кәрәкте.

Ҡыҙ үҙе лә, ҡыҙҙың әхирәттәре, хеҙмәтсе ҡыҙҙары ла Буҙйегеттең килеп тапҡанына шатланышып, ҡыҙ менән егетте маҡтап, яр-яр маҡтау йырын йырлайҙар:

— Берең — тутый, берең — былбыл,
йәр булып һеҙ, яр-яр,
Берең — алтын, берең — көмөш,
түш булып һеҙ, яр-яр,
Берең — гөл, берең — йофар, хуш
булып һеҙ, яр-яр,
Берең — айҙыр, берең — көндөр,
ҡай(ы)рылмағыҙ, яр-яр,
Заман ахыр булғансы,
ай(ы)рылмағыҙ, яр-яр.
Берең — гәүһәр, берең — яҡут,
ярашыптыр, яр-яр,
Берең — тутый, берең — былбыл,
һайрашыптыр, яр-яр.
Берең — хур ҡыҙ, берең —
нур егет, бер тороғоҙ, яр-яр,
Заман ахыр булғансы,
бер йөрөгөҙ, яр-яр...
Терек донъя ярашыр
күп мал менән, яр-яр,
Маллыға көн ярашыр
һөйгән йәр мән, яр-яр,
Малы юҡтың йәне юҡ,
түшәге юҡ, яр-яр,
Йәре юҡтың йәне юҡ,
түшәге юҡ, яр-яр,
Яр-яр итмәк боронғо
өлгөбөҙ бар, яр-яр,
Терелектә бер аҙ көн
көлкөбөҙ бар, яр-яр.
Яр-яр әйтте
ҡырҡ ҡыҙ, уйнап-көлөп,
Ҡолаҡ һалды хан көнөгө[2],
тыштан тороп.
Ҡыҙҙарҙың был уйынын
ишеткән һуң,
Йүнәлде ханға табан, хәбәр алып...
— Тәҡсир хан, ҡыҙығыҙға
барып килдем,
Бер шомлоҡ бар икән,
тыңлап белдем.

[1] *Сәргәрдан* — аптырап, алйып йөрөүсе.
[2] *Хан көнөгө* — хан хеҙмәтсеһе, ҡоло.

Ҡырҡ ҡыҙ яр-яр әйтеп ятыр икән,
Ишеткән яманлыҡты әйтә килдем.
Был яр-ярын ишетеп өйгә керҙем,
Туйҙарын, ҡылған эшен
ҡарап торҙом.
Күп ҡыҙҙар бер туй ҡылып
йөрөр икән,
Ике егет эсендә — шуны күрҙем.
Ишетеп, хан ҡылысын
ҡулына алды,
Иленә асыуланып хәбәр һалды.
Күшәлә күп
һалдаттар йыйылышып,
Хан ҡыҙының таш өйөн
ҡамап алды.

Буҙйегет менән дуҫ егет хан һалдаттарынан саҡ ҡасып ҡотолалар, бер тауға йәшеренәләр.

Атаһы ҡыҙына бик ныҡ асыулана: «Әллә ниндәй берәҙәккә айшанлағанһың, һин фәкәт хан улына кейәүгә сығырға тейешһең», — ти. Ҡыҙы ошо яратҡан Буҙйегеттән башҡа бер ниндәй кейәүгә бармайым тип ныҡышҡас, хан мәкерлек менән ризалыҡ бирә. Хан риза, тип Буҙйегетте дуҫы менән туйға алып килеп, Буҙйегетте иҫертеп, ағыулап үлтермәксе булалар. Туйҙа Буҙйегет хандың был мәкерле уйынан ҡасып ҡотола. Ләкин уны юлда хан ғәскәре ҡыуып, ханға килтереп, майҙанда язалап үлтерәләр.

Хан үҙ ҡыҙын күрше хандың Зәйтүн исемле улына бирергә теләй. Быға ҡаршы ҡыҙы былай ти:

— Тимер алтын булмаҫ, ти,
Баҡыр көмөш булмаҫ, ти;
Иркем бар, тип эш ҡылма,
Ҡыҙың телен алмаҫ[1], ти.
Кейәү ҡылған Зәйтүнең,
Һыртын алтын ҡылһаң да,
Эсен гәүһәр ҡылһаң да,
Үҙ йәремдәй булмаҫ ул.

Алтынға йөнөн буяһаң,
Ҡарға шоңҡар булырмы?
Ҡанатына ҡан яҡһаң,
Шоңҡар ҡарға булырмы?
Яҡшы күргән кешеңде
Нурға ҡушып килтерһәң,
Тамам йортҡа белдерһәң,
Үҙ йәремдәй булырмы?
Кейәү һуйып туй ҡылдың,
Ҡыҙың телен алырмы?
Буҙйегеттең һөйәген
Мең Зәйтүнгә бирмәҫмен.
Үлгән йәрем мулаһын[2]
Алтынлы өйгә бирмәҫмен.
Ундай йәрҙе тапһаң да,
Һис тә ҡабул күрмәҫмен.
Аҡылы юҡ атамдың
Ҡылған эшен ҡайтайып?
Үлгән йәрем күрмәһәм,
Тере йөрөп нитәйеп?

Ҡыҙ шулай атаһына, әсәһенә бик ныҡ үпкәләп йыр менән үҙ һүҙҙәрен әйтә лә, Буҙйегеттең ҡәбере янына барып, хәнйәр менән үҙен үлтерә. Ике йәш ғашиҡтың ғүмере шулай фажиғә менән тамамлана.

---

[1] *Телен алмаҫ* — элекке һүҙенән ҡайтмаҫ.

[2] *Мула* — ҡәбер.

Хан үкенеп ҡарай ҙа бит, һуң була: егетте лә язалап үлтерҙе, ҡыҙы ла һәләк булды.

Ә хан ғәскәренән саҡ ҡасып ҡотолған егет Буҙйегеттең язалап үлтерелеү ауыр хәбәрен ата-әсәләренә ҡайтып нисек әйтергә белмәй аптырай. Был ауыр хәбәрҙе хандың йырсыһы аша йыр менән еткерергә булалар.

Йырсы ханға ҡарап йырлай:

— Күпте күргән ҡарыйың мин,
Бер аҙ йырҙы йырлайым.
Асмандағы турғайҙай,
Алдығыҙҙа ширләйем[1].
Өй эсендә ултырған,
Ҡолаҡ һалың, яҡшылар.
Был ялғандан файҙа юҡ,
Тәҡүә булың, яҡшылар,
Ҡарыйығыҙ һүҙенән
Ғибрәт алың, яҡшылар.

Ҡарыларҙың иҫке һүҙ —
Иҫкә алмай йөр(ө)мәгеҙ.
Ғалимдарҙың күҙле һүҙ —
Күңелгә алмай йөр(ө)мәгеҙ…

Дәртебеҙгә дарман юҡ,
Ҡайғыһыҙға арман юҡ.
Дәрткә файҙа булмаһа,
Яратҡанда фарман юҡ.

Елгән аттан ер ҡалыр,
Тапҡан ирҙән мал ҡалыр.
Ир башына көн тыуһа,
Һөйгән йәрҙән ул ҡалыр.
Батшаларҙан таҒ[2] ҡалыр,
Мәргәндәрҙән яҡ[3] ҡалыр.

Ир башына көн тыуһа,
Донъяның бары юҡ ҡалыр.
Ғалимдарҙан хат ҡалыр,
Остаздарҙан яд[4] ҡалыр.
Тимерсенән дат[5] ҡалыр,
Йөр(ө)гән ерҙә юл ҡалыр.
Уйлап торһаң, яҡшылар,
Был ялғандан кем ҡалыр?

Күргән ерҙә шул ҡалыр:
Ҡалғандарға улъя өсөн,
Байҙарынан пол[6] ҡалыр;
Ҡатын булһа, тол ҡалыр;
Тапҡан ирҙән мал ҡалыр,
Алтын, көмөш пол ҡалыр, —
Эттәй сыулап, талашып,
Кем күренгән, шул алыр;
Өйөң булһа, буш ҡалыр,
Уйнап йөр(ө)гән дуҫ ҡалыр…
Батша мин, тип уйлаһаң,
Искәндәр[7] мән Сөләймән[8] —
Улар ҙа үткән донъянан;
Балам күп, тип уйлаһаң,
Йөҙ ҡырҡ бала атаһы —
Әҙәм үткән донъянан;
Малым бар, тип уйлаһаң,
Малы һеҙҙән күп сығыр
Ҡарун үткән донъянан;

Көсөм бар, тип уйлаһаң,
Ҡаһарман мән ул Ғәли[9] —
Улар ҙа үткән донъянан;

---

[1] *Ширләйем* — ҡайғылы йыр йырлайым.
[2] *ТаҒ* — таж, тәхет.
[3] *Яҡ* — ян.
[4] *Яд* — иҫтәлек.
[5] *Дат* — турылыҡ, ғәҙеллек.
[6] *Пол* — аҡса, мал.
[7] *Искәндәр* — Александр Македонский.
[8] *Сөләймән* — пәйғәмбәр.
[9] *Ҡаһарман, Ғәли* — легендар батырҙар.

Сәсән мин, тип уйлаһаң,
Нисә-нисә сәсәндәр
Һөйләп үткән донъянан.
Нисә-нисә түрәләр,
Нисә-нисә яҡшылар
Илап үткән донъянан.

Хан алдында ҡары
Ахун йыр йырлайҙы,
Һүҙенең төбөн ханға борҙо инде.
Йырлаусы был ергә килгәнендә,
Хан бер тороп, урынына
бер ултырҙы.

— Ахуным, яҡшы икән
йырың һинең —
Үлем әйтеп сығалыр кәрең[1]
һинең.
Йырыңдың өнө буйы үлем икән,
Беҙгә ҡарай тейәлер кәрең
һинең.

— Тәҡсир хан, үлемде әйтмәй
ни әйтәйем,
Был ерҙә әжәл етһә,
мин ҡайтәйен?
Әҙәмдең ахыр һуңы — үлем,
тигән.
Ысын әйтһәм, уны әйтмәй
ни әйтәйен?..

Ер йөҙөнә килгәндәр,
Мин-мин, тиеп йөргәндәр,
Мең йәш ғүмер һөргәндәр —
Бары ла үткән донъянан.

Хан да үткән донъянан,
Ҡары ла үткән донъянан,
Бай ҙа үткән донъянан,
Ярлы ла үткән донъянан,
Күп тә үткән донъянан,
Аҙ ҙа үткән донъянан —
Яман-яҡшыны айырмай,
Бары ла үткән донъянан...

Ҡары Ахун был ергә
килде, тине,
Хан шомлоҡтоң булғанын
белде, (тине).
Терелектең һуңында —
бары үлем,
Алла әмеренә хан муйын
һондо, тине.

Әйтеп йырын, был Ахун
тура килде,
Һүҙең төбөн ханға бора килде.
Яҡынлатып йырын бороп инде,
Бер һүҙ инде әйтеүгә тура килде.

Автор:

Иртәнге көн ваҡытында
Ҡәләм алдым ҡулыма.
Был һүҙҙәрҙе яҙғаныма
Тәңрем һалды уйыма:
Моңло ғибрәт алһын тип,
Үлһәм, һүҙем ҡалһын тип,
Һүҙем уҡыған әҙәмдәр
Беҙгә фәтә[2] бирһен тип.

Дәлиле юҡ бер китап
Ғибрәт өсөн яҙылды.
Моңло әҙәм ишетһә,
Ҡайғылы күңеле баҫылды...

---

[1] *Кәр* — көс, ҡеүәт.
[2] *Фәтә* — фатиха.

? **1.** «Буҙйегет» дастанын ролдәргә бүлеп уҡығыҙ. **2.** Ҡарасәс менән Буҙйегеттең мөхәббәте, Буҙйегеттең Ҡарасәсте эҙләп табыуы тураһында һөйләгеҙ. Буҙйегеттең ҡыҙға әйткәнен әҫәрҙән уҡып күрһәтегеҙ. **3.** Саф мөхәббәткә дан йыры — яр-яр маҡтау йырын тасуири уҡығыҙ, күмәкләп йырлап та ҡарағыҙ. Оло мөхәббәткә тоғролоҡ ниндәй картиналарҙа тасуирланыуын билдәләгеҙ. **4.** Әҫәрҙең фажиғәле йөкмәткеһе нилектән, ниндәй социаль шарттарҙан килә тип уйлайһығыҙ? **5.** Ни өсөн «Буҙйегет»тең сюжеты трагик тамамлана? **6.** Дастанда дуҫлыҡ, иптәшлек идеяһының бирелешен аңлатып үтегеҙ. **7.** «Буҙйегет» дастан-поэмаһының художество үҙенсәлектәре, күркәм теле өҫтөндә күҙәтеүҙәр үткәрегеҙ.



# Мифтахетдин Аҡмулла
(1831 – 1895)

## БАШҠОРТТАРЫМ, УҠЫУ КӘРӘК!

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк,
уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп,
уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан
Уралдағы ҡурҡҡандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан
ҡурҡыу кәрәк.

Илтифат ит: уҡыуҙалыр
шәрәфәттәр[1],
Яһиллыҡтан[2] килә ятыр ҙур
афәттәр[3].
Уҡығандар күктә осор,
һыуҙа йөҙөр,
Юҡтыр унда әүлиәлек,
кирамәттәр[4].
Уҡығанға был донъяла
жәләл[5] булыр,
Харам тигән күп шәйҙәр
хәләл булыр.
Ырыҫ, дәүләт шишмәһен
асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр берҙән-бер
әмәл булыр.
Алтыға берҙе ҡушып,
һан ун булмай,
Сәғәтте алға бороп,
төн көн булмай.
Белемлелек — арыҫландан
көслө батыр,
Шуға атланмай, һинең төшөң
һис өн булмай.

---

[1] *Шәрәфәт* — хөрмәт, почёт.
[2] *Яһиллыҡ* — аңһыҙлыҡ, наҙанлыҡ.
[3] *Афәт* — бәлә-ҡаза, бәхетһеҙлек.
[4] *Кирамәт* — кәрәмәт, мөғжизә.
[5] *Жәләл* — яҡты, нур, йәм.

## ШИҺАБЕТДИН МӘРЖӘНИ МӘРСИӘҺЕ*

Ҡараңғыла фонарҙы ҡабыҙған ул,
Ҡайнар һөткә һары майҙы
тамыҙған ул.
Сәләмәтлек шишмәһенән
юлдар асып,
Хәҡиҡәт йылғаларын ағыҙған ул.

Һүҙ ҡуҙғатыр ул, аҫыл ир,
кәрәк ерҙән,
Хоҙайым үтә һиҙгер йөрәк биргән.
Инженерҙар һиҙмәгән
ерҙән ҡаҙып
Сығарҙы татлы һыуҙы тәрән ерҙән.

Шишмәһе саф, сәйгә
һәр кем һыу алғандай,
Хаҡлыҡҡа һыуһағандар
ҡыуанғандай.
Ынйыһынан күпме бала
һөткә туйып,
Башҡалар булып ҡалды
һыу алғандай.

Үтә алмайҙар эҙенән баҫып уның,
Китә алмайҙар юлынан
ашып уның.
Хаҡлыҡ нурын һүндерә
алмай дошмандары,
Күрә алмайҙар ғаләмгә
танылыуын.

Туғандар, һеҙгә үтенәм,
сәләм яҙып,
Күҙең һал, Мәржәни —
ул «Тимерғаҙыҡ».
Ул булмаһа, ҡибла
тапмай аҙашырһың,
Ҡараңғыла йүн белмәй,
юлдан яҙып.

Кил, зинһар, туғанҡайым,
инсафҡа кил,
Ҡеүәтең күпме икән —
самаңды бел!
Хәл етһә, уның эшен
һеҙ ҙә эшләгеҙ,
Булмаһа, файҙа бирмәҫ
таҡылдаҡ тел!

Белгәнгә ниңә эсең көйә һинең?
Эшен күр ғилем-һөнәр эйәһенең.
Һәр фәндең күренекле ирҙәре бар:
«Эйәһе серен белә бейәһенең!»

Ай булмаһа, йондоҙ менән
төн яҡтырмай,
Иң яҡты йондоҙға ла мохтаж
түгел ай.
Ир затынан булам, тип
ай маҡтанмаһын:
Ҡатын затлыҡ ҡояшты
һис хурландырмай[1].

---

* Ҡыҫҡартып алынды.

[1] Ғәрәп телендә «ай» һүҙе (ҡәмәр) ир затында (мужской род), ә «ҡояш» (шәмсе) ҡатын-ҡыҙ затында (женский род) йөрөй.

Ул да бер ғалим икән һөйләй
торған,
Ғалимдар мәжлесендә майҙан
алған,
Теләгенә ҡаршыларҙы
һөймәй торған,
Ҡурайы килешкәндә,
көйләй торған.

Һәр бәндә күрһәтәлер үҙ байлығын,
Иллә-мәгәр байлыҡтың
бар айырмаһы.
Ни бар-юғын белерһегеҙ,
кибет асһа:
Һәр кемдә бар хәленә күрә
үҙ сауҙаһы.

Иллә-мәгәр Мәржәниҙең
эше башҡа,
Йылҡының толпарындай
йондоҙ ҡашҡа.
Алыҫтан яҡты нуры балҡып тора,
Гәүһәрҙәй ҡундырылған
алтын ташҡа.

Ағзаһы ауырыу кешеләргә бик
килеште:
Булдылар аяҡ-ҡулы
һыҙланмаҫлыҡ.
Камил белеме ер йөҙөнә
мәшһүр булды,
Булдылар яманлауға
алданмаҫлыҡ.

Ҡайһы эше ул ғалимдың
таң ҡалмаҫлыҡ?
Ҡайһы һүҙе ул камилдың
күҙ һалмаҫлыҡ?
Ауырыуҙар сирҙәренә дауа тапты,
Һуҡырҙар күҙен
асты — ҡарманмаҫлыҡ.

Беркеткән ул дәлил менән
үҙ ҡарашын,
Оҫталар матур юнып
һалған таштай.
Эше бөхтә, машинаның
эше һымаҡ,
Ептәре төйөнләнгән
тарҡалмаҫтай.

Дошмандарҙың йөрөштәре
һалмаҡланды:
Йөгө уның ауыр булды
тарталмаҫтай,
Батырҙарҙың ҡылысынан
ҡаяу сыҡты,
Ҡайтанан эшкә кереп
ялғанмаҫтай.

Кеше камил була алмай,
ҡайнап бешмәй,
Мөхәббәт туҫтағынан шәрбәт
эсмәй.
Дошмандар ҡапҡандарын
һалып ҡарай, —
Турғайҙың тоҙағына ыласын
төшмәй!

Һауала ул бер шоңҡар
әйләнә осҡан.
Беҙ йөрөйбөҙ ҡарағоштай эҙләп
сысҡан.
Төлкөләр унда сыҙап тора
алмайҙар,
Гүйә, бер соҡорҙан йөрәге осҡан.

Оло бер ғалим сыҡһа, яманлайбыҙ,
Мәжлесте ғәйбәт менән
тамамлайбыҙ.
Эшебеҙ йә мыҫҡыллау, йә
кәмһетеү,
Үҙебеҙҙе һәр ғәйептән аманлайбыҙ.

Яҡшыны һүккән менән аты
китмәҫ,
Яман һүҙҙең күңелдән заты китмәҫ;
Саф алтынды бысраҡҡа буяу
менән,
Бысраҡ китер, алтындың заты
китмәҫ.

Ҡыйыш уҡ атҡан менән тура
китмәҫ,
Күңелдән яман һүҙҙең ҡуры китмәҫ;
Ҡоторған эт һауаға ҡарап өргән
менән,
Күктә торған яҡты айҙың
нуры китмәҫ.

## УРЫНЫМ — ЗИНДАН...*

...Минең ятҡан урыным —
исеме зиндан,
Һәр төрлө кешеләр бар яфа күргән.
Эсендә төрлө ғибрәт — иҫәбе юҡ,
Нисә төрлө ғәйепле —
бары йыйылған...

Киң соҡор тар була, ти, ҡаза килһә,
Юҡ ғәйеп бар була, ти, яза килһә.
Именлектең ҡәҙере имен саҡта,
Башыңдан аҡыл китер, бәлә килһә.

Әҫәре аҫыл һүҙҙең балдай татыр,
Был ерҙә күңел ҡурҡаҡ,
телем батыр.
Аҡ йәне нахаҡ көйгән бисарағыҙ,
Аҡрын ғына хикәйәләп,
һөйләп ятыр.

Бәндәне ризыҡ тигән
ҡыймылдатыр,
Сәселгән ризыҡ булһа, йөрөп
татыр.
Һәр бәндә күрәсәген күрмәй
ҡалмаҫ,
Кәрәк солтан булһын, кәрәк
император.

Таушалды ҡайғы менән аҡыл,
хәтер,
Эсемдә ҡайғы-хәсрәт тулып ятыр.
Шулай итеп, Аҡмулла бисарағыҙ
Тәрәндән әйләндереп һүҙ ҡуҙғатыр.

Бер ҡаза күрмәйенсә, әҙәм шашыр,
Бәндәнең ҡаза тигән күңелен
баҫыр.
Бауырһаҡты ашамаҫ Аҡмулла
инем,
Сәйнәймен ҡара икмәкте
кетер-кетер.

Һалдаттар, кис булғанда, ҡуйҙай
ҡамай,
Ябалар малдай ҡылып,
һанай-һанай,
Үләрем иҫемдә ине, был — иҫтә юҡ,
Ҡаза етһә, бирә икән дәһә Хоҙай.

Һарғайҙым, тәҙрәнән ҡарай-ҡарай,
Зарығып, сыҙаманы — көйҙө йән,
ай.
Иҫәнгилде, Батучҡа остаз булып,
Аҡмулла хурлыҡ күрҙе
талай-талай.

Ябыҡтым, ҡайғы менән
уйлай-уйлай,
Был ерҙә һис берәүгә һүҙем
һыймай.

* Ҡыҫҡартып алынды.

Ҡазаға илгиҙәр бәндә сыҙай икән,
Залимдар Аҡмулланың йәнен
ҡыйнай.

Әҙәмгә ошаҡ менән яла яман,
Себендән саға торған һағыҙаҡ
яман.
Һөйләһә һөйләй бирһен ҡара наҙан,
Ҡушылмаç ҡоралайға ҡара ҡабан.

Хур булдым хата төшөп
ҡоҙғондарға,
Эй, дуçтар, илтифат ит беҙҙең
зарға.
Арыҡты аша баçҡан арғымаҡ
инем,
Терәлеп туҡтап ҡалдым текә ярға.

Атлас тун баҙарында ҡиммәт үтер,
Ипһеҙ илдең баҙарында сауҙа
бөтөр.
Алтын ҡәҙерен алтынсы белер,
тиҙәр,
Гәүһәрҙе эт муйынына таҡһаң,
китер!

Йондоҙо Саратандың Ҡәүәс
булмаç[1],
Ямандың яуызлығы алыç булмаç.
Ала ҡондоҙ тиреһе ипкә килмәç,
Йүкәне майлау менән ҡайыш
булмаç.

Яҡшының сауҙаһында һағыш
булмаç,
Сауҙаһында ямандың табыш
булмаç.
Һыйырға келәм ябыу килешмәйҙер,
Аҡсарлаҡ буяу менән тауис булмаç.

Күк тимер ҡайрау менән алмас
булмаç,
Күк ишәк ҡорҙаш булып, моңдаш
булмаç.

Яман дуç — ҡара йылан тигән
кеүек,
Йәр булып, юха йылан юлдаш
булмаç.

Яманды түрә ҡылһаң, илең боҙор,
Аҡылһыҙҙы үçтерһәң, ботон
һуҙыр.
Түрә тимә, ҡара тимә, эшен ҡара,
Ҡай саҡ яман арғымаҡтан ябаҡ
уҙыр.

Зар ҡылып мин ятамын Аллаға, ай,
Ябығып, һөйәк ҡалған
арғымаҡтай.
Ҡәҙер белмәç залимдар һәләк итте,
Көн нурын күрә алмаған
ярғанаттай.

Ҡыпсаҡ эсе — Ҡарабалыҡ,
Ҡарағыҙҙар[2],
Зарына Аҡмулланың ҡарағыҙсы.
Мине тотоп бирҙегеҙ дошмандарға,
Барыбыҙ Тәңре алдына барабыҙсы.

Булманы үпкә яҙмай сарабыҙҙа,
Асыу тотоп, сыҙар хәл юҡ
ярабыҙға.
Гонаһһыҙға хыянатлап
һарғайттығыҙ,
Интектерһен сысҡан төшөп
һабағыҙға!

Күп-күп сәләм, бәхилмен
яҡшығыҙға,
Изге доға изге ата-бабағыҙға.
Яҙыусыһын һораһағыҙ: мин — бер
тотҡон
Аҡмулла Троицки ҡалағыҙҙа.

---

[1] Йондоҙо Саратандың Ҡәүәс булмаç — Ҡыçала йондоҙо Йәйә йондоҙ булмаç.

[2] *Ҡарабалыҡ, Ҡарағыҙ (Ҡара-ҡырғыҙ)* — ҡаҙаҡтарҙың Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенә ҡараған ырыуҙары.

## МӘЖЛЕСЕНӘ ҠАРАЙ ҒЫНА...

Мәжлесенә ҡарай ғына ғауғабыҙ
бар,
Ҡоҙоғона ҡарай ғына ҡауғабыҙ
бар,
Әрбет менән Мәкәрйәгә сама ҡайҙа,
Баҙарына ҡарай ғына сауҙабыҙ бар.

Бәхетебеҙ асылмаған беҙ бер фәҡир,
Абруйым артыҡ юҡ, эшем таҡыр.
Йәштә йыйған бер ҡалын
китабым бар,
Уның да ҡайһы ере ҡаҡыр-маҡыр.

Ул заман китап ҡайҙа был
замандай,
Йөрөйөм тәрән ерҙән һыу ала
алмай,
Бер шәриҡ ҡалын китап уҡып
торһа,
Ҡыҙығып, мин фәҡирҙең күҙе
аландай.

Фәҡирлектән артыҡ фән күрә
алманыҡ,
Шәһәр сығып алыҫ яҡҡа йөрөй
алманыҡ.
Мәргәндәрҙе танырлыҡ хәлебеҙ
бар,
Шул сәбәптән сабыр ҡылып тора
алманыҡ.

Аҙ ғына дәресем бар ҡыш ваҡытта,
Китап ҡарау — ғәҙәтебеҙ буш
ваҡытта.
Беҙгә лә ғилем бите ябылған юҡ,
Аңлайбыҙ кәйеф килгән хуш
ваҡытта.

## ИНСАФЛЫҠ

Арғымаҡ алыҫ йөрөмәҫ,
арыған һайын,
Йыуан ағас кәмейҙер, ярған һайын.
Тамағынан ҡыҙғанһаң артҡан
нарҙың[1],
Иңсәһе түбән төшөр барған һайын.

Дана булһаң, файҙа ҡыл үҙ
башыңа,
Шунан һуң — ҡашыңдағы
юлдашыңа,
Юлы бергә юлдашҡа ҡарамаһаң,
Кәрәк көндә юламаҫ ул ҡашыңа.

Онотма әҙәмлекте булғандан һуң, —
Балҡыйҙыр айҙың нуры тулғандан
һуң.
Асыу бысаҡ булғанда,
аҡыл — таяҡ,
Кәмейҙер шул таяғың юнғандан
һуң.

Ҡунаҡ килһә өйөңә, хөрмәтләп ал,
Күңелен уның ҡалдырма — хаҡтан
оял.
Бәлә китеп, ҡунаҡ менән рәхмәт
килер —
Риза ҡылып, һәр кемдең рәхмәтен
ал...

[1] *Нар* — бер үркәсле дөйә.

Һәр кемдән алҡыш алһаң, күп йәшәрһең,
Дәүләт бөтһә, әлбиттә, бер ташарһың.
Әҙәми зат ни ҡылһа ла — үҙе өсөн,
Яманлыҡ ҡылһаң, ахыры бер сәсәрһең.

Бер күреүҙә белмәҫһең ирҙең серен,
Мәғрифәт юлында һал күҙҙең ҡырын.
Күпме өгөт әйтһәң дә наҙанға һин,
Фекерләп, ысынға алмаҫ меңдән берен.

Ҡай дана эстә серен һаҡлай бирер,
Ҡай әҙәм һөйгән эшен маҡтай бирер.
Наҙанға күпме нәсихәт ҡылһаң да,
Урлыҡ ҡылып, донъя гиҙеп атлай бирер.

Намыҫыңды ҡалдырма, малға ҡарап,
Шөкөрлөктө ташлама, барға ҡарап.
Тәүбә, тәүфиҡ билгеһе — ҡәнәғәтлек,
Ғәмәлһеҙ була күрмә, малға ҡарап.

## БОРАДӘРГӘ*[1]

...Әһле ислам йоҡлабыраҡ ҡалыр булды,
Башҡа милләт алға табан барыр булды.
Дошмандарға ҡаршы тороу ҡылмаҡ өсөн
Яңы ғилемдәр беҙгә зарур булды.
Хәл килһә, төрлө фәнде күргән яҡшы,
Ғалимдар ҡатарына кергән яҡшы.
Русса уҡып-яҙып ҡына түгел белмәк,
Хәл килһә, французса белгән яҡшы.
Иң әүәл үҙ ғилемеңдә асыҡ бул һин,
Ышанысың ҡеүәте таҙа булһын...

## ТИҺЕҢМЕ?*

...Ярлы булһаң, йән дуҫың
Күҙе күрер тиһеңме;
Күҙе күреп торһа ла,
Күңел бирер тиһеңме;
Аҡҡош ятһа алдыңда,
Атһаң, тейер тиһеңме;
Малһыҙ булһаң, йән дуҫың
Һине һөйөр тиһеңме;
Уҡтан төҙ баҡыр таяҡ
Теҙгә төшөр тиһеңме;
Ишектә торған ғәрибең
Иҫкә төшөр тиһеңме?!

* Ҡыҫҡартып алынды.
[1] *Борадәр* – дуҫ, иптәш.

### БУЛЫРМЫ?

Йыһанда тоғролоҡ менән хаҡлыҡ
Һаман шулай иҙелерме,
тапалырмы?
Ватылғас таш йөрәклек,
аҡһөйәклек,
Фәҡир халыҡтар ҙа бер
шатланырмы?!

? **1.** «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» шиғырын яттан тасуири һөйләгеҙ. Ундағы «Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң, ғилем-һөнәр берҙән-бер әмәл булыр», «Белемлелек — арыҫландан көслө батыр, шуға атланмай, һинең төшөң һис өн булмай» тигән юлдарҙың мәғәнәһен асығыҙ. **2.** «Шиһабетдин Мәржәни мәрҫиәһе» шиғырында шағирҙың ни өсөн Мәржәнигә дан йырлауын аңлатығыҙ. **3.** Шағир нимәләрҙе кешене кеше итә торған мәсьәләләр итеп иҫәпләй? Уның мәғрифәтселек ҡараштарын күрһәтегеҙ. **4.** «Урыным — зиндан...» шиғырында шағирҙың тотҡонлоҡта ниндәй ғазаптар күреүе әйтелә? **5.** «Мәжлесенә ҡарай ғына...» шиғырында лирик герой үҙе хаҡында ниндәйерәк тонда һүҙ алып бара? **6.** «Инсафлыҡ», «Борадәргә» шиғырҙарында шағирҙың кешеләрҙе нимәгә өндәүен аңлатығыҙ. **7.** Шағирҙың «Тиһеңме?», «Булырмы?» шиғырҙарында ниндәй мотивтар сағылыш таба? **8.** «Инсафлыҡ», «Тиһеңме?» шиғырҙарын яттан тасуири һөйләгеҙ. **9.** Аҡмулланың бөтә был шиғырҙарында осраған тапҡыр һүҙҙәрҙе, мәҡәлдәрҙе, афоризмдарҙы уҡып күрһәтегеҙ. **10.** Аҡмулланың башҡа шиғырҙары менән танышып, фекер алышығыҙ.



# Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев

(1841 – 1907)

## ҠАЙЫШ ИЛӘ ЙҮКӘ

*(мәҫәл )*

Ҡайыш тәрбиәлелер һәм аҙ эшләй,
Унының өҫтөн биҙәйҙәр алтын-көмөшкә.

Ҡайыш майлы өсөн хөрмәт табалыр,
Йүкәлә ул юҡ өсөн кәм баһалыр.

Мәгәр һыу Йүкәнең төҫөн асалыр,
Һыу менән күп ергә дәүләт сәсәлер.

Нисек Ҡайыш тота ҡорола майҙан,
Йүкә һыуҙа көс алмыш һәм Хоҙайҙан.

Көнсөлләнде Ҡайыш Йүкә эшенә,
Ебәк таҫма кеүек гүзәл төҫөнә.

Үсләнде Йүкәнең бөтә иленә,
Көрәшәм тип, үҙе китте еренә.

Көрәш тотто Ҡайыш Йүкә илендә,
Һалып ҡылды, тартыштылар биленән.

Был тартыштан Йүкәнең китте хәле,
Барып һыуға төшөп, алды мәжале[1].

Эсеп һыуҙы көсәйҙе, тапты ҡеүәт,
Был мәл Ҡайыш бөрөлдө, китте һиммәт[2].

Әйтте: дошман һыу эсеп тапты ҡеүәт,
Миңә лә был лайыҡ, тип итте йөрьәт[3].

Кереп һыуға, сығып һәм тотто майҙан,
Һуҙылып китте, ҡарар Хоҙайҙан.

Боҙолдо, ҡалманы әҫәре майҙан,
Хур булды, фәҡиргә әйләнде байҙан.

---

[1] *Мәжал* — көс, ҡеүәт.
[2] *Һиммәт* — олпат.
[3] *Йөрьәт* — баҙнат.

* * *

Шифа тапһа берәү сиренә һыуҙан,
Зарар килер берәүгә шул дарыуҙан.
Ҡыйынһынһа берәүҙең барлығынан,
Ҡолаҡ ҡағыр шул көнсөл байлығынан.

## ЙОМРАН ИЛЕ*

Беҙҙе Йомран иле тирҙәр,
Ағиҙелдең буйы, тирҙәр.
Беҙҙең дә бар гүзәл ерҙәр,
Ҡолаҡ тот, тыңла беҙҙәрҙән.

Ғәжәп хозурлы ерҙәрҙән,
Ҡыҙылғыны ишет, берҙән.
Күренер ине күп ерҙән,
Юҡ ине шул тирәктәрҙән.

Ишет һин шул Һымай күлен,
Тотар яҙ, бикләмеш юлын.
Ыласын уйнар яҫы болон,
Урай-урай тирәктәрҙән.

Балапан һәм Кесе Талпаҡ
Яталар миҫле[1] аҡ ҡалпаҡ.
Ағастары бөгөн ваҡ-ваҡ,
Улар ҙа һәм һирәкләнгән.

Әгәр күл булһа ағасһыҙ,
Шулай ил ҡала башһыҙ.
Йә булһа ауыҙың тешһеҙ,
Ни файҙа шул ирендәрҙән!

Был ерҙә тапмаһаң ҡарар,
Бишул, Талпағыйҙан арар[2].
Атың арымаһа, юҡ зарар,
Табырһың төрлө наҙҙарҙан.

Әгәр һыуҙың ағышына,
Китерһең көнбайышына.
Күңелдәрең булыр шадкам[3],
Кисерһең яр ғазиҙарҙан[4].

Һандуғастар һайрар әйям[5],
Белерһегеҙ ҡәҙерен, эй, йән.
Мәгәр кем үҙенә хайран,
Ҡалыр ул белмәйсә һәнкам[6].

## ШИКӘЙӘТ**

Заманында бай булған был ерҙәрҙә
Тулы урман менән ҡорт, мал-тыуарҙа,
Күмәк ғәскәр һәм закон ярҙамында
Ҡарар тапты сауҙагәрҙәр сауҙаһында.

---

* *Йомран иле* йәки *Йомран-Табын* — башҡорт ырыуҙарының береһе. Әҫәр ҡыҫҡартып алынды.

** Ҡыҫҡартып алынды.

[1] *Миҫле* — төҫлө, кеүек.

[2] *Арар* — эҙләр.

[3] *Шадкам* — шат, кәйефле.

[4] *Кисерһең яр ғазиҙарҙан* — үтерһең һуғышсыларҙай.

[5] *Әйям* — көндәр.

[6] *Һәнкам* — йәмле, хозур, матур.

Аяҡлы мал тамам бөтә яҙҙы,
Ағастар аҡты, Әстрханға уҙҙы.
Уның артынса осто ҡорт һәм әре,
Юҡ инде тау кеүек ағас тауары.

Был башҡорт урманы тамам
киҫелгәс,
Баржалары тауарҙан һәм өҙөлгәс,
Фекерләп таптылар һәм башҡа
шәйҙе[1]:
Ҡара тал ҡайырын, ҡош һәм
күкәйҙе...

## КҮҢЕЛЕМ ГӨЛДӘЙ БӨРӨ БУЛМАҪ

*(«Нәғет шәриф (изге сифат)» әҫәренән алынды)*

Баҫып ғәфләт, йыраҡ ҡалдыҡ
ир-егеттәр,
Ҡотолоуҙы эҙләмәҫме ир тигәндәр.
Үҙебеҙ күрмәһәк хәстәрен, туғандар,
Кеше өсөн ҡайғырыу аҙҙыр,
тигәндәр.

Күңел төн түгелдер, хәрәкәт[тән]
һүрелмәҫ,
Был гөлдөң бөрөһө асылмайынса,
Минең күңелем был гөлдәй бөрө
булмаҫ,
Йөрәк ҡаным һыҙылып
тынмайынса;
Йөҙ мең яҙҙар күрһәм дә
төңөлмәҫ,
Был наҙанлыҡтың сиктәрен
күрмәйенсә.

## ҮТКӘН ЗАМАНДА БАШҠОРТ ҠЫҘҘАРЫНЫҢ ОҘАТЫЛЫУЫ*

### Беренсе табын

Боронораҡ, беҙҙән элгәре заманда,
Башҡорт, татар йолаһы
ҡыҙығында,
Әгәр килһә егет ҡыҙҙың туйына,
Китә ғауға, ауыл ҡыҙы йыйыла.

Элегерәк ҡыҙҙы алып йәшерәләр,
Йә сәхрәлә, йә өйҙә бикләнәләр.
Юҡ, булмай ярҙам итеп кейәүгә,
Елә торғас, ҡала эҙләп йәйәүгә.

Егет-елән ошо саҡ бары кейәүҙең
Ҡулын тотоп йүгерәләр йәйәүҙең.
Егеткә үс булалыр ҡыҙ сәменән,
Йөрәк-бәғ(е)ре сығырҙай
күкрәгенән...

### Өсөнсө табын

Килен булғас, тубый ҡашмау
рауалыр[2],
Кәрәкмәй, тип ҡыҙы һәм
ялуаралыр.
Был һүҙ менән йәнә асыла майҙан,
Егет-ҡыҙҙар ҡалмай килә һәр
өйҙән.

---

* Ҡыҫҡартып алынды.
[1] *Шәй* — нәмә, әйбер.
[2] *Рауа* — лайыҡ, яраҡлы.

Ҡатын-ҡыҙ, бер ҙә ҡалмай, йүгерә
унда,
Тамашасы ҡала ошо йыһанда.
Былар, йыйылышып, ҡыҙҙы
күҙәтә,
Йәйен-ҡышын был эштә көй
төҙәтә.
«Тубый ҡашмау теҙелде, еңгәһе,
бир,
Ҡыҙым, уға ҡарышма, таҡыяң
бир...»
Ҡыҙы таҡыяны бирмәйҙер был
эштә,
Йолалап ултыра арғы мөйөштә.

Баяғы ҡатын-ҡыҙ бик кинәнәләр,
Бере, бир, бере, бирмә,
тип киләләр.
Ҡатындар унда айырылып
сығалар,
Ҡыҙый яҡлы булып ҡыҙҙар
торалар...

Был ғауға сыҡты бер таҡыя
алыуға,
Был эштәр йөҙ булыр, яҙһаң
яҙыуға.
Ҡатын-ҡыҙ ике булып
тартышалар,
Ҡала алған кеүек бер
тырышалар...

Ҡыҙ уртала ҡаса, уртала йәшертә,
Ни хәл итһен, йола булғас, эш
урта.
Бара торғас, ҡатын ҡыҙҙарҙы еңә,
Баҫып барып ала таҡыяны еңгә...

## Дүртенсе табын

Был ғауғанан бер аҙ баш
күтәрелгәс,
Тубый ҡашмауҙы ҡыҙ башына
элгәс,
Ваҡыт еткәс уға йортҡа күсергә,
Шул ҡыҙҙар йыйыла ғәмен эсергә[1].

Етешә тиҙ заман ғәскәри ҡыҙҙар,
Ҡайһы ҡыҙҙарҙың эсе шунда
һыҙлар.
Тора торғас, берәүһе тапты
шаршау,
Аулаҡҡа керҙе ҡыҙҙар,
булды сыр-сыу.

Сығып китте улар ғазем[2] сәфәргә,
Сеңелдәшеп, сыуылдашып сәсәргә.
Бер аҙ йыр төрлө көйгә
көйләнеләр,
Былар ҡыҙға өгөт күп һөйләнеләр.

Йәй артынан көҙҙәр етһә, китер
ҡош,
Ыласының, шоңҡарың осто —
ҡулың буш.
Килендәштәр, был тиңдәштәр —
күңелдәш,
Өгөт һөйләр, йәнә көйләр
өләңдәш[3].
Берәү әйтер, бүтәндәре түҙәлер,
Һуңынан бөтәһе ҡабатлап
һыҙалыр.
Һәр саҡ бер-ике саҡрым баралар,
Бара биреп, бәхилләшеп ҡалалар.

---

[1] *Ғәм эсеү* — ҡайғы уртаҡлашыу.
[2] *Ғазем* — бер ниәт менән юлға сығыу.
[3] *Өләң* — йыр, сеңләү.

## БӨЙӨК ШАҒИР АЛЕКСАНДР ПУШКИН

Был көн, 1899 йылдың 26 майында, бөтә Рәсәй махсус байрам итеп, иң бөйөк шағиры Александр Пушкинды йәд[1] итә. Шағирҙың донъяға килеүенә был көн 100 йыл була.

Пушкин бөйөк шағир, бөйөк әҙип ине. Наме[2] вә әҫәрҙәре Рәсәй хөдүттәрен[3] ашып, әжнәбиҙәргә дәхи[4] мәғлүм вә мәшһүр булмыштыр. Был көн был илдәрҙә лә Пушкинды йәд итеүселәр барҙыр.

Бер инглиз ғалимының: «Бөйөк Фирҙәүсиҙең, Хафиздың вә Сәғҙиҙең әҫәрҙәрен уҡымаҡ өсөн генә лә фарсы теленә тәхсиле шаяндыр[5]», — тигәне билдәлелер. Ысынлап та, европалар вә рустар араһында ғәрәп, фарсы вә төрки тәхсил итеп, ғаләм шәреҡтең бөйөк шағирҙарының вә мәшһүр яҙыусыларының әҫәрҙәренән истифадә[6] иткәндәр аҙ түгел. Шулар кеүек беҙ ҙә көнбайыш халыҡтарының әҫәр ғаҡылиәһенә, әҙәбиәһенә вә шиғыриәһенә ваҡеф[7] булһаҡ, файҙанан башҡа бер нәмә лә булмаҫ.

Пушкин русса яҙыр ине, ләкин шул тиклем гүзәл, шул тиклем үткен яҙыр ки, уның яҙғандарынан беҙ ҙә ят вә сит булып ҡала алмайбыҙ. «Бөйөк шағир — Ватанының шәрифелер[8], ләкин бөтә донъяның хадимылыр[9]», — тиҙәр. Бик ғәҙел һүҙ. Шағир Пушкиндың яҙғандары һәр ерҙә, һәр милләт араһында уҡыла торған нәмәләрҙер. Уның яҙған йөҙ меңдәрсә сатырҙары[10] эсендә һис бер милләткә вә дингә тейеп яҙылған бер генә сатыр ҙа юҡтыр.

Уның бөтә яҙғандары ғаләм инсаниәткә[11] хеҙмәттер. Шуның өсөн дә Пушкин бөйөк ул.

Ватан вә дәүләт ҡарашынан рус һаналғанлыҡтан, беҙ ҙә Пушкинға яҡын мөнәсәбәтле булып торабыҙ. Уның әҫәрҙәрен уҡымаҡ вә белмәк беҙгә лазымдыр[12].

Рәсәй бик күп йылдар йәшәп килә, ләкин быға са Пушкин кеүек шағир вә әҙип етештермәмештер. Рус теле иҫкенән үк бай ине, ләкин был телде гүзәл иткән, был телгә ҡеүәт вә латафәт[13] биргән Пушкин булды. Беҙ уны хөрмәтләп иҫкә алабыҙ. Шағир быға лайыҡтыр. Ул рус еренең иң камаләтле[14] бер кешеһелер.

Пушкиндың шиғырҙарында Ҡырымдан, Баҡсаһарайҙан, Кавказдан суҡ латиф[15] вә гүзәл бәхәстәр[15]

---

[1] *Йәд* — иҫкә төшөрөү.
[2] *Нам* — исем.
[3] *Хөдүт* — сик.
[4] *Әжнәбиҙәргә дәхи* — тағы ла сит илдә (ерҙәрҙә).
[5] *Тәхсиле шаян* — эйә булыу, белеү.
[6] *Истифадә* — файҙаланыу.
[7] *Ваҡеф* — аңлаусы, белеүсе.
[8] *Шәриф* — хөрмәтле, данға лайыҡ.
[9] *Хадим* — хеҙмәтсе.
[10] *Сатырҙар* — шиғыр юлдары.
[11] *Ғаләм инсаниәт* — кешелек донъяһы.
[12] *Лазым* — зарури, тейеш.
[13] *Латафәт* — нәфислек, матурлыҡ.
[14] *Камаләт* — өлгөргән, кәмселекһеҙ; бында бөйөк, даһи мәғәнәһендә килә.
[15] *Латиф* — нәфис.
[16] *Бәхәс* — фекер йөрөтөү, тема.

барҙыр. Әгәр улар, иснад[1] булып, үҙ телебеҙгә тәржемә ителһәләр, сыҡ гүзәл булыр ине. Бөйөк шағирҙарҙың вә бөйөк әҙиптәрҙең кешелек донъяһына хеҙмәт итеүҙәре уларҙың әҫәрҙәре һәр төрлө телдәргә тәржемә ителгәнлектәренән килә. Боронғо гректарҙың Гомеры, Ирандың Фирҙәүсийе, Хафизы, Сәғҙийе, боронғо төркиҙәрҙәң Мир-Ғәлиширы (Навои), инглиздәрҙең Шекспиры, немецтарҙың Гётеһы вә Шиллеры кеүек әҙиптәр бөтә мәҙәни телдәргә тәржемә ителгәндәр. Беҙҙең Александр Пушкин да, былар кеүек үк, бик сыҡ милләттәрҙең телдәренә тәржемә ителмештер. Уның әҫәрҙәре араһында француз, инглиз, немец, голланд, грек, фарсы, грузин, төрөк, латыш, япон һәм башҡа телдәргә тәржемә ителгәндәре барҙыр.

Бөйөк Пушкиндан уның әҫәрҙәре юғарылығында тәржемәләр яһау беҙҙең ҡулыбыҙҙан килмәй. Тәржемәбеҙ садә[2] булһа ла, уның шәрәфенә[3] бер-ике сатыр яҙа алһаҡ, бик шат буласаҡбыҙ.

## БАШҠОРТТАР*

Халыҡтың ауыҙ-тел ҡомартҡыларынан күренеүенсә, Рәсәй власы аҫтында ҡалғансы, аҫаба йәки күсмә башҡорттар бейҙәр тарафынан идара ителгәндәр, һәм был бейҙәр йыш ҡына вассал рәүешендәрәк ханға буйһонғандар. Бындай бейҙәр йәки хан вассалдары аҙ булмаған.

Башҡорттарҙың йорт хужалығы башлыса малсылыҡтан торған. Ҡатын-ҡыҙҙар ебәк менән, ә ярлылар үҙ буяғына, йәғни буяуына, буялған йөн менән киндер халат — сисбе ише әйберҙәр сиккәндәр. Был буяҡ фабрикала эшләнгән нәмәләр тарафынан ҡыҫырыҡланып баҫтырылып ҡалынған. Хәҙерге ваҡытта был буяҡ күберәген — ул да булһа йәшерен рәүештә генә — Верхнеурал өйәҙе ҡатай башҡорттарында ҡулланыла. Ҡашмау тубый, ҡыҙҙар таҡыяһы, һарауыс яға, йәғни күлдәк өсөн нағышланған ҡатын-ҡыҙҙар яғаһы, һәм шуның ише боронғо башҡорт кейемһалымдары аҡрынлап ҡулланыуҙан сыға бара. Ҡарттар әйтеүенсә, холоҡ-ҡылыҡтар ҙа, ғөрөф-ғәҙәттәр ҙә шулай уҡ яманға табан үҙгәрҙе. Шуға күрә йырҙар ҙа үткән ваҡыттарҙа йырланған йырҙар түгел. Халыҡ үҙенең ғөрөф-ғәҙәттәрен дә, етештереү нәмәләрен дә, йәғни сигеүҙән, туҡыусылыҡтан, ҡамытдуғалар, тирмәләр һәм башҡаларҙы яһауҙан да яҙҙы, шуға күрә лә кәйеф-сафа ҡороуға бирелде, тип һөйләйҙәр.

---

* Ҡыҫҡартып алынды.
[1] *Иснад* — таяныс, терәк.
[2] *Садә* — ябай.
[3] *Шәрәф* — хөрмәт, ҡәҙер.

Башҡорттарҙың боронғо йыры өләң[1] тип атала. Өләң — ул хикәйәт, йәғни эпос. Ләкин власть ныҡлап урынлашҡан һәм башҡорттар төрлө халыҡтар менән аралашҡан ваҡыттан алып өләңдәр йырҙары дүртәр юллы лирик рифмаларға әүерелде. Уларҙа мөхәббәт, ҡунаҡтарға маҡтау һәм рәхмәт йырлана. Йырҙар бар. Мәҫәлән, «Ашҡаҙар» — шул исемдәге йылғала батып үлгән ире тураһында башҡорт ҡатыны тарафынан сығарылған йыр, башҡа йырҙарға ҡарағанда нығыраҡ хөрмәтләнә. Өләң йырҙарында батырҙарҙың ҡаһарманлығы һәм хандарҙың уландарына өгөт-нәсихәттәре йырланған.

Табын ханлығы һуңынан ун ете ир туған араһында бүленгән, шуға ла ул ун ете ҡәрҙәш-ырыулы табын тип аталған, тип һөйләйҙәр. Был ырыуҙарҙан волостар һәм ер биләмәләре барлыҡҡа килгән. Һәр ырыуға баш хан тарафынан ҡош, ағас, тамға һәм оран бирелгән. Мәҫәлән, Йомран Табын ырыуы ҡошон — ҡарағошто, ағасын — ҡарағасты, тамғаһын — ҡабырғаны һәм оранын — салауатты, тимәк, доғаны алған.

Ислам ныҡлап урынлашҡанға тиклем башҡорттар, башҡа халыҡтар кеүек үк, бөтә хөрәфәттәргә ышанғандар. Йәш килендәр тәүге осрашыу ваҡытында ҡайныға, ҡайнағаларға, хөрмәтле ҡарттарға, тауҙарға, йылғаларға һәм, ғөмүмән, һоҡландырғыс әйберҙәргә табынғандар.

Башҡорттарҙы һун-венгрҙарға ҡайтарып ҡалдырһалар ҙа, уларҙың дине — экиәттәрҙән күренә был — бер ни тиклем боронғо ҡомандарҙың диненә оҡшаш булған. Элекке күсмә башҡорттарҙың бер өлөшө, һис шикһеҙ, монгол йәиһә сығатай ҡәбиләләренә ҡарай.

Ҡарт башҡорттар, азиялар кеүек үк, йәштәргә йондоҙҙар хаҡындағы легендаларҙы төшөндөрәләр. Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ: беренсеһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө — хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү. Был нәмәләр аҙ уҡымышлы халыҡта оло ихтирам менән һаҡлана, ә шәриғәт менән мауығыусылар быға вайымһыҙ ҡала килә.

Башҡорттар талантлы шағир тарафынан шиғыр менән төрки telендә яҙылған «Йософ вә Зөләйха» романын айырыуса ҡәнәғәтләнеп уҡыйҙар. Әгәр ҙә был поэзия әҫәре рус теленә тәржемә ителмәгән икән, был, моғайын, Йософтоң тарихы дөйөм булған өсөн генә. Изгеләр тураһындағы башҡа күп кенә китаптар ҙа, шулай уҡ батырҙар, батшалар һәм хәлифәләр хаҡындағы байтаҡ фарсы һәм ғәрәп тәржемәләре лә күп халыҡтар өсөн уртаҡ. Ә экиәттәрҙең иң һоҡландырғысы һәм башҡорттоң үҙенеке булғаны — «Алпамыша», йәғни «Ҙур кәүҙәле кеше».

[1] *Өләң* — «эпос» мәғәнәһендә.

Алыптар ҙа бар, йәғни шундай уҡ эре кәүҙәле, әммә үҙенә бер төрлө кешеләр. Былдай ҡыҙыҡлы әкиәттәр күп. Мәҫәлән, «Йән-Таһир вә Йән-Зөһрә». Йән-Таһир Йән-Зөһрәнең һөйгәне булған. Улар икеһе лә дошмандар ҡулында һәләк булған. Улар — үрҙә телгә алынған әҫәрҙәр — сәсмә рәүештә лә, теҙмә рәүештә лә һөйләп йөрөтөлә...

Бөтә башҡорт батырҙары өләңдәрҙә йырлана: мәҫәлән, Мораҙым, Заятүләк, Сура батыр һәм дары еҫен аҙ еҫкәгән бүтән күп кенә батырҙар. Өләң йәки башҡорт эпосы осоро иһә, башҡа европаларҙыҡы кеүек үк, батырҙар дәүере менән тамамлана. Ҡырғыҙҙарҙа (ҡаҙаҡтарҙа) өләң йыры хәҙерге ваҡытта ла беренсе урында тора. Ләкин улар үҙҙәре ябай йырҙарҙы өләңдәрҙән айырмайҙар, шуға ла бөтәһен рәттән өләң тип атайҙар. Ә башҡорттарҙа өләң хикәйәтте, йәғни эпосты аңлата, мәҫәлән, «Игорь полкы тураһында һүҙ» кеүек. Песня башҡорттарҙа йыр тип атала.

Ислам индерелгәндән алып башҡорттар дөйөм мосолман төҫөн алғандар. Ҡатындар ирҙәрҙән бүленгәндәр һәм аҡрынлап «Ҡөрьән» китабын тыңлай башлағандар. Шул арала ярлы муллалар Мәккәгә йөрөй башлағандар, әйләнеп ҡайтҡас, сәйәхәт һәм дини йолалар тураһында һөйләгәндәр. Шунан һуң инде алпамышалар күҙ уңынан төшә, әкиәттәр ҙә артта ҡала башлаған.

Башҡорт муллаларының бөтә Азия аша Мәккәгә һәм барған сәйәхәттәре һәм һанап бөтөргөһөҙ легендалары мауыҡтырғыс. Ләкин бөгөн генә тотоноп хикәйәләрҙе йыйыу, дөрөҫөрәге, былдай сәйәхәтселәрҙән башҡа йыйыу, ифрат ауыр. Шундай сәйәхәтселәрҙән «Әфтиәк»кә аңлатма яҙған аҫаба башҡорт Тажетдин Ялсығолов шәриғәт ғилемдәрен белеүе менән бигерәк тә айырылып тора. Ул шулай уҡ дин догматы «Сөбәт әлғажизин»ға «Рисаләи Ғәзизә», йәғни уның ятҡан үҙ ҡыҙы «Ғәзизә хаты» исеме аҫтында шәрехнамә[1] яҙған. Был шәрехнамәне ул Мәккәгә барып етмәҫтән алда, Азияға сәйәхәтенән һуң, 1806 йылда яҙған. «Сөбәт әл-ғажизин»да телгә алынған халыҡтарҙың диндәре менән танышыу унда шундай шәрехнамә яҙыу теләген уятҡан һәм ул уны фәлсәфәүи планда ижад иткән.

Икенсе бер сәйәхәтсе — Әбелмәних. Ул уҡымышлы мулла сифатында Бохара илсеһе менән Константинополгә килгән, ә унан Египет аша Мәккә һәм Мәҙинәгә барып ҡайтҡан. Ул Египетта «Тәфсир кәбир»ҙән шиғри тәржемә яҙған. Был китабында ул үҙенең сәфәре хаҡында ла телгә ала һәм үҙ өлгөләрен килтерә, һүҙ араһында: «Был бахырҙы яҙмыш ғосмандар мәйетен тапарға мәжбүр итте», — ти.

Быларҙан тыш, шиғыр ижад итеүселәр һәм прозала өгөт-нәсихәттәр һәм кәңәш-күрһәтмәләр

[1] *Шәрехнамә* — аңлатма.

яҙыусылар күп. Шундайҙарҙан Һибәтулла, мәҫәлән, үҙе менән бер осорҙа йәшәгән башҡорт ғәскәрҙәре башлыҡтарына һәм үҙ замандаштары булған муллаларға һәм бер ҡатлы башҡорттарға шиғри сатиралар яҙған. Ул күптән түгел генә үлде.

Боронғо башҡорттар хаҡында тейешле төшөнсә булдырыу өсөн уларҙы хәҙергеләре менән бутарға ярамай. Быны өсөн боронғо башҡорттарҙы ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, кейемдәре һәм һөйләштәре яғынан тарихтарының тәүге осорона, йәғни, уларҙың эпостары йәшәгән дәүергә, ҡайтарып ҡарарға кәрәк.

Боронғо башҡорттар тураһында төшөнсә алыу өсөн башта уларҙың хикәйәттәрен (сказания) рус теленә тәржемә итергә кәрәк. Был тәржемәләрҙән яҙыусы (сочинитель) бер ни ҡәҙәр һоҡландырғыс ер-урындарҙың... иң боронғо атамаларын да беләсәк. Бөйөк Пётрҙың: «Башҡа халыҡтар Рәсәй тураһында нәмә лә булһа дөрөҫтө яҙа алалармы?» — тигән һүҙҙәре бар. Быны өсөн яҙыусыға, тәржемәсе һымағыраҡ итеп, Азия һәм Европа тарихынан төрлө яҡлап мәғлүмәтле, риүәйәттәр һәм хикәйәттәрҙе йыйыуға һәләтле, тарихты ятраҡан ысын башҡортто беркетергә кәрәк. Һәр халыҡтың тарихы өйрәнелһен өсөн уның үҙ Карамзины булыуы шарт. Ул да шулай уҡ башҡорттар хаҡындағы төшөнсәгә урта быуат йырҙары аша барып етәсәк.

**?** **1.** М. Өмөтбаев әҫәрҙәрен иғтибар менән уҡып сығығыҙ. **2.** «Ҡайыш илә Йүкә» әҫәренең идея-художество ҡиммәтен асығыҙ, йәмғиәттәге социаль айырымланыуҙарҙың, синфи көрәштең асылын аңлатығыҙ. Көнсөллөктөң нимәгә килтереүе тураһындағы юлдарҙы уҡып күрһәтегеҙ. **3.** «Йомран иле» шиғырында тасуирланған тәбиғәт күренештәрен күҙәтегеҙ. «Әгәр күл булһа ағасһыҙ, шулай ил ҡала башһыҙ» тигән юлдарҙың мәғәнәһен әйтеп бирегеҙ. **4.** «Шикәйәт» шиғырының йөкмәткеһен һеҙ нисек аңлайһығыҙ? **5.** «Күңелем гөлдәй бөрө булмаҫ» шиғырының лирик геройы үҙ алдына ниндәй маҡсат ҡуйып йәшәй? **6.** «Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы» әҫәрендә һүрәтләнгән йола күренешен һөйләгеҙ, хәҙерге туй йолаһы менән сағыштырығыҙ. **7.** Шағирҙың бөйөк Александр Пушкин хаҡындағы фекерҙәрен яҡтыртығыҙ. **8.** «Башҡорттар» хикәйәһенең башҡорт йәмғиәте тарихын, этнографияһын сағылдырыуҙағы әһәмиәтен билдәләгеҙ. **9.** Әҙиптең аҫаба башҡортҡа нимәләрҙе мотлаҡ белергә кәрәклеге хаҡында әйткән һүҙҙәрен уҡып күрһәтегеҙ, уларҙың мәғәнәһен асыҡлағыҙ. **10.** Шағирҙың әхлаҡ һәм мөхәббәт темаларына арналған шиғырҙарын уҡығыҙ. **11.** М. Өмөтбаевтың «Йәдкәр» (Өфө, 1984; 2011) тигән китабынан уның киң ҡоласлы ғалим-әҙип — тарихсы, этнограф, телсе, фольклорсы, әҙәбиәт белгесе, тәржемәсе икәнлеген аңлатҡан әҫәрҙәре менән танышығыҙ.



# Ризаитдин Фәхретдинов

(1859 – 1936)

## ӘСМӘ, ЙӘКИ ҒӘМӘЛ ВӘ ЯЗА

Хикәйәбеҙ башҡорт сәхрәләрендә вә башҡорттар йәшәгән шәһәрҙәрҙә (ҡалаларҙа) булғаны өсөн, башҡорттар хаҡында бер-ике йөмлә яҙмаҡ кәрәк булыр.

Башҡорт исеменең тарихҡа билдәле булыуы Бағдад хәлифе Моҡтадир тарафынан Болғар дәүләтенә ебәрелгән илселектең былар араһынан үтеп киткәндәренән һуң булмыштыр.

Мәҙкүр[1] һәйәтендә[2] яҙып йөрөүсе Әхмәт Ибн Фаҙлан исемле кеше булып, Бағдадтан сығып, ҡайтып индектәренә ҡәҙәр булған хәләхүәлен, күҙе илә күрмеш вә ишетмеш хәбәрҙәрҙе яҙып донъяға бөйөк бер һәҙиә (бүләк) ҡалдырмыштыр.

Болғар төркиҙәренең, урыҫтар вә башҡорттар әхүәле хаҡында иң боронғо сығанаҡ ошо әҫәрҙер. Был әҫәр ғилем тарих ғашиҡтары өсөн ҡиммәтле бер йәдкәрҙер.

Мәҙкүр илсе һәйәте Хорезм мәмләкәтенән киләрәк, Болғар шәһәренә килеп кереүҙәре һижрә[3] илә 310 сәнәнең[4] ун икенсе мөхәррәм айы йәкшәмбе көн милади[5] илә 922 сәнә европаларса майҙың ун икенсе көнөндә башҡорт сәхрәләренең йәннәт кеби (кеүек) гүзәл вә йәп-йәшел бер ваҡытында үтеп китмештер.

### Ғәббәс мулла

Юғарыла исемдәре телгә алынған виләйәттәренең берендә бер мосолман ҡәрйәһе (ауылы) варҙыр. Был ҡәрйәлә аҙнаға (һәфтә) бер

---

[1] *Мәҙкүр* — билдәле, алда әйтелгән.
[2] *Һәйәт* — миссия, делегация.
[3] *Һижрә* — мосолмандарҙа ай хисабы менән йөрөтөлә торған йыл.
[4] *Сәнә* — йыл.
[5] *Милади* — хәҙерге йыл хисабы.

мәртәбә олуғ баҙар улып, почта вә телеграмдар эшләмәктә һәр төрлө әшйә[1] алынып, һатылмаҡталыр.

Ислам сауҙагәрҙәренең мәжмүғе[2] улан был ауыл, яҙасаҡ хикәйәмеҙ өсөн беренсе лазым улдығындан, оҙон тәғриф[3] итмәй вә исемене һөйләргә лә был ерҙә мыуафиҡ[4] күрмәй, һүҙ яйҙары килдекендә, исеменең баш хәрефе улан ҡәрйә тиә ишара итәсәкмеҙ. «Б...» ҡәрйәһе мәшһүр бер ҡәрйә улдығы кеби, кәндеһендә (үҙендә) һәм исеме йыраҡ ерҙәргә китмеш мәғрүф[5] бер имам бар ине. Ҡырҡ йәштәрендә булған был мулланың ғаиләһе (йәмәғәте) Ғәйшә исемле ҡатын илә Әсмә исемендә бер ҡыҙҙан ғибарәт ине. Ғәббәс мулланың (имамдың исемелер) башҡа балалары һәм улмыш иһә лә, йөмләһе[6] вафат улып, яңғыҙ ошбу ҡыҙ донъяла йәшәмәктә ине. Ошбу сәбәптән, Әсмә был ғаилә эсендә иң һөйөклө бер йән ине.

Ғәббәс мулла йәшлегендә ғәйәт тә зирәк вә шат вә һәр нәмәгә һәүәсле вә һәр шәй ҡулындан килер ки мөстәғит[7] бер бала ине иһә лә, зан[8] инелекдеке ҡәҙәр кәмаләт[9] кәсеп итә алманығы хәлдә мәҙрәсәнән сығып имам булды...

Мәғлүмдер ки, донъяла бай балалары мал ҡәҙерен вә мөдәррис балалары ғилем ҡәҙерен лазым мәртәбә белмәҫтәр. Ләкин бының өсөн бөйлә[10] балалар ғәйепле улмай, бәлки был шәйҙәрҙең хөрмәтене белерлек рәүеш үҙрә[11] тәрбиә итә алмалыҡтары вә бөйлә тәрбиәләргә иғтибар итмәнектәре өсөн аталар ғәйепле улһалар кәрәк.

Ғәббәс мулла, әгәр ҙә кәндеһе кеби еңел фекерле, донъяға илтифатһыҙ бер ҡатынға туғыры килмеш улһа ине, ғүмерене ахмаҡтар ғәҙәте үҙрә сәфаһәт[12] донъяларында кисермәк вә бөтә фамилияһының шәрәфәтенә[13] дегет буяп, донъяһына вәдәг (буйһоноу) итәсәк ине. Ләкин йәнабе илаһиның мәрхәмәте улараҡ, быға ғаҡыллы, тәҡвә[14], жәсүр (батыр), ҡыйыу, мәрхәмәтле бер ҡатын мөйәссәр[15] улды.

Ғәйшә абыстайҙың тәрбиәһе вә төн-көн улан ижтиһады сәбәбендән Ғәббәс мулла һәр бер яңы вә иҫке рисәләләрҙе, рус, төрки, ғәрәби йәриҙә[16] вә мәжәлләләрҙе[17] уҡымаға һәм дә бөйөк бер ихлас

---

[1] *Әшйә* — нәмә, әйбер.
[2] *Мәжмүғе* — йыйылған урыны.
[3] *Тәғриф* — аңлатыу, белдереү.
[4] *Мыуафиҡ* — тура килеү.
[5] *Мәғрүф* — билдәле, танылған.
[6] *Йөмләһе* — бөтәһе.
[7] *Мөстәғит* — һәләтле.
[8] *Зан* — асыҡ булмаған уй, шикләнеп ҡарау.
[9] *Кәмаләт* — етешкәнлек, тулылыҡ.
[10] *Бөйлә* — һис тә.
[11] *Рәүеш үҙрә* — шул рәүешле.
[12] *Сәфаһәт* — түбәнлек, насарлыҡ, боҙоҡлоҡ.
[13] *Шәрәфәт* — ҡәҙерле, хөрмәтле.
[14] *Тәҡвә, тәҡүә* — динле, диндар.
[15] *Мөйәссәр* — яйлы, тура килеү.
[16] *Йәриҙә* — гәзит.
[17] *Мәжәллә* — журнал, йыйынтыҡ.

вә хирес[1] илә уҡымаға башланы. Әҙәби, фәнни рисәләләр һәм Ғәббәс мулланың холҡоно төҙәтмәк өсөн күп ярҙам итте. Моталәгә[2] әйләмәктә улан китаптар әҙәм уғлы өсөн иң ҡеүәтле тәрбиәселәр инеке шөбһәһеҙҙер. Ошбу сәбәп өсөндөр ки, әхлаҡ ғөләмәһе[3] күңел боҙмаға сәбәп уласаҡ хикәйә вә романдарҙы, хыял ғаләменә батырасаҡ әҫәрҙәрҙе моталәгә итмәктән нәһи[4] әйләмәктәләрҙер.

Ғәббәс мулла, белер өсөн ғәйрәтле улдығы кеби, белдектәре илә һәм ғәмәл ҡылыр ине. Вәғәздәрене йомшаҡ һөйләр, миҫалдарыны асыҡ күстәрер (күрһәтер), ислам ҡағиҙәләрене ғауам халҡына саф вә ап-асыҡ аңлатыр ине.

Ғәббәс мулланың дәхи бер олуғ эше булды. Ул иһә мәхәллә мәктәбе тәьсис итеп (төҙөп), бөтә ҡәрйәлә улан ислам балаларыны мәктәпкә йыйып тәғлим[5] бирер вә монасип[6] мөғәллимдәр насип итеп, анлар васитаһы[7] илә тәғлим иттерер ине. Ғәббәс мулла мәктәпте сарыф, ысуле йәҙидә[8] илә уҡыттығы хәлдә ғәүәмдәргә бының исемене ишеттермәй, бәлки яңғыҙ ысуле йәҙидәнең файҙаһындан хәбәр бирмеш ине. Ләкин әгәр ҙә «ысуле йәҙидә» тиә зикер итмеш (телгә алған) улһа ла, мәхәллә тарафындан кенә[9] һүҙ уласаҡ дәгел (түгел) ине. Зирә, был ваҡыттар ысуле йәҙидәнең яңы майҙанға сыҡтығы ваҡыты булып, Ҡазан вә Ҡазан әтрафында улан бөйөк ғалимдарҙың ысуле йәҙидә хилафында улараҡ яҙмыш улан мөбәрәк әҫәрҙәре Ҡазан матбағаларындан сығып етмәмеш ине...

Ғәббәс мулла бай кемсә дәгел ине. Ләкин мәғишәтенә һоро ҡорт низамына ҡуймай, бәлки бал ҡорто ысулына бинаи[10] әйләмеш, йәғни кәндеһе[11] хәле еттеге ҡәҙәр иген иктерер вә ханәһене[12] янында улан еттеге ҡәҙәр баҡсаһында Ғәйшә абыстай илә йәй көнөндә эшләрҙәр ине.

Ҡатыны илә берлектә рәхәтрәхәт һөйләшеп, латифалар[13] әйтешеп, тәрбиә әйләмеш баҡсаларының мәхсулы[14] улараҡ сейә, ҡарағат, еләк кеби емештәрен һаттырып, яҡшы ғына аҡса кәсеп итерҙәр ине.

Халыҡ наҙланып тәбдил[15] һауа вә истирәхәт[16] һәм тәғтил (ирекле)

---

[1] *Хирес* — ҡомһоҙлоҡ, бик ныҡ бирелеп.

[2] *Моталәгә* — уҡыу, өйрәнеү, тикшереп хөкөм сығарыу, резюме.

[3] *Әхлаҡ ғөләмәһе* — холоҡ, мораль ғалимдары.

[4] *Нәһи* — тыйыу, бер нәмәне эшләмәҫкә ҡушыу.

[5] *Тәғлим* — өйрәтеү, белдереү, дәрес биреү, уҡытыу.

[6] *Монасип* — яраҡлы, кәрәкле.

[7] *Васитаһы* — ярҙамы.

[8] *Сарыф, ысуле йәҙидә* — морфология, яңы метод.

[9] *Кенә* — йәшерен дошманлыҡ.

[10] *Бинаи* — нигеҙләү, терәк итеп алыу.

[11] *Кәндеһе* — көсө, үҙе.

[12] *Ханә (хана)* — йорт.

[13] *Латифа* — күңелле, ҡыҙыҡлы нәмәләр.

[14] *Мәхсулы* — эш, хеҙмәт менән булдырылған нәмә, уңыш.

[15] *Тәбдил* — алмаштырыу, үҙгәртеү.

[16] *Истирәхәт* — ял итеү.

ваҡыт тиә сәйәхәт итеп вә башҡорт сәхрәләрендә ҡымыҙ эсеп йөрөнөктәрендә, быларҙың истирәхәт вә тәбдил һауалары, ҡымыҙ вә сәйәхәттәре ошбу үҙҙәре янында улан баҡсаларыны эшләмәктән ғибарәт ине. Ваҡиған (ысындан да) был ғәҙәттәре бынлар өсөн ҡымыҙ эсмәк вә сәйәхәт итмәктән күп мәртәбә бәндәләрҙең сәләмәтлектәренә вә күңелдәренең шат улмағына сәбәп улыр ине.

Ғәйшә абыстай әтрафына нисбәте илә шөһрәтле бер мөдәррис ҡыҙы улдығы хәлдә, ни өсөндөр мәхдүм вә мәхдүмәләр[1] тәбиғәтенә тамам башҡа бер тәбиғәттә вә анлар ғәҙәтендән башҡа бер тәбиғәттә ине. Мәҫәлән, ғилемлек хөрмәтене белер, уҡыр һәм яҙыр, иркәлек нәдер (ниҙер) белмәҫ, тәкәбберлекте күңеленә килтермәҫ, кешенән асла[2] көлмәҫ ине.

...Ғәйшә абыстай әгәр ҙә дәүләтле[3] кемсә ҡыҙы улһа ине, Ғәббәс муллаға дәгел, бәлки уның хәлфәләренә йәр уласаҡ ине. Ләкин дәүләтһеҙ улдығындан мәҙкүргә йәр улды вә бер байғура балаһына әсир төшмәкдекендән шатланып, Ғәббәс мулланың холҡона тәрбиә итергә шөруғ[4] итте һәм мыуафиҡ та улды.

Ирҙәрҙең һиммәте[5] «урындарындан тауҙарҙы күсерер» тиерҙәр. Ләкин ҡатындарҙың һиммәте бындан дәхи бәләндтер (артыҡ, бөйөк). Зирә, анларҙың һиммәттәре арыҫландарҙан ғәйрәтле ирҙәрҙе кәнде фәрмандары аҫтында тоторҙар. Эстәһәләр, һис тәрбиә ҡабул итмәгән ирҙәрҙе тәрбиәле бер ир итмәгә мыуафиҡ улырҙар. Ирҙәр һәр ваҡытта ҡатындар теләгәнсә улырҙар.

### Әсмә

Әсмә һигеҙенсе йәшенә еттекендән һабаҡ уҡытмаҡ заманы тәмам килмеш вә был фекер Ғәйшә абыстай илә Ғәббәс мулланың күңелдәрендә олуғ бер урын алмыш ине.

Был көнгә ҡәҙәр Әсмәгә бер хәреф улһын дәрес бирелмәне. Ғәйшә абыстайҙың тарафындан: «Әлеп, би, ти, си, ләх», — тип, күңеленә бикләттерелмәктеке Әсмәне, хәтергә алынманығындан улмай, бәлки билғәкес[6], быны фәүҡелғәдә[7] бер олуғ эш хисап ителдегендән ине.

Ваҡыты тамам килмәҫтән мөҡатдәм, булыр-булмаҫ рәүештә һабаҡ уҡытмаҡ, хосусән әлифбаның исемдәрене хифыҙ[8] иттермәк, баланың башыны боҙмаға вә дәрестәрене низамһыҙ[9] уҡымаға сәбәп инеке мәғлүмдер.

---

[1] *Мәхдүм, мәхдүмәләр* — дин башлыҡтарының ир һәм ҡыҙ балалары.
[2] *Асла* — һис тә.
[3] *Дәүләт* — бында «байлыҡ» мәғәнәһендә.
[4] *Шөруғ* — тотоноу, башлау.
[5] *Һиммәт* — ялҡынлы дәрт.
[6] *Билғәкес* — киреһенсә.
[7] *Фәүҡелғәдә* — ғәҙәттән тыш.
[8] *Хифыз* — һаҡлау, яҡлау.
[9] *Низам* — тәртип менән.

Мәғлүм заманы етешмәстән моҡатдәм йөк тарттырылмыш ат имгәнеп, эштән сыҡтығы кеби, ваҡыты етмәстән моҡатдәм һабаҡ уҡыттырылмыш бала һәм имгәнеп ҡалмаҡталыр.

Насар мөғәллимдәр вә дәрес ысулындан хәбәрһеҙ хәлфәләр ҡулында алтын уласаҡ балаларҙың тупраҡ улып ҡалдыҡтарыны яҡшы белдеге сәбәбендән, Ғәббәс мулла ҡыҙы Әсмәгә һабаҡ уҡытмаҡ өсөн быйдан ике-өс сәнәләрҙән биреү әҙерләнмәктә ине.

Әсмәнең һабаҡ уҡытмаҡта улан шатлығы, зирәклеге илә монасип улдығындан көндән-көн алға бармаҡта ине. Быны күреп, Ғәббәс мулла илә Ғәйшә абыстай бәйәне мөмкин дәгел дәрәжәлә ҡыуанырҙар вә йәнәбе илаһиға[1] нә кеби шөкөрҙәр итергә белмәй ғажиз ҡалырҙар ине. Ваҡиған, бөйлә шатлыҡ иң дөрөҫ вә нәзире[2] улмаған бер шатлыҡтыр...

Әсмәне тәрбиә итмәктә ата вә әсәһе был мәртәбә сәғи[3] иттектәре кеби, бәхет вә сәғәҙәте хаҡында һәм һәр даим[4] Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтенә мөнәжәттәр ҡылырҙар вә ялынырҙар ине. Вә донъя һәм ахирәттә улан өмөттәре лә Әсмәлә ине.

Ваҡиған бала, әгәр ҙә тәрбиәле улыр иһә, ундан күп шәй өмөт улынып.

Бынлар үҙҙәренең балаларыны буйлә бер тырышлыҡ илә тәрбиә иттектәре өсөн, буйлә олуғ өмөттәр итмәктә хаҡһыҙ дәгелдәр ине.

Бынлар Әсмәнең киләсәк көндәрене берәм-берәм тиерлек тәфәккер ҡылырҙар, хатта ки нә кеби затҡа тапшырасаҡтарыны ла төшөнөрҙәр ине. Бала дәгелме?

## Сәлим бабай

Сәлим бабай Ғәббәс мулланың та[5] атаһы заманаһындан бире торор, йәй көндәрендә умарта һаҡлар, ҡыш көндәрендә ваҡ-төйәк йомоштарға йөрөр; алтмыш йәшәрлек бер ҡарт ине.

Бер аралыҡ, бынларҙан сығып, Хикмәт хажиҙа вә ундан һуң Сөләймән хәҙрәттә һәм бер ҡәҙәр хеҙмәт итте иһә лә, «өйрәнгән яу һуғышырға яҡшы» тиә, кинә Ғәббәс мулла атаһына ҡайтып килмеш ине. Ата вә әсәһе вафат улып, йорт тәдбире[6] Ғәббәс муллаға ҡалдығы һуңында, Сәлим бабай һәм әүәлге мәнсабында[7] ҡалмыш ине. Ғәббәс мулла «беҙҙең атай белмәгән» тиәр балаларҙан улманығындан, атаһы заманында улан хәл вә мөғәмәләләре, атаһының дуҫтарыны йөмләһене әүәлге хәлендә тотор ине. Сәлим бабай, һәр нә ҡәҙәр умарта ҡарауылсыһы иһә лә, башҡа умарта вә ҡыр ҡарауылсылары ҡәбилендән юҡ ергә

---

[1] *Йәнәбе илаһи* — Алла.
[2] *Нәзире* — өҫтөнлөгө, оҡшашы.
[3] *Сәғи* — тырышлыҡ.
[4] *Даим* — һәр ваҡыт.
[5] *Та* — тиклем.
[6] *Тәдбир* — эштең аҙағын уйлап эшләү, алдан күреү.
[7] *Мәнсаб* — урын, эш, хеҙмәт.

ҡартаймыш дәгел, бәлки кисмеш (үткән) заман хәбәрҙәрене, ата-баба мәҡәлдәрене, милли мәҫәлдәрҙе, әһле исламға мөнәсәбәтле улан хикәйәләрҙе уҡыласаҡ бер китап ине. Иҫке тарихтарыбыҙҙы һөйләнегендә, иҫке быуаттарҙы вә иҫке быуаттың халайыҡтарыны тамам күҙ уңына килтерер ине. Үгеҙҙәр егеп, арбаларҙың көпсәктәрене (тәгәрмәс) һары май илә майлап, һырт өҫтәрендән йөрөүҙәрене һөйләнегә ваҡытында, тыңлаусылар, кәнделәренең тимер юл, пароход, телеграмм, телефон заманаһында инектәрене онотоп, иҫке донъя кешеләре улырҙар ине.

Сәлим бабай яңғыҙ Ғәббәс муллаға дәгел, һәр төрлө халыҡҡа ярай торған ине Бының хикәйәләрендән имамдар, шәкерттәр, байҙар, ҡатындар, хатта ки ҡыҙҙар ләззәт алырҙар ине. Сәлим бабай Ғәббәс мулла бабайы улмай, бөтә халыҡ бабаһы ине. Һөйләнеге ваҡытта, башҡа хикәйәтселәр кеби ялындырмаҫ, тәкәбберләнмәҫ, иркәләнмәҫ ине. Һәм дә нә ҡәҙәр ләззәтле итеп һөйләр, асла йүткермәҫ, сөскөрмәҫ, тамаҡ ҡырмаҫ, урынһыҙ ерҙә һүҙҙе тәкрар (ҡабатлап) әйтмәҫ, ҡулыны һауала йөрөтмәҫ ине.

Кәнде милли тарихтарымыҙ вә табышмаҡтарыбыҙҙы белмәктә назирһыҙ (күреүсеһеҙ) бер кемсәмеҙ улдығы кеби, ҡурай уйнарға, йырларға улан маһирлығы ғаҡылдарҙы хайран итер ине. Йәй көнөндә ауыл ҡаршыһында улан тау башындан моңайып йырлап ебәргән тауыштарына бөтә ауыл халҡы йоҡоларындан уяныр ҙар, тышҡа сығып, камил рәхәтлек илә тыңлап ултырырҙар ине.

Ҡымыҙ эсер өсөн килмеш төрки тел уҡымаҡта улан бер рус студенты, Сәлим бабайҙың саф вә ҡалын тауышы илә:

Әй, ҡайҙа ул көн ки беҙҙә шәп
тороуҙар бар ине,
Әммә дошмандарҙа ғәмдәр,
эс бошоуҙар бар ине,
Бер заман сығыр инек беҙ
ҡырға дуҫ-иштәр илән,
Унда уйындар, көлөүҙәр,
һикереүҙәр бар ине.
Һай, ғүмерҙәр үтте китте,
ҡайҙа китте ул заман! —

уҡынығы вә тәкрар иттегене тыңлап тороп, Мәскәүгә ҡайттығында нотаға алдырып, «Сәлим» исеме вирмеш (биргән) ине.

Сәлим бабайҙың май, июнь айҙарында, халыҡтар урындарына килеп яттыҡтары һуңында уйнамыш ҡурай тауышы, станцияла улған электрик, бөтә шәһәрҙә улған фәреғтәрене[1] эшләттеге кабилындан (төркөмөнән) ҡарт, йәш ир, ҡатын, егет, ҡыҙ — йөмләһенең (барыһының) күңелдәрене һелкетер ине. Быуындарыңдан, арҡа вә бил һөйәктәреңдән һыҙланып ятмаҡта улған ҡарттар урындарындан һикереп торҙоҡтарыны белмәй ҡалырҙар вә «һай, үҙәктәрем өҙөлә!» тиерҙәр ине.

[1] *Фәрег* — тармаҡ, киҫәк.

Килендәрене һүгеп, ҡырып, бимаза итеп йөрөмәктә улған ҡәйнәләр бының ҡурай вә йәки йырланығы тауыштарыны ишеттектәрендә май кеби йомшарып китерҙәр, килендәренең ҡосурлыҡтарыны (кәмселектәрен) ғәфү итерҙәр, ғәфү дәгел, ороштоҡтары өсөн үкенеп ғөзөр[1] итерҙәр ине.

Сәлим бабай ҡурай уйнаған йәки йырлаған кисәлә йәш килендәр бик рәхәт ойорҙар, күңелле төштәр күрерҙәр ине.

Был шәйҙәр ғәжәп дәгелдер. Бишектә улан сабый балалар, тирбәтеүселәренең моңло тауыштарындан ләззәт алып ойорҙар; аттар ҡыңғырау тауышына йыуанып тотоштан йүгерерҙәр; ғәрәптәрҙең вәзенле (һүҙ формаһы) көйҙәрендән әҫәрләнеп дөйәләр ашығып-ашығып китерҙәр. Ошбуның өсөн: «Яҙ һәм яҙ көнөнөң сәскәләрендән, уйын вә уйындың тауыштарындан ләззәт вә әҫәр алмаған кемсә, һис дауа ҡабил (ҡабул) дәгел рәүешсә тәбиғәте боҙолмоштор», тиелмештер...

Сәлим бабай 1873 тарихында Рәсәй ғәскәре Хиваға сәфәр иттеге ваҡытта бөйөк бер гәзиттең мөхбире (хәбәрсеһе) улан американлыға тәржемәи (тәржемәсе) сифаты илә Ырымбур шәһәрендән китеп, берлектә ҡырғыҙ, Хива тупраҡтарындан йөрөп дыулашып ҡайтмыш ине.

Мәҙкүр мөхбир һәр нә ҡәҙәр Рәсәй ғәскәрҙәре эҙендән йөрөнө иһә лә, ҡәнде ҡосуры (кәмселеге) сәбәбендән ғәскәрҙең хивалылар илә осраштығы көнгә етешә алманығыны өҫтөндән төшөрөп, Сәлим бабайға иснад әйләмеш[2] һәм дә ялғансы, ялҡау, иҫерткес эсеүсе тәржемәйем сәбәбендән мәтлүб улан[3] көнгә етешә алманым тиә гәзитенә хәбәр бирмеш ине.

Хәлбуки (шулай булыуға ҡарамаҫтан) был туғырыла Сәлим бабайҙа ҡосурлыҡ юҡ ине, һәм дә Сәлим бабай ялҡау дәгел, ғәйәт ижтиһадлы вә шат әҙәмдәрҙең бере ине. Иҫерткес эсмәк дәгел, иҫерткес эскән кемсә илә хатта мәжлестәш улмаз ине. Иҫерткес эсмәк — ағыу эсмәк ҡәҙәр зәһәрле вә һәр төрлө хәстәлектәрҙең (ауырыуҙарҙың) баш сәбәбе инегене бер докторҙан ишетеп, тамам ҡәнәғәт әйләмеш ине. Беҙ иһә Сәлим бабайҙың тәржемәһене яҙҙығымыҙ өсөн ғәйептәрҙе юҡ тимәгә вазифамыҙҙыр. Ләкин бар ғәйептәрҙе йәшермәгә иҡтидарымыҙ (көсөбөҙ), әлбиттә, юҡтыр. Мәҫәлән, Сәлим бабайҙың тәмәке тарттығыны йәшереп ҡалдырмаҫмыҙҙыр.

### Күңелһеҙ хәбәр

Муса туғрыһында, дөрөҫө лә Ғәббәс мулланы Муса урынына вә һис улманығында Муса янына ебәрмәк өсөн Хикмәт хажи ижтиһад итеп йөрөнөгө бер көндә, дуҫ вә белештәре, мәхәллә әһелдәре

---

[1] *Ғөзөр* — һылтау, сәбәп, ялыныу.
[2] *Иснад әйләмеш* — ауҙарған.
[3] *Мәтлүб улан* — шулай булған, һоралған.

илә вәдәғ[1] итеп, Ғәббәс мулла хаж сәфәренә сығып китте. Был ваҡиға халыҡ араһына бөйөк бер әҫәр һалды. Бәғзеләре, Хикмәт хажи тарафындан ут һалынасаҡ дарының күтәрелмәкендән ҡурҡып китте, вә бәғзеләре лә, ҡеүәтле вә сәләмәт заманында өҫтөнән фарызыны төшөрмәк өсөн китте, тиә һөйләрҙәр ине. Ләкин нә ниәт илә китһә лә китһен, бының ошбу сәфәре кәндеһе өсөн мүжиб[2] хәсрәт ине. Ваҡиған, мәхәллә халҡы хәсрәтләнер, вә Хикмәт хажиҙың буйлә юҡ эштәр артындан йөрөүе өсөн асла риза улмаҫтар ине. Ғәббәс мулланың һәр нә ҡәҙәр дуҫты күп улһа ла, һәр дуҫ сер һөйләмәгә әһел улманығындан, серҙәше лә яңғыҙ бер зат ине. Ғәббәс мулланың йөмлә шатлығына ихлас илә шатланыусы вә хәсрәттәрене уртаҡлаусы ошбу ғаҡыллы вә инсафлы зат улып, был иһә Ғәйшә абыстай ине.

Әгәр ҙә һөйләр иһә Ғәббәс мулланың нә ки сәбәпкә бинаән (таянып) киттегене Ғәйшә абыстайҙан аңламаҡ мөмкин ине. Ләкин яңғыҙ мөмкин ине. Юҡһа Ғәйшә абыстай ағыҙындан серҙәр дәгел, ғәҙәти һүҙҙәр һәм ағыр алындығындан, был кеби бөйөк сер алынасаҡ дәгел ине.

Ғәббәс мулланың сәфәрендән ике вә Янбағ шәһәрендән яҙмыш улан һуң ҡатындан бер ай үттеге һуңында, Ғәйшә абыстай ҡулына сит мәмләкәт (Төркиә дәүләте) маркаһы илә бер мәктүп бирелде. Һай! Яҡшы хәбәр булһа ярар ине… Был хатты астыҡында ҡулдары тетрәне, йөрәге һелкенде, йөмлә тәне бер ҡыҙҙы, бер өшөнө. Беҙҙәр иһә был хәлдәрҙе «эс һиҙмәк» илә тәғбир итәмеҙ (аңлатабыҙ). Ләкин нә күрһен, хат Ғәббәс мулла хаты улмай, бәлки башҡа бер белеш кемсә хаты улып, Янбағ илә Мәҙинә араһында Ғәббәс мулланың вафат улған хәбәре бирелмеш ине!.. Вай! Был ҡара хәбәргә, вай!.. Ғәйшә абыстай ҙа «Инна…» уҡып, һушһыҙ улараҡ ергә ятты. Сабый улан Әсмә лә үлмештең нә инегене лазымынса тәсауыр итмәюр[3], вә унда барған кемсәнең дә тәкрар ҡайтманығыны белмәюр ине…

Ғәйшә абыстай ҙа һушы килдегендә ҡыҙы Әсмәне ҡосаҡлап, оҙон мөддәт (ваҡыт) ағланы (иланы) вә:

— И, бәнем ғазизем хамийым[4]! Вай бәнем мөхтәрәм зәүжем[5]! Фираҡың (айырылыу) уты яндыралыр вә шуға мәжбүр улараҡ ағлаюрым! Хәлбуки терек улараҡ йәнәбе илаһиның хисапһыҙ инсандарына наил[6] улдығың өмөтөмдәр…

— И, Раббым! Иртәгә көн ҡыҙым илә бәне, мөхтәрәм зәүжем илә берлектә, рәхмәттәрең күләгәһендә жәмғы (бар бул) әйлә!.. — тиә ағлар вә кәндеһе сабырға дәғүәт ҡылыр (һорар) ине.

---

[1] *Вәдәғ* — һөйләшеп, һүҙ ҡуйышып, аманат.

[2] *Мүжиб* — сәбәп итеүсе, барлыҡҡа килтереүсе.

[3] *Лазымынса тәсауыр итмәюр* — күҙ алдына килтererлек түгел.

[4] *Хами* — яҡлаусы.

[5] *Зәүж* — ҡатындың ире.

[6] *Наил* — теләккә ирешеү.

Гәйшә абыстай һәр нә ҡәҙәр буйлә олуғ ҡазаға туғыры килде иһә лә, көндән-көн кәндене тәслиә итеп (йыуатып) вә мәтәнәттән (сыҙамлылыҡтан) айырылмайып, зилләттәргә[1] төшмәне. Бәлки әүәлге ғәмәлдәрене вә кәсептәрене ижрә итмәктә[2] вә ҡыҙы Әсмәне һәр нә ҡәҙәр Ғәббәс мулла дәрәжәһендә улмаз иһә лә һәмишә[3] гүзәл тәрбиә итмәктә улды. (Афарин, был ғәйрәтле ҡатынға!..)

Гәйшә абыстай иһә һәр нә ҡәҙәр сабырлы, вәҡәрле[4] ине иһә лә, буйлә хәбәрҙән бер сәнә үттеге хәлдә хәсрәте һис еңеләймәҫ ине. Ләкин ҡыҙы Әсмәне хәтерләп, дәхи йәнәбе илаһиҙан ғүмер һорар ине. Бисара бәндә! Бер дәҡиҡа[5] эсендә бербереһенә зидди[6] улан доғаларҙы әйтмәктәлер! Кәнде өсөн нә шәй мәслихәт, нә шәй мәслихәт дәгел — һис белмәйҙер.

## Бисара Әсмә

Ғәббәс мулла хәбәрендән бер йыл һуңында Ғәйшә абыстай вафат улды вә унын вафатындан һуң бер һәфтә (аҙна) һуңында күршенән зоһур итмеш (килеп сыҡҡан) янғында Ғәббәс мулланың йөмлә әшйә[7] вә йорттары янып, бер шәйҙәре ҡалманы. Хәсрәт вә шатлыҡ күп ваҡытта бер-беренә тоташ килмәктәлер.

Донъя буйләлер — шатлығында ла дауамы юҡ, хәсрәтендә лә! Илле йыл батшалыҡта ғүмер кисергән Индалес хәлифәләрендән улан Ғабдрахман кәндейең шатлыҡ күрмеш улан көндәрене хисап итеп, яңғыҙ ун ете көнгә ирештермештер. Инде ғәйреләргә (бүтәндәргә) нә ҡалды?!.

Унынсы йәшенә сыҡмыш улан Әсмә, ата вә әсәнән һәм дә иң ғәзиз вә иң мәрхәмәтле ата вә әсәнән йәтим ҡалды. Бының башына килгән ҡайғыларҙың ағырлығыны һәр кем үҙ фекере илә белер…

Бисара Әсмә ата вә әсәһе өсөн хәсрәт сигер, һағынып аһ итер, ләкин кәнде истиҡбалы[8] хаҡында фекер йөрөтмәгә ғаҡылы етешә алмаҫ ине.

Хәлбуки истиҡбалы, көҙ көнөнөң төндәре миҫалында ҡараңғы, телеграмм сыбыҡтары рәүешендә башы вә осо һис күрелмәҫ ине. Олуғ философтарҙан бере «донъяла мәшәҡәтһеҙ рәхәт күрелмәҫ» тинеге кеби, бабаларымыҙ ҙа «яфаны сикмәгән инсан (кеше) сафаның[9] ҡәҙерене белмәҫ!» тиерҙәр, имеш. Ләкин был кеби михнәт зикеренә ғарыҡ[10] улан бисараның донъяла

---

[1] *Зилләт* — түбәнселек.
[2] *Ижрә итмәктә* — үтәмәктә.
[3] *Һәмишә* — һаман.
[4] *Вәҡәр* — үҙен оло тота белеү.
[5] *Дәҡиҡа*— нескә, тәрән фекер.
[6] *Зидди* — ҡапма-ҡаршы, ҡаршылыҡлы.
[7] *Йөмлә әшйә* — бөтә нәмәһе, әйберҙәре.
[8] *Кәнде истиҡбалы* — үҙенең киләсәге.
[9] *Сафа* — рәхәтлек, кәйеф, ҡайғыһыҙлыҡ.
[10] *Зикеренә ғарыҡ* — иҫенә төшөү, уйға сумыу.

рәхәт күрәсәгене ғаҡылдар ғәйәт йыраҡ күрерҙәр. Шөйлә улһа ла, йәнәбе илаһиның ғәжәп хикмәттәре әҙәм ғаҡылының үлсәүен ирешәсәк шәйҙәрҙән дәгелдер.

Яҡын ҡарындаштарындан мәхрүм улан Әсмәне ауылдың иғтибарлы кемсәләрендән һаналмаҡта улан Йософ бабай тәрбиә итмәк улып ханаһына алды. Ғәббәс мулланы сәүҙегендән (яратҡанлығынан) Алла ризаһы өсөн тәрбиә итеп, аҫрамаҡ улды.

«Тәрбиә» тинек. Ләкин Йософ бабай тәрбиәһе яңғыҙ ашатып, эсертеп, хәжәт[1] кейемдәрҙе бирмәктән ғибарәттер. Әммә Ғәббәс мулла тәрбиәһе — йән вә күңелде нурландырмаҡ вә зиһенде киңәйтеп, тәхсиле кәмаләт[2] юлыны асмаҡ вә рәғбәтләндермәктән[3] ғибарәт ине. Ике төрлө тәрбиәнең араһында улан айырма бик бөйөктөр.

Әгәр ҙә йорт вә әсбаптары сәләмәт улһа йәки Ғәббәс мулланың дәүләт хазинаһында бер-ике мең аҡсаһы ҡалмыш улһа ине, буйлә йәтим баланың хаҡыны белмәк вә нәфсе файҙаһына ҡатыштырмай, Аллаһы Тәғәлә ризаһы өсөн тәрбиәләмәк вазифаһыны тирә-яҡта улан муллалар, бәлки, башҡаларға бирмәҫтәр ине! ...Ләкин юғарыла һөйләнегемеҙсә, малы-фәләне улманығындан Йософ бабай химәйәһенә төшмәге лазым килде.

...Йософ бабай ғаиләһе был ауылда яҡшы исем тоттоғондан, бының ханаһында йәшәнегендә Әсмә һәр нә ҡәҙәр милләт әсәһе ула алмаһа ла, шәйәт милләт бәләһе лә улмаҫ. Быға ла шөкөр. Зира милләт бәләһе вә өммәт (милләт) йөҙ ҡараһы улан беҙҙең диндәш вә нәҫелдәштәрҙең таш аҫтарындан, урман араларындан сыҡмыш заттар улмай, бәлки кәнде арамыҙҙа тыуып үҫмеш, ләкин ғаиләсә алынмаһы лазым улан тәрбиәләрҙе алмаҡтан мәхрүм ҡалмыш заттарҙыр.

### Саф мөхәббәт

«Б...» ҡәрйәһе (ауылы), ҡымыҙы ләззәтле, һауаһы яҡшы, шишмәһе гүзәл, һыуы тәмле (тәғәмле), сәхрәләре иркен улмаҡ, әрәмәһендә һәр төрлө ҡоштар һайрамаҡ илә мәғрүф[4] улдығындан, ҡымыҙ эсергә вә истирәхәт (ял) итергә килеүселәрҙең иң күп килмәктә улдыҡтары бер ҡәрйәлер. Был ҡәрйәгә Петербург, Мәскәү, Ҡазан, Вятка, Харьков, Томск, Иркутск, хатта Финляндияларҙан әҙәмдәр килер вә бер еренә тамам ғәрип улан заттар улыныр ине.

Хатта кискән сәнә (үткән йыл) Венгрия (Мәжарстан) мәмләкәтендән (дәүләтенән) йәш бер мөғәллим бар ине. Ләкин һәр нә ҡәҙәр был зат ҡымыҙ эсеүселәр йөмләһендән күрелер иһә лә, быңдан мең

---

[1] *Хәжәт* — кәрәк.

[2] *Тәхсиле кәмаләт* — тулы белем, ғилем алыу.

[3] *Рәғбәтләндермәк* — ҡыҙыҡһындырыу.

[4] *Мәғрүф* — билдәле.

сәнә моҡатдәм[1] ата вә бабалары был тарафтан һижрәт[2] иттектәрендән, анларҙан ҡалған әҫәрҙәрҙе тәфтиш (тикшереү) итмәктә вә венгр лисаны[3] илә башҡорт лисаны араһында улан мөнәсәбәттәрене белмәк өсөн башҡорт лисаныны үгрәнмәктә ине.

Мәзбүр[4] зат гүзәл төркисә һөйләшә белдекендән башҡорт лисаныны белмәктә, хатта сарыф (морфология) вә нәхүләрҙе (синтаксис) бер ҡәҙәр ҡағиҙә тәхетенә алараҡ венгр лисаны илә моҡәйәсә итмәктә[5] күп мөшкөллөк (ҡыйынлыҡ) сикмәмеш ине. Был зат, башҡорт ҡәүеме болғар төрөктәренә башҡа дәгел (түгел), бәлки анларҙан бер ҡисем (өлөш, бүлем) инегене вә лисан йәһәтенсә һәр бер ҡәүемдә улдығы бәғзе бер хәрефтәр тәбдил улынараҡ[6] вә йәки йөҙьи[7] башҡалыҡ үҙәрендә истиғмал (ҡулланыу) ителмәктән ғибарәт инегене вә болғар төрөктәренең лисандары иң иҫке вә садә (ябай) улып, бөтә төрөк ҡәүемдәрендә (халыҡтарында) истиғмал ителгән лисандарға иғтибар ителмәгә лайыҡ инегене иғтираф (өҫтөнә алыу) әйләмеш ине.

Башҡорттар хаҡында, дөрөҫмә-түгелме, ҡымыҙға һыу ҡаталар (ҡушалар), һыйыр вә кәзә һөтө ҡатыштыралар тиә бер һүҙ мәшһүр улдығындан, ҡымыҙ эсергә килгән кемсәләр мәсрафтарға[8] күп илтифат итмәй, һәр ваҡытта инабатлы[9] вә имен заттарҙы интихап[10] итерҙәр.

Йософ бабай бынларҙың иң беренселәрендән ине.

Эсмә килеп керҙеге көндә Йософ бабай ханаһында ун биш ғәдәд[11] миҡдары кемсә ҡымыҙсы улыныпп, бынларҙың араһында ун биш-ун алты йәштәрҙә улһа кәрәк, гүзәл чәһрәле[12], инсафлы, ғәйәт мөләйем бер шәкерт һәм булыныр ине. Был шәкерттең ошбу ҡыш көндәрендә сәләмәтлегенә хәлел[13] килдегендән табиптар (дауалаусылар) мәслихәте илә Ҡазан шәһәрендән килмеш, бында килдегендә юғарыла иҫкә алынған Будапештлы венгр илә белеш улмыш ине. Ләкин мәҙкүр мосафир, бындан ҡалҡып, Верхнеурал вә Уса өйәҙҙәрене сәйәхәт итмәгә киттеге көндән бире көндәрен ғәйәт күңелһеҙлектә кисерер ине.

Был шәкерттең килдегенә тамам бер ай улдығындан холҡо, фиғеле (эше) һыналмыш вә ғәйәт мәғсум (саф) бер бала инегенә ҡәнәғәт ителмеш ине. Хатта Йософ бабай ханаһы дәгел, йөмлә иғтибарлы заттар быны сәүәрҙәр (яраталар) вә балаларыны бының кеби шәкерт итмәгә арзу (теләк) итерҙәр ине.

---

[1] *Сәнә моҡатдәм* — йыл элек.
[2] *Һижрәт* — күсеп китеү.
[3] *Лисан* — тел.
[4] *Мәзбүр* — юғарыла әйтелгән.
[5] *Моҡәйәсә итмәктә* — сағыштырыуҙа.
[6] *Тәбдил улынараҡ* — үҙгәртелеп.
[7] *Йөҙьи* — бик әҙ, ваҡ, әһәмиәтһеҙ.
[8] *Мәсраф* — тотонолған аҡса, сығым.
[9] *Инабат* — ышаныслы.
[10] *Интихап* — һайлау.
[11] *Ғәдәд* — һан, дана.
[12] *Чәһрә* — төҫ, бит, йөҙ, ҡиәфәт.
[13] *Хәлел* — кәмселек.

Шәкерт илә Әсмә бер-беренә осрашырҙар вә тәкәллефһеҙ (тартыныуһыҙ) һөйләшерҙәр ине. Әсмәнең ҡара хәбәрҙәрене вә хәсрәтле сәғәттәре инегене шәкерт белер вә зиядә ҡыҙғаныр, әгәр ҙә элендән[1] килер иһә, кәнде йәнене фида итәрәк Әсмәнең ата вә әсәһене кире донъяға ҡайтарыр ине.

Шәкерт был мәхзүн (ҡайғылы) ҡыҙҙы күрҙегендә тәслиә (йыуатыу) итмәгә һалышыр, вәғәз (өгөт) итмәгә тырышыр, ләкин мыуафиҡ улмаюр ине. Әсмә, нәҙек (нескә) вәғәздәргә әһел күреләсәк бер йәштә ул манығы кеби, шәкерттең һәм хазинаһында сәрмаяһы (капиталы, аҡсаһы) аҙ ине... Был ҡыҙға шәкерт кәнде янында улан хикәйәт китаптарыны һөйләр вә уҡытыр ине. Был хәл бер ай дауам итте. Ләкин бер-беренә тамам мунис[2] улмыштар вә бер-бере илә рәхәт вә хозур тапмаҡталар ине. Бынлар араһында һис кемгә шөбһә һалмаясаҡ улған саф мөхәббәт бар ине. Был ике йәш, был ике йәтим бер-беренең хәлдәрене белмәк дәгел, хатта кәнде хәлдәрене белмәҫтәр ине. Бер-берене сәүҙектәре (яратыуҙары) вә бер-берене күрмәгә һәр ваҡыт арзу (теләк) итеп торҙоҡтары хәлдә: «Сәне сәүәм, яратам!» — тиә алмаҫтар тимәкте аяла (төптө) белмәҫтәр, донъяла буйлә һүҙҙәр вә буйлә тәғбирҙәр бар инегендән дә хәбәрҙар дәгелдәр ине. Мөхәббәттең нә инегене аңламаҫтарындан моҡатдәм бынлар бер-беренә мөхәббәт итмештәр ине. Әммә нә ҡәҙәр ҙә саф вә халис[3] мөхәббәт ине!..

Быларҙың күҙҙәре һөйләшер, күңелдәре холус[4] үҙәрендә серләшер, бер-берендән шикәйәт вә бер-беренә шелтә итешерлектә кәнделәре иһә хәлдәрҙән тамам бихәбәрҙәр (белмәйҙәр) ине. Мөхәббәт донъяһы башҡа бер донъялыр!.. Иң саф күңелле вә иң гүзәл холоҡло заттарҙы мөхәббәт әһелдәре араһындан эҙләгеҙ!..

Бер-беренә осраныҡтары ваҡытта йөҙҙәре нурланыр, йөрәктәре һелкенер, теҙҙәре тетрәр, йөмлә (бөтә) шатлыҡ вә хәсрәттәре онотолоп, яңғыҙ ҡаршыларында берберене күрерҙәр. Әммә нә ҡәҙәр ҙә саф вә халис мөхәббәттер!

**?** **1.** Повестың инеш һүҙендә автор ни өсөн «башҡорттар хаҡында берике йөмлә яҙмаҡ кәрәк булыр» тип тапҡан. Ибн Фаҙлан кем булған һәм ул ниндәй юлъяҙма ҡалдырған? **2.** Ғәббәс муллаға ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлама бирегеҙ. **3.** Повестың сюжеты ниндәй алымға ҡоролған? Әсмәнең Сәлим бабайҙарҙа тәрбиәләнеүе, Ғәббәс мулланың юғалыуы, артабанғы яҙмышы, етем Әсмәнең ауыр хәлдәре — был ваҡиғалар аша автор ниҙәр аңлатырға теләй, ниндәй мәғрифәтселек ҡараштарын үткәрә? Шулар хаҡында һөйләгеҙ. Р. Фәхретдиновтың ғаилә, тәрбиә хаҡында әйткәндәрен иҫегеҙгә төшөрөгөҙ.

---

[1] *Әлендән* — ҡулынан.
[2] *Мунис* — эйәләшеү, дуҫлашыу.
[3] *Халис* — ысын.
[4] *Холус* — ихлас.

## НӘСИХӘТТӘР*

● Хөрмәтле балалар! Әшһөйәр, изгелекле, яҡшы күңелле кешеләр һәр ваҡыт хөрмәтле була һәм яҡын күренә, быны иһә үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ. Ата-әсәгеҙ һеҙгә ҡарата иң ауыр һәм мәшәҡәтле хеҙмәттәрҙе башҡарған һәм һаман да үтәй. Һәр ваҡыт ҡайғығыҙҙы уртаҡлашып, бәхетегеҙ өсөн тырыша... Шуның өсөн... мәшәҡәттәренең хаҡын ҡайтарыу мөмкин булмаһа ла, уларға ихласлыҡ менән хеҙмәт итеүсе һәм хөрмәт күрһәтеүсе булығыҙ!.. Һеҙгә лә иң яҡын кешеләр — ата-әсәгеҙ, уларға һәр ваҡыт итәғәтле булығыҙ.

● Донъяла торған ваҡытта шатлыҡтарҙы һөйләр, ҡайғыларҙы сисер, йәғни бушатыр өсөн иң яҡын бер кешегә мохтажлыҡ була. Ата-әсәгеҙҙән башҡа бындай яҡын кеше булмаç. Сөнки улар баланың шатлығы һәм хәсрәттәре өсөн ҡулдан килгән бөтә сараларҙы алдан күрергә тырыша. Шуның өсөн серҙәрегеҙҙе ата-әсәгеҙгә һөйләгеҙ, серҙәрегеҙҙең хазиналары һәр ваҡыт уларҙың күңелдәрендә булһын!

● Тәнегеҙ үçеп, көс кергәс, ҡулығыҙҙан килгән эштәрҙә ата-әсәгеҙгә ярҙамсы булығыҙ. Улар ҡартайғас, уларға һис асыуланмағыҙ. Шәфҡәт һәм хеҙмәттәрегеҙҙе тағы ла арттырығыҙ, сөнки улар һеҙҙе бәләкәй булғанығыҙҙа, йәш ваҡытығыҙҙа тәрбиәләп үçтерҙе. Бер көн һеҙ ҙә атай булырһығыҙ, уйлап ҡарағыҙ, балаларығыҙ хөрмәтегеҙҙе һаҡламаһа, быға риза булырһығыҙмы?

● Ата-әсәгеҙҙән һуң туғандарығыҙ — иң яҡын кешеләр. Шуның өсөн улар менән һәр ваҡыт әҙәпле һәм мәрхәмәтле булығыҙ... Туғандарығыҙҙың әйтеүен көтөп тормай, һәр эштәрендә ярҙамсы булығыҙ, ҡулығыҙҙан килгән изгелектәрҙе уларҙан һис ҡыҙғанмағыҙ.

● Ҡайһы бер балалар шулай була. Аталары үлгәс, мал бүлеү өсөн туған һәм ҡарындаштары менән асыуланыша. Бер-береһе менән әҙәпһеҙ була... Үҙҙәренең ҡан һәм тән ҡарындаштарын рәнйетеп, үҙҙәре лә бәхетһеҙ булырҙар, ата-әсәләренең исемдәрен дә хөрмәтһеҙ итерҙәр, ғаилә һәм ырыуҙарын мәсхәрәлеккә ҡалдырырҙар. Һеҙ үçкәс, бындай балалар кеүек булмағыҙ... Киреһенсә, туғандарығыҙ менән һәр ваҡыт бергә булығыҙ, нәжесте (боҙоҡ холоҡ һәм асыу сәбәптәрен) һәр ваҡыт тупраҡ аçтына күмегеҙ. Бындай булғанда аҙ мал да оҙаҡ һаҡлана, ҡыçҡа ғүмер ҙә ҡатмарлыҡһыҙ үтер.

● Өй эсендә булғандар менән матур мөнәсәбәттә булыу иң яуаплы эш. Ошоноң өсөн өй эсендә булыусыларға әҙәпле һәм миһырбанлы булығыҙ. Өй эсендәгеләр рәхәт һәм шат булһалар, һеҙ ҙә рәхәт һәм шат булырһығыҙ...

---

* Айырым өҙөктәр.

Йомшаҡ һүҙле булыу — әҙәм улы өсөн бөйөк байлыҡ.

● Мөғәллимдәрегеҙ уҡырға, яҙырға ҡушҡан эштәренең барыһын да мөхәббәт менән еренә килтерегеҙ.

● Кескенә ваҡыттан таҙалыҡ һәм тәртипте хөрмәт итеүсән булыу — баланың аҡыллы һәм тәрбиәле буласағына олуғ билдә. Шуның өсөн кейемдәрегеҙ таҙа, билдәле урында, китап һәм яҙыу әйберҙәрегеҙ тәртиптә булһын.

● Мәктәптән ҡайтҡас, китаптарығыҙҙы һәм дәреслек әйберҙәрегеҙҙе билдәле урынға ҡуйығыҙ, дәрестәрегеҙҙе эшләмәйенсә йоҡларға ятмағыҙ.

● Мәктәп эсендә лә, башҡа урында ла әҙәпһеҙ һүҙ һөйләмәгеҙ...

● Мәктәпкә йөрөүҙең һәм уҡыуҙың маҡсаты — иман белеү, тәрбиәле һәм камил кеше булыу икәнен хәтерегеҙҙән сығармағыҙ һәм ошо маҡсат өсөн ихлас йөрөгөҙ...

● Мәктәптәрҙә дәрестәр бөткәс: «Инде уҡыу ваҡыты үтте, белем дә етерлек булды», — тип, белемдән һәм китаптарҙан айырылмағыҙ. Буш ваҡытығыҙҙа яңы китаптар (кәбәк һәм сүп-сар булғандарынан башҡаларын), әҙәби әҫәрҙәр уҡығыҙ. Уҡыһағыҙ, зиһенегеҙ асылыр, аҡылығыҙ артыр, фекерҙәрегеҙ дөрөҫ булыр.

● Белем күңел күҙен аса, наҙанлыҡ, ҡараңғылыҡты бөтөрә, оло дәрәжәләргә тоташтыра, дошмандарға ҡаршы ҡорал була. Тормошто һаҡлай, донъя көтөү сәбәптәрен белдерә, йорт эсендә һәм, ғөмүмән, халыҡтар менән нисек булырға кәрәк икәнде өйрәтә. Белем — ғалимдарҙың зиннәте, кешеләрҙең хөрмәте, урланыуынан ҡурҡылмаған мөлкәт, бөтмәй торған байлыҡ... Һис бер ваҡыт ғилемгә тәкәбберлек күрһәтмәгеҙ.

● Матур китаптар — ғәжәйеп нәмәләр күренәсәк көҙгө, аулаҡтағы серҙәш, яңғыҙлыҡта иптәш, көсһөҙлөктә ярҙамсы, хәсрәттәрҙә шатлыҡ килтереүсе, фекерҙәрҙе нурландырыусы, үткән замандарҙың хәлдәрен һөйләп тороусы, тарихты хикәйәт итеүсе, аҡыллы кешеләрҙең аҡылдарын күҙгә күрһәтеүсе, хаҡы арзан, файҙаһы күп нәмә. Шуның өсөн китап алғанда һаранланмағыҙ. Китаптарҙан айырылмағыҙ.

● Ләкин китаптар араһында юҡ нәмәләр яҙылған, мәғәнәһеҙ нәмәләр менән тулғандары ла бар. Уларҙы уҡыу — ҡиммәтле ғүмерҙе бушҡа үткәреү. Шуның өсөн фекерҙәрҙе нурландырасаҡ, холоҡто пакларға ярҙам бирәсәк, аҡылды арттырасаҡ китаптарҙы һайлағыҙ... Файҙалы китаптарҙы уҡыу күңелгә шатлыҡ килтерә, фекергә аҙыҡ була, зиһенгә ҡеүәт бирә.

● Уҡыу кешенең йөҙөнә нур, күңеленә шатлыҡ килтерә. Шуның өсөн зиһен хеҙмәте менән шөғөлләнеүселәр арыҡ булһалар ҙа, аҡылдары һимеҙ һәм йөҙҙәре мөхәббәтле була.

● Остаз һәм мәктәп етәкселәре һеҙҙең эшегеҙҙе юлға ҡуйыусылар һәм һеҙҙең өсөн хәсрәт

сигеүселәр була... Улар тыйған эштәрҙе эшләмәгеҙ. Улар менән әҙәпле һөйләшегеҙ... Атайҙарығыҙ тәнегеҙҙе тәрбиәләп үҫтергән кеүек, остаздарығыҙ йәндәрегеҙҙе тәрбиәләп үҫтерә. Шуның өсөн остаздарығыҙ — бөйөк атайығыҙҙыр. Һеҙ быны ысын күңелдән ҡабул итегеҙ...

• Мәктәптә бергә уҡыған шәкерттәр менән матур йәшәгеҙ. Уларҙы туғандарығыҙ кеүек күрегеҙ. Улар менән йомшаҡ һөйләшегеҙ. Осрашҡан ваҡытта шатланып ҡаршы алығыҙ. Шатлыҡ һәм ҡайғыларығыҙҙы уртаҡлашығыҙ.

• Мәктәптән айырылғандан һуң, мәктәптә бергә көн кисергән иптәштәрегеҙҙе онотмағыҙ. Уларҙы ихтирам итегеҙ. Иң олуғ дәрәжәләргә ирешһәгеҙ ҙә, иң түбәндәре алдында ололанмағыҙ. Был әҙәпһеҙлектең билдәһе икәнен иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

• Һәр ваҡыт хөрмәт күрһәтеп тороу, хоҡуҡтарын ихтирам итеү дуҫлыҡты нығыта. Шуның өсөн дуҫтарығыҙға һәр ваҡыт ярҙамсы һәм таяныс булығыҙ. Инсан бер үҙе аҙ булһа, дуҫтары менән күп була. Дуҫтар ауыр һәм мәшәҡәтле көндәрҙә ярҙамсы булыу өсөн кәрәк.

• Йөҙ — күңелдең йомшаҡ йәки ҡаты булыуын күрһәтеүсе көҙгө. Шуның өсөн йөҙөгөҙгә иғтибарлы булығыҙ һәм ошо ҡағиҙәләрҙе үтәгеҙ: һөйләшкәндә ситкә ҡарап һөйләмәгеҙ һәм күҙегеҙҙең сите менән ҡарамағыҙ; һытыҡ һәм ҡараңғы йөҙлө булыуҙан, еңел йәки мәсхәрәле ҡараш ташлауҙан һаҡланығыҙ. Дуҫ-иштәрегеҙ тартынмай, иркенләп һөйләшһен өсөн һәр ваҡыт асыҡ йөҙлө булығыҙ.

• Боҙоҡ әйберҙәрҙе ишетеү аҡылға боҙоҡлоҡ килтерә. Шуның өсөн... һүҙ йөрөтөүселәр һәм ғәйбәт һөйләүселәрҙе тыңламағыҙ...

• Ашарға ултырырҙан алда ҡулығыҙҙы йыуығыҙ һәм яҡшылап һөртөгөҙ.

• Үҙегеҙҙән оло кешеләр булһа, уларҙан алдараҡ ултырмағыҙ.

• Фекерегеҙҙе гел ашау өсөн сарыф итмәгеҙ. Маҡсатығыҙ йәшәү өсөн ашау булһын, ә ашау өсөн йәшәү булмаһын.

• Ишетеү, иҫнәү, күреү ҡеүәтен кәметкәне, һулышты тарайтҡаны, аппетитты бөтөргәне өсөн бер ҡасан да тәмәке тартмағыҙ.

• Малды харап иткәне, үлемгә сәбәп булғаны, үлемесле ауырыуҙар килтергәне өсөн төрлө иҫерткестәрҙән һаҡланығыҙ. Уларҙы ҡулланған кешеләр менән дуҫ һәм таныш-белеш булмағыҙ.

• Кейемегеҙ менән маҡтанмағыҙ. Башҡаларҙың кейемдәренә мәсхәрәләп ҡарамағыҙ... Күңеле кәбәк менән тулы кешенең тышы ебәк булыуында бер мәғәнә лә юҡ икәнен һис бер ваҡытта ла онотмағыҙ.

• Тел — әҙәм балаһының күңелендә булған асыу, хөрмәт, ҡатылыҡ кеүек нәмәләрҙе асып биреүсе, ғилем, әҙәп, мәғрифәт кеүек әйберҙәрҙе күрһәтеүсе ағза. Шуның өсөн телегеҙҙе башҡа нәмә өсөн ҡулланмағыҙ. Әҙәпһеҙ һүҙҙәр һөйләмәгеҙ. Инсандың сәләмәтлеген теле һаҡлаусы икәнен онотмағыҙ.

● Башҡаларға форсат бирмәй, бөтөн ваҡытты һеҙ генә һөйләп үткәрмәгеҙ. Күңелегеҙҙе тел артынан түгел, ә телегеҙҙе күңел артынан йөрөтөгөҙ. Кешелеклелек һүҙҙә түгел, ғәмәлдә булыуға иғтибар итегеҙ.

● Һис бер нәмәһе юҡ кеше фәҡир түгел, һөнәре һәм тырышлығы юҡ кеше фәҡирҙер. Үҙе өсөн тырышҡан кешегә эш һәр ваҡыт ярҙам итер. Тырыш кеше — матур йәшәр... Донъяла тороу... өсөн... үҙ ғәйрәтегеҙгә өмөт итегеҙ һәм үҙегеҙ өсөн үҙегеҙ тырышығыҙ... Һис кемгә күктән алтын яуғаны һәм ерҙә үлән үҫкән кеүек үҫеп торғаны юҡтыр.

● Зирәк булһағыҙ, зирәклеккә ышанып, йәки һөнәрле булһағыҙ, һөнәргә таянып, эшһеҙ һәм хәрәкәтһеҙ тик ятмағыҙ. Сөнки тырышыу күрелмәгән һәм хәрәкәт ителмәгән хәлдә зирәклек һәм һөнәрҙән файҙа хасил булмай... Шуның өсөн бер ваҡытта ла эшһеҙ тормағыҙ, ялҡаулыҡ һәм шөһрәт әсире булмағыҙ. Аҡылығыҙҙы буш һәм эшһеҙ аҫрамағыҙ.

● Донъя сәфәрендә булған (йәшәгән. — *Ғ. Ҡ.* ) ваҡытта үҙегеҙгә кәрәкле эштәрҙе туҡтатып тормағыҙ. Сөнки донъя ел тиҙлеге менән үтер, вафат көнөнә тиклем файҙалы эштәр өсөн тырышығыҙ, һис ялыҡмағыҙ. Үҙегеҙҙән һуң матур исем ҡалдырыу өсөн эшләгеҙ. Сөнки әҙәм балаһы вафат булғас та матур исеме вафат булмайынса мәңге ҡалыр.

● Эшегеҙҙе ашыҡмайынса, матур һәм тейешлесә, һәр нәмәһен үҙ ваҡытында эшләгеҙ... Бер эште башлағас, матурлап тамамларға тырышығыҙ. Сөнки эште башлап юлда ҡалдырыуға ҡарағанда, һис башламай тороу тағы ла хәйерлерәк.

● Бөгөн бөтәсәк эште иртәгәгә ҡалдырмағыҙ. Сөнки иртәгә тағы үҙенә кәрәк эштәр буласаҡ. Бөгөнгө эште иртәгәгә ҡалдырһағыҙ, бөгөнгө көнөгөҙ бушҡа уҙыр, иртәгәһе көн ике төрлө эш йыйылып, ауырлыҡ килтерер. Һәр көн эш бөтөп барһа, үҙегеҙгә рәхәт булыр.

● Эшегеҙ ҡыҫҡа ваҡыт эсендә тамамланмауына түгел, гүзәл һәм хуш, таҙа һәм тәртипле булыуына иғтибар итегеҙ. Тәртипле эш ваҡытты бушҡа үткәрмәй һәм үкендермәй. Халыҡ ни ҡәҙәр ваҡыт эсендә тамамланыуына түгел, яҡшы булыуына иғтибар итә.

● Эштәрҙе кеше күрһен һәм маҡтаһын өсөн түгел, файҙаһы булһын өсөн эшләгеҙ. Файҙалы эш бөгөн булмаһа ла, бер ваҡыт күҙгә күренер һәм аҡыл эйәләре тарафынан баһаланыр.

● Эшләгәндә һуңынан киләсәк файҙалар хаҡында фекер йөрөтөгөҙ. Сөнки был шатлыҡ килеүгә сәбәп була. Шатлыҡлы эш, ни ҡәҙәр ауыр булһа ла, еңел күренә.

● Һөнәрегеҙҙе көндән-көн арттырығыҙ. Бөгөнгө хәлгә ризалыҡ һәм көндән-көн түбән ҡалыуҙан һаҡланмау — характерһыҙ һәм һиммәтһеҙ кешеләрҙең ғәҙәтелер.

● Уҡыуығыҙҙы тамамлағас, донъяла йәшәү өсөн үҙегеҙгә яраҡлы берәй кәсеп һәм һөнәр һайлағыҙ...

● Кәсебегеҙҙең аҙлығынан йәки күп файҙа күрә алмауығыҙҙан оялмағыҙ. Тырышҡандан һуң файҙа аҙлығы ғәрлек түгел, ялҡаулыҡ һәм кәсеп итә белмәү ғәрлектер.

● Мал ни ҡәҙәр күп булһа ла, ғүмер ни ҡәҙәр оҙон булһа ла, уйлап эшләмәһәң, яҙ көнөнөң ҡары кеүек иреп бөтөр, исеме лә, эҙе лә ҡалмаҫ. Тейешле сара күрелһә, аҙ ғына мал да бәрәкәтле, ҡыҫҡа ғына ғүмер ҙә файҙалы булыр. Ошоноң өсөн планлы донъя көтөгөҙ. Планлы йәшәгеҙ. План менән эш итегеҙ.

● Һәр кеше, һәр бер ҡәүем һәм милләттең бәхетле булыуының төп сәбәбе — белемдер. Ашлыҡтар өсөн ямғыр ни ҡәҙәр кәрәк булһа, әҙәм балаһы өсөн белем шул тиклем кәрәк...

● Күге аҫтында йәшәгән, һауаларын һулаған, һыуын эскән, икмәген ашаған Ватанығыҙҙы ныҡ һөйөгөҙ, уның исемен бөйөк итеү өсөн тырышығыҙ.

● Ватан — кешеләрҙең хөрмәте һәм һәр кем алдында ғорурланырлыҡ хазина. Шуға күрә Ватан өсөн малығыҙҙы ҡыҙғанмағыҙ һәм көстәрегеҙҙе аямағыҙ. Ватан хаҡында быңдай фиҙаҡәрлек күрһәтмәгән кеше унда йәшәргә лайыҡ түгел.

● Ата-әсәгеҙҙе, яҡын ҡәрҙәштәрегеҙҙе нисек һөйһәгеҙ, милләтегеҙҙе лә шулай һөйөгөҙ. Милләтегеҙ өсөн хеҙмәт итеүҙе йәнегеҙ өсөн бәхет тип белегеҙ...

● Халыҡтан яҡшы мөнәсәбәт күрергә өмөт итһәгеҙ, үҙегеҙ уларға яҡшы булығыҙ. Уларҙан хөрмәт көтһәгеҙ, уларға хөрмәт күрһәтегеҙ... Антығыҙға тоғро булығыҙ. Вәғәҙәләрегеҙҙе үтәгеҙ...

● Халыҡ һәм хаҡлыҡ өсөн үткәргән ваҡытығыҙҙы юғалтыу тип иҫәпләмәгеҙ. Сөнки башҡаларҙы һөйөү, уларға ярҙам биреү, уларҙың етештерә алмаған ерҙәрен етештереү бөйөклөк һәм кешелеклелек билдәһелер.

? **1.** Р. Фәхретдиновтың «Нәсихәттәр» циклынан килтерелгән өҙөктәр менән ентекләп танышығыҙ. Уларҙы тематик йәһәттән төркөмләү буйынса фекер алышығыҙ. **2.** Нәсихәттәрендә әҙип ниндәй мәсьәләләрҙе күтәрә, уларға иң элек ниндәй ҡараштар юғарылығынан килә? **3.** Р. Фәхретдинов нәсихәттәрендә сағылған фекер-ҡараштар үҙ заманы өсөн ниндәй роль уйнаған тип уйлайһығыҙ? Шул хаҡта үҙ уй-фекерегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. **4.** Был нәсихәттәрҙең бөгөнгө көндә әһәмиәте бармы? Булһа, нилектән, булмаһа, ни өсөн? **5.** Р. Фәхретдиновтың «Нәсихәттәр» (2006) йыйынтығын уҡып сығығыҙ һәм диспут ойошторoғоҙ.

# Сафуан Яҡшығолов

(1871 – 1931)

## ЯҘ КИЛЕҮЕ

Туғандар! Бына килә инде яҙҙар,
Илебеҙгә килерме өйрәк, ҡаҙҙар,
Юлдарында һау-сәләмәт булып
улар,
Тотмайынса бөркөт, ыласын,
шаһбаздар[1].

Яҙ булһа, ҡаты туңған боҙҙар китә,
Был яҙҙан күп кешеләр файҙа көтә.
Үткән йылдай ел-дауылдар
булмаһын тип,
Тигеҙ ҡояш яҡтыһын өмөт итә.

Үткән йыл йәйҙә булды буран да ел,
Шул сәбәпле михнәт күрҙе
һәр ерҙә ил.
Болоттар ҡояш нурын ҡаплап
торҙо.
Бәғзе ерҙе буҙ итте ағыҙып һил.

Хуш булыр, тип, өмөттә был
яҙ башы,
Ер йөҙөнә тигеҙ төшә көн ҡояшы.
Мәшриҡтән[2] һалҡын елдәр
баҫылды иһә,
Көн нурына ҡарап торған күҙгә
ҡаршы.

Яҙҙар килеп, ҡотола алһаҡ ҡаты
ҡыштан,
Иншалла асылыр бағ-бостан[3].
Ҡарға, ҡоҙғондар ташлаһалар
йыртҡыслыҡты,
Шатлыҡ менән һайрар
ине һәзәрдастан[4].

Яҙ хуш булып, хуш килерме
йәйҙәребеҙ,
Тигеҙ файҙа күреп фәҡир,
байҙарыбыҙ,
Афәтле ел болоттары күтәрелмәй,
Шатлыҡ менән үтерме көн,
айҙарыбыҙ.

*1905*

---

[1] *Шаһбаз* — ҡарсыға.
[2] *Мәшриҡ* — көнсығыш.
[3] *Баг-бостан* — гөл баҡсаһы.
[4] *Һәзәрдастан* — һандуғас.

## ҠИТҒА

Сулпан ҡалҡа, таң да ата, таң
сулпанды юғалта,
Таңда иҫкән елəҫ елдəр күп
хистəрҙе ҡуҙғата.

Таң əтəсе ҡысҡыралыр моңайып,
күтəреп баш,
Таң ата, тип хəбəр һөйлəй, сыға,
тип, нурлы ҡояш.

Таң нурҙары сəселгəндə һыу өҫтəре
ялтырай,
Тирбəлешеп ағастарҙа
япраҡтары ҡалтырай.

Ер йөҙөндə һəр əшья[1] был
ваҡытта ҡуҙғала,
Килəсəктə үҙ хəленə мəғ(ə)нəүи
күҙен һала.

## БАШҠОРТ АҒАЛАРЫМА ХИТАП*

Был заман инҡилабы[2] ниндəй
ҡыҙыҡ,
Күҙ асып ҡараһағыҙ,
башҡорттарым.
Һəр бер миллəт мəғарифҡа
һалышалар,
Һеҙҙəр ғафил[3] ятаһығыҙ,
башҡорттарым.

Һəр урында төрлө миллəт
ҡуҙғалыша,
Мəғариф, тəрəҡҡигə[4] юлдар аса,
Һеҙҙəр йоҡлап ятаһығыҙ һаманғаса,
Ниңə уянмайһығыҙ,
башҡорттарым?

Хөрриəт сайəһе[5] ергə төштө,
Һəр бер ҡəүем күлəгəгə йүгереште,
Алғараҡ сығыр өсөн һикереште,
Һеҙҙəр ғафил ҡалаһығыҙ,
башҡорттарым.

Һеҙҙəн борон бабаларығыҙ һиммəт[6]
итеп,
Башҡа төрлө ҡəүемдəргə ғəйрəт
итеп,
Һеҙгə ер-һыу ҡалдырҙылар мираҫ
итеп.
Һеҙ ҡəҙерен белмəнегеҙ,
башҡорттарым.

Һəр бер халыҡ бергəлəшеп,
йыйылышып,
Думанан үҙенең хазын[7] һорай,
Һеҙ йөрөйһөҙ ҡымыҙ эсеп, уйнап
ҡурай,
Баш күтəреп ҡарамайса,
башҡорттарым.

Һəр урында тырышалар, ер кəрəк,
тип,
Беҙҙəн һуңғы балаларға иркенлек,
тип,

---

* *Хитап* — һүҙ, мөрəжəғəт. Шиғриəттə айырым жанр атамаһын аңлата.

[1] *Əшья* — нəмə, əйбер.

[2] *Инҡилап* — революция, үҙгəреш.

[3] *Ғафил* — ғəмһеҙ.

[4] *Тəрəҡҡи* — алға китеү.

[5] *Сайə* — күлəгə.

[6] *Һиммəт* — тырышлыҡ.

[7] *Хаз* — өлөш.

Һеҙ йөрөйһөҙ, ҡайҙа банкы,
нотариус, тип,
Ер һатырға әҙерләнеп,
башҡорттарым.

Хур булырһыҙ үҙегеҙ, ерегеҙ бөтһә,
Ғәйре милләттәр ҡулына кереп
китһә...

Низәр күрер бынан һуң тыуған
бала?
Бик ғафилһыҙ, бик ғафилһыҙ,
башҡорттарым.

Үҙегеҙ, балаларығыҙ ҡалһа ерһеҙ,
Әлбиттә, тора алмаҫһыҙ бер
һөнәрһеҙ.
Бынан ары ошбуны фекерләп һеҙ,
Уҡыу кәрәк, ғилем, һөнәр,
башҡорттарым.

Һеҙ ҙә лазым[1] хәҙерҙән итеп
һиммәт,
Мәғрифәтле халыҡтарҙан алып
ғәйрәт,
Мәғариф сайәһенә кермәк, әлбәт,
Тейешлелер һеҙҙәргә,
башҡорттарым!

Һеҙҙә бар истиғадәд[2] һәм ҡабилиәт[3],
Уҡыуға, уҡытыуға ҡылығыҙ ғәҙәт,
Уҡыуҙыр донъя, ахирәттә сәғәҙәт,
Уянығыҙ, уянығыҙ,
башҡорттарым!

Һәр тарафта уҡыу кәрәк, ер кәрәк,
тип
Ижтиһад итәләр арып-талып,
Кескенә ҡырмыҫҡанан үрнәк
алып,
Һеҙ ҙә ғафил ҡалмағыҙ,
башҡорттарым!

*1908*

## ДИМ БУЙЫ

Дим һыуының буйылыр йәмле
ялан,
Күрҙе башҡорттар рәхәтлек күп
заман,
Дим буйына ултырған бик күп
ауыл,
Һанаһаң, алтмыштан артыҡ
була ул.

Күренәләр бик күп мәсет,
манаралар,
Күберәге шул асылы башҡорттар
улар.

Яҙ көнө етеп, ҡасан да май тыуа,
Дим буйында бигерәк хозур була.

Туғайында төрлө сәскәле ағас,
Баштарында һайрай ҡунып
һандуғас.

Кистәре тын, булалыр һауаһы хуш,
Һайрай талдарында сут-сут төрлө
ҡош.

Йәм-йәшел сирәм ике яҡ һырттары,
Һис кәрәкмәй театр, концерттары.

Яр башында йырлаһаң, тартһаң
ҡурай,
Китә тауышың Дим буйлап
урай-урай.

[1] *Лазым* — тейеш, кәрәк.
[2] *Истиғадәд* — булдыҡлылыҡ.
[3] *Ҡабилиәт* — һәләт.

Ялтырап ята көмөштәй һыуҙары,
Яҙ көнөндә асыҡ аяҙ көндәре.

Күл тирәһендә үҫә шаулап күрән,
Аҡма ерҙә бил бауырынан үлән.

Шул ваҡыт бесән сабыусы
йырҙары
Яңғыраталыр һыу буйын һәм
ҡырҙарҙы.

Дим буйында бик бейек тауҙары
бар,
Ике яҡлап теҙелеп үҫкәндәр улар.

Бик бейек тау Көнәҙе илә Нарыҫ,
Бик бейек һәм бик матур тауҙыр
Ярыш.

Яҙ көнө менһәң тауҙар башына,
Ҡараһаң һәр бер ауылдың
ҡаршына,

Әйтәлер хәл-теле илә тауҙар беҙгә:
«Ҡарағыҙ атрафыма[1]! Ғибрәт һеҙгә.

Ана күренгән матур, йәмле ялан
Йәйләүе ине бабағыҙҙың бер заман.

Йөрөнө улар тирмәләр ҡороп
күсеп,
Бейәләр бәйләп һауып, ҡымыҙын
эсеп.

Йөрөнөләр унда өйөрләп
йылҡылар,
Һәм көтөү-көтөү илә һарыҡ-ҡуйҙар.

Ҡулға алып ҡарсыға йәки ыласын,
Янына артып һаҙаҡ һәм йәйәһен,

Ата-бабаларыбыҙҙың һәр бере
Атланып ат, шатланып йөрөгән ере.

Шунда дәүран[2] һөрҙө улар күп
заман,
Һәм аҫары нишандары барҙыр
һаман.

Бына был көн жаһәләткә[3] баттығыҙ,
Ерегеҙҙе юҡ баһаға һаттығыҙ».

Беҙ ҙә был көндәр торабыҙ
ҡалтырап,
Һатмағайылар ине, тип, хаҡтан
һорап.

Шунда боронғо заман төшөп иҫкә,
Төрлө моң вә зарҙар
йөрәк-бәғ(е)рең киҫә.

Әммә китәрә хәсрәт-моңдарҙы
Яҙ көнөндә йәмле Димдең буйҙары.

*1908*

**?** **1.** С. Яҡшығолов шиғырҙарын иғтибар менән уҡығыҙ. **2.** «Яҙ килеүе» шиғырында шағирҙың революция менән реакция ваҡиғаларын нисек тасуирлауын һөйләгеҙ, шул юлдарҙы уҡып күрһәтегеҙ. Шағирҙың ниндәй идеяларҙы раҫлауын билдәләгеҙ. **3.** «Башҡорт ағаларыма хитап» тигән шиғри мөрәжәғәтендә шағир ҡан-ҡәрҙәштәрен нимәгә саҡыра? **4.** Шағир ижадында синфи көрәш идеяларының сағылмауы сәбәптәрен асыҡлағыҙ. **5.** «Башҡорт әҙәбиәте, XX быуат башы. Беренсе китап. Поэзия» (Өфө, 1983) китабынан Сафуан Яҡшығоловтың әҫәрҙәрен уҡығыҙ, уларҙың идея-художество үҙенсәлектәре хаҡында фекер алышығыҙ.

---

[1] *Атраф* — тирә-йүн.
[2] *Дәүран* — дәүер, заман.
[3] *Жаһәләт (жаһилиә)* — наҙанлыҡ, аңһыҙлыҡ.

# Закир Һаҙи

(1863 – 1932)

## ЯҢЫ ӘСХӘБЕ КӘҺӘФ*

Башҡорт ауылдарының берендә береһе Миңлешаһ вә икенсеһе Сәфәрғәли исемле яңы етеп килә торған ике егет бер-береһе илә бик дуҫ булып ғүмер кисерәләр ине. Был ике егет, бала ваҡыттарынан бирле дуҫ булып, һәр ваҡыт бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөшөп, һабан туйҙарына вә йыйындарға ла бергә йөрөп, хеҙмәт ваҡыттарында һәм бер-береһенә ярҙам итешеп, ысын серҙәрен бер-береһенән йәшермәйенсә һөйләшеп, һәр эштәрен кәңәшләшеп, ҡайғы вә шатлыҡтарын да бергәләшеп, ҡыҫҡаһы, бер туған ҡәрҙәш кеүек йәшәйҙәр ине…

…Улар һәр ваҡыт ауыл тормошонан зарланып, был насар тормоштан нисек итеп ҡотолорға, үҙебеҙгә яҡшы тормошто нисек итеп табырға, тип үҙ-ара һөйләшәләр ине… Аллаға тапшырып, тыуған-үҫкән ерҙәренән айырылып, үҙҙәренә бәхет эҙләп, ҡайҙа ла булһа ситкә китергә, бер мәҙрәсәгә кереп уҡырға йәиһә байға кереп хеҙмәт итергә лә, байырға, тип бер уйлап, киҫеп ҡуйғандар ине. Улар был фекерҙе күңелдәренән уйлап йөрөһәләр ҙә, эшкә сығара алмайынса, байтаҡ ғүмер үткәрҙеләр. Сәфәрғәли өс йыл ҡаралып призывтан ҡалды, Миңлешаһ та ҡалды. Миңлешаһҡа егерме ике тулып, Сәфәрғәлигә егерме биш йәш булды. Уларҙың фекерҙәренә ҡаршы килә торған нәмәләр ҙә күп, был эшкә ата-инәләре лә риза түгел, аталарынан башҡа билет алыу ҙа ауыр буласаҡ, бер ҙә аҡсаһыҙ сығып китеү ҙә уңайһыҙ, аҡса табыу ҙа еңел эш түгел ине. Һәр ни булһа ла улар,

* *Яңы әсхәбе кәһәф* – мәмерйәнең яңы хужалары. Әҫәр ҡыҫҡартып алынды.

тәүәккәл ҡылып, барса ҡаршы килә торған нәмәләрҙән күҙ йомоп, һабантуй ваҡыттарында йәйәүләп кенә китергә уйланылар; йәйәү китергә уңайлыраҡ ваҡыт тип, был ваҡытты һайланылар. Бер көн кис әҙерләнеп, иртәгә китергә тип йыйынып, юлға аласаҡ нәмәләрҙе төйнәп, кис менән Сәфәрғәлиҙәрҙә ҡундылар, аталарына ла: «Беҙ иртә тороп бер ауылға һабан туйына китәбеҙ», — тип әйтеп ҡуйҙылар.

Бер ваҡытта ауыл халҡы барсаһы ла йоҡола, урам тып-тын, лаҫтыр-лоҫтор көйшәгән, пош-пошш... мышнаған һыйыр тауышынан башҡа тауыш юҡ, һирәк кенә һауала үтеп барыусы кейек ҡаҙҙарҙың «ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ» тигән тауыштары ғына ишетелеп ҡуя ине. Шул ваҡытта, беҙҙең бәхет эҙләүсе егеттәребеҙ ҙә, ҡулдарына төйөнсөктәрен тотоп, бишмәт өҫтөнән кейгән һары сәкмәндең сабыуҙарын елбәгәй ебәреп, елфер-елфер елферләтеп, тауышһыҙ-тынһыҙ ғына ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап, ауылдан сығып, төшлөк яғына[1] киткән бер юл илә баралар ине.

Улар шул рәүештә байтаҡ ер киттеләр, аттар менән ҡунырға йөрөй торған болондары тураһына еттеләр. Был ваҡытта таң ата башланы. Ауыл да күренә, әтәс тауыштары ишетелә, һабан турғайы ла бер юғары, бер түбән осоп һайрай, һайрауы һауала ишетелә ине... Улар үҙҙәренең тыуған-үҫкән ерҙәрен, һуҡалап йөрөгән ҡырҙарын, ат берлә ҡунырға йөрөгән болондарын, утын ташыған урмандарын күҙҙәренән берәм-берәм кисереп, шул ерҙәрҙә үткән ғүмерҙәрен, эшләгән эштәрен дә иҫкә төшөрөп, күңелдәре нескәреп ҡарағас, һәр ҡайһыһы бик аянысkeүек күренәләр ине. Гүйә, ул нәмәләр һәр ҡайһыһы: «Ник шулай беҙҙе ҡалдырып китәһегеҙ, бергәлектән мәхрүм итәһегеҙ? Ҡайтығыҙ! Донъя бар ҙа бер... Бында рәхәт йәшәрбеҙ», — тип әйтәләр ине. Уларҙың шул нәмәләргә ҡараған һайын күңелдәре йомшап, күҙҙәренән йәш сыҡмаһа ла, һаман бер-береһе илә ҡайғылы һүҙҙәр һөйләп, алға табан атлайҙар ине. Ҡаршыларындағы урманға еткәс, бер кәррә[2] тыуған-үҫкән ауылдарына, һыу буйҙарына, болондарға, ҡырҙарға боролоп ҡарап, бер кәррә икеһе лә берҙән «Уф!» тип, бер оҙон һулыш алып, урманға кереп, ер-һыуҙарынан айырылдылар. Фәҡәт улар илә берлектә булған урман, гүйә, уларҙы оҙатып бара ине. Таң атып, яҡты булды, һуңынан бер ерҙә ултырып, ҡапсыҡтарында булған нәмәләрен барлап, уңайлап яңынан сорнап, арҡаларына аҫып йәнә киттеләр. Урманды сығып, тауҙан төшөп, ҡояш сығышынан ҡояш батышына аға торған һыуҙы арҡылы сығып, бер ауылдан үтеп, һыу буйынса ҡояш сығышына бара торған бер юл илә һаман алға табан киттеләр, юлдағы ауылдарҙа

[1] *Төшлөк ягына* — көньяҡҡа табан.
[2] *Бер кәррә* — бер тапҡыр.

йыуанманылар. Шул рәүештә ике юлдаш: «Ҡайҙа һуң бәхет?» — тип, һаман баралар ҙа баралар ине... Бер ваҡытта көн уртаһы етте, ҡарындары ла асты, аяҡтары талсыҡты, бер аҙ хәл йыйып, ашарға уйланылар; бер ауылға яҡын ерҙә ҡуй көтөүе күрҙеләр. Ауылға кереп йөрөгәнсе, көтөүсенән бер аҙ икмәк һорап ашап алайыҡ тип, көтөү янына барып ... көтөүсенән ... иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡас, икмәк һоранылар. Ул егерме өс йәштәр самаһында, шат күңелле, уйынсаҡ бер егет булып, көтөүселек ҡыла ине... Көтөүсе уларҙы һыу янында ҡалдырып, ут яғып, һыу ҡайнатырға ҡушып, үҙе ауылға китте. Оҙаҡ та үтмәне, ярты икмәк, алты йомортҡа, сәй-шәкәр алып килде лә, тиҙ генә бер кәзәне һауып, һөт әҙерләне; бер аҙҙан сәйнүктә һыу ҡайнаны, йомортҡа ла беште, йәшел сиҙәмгә ултырып, ҡунаҡтарҙы көлдөрә-көлдөрә һыйланы. Ҡунаҡтарҙың да күңеле асылып, ҡарындары туйып, хәл йыйып, китергә әҙерләнделәр. Көтөүсе уларҙан ҡайҙа барасаҡтарын һорап, улар ҙа бәхет эҙләп сығыуҙарын йәшермәйенсә тураһынса һөйләнеләр. Быларҙан был һүҙҙе ишеткәс, көтөүсе лә үҙенең күптән шул фекерҙә булып, был ваҡытҡа ҡәҙәр юлдаш булмағанлыҡтан ғына китмәйенсә ҡалғанлығын һөйләп, әгәр ҙә юлдашлыҡҡа ҡабул итһәләр, бергә юлға сығасағын уларға белдергәс, ҡабул иттеләр.

Шунан һуң көтөүсе ҡуйҙарын ауылға ҡайтарып, эйәләренә тапшырып, бер ярты икмәк алып, «бәхет эҙләүселәр»гә ҡушылып, бергә киттеләр. Көтөүсенең Һарыбай атлы һары эте лә, юлдашлыҡҡа ҡабул иткәнлектәрен белгәс, телен сығарып, ҡойроғон һелкеп, юлдаштарына ҡарап ҡыуана, бер алға, бер артҡа төшөп саба ине.

Беҙҙең бәхет эҙләүселәребеҙ ҡояш сығышына табан ике көн барҙылар. Ауылдарға кереп ҡунып сыҡтылар, йәйәү йөрөүҙән дә туйҙылар. Улар һаман баралар ҙа баралар, ҡайҙа ҡәҙәр барасаҡтарын үҙҙәре лә билгеләп белмәйҙәр ине, был ваҡытҡа ҡәҙәр уларға кәңәш бирерлек кеше лә тура килгәне юҡ ине. Бер көн уларға бер ҡарт кеше ҡушылып, бергә байтаҡ ҡына ер барҙы. Ҡарт аҡ һаҡаллы булһа ла, үҙе таҙа ғына тәнле, башында осло бүрек, өҫтөндә сапан, билен ҡыҙыл башлы һөлгө менән быуып, аяғына тараҡан ашаған ситек кейеп, ситек өҫтөнән сабата кейгән ине. Бер һыу буйына еткәс, хәл йыйырға ултырҙылар... «Был ҡарт буш кеше түгел, Хыҙыр[1] түгелме икән?» — тип үҙ-ара һөйләштеләр ҙә, үҙҙәренең барасаҡ ерҙәрен ул ҡарттан билгеләтеп, аҡыл һорамаҡсы булдылар. Был ниәт илә барыһы ҡарттың ҡаршыһына барып теҙләнделәр; уларҙан ҡалмайым

[1] *Хыҙыр* — Хыҙыр Ильяс, юлсыларға, сәфәргә сығыусыларға ярҙам итеүсе, ҡурсалаусы.

тигән кеүек, бер яҡтан Һарыбай ҙа ултырып ҡарап торҙо. Улар һүҙгә керешеп: «Бабай, һин ҡарт кеше, донъя күргән кеше, беҙгә мәрхәмәт итеп, бер аҡыл бирһәңсе!.. Беҙ ситкә китеү дәрте илә үҙебеҙгә бәхет эҙләп сыҡҡан әҙәмдәрбеҙ... Беҙ, ҡайҙа барасағыбыҙҙы уйламайынса, сыҡтыҡ та киттек, был ваҡытҡа ҡәҙәр кәңәш итерҙәй кешегә осраманыҡ, бер ҡалаға йәиһә бер ҙурыраҡ ауылға еткәс, шунда туҡтап, хеҙмәт табылһа, хеҙмәт итербеҙ ҙә, унда тороу мәслихәт булмаһа, башҡа ергә китербеҙ, тип уйлаған инек. Хәҙер ҙә һәм ҡайҙа барасағыбыҙ мәғлүм түгел, бик оҙаҡ барырға аҡсабыҙ ҙа юҡ беҙҙең. Уҡырға ла ниәтебеҙ юҡ түгел, йәш булмаһаҡ та, бик ҡарт та түгелбеҙ, бәғзе кешеләр призывтан ҡалғас та мәҙрәсәгә кереп уҡыйҙар. Һеҙ, бабай, ни әйтәһегеҙ, ҡайһыһын мәслихәт күрәһегеҙ? Беҙ берәй байға кереп хеҙмәт итәйекме, йәиһә мәҙрәсәгә кереп уҡырға керешәйекме?!» — тинеләр.

Ҡарт, бер аҙ уйлап торғандан һуң: «Балаларым, һеҙҙең улай яҡшы ниәтегеҙ бар икән, шул ниәтегеҙҙән ҡайтмағыҙ! Әле һеҙ ҡарттар түгелһегеҙ, бына мин хәҙер ҙә кереп уҡыр инем, ваҡыт үткән инде. Балаларым, уҡыу бик яҡшы эш, уҡыған кеше һис бер ваҡытта ас вә яланғас булмай, донъя вә ахирәттә бәхетле була. Күрәһегеҙ бит муллаларҙы, икешәр оҫтабикә менән донъяһын теттереп торалар. Уҡыған кеше өшкөрөптөкөрөп булһа ла тамағын туйҙыра. Бына минең энем һуҡыр Шәрәфи, Ташлы Йылғала ишан хәҙрәт мәҙрәсәһендә тороп, шулай рәтләнеп китте бит, Ҡөрьәнде шаулата ғына... Шәкерттәрҙе ҡыраьәт иттерә[1], һәр ваҡыт үҙенә саҙаҡа ла керә тора, өшкөрөргә лә йөрөтәләр. Бына беҙҙең күрше ауылдан сулаҡ Рәхмәтулла менән аҡһаҡ Хөснөтдин, унан һуң бөкрө Әхмәди менән һаңғырау Ғиззәт шул мәҙрәсәлә теттереп хәлфә булып яталар. Һеҙҙең кеүек таҙа-һау кешегә бер ҙә ҡайғырырға ярамай. Һеҙ инде шул ниәтегеҙҙән айырылмағыҙ! Шул ишан хәҙрәт мәҙрәсәһенә барығыҙ ҙа керегеҙ. Ишан хәҙрәттең фатихаһын алһағыҙ, кеше булырһығыҙ, эш бигерәк тә фатихала... Ана Ширъяздан хәлфә хәҙрәткә күсер булып фатихаһын алды ла, хәҙер, үҙе ишан булып, мөриттәр йыя башланы. Беҙҙең күрше ауыл муллаһының уғлы Сабир мәхдүм[2], хәҙрәттең һуҡаһын һуҡалап, фатихаһын алып, мулла булды, йүнләп яҙыу ҙа белмәй ине, хәҙер ике оҫтабикә менән донъяһын емерттереп тора. Эш фатихала, фатиха алмаһаң, ғалим булһаң да, файҙаһы булмаç, Иблис тә ғалим булған. Мин үҙем дә, Ташлы Йылға хәҙрәтенә мөрит[3]

[1] *Ҡыраьәт иттерә* — уҡырға өйрәтә, дәрес бирә.

[2] *Мәхдүм* — дин әһеленең улы.

[3] *Мөрит* — ишан шәкерте, берәй дин әһеле өйрәнсеге булған кеше.

булып фатиха алғандан бирле донъяһына бер ҙә иҫем китмәй, хәҙрәткә барып берәр йома торам, бай мөриттәр араһында бер тинһеҙ туҡ булам, юлда барғанда хәҙрәттең мөриттәренә керһәм, ҡунаҡ итеп, өҫтөнә саҙаҡа ла биреп ебәрәләр... Юл өсөн бер ҙә расход сыҡмаҫ, ишан хәҙрәт мәҙрәсәһенә барабыҙ тиһәгеҙ, кемгә генә керһәгеҙ ҙә һыйлап сығарырҙар... Мәҙрәсәгә Шәрәфи суфыйҙы һорап керерһегеҙ, минән уға сәләм әйтерһегеҙ...» — тип уларға аҡыл бирҙе. Бәхет эҙләүселәр, бабайҙан яҡшы һүҙҙәр ишеткәс, рәхмәт уҡып, Ташлы Йылға мәҙрәсәһенә китергә ҡарар бирҙеләр.

Бара торған юлдарынан бер аҙ барғас, Ташлы Йылға юлына етеп, төнгә табан боролоп, бабай менән иҫәнләшеп айырылдылар. Бабай әйткәнсә, кис менән бер ауылға етеп, Шынлы ауылы булдығын белгәс, Ҡотлошаһ картты һорап, уға кереп ҡундылар. Иртә торғас йәнә лә төн тарафына киттеләр... Ҡаршыла күренеп торған тауҙарҙың итәгендә, тәрән соҡорҙар-ярҙар эсендә Ташлы йылға һыуы аға. Һыуҙың арғы яғында текә генә таулыҡ итәгендә һыу буйынса һуҙылып киткән өс мәсетле Ташлы Йылға ауылы күренеп тора. Ҡаршыһындағы тауҙың өй ҙурлығындағы таштары ауыл өҫтөнә емерелергә тора, бәғзеләре емерелгән дә юлда терәлеп тора ине. Ҡаршылағы тау шартлап ярылған кеүек, тауҙың урта еренән, түбәһенән үк ярылып төшкән бер тәрән соҡор Ташлы Йылға ауылын икегә бүлһә лә, ҡояш сығышынан батышына оҙайған урамдар соҡорға терәлеп туҡтамайынса, соҡорҙан үтеп киткән ине. Беҙҙең бәхет эҙләүсе егеттәр ҙә, ошбу күренештәрҙе күреп, күңелдәренә ҡурҡыу төштө. Сөнки беҙҙең Сәфәрғәлиҙең ҡараҡтар вә ендәр хикәйәһендәге күренештәргә бик тура килә ине...

Беҙҙең бәхет эҙләүселәр мәҙрәсәне һорап, мәҙрәсә йортона керҙеләр, «бәхет шишмәһен» күрҙеләр. Мәҙрәсә ауылдың уртаһында тәрән соҡорҙоң эсендә... ине. Мәҙрәсә йортоноң ҡояш сығышы тарафы илә төн тарафы бейек ярҙар илә, ҡояш батыш тарафы тауҙан емерелеп төшкән ҙур таштарҙың араларына балсыҡ өйөп, төшлөк тарафы тау ташынан өйөлгән таш ҡойма илә ихата ителеп, урталығында йөрөр өсөн ҡапҡаһы ла бар ине. Мәҙрәсә... ҡояш сығышынан ҡояш батышына... бик оҙон вә киң итеп тау ташынан һалынған ике ҡатлы булып, бер ҡаты бөтөнләй ер аҫтында тиерлек. Фәҡәт яҡты төшөр өсөн яһалған, ергә терәлеп торған кескенә тәҙрәләре күренеп тора ине. Беҙҙең егеттәр ҙә, мәҙрәсә йортона кергәс, шәкерттәрҙән Шәрәфи һуҡырҙың урынын һоранылар; шәкерттәр ҙә, түбән өйҙә, тип, түбән өйгә күрһәттеләр. Улар, түбән төшә торған бер баҫҡыстан ҡойо кеүек ергә төшөп, бер ҡараңғы урында

булдылар. Бүлмә ишектәрен таба алмайынса йөрөй торғас, Сәфәрғәлиҙең аяғы ҡойо кеүек бер ергә төшөп китте лә, аяҡтары сыланып, бик асы еҫ күтәрелде лә, улар йүткерешә башланы. Бер ваҡыт Миңлешаһ, бағанаға бәрелеп, күҙен сығара яҙҙы. Был ваҡытта бер шәкерт ишекте асты, улар ҙа, ишекте табып, эскә керҙеләр. Шул арала Һарыбай ҙа ашханаға китеп, бер һөйәк табып, кимерергә керешә. Уларҙың кергән бүлмәләре түбән өйҙөң иң ҙур бүлмәһе булып, бик яҡты булмаһа ла, кешеләр күренмәҫлек ҡараңғы ла түгел ине. Ҡорбан байрам ваҡыттары булғанлыҡ сәбәпле, бер оста суфыйҙарҙың киптерергә элгән ҡуй, кәзә тиреләре лә аҫылып тора ине. Был ваҡытта шәкерттәр ҙә аҙ, фәҡәт һуҡыр суфыйҙар, аҡһаҡ, сулаҡтар, онотолоп ҡалған ҡарт хәлфәләр вә бәғзе йәйләргә килгән шәкерттәр генә торалар ине. Улар һуҡыр Шәрәфиҙе табып, ағаһының сәләмен әйттеләр, һуҡыр Шәрәфи ҡунаҡтарға сәй ҙә эсерҙе.

Сәйҙән һуң хәҙрәткә барҙылар, хәҙрәттең ҡулын үбеп, доғаһын алдылар, хәҙрәт, уларға бик асыҡ сырай күрһәтеп, исемдәрен ҡатҡат һорап, түбән өйҙә ҙур бүлмәлә суфыйҙар янында тороп торорға ҡушты; ашау-эсеү тураһында һәм ярҙам итермен, тип, уларҙы йыуатып ебәрҙе... Улар белмәһәләр ҙә, хәҙрәт үҙ эшен... белә; был ваҡыттар шәкерттәр аҙ булғанлыҡ сәбәпле, бындай «һабан үгеҙҙәре» хәҙрәт ҡаршыһында бик ҡәҙерле, һәр ҡайһыһында йөҙ тәңкә саҙаҡа күренеп тора ине. Сөнки хәҙрәттең милкендә бер мең дисәтинәгә яҡын ере булып, шул ерҙә хайуандар аҫрап, иген дә иктерә ине. Был эштәрҙе эшләүселәр күбеһе шул Миңлешаһтар, Сәфәрғәлиҙәр кеүек ҡалын елкәле шәкерттәр бесплатный хеҙмәтселәр була ине.

Беҙҙең яңы шәкерттәр мәҙрәсәгә кереүҙәре илә шәкерт булып, биш ваҡыт намаҙҙан ҡалмайынса мәсеткә йөрөргә тотондолар. Шәкерттәрҙән һорашып, ҡасан һабаҡ башларбыҙ икән, тип Шәрәфи һуҡырҙан һорағас, ул да хәҙер ҙә һабаҡ юҡлығын, бер нисә шәкерт үҙенән ҡыраьәт иттерәсәктәрен һөйләне. Улар ҙа Шәрәфи һуҡырҙан ҡыраьәт итергә уйлап торалар ине. Ғәҙәтсә, аҡрын ғына түбән өйҙә тороусы шәкерттәр илә таныша башланылар: ҙур бүлмәнең бер осонда бер аҡһаҡ шәкерт һәр ваҡыт хәҙрәткә бетеүҙәр яҙа, бер бүлмәлә береһе һәр ваҡыт хәҙрәттең өй йәмәғәтенә кәүештәр, ситектәр төҙәтә. Ҡыҫҡаһы, күбеһе хәҙрәткә үҙҙәренең белгән хеҙмәттәрен итәләр (күрһәтәләр мәғәнәһендә. — *Ғ. Ҡ.*). Бер көн... ике кеше ҡайҙандыр ҡайтып килде, ҡиәфәттә шәкерттәргә лә оҡшамайҙар ине. Былар ҙа түбән өйҙә тороусы шәкерттәрҙән булып, хәҙрәттең утарында һабан һөрөп, бөгөн бер эш менән генә ҡайтҡандар, йәнә лә унда барасаҡтар ине. Бер ваҡытта был шәкерттәргә хәҙрәттән аш

килтереп, яңы шәкерттәргә лә ашарға ҡушты, тигәс, беҙҙең яңы шәкерттәр ҙә улар илә ашанылар; бер аҙҙан һуң сәй-шәкәр килеп, бергә сәй ҙә эстеләр. Шул рәүештә икенсе көн дә иртә менән хәҙрәттән сәй-шәкәр килеп, сәй эстеләр, өйләнән[1] ҡайтыуға аш килеп, йәнә аш ашанылар. Беҙҙең бәхет эҙләүселәребеҙ ҙә бәхет вә сәғәҙәттең[2] беренсе баҫҡысына баҫтыҡ тип гөман итәләр[3]...

Бер көн иртә менән яңы шәкерттәрҙе хәҙрәткә саҡыра килделәр, улар ҙа, ҡыуанышып, һоро сәкмәндәрен кейеп, хәҙрәт ашҡа йә сәйгә саҡырғандыр тип уйлап, тиҙ генә киттеләр. Хәҙрәт иһә уларға утарға барырға ҡушты, ул көн ашағандары ла юҡ ине. Утарҙан ҡайтҡан шәкерттәр илә ун биш саҡрым йыраҡта булған утарға саҙаҡанан кергән өс һыйыр илә биш ҡуйҙы йәйәү алып киттеләр; утарҙан ҡайтҡан шәкерттәрҙең берееһе: «Унда беҙгә бер эт кәрәк ине», — тип әйткәс, Һарыбайҙы ла яндарына алдылар. Беҙҙең бәхет эҙләүселәребеҙ һау-сәләмәт утарға еттеләр, ҡуйҙарын вә һыйырҙарҙы тапшырҙылар. Хәҙрәт унда тороусы сулаҡ Рәхмәтулла тигән хәлфәгә записка яҙған ине. Ул, записканы алып, шәкерттәргә хеҙмәт билдәләне. Көтөүсе Тимербайҙы ҡуйҙар көтөргә, Миңлешаһ илә Сәфәрғәлиҙе һуҡаға тәғәйен әйләне. Һарыбайҙы ла келәт янына илтеп, тимер сылбыр илә бәйләнеләр. Бына сәғәҙәт ҡайҙа!.. Беҙҙең бәхетле егеттәр эҙләгәндәрен табып, йәй буйынса, көҙгә ҡәҙәр, шул утарҙа ҡалып, байтаҡ «һабаҡтар уҡыған-дан» һуң, ҡар яуғас, йәнә ҡайтып кәһәфкә, тау тишегенә, түбән өйгә кереп ябылдылар. Беҙҙең бәхет эҙләүсе егеттәр ҡыш көндәрендә лә бәғзе ваҡыттарҙа утарға ашлыҡ һуғырға, бесән ташырға барып киләләр ине. Улар шул мәҙрәсәлә теүәл утыҙ йыл ғүмер һөрҙөләр, һис ҡайҙа сыҡманылар, һаман шул кәһәф илә утар араһында йөрөп, ғүмер кисерҙеләр. Йәй утарҙа, ҡыш кәһәфтә булдылар. Ошо ваҡыт эсендә хәҙрәткә күп хеҙмәттәр иттеләр, күп фатиха алдылар, мөрит булып, сикһеҙ тәсбихтәр тарттылар, хәлфә булып, күп шәкерттәрҙең ваҡыттарын бушҡа үткәрҙеләр... Араларында иң йәштәре Миңлешаһ булып — 52 йәшендә, ҡалғандары иһә 53 — 55 йәштәрендә инеләр, иң ҡартыраҡтары Сәфәрғәли булып, шул сәбәптән тәбиғәте боҙолоп, йүткерә лә башлаған ине... Сәфәрғәли ағайҙың мәҙрәсәнән сығып, бер ауылға мулла булып, өйләнеп, саф һауала тороп ҡарарға ла иҫәбе бар ине, теләгән ауылға мулла булырмын, теләгән ерҙән ҡыҙ алырмын, был хосуста ауырлыҡ күрмәм, тип

---

[1] *Өйлә* — көн уртаһы, төш. *Өйлә намаҙы* — төшкө аш алдынан уҡыла торған намаҙ.

[2] *Сәғәҙәт* — рәхәт тормош, бәхет.

[3] *Гөман итәләр* — уйлайҙар, фекерләйҙәр.

уйлай ине. Шулай булһа ла Сәфәрғәли ағайҙың был фекере был заманға бик тура килеп бөтмәй, был заманда Сәфәрғәли кеүектәргә халыҡтың бик иҫе китмәй ине. Сөнки был ваҡыттарҙа замандар үҙгәреп, яңы рисәләләр[1], гәзит вә журналдар сығып, уҡыу-уҡытыуҙар башҡарып (үҙгәреп. — *Ғ. Ҡ.*), ауылдарҙа мәктәптәр тәртипкә һалынып, ауыл кешеләре лә асылып, мулла алған ваҡыттарҙа бик уйлап ҡына алалар, ҡыҙҙарын биргән ваҡытта ла бик ашыҡмайҙар, бигерәк тә ҡарттарға йәш ҡыҙҙарын ысҡындырмайҙар ине. Был ваҡытта донъя башҡа бер донъя булып, беҙҙең әсхәбе кәһәфтәр уйлағанса түгел, замандар күп дәрәжәлә алға китеп, беҙҙең әсхәбе кәһәфтәр иһә, утыҙ йыл йоҡлау сәбәпле, күп дәрәжәлә артҡа ҡалғандар ине...

...Беҙҙең әсхәбе кәһәфтәр, үҙ-ара кәңәшләшеп, хәҙрәт менән дә мәслихәтләшеп, Сәфәрғәли ағайҙы сәфәргә оҙатмаҡсы, әгәр ҙә ауылға барып яҡшы хәбәрҙәр килтерһә, ҡалғандары ла Сәфәрғәли артынан сәфәр ҡылмаҡсы булдылар. Бер нисә көндән һуң Сәфәрғәли ағайҙы ауылға оҙатып, артынан аҙан әйтеп ҡалдылар.

...Сәфәрғәли ағай ауылына ҡайтып, энеһе Ҡорбанғәлиҙең йортон һорап, уның йортона туҡтаны... Ауылда ҡарт имамдары вафат булып, уның урынына бер гүзәл фекерле имам килеп, шул имамдың вә бәғзе асыҡ фекерле сауҙагәрҙәрҙең ижтиһадтары сәбәпле, бер тәртипле мәктәп илә бер көтөбхана вә бер йәмғиәте ғилмийә[2] исемендә булған йәмғиәттәре бар ине. Беҙҙең Сәфәрғәли ағай, ауыл халҡы уны бик танһыҡлап торғандыр, махсус мәжлестәр яһап, өйҙән өйгә ашҡа йөрөтөрҙәр тип көтөп тора ине. Эс бошҡандан, мәктәптәргә барып йөрөп ҡарай, унда йәм тапмай, көтөбханаға ла барып ҡарай, гәзит уҡып вә бәғзе яңы китаптар ҡараһа ла, күбеһен аңламай, аңлаһа ла, һәммәһе уның фекеренә хилаф булғанлыҡтан[3], кәйефе китеп, донъя боҙолған, заман ахыры булған, тип, ҡайтып китә ине. Шуның өҫтөнә өйҙә Сәйетғәли менән Миркәй: «Ҡарт бабай килә», — тип ҡысҡырыуҙары илә йәш ҡыҙға өйләнергә тип ҡайтҡан беҙҙең «йәш егеттең»... баҙарын төшөрөп ебәрәләр ине. Ул да етмәһә, ҡапҡа төбөндәге күрше балаларына ҡәҙәр, ҡайһыһы «мулла бабай», ҡайһыһы «шәкерт бабай» тип, «йәш егеттең» намыҫына тейәләр ине...

Шул рәүештә беҙҙең Сәфәрғәли ағай үҙ ауылдарында айҙан артығыраҡ торҙо, бер-ике ерҙән ҡыҙ ҙа һорап ҡараны. «Беҙ ҡартҡа бирмәйбеҙ», — тип яуап килде, бер-ике ауылға мулла булырға тип

[1] *Рисәлә* — яҙмалар. Бында китаптар, «брошюралар» мәғәнәһендә бирелә.

[2] *Йәмғиәте ғилмийә* — ғилми йәмғиәт.

[3] *Хилаф булғанлыҡтан* — ҡаршы булғанлыҡтан, тап килмәгәнлектән.

хәбәрләште; ауыл халҡы: «Беҙгә йәшерәк әҙәм булып һәм дә мәктәбебеҙҙе тәртипкә һалып, балаларыбыҙҙы тәрбиә ҡылырлыҡ әҙәм булһа ине», — тип яуап бирҙеләр. Беҙҙең Сәфәрғәли ағайҙың ярҙам итерлек эш башында булған замандаштары юҡ; бар ҡәдәреһе[1] лә күбеһе йәштәр булып, фекерҙә вә мәсләктә[2] уға хилаф инеләр. Фәҡәт күрше ауылдарында бер иҫке фекерле мулла тура килеп, бер уға барып, уның илә серләшеп, заманды вә халыҡты һүгеп, бер йәйелеп, рәхәтләнеп ултырҙылар. Ул мулла: «Бында хәҙер ҙә рәт бөттө, ҡайтып ҡәҙереңде китәрмә! Шунда ишан хәҙрәт тирәһендә кәмхур булмаҫһың...» — тип, Сәфәрғәли ағайға йәнә кәһәфкә китергә мәслихәт бирҙе. Шунан һуң беҙҙең Сәфәрғәли ағай оҙаҡламай кәһәфкә ҡайтып китте, унда барғас, үҙенең иптәштәренә лә ауыл хәлдәрен бәйән итте. «Хәҙер унда донъя боҙолған: муллалар наҙан, мужиктар аҙған, бидғәттәр[3] менән донъя тулған, ахыр заман ғәләмәттәре күренә башлаған, бында беҙҙе ишан хәҙрәт доғаһында Хоҙай һаҡлаған», — тип һөйләне...

Сәфәрғәли ағай әүәлдә лә бер аҙ йүткерә ине, ауылдан барып килгәс, бигерәк тә йүткерә башлап, бер айҙан һуң вафат булып, өйләнә алмайынса донъянан китте...

Сәфәрғәли ағайҙың башҡа юлдаштары, кәһәфтә бер нисә йыл ҡалһалар ҙа, ахырҙа улар ҙа Сәфәрғәли артынан берәм-берәм «сәфәр ҡылдылар»...

?

**1.** Хикәйәлә ваҡиғалар ҡайҙа бара? Уның геройҙары ни өсөн һәм ниндәй уй менән тыуған төйәктәрен ҡалдырып китәләр? **2.** Әҫәрҙән Миңлешаһ менән Сәфәрғәлиҙең тыуған яҡтарынан айырылған мәлдәге күңел кисерештәрен сағылдырған урындарҙы уҡып ишеттерегеҙ. **3.** «Бәхет эҙләүселәр»гә ни өсөн көтөүсе лә ҡушылып китә? Улар үҙҙәренең ниәт-маҡсаттарын асыҡ ҡына күҙ алдына килтерәләрме? **4.** Геройҙарҙың ишан мөрите булған ҡарт менән аралашыуҙары, унан кәңәш һорауҙары эпизоды менән танышығыҙ. Авторҙың унда ниндәй стилгә һәм ниндәй маҡсатта мөрәжәғәт итеүе хаҡында фекер алышығыҙ. **5.** Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: яҙыусы ни өсөн геройҙары уҡыған мәҙрәсәне мәмерйә (тау тишеге) менән тиңләне икән? Хикәйәләге хәҙрәт мәҙрәсәһен, ундағы шәкерттәр йәшәгән һәм белем алған шарттарҙы һүрәтләгән урындар менән танышып, фекер алышығыҙ. **6.** Хәҙрәт шәкерттәр йөҙөндә иң элек кемдәрҙе күрә? 30 йыл буйына «һабаҡтар уҡыған» был «яңы мәмерйә хужалары»ның яҙмыштары ни өсөн трагик тамамлана?

---

[1] *Ҡәдәреһе* — яҡындары, туғандары.

[2] *Мәсләктә* — ҡарашта.

[3] *Бидғәттәр* — дингә ҡаршы килеүсе ҡараштар, дин әһелдәре тарафынан ҡарғалған фекерҙәр.

# ЙЫҺАНША ХӘҘРӘТ*

Өфө губернаһының Б. өйәҙенең төньяғында төшлөк яғына аға торған бер һыу буйында, һыуҙың ҡояш байышы тарафында, Ш. исемендә ҙур ғына бер ауыл барҙыр…

Ауылдың уртаһынан үткән… бер юл ошо бейек[1] ауылды ике бүлемгә айырмыштыр. Ул юл йыраҡ ерҙәргә китер, башҡорт ауылдарын үтер, Бәләбәй ҡалаһына етер, бер айырмаһы Өфө шәһәренә лә илтер.

Ауылдың йорт-ерҙәре төрлөсәлер. Береһе башҡаһының тамам киреһелер: бер йорт ҙур булһа, уның янында башҡаһы кескәйҙер; бер өй бейек булһа, башҡаһы түбәнерәктер. Бәғзеләре тамам ер аҫтындалыр. Өйҙәрҙең күбеһе ағастан, бәғзеләре таштан, бәғзеһе сей кирбестән һалынмыш, бәғзеләре сыбыҡтан булып, тышҡы яғынан балсыҡ менән һыланғандыр. Түбәләре бәғзеһе таҡта, бәғзеһе тимер, бәғзеһе ҡабыҡтан булһа, күберәге һалам менән ябылғандыр. Арала бәғзе ҙур йорттар, бейек өйҙәр күренһә лә, уларҙың күбеһе иҫкергән, бәғзеләре тамам емерелгән, эйәһеҙ йорттарҙыр.

Был йорттар, ысынлап ҡына уйлап ҡарағанда, бер нисә йыл элек был халыҡ бай булып, хәҙер фәҡир булғанлыҡтарын белдерәлер. Халыҡтың ер-һыуҙары яҡшы, баҫыуҙары, ҡырҙары игенгә яраҡлы, бесәнлек вә урмандары ла күптер. Халыҡ өс төрлөләр: Ҡазан татары, башҡорт, яңы башҡорт, йәғни ситтән килеп башҡорт булып яҙылған әҙәмдәр, типтәрҙәр булһа ла, күбеһе башҡорттар.

Был халыҡтың элек замандарҙа ерҙәре күп булған иһә лә, хәҙер бик үлсәүле генә ҡалмыштыр. Башҡорттарҙың иҫке ғәҙәттәрендә, ауыл башлыҡтары юҡ баһаға һатып, кем саҡырып бер кәррә (тапҡыр) һыйлаһа, уға ер биреп, типтәрҙәрҙе вә Ҡазан татарҙарын үҙҙәренә ерҙәш итеп, бер ҡаҙаҡ сәйгә 10 йә 15 дисәтинә ер бүләк итеп, ерҙәрен үҙҙәренә аҙ ҡалдырмыштарҙыр… Ерҙәрҙең бер бүлемен бәғзе байҙары ҡарттарға араҡы эсереп, алдағаны кеби, бер киҫәген фатиха менән ишан хәҙрәттәре лә элмештер…

Был ауылда биш мәхәллә[2] булып, һыу янындағы беренсе урамды таш мәсет мәхәлләһе, икенсе урамды бейек мәсет мәхәлләһе, өсөнсө урамды иҫке мәсет мәхәлләһе, дүртенсе урамды яңы мәсет мәхәлләһе тип йөрөтәләрҙер. Быларҙан башҡаһы ҡазандарға махсус кескәй мәсет мәхәлләһе тиелгән бишенсе мәхәлләлер…

Муллалары күп, мөдәррисләре, ишан хәҙрәттәре, ҙур мәҙрәсәләре булһа ла, халҡы бик наҙандыр:

---

* Ҡыҫҡартып алынды.

[1] *Бейек* — был осраҡта ҙур, оҙон мәғәнәһендә ҡулланыла.

[2] *Мәхәллә* — ауылдың йәки ҡаланың бер мәсеткә ҡараған өлөшө.

бер-ике яҙа белеүсе, өс-дүрт исемде яҙып ҡуйыусы, быларҙан башҡалары — ҡаҙ эҙе, ҡуян эҙе төшөрөүселәр, бармаҡ менән хисап итеүселәр, таяҡ киртеүселәрҙер.

Был ауыл халҡының наҙан булыуына сәбәп низер? Өҫтән генә ҡарағанда, халыҡта ғәйеп күренмәйҙер. Мулла һайлауҙарында ла кәмселектәре беленмәйҙер. Күрәһегеҙ бит, муллалары: ҡайһыһы хатип-мөғәллим, ҡайһыһы хатип-мөдәррис һәм ишан... Шулай була тороп та халыҡ бик наҙандыр.

Муллаларҙың беҙгә кәрәклеһе Йыһанша ишандыр. Шул сәбәптән, хәҙер ҙә был ауылды үҙ көйөнсә ҡалдырып, Йыһанша ишандың тыуған ауылына китеп, бала сағынан башлап, мөдәррис-ишан булдығына ҡәҙәр башынан үткән хәлдәрен һөйләрбеҙ ҙә йәнә ошо ауылға ҡайтып килербеҙ.

* * *

Инеш атлы ауылда иген игеп, хайуан аҫрап тереклек итеүсе, урта ғына тормошло Дәүләтша исемле бер әҙәмдең Мәрҙәнша, Йыһанша исемендә ике уғлы булып, кесе уғлы Йыһанша бигерәк тә үткен бер бала ине.

Дәүләтша ағай, үҙе наҙан булһа ла, муллаларҙы һөйөр, муллалыҡ вә мәзинлекте иң бөйөк мәртәбәнән хисап итер, кесе улы Йыһаншаны ла: «Минең Йыһаншам мулла булыр, мәзин булыр, фәлән булыр», — кеүек һүҙҙәрҙе әйтеп һөйөр ине... Атаһының «мулла булыр» тигән һүҙенә Йыһаншаның рәхәте килеп, атаһының йөҙөнә йылмайып ҡарай ине. Сөнки Йыһанша, үҙенең үткерлеге сәбәпле, мужик хеҙмәтендә булған мәшәҡәт менән муллалыҡ хеҙмәтендә булған рәхәтте уйлап һәм үлсәп тә ҡарай ине.

Бәғзе ваҡытта Дәүләтша ағай ауылдың имамы Ғибадулла хәҙрәтте ашҡа саҡыра, ҡатыны Хәмиҙәгә яҡшы аштар әҙерләргә бойора, аш әҙер булғас, Йыһанша Ғибадулла хәҙрәтте арбаға яҫтыҡ өҫтөнә генә ултыртып, ат менән алып килә, Дәүләтша ағай ҡаршы ала. Хәҙрәт өйгә керә, халыҡ барыһы аяғүрә тора, Ғибадулла хәҙрәт түргә менеп, мендәр өҫтөнә ултыра, саҙаҡа ала, тамаҡ туйҙыра ла арбаға ултырып китеп бара. Йыһанша был эштәрҙе баштан ахырынаса ҡарап тора ине...

Беҙҙең Йыһанша ла үҙен һөйәр, ҡаршыһында булған нәмәләрҙең иң яҡшыһын үҙенә һайлар, һәр ваҡытта үҙенең башҡаларҙан өҫтөн булыуын уйлар ине. Йәнен аямайса тырышыр ине. Шул рәүештә Йыһанша муллалыҡ фекере менән һабаҡҡа бара. Фатима абыстай: «Балам, тырышып ҡына уҡы, мулла булырһың!» — тип өгөт-нәсихәт ҡыла; Йыһаншаның был һүҙгә рәхәте килеп көлә: хәҙрәттең йәшел сапаны, аҡ салмаһы, ашҡа барыуы, аҡса алыуы хәтеренә килә ине...

Уйнаған ваҡыттарында ла үҙе мулла булып, башҡа балаларҙы мужик итеп уйнай ине. Өйҙә аулаҡ ҡалған ваҡыттарында, үҙен муллаға оҡшатып, эйәгенә ҡором һөртөп түңәрәк һаҡал яһап, атаһының оҙон еләнен кейеп, башына һөлгө сырмап, көҙгөгә ҡарап, үҙенең муллаға оҡшағанын күреп, бик ҡыуана ине... Шулай булһа ла Йыһанша, йәшлеге сәбәпле, мулла булыуҙың юлын, күпме уҡырға, ҡайҙа уҡырға, муллалыкты ҡайҙан алырға, — быларҙы белмәй ине. Фәҡәт Фатима абыстайҙың: «Уҡығыҙ! Мулла булығыҙ!» — тигән һүҙен ишетеп, шул абыстайҙан уҡыған балаларҙың күп уҡығандары мулла булып сыға торғандыр, тип уйлап йөрөй ине... Йәнә йәй үтте, көҙ етте. Фатима абыстайға балалар һабаҡ алырға йөрөй башланы. Йыһанша ла, мулла булыу дәрте менән, уҡырға кереште, ижтиһады сәбәпле, төрки таныны[1], бер нисә сүрәләр ҙә ядына алды[2]. Мулла булырға ғына эш ҡалды!..

Бер ваҡытта Дәүләтша ағай илә Йыһанша шул һүҙҙәрҙе һөйләштеләр:

...— Уғлым! Өс йыл уҡыу менән мулла балалары ғына атаһы урынына, йәиһә бай балаһы аҡса менән генә мулла була; беҙҙең кеүек мужик балаһына хәлфә булғансы уҡырға кәрәк була.

— Нисә йылдан хәлфә булырға мөмкин?

— Ун биш йыл, аҙ булғанда ун йыл уҡырға кәрәк, хәлфә булғас та бер нисә йыл торорға кәрәк, шунан һуң урын сыҡһа... Муллалыҡ еңел генә килмәй шул, уҡыр өсөн оҙаҡ ваҡыт, тырышлыҡ, байлыҡ кәрәк, беҙҙең Ғибад хәҙрәт: «Уҡыр өсөн Нухтың ғүмере, Ҡарундың байлығы кәрәк! Уҡыу энә менән ҡойо ҡаҙыу кеүектер», — тип әйтә.

— Улай бай балалары ғына уҡый торғандыр?

— Мәҙрәсәлә бай шәкерттәргә хеҙмәт итеп уҡыусы ярлы шәкерттәр ҙә була...

— Мин, атай, шәкерттәргә хеҙмәт итеп тә туҡ булыр инем, тырышып ҡына уҡыр инем.

— Уҡыр инең. Һинең һабаҡҡа һәләтең бар, бәлки, мулла ла булыр инең. Ғибад хәҙрәт... риза булырмы? Абыстай рөхсәт бирерме? Остаздан доға алмайынса китергә ярамаҫ. Остаз хаҡы ата-әсә хаҡынан артығыраҡ, тиҙәр.

Был һүҙҙәрҙән һуң Дәүләтша ағай Йыһаншаның уҡырға дәрте барлығын белде. Хәмиҙәгә лә кәңәш итте. Ул да риза булды. Абыстайға ла барып рөхсәт һораны. Фатима абыстай күтәрелеп бәрелде... Дәүләтша ағай Ғибад хәҙрәтте сәйгә саҡырып ҡараны. Хәҙрәт: «Аслан ризалығым юҡ, абыстайынан үҙенә кәрәк ҡәҙәр уҡыр. Уға мулла булмаҫҡа», — тип яуап бирҙе.

---

[1] *Төрки таныны* — иҫке төркисә яҙыу һәм уҡып белеү.

[2] *Ядына алды* — хәтеренә алды, ятлап алды.

Ошонан һуң Йыһанша: «Атам ебәрмәһә, ҡасып булһа ла китермен», — тип әсәһенә һөйләнеп йөрөй башлағас, ... «Инде уҫал ергә бармай, яҡшы ергә бара, уларға ҡарап баламды юғалтыр хәлем юҡ, атаһы, илтеп ҡайт! Хоҙайға тапшырайыҡ», — тип Хәмиҙә Дәүләтша ағайға һөйләнә. Шунан һуң Дәүләтша ағай Йыһаншаны Сорнашҡа илтеп Ғабдрахман хәҙрәткә бирҙе. Был эште Ғибад хәҙрәт тә ишетте, шул кис төшөндә Дәүләтша ағайҙың Йыһаншаны иптәш мулла итергә приговор йыйып йөрөгәнен күреп, ҡурҡып уянды ла яҡ-яғына ҡарап төкөрҙө, төштө Фатима абыстайға һөйләнә. Фатима абыстай ҙа: «Бәғзе төштөң киреһе килә, кирегә булһын», — тип юраны...

* * *

Йыһанша, атаһынан айырылып, мәҙрәсәлә ҡалғас, Ғабдрахман хәҙрәт Йыһаншаны Таһирйән хәлфәгә бирҙе. Йыһанша ла, һабаҡҡа күңел биреп, ижтиһад менән уҡырға кереште... Хәлфәнең хәлдәрен — көмөш сәғәтен сылбырынан муйынына элеп, түбәтәйҙе ҡырын кейеп, мыйыҡтарҙы бороп, ҡаршыларына шәкерттәрҙе йыйып, һабаҡ өйрәткәндәрен, оҙон елән, аҡ салма кейеп, ситек-кәүештән әкрен генә шығыр-шығыр шығырлап ҡына мәсеткә йәки мәжлескә килгәндәрен, хәлфәләр үткәндә шәкерттәр аяғүрә тороп хөрмәт иткәндәрен, хөрмәткә кәмселек күрһәткән шәкерттәргә яза биреүҙәрен, сит мәҙрәсәләргә моназәрәгә[1] йөрөтөүҙәрен күреп, бик ҡыҙыға ине... Холоҡта вә тәбиғәттә, ҡыланышта вә күренештә хәлфәһе кеүек булырға ижтиһад итә ине...

Беҙҙең Йыһанша шул мәҙрәсәлә һигеҙ-туғыҙ йыл ғүмерен үткәрҙе. Холоҡ вә тәбиғәте лә, фекер вә исеме лә үҙгәрҙе: моназир[2] Йыһанша, Йыһанша ҡазый, Йыһанша хәлфә исемдәренә мәшһүр булды. Ғабдрахман хәҙрәттең иң һөйгән шәкерттәренән, шул мәҙрәсәнең иң атаҡлы хәлфәләренән булды, халыҡ араһында вә башҡа ауылдарҙа исеме таралды. Башҡаларға өҫтөн булыу юлын, хәҙрәткә яҡын булыу хәйләләрен хәлфәһенән өйрәнеп, нөктәһенә тиклем тура килтерҙе. Ҡыҫҡаһы, Таһирйән хәлфәнең әхлаҡ кейеменә үлсәп бер кейем текте лә, кейенеп алды...

Ауылына ҡайтҡанда Дәүләтша ағай һәм Хәмиҙә ҡыуанһалар ҙа, Фатима абыстай һәм Ғибадулла хәҙрәттең бәғерҙәрен көйҙөрә... ине. Ғибад хәҙрәт... был нәмә иптәш мулла булһа, башыма бер бәлә булыр, тип аңлап, бер аҙ бошона ла башлаған ине, сөнки ауыл кешеләре лә: «Йыһанша хәлфәне үҙебеҙҙең ауылдан ебәрмәҫкә

[1] *Моназәрә* — ғилми йәки дини тема буйынса бәхәс, дискуссия.

[2] *Моназир* — һүҙ көрәштереүсе оҫта кеше.

кәрәк, бер муллаға урын бар, Хоҙай ризыҡтарын ирештерер», — тип һөйләнә башлағандар ине.

Дәүләтша ағайҙың да Йыһаншаны үҙ ауылына мулла итеп, мулла атаһы булып, сәллә-сапан кейеп, улы менән бергә ашҡа йөрөргә дәрте бар ине…

Ғибадулла хәҙрәт илә Дәүләтша ағайҙың Йыһанша хаҡында уйлаған фекерҙәре хата ине. Сөнки был ваҡытта Йыһаншаның фекере башҡа ине: мулла булһа ла, үҙ ауылына мулла булмаҫҡа, ҡайҙа булһа ла бер яҡҡараҡ китеп мулла булырға, бер бай ҡыҙын алырға, баяр кеүек торорға, «Дәүләтша улы» тигән исемде ситтә ҡалдырырға, йәиһә Бохараға барырға, мөдәррис булып ҡайтырға уйлай ине…

Һәр теләгән нәмәне хасил итеп, һәр уйлаған фекерҙе тура килтереп булмай, ләкин Йыһаншаның был ваҡытҡа тиклем уйлаған бер нәмәһе ҡаршыһында булды…

Йыһаншаның был ваҡытта күберәк уйлаған нәмәһе байыу менән өйләнеү мәсьәләһе ине; былары ла ике юлдың береһен ихтыяр итәсәк ине. Береһе — бай мәхәлләгә мулла булып, бай ҡыҙын алып, мәҙрәсә һалып, дәрес әйтеү; вә береһе бында, Бохараға барып ҡайтып, мөдәррис булып, ишанлыҡ ҡылып, байҙарҙы ҡулға алып, бар муллалар вә мөдәрристәргә өҫтөн булып, теләгән тиклем ҡатын алып, ғүмерен рәхәт кисермәк ине… Үҙенең дә был ваҡытҡа ҡәҙәр ни уйлағаны була килде, шул сәбәптән ғоруры артты: инде ауылға мулла булыуын, Дәүләтша улы булыуын да теләмәй ине…

«Беҙҙең өсөн иң яҡшыһы шулдыр: Бохараға барырға, мөдәррис һәм ишан булып ҡайтырға, мәҙрәсә һалдырып, мөдәррис булырға, мөрит тәрбиә ҡылырға, теләгән ҡыҙынды һайлап дүрт ҡатын алырға, араһында оҡшамағандары булһа, алыштырырға ла мөмкиндер. Беҙҙең өсөн шунан артыҡ һәм асыҡ юл юҡтыр. Сөнки беҙҙең был ерҙә ишандар һәр йәһәттән рәхәт йәшәйҙәр; үҙҙәре өҫтөн булалар. Байҙарҙы һәм муллаларҙы ла ҡул аҫтына алалар. Үҙҙәре лә байыйҙар, теләгән тиклем ҡатын алалар, теләһәләр бай ҡыҙына, теләһәләр мулла ҡыҙына никахлашалар. Мөриттәр иһә, шәйехтәре бойорһа, шәйех өсөн балаларын да ҡорбан ҡылалар», — тиеберәк хыялында әйләндергәндән һуң, Бохараға китергә киҫеп уйланы. Был фекерен Ғабдрахман хәҙрәткә һөйләне… Хәҙрәттең рөхсәт бирмәйәсәген белде. Шунан һуң Йыһанша өйөнә ҡайтып китте. Ата-әсәһенән рөхсәт алып, бер нисә көндән һуң Бохараға сәфәр ҡылды.

Йыһаншаның был эшенә Ғибадулла хәҙрәт бик ҡыуанһа ла, Дәүләтша ағайға был эш ауыр күренде, сөнки мулла атаһы булып, ашҡа йөрөргә ваҡыт етте тип торғанда ғына, Йыһанша Бохараға китте. Дәүләтша ағайҙың да ауыҙынан аш төштө… Йыһанша

бер нисә йылдар Бохарала ҡалды. Был араларҙа атаһы Дәүләтша вафат булып, Йыһанша ла Дәүләтша улы булыуҙан ҡотолдо.

* * *

Ш. ауылында ҡыш урталарында, ғинуар айында, кис сәғәт туғыҙҙа... иҫке мәхәлләлә Фәтхи ағай өйөндә... мәхәлләнең ҡарттары һәм йәштәре йыйылғандар, өйҙөң түрендә һартҡа[1] оҡшаған бер әҙәм ултыра, өҫтөнә һырыған сапан кейеп, биленә һоро салма ураған ине. Ишектән ингәс, уң яҡта түрҙән беренсе тәҙрә тирәһендә, өҫтәлдә ҡәләм, ҡара һауыты, бер ҙур табаҡ ҡағыҙ ҡуйылған, өҫтәл янында бер яҙыусы ла ултыра ине. Яҙыусы: «...Эфәнденең имам булыуына разый булған әҙәмдәр, ошо ҡағыҙға тамғаларығыҙҙы ҡуйығыҙ. Яҙыу белгәндәрегеҙ ҡултамғағыҙҙы ҡуйығыҙ!» — тип әйтеп тора. Шунан һуң халыҡ, берәм-берәм килеп, ҡәләм алып, өҫтәлдәге ҡағыҙға ҡайһыһы ҡуян эҙе, ҡайһыһы һәнәк, ҡайһыһы сүкеш һүрәте яһап киттеләр, тик өс кеше исем, фамилияларын яҙҙылар.

Был әҙәмдәр... балаларының үҙҙәре кеүек наҙан булыуын теләмәйҙәр ине. Шул сәбәптән киләсәкте ҡайғыртып, ... наҙанлыҡтан ҡотолоуҙы уйлап, барсаһы бергә йыйылып, кәңәшләштеләр ҙә Дәүләтша улы Йыһаншаны муллалыҡҡа килтерҙеләр...

Был ваҡытта Йыһаншаның, яңы Бохаранан ҡайтып, мәжлестәрҙә һүҙ сығарып, халыҡ теленә ингән ваҡыты ине... Ғабдрахман хәҙрәт мәҙрәсәһендә уҡып, Таһирйән хәлфәнән өлгө алып, әхлаҡ кейемен бесеп, шунан Бохараға барып, ул кейемде һарт рыяһы[2] менән тышлап, төрлө буяуҙар менән буяп ҡайтҡанға, ауыл халҡы Йыһаншаны күркәм холоҡло, ғалим һәм белдекле бер зат тип beләләр, унан күп нәмәләр өмөт итәләр ине. Шуға ла Йыһанша имам булды. Указды[3] ҡулға алды. Бохарилыҡ менән атаҡлы булып, дәүләтле[4] бер кешенең ҡыҙы менән никахлашып, Шүрәле ауылына торорға килде.

Бохара исеме иҫкермәҫ элек, яңы урынға инеп ҡалайым, тип уйлап, имам булды иһә лә, иҫке мәсет мәхәлләһенә ҡәнәғәт түгел, байыраҡ мәхәллә — бейек мәсет мәхәлләһенә имам булыу өмөтөндә ине... Йыһанша хәҙрәттең ни бар тип көтөп торғаны, нисек тә булһа шул мәхәлләгә күсеп, Фәхретдин хәҙрәтте мәҙрәсәһенән төртөп сығармаҡ, уның урынына ултырмаҡ, башҡа муллаларға өҫтөн булмаҡ, бөтөн ауылды ҡулына алмаҡ, исемен йәймәк, һүҙен йөрөтмәк ине. Бара-тора башҡа ауыл муллаларын да үҙенә эйәртеп, бәғзе берҙәрен үҙенә ярҙамсы итеп, ишанлыҡ арбаһына ултырып, наҙанлыҡ сәхрәһендә гиҙеп,

[1] *Һарт* — үзбәк.

[2] *Рыя* — ике йөҙлөлөк, яһалмалыҡ.

[3] *Указ* — Диниә назаратында имтихан тотҡандан һуң муллалыҡҡа, ахунлыҡҡа һ. б. рәсми рәүештә бирелгән документ.

[4] *Дәүләтле* — маллы, мөлкәтле.

әҙәмдәр етмәгән ерҙәргә барып, хужа булмаҡсы ине…

Йыһаншаның фекеренә ҡаршы килә торған бер нәмә бар иһә — ул да булһа Фәхретдин хәҙрәттең мәҙрәсәһе һәм дә… мөдәррис булып күренмәге ине. Шул сәбәптән Йыһанша ниндәй ҙә булһа бер эш сыҡмаҫмы тип, бар фекерен сарыф итеп, шул мәхәлләгә дүрт күҙ менән ҡарап тормаҡта ине.

Мәжлестәрҙә һәр ваҡыт һүҙ сығарып, нисек тә булһа бер һүҙ табып, ғәрәпсә һәм фарсыса һүҙҙәр ҡатыштырып, мөмкин тиклем үҙен башҡа бер әҙәм итеп күрһәткеһе килә ине. Ауылдың иғтибарлыраҡ әҙәмдәре илә аулаҡта һөйләшеп, «ғилем»дән һүҙ асып, бар белгән нәмәһен уларға сәсеп, күп әҙәмдәрҙе, бейек мәсет мәхәлләһендәге байҙарҙы ла үҙенә ҡаратты. Әҙәмдең бәхете алға барғанда, ҡулына тупраҡ алһа, алтын була, тигән кеүек, Йыһанша хәҙрәткә лә бейек мәсет мәхәлләһенә юл асылды: Фәхретдин хәҙрәт иптәш муллаһы менән дәғүәләшеп, икеһенең дә указдары алынды. Беҙҙең Йыһанша хәҙрәт был дәғүәнән бик оҫта файҙаланды: … тиҙ генә приговор яһап, бейек мәсеткә имам булып, ул мәхәлләгә күсте… Ғауам бисараларын теләгәнсә алданы… Фәхретдин хәҙрәт берлә булған дәғүәләрҙә күп прошениелар йөрөтөп, ахырҙа уны тамам баҫты…

Берәү үлмәй, берәү көн күрмәй, тигән кеүек, бер нисә йылдан ауыл мөдәрристәренән бер нисәһе вафат булып, Йыһанша хәҙрәттең мәҙрәсәһенә күп шәкерттәр һәм хәлфәләр килә башланы… Йыһанша хәҙрәт шәкерттәрҙең бәғзеһенә шәкерт, бәғзеләренә хәлфә тип исем бирә; шәкерттәр уҡый, хәлфәләр уҡыта. Йыһанша хәҙрәт үҙе ауылдарға ҡунаҡҡа китә ине…

Йыһанша хәҙрәттең эштәре йылдан-йыл алға китте: инде үҙен халыҡҡа ишан тип күрһәтә башланы. Ишанлығы мөдәррислеккә, мөдәррислеге ишанлыҡҡа ярҙам итте. Мәҙрәсәһенән күп муллалар сыҡты, күп әҙәмдәрҙе үҙенә мөрит итте, күп мәхәлләләр һәм ауылдар уның ҡулына күсте.

Мөриттәрҙең балалары һәм малдары ла Йыһанша хәҙрәттең иркендә ине. Малдарын теләгәнсә сарыф итте, теләгән ҡыҙҙы теләгән егеткә бирҙе; мөриттәре үҙҙәре лә малдарының һәм балаларының барыһын Йыһанша хәҙрәттеке тип белерҙәр ине…

Күп кешеләр Йыһанша хәҙрәткә эйәрҙе. Йыһанша үҙенең ауылындағы муллаларға вә башҡа ауыл муллаларына ла өҫтөн булды. Шуның өҫтәүенә, ишанлыҡ флагын да күтәрҙе. Күп кешеләрҙе ҡаршыһына килтерҙе, күккә осорҙо, ер аҫтына ла төшөрҙө, диңгеҙ кистерҙе, сираттан уҙҙырҙы, йәннәттә лә гиҙҙерҙе. Хур ҡыҙҙарын күрһәтте, үҙенә эйәрмәгән әҙәмдәрҙе шайтан юлдашы, монафиҡтар тип, мөшриктәр[1] янына теҙҙерҙе… Йәһәннәмгә керетте…

[1] *Мөшрик* — мәжүси.

Файҙаны килтерер өсөн хәйер-доға, зарарҙы килтерер өсөн бәд-доға ҡоралы ҡулланыр ине... Дошмандарының береһе хәстә[1] йә фәҡир булһа, йә вафат булһа, уға минең бәддоғам төштө, тип һөйләй ине. Хәйер-доға менән дә күп кешеләрҙе бай итте, дәрәжәгә мендерҙе. Дуҫтарының береһе байыһа йәки дәрәжәгә менһә, минең хәйер-доғам менән байыны, дәрәжәгә менде, тип әйтә ине... Хәйер-доға өсөн Йыһанша хәҙрәткә саҙаҡа бирәләр, хеҙмәт итәләр, бәддоғанан ҡурҡып, нәҙерҙәр әйтәләр, малдарын ҡорбан итәләр...

Өшкөрөү-төкөрөү менән дә күп ауырыуҙарҙы дауалай, күп хәстәләрҙе тергеҙә ине. Өшкөргән ауырыуҙары йә үлә, йә терелә. Терелһә, «минең өшкөрөүемдән терелде», ти, үлһә, «үлемгә дарыу юҡ», тип яуап бирә ине.

Бер әҙәмдә аҙ ғына үҙенә берәй хилафлыҡ күрһә, ул кешегә асыуланып, дошман булып, уның мәжлесенә бармай, «ул минең дошманым, монафиҡ», тип, дошманлыҡты уның яҡлы итеп күрһәтә... Бара торғас, үҙенең остазы Ғабдрахман хәҙрәт менән дә күрешмәйенсә, дошман булып, кенә тотоп йөрөнө, һаман да дошманлыҡты уның тарафында тиер ине. Бәғзе ваҡыттарҙа юҡ нәмәләр өсөн асыуланып, иҫерек әҙәм кеүек ҡыҙып китә, хаҡһыҙ рәүештә әҙәмдәрҙе рәнйетә, ҡулына ни осраһа, шуның менән ҡаршыһындағы кешеләргә һуға ине. Асыулы ваҡыттарында шәкерттәрҙе таяҡ менән туҡмап таяғын һындыра ла, шул туҡмалған шәкерттән түләтә, ҡайһы саҡта ҡомған менән һуғып шәкерттәрҙең баштарын яра ине. Мәхәллә кешеләрен дә, фәҡир һәм йыуаштарын таяҡ менән туҡмап, байҙарын һәм уҫалдарын бәддоға менән ҡурҡыта ине... Халыҡты донъя ҡыумаҫҡа, донъянан ҡасырға бойора: «Донъяны ҡыуһаң, ҡасыр, ҡасһаң, ҡыуыр», — тиә ине.

Йыһанша хәҙрәт был һүҙҙе әйткәндә хаҡһыҙ түгел... Донъянан ҡасып йөрөй-йөрөй, был һуңғы йылдарҙа донъя уны әсир итмеш, ҡулына алмыш ине!.. Йыһанша хәҙрәт ҡасҡан һайын донъяның уртаһына инә барҙы. Ебәккә сорналған... ебәк ҡорто кеүек, Йыһанша хәҙрәт тә, донъяға сорналып, донъя уртаһында ҡалды...

Бер әҙәмдең өс аты булһа, береһен саҙаҡаға бирергә, өс һыйырҙың да береһен, йә булмаһа башҡа малдарҙы саҙаҡа итергә бойорор ине... Шуға ла мөриттәр малдары арта башлаһа, былай донъя ҡуйырға ярамай, бер аҙ ахирәтте лә иҫкә төшөрөргә, йәннәттән урын алып ҡалып, һарайҙар һалыр өсөн бер аҙын ишан хәҙрәткә бирергә тип, атын егеп, арба янына бер ат йә бер һыйыр тағып, арбаһына берике ҡуй һалып, иген һатып бер нисә һумлап аҡса ла алып, Йыһанша хәҙрәткә илтәләр, саҙаҡаларын биреп, йәннәт асҡыстарын алып китәләр ине. Ҡайһылары Йыһанша

[1] *Хәстә* — ауырыу.

хәҙрәтте өйҙәренә ҡунаҡҡа алдыралар ҙа, саҙаҡаларын биреп, йәннәт асҡыстарын алып, теләгән урындарына йәннәткә һарайҙар һалдыралар ине.

Йыһанша хәҙрәт быны менән генә лә ҡалмай, мәхәллә халҡының ҡуштандарын ҡулға алып, бәғзеләренә доға ҡылып, бер нисә дисәтинә ерҙәрҙе лә оҫталыҡ менән алды, үҙенә шаҡтай ҙур бер дәүләт хасил ҡылды.

Инде йәш ваҡытта уйланғандары күбеһе тура килде: ике оҫтабикә алды. Береһе мулла ҡыҙы, береһе бай ҡыҙы; улар ҙа үҙе уйлағанса тура килде: береһе һимеҙ бәдәнле[1], йомшаҡ тәнле, ҡара ҡашлы, ҡара күҙле; вә береһе нәфис тәнле, нескә билле, аҡ йөҙлө, күкһел күҙле ине...

Йыһанша хәҙрәт шул замандың бөйөк бер әҙәме булғас, ғауам халҡы вә бәғзе уға эйәргән муллалар ҙа кәңәшкә киләләр... Халыҡтың алға китеүен уйлаған бер заманда, ул уларҙы бер нисә аҙымдар артҡа ҡайтарып ебәрә ине... Ғүмерендә өс тапҡыр хажға барһа ла, шундай бөйөк йәмғиәттә булһа ла, һис бер файҙалы нәмәләр килтермәне. Күҙе асылманы, фекере төҙәлмәне... Халыҡҡа аҡыл бирһә лә, уның кәсеп тураһында булған фекере игенселектә — Шәрәфи ағайҙың һуҡаһынан, һатыуҙа — сепрәксе Фәтхи ағай илә кибетсе Шәхми ағайҙың сауҙаһынан, һөнәрҙә, оҫталыҡта тимерсе Яҡуп ағайҙың һөнәренән үтмәй ине.

Бәғзе халыҡ ҡояш һәм ай тотолоуҙың сәбәптәрен вә уның буласағын алдан хәбәр итеүселәр тураһында һораһалар: «Быға, тура килһә лә, ышанмағыҙ, был ғаиптән[2] хәбәр биреү була, ул хәбәр биреүселәр — кафырҙар», — тип яуап бирә ине...

Сөнки, уның фекеренсә, ғилем һәм мәғрифәтте арттырыу — халыҡты муллалыҡҡа уҡытып, мулла һәм мәзин итеү менән бер рәттән динде ҡеүәтләү — мәхәллә күбәйтеү, һәр мәсеткә ике мулла, бер мәзин ҡуйыуҙан ғибәрәт ине. Мәхәлләһендә яҙа белеүсе ике әҙәм, исемен яҙып ҡул ҡуя белеүсе лә өстән артыҡ түгел ине.

Үҙенең йорт-ерҙәрен бик ескәләп ҡараһа ла, мәҙрәсә эштәрен бик өҫтән йөрөтә ине. Уның шәкерт йыйыуы, мәҙрәсә ҡарауы егер өсөн ат, һауыр өсөн һыйыр, йөн өсөн ҡуй аҫрауҙан айырмаһы юҡ ине.

Мәҙрәсәһендә ҡырҡ-илле йәшлек хәлфәләр булһа ла, шәкерттәр ҙә күп булһа ла, ни донъя хәленән вә ни башҡаһынан хәбәре булмаған бисаралар ине. Уларса: «Йыһанша хәҙрәт кеүек донъяла ғалим юҡ. Был мәҙрәсә кеүек ер йөҙөндә мәҙрәсә юҡ...» Арала бәғзе үткер ҡабилиәтле[3] шәкерттәр булһа ла, мәҙрәсәлә яҡшы тәртип вә яҡшы тәрбиә булмаған сәбәпле, уларҙың үткерлектәре, ҡабилиәттәре урынһыҙ китеп, тора-бара тамам юлһыҙ

[1] *Бәдән* — кәүҙә, тән.

[2] *Ғаиптән* — күҙ алдында юҡҡа сыҡҡан (юғалған) нәмә, киләсәктән.

[3] *Ҡабилиәтле* — һәләтле, булдыҡлы.

ҡала инеләр. Йыһанша хәҙрәт уларҙы танымай, һөймәй ине...

Йыһанша хәҙрәттең ике абыстайҙан ... үткер вә булдыҡлы балалары булһа ла, уларға тәрбиә биреп, яҡшы мәҙрәсәләрҙә уҡытып әҙәм итә алманы.

Мәҙрәсәне лә тәртипкә һалып, ваҡифтар[1] тәғәйен иттереп, даими һүрәттә нигеҙҙе таҙартып ҡалдырырға ҡулынан килмәне. Башҡа эштәр хаҡында бик күп төштәр күрһә лә, мәҙрәсә хаҡында бер ҙә төшөнә кермәне. Шул сәбәптән уға эйәргән кешеләр ғилемдән мәхрүм ҡалды. Шулай итеп, Йыһанша хәҙрәт бер нисә йылдар халыҡтың малын вә ашын рәхәтләнеп ашаны иһә лә, бәғзе ваҡыттарҙа боғаҙына арҡыры килтереүселәр ҙә булды. Аҙаҡҡа табан ҡайһы бер зирәгерәк әҙәмдәр гәзиттәргә яҙып, тынысһыҙландыра башланылар.

Тыныс ҡына бер ваҡытта... Хәсән исемле бер мулла Йыһанша хәҙрәттең юлына ҡаршы килде. Хәсән мулла үҙе лә асыҡ фекерле бер мулла ине. Шул сәбәптән Йыһанша хәҙрәттең эштәрен, килешмәгән ерҙәрен халыҡҡа берәмберәм күстәрҙе (күрһәтте). Күп әҙәмдәрҙе үҙенең фекеренә эйәртте. Хәсән мулла йәш сағында Йыһанша хәҙрәт мәҙрәсәһендә уҡып, ул мәҙрәсәләге кәмселектәрҙе аңлағас, шәһәр мәҙрәсәһенә китеп, унда ла теләгән рәүештә ҡәнәғәтләнмәйенсә, сит мәмләкәттәрҙе лә гиҙеп, ахырҙа ауылына ҡайтып имам булған ине. Хәсән мулланың ауылы Йыһанша хәҙрәттең ауылынан утыҙ биш саҡрымда булһа ла, ул яҡтарҙа Йыһанша хәҙрәттең мөриттәре күп булғанлыҡтан, уның йөрөй торған ауылдарынан ине. Ул ауылдың атаҡлы байҙарынан булған Искәндәр хажи ҙа Йыһанша хәҙрәттең мөриттәренән һәм бик дуҫ булып йөрөшә торған әҙәмдәренән ине.

Искәндәр хажи Йыһанша хәҙрәткә мөрит булһа ла, үҙ ауылының муллаһы Хәсән мулланың атаһы булған Хафиз мулланы ла бик оҡшата ине, бер-берeһенә йөрөшәләр ине. Хәсән мулланы ла үҙ балаһы кеүек күрә ине.

Хәсән мулла бала сағында Искәндәр хажиҙарға килә. Искәндәр хажи: «Минең кейәүем килгән», — тип көлә, Хәсән оялып сығып китә ине. Сөнки Искәндәр мулланың Фәхерлебанат исемле бик гүзәл бер ҡыҙы бар ине. Хәсән, атаһы алдында «кейәү» тигән һүҙҙән оялһа ла, аулаҡ ҡалған ваҡыттарында Фәхерлебанат менән күҙгә-күҙ ҡарашып, һөйләшеп йөрөйҙәр ине. Сөнки иҫке заман ғәҙәтенсә, Фәхерлебанаттың һигеҙ йәшендә «ғаҡид никахы»[2], ун биш йәшендә зифафы[3]

---

[1] *Ваҡиф* — эште аңлап башҡарыусы, белеүсе.

[2] *Ғаҡид никахы* — алдан килешеп никах уҡытып ҡуйыу.

[3] *Зифаф* – никах.

булып, Хәсән мулланың ғүмерлек рафиҡаһы (иптәше) булған ине.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был хәлдәрҙән хәбәрһеҙ Йыһанша хәҙрәт, Искәндәр хажиҙың ҡыҙына ҡыҙығып, өсөнсөләккә алырға үҙенә беркетеп ҡуйған ине...

* * *

Искәндәр хажи хәҙрәттең хәбәрһеҙ, саҡырыуһыҙ килеүенә ғәжәпләнде... Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, сәй эсә башлағанда Искәндәр хажи: «Хәҙрәт! Һеҙҙе нисек былай ел ташланы? Берәй ҡайҙа барҙығыҙмы?» — тине. Йыһанша: «Юҡ... тура һеҙгә килдем».

Искәндәр хажиҙың һорауына сәбәп шул: Искәндәр хажиға Йыһанша ишандың килә торған ваҡыттары мәғлүм ине. Бер тапҡыр тәкәләр һимергәс, тағы бер тапҡыр ҡаҙ-өйрәк өлгөргәс, бер тапҡыр һуғымдар һуйғас килеп ҡунаҡ булып китә торған ғәҙәте бар ине. Шулай уйламаған бер ваҡытта Йыһанша хәҙрәттең килеүе Искәндәр хажиҙы шөбһәгә төшөрҙө. Йыһанша хәҙрәт һаман йомортҡа һалырға йөрөгән тауыҡ кеүек йөрөнөп, һөйләгән ваҡытта әйтер бер һүҙе бар кеүек беленә ине...

— Йәш ҡатын йәшәртә бит... Хәҙер ҡартая башланым, шуға яңынан йәшәрергә иҫәпләп торам... Шәриғәт тә икенән башлап, дүрткә тиклем өйләнергә ҡуша... Хажи әфәнде, тураһын әйткәндә, минең йәшәреү һинең ҡулында. Әүәл төшөмдө һөйләйем дә, һуңынан үҙегеҙ ҙә аңларһығыҙ... Төшөмдә бик һәйбәт сылтырап аға торған бер йылғаның буйында йәм-йәшел сиҙәм өҫтөндә булдым; донъя йөҙө яп-яҡты ... йылғанан тәһәрәтләндем. Һыуы көмөш кеүек саф һәм татлы ине. Шул ваҡытта шәйехем хәҙрәттәре ҡаршыма килде. Янында аҡ һаҡаллы, нурлы йөҙлө бер ҡарт та бар ине. Һәр икеһе менән күрештем. Ҡарттың ҡулдары йоп-йомшаҡ, мамыҡ кеүек, бармағында һөйәге юҡ ине. Шәйехемдән был ҡарттың кем икәнлеген һораным, ул, Хыҙыр ғәләйһиссәләм, тине. Ул ҡарт та минең кем икәнлегемде һораны. Шәйехем: «Ҡәрҙәш шәйехтәрҙең өҫтөндә төп шәйех дамулла Йыһанша бине Дәүләтшалыр, Искәндәр хажиҙың дәмады[1] буласаҡтыр», — тине. Ҡарт: «Бәрәкалла», — тип ҡысҡырып ебәрҙе. Шул тауышҡа уяндым; һаман шул тауыш ҡолағымда ишетелә... Был төшөмә бик ғәжәпләнеп, «собханалла» тинем дә бик оҙаҡ уйлап яттым. Һеҙҙе бик дуҫ күргәнлегем сәбәпле, кәримәгеҙ[2] Фәхерлебанатты ла балам кеүек һөйә инем! Шуға ла уның хаҡында бик ҡайғырам. Яҡшы, тәүфиҡлы ғына бер юлдаш бирһен, тип Хоҙай Тәғәләнән һорай инем. Сөнки замандар боҙолдо, яҡшылар ҙа әҙәйҙе. Халыҡ, яңы сыҡҡан

[1] *Дәмады* — кейәүе.
[2] *Кәримәгеҙ* — ҡыҙығыҙ.

нәмәләрҙе уҡып, ҡарая баралар, урыҫ кейеме кейә, ишандарға тейә башланылар. Был боҙоҡ замандарҙа ҡыҙҙарға кейәү табыу бик мәшәҡәт булды; яңы йомортҡанан сыҡҡан себеш кеүек, әсәһенең ҡанат аҫтында ғына үҫкән Фәхерлебанат кеүек бер ҡыҙҙың ят ерҙәргә китеп, белмәгән, күрмәгән бер әҙәмгә өйрәнмәге бик ауыр булыр, тип уйлай инем. Бәғзе ваҡытта был бисараға бер изгелек булһын, үҙемдең ҡанат аҫтыма алып, күңелен рәхәт вә тыныс итеп, Хаҡ Тәғәлә алдында күп сауаплы булыр инем, тип хәтеремә килә ине. Минең шул фекеремә был төш тә ҡеүәт бирҙе, шунан һуң күңелем был эшкә бигерәк тә мәйел итте... Шул сәбәптән мин һеҙгә килдем... Был изге эшкә ҡасан керешергә? Шуны һеҙҙән белмәксе, үҙемдең дә фекеремде һеҙгә белдермәксе, кәңәш итмәксе булдым.

— Хәҙрәт, минең ҡыҙым хәҙергә бик йәш бит!

— Шәриғәтебеҙҙә, йәш булһа ла, никах дөрөҫтөр; үҙ арабыҙҙа никах ҡылырбыҙ ҙа, ваҡытына ҡәҙәр үҙегеҙҙә тороп торор. Ҡунаҡҡа килгән ваҡыттарҙа ғына күрешеп, сөхбәт ҡылырбыҙ[1]. Ваҡыты еткәс, зифаф булыр, өйөбөҙгә барыр. Телләгән ваҡытында һеҙгә килер, шулай ғүмерен рәхәтлектә үткәрер... Фәҡәт арабыҙҙа бер нәмә генә ҡалды. Фәхерлебанат минең никахымда була... Һеҙ минең хәбәремде әсәһе аша әйттереп ҡарағыҙ! Мин үҙем дә уға вәғәз-нәсихәт итеп, бер мәктүп[2] яҙырмын.

— Әйттереп ҡарармын, хәҙергә сабыр итеп тороғоҙ!

— Шәриғәт изге эштә ашығырға ҡуша...

Искәндәр хажи Йыһанша хәҙрәткә вәғәҙә бирмәне. Шулай булһа ла хәҙрәт Фәхерлебанаттан өмөтөн өҙмәне; хажиҙа бер көн тороп, өйөнә ҡайтып китте...

* * *

Хәсән мулла атаһы урынына имам булғас, ауыл халҡына бик күп файҙалы эштәр ҡылды: ҡайныһы Искәндәр хажиҙан мәктәп һалдырып, мәсет һәм мәктәп файҙаһына вәҡифтәр ҡуйҙырып, мөғәллимдәр алдырып, йәш балаларға уҡыу-яҙыу өйрәтеп, урыҫса уҡытыу хаҡында ла ярҙам итте... Шул сәбәптән ошбу ауыл халҡы, бер нисә йылдан һуң, башҡа ауылдарға ҡарағанда яҡшы ғына алға китте, яҡшы ғына көн итте; иген иктеләр, сауҙа иттеләр.

Хәсән мулла һәр йомала халыҡты ғилем һәм мәғрифәт, һөнәр вә сәнғәт илә ҡыҙыҡһындырыр, былар тураһында халыҡҡа аңлатыр ине. Был ауылда һәр аҙна һайын бер мәртәбә баҙар, йылына бер тапҡыр йәрминкә була ине. Искәндәр хажи Хәсән мулланың хуплауы арҡаһында баҙар эргәһендә

---

[1] *Сөхбәт ҡылырбыҙ* — аралашырбыҙ, дуҫлашырбыҙ.

[2] *Мәктүп* — хат, яҙылған нәмә.

бер сәйхана һалдырған ине. Бының исеме сәйхана булһа ла, асылда китапхана ине. Был китапханала төрлө китаптар бар; бер нисә урыҫ гәзиттәре һәм ҡайһы берҙә мосолманса гәзиттәр ҙә килер ине. Йәрминкә ваҡытында күп кешеләр, төрлө ерҙән килгән кешеләр инә. Китап-гәзиттәр уҡып, бер-береһе менән күрешеп, һөйләшеп ултыралар. Матур бер ғилем мәжлесе ҡылырҙар ине.

Баҙар көндәрендә сәйханаға Хәсән мулла үҙе лә инә. Сәйханалағы бөтә кешеләр менән дә күрешеп, гәзиттәрҙең мөһим ерҙәрен халыҡҡа уҡып, аңлашылмаған ерҙәрен аңлатып, халыҡҡа һөйләй. Халыҡ та, сәйҙәрен ситкә ҡуйып, тыңлай ине.

Хәсән мулла наҙан муллаларҙы, рыялы суфыйҙарҙы, ялған ишандарҙы һөймәй. Улар тураһында әсе һәм үткер итеп һөйләй ине...

Ахырҙа, һүҙгә керешеп: «Һәр кем белә торған һүҙ — «Һыу баштан болғана!» Был һүҙ ғәҙәти генә бер һүҙ булһа ла, был һүҙҙән күп нәмә сығарырға мөмкиндер. Мәҫәлән, хәҙер беҙ сәй эсәбеҙ, сәйебеҙҙең һыуы болғансыҡ булһа, хеҙмәтселәргә мисканән яңы һыу һалып ҡайнатырға бойорабыҙ; был һыу ҙа насар булһа, йылғанан барып килтерергә ҡушабыҙ. Уныһы ла насар булһа, йылғаның бер аҙ юғарыһынан алып килтерергә әмер итәбеҙ; һаман да ярамаҫ булһа, йылғаның сыға торған еренә барып, унан килтерергә тейеш булалар. Ул да ярамаһа, йылғаның сыға торған ерендә һыуҙы боҙа торған нәмәләрҙән тәмизләмәк[1], пакламаҡ тейеш булалыр. Юҡһа, самауырҙағы йәки мискәләге һыуҙы алыштырыу менән, сәй һыуын төҙәтеп булмайҙыр.

Шуның кеүек, ауылдарҙа халыҡ араһында боҙоҡлоҡтар күрәбеҙ ҙә, һуңынан ҡарайбыҙ шул ауылдағы имамдарға. Быларҙа боҙоҡлоҡ күрәбеҙ ҙә уйлайбыҙ: быларға ҡайҙан килгән? Һуңынан китәбеҙ уларҙың уҡып, тәрбиә алып сыҡҡан ерҙәренә: мәҙрәсәләренә вә мөдәрристәренә!.. Уларҙа һәм тәртипһеҙлек вә тәрбиәһеҙлек күрәбеҙ ҙә, йәнә баяғы «һыу баштан болғана» тигән һүҙҙе ҡайтарып әйтәбеҙ. Бына ҙур мәҙрәсәләребеҙҙе мөдәрристәребеҙ тәртипкә һалһалар ине, шәкерттәрҙе яҡшы тәрбиә итеп, фекер бирер өсөн мәҙрәсәләренә һәр фәндән уҡытыр өсөн яҡшы тәртип күргән мөғәллимдәр алһалар ине.

Йыйып әйткәндә, ни булһа ла булһын, яҡшы имамдар вә мөғәллимдәр әҙерләһәләр ине, улар ҙа ауылдарға сығып, һәр ҡайһыһы үҙ юлында ижтиһад итеп, халыҡты тоғро юлға һалһалар ине, ул ваҡытта, бәлки, бер аҙ ғына эштәребеҙ төҙәлер ине.

Эштәребеҙҙән бар көткәнебеҙ ҡорһаҡ ҡайғыһы булып, тоғролоҡ өсөн эшләгән эшебеҙ юҡтыр. Мулла булабыҙ — бәлеш ейергә, мөдәррис булабыҙ — исем йәйергә, ишан

---

[1] *Тәмизләмәк* — таҙартыу.

булабыҙ — мал йыйырға!.. Муллаларыбыҙҙың ҡайһыһына ғына ҡараһаҡ та, мәҙрәсәнән сыҡҡас та бер кәррә мәҙрәсә һалып дәрес әйтергә керешә. Ләкин үҙендә дәрес әйтерлек ҡеүәт бармы, юҡмы — уны һис тә уйламай... Былар илә диндең ҡото артмаҫ. Беҙҙең был эштәребеҙ, йәғни үҙебеҙ наҙан була тороп, фәҡәт нәфсебеҙ өсөн халыҡ өҫтөндә баш булмағыбыҙ, йәки арабыҙҙан үҙебеҙ кеүек бер наҙан кешене өҫтөбөҙҙә баш ҡылмағыбыҙ диянат[1] түгел, бәлки дингә хыянаттыр...

Ишандар иһә һәр кемде мулла итәләр, шул рәүешле барсабыҙ мулла булдыҡ. Ни ҡылдыҡ! Халыҡ телендә мәшһүр һүҙ: «Һин дә мулла, мин дә мулла, атҡа бесән кем һала?!» Шуның кеүек барыбыҙ ҙа мулла булдыҡ та атыбыҙға бесән һалманыҡ. Аттарыбыҙ арып, йәйәүле ҡалдыҡ, теләгән еребеҙгә етә алманыҡ...

Бала атанан тыуыр инсан[2] булып, әгәр ҙә инсан тәрбиәһе бирелмәһә, ҡалыр хайуан булып. Бала — саф бер инсандыр, өйрәтһәң, һәр нәмәне белер, шулай булһа ла, ҡабилиәт вә сәләхиәт[3] төрлөсәләр — бөтәһе лә мулла һәм мәзин түгелдер; араһында игенсе, һатыусы, яҙыусы һәм башҡа һөнәргә лә сәләхиәтле балалар бик күптер. Һәр балала үҙенә айырым бер нәмәгә оҫталығы булалыр. Береһе иген игеүсе булһа, башҡаһы сауҙа итеүселер; береһе кейем тегеүсе булһа, береһе итек тегеүселер. Береһе көйләүгә оҫта булһа, башҡа береһе һөйләүгә оҫталыр. Береһе яҙыусы булһа, башҡаһы — дарыусылыр. Береһе атҡа менеүсе булһа, береһе һыуҙа йөҙөүселер. Береһе һүрәт яһаусы булһа, башҡа береһе өйҙәр һалыусылыр.

Иң түбән дәрәжәлә булған ауыл мужиктарының балаларына нескәләп уйлап ҡаралһа, уларҙа ла һәр һөнәргә оҫталыҡ күренер. Бер баланың хәленә һәм хәрәкәтенә бер сәғәт ҡарап торғанда, күп нәмәләр уйлап сығарырға мөмкин. Сөнки бала һәр ваҡыт бер нәмәне тәжрибәләп, бер нәмәне өйрәнер... Һыу өҫтөнә бер ағас һалыр, уны ағыҙыр, йөҙөү-йөҙҙөрөүҙе өйрәнер; ҡулына бер еңел нәмәне алыр, елгә осорор, һауала йөрөүҙе уйлап сығарыр; күккә ҡарар, йондоҙ һанар, башҡаларҙан һорар, һәйәттән[4] бәхәс итер; ҡулына ағастар, таштар йыйыр, өй яһар, миғмарлыҡты[5] өйрәнер. Бәғзе бер сынаяҡ ватыҡтарын йыйып, уны аҡса итеп, бәғзе нәмәләрҙе мал итеп, бер-береләренән һатып алырҙар, сауҙагәрлек ҡылырҙар. Береһе ҡулына ҡағыҙ тотоп, күмер менән һыҙыр, яҙыусылыҡ күрһәтер; вә бере ҡағыҙға бер нәмәнең һүрәтен төшөрөп, рәссамлыҡ итер... Ҡыҫҡаса әйтһәк, һәр бер балала бер һөнәргә, бер фәнгә бигерәк тә оҫта буласағы күренер. Бының илә бәрәбәр, балала бер мәймүн

---

[1] *Диянат* — динлелек.
[2] *Инсан* — кеше.
[3] *Ҡабилиәт вә (үә) сәләхиәт* — булдыҡлылыҡ һәм һәләтлелек.
[4] *Һәйәт* — астрономия.
[5] *Миғмарлыҡ* — архитектура, төҙөлөштәр буйынса фән тармағы.

кеүек күргән нәмәһен күсермәк тә барҙыр... Игенсе балаһы һуҡа яһар, ер һөрөр, орлоҡ сәсер. Һатыуысы балаһы алыш вә биреш ҡылыр, тегеүсе балаһы кейем бесер; мулла балаһы сәллә һалыр, саҙаҡа алыр; тәмәкесе балаһы ҡағыҙҙан папирос урар; иҫеректең балаһы һыу эскәндә йырлар, иҫерек булып уйнар. Балала, шуның өҫтөнә үҙенең күргән эштәренән яҡшырағын үҙенә һайлап, шуны эстәмәк хасиәте лә юҡ түгелдер... Ҡыҫҡаһы, һәр баланың үҙенә айырым бер фәнгә, бер һөнәргә дәрте булыр. Әгәр ҙә баланың дәртенә тура килгән, үҙе теләгән фән бирелмәҫ иһә, баланың дәрте юғалыр ҙа, ул фәндән дә, был фәндән дә хәбәрһеҙ булыр, аҙашып, юлһыҙ ҡалыр...

Баланың ниндәй фәнгә, ниндәй һөнәргә дәрте барлығын белеп, шул фән йәки һөнәр мәктәбенә бирелеп, гүзәл тәрбиә лә ителһә, ул баланың шул фәндә беренсе әҙәм булыуында шөбһә юҡтыр».

Хәсән мулла һүҙен шунда туҡтатты.

Ҡарт хәлфә: «Йыһанша хәҙрәт хаҡында һөйләгән һүҙҙәрегеҙ дөрөҫ түгелдер, сөнки ул ҡоро ишан ғына түгел, ишан һәм мөдәрристер. Нисә йылдар дәрес әйткән, мәҙрәсә юҡ ерҙә мәҙрәсә асҡан, башҡалар уның кеүек эш күрһәтһендәр...» — тине.

Хәсән мулла: «...Сысҡан уты ҡараңғыла яҡты, яҡтыла ҡараңғылыр. Йыһанша хәҙрәттең мәҙрәсәһендәге тәртип вә ысул да иҫке замандарҙағы сыра яндырып дәрес уҡыған ваҡыттарҙағы ысул вә тәртиптер. Ул замандарҙа заһири[1] яҡтылыҡтар сыра менән булдығы кеүек, мәғәнәүи яҡтылыҡтары ла шуға ярашлы ысул менән ине. Хәҙер ҙә сыра замандары үтмеш, шәм вә лампа замандары ла китмеш, электр замандары килмеш. Мәғәнәүи яҡтылыҡтары ла шул нисбәттә алға китмештер. Шуның өсөн хәҙер ҙә беҙгә уҡытыу хаҡында булған ысул вә тәртиптәребеҙҙе ошо электр заманына тура килтермәк тейештер. Йыһанша хәҙрәттең, халыҡ ҡарамағында дәрәжәһенә ҡарағанда, хеҙмәте һис юҡтыр. Мәхәлләһе Йыһанша хәҙрәт килгән ваҡытта нисек наҙан ине, хәҙер ҙә шулай уҡ! — тине... — Йыһанша хәҙрәт, Бохаранан ҡайтып, был халыҡҡа мулла булғас, бөйөк дәүләт эйәһе булды. Дәүләт иһә ҡайҙан килде? Хәҙрәт игенме икте, юҡһа сауҙамы итте? Әлбиттә, барыһы милләт аҡсаһылыр. Әйтергә мөмкин ки: милләт Йыһанша хәҙрәтте өйләндерҙе, өйҙәр, һарайҙар һалып бирҙе, йөҙләп дисәтинә ер бирҙе, яҡшы кейемдәр кейҙерҙе, ҡош иттәре ейҙерҙе, тройкала гиҙҙерҙе. Ҡыҫҡаһы, милләт Йыһанша хәҙрәттең һәр һораған бирҙе, барыһы Йыһанша хәҙрәт ҡулына керҙе... Эш Йыһанша хәҙрәттә!..» Хәсән мулла һүҙен дауам итеп, унан-бынан бер аҙ башҡа һүҙҙәр һөйләп ултырғандан һуң, улар менән күрешеп сығып китте.

[1] *Заһири* — тышҡы.

* * *

Юғарыла һөйләгән инек: Йыһанша хәҙрәт Фәхерлебанаттан өмөтөн киҫмәне. Фәхерлебанатҡа вәғәз-нәсихәт ҡылып, бер мәктүп тә яҙҙы.

Хәҙрәттең мәктүбе бик оҙон, уҡырға дәртһеҙ булғанлыҡ сәбәпле, үҙен яҙмайынса, фәҡәт мәктүптән аңланған нәмәләрҙе генә яҙабыҙ.

Йыһанша хәҙрәт мәктүбендә барса ғибәҙәтте вә намаҙҙарын, намаҙ һуңында ятҡас күргән төштәрен, төшөндә үҙенең икенсе ҡат күктә булып, Хызыр ғәләйһиссәләмдең Фәхерлебанат менән икеһенә никах уҡығанын, үҙенең дә пәйғәмбәр урынында бер әҙәм улдығын, Фәхерлебанаттың да шундайын бөйөк әҙәмдәргә зәүжә[1] булырға тейешле бер ҡыҙ улдығын яҙмыш.

Фәхерлебанаттың Йыһанша хәҙрәткә яҙған мәктүбе: «Шәйех Йыһанша хәҙрәттәренә! Мәктүбегеҙҙе уҡыным. Үҙегеҙҙең пәйғәмбәр мәкәмендә[2] бер әҙәм улдығығыҙҙы бәйән әйләмешһегеҙ. Вә беҙҙе лә бик юғары күтәрмешһегеҙ! Беҙҙә ундай хәсиәттәр юҡтыр, ғәҙәтсә генә бер кешебеҙ. Беҙҙә һеҙҙең кеүек икенсе ҡат күктәрҙе сәйәр иткән[3] әҙәмдәр илә һөйләшерлек ғилем дә юҡтыр...

Һеҙҙең күргән төштәрегеҙгә беҙҙең кеүек ҡыҫҡа аҡыллы әҙәмдәрҙең аҡылы етешә алмайҙыр. Беҙ уйлағанса, төшөгөҙ ысын төшкә оҡшамайҙыр. Тәһәжжет намаҙынан һуң иһә лә, ул көн күп ашта булғанығыҙ сәбәпле, ашығыҙ һеңеп бөтмәгән, күңелдәрегеҙ ҙә сафланып етмәгән булырға кәрәк! Сөнки һеҙҙең илә беҙҙең арабыҙҙа никах булғаны юҡтыр һәм буласаҡ түгелдер... «Амин», тип һүҙемде бөтөрҙөм. Фәхерлебанат».

Фәхерлебанаттан был мәктүпте алғас, Йыһанша хәҙрәттең өмөтө бөттө. Шунан һуң бер нисә йылдар үтте. Фәҡәт ике абыстай берлә генә ғүмер итте... Фәхерлебанат та хәтеренән сыҡты. Йыһанша хәҙрәт өсөнсө оҫтабикә алыуҙы тамам онотто. Күңеленә башҡаса ҡайғылар төштө: мәҙрәсәләрҙең тәртипһеҙлеге, шәкерттәренең, мәхдүмдәренең тәртипһеҙлеге хәҙрәттең башына күп бәләләр килтерҙе. Нисә меңләп әҙәмде юлға һалмаҡ дәғүәһендә булған Йыһанша хәҙрәттең өй эсендәгеләрен дә юлға һалырға ҡулынан килмәй торған бер булдыҡһыҙ әҙәм икәнлеген заман күрһәтте...

Мәхдүмдәр ҙә, бере артынан береһе үҫеп, егет булдылар. Мәхдүмдәрҙе аҙҙыралар тип, бер нисә шәкертте мәҙрәсәнән ҡыуып та ҡараны. Улай ҙа донъя төҙәлмәне. Мәхдүмдәре һаман да аҙған өҫтөнә аҙҙы... Бер мәхдүме иҫереп ҡайтҡанда урамда йығылып,

---

[1] *Зәүжә* — ир ҡатыны.

[2] *Пәйғәмбәр мәкәмендә* — пәйғәмбәр урынында.

[3] *Сәйәр иткән* — гиҙгән, йөрөгән.

уны мужиктар тотоп килтергәндәр; икенсе мәхдүм иҫергән дә, бер мужикты туҡмап, ул мужик мәхдүмдең өҫтөнән прошение биргән; вә берeһе бер шәкертте һуғып башын тишкән; бер тарафтан аҫрау ҡыҙ йөклө булған... Бәғзе шәкерттәре лә гәзит вә рисәләләр уҡып, үҙҙәренең кәмселектәрен аңлап, ҡасып китмәктә, уларҙан: «Беҙҙе ғилемдән мәхрүм иттең, юлдан аҙаштырҙың!» — тип яҙылған мәктүптәр килмәктә ине. Үҙенең мәхдүмдәре лә: «Беҙҙе инсан итмәнең! Кәрәк ҡәҙәр тәрбиә бирмәнең! Беҙҙе юғалттың! Алла һине юғалтһын!..» — тип, дәғүәләшмәктә инеләр.

Тора-бара Йыһанша хәҙрәт ахыр ғүмерендә бер мәхдүмде үҙ урынына мөдәррис итте вә берeһенә ишанлыҡ бирҙе. Үҙенең дә башынан үткән эштәренә төшөндө, аҙ ғына булһа ла язаһын да күрҙе! Ахирәттә хәлем нисек булыр икән, тиәрәк ҡайғыра-ҡайғыра донъянан да китте. Мәхдүмдәре ҡайһыһы ишан, ҡайһыһы мулла булды; башҡалары ла ҡайһыһы унда, ҡайһыһы бында таралды. Наҙан булһа ла, атаһы урынына мөдәррис булған уғлы шәкерттәрҙе, атаһынан ҡалған хәйер-доға менән йыуатып, бәддоға менән ҡурҡытып, бер нисә йылдар тотто; һуң ул хәйер-доға вә бәддоға «ҡоштары» ла ҡартайҙы; шәкерт[тәр] таралды; мәҙрәсәнең иҫке биналары ҡалды... Сәүкәләр, күгәрсендәр оя яһаны; түбәләренән ямғыр үтеп, мөйөштәре емерелеп, түбәләре ишелеп бөтә мәхәлләнең йәмен ебәреп, күргән кешеләрҙең күңелдәренә ҡайғы килтереп торалар ине.

Ҡараңғы төндәрҙә бәғзе ерҙәре ҡапыл емерелеп, үтеүселәр ҙә уны ишетеп, ҡайһы бер ҡурҡаҡ әҙәмдәр ҡурҡынып хәстә[1] булалар, бәғзе әҙәмдәр ҙә төн замандарында... төрлө нәмәләр күрәләр, «ендәр эйәләшкән» тип гөман[2] итәләр ине. Балалар иһә, мәҙрәсә хаҡында һөйләгән һүҙҙәрҙе ишетеп, мәҙрәсәне ен ояһы тип гөман итәләр... Әсәләре: «Һеҙҙе мәҙрәсәгә ебәрәбеҙ!» — тиһәләр, шул сәғәт балаларҙың хыялдарына Йыһанша хәҙрәттең мәҙрәсәләре күренеп, ҡапыл ҡурҡып китәләр ине. Шул сәбәптән был ауыл халҡы балаларын көс-бәлә менән, аҡыртып-баҡыртып, мәктәпкә илтәләр ине.

?

**1.** Повестан Ш. (Шүрәле) ауылы күренешен, унда йәшәгән халыҡтың тормош-көнкүрешен һүрәтләгән урындарҙы уҡып, фекер алышығыҙ. **2.** Әҫәрҙең төп геройы

[1] *Хәстә* — ауырыу, сир.
[2] *Гөман* — фараз, уй.

Йыһанша бәләкәй сағында уҡ ниндәйерәк холоҡло һәм ниндәй уй-маҡсаттар менән йәшәгән бала була? Уның мәҙрәсәлә уҡыған осорондағы холоҡ-фиғеленә, йәшәү принциптарына ҡылыҡһырлама бирегеҙ. Уларҙы иң сағыу сағылдырған урындарҙы табып, уҡып күрһәтегеҙ. **3.** Йыһанша образы аша прозаик заманының ниндәй күренештәрен фашлай? Йыһаншаның ишан һәм мөдәррис булараҡ «эшмәкәрлеген» һүрәтләп бирегеҙ. **4.** Повестың реалистик көсө, тәнҡит рухы нимәлә икәнен аңлатығыҙ. Бының өсөн автор ниндәй стилгә мөрәжәғәт итә? **5.** Повестағы ниндәй моменттар һеҙҙең иғтибарҙы тартты һәм ни өсөн? **6.** Һеҙ нисек уйлайһығыҙ: яҙыусы ни өсөн төп ваҡиғалар барған ауылдың исемен Шүрәле тип атаны икән? **7.** Повестың художестволы эшләнеше, тел-стиль үҙенсәлектәре өҫтөндә күҙәтеүҙәр яһағыҙ.



# Фәтхелкадир Сөләймәнов

(1889 – 1976)

## БАШҠОРТ МОҢО

Аҡ тирмәнән сығып, моңло төндә
Ҡарап торҙом айҙың батҡанын.
Йоҡоларым ҡасып, күп уйланып,
Көтөп торҙом таңдың атҡанын.

Йылт-йылт итеп янған нурлы
йондоҙ
Әллә нимә һала күңелгә.
Һыҙлана ла күңел, моңлана ла
Әллә нимә бөтөн түгелгә.

Иҫкә төшә шунда иҫке саҡтар —
Ата-бабаларҙың дандары.
Күҙ алдында иләҫ-миләҫ итә
Көтөү-көтөү йөрөгән малдары.

Һаҙаҡтарын тартып, һөңгө тотоп,
Йөрөгән улар матур аттарҙа.
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Ил бирмәгән яман-яттарға.

...Яҡшы аттар киткән, инде ҡалған
Ҡуян йөрәк, ялҡау, ямандар...
Бер йырланым шулай, бер иланым,
Илап торҙо ҡара урмандар.

*1914*

## ТИМЕРБАЙ ҠУРАЙСЫ

*(хикәйә)*

Ул бик шәп, дәртле ҡурайсы ине. Моңло, атаҡлы башҡорт көйҙәренән уның белмәгән көйө юҡ ине. Үркәсләнеп, күгәреп ятҡан матур вә ғәзәмәтле Урал тауҙары, уның ҡалын урмандары, йәмйәшел йәйләү-сәхрәләре, көмөш көҙгө шикелле ялтырап, балҡып ятҡан күлдәре Тимербай ҡурайсының моңло, дәртле күңеленә әллә

ниндәй бер тойғо, әллә ниндәй бер моң һала ине лә, ул ярһып, моңландырып оҙон көйҙәрҙе һуҙып ебәрә ине. Уның моңло көйҙәренә урмандар, ҡырҙар, тау-таштар яңғырап, сыңлап торалар ине...

Гүйә, был әҙәм ҡулы теймәгән, ҡәһәрле балта берлә бер ботағы киҫелмәгән йәмле, ҡалын урмандар Хоҙайҙың матур бер көнөндә, Тимербай кеүек садә[1], мәрхәмәтле күңелле балаларынан айырылып, үткен балталар, ҡәһәрле бысҡылар берлә киҫелеп, әллә ҡайҙарҙа янып көл буласаҡтарын, матур, хасиятлы[2] тауҙар, киәле[3] таштар динамит берлә һауаға күтәртелеп емерeләсәктәрен, аҡтарыласаҡтарын, йәһәннәм кеүек уттарҙа яндырыласаҡтарын һиҙеп моңланалар, илап торалар ине...

Төрлө үләндәр, матур сәскәләр берлә ҡапланып, аҙ ғына ел берлә тулҡынланып ятҡан йәм-йәшел йәйләүгә ил килеп тулғас та Тимербай ҡурайсы, ауылға йөрөп, ҡурай уйнай, йырлай ине.

Ул илдең иркәһе ине. Уға һәр ишек асыҡ ине. Ҡәһәрле, ҡурҡыныслы кантондар, йортауай старшиналар ҙа Тимербай ҡурайсыға ҡаты бер һүҙ өндәшмәйҙәр ине. Ҙур йыйындарҙа, туйҙарҙа Тимербай ҡурайсы кантондар алдында ауыҙын ҡыйшайтып алып моңло йырҙар һуҙа, дәртле көйҙәр гөжләтә ине...

Йәйләүҙәге тормош ҡыҙыҡлы, иркен тормош ине... Йәш егеттәр: «Һайт-тайт! Талаҡ тейгере!» — тип ҡысҡырышып еле башында бейә бәйләйҙәр, йәш балалар ауылдың артында ялтырап ятҡан күлдә һыу төшәләр, йөҙәләр, ҡысҡырышып уйнайҙар ине. Башҡорт ағалар тирмәнән тирмәгә йөрөп, ҙур күбәтәләр менән тәмле, көслө ҡымыҙ эсәләр, ҡыҙалар, ҡыҙаралар, бөтөн ауыл гөрләп-шаулап тора ине...

Биктимер ерән атын маҡтай, Йәнтимер көрән атын маҡтай, Бикбау ҡарт йәйләү үләнен маҡтай, быйыл мал бик һимеҙ буласағын һөйләй ине. Йомабикә әбей, быйыл мал һимеҙ булһа, май, ҡорот күп алырмын, тип ҡыуанып, һау күнәккә һабанан ҡымыҙ ҡойоп, ҙур еҙ ижау менән шапыра ине. Аҡбулат ағай Ҡолой кантондың туйында барын аймағының бәһлеүәне ҡатай, салйот, тамъян бәһлеүәндәрен йығып, баш бүкәне алып киткәнен иҫе китеп, бот сабып һөйләй ине. Ташбулат бабай Аҡбулаттың юҡҡа ғына иҫе киткәненә аптырай ине. Ул үҙе Бузыкаев кантондың туйында Әй буйынан килгән ҡара бәһлеүәнде, Кәрим кантондың бәйгегә бер төҫлө өс күк йүгерек ат ебәргәнен, өсөһөнөң дә уҙып килгәндәрен, бәһлеүәндәр көрәшкәндә баш бүкәгә талаш булып, ҙур һуғыш сығып, Кәрим кантон көскә туҡтатҡанын һөйләргә тотона ине.

Бына моңло ҡурай тауышы ишетелә...

---

[1] *Садә* – таҙа.
[2] *Хасиятлы (хәсиәтле)* – үҙенсәлекле.
[3] *Киәле* – ҡурҡыныс, текә.

Тимербай ҡурай тарта, тип шаулашып ултырған ағайҙар, шым булып, моңло көйҙәрҙе тыңлай башлайҙар ине. Бына «Ашҡаҙар», бына «Тәфтиләү», бына «Ҡаһым түрә», бына «Салауат батыр»...

Был моңло көйҙәр, тәрән мәғәнәле йырҙар ҡымыҙ эсеп сикәһе ҡыҙарған, ҡаны ҡыҙған йәйләү балаларының дәртле, ярһыу күңелдәренең бик тәрән бер мөйөшөндә күмелеп ятҡан асы, ләкин мөҡәддәс тойғоларын уята ине. Улар инде Юлай ирҙәрҙе, Салауат батырҙарҙы, Ҡаһым түрәләрҙе һөйләргә тотоналар, бында ғына туҡтамайҙар, бик йыраҡ замандарға — боронғо хандар, бейҙәр, батырҙар заманына кереп китәләр ине. Моңло ҡурайҙың тәьҫире аҫтында аҡ һаҡаллы ҡарттар йәш быуынға мөҡәддәс тойғоларын шулай итеп күсерәләр ине...

Тимербай ҡурайсы һаман уйнай ине. Һаман моңло, тәрән мәғәнәле көйҙәр берлә аҡ һаҡаллы ҡарттарҙың, тешһеҙ әбейҙәрҙең йөрәген ҡуҙғытып Пугачёв фетнәләрен, ҡалмыҡ яуҙарын, боронғо батырҙарҙы, түрәләрҙе һөйләтә ине. Ниһайәт, әбейҙәр ҡурай уйнап һыуһаған, тамағы кипкән Тимербай ҡурайсыны хөрмәтләп аҡ тирмәгә саҡыралар ҙа, ҙур еҙ күбәтәләргә ҡымыҙ ҡойоп, һуғаралар ине. Йәйләүҙә төрлө матур ҡоштар, һәр төрлө ҡорт, себендәр берлә бергә һайрап, бергә йырлап тора ине. Тимербай ҡурайсы ҡалған ғүмеренең дә ҡәбергә кергәнсе шулай үтәсәгенә бик ныҡ ышана ине...

Заман бер төрлө булып тормай. Тимербай ҡурайсы үҙенекен, заман үҙенекен эшләй. Ун алтынсы быуаттан бирле башҡорт сәхрәләрендә көнбайыштан бүтән, ят илдең бурандары иҫеп килә тора, яңы йәмһеҙ, ят тормош аға ине. Был эш үкешкә бина ителгән яңы тормоштоң аҡрын ғына, йомшаҡ ҡына ағымы ла мең йыллыҡ иҫке, иркен, садә тормошто йыуа, ҡаҡшата башлаған ине...

Көнбайыштан үткен балтаһы, ҡәһәрле быҫҡыһы крәҫтиәндең үҙе менән бергә килде. Матур урмандарҙы киҫеп яндыра, йәмле, йәмйәшел йәйләүҙәрҙе һөрөп, ҡапҡара тупраҡҡа әйләндерә башланылар. Тимербай ҡурайсы был афәткә бик ҡайғыра, эсе боша ине. Яңы тормошто ул бөтөн күңеле берлә ерәнә, һүгә ине:

> Беҙҙең генә йәйләү бигүк йәмле
> Аҡ тирмәләр ҡороп йәйләргә...—

тип һаман йырлай, биш тишекле ҡурайын моңландырып уйнай ине...

Ел башланды. Боронғо йыуан ҡорһаҡлы, киң күңелле байҙар, ҡорот-майҙы ҡыҙғанмай ҡунаҡ һыйлаусы ҡарсыҡтар, «Ҡурай тартсы, ҡунаҡ!» — тип күбәтә менән ҡымыҙ биреп торған матур ҡыҙҙар йылдан-йыл юғала бара ине. Боронғо аҡ тирмәләрҙең киң ишектәре ҡурайсы, йырсы ҡунаҡтарға тарая башланы. Ҡара һабалар юғалып, оҙон ағас көбөләр

сыҡты, ҙур күбәтәләр юғалып, кескенә тәгәстәр пәйҙә булды.

Тимербай ҡурайсы боронғо киң йәйләүҙәрҙе, матур иркен тормошто, йәмле илде мәңгегә юғалтҡанын һиҙҙе...

Ул заводҡа барҙы. Ағас киҫтереүсе урыҫты табып, ҡаба[1] сабыуға ялланды. Ҙур күбәтәләр менән ҡымыҙ ғына күтәреп эсеүҙән башҡа һис ауырлыҡ күрмәгән ҡул, ҙур балта күтәреп, башҡорт урмандарының ҡарт ағастарын киҫеүгә, шуның менән тамаҡ аҫрауға мәжбүр булды.

Тимербай ҡурайсы илай-илай өс йыл ҡаба сапты. Ул инде тышынан тамам Тимофейлашты. «Тимофей» тигән ләҡәпкә лә, кеүәҫкә лә, ҡыярға ла күнде. Ләкин ул эсенән һаман шул иркен йәйләүҙең балаһы Тимербай ҡурайсы ине. Ҡулы эштән бушаған арала ул биш тишекле ҡурайын алып, аулаҡ ергә бара ла моңлана ине... Ул киң йәйләүле, ҡыҙыҡлы тормошто онота алмай ине...

Бер матур көндә ул Тыуған илен бик ныҡ һағынды:

Ай-һай ғына тимәй, көйҙәр килмәй,
Ҡайғы күрмәй егет ир булмай.
Ниндәй генә итеп һыйлаһа ла,
Бүтән ерҙәр Тыуған ил булмай.

Аҡ тирмәләр ҡороп, ат уйнатып,
Йәйләп йөрөнөк Урал буйҙарын.
Мин иламай, туған, кем илаһын —
Мин һағындым илдең туйҙарын... —

тип йырлап, ҡурайын уйнаған һайын тойғоһо арта ине.

Ул ҡайтыуға сыҡты. Бына Тыуған иленең боронғо йәйләүенә килде. Боронғо урмандарҙың үҙен түгел, урындарын да күрә алманы. Боронғо йәм-йәшел йәйләү сәхрәләре ҡап-ҡара тупраҡҡа әйләнгән, матурлығын юғалтҡан ине...

Йәнтимер кантондың йортонда ул Гришканың заимкаһын күрҙе. Бикбау ҡарттың ҡысҡыртып, кешнәтеп бейә бәйләй торған елеһендә Андрюшканың һауаға саң-туҙан осороп ер һөрөп йөрөгәнен күрҙе.

Бына ул тыуған ауылға килде.

Тыуған ауыл боронғо ауыл түгел ине. Ул унда һаба түгел, көбөнө лә таба алманы.

Ҡаһым түрәне, Салауат батырҙы һөйләп, ҡурайын уйнап ҡараны. Ләкин башҡорттарҙың күңелендә дәрт, моң, мөҡәддәс тойғоларҙы уята алманы: иҫке дәрт, мөҡәддәс тойғолар һүнгән, туңған ине...

Ул моңландырып ҡурай уйнай башлаһа, Ташбулат, Бикбулаттар: «Андрюшканан бер бот он һорабым», «Гришканан бер әсмүхә сәй алып булһа ярар ине», — тип һөйләшә башлайҙар ине. Ниһайәт, Тимербай ҡурайсы үҙе лә Гришкаға китте...

Гришкаға өс йыл һыйыр көтөп, Тимербай ҡурайсы вафат булды.

[1] *Ҡаба* — ағас һабандың кәҫ таҡтаһын беркетеү өсөн кәкре ағастан торған өлөшө.

Егерме биш йыл крәҫтиән ағымынан, яңы тормоштан ҡасып йөрөгән иркен даланың иркә балаһы крәҫтиән өйөндә үлде. Ауылдан мөәзин килеп, Тимербай ҡурайсыны ташландыҡ, иҫке йәйләү мәҡбәрәһенә күмде. Уның һуңына бары урыҫ сәкмәне менән биш тишекле ҡурайы ғына ҡалды. Гришка: «Ҡәҙерле нәмәһе бына шул сәкмәндән башҡа юҡ», — тип, ҡара сәкмәнде мөәзингә биреп ебәрҙе лә ҡурайҙы ҡураға ташланы...

Биш тишекле ҡурай Гришканың эттәре, дуңғыҙҙары аяҡ аҫтында тапалған кеүек, уның эйәһе — иркен даланың иркә моңло балаһының ҡәбере лә, биш йылдан һуң һөрөлөп, иген аҫтында ҡалды...

*1915*

?

**1.** «Башҡорт моңо» шиғырында «Бер йырланым шулай, бер иланым» тип әйтелгән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен, был күренештең сәбәптәрен аңлатып бирегеҙ. **2.** «Тимербай ҡурайсы» хикәйәһенең сюжетын автор һүҙҙәре һәм ҡараштары менән бәйләп һөйләп сығығыҙ. **3.** Тимербайҙы ниндәй сәбәптәр һәләкәткә алып килә? **4.** Хикәйәнең иң һуңғы абзацын уҡып, быны менән автор ни әйтергә теләгәнен самалап ҡарағыҙ. **5.** Ф. Сөләймәновтың «Башҡорт йәйләүендә» (1996 йыл) китабын табып уҡып сығығыҙ. «Салауат батыр» пьесаһы хаҡында әңгәмә үткәрегеҙ.



# Мәжит Ғафури

(1880 – 1934)

## СЕБЕР ТИМЕР ЮЛЫ ЙӘКИ МИЛЛӘТТЕҢ ХӘЛЕ

Ай-һай, ҡыҙыҡ донъя бағы араһында,
Һәр милләт алға китеү сараһында.
Һалып университет һәм гимназия,
Уҡыта төрлө милләт барыһын да.

Милләтемә итһәм ҡул менән ишара,
Аты арыҡ, артҡа ҡалған был бисара.
Артҡа ҡалһа, һаман да ҡайғыһы юҡ,
Алға табан барырға ҡылмай сара.

Һәр тарафҡа ҡараһаң, фонарь яна,
Дәртле кеше фонарҙан яҡты ала.
Һәр халыҡ алға китеү юлын эҙләй.
Уҡытып мәктәптәр тулы бала.

Һәр төрлө фәндәр менән донъя тулды,
Донъяла наҙанлыҡ гөлө һулыны.
Наҙанлыҡ ағасына йәбешкәндәр,
Ҡулдары ысҡынып, һәләк булды.

Наҙанлыҡ ағасының тамыры насар,
Аҡылы бар әҙәмдәр унан ҡасыр.
Унан ҡасып, алға китеү юлын тапһа,
Ул кеше донъяға һәр ғилем сәсер.

Мәҙәни ир файҙа итер милләтенә,
Милләтен бәхетле итер көн дә, төн дә,
Яңғыҙы йөҙ мең ирҙәрҙе эйәртер,
Эйәртеүсе өҫтөн булыр һәр әмерҙә.

Мәҙәни булған милләттәр уҙа бара,
Наҙан милләт, туҙан кеүек, туҙа
бара,
Һәр кемдең ауырыуы бар
ауырыуҙыр,
Тотош милләт ауырыуы
наҙанлыҡтыр.

Һәр бер сирҙең дауаһы булған
кеүек,
Милләттең дә дауаһы —
ғалимлыҡтыр.
Бер милләттең таяғы ғилем булһа,
Ул таяҡты ҡулға тотоп йөрөр
булһа,

Һәр дошманды ул, шикһеҙ,
ҡулға алыр,
Гәрсә дошман Рөстәм[1] кеүек батыр
булһа,
Аурупалы[2] ғилем менән һауа осто,
Бара-бара ҡотоптарға[3] юлдар асты.

Беҙ яңы йоҡомһорап баш күтәреп,
Быларға ҡарап, күреп, аҡыл
шашты.
Аурупалы һәр фәндән мәктәп асты,
Һәр төрлө фәндәрҙән ғилем сәсте.

Университет, гимназия, академия,
Матбағалар[4] — уйлаһаң, ҡандай
яҡшы!
Аурупалы океандарҙың өҫтөн
күрҙе.
Өҫтөн күреп, ҡәнәғәтләнмәй, төпкә
сумды.

Һыу өҫтөндә хисабы юҡ төрлө
карап,
Океандың һәр яғына былар китте.

Аурупалы чугункаға[5] ултырҙылар,
Айлыҡ юлды бер көндә бөтөрҙөләр.

Чугунка Себерҙәргә сәфәр итер,
Тауҙарҙы, таштарҙы ашып китер.
Күп ерҙәрҙе аҙ көндә гиҙеп килеп,
Вокзалға етер ҙә ауаз итер.

Был ауаздан күп файҙа ала,
Чугунка һаман алға табан бара.
Бөтә көсө менән беҙгә өгөт һөйләп,
Йөрәгенә сыҙай алмай бик ҡабара.

Һүҙелер: «Тырышлыҡ итә һәр
милләт!
Минең былай булыуымдан алың
ғибрәт!
Ғилем, һөнәр арҡаһында күп
ерҙәрҙе
Гиҙермен, күп ерҙәрҙе заманы
ҡилләт[6].

Кил, милләтем, фәҡирлектән
һаҡланайыҡ,
Һөнәр, ғилемгә тырнаҡтар
батырайыҡ!
Һәр зарҙарҙың башлығы
фәҡирлектер,
Ул мәғлүм фәҡирлекте ни
ҡылайыҡ!»

*1902*

---

[1] *Рөстәм* — боронғо Иран шағиры Фирҙәүсиҙең «Шаһнамә» тигән китабында һүрәтләнгән батыр.
[2] *Аурупа* — Европа.
[3] *Ҡотоп* — полюс.
[4] *Матбаға* — типография.
[5] *Чугунка* — паровоз, поезд.
[6] *Заманы ҡилләт* — бик аҙ ваҡыт эсендә.

## 1906 ЙЫЛДАН 1907 ЙЫЛҒА ВАСЫЯТ

Күп йылда бер генә рәт килеп
кистем,
Әүәлдә үтмәгәндер минең миҫлем[1].
Аҙ ваҡытта күп күрһәткән
ғәйрәтемә
Ғәжәп ҡалып, мөсәлләм булды[2]
һәр кем.

Был эштә баштан-аяҡ уйлағанда,
Тәьҫир иттем донъялағы барса
йәнгә,
Фәҡир, бай, хаким, ғауам[3],
барсаһын да
Тартыштырып, ғарыҡ иттем[4]
ҡыҙыл ҡанға.

Ғалим менән наҙандарҙы ҡушып
бергә,
Өйрәттем һәр береһен берләшергә.
Был һүҙемдең хаҡлығын
тиҙ белерһегеҙ,
Күҙ һалһағыҙ Ун етенсе октябргә.

Япон менән Рәсәйҙе килештереп,
Унда солох, был урынға янъял
кереп,
Бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә бишенсе
йыл
Һәр бер эште бер башланы,
бер бөтөрөп.

Ҡушылдылар бер урынға
йәш кешеләр,
Йәштәрҙән ҡурҡтылар баш
кешеләр,
«Һәр кешенең хаҡы тигеҙ
булһын!» — тип
Ҡысҡырҙылар зияли[5] һәм ас
кешеләр.

Һәр ерҙә ҡаһармандар аяҡ баҫып,
Залимдарҙың йөҙҙәренән ҡаны
ҡасып,
Баш ҡалала «баш кешеләр»
ҡото осҡас,
Халыҡтарҙы туҡтаттылар, Дума
асып.

Килделәр ул ҡалаға белгән ирҙәр,
Бер ҡылды ҡырҡ итеп бүлгән
ирҙәр,
Уларҙың тура, әсе һүҙҙәренән
Зар иланы Петербурҙа көлгән
ирҙәр.

Аптырағас, таратырға булып
мәжбүр,
Замандың беҙгә ҡалған золомон
күр!
Урынһыҙ: «Мин һеҙгә баш!» —
тигән кеше
Саф ҡояшҡа бысраҡ ҡулдан
төшөрҙө кер.

Был йылда уйын булды бомба
атмаҡ,
Сәғәҙәттән[6] иҫәпләнде үлеп ятмаҡ,
Йәштәрҙә мылтыҡ атмаҡ, тел
оҙатмаҡ,
Уларҙың ғәйрәттәре булды аҫмаҡ!..

---

[1] *Миҫлем* — оҡшашым.
[2] *Мөсәлләм булды* — ышанды.
[3] *Ғауам* — масса.
[4] *Ғарыҡ иттем* — батырҙым.
[5] *Зияли (зыялы)* — уҡымышлы.
[6] *Сәғәҙәт* — бәхет.

Был йылда күп урында бөтөп
цензур,
Асылды был донъяға яңы бер нур.
Аҙ булһа ла һәр тарафҡа юл
асылды,
Булманы был йәһәттән беҙҙә
ҡосур[1].

Был йылда ҡуҙғалдылар
мосолмандар,
Үлергә яҡын булған ғәрип йәндәр,
Хөрриәт нуры менән нурландылар
Һәләкәткә яҡын булған шул
ирәндәр[2].

Иҫкә алдыҡ ғажиз булған бик
күп асты,
Кейемдән мәхрүм булған
ялanғасты,
Бер йылда ошо эштәр аҙ түгелдер,
Еңел түгел тиҙ ауҙарыу ҙур ағасты.

Хәрәкәтте күп кешегә тиҙ белдереп,
Мазлумдан[3] залимдарҙы[4]
еңелдереп,
Кешеләргә зарар иткән кешеләрҙе,
Тыныс таптым, ҡара ергә
күмелдереп.

Рәсәйҙең кәмәһенән сыҡты ярыҡ,
Белмәйенсә үҙен үҙе ҡылды ғарыҡ.
Ҡан эсеүсе бүреләрҙең тештәренән
Яҡын булды ҡотолорға ҡуй
һәм һарыҡ.

Тырыштым: бер булһын, тип,
фәҡир һәм бай,
Эш хаҡын яҡшы алһын фәҡир
малай,
Бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә етенсе йыл,
Ижтиһад ҡыл[5], минең кеүек, һин
дә шулай!..

Тамам булдым, инде китәм,
дуҫ-иштәрем,
Тамам булмай тороп ҡалды
күп эштәрем,
Был эштәрҙе тамам итһен етенсе
йыл,
Бөтмәне дошманымда күп үстәрем.

Һәр төрлө һүҙ яҙҙы был көн әһле
ҡәләм[6],
Күп һөйләнде уҡтар кеүек үткер
ҡәлам[7],
Табырһығыҙ хаҡығыҙҙы,
тырышһағыҙ,
Етенсе йыл, инде беҙҙән һеҙгә
сәләм!..

*1906*

[1] *Ҡосур* — сикләү, етешһеҙлек.
[2] *Ирән* — икән.
[3] *Мазлум* — иҙелгән.
[4] *Залим* — иҙеүсе.
[5] *Ижтиһад ҡыл* — тырышлыҡ күрһәт.
[6] *Әһле ҡәләм* — ҡәләм эйәләре.
[7] *Ҡәлам* — һүҙ.

## 1907 ЙЫЛДЫҢ ЯУАБЫ

Ирештe сәләмегеҙ беҙ фәкиргә,
Һеҙ киттегеҙ кире ҡайтмаç йыраҡ ергә,
Ваҡыт етеп, ғәйрәт менән эш күрһәтмәй
Белә алмам хәҙер генә ни әйтергә.

Юлығыҙҙа фиҙа итеп тән менән йән,
Ғәйрәт иттең үҙ юлыңды нәҡ арыçлан,
Ҡай ваҡытта һеҙ еңелеп ҡалһағыҙ ҙа,
Асылда еңелде бит һеҙҙән дошман.

Сарыф ҡылдың яҡшы юлда бик ҙур көстө,
Бынан һуң тапшырығыҙ беҙгә эште.
Үҙегеҙгә бик мәғлүм «ҙур кешегә»
Хәл ҡәҙәре батырырбыҙ үткер теште.

Тигеҙлек нурын ергә тараттығыҙ,
Күп халыҡты үҙегеҙгә ҡараттығыҙ,
Беҙ инде тырышырбыҙ еңелмәçкә,
Һеҙ ни өсөн таратыуҙы яраттығыҙ?

Бер таралды, инде тағы бер таралыр,
Бара торғас, күп халыҡта ғәйрәт артыр,
Күп менән аҙ халыҡтар уйнаһалар,
Башҡа булыр беҙ етенсе йылдың эше,
Ныҡ төшөнөр хәҡиҡәткә барса кеше.
Ҡан эсергә һөжүм иткән бүреләрҙең,
Туҡтамаһа, ошо йылда һыныр теше.

Бынан һуң бүреләргә ҡуй ашатмам,
Иншалла, хәл ҡәҙәре уйһыҙ ятмам,
Бик аҙ ғына кешеләрҙең кәйефе өсөн
Бисара ас халыҡты һис тә һатмам.

Майҙанға сығыр был йыл ҙур тәбәддөл[1],
Был эште, ҡояш кеүек, бик асыҡ бел!
Күп йәшенле ямғырҙарҙы күрмәйенсә,
Гүзәл, матур сәскә атмаç ал, ҡыҙыл гөл.

Дошманмын иçке эшкә мин үҙем дә,
Мөстәбитлек[2] Төркиәлә ошо көндә,
Етенсе йыл шул золомдар тамам бөтөп,
Истибдаттың[3] исеме ҡалмаç ер йөҙөндә!

---

[1] *Тәбәддөл* — үҙгәреш.
[2] *Мөстәбитлек* — деспотизм.
[3] *Истибдат* — реакция.

Ғибрәт алды күреп халыҡ
бер-береһен,
Белә тороп, енәйәткә нисек төшкәнен,
Яниҙарҙың[1] етенсе йыл
йыназаһын
Уҡырбыҙ, инде ваҡыт, улар
бөтһөн!

Донъяға кейҙерербеҙ башҡа
күлдәк,
Ҡайғы-хәсрәт һуңы
булыр — уйын-көлмәк.
Шул мәйеттән тороп ҡалған
малыбыҙҙы
Вариҫтарға тейеш булыр быйыл
бүлмәк.

Һәр заман ҡайғы күрәм татар өсөн,
Баштарына киләсәк көн хәтәр өсөн,
Башҡа юҡ, ҡысҡыра ла ҡарап
ҡала,
Сығарғанда хаҡтарын һатыр өсөн.

Һәр нәмә был донъяла ике яҡлы,
Таяҡ башы беҙгә төштө быға
саҡлы,
Бер мең дә туғыҙ йөҙ ҙә етенсе йыл
булыр хаҡлы.

Һәр сәғәҙәт был донъяла килер
алмаш,
Ҡараңғы төн үтеп китһә, сығыр
ҡояш.
Каруандар һау-сәләмәт барып етер,
Ҡурҡыныста берен-береһе
ҡылһа юлдаш.

*1906*

## БАҘАРҒА СЫҠТЫМ

Бер ваҡытта уйланым мин дәрт
баҫырға,
Хәсрәт баҫҡан моңло күңелде
асырға,
Уйлап-уйлап, бер ҙә барыр ер
тапмағас,
Күңел әйтте: «Улай булһа, сыҡ
баҙарға».

Яуап бирҙем: «Улай булһа, ярай,
күңел,
Беҙҙең өсөн унда сығыу ауыр
түгел».
Мин сығамын ҙур ҡаланы күрер
өсөн,
Ахыры нисек булыр, һин үҙең бел.

Кейендем, хәл ҡәҙәре
матурландым,
Бар булған кейемдәрҙе кейеп
алдым.
Шайәт инде матур булып еттем
тип,
Көҙгөләге һүрәтемә күҙҙе һалдым.

---

[1] *Яниҙар* — енәйәтселәр.

Ошо эштәр күренделәр матур
кеүек,
Күрендем үҙ-үҙемә бик ҙур кеүек,
Алам-һалам аҡ яғалар ҡуйылмаһа,
Була инде, гүйәки, бер ҡосур
кеүек.

Эш тамам булғандан һуң,
киттем сығып,
Баш күтәреп, кеҫәләргә ҡулды
тығып.
Иң әүәл хәмер һата торған ерҙән
Китергә тура килде миңә уҙып.

Рәсәйҙә ошо ваҡыт бик ҡаты
ҡыш,
Егерме биш градусҡа еткәндер
тыш.
Бер аҙ халыҡ хәмер һатҡан
ҡабаҡ янда
Торалар урыҫ менән татар ҡатыш.

Торалар бисаралар ҡалтырашып,
Һалҡында һары боҙға аяҡ баҫып.
Бәғзеһе буш, бәғзеһе тәмәке тарта,
Бәғзеләре шап-шоп итеп шешә
асып.

Быларҙың бик күптәре ас-яланғас,
Эшләп алған утыҙ тингә хәмер
алғас,
Бында биреп киткәс аҡтыҡ
аҡсаларын,
Балалары өйҙә көн-төнө ас.

Быны күреп, сыҙар хәл
юҡ — янды йөрәк,
Былар өсөн кем ғәйепле булыу
кәрәк?..

Мең төрлө хәсрәт менән күңелем
тулып,
Был ерҙән уҙып киттем мин
тиҙерәк.

Ниәт ине күңел асыу, йә, күңел ас!
Былар торһон ошо ерҙә сер яланғас,
«Былар ниңә былай булған?»
Фекер итмә!
Күрмәҫ өсөн күҙҙе йом да тиҙерәк
ҡас.

Ергә ҡарап бара инем мин аптырап,
Артымдан берәү килде бер тин
һорап.
Ҡараһам, был — бисара хәйерсе
ҡыҙ:
«Ағай, бер тин бир әле!» — ти,
ҡурҡыңҡырап.

Һаман ҡайғы был донъяла, был
ниндәй эш!
Былай булһа, күңел асмаҫ минең
китеш.
Ҡыҙғанып был бисара ҡыҙ баланы,
Биреп киттем, мә һиңә, тип, биш
тин көмөш.

Уңманы ошо көндә минең юлым:
Кеҫәмә кермәҫ борон ике ҡулым,
Ҡараһам күҙ әйләндереп
тирә-яҡҡа,
Хәйерсегә тулып киткән
уңым-һулым.

«Ағай, миңә лә бир...» — тип һорап
минән,
Тарталар береһе итәк, береһе
еңдән.

Аптырағас, биреп киттем егерме
тин,
«Тигеҙ итеп бүлегеҙ, — тип, — ике
тиндән».

Фәҡирлектән быларҙа һис юҡтыр
әҙәп,
Һорашырға өйрәнгәндәр былар бик
шәп.
Уларҙың бындай насар булыуына,
Уйлағыҙ, әфәнделер, кемдәр сәбәп?

Быларҙан да уҙып киттем мин
тиҙерәк,
Күңелгә ҡайғы тулды һәм күберәк.
Шул ваҡытта бер татарым килеп
сыҡты,
«Күрәргә ҡар юҡмы?» — тип,
тотоп көрәк.

Яуап бирҙем: «Ҡарым юҡтыр,
байҙарға бар,
Ихтимал, көрәтерҙәр һеҙҙән улар».
Һуҡранып был бисара яуап бирҙе:
«Һис булмаһа, яуҙырманы
бер Алла ҡар…»

Экренләп ҙур урамға барып керҙем,
Башҡа төрлө бер ғаләмде унда
күрҙем.
Донъяның был китешенә
асыуланып,
Сыҙай алмай, ергә ҡарап бер
төкөрҙөм.

Сөнки унда йөрөүселәр бөтәһе бай,
Эш булмағас, йөрөй былар
ҡабаланмай,
Гүйәки, сират кискән кеше кеүек,
Эрелектән башҡаларға күҙ ҙә
һалмай.

Сифаттары тора күҙҙе
ҡамаштырып,
Кейем кейә былар һәр көн
алмаштырып,
Былар бында уйнап-көлөп йөрөһөн
былай…
Көн итһен теге халыҡтар ас тороп…

Иң байҙары йөрөп тора төрлө яҡҡа,
Ултырып биш йөҙ һумлыҡ
арғымаҡҡа,
Сапмайынса шул дәрәжә шәп
баралар,
Еткермәҫтәр насар-носар сапҡан
атҡа.

Ялтыраған саналары, бер ҙә юҡ
кер,
Ултырған имән төҫлө ныҡлы
күсер.
Тик бер атын һатһаң, фәҡир ун
йыл ашар,
Фекер ҡыл! Бында бар һуң ни
кеүек сер?..

Быны күргәс, хәсрәт китте
артыңҡырап,
Асыуланып, кире ҡайттым артҡа
ҡарап.
Урап килһәм, бая әйтеп үткән
фәҡир
Ҡалтырап ултыралыр, бер
тин һорап…

Өйөмә ҡайтып керҙем асыуланып,
Ҡайғынан йөрәктәрем утҡа янып,
Ташланым кейемдәрҙе төрлө яҡҡа,
Дошман күреп, тиҙ-тиҙ генә
һалып-һалып.

*1907*

## ЮҠТЫРҺЫҢ ДА, АЛЛА!

Юҡтырһың да, Алла!.. Әгәр булһаң,
Сабыр итмәç инең был эшкә,
Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаç
Инең ерҙә алтын, көмөшкә…

Күрер инең көсһөҙ бәндәләрҙе,
Ярҙам итер инең уларға,
Ирек бирмәç инең көслөләргә
Көсһөҙҙәрҙе былай таларға.

Йәш түктермәç инең ҡан аралаш,
Ишетер инең аһ вә зарҙарҙы,
Күп күңелдәр эстән һыҙлап йөрөй,
Бер ҡыҙғаныр инең уларҙы.

Яратҡанһың халыҡтарҙы, фәҡәт
Тигеҙ итеп ярата алманың.
Ысын мөхәббәт һәм шәфҡәт нурын
Тигеҙ итеп тарата алманың!..

Бәндәләрең булды ысын бәхетһеҙ,
Диндәрең дә бәхет бирмәне,
Тәғлимәтең ошо көнгә тиклем
Сәғәҙәткә ирештермәне.

Хаким иттең, Раббым, ер йөҙөнә
Ҡара көстө — алтын-көмөштө,
Һинең бөйөклөгөң, ҡөҙрәтеңә
Ошо эштәр бер ҙә килешмәй…

Ярай ҙа һин үҙең бик рәхәттә,
Бәндәләрең ҡан-йәш түгәләр,
Ғүмер буйҙарына михнәт сигеп,
Ғазап эстәрендә үләләр.

Көсөң теүәл булһа, бер фарманың
Етмәç инеме һуң тыйырға?
Ысын татыулыҡты, мөхәббәтте
Мәңге урынлаштырып ҡуйырға?

Сабыр иткән бәндәләргә вәғәҙәң
Ахирәттә ғәйәт ҙур-ҙурын!
Шул вәғәҙәнең бик аҙ ғына өлөшөн
Донъялыҡта күрһәт, ас нурың!

*1915*

## БӨТӨН ИМПЕРИАЛИЗМ ҺУҒЫШЫ

Беҙ ирекле, беҙ граждан, һәммәбеҙ
шат, беҙ азат,
Тик бына унда һаман ҡан,
ҡурҡыныс, көн-төн йыһат[1].
Бында беҙ кешелек өсөн: «Һәр кем
тигеҙ булһын!» — тибеҙ.
Унда ҡалалар, ауылдар ер менән
булған тигеҙ.
Бында хөрриәт ауазы ерҙе, күкте
яңғырата,
Унда беҙҙең күп туғандар тилмереп
телһеҙ ята.
Унда хәсрәт, унда ҡайғы, унда ҡан
һәм күҙ йәше,
Унда мылтыҡ, унда һөңгө, унда
тик туп йәҙрәһе.

---

[1] *Йыһат* — һуғыш.

Ундағы беҙҙең туғандар туп ата
бер-береһенә,
Ҡырыла унда ниндәй йәндәр,
ҡандары ергә һеңә.
Ул туғандарҙың ҡулын сисәйек,
улар булһын азат,
Ҡысҡырайыҡ бер юлы:
«Бөтһөн һуғыш!.. Бөтһөн йыһат!»

*1917*

## АЖДАҺА

*(Корнилов фетнәһе мөнәсәбәте менән яҙылғайны)*

Хөрриәт байрағылыр тотҡаныбыҙ,
Әйҙә шул юлда түгелһен ҡаныбыҙ,
Ҡыҙғаныс түгел бөтә мал,
йәнебеҙ, —
Әһле хөрриәт[1],
тағы ҡуҙғалығыҙ!..
Баш күтәрмәксе була
дошманығыҙ...
Баҡсы! Дошман үлмәгән, ул
ҡуҙғала,
Хөрриәт емешен халыҡтан
ҡыҙғана.
Әкрен-әкрен ҡанлы ҡылысын
ҡулға ала —
Әһле хөрриәт, тағы
ҡуҙғалығыҙ!..
Баш күтәрмәксе була
дошманығыҙ...
Хөрриәт әһлен улар еңмәкселәр,
Ҡол итеп беҙҙе һаман иҙмәкселәр,
Эшселәрҙе эт итеп екмәкселәр, —
Әһле хөрриәт, тағы
ҡуҙғалығыҙ!..
Баш күтәрмәксе була
дошманығыҙ...
Ҡанлы байраҡтарҙы ҡабат ҡулға
алайыҡ,
Ул яуыз дошманға ҡаршы
ҡуҙғалайыҡ,
Хөрриәт йырҙарын йырлап
барайыҡ, —
Әһле хөрриәт, тағы
ҡуҙғалығыҙ!..
Баш күтәрмәксе була
дошманығыҙ...
Мәңгегә үлтерелһен ул ҙур аждаһа,
Баш күтәрмәҫлек булып был
донъяға,
Был халыҡтарға бирелһен ысын
баһа, —
Әһле хөрриәт, тағы
ҡуҙғалығыҙ!..
Баш күтәрмәксе була
дошманығыҙ...

*1917*

## ИКМӘК!..

«Икмәк!.. Икмәк!..» — тип
урамдарға атылған кемдәр ул?
Ас тороп йөҙҙәре һарғайған һәм
һулыған кемдәр ул?
Бер һыныҡ икмәкте телдәрҙә һаман
тәсбих итеп:
«Икмәк!.. Икмәк!..» — тип
урамдарҙа ҡысҡырған кемдәр ул?

[1] *Әһле хөрриәт* — азатлыҡ һөйөүселәр.

Ниндәй тәьҫирле тауыштар!..
Саф йөрәктәрҙе өҙә.
Был рәүешле ҡысҡырыуға мәжбүр
булған кемдәр ул?
Ас балаларын илатып,
өйҙәрендә ҡалдырып,
Он көтөп көндәр буйына бында
торған кемдәр ул?
Тол ҡатындар, ас етемдәрҙең
ауазы, тауышы ул,
Бер туйырға әрнешеп, әҙләй улар
бер изге юл.
Һурылып байҙар тарафынан
уларҙың ҡандары,
Саҡ тороп ҡалған уларҙың
тәндәрендә йәндәре.
Көс менән донъя көтөүселәр —
шулар «икмәк!» тиҙәр.
Эш менән бар донъяны мәсғуд[1]
итеүсе эшселәр.

*1917*

## ҠЫҘЫЛ БАЙРАҠ

Ҡара һин алға!
Күрәмһең унда
Ҡыҙыл байраҡты —
Буялған ҡанға.

Көслө эшселәр
Күтәргән уны,
Буялған уға
Шәһиттәр ҡаны.

Хөрлөк, тигеҙлек
Уның шиғары[2],
Һәммә байраҡтан
Тора юғары.

Шунда хәҡиҡәт,
Шунда ысын иман,
Ҡуҙғал, эшселәр!
Таң ҡалһын йыһан!

Иткән тәжәссем[3]
Халыҡтың көсөн,
Был ҡыҙыл байраҡ
Шуның билдәһе.

Ҡуҙғал, эшселәр!
Дошман еңелһен,
Көс кемдәлеген
Бар донъя белһен.

Ҡара көстәргә
Ҡаршы торған ул,
Бирҙе был юлда
Миллион ҡорбан ул.

Бөтә ҡара көс
Унан еңелде,
Шуның өсөн бөгөн
Юғары эленде.

Бөгөн батша ул
Бөтә донъяға,
Уға ниндәй көс
Ҡаршы тора ала?

Йығылды инде
Башҡа әләмдәр,
Еңелде инде
Залим әҙәмдәр.

Эй, ҡыҙыл байраҡ,
Нур бир йыһанға!
Эйҙә, эшселәр,
Алға вә алға!

*1917*

---

[1] *Мәсғуд* — бәхетле.
[2] *Шиғар* — лозунг.
[3] *Иткән тәжәссем* — кәүҙәләндергән.

# ЯРЛЫЛАР, ЙӘКИ ӨЙҘӘШ ҠАТЫН*

## I

Мин тора торған ҡаланың уртаһында баҙар булып, ул баҙарҙың да уртаһында бер ерҙә һәр ваҡытта эш эҙләп, эш көтөп тора торған ярлылар була торғайны. Кем ниндәй эш ҡуша, ниндәй хеҙмәт тура килә, улар шуны дүрт күҙ менән көтөп кенә торалар ине. Берәй кешегә утын ярҙырыу, ҡар көрәтеү кеүек ҡара эштәрҙе эшләтергә кеше кәрәк булһа, шул эш көтөп тора торған ярлылар янына килеп, уларҙың береһен алып китә ине.

Бында эш көтөп тора торған ярлыларҙың ҡулдарынан килгән эштәре: утын ярыу, ҡар көрәү, бысраҡ, сүптәрҙе таҙартыу кеүек бик ауыр ҡара эштәр генә булып, ҡоралдары ла көрәк, балта кеүек нәмәләр ине. Былар шул һөнәр һәм шул ҡоралдары менән ҡул көстәре арҡаһында тамаҡтарын туйҙыралар ине...

Бына бөгөн дә улар, ғәҙәттәре буйынса, иртә намаҙ ваҡытында уҡ ризыҡ эҙләп был ергә килеп тулғандар ине. Бөгөн ҡыштың иң һалҡын көнө булып, ҡара халыҡса әйткән ваҡытта, төкөрөк ергә төшмәҫлек сатлама һыуыҡ ине. Ҡояш яңы ғына сығып, тирә-яғы ҙур алҡа менән әйләндереп алынған ине. Ҡояштың былай кәртәләнеп, ҙур алҡа эсендә ҡалыуы бик һалҡын ваҡыттарҙа ғына була. Шуға күрә лә үҙе бер һалҡын боҙ тауы кеүек күренә ине.

Баҙарға утын, бесән һатырға килә торған ауыл кешеләре йүгерә-йүгерә аттары менән саналары янынан атлайҙар. Тояҡтарына боҙ йәбешеп ҡатҡан аттар йөктәрен тарта алмай ары-бире һелкенәләр. Был аттар асылда ҡара йәки туры булһалар ҙа, тирләп сыҡҡан парҙары өҫтәренә бәҫ булып йәбешкәс, ап-аҡ булып күренәләр. Морондарына һыйыр имсәге кеүек боҙҙарҙың ҡатыуҙары көндөң рәхимһеҙ һалҡын икәнен күрһәтә ине. Мөрйәләрҙән сығып, бик юғары күтәрелгән, һалҡынлыҡтан ҙур тирәктәр төҫөн алған төтөндәр сикһеҙ күп булып, ситтән ҡарағанда, ҡара урман кеүек булып күренә һәм һәр кешенең өйҙә генә ултырғанын иҫкә төшөрә ине. Урамда йөрөүселәр бик аҙ булып, уларҙың да ихтыярһыҙ йүгерә-йүгерә барыуҙары бик кәрәкле йомош менән сыҡҡанлыҡтарын белдерә ине. Был йөрөүселәр ҡолаҡтарын, биттәрен тиҙ-тиҙ ышҡыйҙар. Бара торған ерҙәренә етеү менән, өңөнә ҡасып кереп киткән сысҡан кеүек, тиҙ генә кереп юғалалар ине.

Бына шулай һалҡын көндө теге эш эҙләп сығыусы ярлылар үҙҙәренең һәр ваҡыт йыйыла торған урындарына әллә ҡасан килеп

* Ҡыҫҡартып алынды.

тулғандар, бик ашығыслыҡ менән эш көтәләр ине. Былар, эш көтә-көтә аптырағас, ике ҡулдарын бер-береһенә килтереп, еңдәре эсенә тығып ҡуйғандар. Ҡулдарында бейәләйҙәре булғаны, өшөмәҫкә тырышып, ике ҡулды бер-береһенә шап-шоп иттереп һуға. Ары-бире йүгерәләр, бер-береһе менән көрәшеп, алышып та киткән булалар. Унан һуң: «Ә, ҡорт саға!» — тип, тиҙ-тиҙ ҡолаҡ һәм морондарын ышҡыйҙар ине...

Был урында ҡыҫҡа ғына сәкмән кейгән, билен бер еп менән генә бәйләгән, төрлө сепрәктәрҙе, иҫке тулаларҙы йыйып аяғына урап, сабата кейгән, сәкмәне ҡыҫҡараҡ булыу сәбәпле, тубығы тирәһендә ҡыҙыл ыштаны күренеп торған һәм көрәген ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырған, дер-дер ҡалтырап тороусы Шәриф тигән кеше лә бар ине.

Шәриф был ҡаланан йыраҡ түгел бер ауылда тыуған, бала ваҡытында уҡыу-фәлән күрмәгән. Етем ҡалып, шул ваҡыттан бирле, рәхәт күрмәй, фәҡирлектә үҫкән. Ғүмере буйына ҡара хеҙмәттәр менән генә тамағын туйҙырып көн үткәргән, ләззәт, рәхәттең ни икәнен белмәгән бәхетһеҙ бер кеше. Бына бында торған выҡытта ла уның ике күҙенән ихтыярһыҙ, үҙе белмәй торған күҙ йәштәре аға һәм сыбалып бөткән һаҡалына тама ла боҙ булып ҡата. Һалҡынлыҡҡа сыҙай алмай ҡалтырана, ары-бире йүгерләп, әллә ниҙәр уйлап, эш көтә ине. Уның өйөндәге: «Атай нимә алып ҡайтыр икән?» — тип көтөп ултырған балалары иҫенә төшә. Нисек булһа ла бөгөн ашарлыҡ нәмә алып ҡайтҡыһы килә.

Шәрифтең ярлы иптәштәре, һалҡынға сыҙай алмай, берәм-берәм ҡайта башланылар. Шәриф тә бик ҡайтыр, был һалҡында бер минут та тормаҫ ине. Ләкин өйҙә бер ҙә ашарға булмағас, бала-сағалары ас көйөнсә ҡалтырап көтөп ултырғас, нисек булһа ла берәй эш табып ҡайтыуҙы өмөт итә.

Иптәштәре таралып бөткәс, Шәриф бик шатланып: «Инде үҙем генә ҡалдым, бәлки, берәй эш тура килер», — тип торған саҡта, бер рус ҡатыны, Шәрифтең янына килеп: «Әйҙә, был әйберҙәрҙе күтәреп алып бар әле», — тине. Шәриф, Аллаға шөкөрҙәр ҡылып, ҡатындың әйберҙәрен күтәреп алып китте.

Юлда барған саҡта ләззәтле хыял менән: «Был мәрйә ун тин бирерме икән? Әгәр ун тин бирһә, ике ҡаҙаҡ икмәк һәм, үҙемдең янымдағы бер тинде ҡушып, өс мыҫҡал сәй алып ҡайтыр инем», — тип уйлап рәхәтләнә ине. Ул шулай ун бер тин аҡсаны ниндәй урынға тоторға кәрәк икәнен уйлап бара торғас, мәрйәнең тора торған өйөнә барып та еттеләр. Өйгә кереп, әйберҙәрҙе иҙәнгә ҡуйғас, теге мәрйә сисенеп, кеҫәһенән ун ике тин аҡса алып, Шәрифкә тотторҙо. Бына

шатлыҡ! Һис уйламағанда, ун ике тин аҡса бирҙе...

Шәриф, шатланыуынан ни эшләргә белмәй, өйгә ҡарай йүгерҙе. Ҡайтып барғанда, үҙҙәренә яҡын лавканан ике ҡаҙаҡ икмәк менән бер ҡап шырпы, өс мыҫҡал сәй алып ҡайтты. Тора торған кескенә фатиры ҡаланың ситендә булһа ла, ул бик тиҙ ҡайтып етте. Өйөнә барып кергән ваҡытта, гүйә, ҡатыны һәм балаларына маҡтанған кеүек: «Бына атайығыҙ малды шулай таба ул, сыҡты иһә, ала ла килә», — тигән төҫлө ҡултығындағы әйберҙәрҙе һике өҫтөнә бушатып ташланы. Үҙе бик ҙур бер бурыстан ҡотолған, өҫтән тау кеүек ауырлыҡты алып ташлаған кеше кеүек, сәкмәнен һалып, күлдәксән генә ҡалды.

Шәрифтең ҡатыны Бәҙриямал исемле булһа ла, ярлы булғанға күрә, Бәҙри йәки Бәҙрәш тип кенә йөрөтә торғайнылар.

Бәҙри Шәрифкә буйһоноусан һәм уның тормошона өйрәнгән, Шәрифте эшлекле тип ышана торғайны. Оҙон ғына буйлы, ас яңаҡлы, күҙҙәре эскә батҡан, өмөтһөҙ генә бер сифатта ине.

Өҫтөнә кейгән күлдәгенең ике еңе аҡ, билдән юғары яғы ҡыҙыл, түбән яғы һарғылт, башына ураған былтыр ураҡ ваҡытында алған яулығы ҡып-ҡыҙыл булғанға күрә, ала кейемле тип әйтерлек ине. Быларҙың ике балаһы булып, береһенең исеме Гөлйыһан булып, ете йәшендә, икенсеһе ир бала булып, Хоҙайбирҙе исемендә һәм дүрт йәшендә ине.

Был ваҡытта Гөлйыһандың күлдәге таҙа ғына булып, итәге генә йыртылған. Сәсе, тараҡ юҡлыҡтан, таралмаған һәм сыбалып бөткән көйөнсә, ике ҡулы менән тиҙ-тиҙ башын тырнап ала, ялан аяҡ көйөнсә мейес алдында тора ине.

Хоҙайбирҙенең ыштаны юҡ, ҡап-ҡара күлдәк кейгән, иҙеү бауы ысҡынған. Ике еңен һалындырып, ҡулдарын эскә тығып алған да, башын эйеп, бөгәрләнеп ултырған. Сәсе, үтмәҫ бәке менән алғанға күрә, тигеҙһеҙ булып тора. Уның өҫтөнә өс-дүрт урындан ҡутырлаған башының ҡанаған ерҙәренә ҡағыҙ йәбештерелгәйне. Аталарының был нәмәләрҙе алып ҡайтҡанын күргәс тә, аслыҡтан ағарған йөҙҙәрендә шатлыҡ, эскә батҡан күҙҙәрендә тереклек әҫәре күренде. Улар аталары алып ҡайтҡан нәмәләр янына йүгереп килеп, тотоп-тотоп ҡараны.

Бәҙри:

— Сабыр итеп тороғоҙ! — тип, икмәкте алып ҡуйҙы ла үҙе самауырҙы мейес алдына ултыртты. Яңы алып ҡайтҡан шырпыны асып, сыра яндырҙы ла ҡалай самауырҙың эсенә һалып ебәрҙе. Шул ваҡытта инде Шәриф:

— Был шырпыны һаҡлабыраҡ тот. Бик тиҙ бөтә, беләһең бит, был заманда аҡса табыуы бик уңай эш түгел. Әле лә тырышлыҡ арҡаһында

ғына тамаҡлыҡ аҡса таба алдым, — тип ашарға табыусы үҙе генә икәнен белдереп ҡуйҙы...

Бына көткән рәхәттәре булған сәйҙе эсергә ултырҙылар.

Бәҙри, баяғы ике ҡаҙаҡ арыш икмәген ҡулына алып, ике ҙур ғына телем киҫте лә Шәриф алдына, бер телемде үҙенең алдына ҡуйҙы. Был ваҡытта бөтәһенең күҙе шул ике ҡаҙаҡ икмәктә ине. Дүртенсе телемде киҫте лә, уртаға бүлеп, береһен Гөлйыһанға, яртыһын Хоҙайбирҙегә бирҙе. Ҡалғанын ни эшләтергә белмәй, ҡулында тотоп торған саҡта, Шәриф: «Етәр инде, телмә! Кис ашап ятырлыҡ ҡалһын, әллә бөгөн эш табып була, әллә юҡ, бар саҡта — бүреләй, юҡ саҡта — шүреләй торорға ярамаҫ, аҙыраҡ ҡыҫынҡыраҡ ашарға кәрәк», — тине. Хоҙайбирҙе, икмәкте ҡулына алғас, бик шатланып, ашарға ла, ашамаҫҡа ла белмәй, арлы-бирле әйләндереп ҡараны һәм, бына минеке күберәк, тигән төҫлө, Гөлйыһанға күрһәтте, күҙе янына ғына алып барып, икмәкте төҙәгән кеүек, күҙ ҡырыйынан ғына Гөлйыһанға ҡарай ине.

Бәҙри, бер пар сынаяҡҡа сәй яһап, Шәриф алдына ҡуйҙы. Икенсе сынаяҡ аҫтына сәй яһап, үҙе алып эсә башланы.

Әллә ҡайҙан алып ҡайтҡан бер киҫәк шәкәр иҫенә төшөп, ҡуйған еренән алды ла, икегә бүлеп, яртыһын Шәрифкә бирҙе. Ҡалған яртыһын тағы икегә бүлеп, яртыһын үҙе алды. Яртыһын тағы икегә бүлеп, береһен Гөлйыһанға, береһен Хоҙайбирҙегә бирҙе.

Шәриф, тағы кәсеп эҙләп китер өсөн, сабатаһын алып, сепрәктәрҙе урап кейенергә кереште.

Шәриф сығып киткәс, Бәҙри ҡалған сәйҙе эсеп ултырғанда, күрше фатирҙа торған Шәйех исемле кешенең ҡатыны Йәмилә килеп керҙе. Йәмиләнең ҡиәфәте, тормошо ауыр бер хәлдә, донъяның бөтмәҫ мәшәҡәттәрендә икәнлеген белдереп тора ине. Уның төҫө һарғайған, күҙҙәре эскә батып кергән, өҫтөндә иҫке генә күлдәк, башына йыртылып бөткән яулығын ураған һәм аяғына туҙып мыйыҡтары сыҡҡан сабата кейгән ине.

Үҙенә ҡарағанда, унан һәр кеше нәфрәтләнә, уны бер кем дә яратмай, бер кеше лә ҡыҙғанмаҫ төҫлө ине. Шуның өсөн Бәҙригә лә ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына, өмөтһөҙ бер тауыш менән:

— Иҫәнмеһегеҙ әле? — тине.

Бәҙри:

— Әле арыубыҙ, — тине лә, сынаяҡ аҫтына сәй ҡойоп, уның алдына ҡуйҙы. Баяғы икмәктән бик самалап ҡына киҫеп бирҙе. Бәҙриҙең икмәк тотҡанын күргәс, Хоҙайбирҙе килеп тә етте. Ләкин Бәҙри уға икмәк бирмәне: «Бар инде, аҙыраҡ торғас ашарһың», — тип кире ебәрҙе.

## II

Шәриф, сәй эсеп йыылынып алғас, бер ҙә ҡайғыһыҙ, әллә нисек бик тиҙ эш табылыр кеүек булып, тиҙ-тиҙ атлап бара ине. Күп тә йөрөмәне, бәхетенә ҡаршы, эш тапты. Бына утын ярырға кереште. Бер бәхет асылһа, асыла торған тигәйне, ысындан да шулай тура килде. Эсенән әллә ниҙәр уйлаған кеүек, Аллаға шөкөр итеп, ысын күңел менән яра ине. Айырыуса, хужа килгән ваҡытта, бик уңған һәм бик эшлекле икәнде белдерер өсөн, ялтырап йөрөй. Әүәлдә ярылған утындарҙы хужаға күрһәтеп: «Бына быны бик эре итеп ярғандар. Ахыры, бер ҙә эш рәте белмәгән кеше ярғандыр», — тип һөйләнә ине. Утын хужаһының килеп ҡарауы уның күңелен үҫтерә, ғәйрәт бирә, ваҡ ҡына итеп ярыуға сәбәп була ине. Утын яра торған түмәрҙең өҫтөнә ултырып бик йәйләп, киләсәге тәьмин ителгән кешеләрсә, бик күңелле һүрәттә тәмәкеһен тарта, үҙенсә бик ләззәт менән: «Был кеше ҡырҡ тин бирмәҫме икән? Бирер, бирер. Илле тин итеп ҡуймаһын, был утын сажиндан күп артыҡ бит, юҡ инде, ҡырҡ тин генә бирһен, шул да етер. Күптән бирле ит ашаған юҡ ине, берәр егерме тинлек ит алып ҡайтһам, егерме тин ҡала, егерме тиндең биш тин көмөшөнә туҡмасҡа он алһам, унан да ун биш тин артып ҡала. Ун биш тингә биш ҡаҙаҡ икмәк алып ҡайтһам... Бына байлыҡ!» — тип уйлай ине.

Ҡояш та байыманы, бар утынды тамам ярып бөтөрөп, ғәйрәтле бер һүрәттә хеҙмәт хаҡын һораны. Хужа ҡанескес һаран түгел икән. Шәриф уйлағанса, ҡырҡ тин көмөш хеҙмәт хаҡы биреп, яҡшы ярған өсөн биш тин тағы өҫтәп ҡуйҙы. Шәриф, бейәләйен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, янсығын алып, аҡсаһын һанап һалды ла, бик күп маллы кеше кеүек, эре генә атлап, тура ит баҙарына китте.

Был ҡырҡ биш тин аҡса Шәрифтең кәрәгенә камил еткән һәм бынан күп булһа, урын табылмаҫ кеүек тойола ине. Тотор урын булмаған, ниңә кәрәк ул! Бынан күп булһа, әллә ниңә маҙаһыҙ булыр төҫлө күренә ине.

Ул һәр ваҡыт шулай, икмәк, сәйҙән артып ҡалған биш-ун тин аҡсаһына урын таба алмай, нисек булһа ла тотоноп бөтөрөп ҡайта торғайны. Мәҫәлән, бер көн артып ҡалған биш тин аҡсаһына нимә алырға белмәй, күҙенә күренгән иҫке тимер киҫәктәре алып ҡайтҡан. Бына был ваҡытта ла уның ҡорған планын теге артыҡ биш тин боҙҙо. Ул биш тингә нимә алырға кәрәк, тип юл буйынса уйлап барҙы. Аҡса булһа, урын табыла инде. Шәриф тә биш тингә урын тапты. Сөнки, бер байрам булғас, булһын инде, тине лә биш тинлек шәкәр алып ҡайтырға ҡарар бирҙе.

Ит баҙарына кергәс, бик иркен, бик ҡурҡыуһыҙ һөйләшә, бик ныҡ һатыулаша башланы. Аҡса булғас, ниңә иркен һөйләшмәҫкә? Ҡарап тороп, бик һимеҙ ерҙәренән ун биш тинлек эсәк ҡатыш ит алып ҡайтты. Ҡайтып барғанда, юл өҫтөндәге лавканан биш ҡаҙаҡ икмәк, сәй, шәкәр алғандан һуң, тағы ете тин аҡсаһы артып ҡалды. Биш тиненә он алһа, ике тин аҡса тағы артып ҡала. Бына бөтмәҫ аҡса! Инде Шәрифтең өйгә ҡайтып барғанын күрһәгеҙ, гүйә, бөтә донъяға хужа булған. Уның өйҙә лә кис ашарға ҡалдырған аҙыраҡ икмәге бар бит әле.

Шәриф бына шулай шатлыҡ эсендә өйгә ҡайтып керҙе. «Әллә берәй нәмә алып ҡайта, әллә юҡ», — тип көтөп торған Бәҙри, иренең бындай нәмәләр алып ҡайтҡанын күргәс, ғәҙәттән тыш шатланып, әйберҙәрҙе берәм-берәм алып, әйләндереп-әйләндереп ҡарап, урынлы-урынлы рәтләп ҡуйҙы. Шәриф, бик ҙур эш бөтөрөп ҡайтҡан кешеләрсә ҡыланып, аҡрын ғына сисенеп ултырҙы ла:

— Самауыр ҡуй әле, иркенләп сәй эсәйек, — тине.

Бәҙри инде, әлбиттә, һәр бер эште еренә еткерәсәк. Шул минут гөрөлдәтеп ҡаҙан аҫтына яғып ебәрҙе. Самауырға һыу һалып, ҡайнатырға ҡуйҙы. Гөлйыһан менән Хоҙайбирҙе айырыуса шатлыҡ менән уйнап йөрөйҙәр ине.

Бына былар шулай шатлыҡ менән торған саҡта, бишмәт тотоп Йәмилә килеп керҙе. Ләкин Йәмилә бик ҡайғылы, күңелһеҙ генә ине. Быларҙың өйөндә һике өҫтөндә тулып ятҡан ит, икмәктәрҙе күргәс, хәсрәте айырыуса артты: «Минең дә ирем ошо Шәриф кеүек булһа, нисек рәхәт булыр ине», — тип фекеренән кисерҙе.

Йәмилә шул һалҡын көндө өс саҡрым ҡәҙәре ергә йәйәү барып ҡайтҡан. Юлда ике бит алмаһын өшөткән, бер нәмә лә алып ҡайта алмаған. Уның өҫтөнә, ире Шәйех иртән сығып киткәндән әле һаман да ҡайтҡаны юҡ ине.

Бында күп кереп йөрөй тип әйтерҙәр төҫлө булғанға күрә, бик тартынып, ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына бөгөнгә генә алып торған бишмәтте бирҙе лә самауырға күмер һалып торған Бәҙригә ҡарап торҙо. Бәғзе ваҡытта һике өҫтөндә ятҡан эсәктәргә ҡарап, сей көйөнсә ашарҙай булып: «Бына бәхетле кешеләрҙең эштәре нисек!» — тип уйланы.

Бәҙри самауыр эсенә сыбыҡ тығып болғаны һәм эсенән генә: «Бына ирең шулай булһа, ни эшләр инең?» — тип уйланы. Шул ваҡыт Шәриф, эшлекле ирҙәр төҫлө, тышҡа сығып китте. Бәҙри, тиҙ генә икмәкте ҡулына алып, бер телемдәй киҫеп алды ла: «Бына, өйөңә алып ҡайтып аша», — тип Йәмиләгә бирҙе. Ул хушлашып сығып китте.

Ҡалай самауыр ҡалтырай башлағас, Бәҙри сәй һалды һәм бик күңелле итеп сәй эсергә ултырҙылар.

Өйгә бик күңелһеҙ һәм ҡайғылы һүрәттә ҡараңғы төшә башланы. Яндырырға лампаның кәрәсине бөткән. Шулай булһа ла, ҡараңғы булды тип, уларҙың бер ҙә иҫтәре китмәне. Улар өй яҡты түгел тип ҡайғырманылар. Улар һәр көн шулай, ҡараңғы өйҙә ултырып, усаҡтан ғына сыҡҡан ут яҡтыһы менән ҡәнәғәт булып өйрәнгәндәр. Ҡараңғыла ултырыу уларҙың күңелдәренә артыҡ ауыр һиҙелмәй. Лампа булмағанлыҡ уларға етешмәгәнлек булып та күренмәй башланы. Бөгөнгө аш бешереү шатлыҡтары бөтә хәсрәттәрен юя. Бик ҡараңғы ҡәбер һүрәтендә торған өй быларҙың күҙенә йәннәт кеүек булып күренә. Ҡаҙанда ҡайнаған иттәр әллә ниндәй хистәр бирә. Уның гөрләп күтәрелгән һәм бөтә өйгә таралған быу парҙары уларҙың танауҙарына кереп шатландыра. Ҡаҙандан һәм самауырҙан сыҡҡан быуҙарға ишектән кергән һалҡынлыҡ ҡушылып, өйҙө бер томан хәленә килтерә ине. Бәҙри сәй эсеп бөттө лә, ҡамыр баҫып, туҡмас киҫергә кереште. Гөлйыһан, бик кәйефле булып, әсәһенең туҡмас киҫкәнен ҡарап торҙо. Хоҙайбирҙе усаҡ янында әллә ни эшләп мәшәҡәтләнә, кескенә сыбыҡ ала ла бер башынан тотоп, бер башын утҡа яндырып, тиҙ-тиҙ әйләндереп: «Ҡара әле, Гөлйыһан, ҡара әле, Гөлйыһан, уҡа яһайым...» — тип ҡысҡыра.

Түр башында ятҡан Шәриф, усаҡтағы утҡа ҡарап, асыуланмай ғына:

— Тик тор, Хоҙайбирҙе, тик тор! Ут төшөрөп, өҫтөңдө яндырып ҡуйырһың, — ти. Гөлйыһан, иғтибар менән ҡарап тора торғас, әсәһенән ҡамыр һорап алды һәм уны кескенә күмәс төҫлө иттереп яһаны ла, көлгә күмеп, бешерергә кереште. Уны күреп, Хоҙайбирҙе лә шулай итергә ҡыҙығып, әсәһенән ҡамыр һорай башланы. Әсәһе бер ҙә асыуланмай ғына Хоҙайбирҙегә лә ҡамыр бирҙе. Гөлйыһан апаһы уның да ҡамырын шулай бешереп бирҙе.

Шәриф, ата булғанға күрә, быларҙы ҡарап ҡына ята. Бына аш та беште. Көтөп алған шатлыҡтың нәтижәһе яңы килеп етте. Бәҙри, итте һоҫоп алғас, туҡмасты ҡаҙанға һалып бешерҙе лә бер иҫке табаҡҡа һоҫоп ҡуйҙы. Бысаҡ тотоп көтөп ултырған Шәрифтең алдына баяғы сәй эскән ваҡыттағы ашъяулыҡты килтереп йәйҙе. Табаҡты килтереп ултыртҡас, тирә-яғына ҡалаҡтарҙы теҙеп сыҡты. Гөлйыһан ҙурыраҡ булғанға күрә, әсәләре менән бергә табаҡтан ашаны. Хоҙайбирҙегә сүмескә һалып бирҙеләр.

Бер ҙә тауыш-тынһыҙ ғына туҡмасты ашап бөтөрҙөләр. Бәҙри аштан һуң табаҡ менән әсәк һәм иттәрҙе ризыҡ табыусының алдына

килтереп ҡуйҙы. Шәриф бысаҡты ҡулына алып ит турай башлағас, һәммәһе уның ҡулына ҡарап ҡалдылар. Уның һәр бер хәрәкәтенә, ҡулынан киҫелеп төшкән иткә ҡарап ҡына торалар ине...

## III

Бәҙри, таң атҡан ваҡытта тороп тышҡа сығып, ҡар яумағанмы икән тип ҡарап керҙе. Сөнки ҡар яуғанмы, яумағанмы тип ҡарап кереү — быларҙың ғәҙәтелер. Ҡар яуған булһа, намаҙ ваҡытында уҡ тороп, тиҙерәк ашап-эсеп, ҡар күрергә китергә кәрәк була.

Бәҙри өйгә кереп: «Юҡ, бөгөн дә ҡар яумаған икән», — тине лә артыҡ хәсрәтләнмәй генә кире ятты. Хәсрәтләнергә урын да юҡ — кисә бик ныҡ ашап туйып ятҡан, бөгөн ашарға етерлек икмәк, эсергә етерлек сәй бар. Һәр көн былай булып торған ваҡытта, ярлылар ҙа ҡайғырмай улар.

Бәҙри аҙыраҡ ятҡас торҙо ла ҡаҙандан сүмес менән һыу алып битен йыуҙы. Самауыр ҡуйҙы.

Ҡалай самауыр тағы ҡалтырана башланы. Икәүләп сәй эсеп алдылар. Гөлйыһан менән Хоҙайбирҙе, кисә кис бик туйып ятҡанға күрә, бөгөн иртән бик һуңға ҡалып торҙолар. Аталары сәй эсеп бөтөр саҡта ғына тороп, кисә үҙҙәренең көлдә бешереп алған күмәстәрен ашанылар.

Шәриф, ярлыларҙың көн дә бара торған урынына китмәксе булып, кейенә башланы. Көн бик һалҡын булғанға күрә, эстән Бәҙриҙең бишмәтен дә кейеп алды. Бына ул, Аллаға тәүәккәл тигән төҫлө, балтаһын ҡултығына ҡыҫтырып, тиҙ-тиҙ атлап, ярлылар араһына кереп китте.

Бер ергә йыйыла торған ярлылар бер-береһен күптән танып бөткәндәр ине. Шул сәбәпле йыйылыу менән үҙ-ара: «Кисә ни эшләгән? Эш тапҡанмы, юҡмы? Күпме аҡса тапҡан? Ни эшләп тапҡан?» кеүек һорауҙар менән, көндәге ғәҙәт буйынса, һөйләшә башлайҙар ине. Бөгөн дә шулай булды...

## IV

...Шәриф бер аҙ ваҡыт көтөп торһа ла, бер ҙә эш тура килмәне. Һис булмаһа, кисәгеләй берәй мәрйә лә осраманы. Көттө-көттө лә, бик ҡалтырай башлағас һәм сыҙар хәле ҡалмағас, өйгә ҡайтырға уйланы. Үткән көн, бик яҡшы күңелләнеп, күп нәмәләр алып ҡайтҡас, бөгөн ҡоро ҡул менән ҡайтыуы бик ауыр төҫлө күренде. Ауыр булһа ла, ни хәл итергә кәрәк? Һәр ваҡыт кисәге кеүек бәхет асылған көн тура килеп тормай шул. Донъя булғас, төрлө хәлдәр була. Әллә ни эшләп булмай инде, хәл юҡ, тип ирекһеҙ генә, үҙен үҙе йыуатып, ҡайтып китте. Бигерәк буш ҡул менән ҡайтырға ауырһынып,

яңы йорт һалынып ятҡан бер ерҙән юнышҡылар йыйып, күтәреп алып ҡайтып керҙе. Өйҙә, булдыҡлы ирем эшләп, тағы әллә нәмәләр алып ҡайтыр әле, тип көтөп ултырған Бәҙри, Шәрифтең ҡоро юнышҡы менән генә ҡайтып кергәнен күргәс, бер аҙ күңелһеҙләнде. Шулай булһа ла, ҡуйынынан берәй нәмә сығыр әле, тип көтөп торҙо. Ләкин унан бер нәмә лә сыҡмағас, бөгөн бер ҙә эш булмағанды киҫкен рәүештә белде.

Гөлйыһан менән Хоҙайбирҙе лә, аталарының бер нәмә лә алып ҡайтмағанын күргәс, бойоғоп ҡалдылар. Хәҙер генә инде башҡа эш эшләр хәл юҡ, көтөп торған кәсебенән рәт сыҡмағас, бер ни ҙә эшләп булмай.

Самауыр, әлбиттә, оҙаҡ көттөрмәйенсә ҡайнап та сыҡты, сәй янына ла йыйылдылар. Күҙ тотоп торған аҡтыҡ киҫәк икмәк тә килеп етте. Икмәк хужаһы Бәҙри, тигеҙлек менән киҫеп, һәр кемдең дәрәжәһенә ҡарап, өлөш тә бирҙе. Билдәле, Шәриф, һәр ваҡыттағы кеүек, башҡаларға ҡарағанда бер өлөш артыҡ алды.

Сәй эскәндә икмәк етер-етмәҫ кенә булып ҡалды. Күңелһеҙ генә сәй эсеп бөткәс, Шәриф тағы эш эҙләп сығып китте. Эш эҙләп сығыуы ауыр түгел, эш табыуы ауыр. Шуның өсөн ни саҡлы йөрөһә лә, һаҡал, мыйыҡ туңдырып ҡайтыуҙан башҡа бер файҙа итә алманы...

Бөгөн Шәйех сығып киткәс, Йәмилә лә кискә ҡәҙәре бер нәмә лә ашамай, көндө ураҙа тотоп уҙҙырҙы. Бәлки, кискә ирем берәй нәмә алып ҡайтыр әле, тип дүрт күҙ менән көтөп торһа ла, әйбер алып ҡайтыу түгел, Шәйех үҙе лә ҡайтманы. Аптырағас, Бәҙриҙәр янына кереп ултырған булды. Унда ла бөгөн бер ҙә рәт юҡ икәнде аңланы. Улар үҙҙәре Йәмиләнән артыҡ ҡайғылы һүрәттә, бер-береһенә ҡарашып, һап-һары булып ултыралар. Йәмилә ни хәл итһен инде? Кемгә барып, үҙенең ас икәнен белдерһен дә, кемдән ярҙам һораһын?

Унда ла яй таба алмағас, өйөнә ҡайтып ултырҙы. Был өй ни ҡәҙәре күңелһеҙ! Аһ, бында Йәмилә кеүек бик бәхетһеҙ кешеләр генә тормаһа, башҡа ирекле кеше бер минут тора алмаҫлыҡтыр. Йәмиләнең ләхет кеүек өйөнә яғып йылытырлыҡ утыны ла юҡ. Былай ҙа юнышҡы йыйып ҡына йылытып килә ине. Был көндәрҙә сатлама һыуыҡ булғас, юнышҡы алып ҡайтып та булмай. Шуның өсөн бөгөн һалҡында торорға мәжбүр булды. Кис булып, ҡараңғы төшкәндән бирле Шәйехте көтөп ултыра. Үҙе, уның ҡатыны булғас, һәр нәмәне унан ғына өмөт итә. Әллә ҡайтыр, бәлки, нимәлер алып килер тип, минуттарҙы өмөт менән уҙҙыра ине.

Төн уртаһына саҡлы көтһә лә, Шәйех ҡайтманы. Ятып йоҡлар ине, берҙән, ас, икенсенән, япа-яңғыҙ

булғанға күрә, ике күҙен көсләп йомһа ла, уларға йоҡоноң әҫәре лә килмәне. Күҙен йомғас, уның күҙ алдында әллә нәмәләр буталды. Уттар күренгән төҫлө булды, һәм икмәк һыҙаттары кәүҙәләнде. Тыштағы ел тауышы аслыҡтан илаған балаларҙы иҫкә төшөрҙө. Ел, әллә нәмәгә зарланған төҫлө олоп, донъяның мәңге түгел икәнен әйткәндәй булды. Күңелгә ҡурҡыныслы нәмәләрҙең күренеш һәм һүрәттәрен төшөрә ине. Шулай ҡурҡа-ҡурҡа ҡалтырап, мейес башында ултыра торғас, йоҡлап китте. Төшөндә лә һаман шул өнөндәге нәмәләрҙе күрҙе. Таң да атты. Ул тағы уянды. Кисә сығып киткән Шәйех шул көйөнсә ғәйеп булды.

Был төндә Шәриф менән Бәҙри, ҡар яуманымы икән тип, әллә нисә рәт сығып ҡараған да булдылар. Юҡ бит... юҡ... Ҡар яуманы.

Иртән торғас та, Бәҙри самауыр ҡуйҙы. Аҡтыҡ семтем сәйҙе һалып, ҡоро сәй эстеләр. Шәриф тағы эш эҙләп сығып киткән булды. Тағы ла ярлылар араһына барып керҙе һәм ярлылар һанын бер кешегә арттырҙы. Уға бөгөн дә эш табылманы. Өйҙән өйгә йөрөргә кереште. Шулай эҙләнеп йөрөй торғас, эш табыуҙан өмөттө өҙҙө лә икенсе фекергә төштө. Был фекер әҙәм балаһына иң аҡтыҡ дәрәжәлә генә төшә торған иң түбән бер эштер. Ул фекере: эш юҡ тигән ерҙән, теләнеп булһа ла, ваҡ-төйәк икмәк киҫәктәре һорап алыу һәм шуның менән өйҙә ятҡан астарҙы туйҙырыу ине.

Шәриф бер өйгә кереп эш һорағас, уға: «Юҡ!» — тип яуап бирҙеләр. Ләкин ул китмәй туҡтап торҙо... Йорт хужаһы: «Юҡ, тип әйттем бит», — тигәс, Шәриф оялып ҡына:

— Улай булһа... — тине.

— Нимә улай булһа?

— Балаларым күп ине, ас яталар.

Теге кеше, Шәрифте ҡыҙғанып, ике тин саҙаҡа бирҙе. Шәриф, бына был да бер кәсеп икән, тағы бер аҙ булмаҫмы тип, икенсе өйҙәргә лә кереп, бер йәһәттән эш, икенсе яҡтан саҙаҡа һоранып, бер аҙ нәмәләр йыйҙы.

Шәриф алып ҡайтҡан нәмәләрҙең һоранып алып ҡайтҡан нәмәләр икәнен Бәҙри һорамай белде.

Улар, ярлы булғанға күрә, түбән фекерле булырға әллә ҡасандан өйрәнеп килгәнгә, быны бер ҙә ауырһынмай ғына ҡабул иткән төҫлө булдылар. Бына, сараһыҙ рәүештә, беренсе тапҡыр булараҡ, Шәриф балаларына һәм ҡатынына саҙаҡаға алған киҫәктәрҙе ашатты.

## V

Асылда матур ғына булған Йәмилә, ас йәшәй торғас, тамам арыҡланды. Матурлығы китә башланы. Күҙ төптәре күгәреп сыҡты. Ҡайҙа барырға?

Урыҫтарға барыр ине, бер һүҙ ҙә русса белмәй. Белһә лә, унда, хеҙмәткә ҡушырлыҡ байлығы булған урыҫарҙың махсус хеҙмәт итә торған ҡатындары барҙыр. Был ҡаланың русса аҙ-маҙ белә торған ҡатындары һәм ҡыҙҙарының яртыһы тип әйтерлек урыҫта, йәһүдтә кухарка булып хеҙмәт итә. Фәҡәт улар, электән ҡалала тороп, шуның юлын белгәндәрҙер.

Йәмилә, шул тар ғына фекерен төрлөсә сағыштырып ҡарағас, апайҙарына барып ҡайтыуҙан артыҡ эш тапманы. Нисек булһа ла Бәҙриҙең бишмәтен һорап торорға ҡарар бирҙе лә эстән үҙенең былтыр тектергән камзулын кейеп алды. Ҡыҙ сағында ауылда бәйләгән ойоғон сабата менән кейеп, Бәҙриҙәргә керҙе. Бәҙри ас булыу, ярлы көн итеү йәһәтенән Йәмиләгә иптәш ине. Шуның өсөн бер-берећен ҡыҙғаналар, ҡайғыларын бүлешәләр, бер-береһенә ҡарап һүҙ ҡушырға теләһәләр ҙә, хәлдәре булмағанға күрә, һүҙҙәрен әйтә алмайҙар ине. Йәмиләнең эсендә тулған хәсрәтен күҙ йәше генә баҫҡан төҫлө була ине.

Бәҙри:

— Типһә тимер өҙөрлөк таптаҙа егет, йәш кенә ҡатынын яңғыҙ ташлап, әллә ҡайҙа тик йөрөгәнсе, эшләп бергә-бергә тамаҡ туйҙырып торһа, ни була икән инде? — тине.

Йәмилә, күҙ йәшен туҡтата алмайынса, ҡалтырауыҡлы тауыш менән:

— Эйе, Бәҙри апай! Ул уны уйлай торған кеүек күренмәй. Кисә төн буйы ҡурҡып, йоҡлай алмай сыҡтым.

— Улай яңғыҙ ятҡансы, беҙгә кереп ятыу кәрәк ине. Беҙҙең мейес башы иркен. Гөлйыһан менән бергә ятыр инегеҙ.

— Уны үҙем дә уйлағайным да, ул ҡайтып кергәндә өйҙә булмаһам, әллә ни уйлап, әллә ниҙәр сығарыр тип ҡурҡтым.

— Инде ни эшләмәксе булаһың?

— Ни эшләйем һуң?! Бер нәмә лә белмәйем. Әле һеҙ бишмәтегеҙҙе биреп тормаҫһығыҙмы икән, тип кергән инем. Әлеге апайҙарыма барып ҡарайыммы икән тип уйлағайным...

Йәмилә, бишмәтте алып кейәкейә: «Бөгөн өйҙә булырҙар әле. Улар иркен генә торалар. Уның ире урамда ат менән кешеләр йөрөтөп, бик яҡшы аҡса таба», — тине.

Йәмилә юл буйынса бер нәмәгә лә ҡарамай, елгә ҡаршы битен ҡаплап, йүгерә-йүгерә барҙы. Бик оҙаҡ барғас, сабатаһының бауы өҙөлдө. Бер яҡтан, бите туңа башланы, икенсе яҡтан, ҡулы бик өшөгәнгә күрә, сабата бауын бәйләй алмай, бер аҙ мәшәҡәтләнеп торған саҡта, артынан бер атлы кеше килеп: «Ниңә юлда тораһың?» — тип, сана үрәсәһе менән бәрҙереп йығып китте.

Ике күҙенән йәшен мөлдөрәтеп, йығылған урынынан торҙо ла тағы бик шәп бара башланы. Төньяҡтан

иҫкән бик ҡаты һалҡын ел беҙ кеүек сәнсеп-сәнсеп ала. Фәҡәт ярлылыҡ барыһына ла сабыр итергә мәжбүр ҡыла.

Шулай битен ышҡый-ышҡый бара торғас, апайҙарының фатирҙарына барып етте һәм һорауһыҙниһеҙ барып та керҙе.

Апай тейешле тигән ҡатын, Йәмиләне күргәс, хәйерсе ҡатыны тип уйланы һәм:

— Бөтмәҫ хәйерселәр, киләләр ҙә керәләр, бында уларға әҙерләп ҡуйған нәмә бар тип белерһең! — тип бер һыныҡ күмәс килтереп биргән ваҡытта, Йәмилә күрешергә ҡулын һуҙған булды.

Апаһы ҡулын бирмәйенсә, текләп ҡарап торғандан һуң, ирекле-ирекһеҙ күрешеп, бик һалҡын йөҙ, күңелһеҙ тауыш менән:

— Мин һеҙҙе бер ҙә таный алмайым, бер күргән кеүек булам, һеҙ ҡайҙағы ҡатын һуң? — тигәс, Йәмилә:

— Мин үҙегеҙ менән бер ауылдан, фәлән кешенең ҡыҙы бит, мин һине бик беләм, әсәй һеҙҙе һәр ваҡыт һөйләй торғайны.

— Ә, улай икән, мин инде онотоп бөткәнмен шул. Беҙҙә берәй йомошоғоҙ бар инеме?

— Мин һеҙҙе күрер өсөн генә килгәйнем. Берәй эш булмаҫмы икән тип тә уйланым.

— Беҙҙә ниндәй эш булһын, беҙ бит кеше ҡушып эшләтерлек бай кеше түгел. Башҡа йомошоң юҡмы?

Йәмилә, нимә әйтергә белмәй, туҡталып ҡалды ла, күңеле тулып:

— Мин һеҙгә аптырағандан килгәйнем. Минең хәлем был көндә бик ауыр. Ирем әллә ҡайҙа ташлап сығып китте... — тигәс, апаһы:

— Иреңә яҡшы хеҙмәт итмәгәнһеңдер. Юғиһә, ни эшләп ташлаһын? Яҡшы хеҙмәт итергә кәрәк ине, — тине.

— Ул инде яҡшы хеҙмәт ҡәҙерен белә торған кеше түгел, һәр көн эсә лә ҡайта торғайны. Беҙҙең арала улай ташлап китерлек бер нәмә лә юҡ, бары эш юҡлыҡтан ас тора торғайныҡ. Ул мине туйҙырырға ауырһынғандыр.

— Үҙеңдән булғандыр инде. Ирҙәр юҡҡа ғына ташлап сығып китмәҫ. Ир булғас, эсеп тә ҡайтыр. Был саҡтағы йәш ҡатындар ашап тик ятырға ғына ярата.

— Юҡ, үҙемдән нисек булһын?

— Ана, теге һикегә ултырып тор әле, — тип, апаһы икенсе бүлмәгә сығып китте.

Йәмиләгә апай тейешле булған ҡатын үҙен бик юғары күрә торған, иренә тамам баш булған, теләһә нисек йөрөй торған бер ҡатын ине. Ул теге бүлмәгә бер ҙә йомошһоҙ ғына сығып китте. Күңеленән: «Әҙерәк көтөп торһон әле, берәр эсерлек сәй менән аҙ-маҙ күмәс биреп ебәрһәм, ярар. Ирҙәренә хеҙмәт итә алмайҙар ҙа, иргә һылтап йөрөйҙәр», — тип уйланы.

Йәмилә бүлмәлә яңғыҙ ултырғанда аш бүлмәһендәге ашамлыҡ

нәмәләрен күҙҙән кисерҙе. Бында торған ашамлыҡтарҙы күреп, ауыҙынан һыуҙар килде. Донъяла нисек рәхәт торған кешеләр бар, тип, апайҙарының бик ябай тормошон батшалар тормошо кеүек күрҙе. Бигерәк тә мейес алдында таба менән торған бәлеш Йәмиләнең диҡҡәтен үҙенә тартты. Ҡулы ихтыярһыҙ ҡуҙғалып, табалағы бәлеш киҫәктәрен алып ашарға теләй башланы.

Шул ваҡыт апаһы кереп, ҡулындағы ҡағыҙға төргән аҙ ғына сәйҙе Йәмиләгә килтереп бирҙе лә:

— Мә әле аҙыраҡ сәй, беҙҙә эшфәлән юҡ, — тине.

Йәмиләнең ике күҙе һаман табала ғына торғанға күрә, апаһы бәлеште килтереп уның алдына ҡуйҙы. Йәмиләнең теләгәне булды. Бәлеш төбөн ҙур-ҙур ҡабып, бик тиҙ ашап бөтөргәс: «Их, тағы аҙыраҡ булһа», — тигән төҫлө ауыҙын ялап ҡуйҙы.

Апаһы, бер иҫке сепрәк алып, ҡалдыҡ күмәс һыныҡтары менән ҡалған ит киҫәктәрен ҡушып Йәмиләгә бирҙе лә:

— Минең бара торған ерем бар, хуш булып тороғоҙ, беҙҙең улай кешегә биреп торорлоҡ байлығыбыҙ юҡ, — тип Йәмиләне оҙатып ҡалды. Йәмилә:

— Йә, һау булығыҙ, рәхмәт инде, — тип сығып китте.

Был нәмәләр бик аҙ һәм хәйерселәргә генә бирелә торған нәмәләр булһа ла, Йәмилә хисапһыҙ шатланды. Юлда ҡайтып барған ваҡытта, ҡуйынына әллә ниндәй ҡимммәтле нәмәләр ҡыҫтырған кеүек, төшөп ҡалмағанмы икән тип, тотоп-тотоп ҡараны һәм тормошо тамам тәьмин ителгән кешеләрсә шатлана ине. Шатлыҡ менән шәпшәп атлап, өйөнә ҡайтып керҙе. Йәмиләнең бөтә иғтибары ҡуйынындағы нәмәләрҙә булғанға күрә, битен ышҡырға онотоп, туңдырған ине. Ул быны өйгә кергәс кенә белде. Аяғы әрней башлағас, сисеп ҡарау менән, аяҡ бармаҡтарының да туңғанын күрҙе. Ләкин аяҡ бармағы туңыу Йәмилә өсөн бер ни ҙә түгелдер. Ярлы кешенең аяғы тиҙ боҙолмай, бик тиҙ ревматизм да булмай, дауаһыҙ-ниһеҙ берике көндә үҙ алдына үҙе бөтә лә ҡуялыр. Йәмилә рәхәтлек менән алып ҡайтҡан әйберҙәрен сисеп ҡарай башланы. Алып ҡайтҡан нәмәләрен шулай берәм-берәм ҡарап күҙҙән кисергәс, бер киҫәк күмәсте ҡулына тотоп, Бәҙриҙең бишмәтен бирергә керҙе. Алып кергән бер һыныҡ күмәсте Бәҙригә биреп, рәхмәт әйттергеһе килгән төҫлө торҙо. Унда күреп ҡайтҡан нәмәләрҙе берәм-берәм бик ҙур ваҡиғалар күргән төҫлө итеп һөйләне.

## VI

Йәмиләнең апаларынан алып ҡайтҡан нәмәләре бер генә көнгә етте. Уның өсөн иң ауыр ваҡыттар бынан һуң башланасаҡ ине.

Бәҙриҙәр ярлы булһалар ҙа, уларҙың был ҡәҙәре хәсрәт сигә торған урындары юҡ. Сөнки улар бала-сағалары менән көн күрәләр. Йәмилә лә улар кеүек булырға бик теләй, уларҙың хәлен үҙендә булдырырға ҡыҙыға, уларҙан артыҡ тороуҙы өмөт тә итмәй ине.

Йәмиләнең уйынса, Бәҙри бәхетле ине. Дөрөҫөндә, Бәҙри, был ваҡытҡа ҡәҙәр көндә ярлылыҡта кисереп, шул тормошҡа тамам өйрәнгән, бала-сағалы ла булған ине. Ләкин Йәмилә, бисара, яңы ғына йәшлек донъяһынан сығып, ҡатын булған, үҙен үҙе туйҙырып, яңғыҙ тороп өйрәнмәгән. Ҡыҙ сағында, фәҡир булһа ла, ата-әсәһе тәрбиәһендә тороп, был ҡәҙәре ауырлыҡтар күрмәгән.

Йәмилә ошо хәлдә лә бик ныҡ хәсрәтләнмәҫ, яңғыҙ башына нисек булһа ла ашарға табыр ине. Бына уның өсөн иң ҙур хәсрәт булғаны һәм уны ҙур уйға ҡалдырған хәл бөтөнләй икенсе бер нәмә ине. Тиҙ көндән улар икәү буласаҡ. Сөнки Йәмилә күптән ауырлы булып, был көндәрҙә бәхетһеҙ баланың донъяға килер ваҡыты етеп килә ине.

Бөгөн тамағына ашаған Йәмиләнең иртәгә ашарға бер нәмәһе лә юҡ ине. Иртәгәнән башлап ул, ысынлап та, үҙе өсөн ашарға үҙе эҙләргә тейеш ине.

Ашар нәмәһе булмағас, ул иртән тороп тағы әлеге Бәҙриҙәргә керҙе. Улар һәр ваҡыт быны туйҙырып тормаҫтар инде. Йәмилә, аптырауҙа ҡалған бер кеше сифатында, ни нәмә эшләргә кәрәклек тураһында Бәҙриҙән кәңәш һорай башланы.

Бәҙри башҡаларға нисек кәңәш бирә алһын? Уның биргән кәңәше үҙе төҫлө генә: «Байҙар араһына сығып, эш эҙләп ҡара, табылмаҫмы икән», — тип әйтеүҙән генә тора ине. Бер ҙә кешегә ҡатышып өйрәнмәгән, эш рәте белмәгән бер ҡатын кемгә барып: «Мин эш эҙләп килгәйнем», — тип әйтә алһын? Бармай ҙа хәле юҡ, асҡа үлмәҫ бит инде.

Йәмилә, Бәҙриҙең кәңәше буйынса, эш эҙләп ҡала араһына сығып китте. Урам буйлап барғанда, һәр кем уның хәлен белә, һәр кеше уны ҡыҙғана төҫлө ине. Ләкин уны белеүсе, ҡыҙғаныусы бер кеше лә юҡ ине.

Йәмилә бөгөн ҡаланың мосолман байҙары йәшәй торған ерҙәрен ҡарап ҡайтты. Иртәгә, бер ҙә ҡурҡмай ғына барып, шуларҙан эш һорамаҡсы булды.

Йәмилә, кискә ҡәҙәре һалҡын өйөндә ултырып, йоҡларға ятыр ваҡытта Бәҙриҙәргә керҙе. Уларҙан ҡалған бик шыйыҡ ыумасты ашап, йоҡларға ятты. Иртән торғас та үҙ өйөнә сығып киткән булды. Һәр ваҡытта уларҙан ашарға өмөт итеп торған төҫлө тороуҙы бер ҙә күңеле яратмай ине. Яратырлыҡ та түгел! Бәҙриҙәр үҙҙәре лә Йәмиләнән аҙ ғына артыҡ, берәр аҙна ҡар яумай торһа, асҡа үлергә торалар ине.

Өйөнә кереп бер аҙ ултырғас, сараһыҙ булараҡ, сығып китергә әҙерләнде. Ишектән сыҡҡан ваҡытта, ҡайҙа барғанын белмәйенсә, бер алға, бер артҡа атлап, арҡан менән тартып барған төҫлө, ихтыярһыҙ бара ине. Дөрөҫөн әйткәндә, ул, эш эҙләүҙе һылтау итеп, беренсе тапҡыр һоранырға сығып китте.

## VII

Ҡаланың уртаһындараҡ бик гүзәл итеп һалынған ике ҡатлы өйҙә бөгөн ҡатындар мәжлесе буласағынан өйҙөң эсе-тышы берҙәй таҙа иттереп әҙерләнгәйне. Был йорттоң хужа ҡатынынан башлап аҫрау ҡыҙҙарына ҡәҙәре матур ғына кейенеп, шатлыҡ менән киләсәк ҡунаҡтарҙы көтөп алырға торалар ине. Бик ҙур бер эш буласаҡ кеүек, бөтә эште тырышлыҡ һәм диҡҡәт менән тулы итергә тырышалар ине.

Күп ваҡыт уҙманы. Матур аттар егелгән ҡиммәтле саналарға ултырған ҡатындар берәм-берәм килә башланы. Өй хужаһы тарафынан: «Әйҙәгеҙ, рәхим итегеҙ, әйҙәгеҙ, әйҙүк, юғары сығығыҙ, бөгөн бигерәк һалҡын», — тигән һүҙҙәр менән ҡаршы алыналар ине. Бында килгән ҡатындарҙың күбеһе был ҡаланың мәшһүр фамилиялы байҙарының ҡатындары ине. Матур кейемдәр кейенеп, яҡшы аттар егелгән саналарға ултырып, ныҡлы күсерҙәр менән килгән был ҡатындар, үҙҙәренсә, был дәрәжәгә үҙ саралары һәм аҡылдары менән ирешкәнбеҙ, башҡаларҙан артыҡ булып яратылғанбыҙ, тип уйлаған төҫлө күренәләр ине.

Өйгә кереү менән, өҫтәренән ҡалын кейемдәрен һалған һимеҙ-һимеҙ ҡатындар ҡиммәтле камзул, ебәк күлдәктәр һәм ынйылы ҡалпаҡтар менән генә ҡалғас, — өҫтән ҡарағанда, ысынлап тикшермәгәндә, — матур ғына бер күренеш күҙгә ташлана ине.

Кейем-фәлән йәһәтенән быларҙың араһында бер-береһенән уҙышыу булғанға күрә, күҙҙәре берберeһенең кейемендә булған кеүек, һүҙҙәре лә, шул кейем-фәлән һымаҡ, әһәмиәтһеҙ мәсьәләләр тураһында ине.

Тыуғандан бирле кешегә ҡатышып өйрәнмәгән, донъяның әсеһенсөсөһөн татымаған, ҡыҙ ваҡыттарында уҡ тәрбиә күрмәгән, тар ғына бер бүлмәлә ғүмер һөргән һәм уҡыу-фәлән менән сыуалмаған был ҡатындарҙан артыҡ файҙалы нәмә өмөт итерлек түгел ине.

Быларҙың күбеһенең әхлаҡ һәм тәрбиәләре, яратылыштары теге Йәмиләнекенән бер ҙә артыҡ түгел ине. Шул Йәмилә ашарға таба алмайынса, кейемһеҙ-ниһеҙ, һалҡында ҡалтырап, ҡайҙан ғына берәр һыныҡ икмәк табылыр икән тип, был өйҙөң янынан уҙып барған саҡта, бындағы йәнле нәмәләр, атлас һәм ебәктәргә сумып, төрлө аштар ашап ултыралар ине. Әгәр ҙә быларҙы сағыштырып ҡараһаң,

бер ҙә килешмәгән төҫлө булып тора. Сөнки быларҙың һәр икеһе лә әҙәм балаһы. Ләкин береһенең сағыштырмаҫлыҡ дәрәжәлә ризыҡ эсендә, икенсеһенең аслыҡтан үлер дәрәжәһендә йөрөүе күңелде болғандыра, донъянан биҙҙерә һәм тормошҡа тамам асыуландыра ине.

Йәмилә был өй янынан уҙып барған ваҡытта, ҡапҡа төбөндә туҡталып, бында кереп киткән ҡатындарға ҡарап ғәжәпһенеп тора ине. Шулай бер аҙ ҡарап торғандан һуң ул, аҙ булһа ла тамағым туймаҫмы, берәр һыныҡ икмәк бирмәҫтәрме икән тип, асыҡ ҡапҡанан керҙе. Ҡурҡа-ҡурҡа барып, аш бешерә торған бүлмәнең алдына туҡтап, керергә баҙнатлыҡ һәм батырсылыҡ итә алмай торҙо. Унан Аллаға тәүәккәл итеп, ишекте асып ебәрҙе.

Өй тулы ҡунаҡтар саҡырған, күңеле ғәйәт маһайып йөрөгән хужа ҡатыны, бер хәйерсе кереп килгәнде күргәс:

— Был ниндәй хәйерсе ҡатыны тағы?! Галош йәиһә башҡа нәмәне урлап алып китмәһен! — тип ҡысҡырҙы. — Бар сыҡ, бында ни эшләп йөрөйһөң? — тигән һүҙенә аш бешереүсе ҡатындар ҙа ҡушылып:

— Ни эшләп йөрөйһөң бында? Бар кит! Ҡара һин, оятһыҙ, бер көн берегеҙ галошты урлап алып киткәйне әле, һин тағы берәй нәмә урларға йөрөйһөңдөр! — тип ҡуйҙылар.

Йәмилә ҡып-ҡыҙыл булып, ни әйтергә лә белмәй, бур кеше төҫлө кире сығып китте. Ҡапҡа төбөндә торған тәрбиәһеҙ уҫал малай ҙа, әллә ниндәй насар һүҙҙәр әйтеп: «Бар, бар!» — тип арҡаһынан төртә-төртә елтерәтеп сығарып ебәрҙе.

Ҡунаҡ ҡатындары саф һауалы йылы өйҙә, матур кейемдәр кейеп, тәмле аштар ашап, ап-аҡ биттәренән тирҙәр сығарып ултырғанда, Йәмилә, был күргән хурлыҡтарынан аслыҡтарын онотоп, ике күҙенән бөрсөк-бөрсөк йәштәре тәгәрәп бит алмаһы өҫтөнә төштө. Бәғзе бөрсөктәре күкрәк өҫтөнә тамып, боҙ булып ҡатты. Йәмилә ни эшләргә белмәй, үҙенән үҙе оялып, туп-тура өйөнә ҡайтып китте.

Беренсе тапҡыр сыҡҡан ваҡытта уҡ ошондай бәләгә осрауы һәм үҙенең шул дәрәжә мөхәббәтһеҙ күренеп, ҡыуылып сығарылыуы Йәмиләнең өмөтөн киҫте. Бәҙригә күренергә оялып, тура үҙ өйөнә кереп бикләнде лә, үкһеп-үкһеп, балаларҙан да артыҡ илай башланы.

Йәмилә, инде ҡайҙа барырға ла белмәй, мейес башына менеп ятты.

Әлдә уның аҙ булһа ла ҡыҙғана торған Бәҙрийе бар. Ул тағы Йәмилә янына керҙе. Йәмилә тороп ултырғас, шешенеп бөткән күҙҙәрен һөрткәс, Бәҙри уның ҡайҙа барғанын, ни эшләгәнен һораны.

Йәмилә тураһын әйтергә оялып: «Бөгөн эш эҙләп сыҡҡайным да, бер ҙә таба алманым», — тип яуап бирҙе.

— Улай булғас, ни эшләмәксе булаһың? Нисек булһа ла ашарға тапмайынса тороу ауыр бит, — тине.

Бәҙриҙең был һүҙенән һоранып булһа ла ашарға табырға кәрәк тигән мәғәнә аңлашыла ине.

## VIII

Бер көн теге ярлылар тора торған ерҙә Шәйех тураһында һүҙ асылды. Шәриф, бик диҡҡәт менән тыңлап, Шәйехтең ҡайҙа һәм кем менән киткәнен белеп ҡайтып, Йәмиләгә хәбәр бирҙе. Шәйех Йәмилә янынан сығып киткәс, үҙенең иптәштәре менән тура вокзалға төшөп, шунан Урал тауҙарының көнсығыш яғындағы мәшһүр Ҡусҡар приискыһына киткән, имеш. Бында бер кешегә: «Мин инде ҡатынымды тәрбиә ҡыла алмайым, үҙ көнөн үҙе күрһен, мине көтөп тормаһын», — тигән, имеш. Шәрифтең алып ҡайтҡан хәбәре шунан тора ине.

Йәмилә, был имеш хәбәрҙе ишеткәс, күҙ йәшенең ҡалғанын тағы түкте. Был ваҡытҡа ҡәҙәре, әллә ҡайтыр әле, тип торған өмөтөн тамам өҙҙө.

Ҡатынды ал да, имеш, бер йыл ҡәҙәре тор ҙа, инде үҙ көнөн үҙе күрһен, миңә кәрәкмәй, тип, ташла ла кит, имеш. Был ни тигән һүҙ? Был ҡатындар ни өсөн был дәрәжәлә ҡәҙерһеҙ? Һис булмаһа, яҙылған ете һум мәһерен дә бирмәгән. Бисара ярлыраҡ кешеләрҙең ҡыҙҙарының һарыҡ ҡәҙәре лә ҡәҙере юҡ, имеш...

Ҡулынан һис бер эш килмәгән һәм ярҙамсыһы булмаған Йәмилә илауҙан башҡа бер нәмә лә эшләй алманы.

Бәҙри менән Йәмилә, иртән торғас та, кисәге вәғәҙәләре буйынса, эш эҙләп сыҡмаҡ булдылар. Бәҙри күптән донъя күргән кеше булғанлыҡтан, уның өсөн ҡала араһында йөрөү ауыр түгел ине. Башлап йөрөүсе булғас, Йәмиләгә лә бик ауыр төҫлө күренмәне. Көндәр бик һалҡын булғанлыҡтан, быларҙың кейемдәре унан һаҡланырлыҡ түгел ине. Улар нисек булһа ла сараһын эҙләргә керештеләр. Бәҙри, үҙенең бишмәтен кейеп, иҫке ҡыҙыл яулыҡ менән билен быуҙы. Ҙурыраҡ яулығын башына бәйләне. Йәмилә Шәйехтең иҫке күлдәге өҫтөнән үҙенең ике күлдәген ҡатлап кейгәндән һуң камзулын кейеп ебәрҙе. Һәр икеһе аяҡтарына сабата кейеп сығып киттеләр.

Тәүҙә улар, ҡайҙа барып керергә белмәйенсә, урам буйлап баралар. Ләкин күҙ теккән ерҙәренә ни ҡәҙәре оялмайынса кермәк булып ҡараһалар ҙа, туп-тура: «Һеҙҙә эш юҡмы?» — тип һорарға батырсылыҡ итә алмайҙар ине.

Йәмилә менән Бәҙриҙең, үҙҙәре кеүек башҡа ҡатындарҙың да өйҙән өйгә йөрөгәндәрен күргәс, ҡыйыулыҡтары арта башланы. Фәҡәт был ҡатындар, хәйерселеккә өйрәнеп, оҫтарғандар, теләнеп йөрөүҙә бер ҙә ғәйеп һәм оят юҡ, тип беләләр ине.

Бына инде Бәҙри менән Йәмилә лә бер йорттоң ҡапҡаһынан барып керҙеләр. Кереү менән, ундағы уҫал эт бер ҙә оялмайынса өрә башлағас, Йәмиләнең йөрәгенә һалҡын һыу ҡойған кеүек булып китте. Шул минутта кисәге ҡыуылып сығыуы иҫенә төштө. Артҡа сигенергә уйланы. Ләкин донъя күргән Бәҙри, бер ҙә ҡурҡмай, гүйә, батырлыҡ күрһәтеп, эткә ҡарамай алға табан китте. Барып ишекте асып ҡараны ла кире япты. Был ваҡытта Йәмилә, йә Хоҙай, ни булыр инде, тип ҡурҡып тора ине. Шул ваҡыт аҫрау ҡыҙ сығып:

— Һеҙгә нимә кәрәк? — тине.

Йәмилә өсөн иң ауыр нәмә ана шул «нимә кәрәк?» һорауына яуап биреү ине. Уны һәр ваҡытта шул «нимә кәрәк?» харап итә.

Ҡапыл ғына сығып, туп-тура «ни кәрәк?» тип һораған кешегә ни тип яуап бирмәк кәрәк? Һис булмаһа, һораусы кеше инсафлыраҡ булып, тәрбиәле һүрәттә, әкрен генә: «Берәй йомошоғоҙ бар инеме?» — тип һораһа, һүҙ башланып китер, яуап табылыр ине.

Быларға ҡаршы сыҡҡан ҡыҙ ҡаты тауыш менән: «Ни кәрәк?» — тип һораһа ла, Бәҙри бер ҙә ҡаушамай, туп-тура: «Абыстайҙы күрәһе ине, йомошобоҙ бар», — тигәс, аҫрау:

— Абыстайҙа ни йомошоғоҙ бар һеҙҙең? — тине.

— Йомошто үҙенә әйтербеҙ.

— Юҡ, булмаҫ, ул хәҙер бушай алмай, ашҡа барырға әҙерләнә.

— Улай булһа ла, беҙҙе күрә алмаҫмы икән?

— Йә, күп һөйләп торма, йомошоң булһа, әйт, булмаһа, бар, кит!

— Беҙгә берәй эш булмаҫмы икән? Шуны абыстайға әйтегеҙ әле.

— Ниндәй эш булһын бында? Шулмы йомошоғоҙ?

— Әллә булыр ҙа, бар, әйтеп ҡарағыҙ әле.

— Булмаҫ, булмаҫ! — тип ишекте яба башланы.

— Улай булһа…

— Нимә улай булһа тағы?

— Аҙ-маҙ нәмә бирмәҫме икән?

— Бына инде ҡыҙыҡ! Ул ни нәмә бирһен һеҙгә?

— Саҙаҡа, — тине Бәҙри. Был уның беренсе тапҡыр саҙаҡа һорауы ине.

Аҫрау ишекте ябып кереп китте лә бер телем күмәс киҫәге сығарып бирҙе. Быны күргәс, Бәҙриҙең ҡулы ихтыярһыҙ икмәккә табан һуҙылды һәм алып ҡуйынына тыҡты. Йәмилә был ваҡытта оялыуынан ҡып-ҡыҙыл булды һәм, ни эшләргә белмәйенсә, Бәҙригә ҡарап:

— Әллә ҡайтайыҡмы? Бер ҙә күңелем тартмай, — тине.

— Юҡ әле, әҙерәк эш эҙләп ҡарайыҡ инде.

Бынан сығып киткән ваҡытта, китегеҙ, кит, тигән кеүек, эт өрөп ҡалды.

Урам буйлап барған ваҡытта быларға сапан ябынған икенсе бер ҡатын осраны. Былар, теге ҡатын килеп етмәҫ борон туҡтап, юл биреп торҙолар. Сапан ябынған был абыстай былар яғына табан ҡарай-ҡарай үтеп барғанда, Бәҙри:

— Абыстай, һеҙҙә йомош бар ине, — тигәс, был ҡатын быларға әйләнеп туҡталды һәм:

— Йә, ниндәй йомош? — тине.

— Бына был иптәшкә берәй эш булмаҫмы икән, уның бер ҙә ҡараусыһы юҡ, эш булһа, эшләр ине, — тине.

Теге абыстай, аҙыраҡ уйлап тороп, Йәмиләнең өҫтөнә диҡҡәт менән ҡараны. Был ваҡытта Йәмилә, бик ҙур дәрәжәле бер кеше алдында торған кеүек, ҡурҡып, ни әйтер икән инде, тип ҡайғырып тора ине.

Абыстай шәфҡәтле һүрәттә генә:

— Белмәйем, ниндәй эш булыр икән һуң, ирең юҡмы ни? — тине.

Бәҙри Йәмилә өсөн яуап бирҙе:

— Уның ире бар ине лә, әллә ҡайҙа киткән, бер ҙә хәбәре юҡ, шуның өсөн аптырап ҡалды. Ире бер йүнһеҙ нәмә шунда, — тине.

— Ә, улаймы ни, нисек булыр икән? Беҙҙә эш булһа ла, күп булмаҫ шул. Иртәгә беҙгә кил әле, иҙән йыуып, самауыр ағартып ҡайтырһың, — тине абыстай.

Йәмиләнең күптән бирле бындай йомшаҡ һүҙ ишеткәне булмағанға күрә, бик шатланды. Үҙен яраттырырлыҡ бер сифатта торорға тырышты.

— Абыстай, һуң һеҙҙең өй ҡайҙа? — тине Бәҙри.

— Бынан алыҫ түгел, ана теге һары ҡапҡалы йорт, — тип ҡулы менән ишара ҡылып күрһәтеп китте.

Бәҙри менән Йәмилә, тамам теләктәренә ирешкән кеүек шатланып, бер-береһенә:

— Иллә һуң яҡшы кеше икән! — тип һөйләшә-һөйләшә ҡайтып киттеләр.

Йәмилә, бик ас булһа ла, иртәгә эш эшләп тамаҡ туйҙырасағына ышанып, туҡ кешеләрсә торҙо. Теге аҫрау биргән бер һыныҡ күмәстең яртыһын ашап ятты.

Иртән торғас, бер ҙә туҡтауһыҙ һары ҡапҡаны эҙләп тапты ла кереп китте. Йәмилә, бер ни әйтергә лә белмәй, ишек төбөндә һөйәлеп тик тора ине.

Абыстай, быны бик ныҡ тикшерергә уйлап:

— Кисә мин һине эшкә саҡырған инем саҡырыуын, беҙҙә, ахыры, эш булмаҫ, һеҙҙең кем икәнлегегеҙҙе белмәйем, ирең ниңә ташлап китте һуң? — тине.

Йәмилә, эш булмаҫ, тигән һүҙҙе ишетеп, тағы хәсрәтләнеп китте һәм «ирең ниңә ташланы?» тигән һорауға, ҡыҙарып:

— Мин уның ниңә ташлап киткәнен үҙем дә белмәйем инде, уның минең менән торғоһо килмәгәндер, — тине.

— Ни өсөн торғоһо килмәй? Әллә бик уҫал булдыңмы? — тигәс, Йәмилә, ҡып-ҡыҙыл булып:

— Юҡ, абыстай, ҡаршы һүҙ ҙә әйткәнем юҡ, — тине.

— Бер ҙә сәбәпһеҙ ниңә китһен?

— Белмәйем шул.

Абыстай, кисә вәғәҙә ҡуйғанға күрә, кире ҡайтарып ебәрергә оялды ла: «Улай булһа, самауыр ағарта белһәң, әйҙә әле самауыр ағартып ҡара», — тине. Йәмилә, ҡып-ҡыҙыл булып, ҡалтырай-ҡалтырай самауырҙы ағарта башланы. Абыстай, нисек булһа ла берәй ғәйеп табырға торған төҫлө, бик диҡҡәт менән ҡарап торҙо.

Былдай ерҙә йөрөп өйрәнмәгән Йәмилә ҡаушай һәм ҡалтырай ине. Шулай ҡаушай, ҡалтырай торғас, яңылыш самауырҙың ҡапҡасын ҡулынан төшөрөп тә ебәрҙе. Йәмилә, ни эшләргә белмәй, тиҙерәк ҡапҡасты ҡулына алып, йәнселгән ере юҡмы икән тип ҡарай һалды.

Теге абыстай шунда уҡ:

— Эй, ҡыҙым, бер ҙә эш рәте белмәйһең икән, булмаҫ, ағарта алмаҫһың, ҡуй шунда, ҡалғанын үҙем булһа ла ағартырмын инде, — тине.

Йәмилә, ни эшләргә белмәй, бик өмөтһөҙ, ҡайғылы ғына һүрәттә ике ҡулын бергә ҡаушырып, баҫҡан ерендә тороп ҡалды. Абыстай әрләүле тауыш менән:

— Ана шулай эш рәте белмәгәнгә күрә, ирең һине ташлап киткән шул. Самауыр ҙа ағарта белмәгәс, нисек итеп донъя күтәргә кәрәк? Былай һине бер кем дә эшкә алмаҫ, — тине.

Йәмилә, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, бик ныҡ оялып, «уф» тип ебәрҙе, һәм күҙенән сыҡҡан ике бөрсөк йәш битенә төштө. Күңеленән: «Шулай уҡ бәхетһеҙ булдым, бер ҙә төшөрмәҫ ерҙә ҡапҡасты төшөрөп ебәрҙем», — тип уйланы. Абыстай:

— Улай бер ҙә эш рәте белмәйенсә нисек үҫтең? Башлаған самауырыңды ағартып бөтөр инде, — тине.

Йәмилә тирләне, ҡыҙарҙы, нисек булһа ла самауырҙы ағартып бөтөрҙө.

Абыстайҙың был дәрәжә наҙлылығына ҡарағанда, әллә ниҙәр бирер тип уйларлыҡ булһа ла, бер эсерлек сәй менән бер ашарлыҡ күмәс биреп, Йәмиләне оҙатты.

Әҙәм ни ҡәҙәре ауырлыҡтар күрһә лә сабыр итә, ауырлыҡтарға ҡаршы көрәшә, үҙе өҫтөн булғыһы килә. Шулай тырыша торғас, бәғзеләре теләктәренә ирешә алалар. Бәғзеләре тормоштарын еңеләйтәләр. Бәғзеләре һаман шулай тормош майҙанында һуғыш менән көндө үткәрәләр. Бәхетһеҙҙәре, шул

тормош майҙанында еңелеп, тормоштоң ҡаты тулҡындары араһында юҡ булып китәләр.

Беҙҙең Йәмилә унда барҙы, бында килде, ләкин һаман яңғыҙ тамағын туйҙырып тороуҙан мәхрүм ине. Ҡағылып-һуғылып йөрөй торғас, таныштары арҡыры ишетеп, үҙе кеүек иҙелгән һәм бәхетһеҙ ҡатындар менән бергә шырпы фабрикаһына эшкә барып керҙе. Бында шырпы манып тороп, көнөнә ун биш тин көнлөк ала башланы. Бында эшләүселәрҙең иң аҙ ала торғаны ла Йәмилә һәм Йәмилә менән шырпы шылдырып тороусылар ине. Һәр көн ун биш тин. Өҫтән ҡарағанда, бик аҙ булһа ла, аҡса күрмәй үҫкән, ризыҡ табыуҙан мәхрүм ҡалған Йәмиләгә бик күп күренә ине. Тураһы, өйҙән өйгә йөрөп, бер һыныҡ күмәс эҙләүгә ҡарағанда, бында эшләп, һәр көн ун биш тин аҡса алыу бик яҡшы ине.

Ундағы әллә нисә дәрәжә эҫелеккә, әҙәм сыҙай алмаҫлыҡ һаҫыға өйрәнеп киткәнсе, Йәмиләгә бик ауыр булды. Бара торғас, Йәмилә быларҙың һәр береһенә күнә башланы. Ул унда һәр көн бара, эшләй, тирләп-янып ҡайта, шуның менән тамағын туйҙыра ине.

Йәмилә былай үҙе эшләп аҡса таба башлағас, Шәриф менән Бәҙри үҙ-ара һөйләшеп, Йәмиләне өйҙәш итеп үҙҙәре янына алмаҡсы булдылар. Йәмилә, быларға өйҙәш булып кереүҙе бик яратҡанға күрә, баш өҫтө тип ҡабул итте.

Был көндән һуң, был ярлылар өйҙәш булып, эшләп тапҡан аҙ-маҙ нәмәләрен уртаҡлашып, бергә-бергә көн итә башланылар. Йәмилә Бәҙриҙәргә өйҙәш ҡатын булды. Был эшселәр, йәғни Шәриф менән Йәмилә, көндөҙ хеҙмәт итеп, кис ҡайтып, бер ҙә хәсрәтһеҙ төҫлө, бик татыу торалар ине...

Шәрифтең түрҙә аталыҡ дәрәжәһендә, Бәҙриҙең самауыр эргәһендә әсә вазифаһында, Йәмиләнең, Шәрифкә күренмәйенсә, сит ҡатын булып, самауырға ышыҡланып ултырыуы, балаларының, иркәләнеп, Шәриф менән Бәҙри араһында ултырыуҙары был ярлы ғаиләне тамам бер-береһенә бәйләндергәйне. Шәриф һүҙ башлағанда, башҡалар уны ихлас тыңлап, уның һәр һүҙен дөрөҫ тип хөкөм иткән төҫлө ултырыуҙары, Хоҙайбирҙенең һирәк-мирәк: «Ҡара әле, әсәй, Гөлөй мине үсекләй», — тип ҡысҡырыуы былар араһында ла көслө-көсһөҙҙәрҙең барлығын белдерә ине. Быларҙың көндәре шулай үткән ваҡытта артыҡ хәсрәтләнәсәк түгелдер ине. Фәҡәт был рәхәтлектәре оҙаҡ дауам итмәне. Күңел өсөн булһын, бер бөртөк ҡар яумай башлаһа, был ярлылар ҡороға ташланған балыҡ кеүек тыпырлап, аптыраушта ҡалалар ине.

Әлдә был ваҡытта Йәмилә аҙмаҙ табып торғанға күрә, шуны уртаҡлашып ашайҙар ине. Ҡыштың ғинуар ваҡыты булғанға күрә, көн

һаман һалҡын булып, сығыу менән туңдыра, ҡалтырата башлай ине.

Әллә нисә көн аслы-туҡлы торған Шәриф, бик һалҡын булһа ла, ғәҙәтенсә, балтаһын тотоп сығып китте. Юғарыла әйтелгән ярлылар тора торған урынға барып ҡушылды.

Ике-өс сәғәт буйына эш көтә торғас, тамам туңды. Һалҡын эсенә ҡәҙәре үтте. Аталыҡ шәфҡәте менән балаларҙы туйҙырыуҙы ниәт итеп, үлер дәрәжәгә килде. Шулай торғанда, бәхетенә эш табылып, эшләргә китте. Кискә ҡәҙәре эшләп, саҡ өйөнә ҡайтып керҙе. Быны эсенә ҡәҙәре үткән һалҡынлыҡ уны ауырыуҙар иҫәбенә керткәйне. Ас булыуына ҡарамаҫтан, бер нәмә лә ашамайынса, сәй генә эсте лә тиҙерәк йоҡларға ятты. Шәриф төн буйынса ауырып сыҡты, иртән урынынан да тора алманы.

Шәриф ауырығандан һуң, ашарға табыу бурысы Бәҙри өҫтөнә йөкләнеп ҡалды. Был көндән һуң Бәҙри ҙә Йәмилә менән бергә шырпы фабрикаһына барып эшләй башланы. Иртүк тороп сәй эскән булалар ҙа ашығып шунда китәләр. Көн буйы эшләп, кис ҡайталар ине. Бында эшләп торғанда, быларҙың хәле бер көйөнсә яҡшы барҙы.

Ләкин ярлылыҡ һәм бәхетһеҙлеккә дусар булған кешеләрҙең эше, һис бер ваҡыт бер көйөнсә, яҡшы дауам итмәй, бәлки бик тиҙ икенсе төрлөгә әйләнеп китә.

Былар шунда яҡшы ғына эшләп йөрөгән ваҡытта, шырпы фабрикаһына ла ҡаза килеп, ут сығып, бағаналарына ҡәҙәр янып бөттө.

Шырпы фабрикаһы тарафынан быларҙың ризығы киҫелде. Быларҙың баштарына тағы: «Ни эшләргә, ҡайҙан ашарға табырға, ҡайҙа барырға?» — тигән һорауҙар төштө. Ас көйөнсә бер-ике көн тороп, өсөнсө көн Бәҙри, ни эшләргә белмәйенсә, саҙаҡа һорарға булһа ла китмәксе булды. Иң элек, бөгөн йома ваҡытында, мәсет ишеге алдына бармаҡсы булып, сығып китте. Бәҙриҙең уйынса, мәсет ишеге алдында һораныу хәйерселектең еңелерәк дәрәжәһе кеүек күренде. Мәсет алдына йоманан бер сәғәт элек ҡарттар менән ҡарсыҡтар, аяҡһыҙ-ҡулһыҙҙар, тол ҡатындар менән эш таба алмаған ирҙәр, етем балалар, йәш кенә ҡыҙҙар шығырым булып килеп тулғайны.

Беҙҙең Бәҙри ҙә, үҙенә хәйерселек билдәһе яһап, биленә тоҡ ҡыҫтырған көйөнсә, туп-тура мәсет ҡапҡаһы төбөнә килде лә ярлылар сафына кереп китте. Күп тә торманы, төркөм-төркөм мосолман йәмғиәте, йома намаҙын үтәү өсөн, мәсеткә кереп китә башланылар. Ярлылар, өҫтө-өҫтөнә тығылып, ҡыҫылышып: «Бай ағай, бер тин генә саҙаҡа!» — тип ҡулдарын тыҡтылар. Һәр бер байҙың алдына «Алла өсөн» һуҙылған йөҙҙәрсә ҡулдарҙың эйәләре ауыҙынан сыҡҡан: «Ағай, бер тин генә

саҙаҡа!..» — тигән тауыштары күктәргә сыҡты. Ас ауыҙҙарҙан, хәсрәтле күңелдәрҙән сыҡҡан был әҫәрле һүҙҙәр, үтенеү менән булған һорауҙар туҡ ауыҙлы, шат күңелле кешеләргә артыҡ тәьҫир итмәй ине.

Башҡа ярлылар күпме аҡса алғандарҙыр, беҙҙең Бәҙри был йома көн һигеҙ тин ярым аҡса алып ҡайтты. Был һигеҙ тин аҡса бер ғаиләнең тәрбиәһе өсөн, әлбиттә, күпкә бармаҫ. Шунан һуң һәр көн йома ла булмаҫ. Шуның өсөн шәмбе көнгә ашарға табыуҙы Бәҙри үҙенә бурыс кеүек күрә ине. Бәҙри шул бурысты үтәп, еренә еткерер өсөн, иртән торғас, ҡапсыҡ тотоп теләнергә сығып китте. Мосолман, рус тип, милләт айырмаһына ҡарамай, рәттән йөрөп, ваҡ-төйәк күмәс киҫәктәрен йыйып алып ҡайтты.

Был күмәс һәм икмәктәрҙең иң тәмлеһен һайлап алып, ауырып ятҡан Шәрифтең алдына ҡуйҙы ла:

— Ашап ҡара әле, бына был аҡ күмәс бик тәмле, әллә майға ҡушып бешергәндәр инде, әҙерәк терелеүеңә сәбәп булмаҫмы икән? — тине.

Шәриф, ҡалтырап торған ҡулы менән саҡ-саҡ тотоп, күмәсте ауыҙына килтереп ҡабып алды ла:

— Юҡ инде, бер ҙә ауыҙымдың тәме ҡалмаған. Һаулыҡ — ҙур байлыҡ икән. Бына нисек, май кеүек тәмле күмәсте лә ашағы килмәй, — тине.

Бәҙри уны йыуатмаҡсы булып:

— Әҙерәк торғас ашарһың. Ауырығас шулай була инде, — тине лә үҙе, ҡапсыҡты бушатып, Хоҙайбирҙе менән Гөлйыһанға бирәр киҫәк икмәк бирҙе. Мейес алдында күлдәгенең ҡулбашына ямау һалып ултырған Йәмиләне лә буш ҡалдырманы. Уға ла бер киҫәк һуҙҙы. Үҙе лә бер һыныҡ алып ашарға кереште. Икмәк һағынып ас торған ярлылар өсөн был иҫке һәм ҡатҡан киҫәктәр ни тиклем тәмле икәнлегенә шик бармы? Мөхәббәт менән бер-береһенә ҡарашып, алдарына төшкән валсыҡтарҙы сүпләп ултырыу быларҙың күңелен аса ине.

## IX

Юғарыла яҙылған өйҙөң һикеһе өҫтөндә ятҡан Шәриф, саҡ-саҡ ҡуҙғалып, тороп ултырҙы. Уның йөҙө һарғайған, ирендәре кипкән, күҙҙәре бик йәмһеҙләнеп эскә батҡан, ауыртҡан башын ҡап-ҡара иҫке яулыҡ менән бәйләгәйне. Шәрифтең керләнеп һәм һаҫып бөткән берҙән-бер күлдәген бөгөн Бәҙри йыуып киптерергә ҡуйған, ул ваҡытлыса күлдәк урынына сәкмәнен кейгәйне. Янында бер туҫтаҡ һыу, уның янында бер телем арыш икмәге тора ине. Ятҡан еренән торғас, бик ауырлыҡ менән генә ике аяғын алға табан һуҙып, мамыҡтары сығып ялбырап торған юрғанды аҡрын ғына аяғына ябып ҡуйҙы, үҙе биҙгәк тотҡан кешеләрсә

дер-дер ҡалтырай, нимәлер эҙләгән кешеләрсә, тирә-яғына ҡарана ине.

Өйҙә Шәрифтең бик йыш уфылдауынан, Хоҙайбирҙенең мейес башында әллә нәмәне тыҡ-тыҡ иттереп бәреүенән башҡа бер тауыш та юҡ ине.

Бөгөн, аҡса таба торған йома көн булғанға күрә, Бәҙри мәсет ишеге алдына теләнергә тип киткәйне. Аҙ булһа ла файҙа булыуҙы уйлап, Бәҙри, иҫке нәмәләрҙән махсус бишмәт тегеп, билен быуҙырып, йәтеш бер «кескәй хәйерсе» һүрәтенә кертеп, Гөлйыһанды ла үҙе менән алып киткәйне.

Йәмилә лә, башҡа эш табыуҙан мәхрүм булғас, Бәҙри менән мәсет алдына барғайны. Былар кискә ҡаршы бик ҡыҙыу ғына атлап ҡайтып керҙеләр. Үҙҙәренсә, бик йыраҡ ергә барып бик күп эш бөтөргән кешеләр кеүек, уйнап-көлөп ҡайтҡан булдылар.

Гөлйыһан ҡайтып кереү менән, Хоҙайбирҙегә ҡарап, үҙенең нисек йөрөгәнен һәм ҡайҙа барып ҡайтҡанын сабыйҙарса маҡтанып һөйләне. Бәҙри, төрлөсә уйлап, ашауэсеү өсөн нисек булһа ла аптырамаҫ кеүек күренде. Уның өсөн иң ауыр күренгән нәмә — Шәрифтең ауырып ятыуы ине.

Кис булды. Йәмилә үҙендә бер ауырлыҡ һиҙә башланы.

Йәмилә төн буйына ауырыны. Иртән торғас, Бәҙри, самауыр ҡуйып, Шәриф менән Йәмиләгә сәй яһап бирһә лә, берәр сынаяҡтан артыҡ эсә алманылар. Йәмиләнең ауырыу булыуы Бәҙри өсөн ҡыйынлыҡты тағы ла арттырҙы. Яңғыҙ ҡатынға ике ауырыуҙы тәрбиә итеүе бик ауыр эш. Һәр көн хәйер һорашырға, өйҙән өйгә йөрөп теләнергә тура килә, уның өҫтөнә тәрбиәһеҙ ятҡан ауырыуҙарҙы ла ҡарау Бәҙри өҫтөнә төштө. Бына бөгөн дә сығып китте, өйҙә ятҡан ауырыуҙарға Гөлйыһан ғына һыуфәлән биреп торҙо.

Бәҙри теләнеп ҡайтҡансы, кис тә булды. Ҡайтыу менән һыуға барып килде лә, ирен тәрбиәләп, унан һуң Йәмиләнең хәлен һораны. Был ваҡытта Йәмиләнең хәле бик ауырайғайны. Ул Бәҙригә:

— Хәлем бик насар, һөйәктәрем таралып тора, бик ойялам, ике араға минең шаршауҙы ҡороп ҡуй әле, — тине.

Бәҙри, хеҙмәт итергә әҙер генә торғанға күрә, бик тиҙ тороп, шаршауҙы ҡороп та ҡуйҙы. Ваҡ-төйәк эштәрен бөтөргәс, самауыр ҡайнатып, сәй эсергә керештеләр. Ләкин был сәйҙәре әүәлдәге сәйҙәре кеүек ләззәтле, күңелле түгел ине. Ике ауырыу ике урында уфылдап ята. Йәндәре тамам рәнйеп, үҙҙәренең ауырыу икәнлектәрен тороштарынан уҡ белдерәләр ине.

Бәҙри, бер сынаяҡ сәй яһап, Шәрифтең алдына ҡуйған булды, икенсе сынаяҡ аҫтына яһап, Йәмиләгә бирҙе. Улар сәй эсһә, үҙенә күңелле булыр төҫлө булды, эсегеҙ әле, тигән кеүек ҡарап торҙо. Ул бөтә барлығы менән уларҙы ҡыҙғана ине.

Уларҙың бер ҙә эскеһе килмәгәнгә күрә, шул берәр сынаяҡ сәйҙе эстеләр ҙә, донъянан өмөт өҙөп ҡул һелтәгән кешеләрсә, урындарына яттылар.

Бөгөн Гөлйыһан менән Хоҙайбирҙе лә, әүәлдәге ит бешергән көндәге кеүек, шат түгелдәр ине. Бала булһалар ҙа, ҙурҙарҙың был хәлдә булыуы быларға тәьҫир иткән ине. Шулай булһа ла Хоҙайбирҙе:

— Әсәй, миңә атай сынаяғына сәй яһап бир, — тине.

Былар бик күңелһеҙ сәй эскән ваҡытта, шаршау артында мөйөштә Йәмилә ыңғыраша, өмөтөн яңғыҙ Аллаға ғына бәйләп, ауыҙынан ҡат-ҡат: «Уф Алла!» — тигән һүҙҙе сығара ине.

Бер аҙ торғас, ҡараңғы төшөп, өйҙө бигерәк күңелһеҙ бер хәлгә килтерҙе. Бәҙри бер өслө лампа табып яндырҙы ла тәҙрә төбөнә ҡуйҙы. Бер аҙҙан һуң Бәҙри ҙә, балалар ҙа йоҡоға киттеләр.

Йәмилә яңғыҙ ғына һаташып ята бирҙе. Уның күҙенә әллә нәмәләр күренде. Ул үҙенең бик ауыр бер хәлдә икәнен бәғзе ваҡытта ғына һиҙһә лә, ҡайһы ваҡытта бөтөнләй һушһыҙ булып, үҙенәнүҙе хәбәрһеҙ рәүештә ята ине. Өйҙө тышҡы яҡтан ҡар баҫып киткәнгә күрә, эстән бер тауыш та ишетелерлек түгел ине. Өй эсендә Шәрифтең ғыжлауы менән Йәмиләнең ыңғырашыуы, уларға ҡушылған фәҡирлек билдәһе булған һис туҡтауһыҙ һайрап торған хәсрәтһеҙ сиңерткә тауышынан башҡа тауыш юҡ ине. Фәҡирлек менән ауырыу был ярлыларҙы үлектәр хәленә керткәнлектән, был өй, гүйә, үлектәр урыны төҫлө тора. Бары тик сиңерткә тауышы ғына өйҙә йән эйәһе барлығын белдерә ине.

Тәҙрә төбөндә ултырған, үҙ уйынса, бик күп яҡты бирәм тигән төҫлө торған өслө лампа күңелһеҙ генә туҡтауһыҙ нурын сәсә, бик тырышлыҡ менән булһа ла, тар ғына өйҙө яҡты итергә көс түгә ине. Тәҙрәнең боҙо лампа йылыһы менән аҙ ғына иреп, күҙ йәше кеүек, һалҡын тамсылар яһаған ине.

Ғөмүмән ҡарағанда, өйҙөң эсе үҙ алдына үҙе ярлылыҡтан зарлана, Йәмиләне ҡыҙғана төҫлө ине. Йәмиләнең эсендә булған бәхетһеҙ бала, әйтерһең, былдай михнәтле донъяға, хәсрәтле өйгә, ярлы тормошҡа тыумаҫ өсөн: «Инде мин тыумам, тәрбиәсеһе юҡ әсәмде үҙем менән бергә, ошо өй кеүек ҡәбергә алып барырмын», — тигән кеүек тойола һәм был донъяға килмәҫкә, тыумаҫҡа талашып, Йәмиләне һушһыҙландыра ине.

Бала ысындан да тыуманы. Йәмиләнең ыңғырашҡан тауышына Бәҙри йоҡоһонан уянды. Күҙен тырнап, Йәмилә янына килде һәм бер сара табыр кеше кеүек:

— Йәмилә! Йәмилә! — тип хәлен белергә теләһә лә, яуап ала алманы. Йәмилә аҡайған күҙҙәрен әйләндереп, ҡулы менән ишара итеп уға: «Инде минән яуап көтмә, минең хәлем бөттө, бәхетһеҙ ғүмеремдең аҡтыҡ сигенә ирештем», — тигән кеүек булды.

Бәҙри, был хәлде күргәс, ҡайҙа барырға белмәне, Шәрифтең әйтеүе буйынса, йыраҡ түгел күршеләге әбейгә йүгерҙе. Ҡап-ҡараңғы төндә, урам эттәрен өрҙөрөп, барып әбейҙе уятты.

Быңдай ярлыларға әбей ниңә килһен? «Ете төн уртаһында йөрөй алмайым, күҙем күрмәй», — тип кенә яуап бирҙе. Бәҙри, әбейгә нимә әйтергә белмәй, йәне әсеп:

— Байҙар булһа, барыр инегеҙ, ярлыларҙың үлгәне-терелгәне һеҙгә барыбер шул! — тип кире ҡайтып китте.

Йәмиләнең түбә таҡтаға ҡарап аҡайып ҡалған күҙҙәре, хәл юҡлыҡтан хәсрәтһеҙ ҡалған кәүҙәһе үҙенә һөжүм итәсәк үлемде көтә, өйҙәге бөтә нәмәләргә, хатта донъяға тулы нәфрәт һәм әһәмиәтһеҙлек менән ҡарайҙар. Уларға хурлыҡ һәм мыҫҡыл ҡарашы менән ҡарап, үҙенең был тормоштан ҡотоласағына тамам ышанғанын белдерә ине. Ысындан да Йәмилә асыҡ йөҙө, саф күңеле арҡылы был донъя менән һаубуллашты.

Ҡараңғы төн үтеп, көнсығыштан таң яҡтырған ваҡытта, Йәмилә күҙен тултырып бөтә тирә-яғына ҡараны. Бәҙриҙәргә: «Мин һеҙгә бурыслымын, мине тәрбиә иттегеҙ, мин ҡайтара алмай киттем», — тигән кеүек ҡараны ла ике бөрсөк күҙ йәшен сығарҙы. Был ҡараңғы ҡәбәхәт донъянан теге донъяға китте. Балаһы, был донъяның насарлығын белгән кеүек, әсәһе ҡарынында китте. Йәмилә бик тыныс һуҙылып ятты. Бәҙри килтереп өҫтөнә бер аҡ таҫтамал япты...

* * *

Шәфҡәтһеҙ кешеләрҙең күңеле кеүек ҡаты, рәхимһеҙ ҡышҡы һалҡындар бөтөп, нурлы һәм әҫе ҡояш нурын бөтә донъя йөҙөнә сәсеп, тереклек әҫәре бирә торған ваҡыттар еткән, йәғни май ахырҙары булғайны. Көндөң матурлығына, һауаның сафлығына бөтә йән эйәһе шат булып, һәр береһе рәхәтлектә ине.

Бына шул ваҡытта Шәрифтең был ҡаланан илле саҡрым ҡәҙәре йыраҡлыҡта булған ауылына китә торған юл менән бер ҡатын китеп бара ине. Ул ҡатын ҡояш әҫелегенән янып ҡыҙарған, бәләкәй арбаһын тартып бара торғас, тамам арығайны. Был ҡатындың дүрт-биш йәшлек ир балаһы менән ете-һигеҙ йәшлек ҡыҙ балаһы үҙенән егерме-утыҙ сажин артта ҡалып баралар ине. Арбаһында ла бер имсәк балаһы бар ине. Бына был ҡатын Бәҙри булып, балалары ла Хоҙайбирҙе менән Гөлйыһан ине. Шәриф, шул ауырыуынан терелә алмайынса, ҡыштың ахырында вафат булғайны.

Шәриф ауырып ятҡан ваҡытта, Бәҙри балаларын теләнеп туйҙырып торҙо. Был ваҡытта Бәҙриҙең күрмәгән ауырлыҡтары ҡалманы. Был ауырлыҡтарҙың бөтәһе, Шәрифтең үлеүенә ҡарағанда, бик еңел булып ҡалды. Икешәр-өсәр көн ас тороп иламаған Бәҙри

Шәриф үлгән ваҡытта иланы. Бының өҫтөнә, Шәриф үлеп бер аҙна үткәс, балаһы донъяға килде. Бына ул шул ваҡытта аслыҡтың ауырлығын татыны. Үҙе бер ергә лә сыға алмағанға күрә, Гөлйыһан менән Хоҙайбирҙе теләнеп йөрөй башланылар. Ул ваҡыттар ҙа үтте. Ҡар бөттө, арба юлы төшкәс, ауыл еренә ҡайтырға уйлап, ҡаланан сығып китте. Әҫе көндө имсәк балаһын арба менән һөйрәп, ике балаһын эйәртеп, юл менән барған ҡатын бына шул Бәҙри ярлы ине.

*1907*

?

**1**. «Себер тимер юлы йәки милләттең хәле» әҫәрендә М. Ғафуриҙың мәғрифәтселек ҡараштарының сағылышы тураһында һөйләгеҙ. Был фекерҙе ҡеүәтләй торған ҡайһы бер шиғыр юлдарын уҡып күрһәтегеҙ. **2.** Шағирҙың революцион-демократик ҡараштары ниндәй шиғырҙарында асығыраҡ сағыла башлай? Ундай ҡараштарҙы тыуҙырған социаль-сәйәси хәлдәрҙе аңлатып бирегеҙ. **3.** М. Ғафуриҙың Февраль революцияһы осорондағы шиғриәте тураһында һөйләгеҙ. Был осор поэзияһында шағир ниндәй мөһим мәсьәләләрҙе күтәрә? **4.** «Ҡыҙыл байраҡ» шиғырын уҡығыҙ, һуңынан тасуири итеп ятлағыҙ. **5.** М. Ғафури шиғырҙарының төп идея-тематик йүнәлештәре тураһында әңгәмә ойоштороғоҙ. **6.** «Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын» повесының реалистик көсө һәм тәрбиәүи әһәмиәте нимәлә икәнен аңлатығыҙ.



# Шәйехзада Бабич

(1895 – 1919)

## ХАЛҠЫМ ӨСӨН

Ап-аҡ алтын йырҙарымды
Йырламайым данлыҡ өсөн;
Йырлайым алтын илем өсөн,
Үҙ туған халҡым өсөн.
Саф көмөштәй йырҙарымды
Йырламайым алтын өсөн;
Йырлайым тик саф көмөштәй
Саф йөрәк халҡым өсөн.
Сәскә төҫлө йырҙарымды
Йырламайым зауҡым өсөн;
Йырлайым тик сәскәләй
Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.

Дәртле ҡайнар йырҙарымды
Йырламайым дәртем өсөн;
Йырлайым тик мәңге шат,
Дәртле, көләс халҡым өсөн.
Иламайым мин көндәрем
Һырғаҡ, һыуыҡ, һалҡын өсөн;
Илайым тик ярлы, меҫкен,
Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.
Йәш сағым, алтын сағым,
Ялҡын сағым булһын фиҙа
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.

*1914*

## БЕР МИНУТ

Бер минутта ташты күңелем, бер минутта булды ут,
Берсә янды, берсә туңды, барыһы булды бер минут.

Бер минут бар донъяһын ҡарғап ҡабынды уттарым,
Янды, көйҙө, парса-парса булды меҫкен күкрәгем.

Эйе, янды күкрәгем... Тик, юҡ, ләкин меҫкен түгел,
Был йөрәк — утлы йөрәк, үткен күңел, киҫкен күңел.

Ул яна, тик ҡайғырып янмай, яна шатлыҡ менән,
Ул яна был донъяны күрмәк булып аҡлыҡ менән.

Ул яна... Сеү, һипмәгеҙ һыу; эйе,
ул янһын әле!
Янған уттар күҙҙәремдән йәш
булып тамһын әле!

Там, минең күҙ йәштәрем, там,
там, тамып тор мәңгегә,
Ян, минең аҡ күкрәгем, ян, ян,
янып тор мәңгегә.

*1914*

## БАЙ ҺӘМ ЯРЛЫ

Һин сабыр итһәң, сабыр ит,
башҡаһы сабыр итмәһен,
Юҡ, түҙә алмайым, сабыр итә
алмайым, аҡсаһы йәбер итмәһен!

Эс яна, тормош тигеҙһеҙлектәрен
уйлап яна,
Моңло меҫкен бәндәләрҙең
моңдарын һөйләп яна.

Мин сығып баҡтым урамға моңло
күҙҙәр арҡыры,
Күҙгә сыҡты йәш булып күкрәктә
янған ялҡыным.

Күҙҙәрем алдында илап, ярлы
меҫкендәр үтә,
Ярлыларҙы ҡыҙғаныуҙар
йәш күңелде әрнетә.

*1914*

## КӨРӘШЕП ҮТКӘР ҠЫҪҠА ҒҮМЕРЕҢДЕ

Ник һыҙлайһың, күңелем, ник юҡ
өсөн
Ағыулайһың минең аңымды?
Көйҙөрөп һин эстән, һис ваҡытһыҙ
Сығараһың, ахыры, йәнемде.

Үҙеңде һин иҙеп янған менән,
Уйлама һин ваҡыт үтер тип,
Ҡара төндә ҡара болот булып
Ерҙе баҫҡан золом китер тип.

Һине бәйләп тотҡан ныҡ бығауҙы
Бик тиҙ генә өҙә алмаҫһың.
Аяҡ аҫтың тулы тәрән соҡор,
Бик тиҙ йүгереп китә алмаҫһың.

Төкөр донъяһына, бул түҙемле,
Ағыулама юҡҡа тамырыңды.
Ысын ирекле алғы көн өсөн
Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде!

*1915*

## КӨТӘМ

Йөрөгән саҡта башҡорт
туғайҙарын,
Йәнем әллә ҡайҙа елкенә;
Ишеткәндә моңло ҡурайҙарын,
Йөрәгемә моңдар бөркөлә.

Тауҙарына менһәм, ҡырҙа йөрөһәм,
Балҡый йәннәт нуры — гөлөстан,
Меҫкен башҡорт ауылын килеп
күрһәм,
Аңҡый хәсрәт, үлем — гүрестан.

Гүрестандай йәмле ауылдарҙа
Ҡыбырлаша йәнле мәйеттәр,
Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен көйләп,
Илап аға Һаҡмар, Яйыҡтар.

Янып-көйөп, бәғерем өҙгөләнеп,
Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем,
«Килер микән аҡ көн беҙгә лә?» — тип,
Уралҡайға ҡарап илайым.

Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,
Урал ята әкрен, тын ғына;
Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,
Килә башлай тәмле уй ғына...

Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан
Ырыҫ, бәхет, өмөт йырҙарын;
Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,
Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын.

*1916*

## КЕМ ӨСӨН?

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү, әй, ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.

— Һис зарар юҡ, ал, — тине ай, —
Ал да сәс нур халҡыңа;
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым ҡояштың нурҙарын.

*1916*

## ҠУРАЙҠАЙҒА

Һыҙҙырт, ҡурай, үткән ҡайғыларҙы,
Өҙҙөрт, ҡурай, йөрәккәй ҡылдарын;
Һиҙҙерт, ҡурай, ҡайнар тойғоларҙы,
Һөйҙөрт, һөйләп башҡорт моңдарын.

Һөйлә Һаҡмар, Яйыҡ, Ашҡаҙарҙы,
Һөйлә йәмле Урал буйҙарын;
Һөйлә ожмах кеүек сәхрәләрҙе,
Йәйелеп ятҡан йылҡы, ҡуйҙарын.

Һөйлә йәйләүҙәрҙә йәйҙе йәйләп,
Ҡырҙан ҡырға күсеп ҡуныуҙы;
Һөйлә ҡашмау кейеп, селтәр бәйләп,
Ҡырҙа йырлап йөрөгән һылыуҙы.

Һөйлә елберләгән таллыҡтарҙы
Сылтырап аҡҡан шишмә буйында;
Һөйлә күбәләктәр, бал ҡорттарҙы
Уйнап осҡан сәскә ҡуйынында.

Һөйлә, ҡурай, тарихыңдан, яуҙарыңдан,
Һөйлә ҡанлы башҡорт болаһын;
Һөйлә олатайҙар хәлдәренән,
Йөрөш, торош, заңын, йолаһын...

Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан
Һуғарылды ҡара ҡан менән;

Сыҡтыҡ ҡара көстән ҡанды эскән,
Һуғарылһын инде йәм менән!

Яугир ирҙәребеҙ нисә заман
Аҡ тирмәлә ҡылыс ҡайраны;
Шалтыр-шолтор сыңлап
һауыт-һайман,
Өҫтөбөҙгә һөңгө янаны.

Нисә заман, бахыр ҡурайҡайым,
Ғазраилдың йырын йырланың;
Күпме ҡыйын күреп, күпме
вайым,
Үкһеп-үкһеп өҙөлөп иланың.

Килде заман, инде шатлан, ҡурай,
Йәмле тауышың илгә яң(ғы)раһын!
Ҡыуанып китһен урман, сәхрә,
туғай,
Буҙ турғайҙар ҡыуанып һайраһын!

Уйна, ҡурай, күктән йәм
шаулаһын,
Нур яйнаһын[1] баштар өҫтөндә!
Йәм яҡтыһы юйһын ҡан шәүләһен,
Гөлдәр үҫһен таштар өҫтөндә!

Күкрәтеп, геүләп, һайрап, өзләп,
Килде, ҡурай, уйнар миҙгелең,
Яҡты уйҙар һалып, дәртен ҡуҙғап,
Күккә ашыр йөрәктәр һиҙгерен!
*1918*

## ЯҘҒЫ ЙЫР

Ултырҙым мин тауҙың күкрәгенә,
Йырҙар яҙам, елкәй, иҫмәй тор.
Шишмәкәй, тын, аҡрын… сеү,
шаулама,
Үткән ғүмерем, иҫкә төшмәй тор.

Сылтырап аҡҡан шишмә
буйҙарында,
Аһ, мин йөрөнөм былтыр кем
менән?
Шул саҡтарҙы, шишмә, алып
аҡтың,
Ҡалдым һыҡрап ауыр моң менән.

Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,
Зинһар, тимен, елкәй, иҫмәй тор.
Йомол, гөлкәй, йомол бер минутҡа,
Минең күҙҙәремә төшмәй тор.

Аһ, сәскәләр, былтыр һеҙҙе өҙөп,
Кемдең күкрәгенә ҡаҙаным?
Кемгә ҡаҙап, кемгә моңло ҡарап,
Күҙҙәренән яуап эҙләнем?

Ни тине ул күҙҙәр, әй, сәскәләр,
Күрҙегеҙме серле күҙҙәрен?
Кем ине ул, тетрәп хозурында,
Аҡ ҡулдарын һорап, теҙләндем?..

Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,
Ҡөҙрәтле ел, аҡрын, иҫмәй тор,
Һандуғасҡай наҙлым, ҡуй,
һайрама,
Һайрап, йәш бәғеремде киҫмәй тор.

Иҫендәме, былбыл, үткән яҙҙа,
Һин һайраған ағас төбөндә,

[1] *Яйнау* — балҡыу, ялтлау.

Кем ине ул шунда ҡосағымда,
Ай балҡыған яҙҙың төнөндә?

Ҡотло булһын айлы төндәр тиеп,
Һин бит беҙҙе ҡотлап һайраның,
Һин бит шунда һикереп ботаҡ
һайын,
Ҡуныр өсөн урын һайланың.

Һин инең бит уның күкрәк серен,
Һайрап-һайрап, миңә белдергән,
Ул ҡайнатҡан минең күкрәк
йырын,
Һайрап-һайрап, айға мендергән.

Кем ине ул шунда ай битенән
Минең йырҙарымды уҡыған?

Кем, тирбәтеп, минең күкрәгемдә
Уйнап торҙо таңда йоҡонан!..

Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,
Тау күкрәге серем белһен тип;
Гөлдәр һирпеп яҙған йырҙарымды
Күкрәгендә һаҡлап торһон тип.

Тыңлағыҙсы, ҡоштар,
йырҙарымды,
Тыңлаһағыҙ, һеҙгә йырлармын.
Һеҙ һайрарһығыҙ, ә мин
тыңлармын,
Тыңлап, үкһеп-үкһеп илармын.

*1918*

## ТУПРАҠ

Тупраҡ беҙҙең анабыҙ,
Беҙ тупраҡҡа балабыҙ.

Тупраҡ, тупраҡ, тупраҡ!
Күкрәктәге сәнабыҙ[1].

Тупраҡ беҙҙең атабыҙ,
Беҙ тупраҡҡа ятабыҙ.

Тупраҡ ҡәҙерен аңламау
Беҙҙең өлкән хатабыҙ.

Тупраҡ өсөн яналыйҡ,
Тупраҡҡа шәмдәр һалалыйҡ,

Үҙебеҙҙең инәбеҙҙе
Үҙебеҙгә алалыйҡ!..

Тупраҡ башҡорт бәхетелер,
Бәхетебеҙҙең тәхетелер.

Тупраҡ ҡалһа истиҡбал
Нурлы, раушан[2], яҡтылыр.

Тулыр илгә батырҙар,
Аҡ шоңҡарҙай аҡындар.

Арыҫландай айҙарҙар
Әйләнеп үк ҡайтырҙар.

Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,
Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.

Тупраҡ китһә, һау бул,
донъя,
Өҙөлмәктер самабыҙ.

---

[1] *Сәна* — маҡтау, маҡтаулы һүҙ.
[2] *Раушан* — яҡтырыусы, нурлы, асыҡ.

## БЕҘ

Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар,
Күп ырыуға баш йорттар.
Беҙҙә гәүһәр, беҙҙә йәүһәр,
Беҙҙә һәр бер ашлыҡтар.

Беҙҙә тиңһеҙ сәхрәләр,
Сәхрәләр — ожмах улар;
Унда гөлдәр тирбәнеп,
Йәмләнергә саҡыралар.

Унда ҡоштар һайраша,
Күлдә ҡамыш шаулаша.
Ҡамыш буйы әрүшә,
Тамаша, эй, тамаша.

Беҙҙә ҡалын урмандар,
Беҙҙә данлы Урал бар;
Урал аҫты алтындыр,
Өҫтә шәфәҡ балҡыйҙыр.

Һиҙен, башҡорт, бәхетеңде,
Төшөн, башҡорт, артыңды;
Күрер өсөн тәхетеңде,
Истиҡбалың[1] алтынлы.

*1918*

## БАШҠОРТОСТАН*

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ...
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан— гөлбостан,
Сөнбөлостан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!
Башҡортостан баҡсаһы—
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы—
Ҡаһармандар йөрөгән ер...
Башҡортостан— гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.
Башҡорт халҡы тарихта
Ғәйрәт менән фаш булған;
Киң иреккә ашҡынған
Күңелдәге ташҡындан;
Һәр ваҡытта намыҫын
Үҙ башына баш ҡылған;
Тыуған илен һаҡлауға
Үҙе булған таш ҡурған.
Башҡортостан— гөлбостан,
Рәйханостан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан...
Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур;
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр...
Фирҙәүестәр[2] төҙөлөр,
Әлуан ниғмәт[3] теҙелер;
Күкте ташлап мәләктәр[4],
Был ерҙәргә гиҙенер.

* Ҡыҫҡартып алынды.
[1] *Истиҡбал* — киләсәк.
[2] *Фирҙәүес* — баҡса, ожмах, йәннәт.
[3] *Әлуан ниғмәт* — төрлө ашамлыҡ-эсемлек.
[4] *Мәләк* — фәрештә.

Башҡортостан — йәмбостан,
Илһамыстан, шиғырстан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!..

Башҡортостан йәшәһен,
Сәнбөлостан йәшәһен!
Шунда тыуып, шунда үҫкән
Арыҫландар йәшәһен!

*1918*

## БАШҠОРТ ХАЛҠЫНА КӨЙЛӨ ХИТАП*

Башҡорт халҡы, һиңә бер һүҙ
әйтәм,
Минең әйткән һүҙҙе тыңлаһаң,
Зәки һеҙҙе һатҡан тигән һүҙгә
Ышанмаҫһың, алйот булмаһаң.

Уйыңа ла алма, башҡорт булһаң,
Әхмәтзәки һеҙҙе һатыр, тип!
Ҡөрьән үбеп, Зәки ғәһед иткән,
Уйлай күрмә, антын тапар, тип.

Башҡорттағы намыҫ, иман менән
Ярһып тибә Зәки йөрәге,
Ҡолаҡ асма дошман ҡотҡоһона!
Зәки — Башҡортостан терәге.

Башын һалып, Зәки эшкә кергән
Етем Башҡортостан бәхетенә,
Валлаһи, ул һатмаҫ Тыуған илен
Донъя аҡсаһына, тәхетенә.

Ышан, ышанғандай бер Аллаңа,
Зәки — һинең тоғро уғылың,
Утҡа бешер Зәки, һыуға төшөр,
Әммә һатмаҫ намыҫ-күңелен...

Большевиктар менән ул килешһә,
Илде ҡотҡарам тип килеште.
Уйлай күрмә, ниңә, улай булғас,
Дутов яҡлы булып һуғышты?

Дутов яҡлы булдыҡ шуның өсөн:
Дутов беҙгә ҡорал биргәнгә.
Кәрәк хәҙер аҙыҡ, кейем, аҡса
Тағы биреп торам, тигәнгә.

Дутов яҡлы булдыҡ шуның өсөн:
Большевиктар тапап килгәнгә.
Красная гвардия, сиктән сығып,
Аҫҡан, киҫкән, ватҡан, ҡырғанға.

Беҙ ҡушылдыҡ ҡыҙыл тарафына,
Ҡыҙыл беҙҙең яҡлы булғанға;
Азат Башҡортостан йөмһүрлеген
Таныймын, тип хуплап торғанға.

Беҙ ҡушылдыҡ хәҙер ҡыҙылдарға,
Беҙҙең өсөн лайыҡ шул булғас;
Ниңә ҡушылмаҫҡа ҡыҙылдарға,
Күптән көтөп торған юл булғас?

Ниңә беҙ ҡасмайыҡ шул Дутовтан,
Дутов юртып киткәс уң яҡтан?
Ниңә ярашмаҫҡа большевик
менән
Беҙҙең һуҡмаҡ киткәс һул яҡтан?

---

* *Хитап* — һүҙ, мөрәжәғәт. Шиғриәттә айырым жанр атамаһын аңлата.

Большевиктар әйтә: «Был донъяла
Ярлы халыҡ хөкөмө
йөрөһөн, — тип, —
Ярлы, эшселәрҙең хас дошманы —
Буржуйҙарҙың тамыры
ҡороһон», — тип.

Дутов, Колчак әйтә: «Эш башына
Алтын тажлы батша
менһен, — тип, —
Батша менеп, һаман Николайҙай,
Ярлыларҙың ҡанын
имһен», — тип.

Большевиктар әйтә: «Ҡоллоҡ
бөтһөн,
Ярлы халыҡ рәхәт йәшәһен,
Ирек көнө тыуып был донъяға,
Тигеҙ яҡты көндәр йәшәһен!»

Дутов, Колчак әйтә: «Закондарҙы
Бай-бетсәләр яҙып торһон, — тип, —
Ярлы, эшсе халыҡ әүәлгесә
Бай-бетсәгә хеҙмәт
ҡылһын», — тип.

Большевиктар әйтә: «Нәҫел-нәсәп,
Түрәлектең бото бер тин, — тип, —
«Ҡалын елкә» менән «ярылған
ҡул»
Көнкүрештә булһын бер
тиң», — тип.

Большевиктар әйтә: «Һәр бер илгә
Камил мөхтәриәт[1] бирелһен,
Һәр бер ярлы, мазлум, иҙелгән ил
Мөхтәриәт алһын, терелһен!»

Дутов, Колчак әйтә: «Ваҡ
милләттәр
Мөхтәриәт ала күрмәһен!
Батша ҡул аҫтында ғүмер һөрөп,
Буржуаздар йырын йырлаһын...»

Уйлап ҡара, башҡорт, аҡылың
менән:
Ҡайһы тараф һиңә хәйерле?
Анау төрлө яман Дутовтармы?
Әллә большевикмы хәйерле?

Бер ҙә шикһеҙ һиңә аҡылың әйтер:
Большевиктар юлы хәйер, тип;
Йәнең теләр шунда, эй, Хоҙайым,
Дутовтарҙан мәңге айыр, тип.

Ирек ҡоло башҡорт, шулай булғас,
Дутов, Колчак яҡлы булырмы?
Аяҡ-ҡулын бәйләп, үҙен үҙе
Ҡара көскә тотоп бирерме?

Шул сәбәптән хәҙер Дутов, Колчак,
Белмәйем инде, ни хәл итерҙәр.
Ни хәл итһен инде, мәғлүм хәлдәр:
Тиҙҙән йәһәннәмгә китерҙәр!..

Уҙаманым, ҡустым, аҡһаҡалым,
Олатайым, апам, инәйем!
Инанмағыҙ дошман һүҙенә, тип,
Ҡайта-ҡайта йырлап һөйләйем.

Дутов залимдарҙың ялсылары
Һеҙҙең арағыҙҙа йөрөрҙәр,
Һеҙҙе алдап, ауға төшөрөргә
Төрлө ҡиәфәткә керерҙәр.

[1] *Камил мөхтәриәт* — тулы автономия.

Улар, ҡара шайтан булһалар ҙа,
Йөрөр тыштан яҡшы күренеп;
Һеҙҙе аяғандай һүҙҙәр һөйләп,
Фәрештәләр һымаҡ ҡыланып.

Фетнә һалып йөрөгән шайтандарҙы
Хөкүмәткә тотоп килтерең,
Ҡулға төшкән Дутов ялсыларын
«Эһ» тиҙермәй эшен бөтөрөң!

*1919*

**?** **1.** Ш. Бабичтың «Халҡым өсөн», «Кем өсөн?» шиғырҙарын уҡығыҙ, был шиғырҙарҙы яттан тасуири итеп һөйләгеҙ. **2.** Шағирҙың тормош һәм ижад кредоһы ҡайһы әҫәрҙәрендә айырыуса сағыу сағылыш таба? **3.** Шағирҙың алда бирелгән шиғырҙарының һәр береһен тейешле интонация менән тасуири уҡығыҙ. Уҡылған һәр шиғырға бәйле үҙ фекерегеҙҙе әйтегеҙ. **4.** Ш. Бабич шиғриәтенең көсө нимәлә тип иҫәпләйһегеҙ? Был хаҡта фекер алышығыҙ. **5.** Шағирҙың борсолоулы, ҡаршылыҡлы уйҙары ниндәй сәйәси һәм социаль мөхит менән бәйле булыуын асыҡлағыҙ. **6.** Ш. Бабичтың Башҡортостанға, башҡорт халҡы тормошона бәйләнешле шиғырҙарында борсоулы һәм киләсәккә өмөт менән тулы уйҙар нисегерәк сағылыуын аңлатығыҙ. **7.** Шағирҙың «Башҡортостан» тигән мәҙхиәһенең идея йөкмәткеһенә, художестволы үҙенсәлектәренә күҙәтеү үткәрегеҙ. **8.** «Салауат батыр» шиғырын үҙ аллы уҡығыҙ, фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ. **9.** Ш. Бабичтың башҡа әҫәрҙәре менән танышып сығығыҙ, поэтик оҫталығының ҡайһы моменттары һеҙҙең иғтибарҙы тартыуын әйтегеҙ. **10.** Ш. Бабич шиғриәтенең образдар системаһына, тел-стиль үҙенсәлектәренә күҙәтеү яһағыҙ.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


**ХАЛЫҠ ИЖАДЫ**

Урал батыр . . . . . . . . . . . . . . . 3
Иҙеүкәй менән Мораҙым . . . . . . . 30

**АУЫҘ-ТЕЛ ӘҘӘБИӘТЕ**

ЙЫРАУҘАР ИЖАДЫ

**Һабрау**

Һабрауҙың Уралға төбәп әйткәне . . 37
Һабрауҙың ир-егеттәргә әйткәне . . 38

**Асан Ҡайғы** . . . . . . . . . . . . . . 39

**Ҡаҙтуған** . . . . . . . . . . . . . . . 39

**Шалғыйыз** . . . . . . . . . . . . . . . 40

СӘСӘНДӘР ИЖАДЫ

**Ҡобағош**

Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне . . . . . . . . . . 41

**Ҡарас**

Ҡарас менән Аҡша . . . . . . . . . . 42

**Байыҡ**

Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохар менән әйтешкәне . . . . . . . 46
Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәне . . . . . . . . . . . . . . . . 47
Байыҡ сәсәндең ҡайтанан килеп сыҡҡаны, халыҡҡа туғанлыҡты аңлатҡаны . . . . . . . . . . . . . . . 49

**Салауат Юлаев**

Яу . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 54
Уҡ . . . . . . . . . . . . . . . . . . . 54
Егеткә . . . . . . . . . . . . . . . . . 55
Һандуғас . . . . . . . . . . . . . . . 55
Тирмәмдә . . . . . . . . . . . . . . . 55
Зөләйха . . . . . . . . . . . . . . . . 55
Бүгәсәүгә ҡушылып, ир-батырға ҡуш булып… . . . . . . . . . . . . . 56

**БОРОНҒО ҺӘМ УРТА БЫУАТТАРҘАҒЫ ҠУЛЪЯҘМА ӘҘӘБИӘТ**

**Ҡол Ғәли**

Йософ вә Зөләйха . . . . . . . . . . . 59
Юрматы ырыуы шәжәрәһе . . . . . 63
Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе . . . . . . 64
Батыршаның батшаға яҙған хаты . 65

**XIX БЫУАТ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ**

Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу . . . . . . . . . . 67
Зөһрә менән Алдар . . . . . . . . 103

**Баһауи**

Буҙйегет . . . . . . . . . . . . . . 134

**Мифтахетдин Аҡмулла**

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк! . . . 140
Шиһабетдин Мәрйәни мәрсиәһе . 141
Урыным — зиндан… . . . . . . . . 143
Мәжлесенә ҡарай ғына… . . . . . 145
Инсафлыҡ . . . . . . . . . . . . . . 145
Борадәргә . . . . . . . . . . . . . . 146
Тиһеңме? . . . . . . . . . . . . . . 146
Булырмы? . . . . . . . . . . . . . . 147

**Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев**

Ҡайыш илә Йүкә . . . . . . . . . 148
Йомран иле . . . . . . . . . . . 149
Шикәйәт . . . . . . . . . . . . 149
Күңелем гөлдәй бөрө булмаҫ . . 150
Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы . . . . 150
Бөйөк шағир Александр Пушкин . . . . . . 152
Башҡорттар . . . . . . . . . . 153

**Ризаитдин Фәхретдинов**

Әсмә, йәки Ғәмәл вә яза . . . . . 157
Нәсихәттәр . . . . . . . . . . . 169

**Сафуан Яҡшығолов**

Яҙ килеүе . . . . . . . . . . . 174
Ҡитға . . . . . . . . . . . . . 175
Башҡорт ағаларыма хитап . . . 175
Дим буйы . . . . . . . . . . . 176

**Закир Һаҙи**

Яңы әсхәбе кәһәф . . . . . . . . 178
Йыһанша хәҙрәт . . . . . . . . 187

**Фәтхелҡадир Сөләймәнов**

Башҡорт моңо . . . . . . . . . 205
Тимербай ҡурайсы . . . . . . . 205

**Мәжит Ғафури**

Себер тимер юлы йәки милләттең хәле . . . . . . . . . . . . . . . . 210
1906 йылдан 1907 йылға васыят . . . . . . . . . . . . 212
1907 йылдың яуабы . . . . . . 214
Баҙарға сыҡтым . . . . . . . . 215
Юҡтырһың да, Алла! . . . . . . 218
Бөтһөн империализм һуғышы . . 218
Аждаһа . . . . . . . . . . . . . 219
Икмәк!.. . . . . . . . . . . . . 219
Ҡыҙыл байраҡ . . . . . . . . . 220
Ярлылар, йәки Өйҙәш ҡатын . . 221

**Шәйехзада Бабич**

Халҡым өсөн . . . . . . . . . . 248
Бер минут . . . . . . . . . . . 248
Бай һәм ярлы . . . . . . . . . 249
Көрәшеп үткәр ҡыҫҡа ғүмереңде . . . . . . . . . . . 249
Көтәм . . . . . . . . . . . . . 249
Кем өсөн? . . . . . . . . . . . 250
Ҡурайҡайға . . . . . . . . . . 250
Яҙғы йыр . . . . . . . . . . . 251
Тупраҡ . . . . . . . . . . . . 252
Беҙ . . . . . . . . . . . . . . 253
Башҡортостан . . . . . . . . . 253
Башҡорт халҡына көйлө хитап . 254

Учебное издание

**БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА**

**Хрестоматия**

**для 9 класса общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения**

*(на башкирском языке)*

Авторы-составители

**Кунафин** Гиниятулла Сафиуллович
**Хусаинов** Гайса Батыргареевич

Уҡыу баҫмаһы

**БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ**

**Хрестоматия**

**уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9-сы класы өсөн**

Автор-төҙөүселәр

**Ҡунафин** Ғиниәтулла Сафиулла улы
**Хөсәйенов** Ғайса Батырғәрәй улы

Редакция мөдире *Г. А. Раянова*
Мөхәррире *И. М. Йосопова*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхаҡова*
Корректорҙары *З. М. Камалова, Г. Р. Попова, А. Х. Хәкимова, Л. Ф. Саниева, Г. В. Ахмалтдинова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.08.2017. Форматы 70×90 1/16. Офсет ҡағыҙы.
Офсет ысулы менән баҫылды. BTSchoolBook гарнитураһы.
Шартлы баҫма таб. 19,01+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 19,89.
Иҫәп-нәшер таб. 11,87+0,53 форз. Тиражы 6800 дана. Заказ 1.0146.17.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

КИТАП